

6/Т. 724

КОНТРОЛЬНЫЙ ЛИСТОК
СРОКОВ ВОЗВРАТА

КНИГА ДОЛЖНА БЫТЬ
ВОЗВРАЩЕНА НЕ ПОЗЖЕ
УКАЗАННОГО ЗДЕСЬ СРОКА

Колич. учёт. экзем.

Бум. тип. 70×— 33000/л

ЯНЫБАЙ ХАММАТОВ

КАРА ЯҢ АҒИЗЕЛ ИҘЕЛГӘ КОЯ

Вы Гүлә-
ровтың хәтер һәм
кәзер кисәтеш-
ләрен
Чәч остасына
комплекслы китапханасы
20.10.95.

ӨФӨ
«КИТАП»
1995

Чаллинская
ЦБС
Гор.юнош.фил. №47

ББК 84 Баш
Х 23

Рецензенты филология фәндәре кандидаты *Рәшит Шәкүр*

Хамматов Яныбай

Х 23 Ҡара яу. — Тарихи роман-хроника. — Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1995. — 608 бит.

ISBN 5-295-01387-1

Был китап нке романдан тора. Беренсеһендә яҙыусы, тарихи һәм фольклор материалдарына нигеҙләнеп, башҡорттарҙың татар-монгол баҫҡынсыларына ҡаршы көрәшен тасуирлай. Икенсе әҫәрҙә иһә автор хәлкыбыҙҙың Рус дәүләтенә ҡушылыу һөҙөмтәһендә ҡупкан болаларҙы батша хөкүмәте тарафынан аяуһыҙ баҫтырылыуын һүрәтләй.

Х $\frac{4702110100 - 41}{М\ 121(03) - 95}$-36—95

ББК 84 Баш

ISBN 5-295-01387-1

© Хамматов Яныбай, 1995

ИНЕШ ҺҮҘ УРЫНЫНА

Башҡортостан ханлығындағы ҡалаларҙа йәшәүсе башҡорттарҙың уиынсы быуатта ук мосолман диненә күскәнлеге мәғлүм. Ғәрәп илдәре менән тығыҙ бәйләнештә **булыуҙары** арҡаһында, улар **ғилемгә,** мәҙәниәткә, **әҙәбиәткә,** сәнғәткә, төрлө һөнәрселеккә эйә булғандар. Таркау-таркау йәшәгән башҡорт ырыу-кәбиләләрен Башҡортостан **ханлығы** тирәһеидә берләштереү ҙә шул осорҙа башлана. Әммә беренсе башҡорт ханы Сурман батырҙың **изге** маҡсаты аҙағынса тормошҡа ашырылмай ҡала. Бөйөк башҡорт илен, уның ҡалаларын, **ғилем** бпреүсе мәсет-мәҙрәсәләрен, яҙма ҡомартҡыларҙың көлөн күккә осороп, кешеләрен ҡырып уҙған татар-монголдарҙың ҡара яуы оло һәләкәт килтерә. Уларҙың Бөйөк Башҡортостан илен меҫкен, ҡыраҡай **хәлгә** еткереүе бына әле, тарихи әҫәремде тамамлағас та, **күҙ** алдымдан һис **китмәй,** тәнемде ҡалтырандыра, йөрәгемде әрнетә.

Туҡтамыш хандың өс йөҙ меңлек ғәскәрен эҙәрләп барышлай, Башҡортостанды ике тапҡыр нңләп үткән Аҡһаҡ Тимерҙең вәхшилегелә Санғыҙ хан яуызлыктарынан кәм булмаған. Башҡортостандың шундай мәңге маңдымаҫтай оло һәләкәткә еткерелеүенә Аллаһы тәғәләнең ҡаты ҡәһәре төшөүеме, әллә беҙ белмәгән бүтән төрлө сәбәп бармы? Тыуған иле азатлығы, ер-һыуы именлеге өсөн килмешәктәргә ҡаршы йәнен-тәнен аямай көрәшеүсе Сурман ханды, уның берҙән-бер улы Дәржимәнде, Акман менән Токман ейәндәрен, Иҙеүкәй менән Мораҙым кеүек батырҙарҙы ошотаса белмәүебеҙ өсөн кемде ғәйепләргә?

Эс бошорғос уй-тойғоларыма күмелеп аңкы-тинкә йөрөүҙән ялҡҡас, борон заманда һаҡланған өҙөк-йыртық йылъяҙмаларҙы ныкышмалы өйрәнергә, боронғо тарихи китаптарҙы кыйынлык менән **булһа** ла укырға һәм күп быуаттар элгәре йәшәгән башҡорттарҙың тормошон, көнкүрешен сағылдырырҙай «Кара яу» исемле яны китап яҙырға баҙнатсылығым етте һәм уны Казан ханлығының ҡыйратылыу осоро менән тамамланым.

Әлбиттә, ике быуат ярым самаһы дауамдағы хәл-ваҡиғаларҙы бер китапҡа һыйҙырыу һәм сюжетты бер йүнәлештә һаҡларға тырышыу еңел булманы.

Йң мөһиме, миненсә, шул: борон, бик борон заманларҙа ла азат-

лыҡ яулау, тыуған илен һаҡлау өсөн ҡорбан булған боронғо атай-олатайҙар тормошон бар хәлемсә һурәтләй алыуыма, уны хәҙерге быуын кешеләренә еткерергә тырышыуыма ҡыуаныс кисерһәм, айырым милләттәштәремдең үҙ тарихына, алыҫ уткәндәргә битарафлығы өсөн эсем боша. Алыҫ үткәндәрҙе өйрәнмәй-белмәй ғәзиз халҡыңдың ысын патриоты булыу мөмкин тугел икәнлеген һәр башҡорт аңлаһын, ҡанына һеңдерһен ине.

Ҡәҙерле укыусым!

Илебеҙ кисергән ҡатмарлы, үтә ауыр шарттарҙа нисек кенә ҡыйын, ялыҡтырғыс булмаһын, ошо китапты укып сығырға ваҡыт тапһаң ине. Әҫәр, яманмы-яҡшымы, ихлас күңелдән яҙылды. Романдыҡ етешһеҙ яҡтарын табып, миңә тәнҡит һүҙҙәр әйтһәгеҙ ҙә, үпкәләмәм. Уны маҡталыр йәки дан яулар өсөн ижад итмәнем, үткәндәрҙе һеҙ ҙә белһен әле тип тырыштым. Әгәр ҙә китаптың ниндәй ҙә булһа йоғонтоһо тейһә, төндәр буйы арымай-талмай ыҙаланыуым бушҡа китмәүенә ннаныр һәм уҙемде нң бәхетле кешеләрҙец бересе тип һанар инем.

Уңыш теләйем!

1992 йыл

ЯНЫБАЙ ХАММАТОВ

ҠАРА ЯУ

БЕРЕНСЕ БҮЛЕК

I

619 һиҗрә йылының, ҡышы [1].

Көрт һай булғанлыҡтан, һыбайлылар бер тиҙлектә юртты. Сауҡалар араһынан уҙып һөҙәк тауға артылғанда ғына, уларҙың аттары аҙымға күсте. Бәҫләнгән ағас ботаҡтары, бөртөктәр һымаҡ сыбарланып, бер төҫтән икенсе төҫкә әүерелгәндәй тойола. һалҡын томанға солғанған иртәнге ҡояш нурҙары ерҙе йылытманы, күҙҙе лә сағылдырманы. Әммә уның яҡтыһы, ағастарҙы һарғылт-күкһел буяуға мансылдырып, **ҡар** өҫтөнә беленер-беленмәҫ шәүләләрҙе теҙҙе. Асыҡ һарғылт-шәмәхә, ҡыҙғылт-шәмәхә, ҡыҙғылт-зәңгәр төҫтәге иҫәпһеҙ-һанһыҙ ваҡ-ваҡ осҡондарҙы баҫлатты.

Эре-эре ҡарағайҙар ҡатыш үҫкән суғырмаҡ олонло аҡ ҡайындар араһына еткәс, һоҡландырғыс тәбиғәт күренеше ҡапыл тоноҡланды һәм ҡаршынан һалҡын ағым урғылғандай булды.

Эйәрендә еңелсә айҡала-сайҡала иң алда барған бәһлеүән кәүҙәле егет арттағы юлдаштарына яурын аша ҡараны ла, тауыш-тын сығармайынса, ҡола атының ҡорһағын итек үксәһе менән тызый-тызый, сана юлынан саҡ беленер-беленмәҫ ятҡан һуҡмаҡҡа боролдо.

Арттағы һыбайлылар, бер-береһенә **хәйләле** күҙ ҡыҫышып, үҙ-ара бышылдаштылар:

— һиҙәһеңме?

[1] Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең Мәккәнән Мәҙинәгә күскән (тәрәпсә «һиҗрә») көнөнән башлана мосолмандар йылы. 619 һиҗрә йылы 1214 йылға тура килә.

— Нимә бар?

— Мырҙым бейгә [1] һуғылып китергә теләй бит Дәржимән!

•— Бик тә мәслихәт!

— Гәйнә ырыуы башлығының ҡыҙы тарта торғандыр уның күңелен.

— Һылыу ҡыҙмы?

— Ғәжәп һылыу! Күрһәң, моғайын, һин дә ғашиҡ булыр инең уға!

— Мырҙым бейҙең бүтән ҡыҙҙары юҡмы?

•— Бар. Әммә, ҡалғандары бының шикелле хайран ҡалырлыҡ түгел!..

Ир-егеттәр һөйләшкәнде ишетмәмешкә һалышып, Дәржимән шып-шым ғына барҙы. Урман аръяғындағы тибенлектә төркөм-төркөм йөрөгән көтөүҙәре төҫмөрләнгәс кенә, ырыу башлығы ҡыҙы Аҡсабикә менән осрашасағын иҫенә төшөрөп, ул ҡапыл тулҡынланды. Мырҙым бейҙең тәкәббер, бойондороҡһоҙ холоҡло ҡыҙы менән был юлы уртаҡ тел таба алырмы икән? Күп аллаға инанған Аҡсабикәнең мосолман диненә күсергә теләмәүе —төп бәлә!..

Үҙәктәге күперҙән уҙғас, тау итәге буйында һыйынған ауыл күренде. Яртылаш көрткә сумған ағас өйҙәр, бер урамға тигеҙ теҙелмәйенсә, теләһә нисек урынлашҡан. Ҡайын-уҫаҡ һайғауҙар менән уратып алынған һәр өй эргәһендәге ҡәртә-ҡуралар эсе һыйыр малы, кәзә-һарыҡ, тибенлеккә ҡыуылмаған менге һәм йөк аттары менән шығырым тулы.

Гәйнә ырыуындағы башҡорттар ҙа, бөтөн Башҡортостан илендәге һымаҡ, малсылыҡ һәм иген сәсеү менән шөғөлләнә. Улар, ярлылыктың ни икәнлеген белмәйенсә, ҡайғы-хәсрәтһеҙ, үҙ-ара татыу йәшәйҙәр. Яҡын-тирәләге ырыу башлыҡтарынан һәр яҡлап байыраҡ һаналған Мырҙым бей малдары көтөүенең иҫәбе-һаны юҡ. Ҡыш буйы тнбенлектә йөрөп ҡар аҫтынан үҙенә аҙыҡ табырҙай, урындағы шарттарға борон заманда күнеккән Бәхмәт токомло бешек йылҡыларҙы ғына үрсетә ул. Көтөүлектәр, барлыҡ ер-һыу, урман байлығы бөтөн башҡорттарҙыҡы һанала. Шуға күрә һәр ырыу кешеләре яҙын, йәйен, көҙөн үҙҙәре теләгән ерҙәргә мал-тыуарҙары менән күсенеп йөрөйҙәр. Улар бер нәмәгә лә мохтажлыҡ кисермәй. Һәр ғаилә өсөн төп ашамлыҡ — йылҡы ите. Йылҡы ите ялҡытһа, йылға һәм күлдәрҙә — балыҡ, урмандарҙа — ҡошҡорт, ҡырағай хайуандар һәм солоҡтарҙағы тәмле-татлы бал мәңге бөтәһе түгел. Кейергә кейем-һалым, кәрәкһә,

[1] *Бей* — кенәз дәрәжәһендәге кеше.

күрше Болғар иленең баш ҡалаһы Сәйен Йорт [1] баҙары бар. Төрлө **ғәрәп һәм Урта** Азия илдәренән килгән ундағы сауҙагәрҙәргә урман йәнлектәре тиреһен биреп, йәнең теләгән кейем-һалымға алмаштырырға йәки һатып алырға **мөмкин. Әммә Башҡортостан** илендәге ҡала баҙарҙарына таныш булмаған кешеләр яҡын да ебәрелмәй. Хатта бер ырыуҙан икенсе ырыуға килә-китә йөрөүселәр ҙә әлдән-әле тикшерелә тора. Ана, бер төркөм һыбайлы ир-егет ҡаршыға килә. Улар, Дәржимән менән уның иптәштәрен туҡтатып, уларҙың кемгә, ниндәй йомош менән йөрөүҙәрен һораштылар ҙа ауыл уртаһындағы Мырҙым бейҙең күркәм өйөнә саҡлы оҙатып барҙылар. Ҡапҡа тәңгәлендә торған Мырҙым бейҙең хеҙмәтсеһе һыбайлы ҡунаҡтарҙы танып сәләм биргәс кенә, тамам тынысланған ир-егеттәр кирегә табан ыңғайланы.

Тыштағы тауышты ишетеп, ҡәртә эсенә сыҡҡан Мырҙым бей, ҡунаҡтарҙы күргәс, шатланды.

— һа-а-ай, Сурман хандың улы Дәржимән беҙгә ҡупаҡҡа килгән түтелме?!

— Эйе, был — мин, хөрмәтле бей ағай! — тип Дәржимән Гәйнә ырыуы башҡорттарының башлығы менән ҡуш ҡуллап мосолмандарса күреште лә үҙенең иптәштәренә **эйәк** ҡаҡты. — Әйәрҙәрегеҙҙән төшөгөҙ, аттарҙы бер аҙ ял иттерәйек!

— Әйҙә, рәхим итегеҙ, ҡәҙерле мосолмандар, — тип Мырҙым бей ҡунаҡтарын өйгә алып инде.

Бирге стенаһының буйынан-буйына һуҙылған урындыҡ өҫтө тулы мул һыйҙы күргәс, Дәржимән ғәжәпкә ҡалды.

«Бындай ашамлыҡ-эсемлек беҙҙең өсөн аҙерләнде микән ни? Беҙҙең Мырҙым бейгә һуғылып китеребеҙҙе бер кем дә белмәй ине лә баһа!» —тип ул уйларға өлгөрмәне, өй хужаһының ҡушыуы буйынса, ырымсылар эшкә тотондо. Улар, күп аллаға ышаныусы мәжүсиҙәрҙең йырын һамаҡлап бейей-бейей, ағас табаҡтар тулы йылҡы итен, ҡазылыҡтарҙы, иреткән май киҫәктәрен, ҡаҡланған ҡороттарҙы, көлсә-таба икмәге һыныҡтарын, төрлө тәм-томдо капҡа тышындағы тап-таҡыр урынға өйөп һалып, өҫтө туҡмайланған ағас алдырҙар тулы бишбармаҡтарҙы ауҙарҙылар ҙа, яндауҙарҙағы ҡымыҙ менән буҙаны сайпылдырып һирпә-һирпә:

Әреуахтар, килегеҙ,
Һеҙҙең өсөн һыйыбыҙ, —

[1] *Сәйен йорт* — Болғар иленең Бөйөк баш ҡалаһы, хәҙерге Ҡазандан бер яҡ ситтәрәк торған.

тип таҡмаҡ әйтеп, ризыҡтар өйөүле ер тәңгәлендә һикерәнләй-һикерәнләй бейергә тотондолар.

Ырымсылар тауышын ишетеп тиҙ арала йыйылырға өлгөргән ала ҡарғалар менән һайыҫҡандар һәм ауыл эттәре теге донъялағы кешеләрҙе өс көн буйы һыйлауҙан ҡалған ризыҡтарға ташландылар...

Мосолман ғаиләһендә тыуып, Төркөстанда дини белем алған Дәржимән өсөн күп аллаға табыныусы мәжүсиҙәрҙең йолаһы оҡшаманы, ҡырағайлыҡ һымаҡ тойолдо. Сөнки мәжүсилек ҡоллоғо Башҡортостан ханлығы кешеләренең юғары мәҙәниәткә, белемгә эйә булыуына тотҡарлыҡ яһай. Туғыҙынсы-унынсы быуаттарҙа ук Иҙел-Сулман-һамар, Урал аръяғындағы Тубыл йылғаларына тиклемге ерҙәрҙе йәшәүсе Бөрйән, Түнгәуер, Ҡыпсаҡ, Юрматы, Гәйнә, Үҫәргән, Тамъян, Мең, Әй, Йәнәй, Көҙөй, Ҡаңлы, Пәжиж, Дыуан, Алдан, Танып ырыуҙары башҡорттарының күпселек өлөшө, барлыҡ ҡала кешеләре, мәжүсилектән ислам диненә күсеп, ғәрәпсә уҡый-яҙырға өйрәнде. Уларҙың берҙән-бер Бөйөк Аллаһы тәғәләгә, уның иң яратҡан пәйғәмбәре Мөхәммәт ғәлиәссәләмгә ихлас күңелдән ышаныуы һәм көрьән ҡушҡанса йәшәргә ғәҙәтләнеүе цивилизацияға өлгәшеүҙе аңлатмаймы ни?..

Тамаҡ туйҙырғанда, унан һуң да Сурман хандың улы Дәржимән ислам динеи данланы һәм барлыҡ ырыуҙарҙағы башҡорттарҙы ыосолманлаштырыу тураһында хыялланыуын әйтте.

— Ислам динен ҡабул итеп, тарҡау-тарҡау йәшәгән ырыуҙарҙағы һәммә башҡортто ғәрәпсә уҡырға-яҙырға өйрәткәндә генә Башҡортостан ханлығы тотошлай наҙанлыҡтан ҡотоласаҡ һәм сәскә атасаҡ, — тине ул ныҡлы ышаныс менән.

Уны ихлас тыңлаған Мырҙым бей, ҡунағы һөйләгәндәрҙең күбеһенә икеләнеүле ҡарашта булыуына ҡарамаҫтан, әлдән-әле баш ҡаҡты.

— Һүҙең раҫ, бик тә раҫ, Дәржимән батыр! Ислам дине башҡорттар араһында тарала башланыуын туғыҙынсы-унынсы быуаттарҙа йәшәгән Бағдад илсеһе Әхмәт ибн-Фаҙлан, Ибн Сәғид, Дамашни, Иҙриси кеүек атаҡлы кешеләр яҙып ҡалдырған китаптарҙы уҡығас ҡына белдем һәм күп нәмәгә күҙем асылды.

— Көрьәнде лә уҡыныңмы? — Дәржимәндең йөҙө яҡтырҙы.

— Тотошлай түгел... Көрьәндең айырым сүрәләрен генә ятҡа беләм.

— Йәштәрҙе уҡытыу өсөн ауылдарҙа мәсет менән мәҙрәсә һалдырырға самаламайһыңмы?

Мәжүсилектән ислам диненә күсә алмай икеләнеүле тойғолар кисергән ырыу башлығы уйға ҡалыбыраҡ ултырҙы.

— Самалап ҡарағайным бер килке... йыйында ҡатнашыусы күпселек башҡорттар ризалашманы. Борон-борон замандаи ҡалған йоланы ҡаҡшатырға хаҡыбыҙ юҡ, атай-олатайҙар тормошо менән йәшәргә теләйбеҙ, тиҙәр. Ғәрәп илдәренән килгән муллаларҙың өгөт-нәсихәтен дә тыңларға теләмәнеләр. Бер мәлде хатта шау-шыу ҡубарҙылар. Һеҙҙең хөсөтөгөҙ яман, кешеләрҙе аҙҙырғыс, тип ике хәлфәне туҡмап үлтерә яҙҙылар...

— Хәлфәләр үҙҙәре өсөн түгел, гәйнә башҡорттары өсөн хәсрәтләнеүен аңламайҙар микән ни?,

— Төрлөһө бар. Ҡалаларға яҡын ауылдарҙа йәшәүселәр менән Сәйен Йорт баҙарына йыш йөрөүселәр күптәпән ислам диненә күскән. Тик күптәре быны асыҡтан-асыҡ белгертергә теләмәй.

— Ниңә?

— Күп хоҙайға ышапыусыларҙың үсләшеүенән ҡурҡалар.

Дәржимән кәйефһеҙләнде.

— Болғар иле дәүләтенә иң беренсе булып нигеҙ һалыусы Бөрйән ырыуы башҡорттары икәнлеген белһәләр, моғайын, улай ҡыланмаҫ **ине.**

— Был турала мин дә тәүге тапҡыр ишетәм, — Мырҙым бей аптыраны.

— Белмәҫлек тә шул. Ул замандан бирле әллә нисәмә мең йылдар уҙған һәм күп нәмә үҙгәргән... Әлеге ваҡытта телебеҙ, ғөрөф-ғәҙәтебеҙ болғарҙарҙыҡына оҡшашлығын юғалтһа ла, тормошобоҙ, көнкүрешебеҙ, динебеҙ бер төрлө, бер-береһенә яҡын. Башҡортостан ханлығында ислам тәғлимәте өҫтөнлөк алһа ғына, уға ныҡлы таянып, әлегә тарҡау-тарҡау йәшәгән күпселек башҡорт ырыуҙарын берләштерергә һәм Урта Азиялағы шикелле ҡеүәтле дәүләтсебеҙҙе булдырырға мөмкинлек тыуасаҡ.

— Башҡортостаи ханлығында етмеш дүрт ҡала бар, — тип Дәржимәндең уң яғында ултырған ҡунаҡ та һүҙгә ҡушылды. — Ул ҡалаларҙа йәшәүсе башҡорттар ислам диненә табына. Төрлө ырыуҙарҙағы кешеләрҙе улар арҙамында мосолманлаштырыуҙы тиҙләтеп булмаймы?

— Көслөк менәнме?

— Яҡшылыҡты аңларға теләмәһәләр, көслөк менән!

Икенсе егет, ризалашмайынса, шик белдерҙе:

— Ай-һай, белмәйем шул... Йыйындарҙа һайланған ырыу башлыҡтары түгел, бәғзе бер ҡала бейе лә үҙ иркен сикләргә теләр микән? Сөнки улар бойондороҡһоҙ, йыйын

ҡарарҙарынан башҡа нәмәне һанға һукмаҫҡа ғәҙәтләнгәндәр.

— Әйткәнең раҫ, — тине Мырҙым бей, ризалашып. — Үҙ иркенә йәшәргә өйрәнгән ырыу башлыҡтарын башҡаса тормош ҡорорға **күндереүе** еңел булмаясаҡ. Өҙлөкһөҙ күсенеп йөрөүсе ырыу кешеләренең ҡалала тороусылар менән тығыҙ бәйләнештә булмауы ла ислам дине ныҡлап таралмауының төп сәбәбе **нкәнлеген** оноторға ярамай. Улар бер-береһе менән йыш аралашыу урынына, ҡала кешеләре бейек ҡәлғә эсенән сыҡмай йәшәйҙәр. Сит ил мәмләкәттәре яу менән **килмәгән** Башҡорт илендә ҡәлғәләр ҡороуҙың ни хәжәте бар икән? Мин күбеһен белмәгән-курмәгән Мазира, Башғорт, Иҙелбашы, Бөрйән, Ҡазира, Ҡараҡыя, Минжан, Ғаҡил, Дигәрләп исемле ҡалалар ҙа бейек-бейек ҡәлғә-ҡой.малар менән уратып алынған, **тиҙәр.** Кемдәрҙән һаҡланыу есөн төҙөлгән икән улар? Янынан-яңы ҡалаларҙы һалдыртырға ниңә ризалаша икән Сурман хан? Күп ҡалаларҙан ни файҙа?

— Ике миллион ярымдан артығыраҡ кешеһе булған Башҡортостан ханлығында ғына **етмеш** дүрт ҡала күпме ни? — тип һораны ла, бер кем дә өндәшмәгәс, Дәржимән үҙе белгәндәрҙе Мырҙым бейгә төшөндөрөргә ашыҡты: — Башҡорт ҡалалары сит ерҙән килеүселәр яуынан һаҡланыу өсөн генә төҙөлмәгән. Улар **мәҙәниәт,** белем таратыу үҙәге, төрлө мәмләкәттәр менән бәйләнеш тотоу, сауҙа ҡылыу, Урал **тауы** итәгенән табылған **тимер,** көмөш, баҡыр рудаларын **иретеү,** ажундағы [1] иң **ҡиммәтле хазиналарҙан** һаналған алтын һәм алмасты эшкәртеү шул ҡалаларҙа башҡарыла...

— Мәғдәнселек [2] менән шөғөлләнеү, әлбиттә, ҡалаларҙа йәшәүселәр һөнәре, — тине Мырҙым бей, теләр-теләмәҫтән ризалашып. — Әммә мал-тыуар аҫырауға әүәҫ ауыл кешеләренә тимер-томор менән аҙапланыу — гонаһ. Ғәзиз ер күкрәген аҡтарып, тау эйәһен ниңә рәнйетергә?..

Ҡорьән сүрәләрен өйрәнеп тә, күп хоҙайға табыныу ғәҙәтенән төңөлә алмаған ырыу башлығы икеләнеүле тойғолар кисерҙе.

— Ҡуркма. ағай, һәммәһе Бөйөк Аллаһы тәғәләнең кеҙрәттәре буйынса зшләнә, — тип Дәржимән ислам динен ҡабул итергә өгөтләй генә башлағайны, Мырҙым бей ағарынды.

— Юҡ, хәҙрәт, зинһар, көсләмә!.. Мосолман булырға

[1] *Ажун* — донъя.

[2] *Мәғдәнселек* — руда һәм аҫыл таштар ҡаҙыу.

миңә ярамай, әлегә иртә, бик тә иртә, әҙер түгелмен. Йыйын ризалығынан тыш **ислам** диненә күсһәм, мине ят күрәсәктәр, ырыу башлығы итеп бүтән кешене һайлаясаҡтар!

— Ниңә ҡуркаһың?

— Минең хоҡуғым йыйын ҡарары менән сикләнгән...

Мырҙым бей хаҡлы ине. һәр нәмә буйынса йыйын хәл ҡыла. Ырыу башлыҡтарын төшөрөү, улар урынына икенселәрҙе һайлап ҡуйыу, ҡасан йәйләүгә күсеү, һунарҙа атып алынған табышты кемгә бүлеп биреү, яу ваҡытында һуғышып алынған табыштарҙы бүлешеү, нисә баш малды йәки йылҡы көтөүен, сит ил мәмләкәттәренә алып барып, кейем-һалымға, кәрәк-яраҡҡа алмаштырыу мәсьәләһен, ғөмүмән, бер ауыл менән икенсе ауыл кешеләре араһындағы бәхәстәрҙең дөйөм йыйындарҙа сиселеүен белһә лә, Дәржимән ислам динен данлауҙан туҡталманы.

Уны ишек артында тороп тыңлаған ырыу башлығының сло ҡыҙы Аҡсабикә, сыҙамһыҙланып, ирҙәр бүлмәһенә инде.

•— Дәржимән, беҙҙе мосолманлаштырыу ниәте менән **килдеңме?**

Дәржимән, бүлмә уртаһына сығып баҫҡан ҡыҙҙы күргәс, йәшкелт күҙҙәрен түнәрәкләндереп, шып-шым булды. Сауҡалай ыҡсым кәүҙәле һылыу Аҡсабикәнең буй-һынына, **икенән үреүле** ҡалын сәс толомдарына, еңелсә ҡыҙарынған аҡһыл мөләйем йөҙөнә ҡарап туя алмайынса, егет көләмһөрәне.

— Һеҙҙе ислам диненә күсереү маҡсаты менән килмәнек бында, ҡәрендәш. Ғәрәп илдәрендә сәфәрҙә булып ҡайтышлай, юл ыңғайында туҡталып, Гәйнә ырыуы кешеләренең хәлен белергә, аттарыбыҙға бер аҙ ял бирергә булдыҡ.

— Ғәрәбстанға ни йомош менән барғайнығыҙ? — Күп хоҙайға ышанған мәжүси Аҡсабикә ир-егеттәрҙең күҙ ҡарашынан оялманы, үҙен иркен тотто.

— Ғәрәп нлдәрендәге мосолмандар менән мәҙәни бәйләнеш булдырҙыҡ, ҡәрендәш. Бөрйәндә һәм Минжанда асылған мәҙрәсәләрҙә бала-сағаны укытыу өсөн меғәллимдәр саҡырҙыҡ, ҡалаларҙа белем алған муллаларҙы хәлфәләр иленә ебәреп, уларҙың ғилемен артабан арттырыу сараһын күрҙек.

— Бик тә мәслихәт, изге эш башҡарғанһығыҙ, — тип хупланы өй хужаһы. Шунан, бер аҙ шымыбыраҡ, эйәге тәңгәлендә генә үҫтергән ерән һаҡалын һыпырғылай-һыпырғылай, Дәржимәндең юлдаштарына һораулы ҡараш ташланы:

— Ҡәһирәнән Ҡараҡыя ҡалаһына [1] ебәрелгән муллалармы әллә һеҙ?

Дәржимән иптәштәре өсөн яуап ҡайтарҙы:

— Юҡ, улар **мине** оҙатып йөрөүсе егеттәр. Башҡорт иле ҡалаларына тәғәйенләнеүсе мөғәллимдәр менән мулла-хәлфәләр яҙғы ер-һыу ҡороғас киләсәк, алла бойорһа. Уларҙы шөкөрана ҡылып ҡабул итәсәкбеҙ. Барлыҡ башҡорттарҙың белем алыуына өлгәшһәк, үҙебеҙҙең илдә лә уҡымышлылар йылдам күбәйәсәк һәм мәҙәниәтебеҙ үҫешенә ныҡлы йоғонто яһаласаҡ...

Әңгәмә тағы ла ислам диненә ыңғайлауына эсе бошҡан Аҡсабикә төпкө бүлмәләге ҡатын-ҡыҙ эргәһенә сыҡҡас, Мырҙым бей сит мәмләкәттәренең һәм туғандаш Болғар иле кешеләренең тормошо тураһында ентекләп һораша башланы.

Башҡорттарҙан ун-ун ике тапҡырға һан яғынан кәм булған Болғар илендә бик йыш булғанлыҡтан, Дәржимән Сәйен Йорттағы барлыҡ яңылыҡтарҙы мауығып һөйләне.' Иҙел менән Кама буйында йәшәүсе болғарҙар башҡорт телен дә якшы белә икән. Шул арҡала барлыҡ мосолман илдәре менән тығыҙ бәйләнештә булыуы, аралашыу, төрөксә һөйләшергә өйрәнеү, уларҙың мәҙәниәтен һәм яҙма әҙәбиәтен үҙләштерергә мөмкинлек тыуыуын Дәржимән әйткәс, Мырҙым бей йөрәкһенде.

— Төрөктәрҙән артта ҡалғанмы ни башҡорттар?

— Арттараҡ ҡалған шул.

— Уларҙы ҡыуып етеү өсөн беҙгә ни эшләү фарыз?

— Иң әүәл барлыҡ башҡорт ырыуҙары менән ҡалала йәшәүсе барлыҡ кешеләрҙе берләштерергә һәм уларҙы үҙ дәүләтебеҙгә буйһондорорға тейешбеҙ. Бының өсөн...

Мырҙым бей, баш сайҡап, Дәржимәнде бүлдерҙе:

— Уныһы тормошҡа ашмаҫтай хикмәт, хәҙрәт. Иҙел менән һаҡмарҙан Тубыл йылғаһына һәм Каспий дингеҙенә саҡлы ерҙәрҙә йәшәүсе күмәк башҡорттарҙы бер ханлыҡҡа нисек итеп берләштермәк кәрәк?!.

— Ислам дине, тик ислам дине ярҙамында ғына тарҡау йәшәгән ырыу-ҡәбиләләребеҙҙе берләштереү һәм ҡеүәтле Башҡортостан ханлығы дәүләтен төҙөү маҡсатына өлгәшергә мөмкин.

— Дәүләтебеҙ былай ҙа ҡеүәтле бит. Ҡеүәтле булмаһа, төрлө яҡтан өҙлөкһеҙ килә-китә торған мәмләкәттәрҙең яуын кире ҡаға алыр инекме? — тип һораны Мырҙым бей.

[1] *Караҡыя* — шул замандағы Башҡортостандың баш ҡалаһы, хәҙерге Өфө районы ерендә төҙөлгән булған.

— Иншалла, әлегәсә ғәзиз еребеҙҙе дошмандан тапатманыҡ, яу менән килеүсе килмешәктәрҙе тырым-тырағай үҙебеҙ ҡыйраттыҡ, — тип шөкөрана ҡылып ҡөрьән сүрәләрен укый-укый, ҡуш усы менән йәйенке киң, яңаҡ һөйәктәре белеигән ҡаҡса йөҙөн һыпырҙы ла Дәржимән йәнә шөкөр ҡылды: — Беҙҙе бәлә-ҡазанан күп мәртәбә ярлыҡаны Бөйөк Аллаһы тәғәлә. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәлиәссәләмдең васыяты буйынса, һәр мосолманға маҡсатына ирешеү өсөн сәбәп ҡылмаҡ кәрәк. Сәбәп ҡылғанға һәммәһен бирермен, тигән Бөйөк Аллаһы тәғәлә.

Башҡорт ханы улының өгөт-нәсихәте бушҡа булманы, Мырҙым бейҙе уйланырға мәжбүр итте. Мәжүсилеккә ҡарағанда ислам дине өҫтөн икәнлегенә тамам ышанғас, ырыуҙаштарын мосолманлаштырыуҙы изге бурысы һананы ул. Әммә уны нисек итеп тормошҡа ашырырға? Бер кемгә буйһонмай, үҙ иркенә йәшәргә күнеккән башҡорттарҙың ырыу-ҡәбиләләрен тиҙ арала мосолманлаштырыу һәм ҡөрьән ҡушыуы буйынса яңы тормош ҡорорға күнектереүе еңел булырмы? Бының өсөн ентекле әҙерлек башларға, йәштәрҙе муллалыҡҡа укытырға ебәрергә, һәр ауылдың ҡышлауында һәм йәйләүҙәрендә мәсет-мәҙрәсә һалдырырға...

Рум [1], Ғәрәбстан, Ҡытай, Һиндостан кеүек алыҫтағы мәмләкәттәр менән сауҙа ҡылыусы башҡорттар килтергән китаптарҙы күпләп уҡыған Мырҙым бейгә ырыуҙаштарының тарихы үҫмер сағынан уҡ таныш ине. Башҡорттарҙың Мазнут, Мазнит, аҙактанырақ Басджирт, Башджирт, Башкирд һәм Паскатир тип исемләп йөрөтөлөүҙәре, уларҙың борон, бик борон замандан ошо ерҙе төйәк итеүе икенсе—өсөнсө—бишенсе быуаттарҙа уҡ фарсыларға һәм атаҡлы тарихсы Геродотҡа мәғлүм булған. Әтил буйлап йөрөгән Бағдад хәлифәте илсеһе Әхмәт ибн Фаҙлан 922 йылда уҡ ислам диненә күскән башгардтарҙың [2] мәжүсилектән ҡотола алмай, ун ике хоҙайға табыныуын яҙып ҡалдырған.

...Ул замандан бирле 292 йыл үҙҙы. Әммә ҡалаларҙан ситтә йәшәүсе башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең күпселек өлөшө ислам диненә һаман ылыҡтырылмаған. Ябай кешеләр түгел, хатта Мырҙым бей кеүек бәҙзе бер ырыу башлыҡтары ла мәжүсилек менән ислам диненә ҡарата икеләнеүле тойғо кисерә. Бындай хәлдең төп сәбәбе — малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе кешеләрҙең йыл әйләнәһе буйынса бер урындан икенсе урынға күсенеп йөрөүҙә. Ун

[1] *Рум* — **Византия.**

[2] *Башгард* — Башҡорт.

икенсе быуат урталарына тиклем башҡорттар араһында ислам динен таратыуҙа бик күп көс һалыусы Төркөстандағы дини тәғлимәт башлығы Әхмәт Яссауи менән уның мөридтәре үлгәндән һуң был изге эш туҡталып ҡалған. Башҡорт дәүләте вәкилдәре, ҡала һәм ауылдарҙа йәшәүсе кешеләрҙең башлыҡтары менән бергә уҙғарыласаҡ йыйындарҙа кәңәшләшеп, мосолман динен тергеҙеү мәсьәләһен тикшерергә тейешле...

II

Сурман хандың улы Дәржимән менән уның юлдаштарын хөрмәтләп оҙатҡандан һуң, Мырҙым бей үҙенә тынғы тапманы. Ул оло йортоноң бер бүлмәһенә инеп эстән бикләнде лә, ислам дине, Бөйөк Аллаһы тәғәлә менән уның яратҡан пәйғәмбәре Мөхәммәт ғәлиәссәләм тураһында туҡталмай уйланды һәм ғәрәпсә яҙылған ҡорьәндең айырым сүрәләрен ҡат-ҡат ятҡа уҡыны: «Әғүзү билләһи минәш-шәйтанир-ражим.

Бисмиллаһир-рахмәнир-рәхим.

Әлләһу лә иләһә һүәл-хәйнул-ҡаййум, лә тәьхузүһү үә мә фил-әрдь. Мән зәлләзи йәшфәғү ғиндәһү иллә би'изниһ. йәғләмү мә бәйнә әйдиһим үә мә халфәһүм. Үә лә йүхитүнә бишәй-им-мин ғилмиһи иллә бимә шәъ. Үәсигә нурсиййүһүс — сәмәүәти үәләрд. Үә лә йә' үдүнү хифзуһүмә. Үә һүәл — ғәлиййүл — ғәзыйм...» [1]

Ҡорьән сүрәләренең серенә әкренләп-әкренләп төшөнгән һайын, Мырҙым бейҙең зиһене яҡтырып, ниндәйҙер мөғжизәле йән тетрәткес күренештәр күҙ алдында һынланған һымаҡ булып тойолдо. Ошо хис, аҙна-ун көн самаһы уҙғас та, уға тынғы бирмәне. Уйланып йөрөй торғас, ислам дине йоғонтоһонда күңеле арбалды һәм шуға сәбәпсел булған Дәржимән менән туғанлашыу теләге тыуҙы.

[1] «Аллаһың рәхмәтенән һәрәлгән шайтандың яуызлығынан Уға һығынамын. Бөйөк рәхмәт үә шәфҡәт эйәһе Аллаһтың исем шәрифе менән башлайым. Аллаһ үҙенән башҡа һис бер Тәңре-Илаһ булмаған Аллаһы тәғәләләр. Ул мәңге тере булыусы, ғәләмдең һәр бер тәдбир (алдан күреү — Я. Х.) ҡылыусылыр. Ул Аллаһы тәғәлә йоҡоһорау һәм, ғөмүмән, йоҡо булмаҫ. Ерҙә һәм күктәрҙә булған нәмәләрҙең барыһы Уныҡыдыр. Кем уның ҡаршында шәфҡәт ҡылыусы? һис кем шәфҡәт ҡылмаҫ, мәгәр Уның рөхсәте менән генә. Ул Аллаһы тәғәлә ерҙә һәм күктәрҙә булған кешеләрҙең үҙҙәренән әүәл булған нәмәләрҙе лә, уларҙан һуң ҡиләсәк нәмәләрҙе лә беләләр. Аллаһ белгән нәмәләрҙе һис кем белә алмаҫ, мәгәр Аллаһы тәғәлә теләгән ҡәҙәр генә белерҙәр, Уның көрсийе күктәрҙе лә, ерҙе лә һыйҙырыр. Ер үә күкте сәләмәт тотоу Аллаһы тәғәләгә һис ауырлыҡ ҡылмайҙыр. Ул — олуғ үә бөйөктөр...»

Бер көндө кис, сыуалға ҡыҙыу итеп яғыулы ут яҡтыһы төшкән урындыҡта ғаиләһе менән тамаҡ туйҙырып ултырған ваҡытта, Мырҙым бей тиктомалға яманһыу көрһөндө.

— Ә-әһ... Ваҡыт тигән нәмә, ағын һыу шикелле, бер туҡтауһыҙ һиҙҙермәй генә үтә лә үтә. Ҡыҙҙарымдың ҡасан үҫеүен дә һиҙмәй ҡалғанмын... Бына хәҙер буй етеп, улар эргәһендә егеттәр ҙә бик йыш урала башланы. Әле бер, әле икенсе ырыу егеттәре, юҡ һылтауҙы бар итеп, өҙлөкһөҙ килә-китә йөрөйҙәр. Сурман хандың берҙән-бер улы Дәржимәндең беҙгә һуғылып китеүенә лә шул сәбәп, — тип еҙ самауырҙан кәсәләргә сәй яһаған ҡатынының уң яғында ултырған Аҡсабикәгә күҙ ҡарашын йүнәлтте. — Ҡыҙым, һиңә хәҙер ун алты йәш тула. Күңеленә оҡшаған берәй ир-егетте кейәүлеккә һайлар мәл етте бит!..

— Етһә — етмәһә лә, күргән-белгәндәр араһында күңелемде арбарҙай, йөрәгемде елкендерерҙәй егетте осратманым бит әле, атай, — тине Аҡсабикә.

— Ундай егетте ҡасан осрарын көтһәң, ҡарт ҡыҙ исемен алып, мәсхәрәгә ҡалыуың да ихтимал.

Ире әйткәнгә Аҡсабикәнең әсәһе лә ҡушылды:

— Берәй егетте ирлеккә һайлап алып, уның менән бергә йәшәй башлаһаң, моғайын, яратырһың, мөхәббәт уты ла йөрәгеңдә ялҡынланыр...

Ашъяулыҡтағы икмәккә текләгән Аҡсабикә өндәшмәгәс, Мырҙым бей уны ныҡышмалыраҡ өгөтләргә кереште:

— Малайым булмағас, ни хәл итәйем, ҡыҙым. һин кейәүгә сығып, ир бала тапһаң, барлыҡ мөлкәтем, малтыуарым өсөн борсолмаҫ инем. Үҙем яҡты донъянан киткәнгә саҡлы, уны ырыу башлығы итеп һайлатыу өмөтө менән йәшәр **инем,** исмаһам.

— Минән башҡа ҡыҙҙарың юҡмы ни, атай? — тип һораны Аҡсабикә.

— Бар, мәгәр улар һинән байтаҡҡа йәш шул, ҡыҙым.

— Һеңлеләрем йәш тип, күңелем тартмаған ир менән ғүмерем буйы йәшәргәме? Юҡ, улай теләмәйем, зинһар, ҡабаландырма, атай. Үҙемә тиң булырҙай егетте тапҡас та, оҙаҡҡа һуҙмам, кемде һайлауымды әйтермен, — ҡырт киҫеп, Аҡсабикә ишеккә табан ыңғайланы.

— Ҡыҙым, туҡтасы, — тип Мырҙым бей ҡул һелкте.— Сурман хандың улы тураһында... фекерең нисек?

— Дәржимән менән аралашмағас, уның ниндәйерәк әҙәм икәнлеген һынамайынса, мин нимә әйтәйем?

Ҡырыҫ холоҡло ҡыҙҙың һүҙенә иғтибар итмәйенсә, Мырҙым бей Дәржимәнде маҡтарға тотонды:

Гор.юнош.фил. №47

— Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, унан да шәберәк егет донъяла бар микән. Дәржимән — тыйнаҡ, әҙәпле, уҡымышлы, аҡыллы, зат-ырыуы ла һәйбәт. Былтырғы йәй уртаһында уҙғарылған ҡала һәм ырыу башлыҡтарының йыйынында атаһы Сурман батырҙың дүртенсе тапҡыр башҡорт иле ханы итеп һайланыуы ла күп нәмәне һөйләй. Унда миңә Сурман хан тураһында ғел маҡтау һүҙен генә ишетергә тура килде, Алма ағасынан алыҫ төшмәй, ти. Атаһына оҡшаһа, Дәржимән дә алама булмаҫҡа тейеш. Сурман хандың байлығы ла етерлек, дәрәжәһе лә...

Бер урында тыныс тора алмаған Аҡсабикә түҙемһеҙлек менән атаһын бүлдерҙе:

— Дәржимәнде кейәү итергә теләйһеңме?

— Мин түгел, ҡыҙым. — Мырҙым бей ҡыҙарынды. — Дәржимән теләй... Бисәлеккә һоратып, һиңә яусы ебәрмәксе ине...

Ғәжәпкә ҡалғам Аҡсабикә, күҙҙәрен түңәрәкләндереп, атаһына уҡталды.

— Яҙмышымды минән башҡа хәл ҡылмаҡ булдығыҙмы?

— Тәүҙә тыңла әле, ҡыҙым.

— Юҡ, — Аҡсабикә атаһын тыңларға теләмәне. — Борон заманда килгән йоланы боҙоп, малдай һатылырға ризалашмаясаҡмын!

— Һине бер кем дә һатып алырға йәки һатырға теләмәй, ҡыҙым.

— Мосолмандарса яусы ебәрергә **булғас,** һатыу түгелме? — Аҡсабикә ярһыны.— Ни өсөн ул мине, мин уны һайларға тейеш түгел? Күп хоҙайҙарымдан яҙҙыртып, бүтән мосолман ҡатындары шикелле бер аллаға табындырырға, иркемдән мәхрүм итергә, тулыһынса үҙенә буйһондорорға, ислам дине ҡанундары ҡушыуы буйынса йәшәтергә маташыусы кешегә бер ҡасан да кейәүгә сыҡмаясаҡмын. Мосолман егете үҙ мосолмандары араһынан эҙләһен бисә итерҙәй ҡыҙҙы, — тине лә, ишекте шартлата ябып, Аҡсабикә бүлмәнән сыҡты.

Уның аяҡ тауышы баҫылғас, Мырҙым бей баш сайҡаны.

— Бына, холоҡ!

— Күңеленә оҡшаған ишен тапһа, ипләнер әле, — тине Яҡшыбикә.

Мырҙым бей, кесе ҡыҙҙары алдында ҡатыны менән һүҙ көрәштерергә теләмәйенсә, баш сайҡаны.

— Эйе, кейәүгә сыҡһа, бәлки, тыйнаҡланыр, — тине лә шым булды. Сыуалдағы ут һүрелеп, ҡыҙҙары йоҡларға таралышҡас та урынынан ҡуҙғалмайынса уйланып ултыра

торғас, ул ирекһеҙҙән беренсе булып башҡорттар араһында ислам диннен таратыусы кешеләрҙе күҙ алдына килтерҙе. Иң киткес ҡыйынлыҡтарға осрағандарҙыр инде улар. Әммә һәммәһенә түҙгәндәр, ыҙаланыуҙарға ҡарамайынса, унынсы быуатта ук Аллаһы тәғәләнең бөйөклөгөнә, Донъя йөҙөндә Уның берҙән-бер икәнлегенә бик күптәрҙе ышандырырға өлгәшкәндәр. Ә Мырҙым бей ислам диненә күсеү-күсмәү тураһында һаман икеләнеү тойғоһон кисерә, мосолман булғаны өсөн генә Дәржимәнде Аҡсабикә ҡыҙы хушһынмай маташа. Шунан һуң барлыҡ ырыу кешеләрен ислам диненә нисек итеп ылыҡтырмаҡ кәрәк? Ырыуҙаштарын мосолманлаштырыу өсөн ниндәй әмәл ҡылырға?..

Нисек кенә баш ватмаһын, Мырҙыы бей үҙен борсоған һорауҙарға яуап тапманы.

Иртәгәһе көндө, -кырыҫ холоҡло ҡыҙын яҡшылыҡ менән генә еңергә, уға тейешле йоғонто яһарға, икәүҙән-икәү аралашҡан саҡта һәммәһен һөйләшергә ниәтләнеп, Мырҙым бей Аҡсабикәне һунарға алып барырға теләк белдерҙе.

Ап-аҡ, тип-тигеҙ тештәрен йылтыратып, Аҡсабикә йылмайҙы.

— Ҡасан?

— Бөгөн...

Ҡыуанысынан ни эшләргә белмәгән Аҡсабикә, өҫ кейемен алмаштырып, егеттәрсә кейенде лә бер яурыны аша һыҙма мылтыҡты, икенсеһенә уҡ-һаҙағын, тире тун тышынан билен быуған һырлы ҡайышына хәнйәр менән кәкре ҡылысын аҫты.

— Атай, мин юлға сығырға әҙер!

— Еңелерәк кейенеп, ҡылысың менән мылтыҡты өйҙә ҡалдырһаңсы, ҡыҙым.

— Ниңә?

— Ҡалтағайыңды ла[1] алһаң, мәшәкәтле булыр.

— һунарға һыбай бармайбыҙмы ни?

— Аттарҙы һунарсы өйөндәге кәртәлә ҡалдырып, үҙебеҙгә ҡалтағайҙа йөрөргә тура киләсәк, ҡыҙым.

— Өңөндәге айыуҙы атырға булһаҡ, йәҙрәле мылтыҡ кәрәкмәҫме?

— Кәрәкмәҫ, ҡыҙым. Айыуҙы ҡуҙғалтмайыҡ. Ҡорҙон урманындағы ҡоралайҙарҙы ҡыйратыусы неләүһендәрҙе ауларға барабыҙ. Был юлы, йыйын ҡарары буйынса, йыртҡыстар атыу минең сират...

— Неләүһендәрҙең беҙгә ни зыяны тейә?

---

[1] *Ҡалтағай* тип, боронғо башҡорттар, аҫтына йөнлө тире ҡағылмаған саңғыны йөрөткәндәр. Урал яғында ул исем әле лә һаҡланған.

— Ҡырағай хайуандарҙы күпләп ҡыра бит! Үткән йәйҙе урманға барған ике малайҙы ла шулар өҙгөләп ташлауы мәғлүм.

— Йыргҡыстар яман икән! — тип Ләксабикә һеләүһендәрҙе үҙе атырға теләк белдерҙе. — Йә, ҡуҙғалабыҙмы, атай?

— Эйе, ҡуҙғалырға ваҡыт, — тине Мырҙым бей.

Аҡсабикә, **үксәһе** матурлап һырыулы ҡатаһы менән, көмөш өҙәңгәгә баҫҡан ыңғайы, бер ынтылыуҙа ерән ат һыртындағы эйәргә ултырғас та, хеҙмәтсе ҡулынан алған йүгән теҙгенен уңға-нулға тартҡылай-тартҡылай, урамдағы атаһы эргәһенә сыҡты **һәм** сана юлы буйлап елдерҙе.

III

Ауылға яҡын урманға эйәләшкән ике һеләүһен, ҡоралайҙар менән мышыларға ғына түгел, кешеләргә лә **ҡурҡыныс** тыуҙырҙы. Һунарсыларҙан ҡурҡып, улар бер мәлде икенсе урынға киткәйне. Икенсе йылды үҙҙәренә оҡшаған тау-ташлы урманға кире әйләнеп килделәр. Яҙғы оҙон көндәрҙе һеләүһендәр ҡарағайҙар араһында уҙғарҙылар ҙа, эңер етеп тирә-яҡ ҡараңғылана башлағас та, үҙҙәре төйәк иткән ергә яҡынлаштылар.

Был кисте лә, элгәрге ғәҙәттәрен үҙг.әртмәйенсә, улар һунарсы йортонан алыҫ булмаған йылға яры буйына килделәр һәм, тирә-яҡты һағалап, бер урында оҙаҡ яттылар.

Көләс йөҙлө түңәрәк ай урман өҫтө тәңгәленә күтәрелгәс, инә һеләүһен урынынан торҙо һәм тирә-яҡты һағалап тыңланы. Борсолорлоҡ нәмә һиҙелмәгәс, ул, ҡабаланмай ғына атлап, күмәк ҡоралайҙар эҙенән юлланды. Дауыл ваҡытында тамырынан аҡтарылып ауған ҡайын олоно аша сыҡҡас, асыҡ яланға табан ыңғайланы. Һорғолт бесәйҙекенә оҡшаған инә һеләүһендең тиреһе менән ҡабырғаһындағы **тимгеле,** аҡ ҡарға аралашып, алыҫтағы кешегә асыҡ күренмәй. Ай яҡтыһында уның күләгәһе генә беленә.

Төнгө һыуыҡҡа солғанған тирә-яҡ әүәлгесә тып-тын. Урмандағы барлыҡ йән эйәһе йоҡоға сумған.

Инәһенән бер аҙым да ҡалмай эйәреп барған йәш һеләүһенде бер төрлө күренеш ялҡытты, ахырһы. Үткер тырнаҡтары менән уҫаҡ ҡайырын сыймаҡлап, ул юғарыға күтәрелде. Минут самаһы, бер урында ҡуҙғалмай, алан-йолан ҡаранып торғандан һуң, буран өйөп һалған тәрән көрткә һикерҙе. Артына боролоп ҡараған инәһенең ай яҡтыһында сағылған һалҡынса күҙ ҡарашын осратҡас, ҡурҡышынан артҡа тайпылды. Башҡаса шаярырға баҙнатсылығы етмәне уның, аҙым һайын **тиерлек** һағайып ҡарана-ҡарана, инәһе артынан ҡалмай эйәрҙе.

Кәбән төбөндәге ҡоралайҙар, йырткыстар яҡынлашыуын **һиҙеп,** бер-береһен этә-төртә, һунарсы өйөнә табан ҡастылар. Һунарсы өйөндә кешеләр барлығын белгән һеләүһендәрҙең артабан барырға баҙнатсылығы етмәне. Ҡоралайҙарҙы **эҙәрләүҙән** туҡталғас, кирегә табан ыңғайлапылар. Кәбәнгә яҡын урындағы киң ҡоласлы йыуан шыршы ботағына күтәрелеп, улар ҡоралайҙарҙың кире килеүен көтөргә мәжбүр булдылар.

Урманда йәнә тыныслыҡ урынлашты.

Йырткыстарҙан көс-хәлгә ҡасып ҡотолған ҡоралайҙар ҙа тынысланды. Бер аҙ хәл йыйғас. улар һөҙәк тау яры аҫтына төштөләр. Ҡумырыҡ тәңгәленән урғылған шишмә **һыуын** танһыҡтары ҡанғансы эскәс, кирегә табан бороллдолар.

Ҡоралайҙарҙың яҡынлашыуын алыҫтан ишеткән ағас башындағы һеләүһендәр һиҙгерлекте юғалтманы. Уларҙың суҡ ҡолаҡтары һәр тауышты абайлап тыңланы, ә үткер күҙҙәре ҡоралайҙарҙың һәр хәрәкәтен көсөргәнсшлек менән күҙәтте. Әһә, бер нәмә һиҙмәйенсә, туп-тура кәбәнгә киләләр. Ике ҡоралай ситтән **үҙҙы,** ҡалғандары һеләүһендәр урынлашҡан ҡарағас тәңгәлендәге **эҙҙән** сығырға теләмәне. Ҡоралайҙарҙың күбеһе шыршыға тиңләшкәс тә, юғарылағы ҡомһоҙ йырткыстар аҫҡа һикерҙеләр һәм ҡорбандарын өҙгөләргә тотондолар...

Ҡоралайҙарҙан эре һөйәктәр генә ҡалды. Инә һеләүһен, көс еткеһеҙ арыуын һиҙеп, ҡыуаҡлыҡтар араһына барып ятҡас та күҙҙәрен йомдо. Йылы ҡан еҫенә иҫергән йәш һеләүһен генә ял итергә теләмәне. Ул, тыйнаҡһыҙланыуының сигенә етеп, үҙ алдына ҡотороноп шаярҙы.

Ана, йырткыстарҙан ҡурҡмайынса, ата мышы үтеп китте. Йәш һеләүһен уға эйәреп барҙы-барҙы ла, һунар сәменә бнрелеп, алға һикерҙе. Мышы, ҡапыл яптайып, тәжрибәһеҙ йәш йырткыстың башына типте. Мышыға ҡабаттан **һөжүм** итергә батырсылығы етмәгән йәш һеләүһен, гәрлегенән ни эшләргә белмәйенсә, бер тирәлә уралып йөрөүҙән арығас, инәһе эргәһенә һыйынып ятыу менән, йоҡоға сумды...

Был минутта Мырҙым бей менән Аҡсабикә генә ял итмәне. Улар, йырткыстар эҙенә төшә алмайынса, бик күп ерҙәрҙе гиҙҙеләр.

— Йөрөүебеҙ мәғәнәһеҙгә, әллә кире боролабыҙмы? — тип һораны Аҡсабикә.

— Арыңщмы?

— Арыманым.

— Әләйһә, бер аҙ барайыҡ әле, ҡыҙым, — тип Мырҙым ҡарт ҡалтағайын алға шыйғалатты.

Үҙән аша сыҡҡас, иртәнге яҡты беленде. Киртләс-киртләс тауҙар аръяғынан ҡалҡҡан ҡояштың һалҡынса нурҙары ергә йәйелде. Ағас куләгәләре асыҡ яланға һуҙылды. Тынлыҡ. Алыҫта, әрәмәлек буйында, һайыҫҡандар шығырыҡлаған, ҡарғалар ҡарҡылдашҡан тауыштар ишетелде.

Һеләүһендәр эҙен күргәс, Аҡсабикә тукталды. Тәүҙә һауа менән ҡояшҡа, унан һуң әҙәм күҙенә куренмәгән тау һәм урман эйәһенә табынды ла, ауыҙ эсенән генә ниҙер һөйләнә-һөйләнә, ҡанлы ҡарға **буталған** һөйәктәргә яҡынлашты.

— Һеләүһендәр ошонда тукланғанмы әллә?

— Эйе, ҡоралайҙарҙы бөгөн төндә ашағандар. Ҡыҙым, һаҡ бул. йыртҡыстар яҡын-тирәлә булыуы ихтимал, — тип киҫәтеп, Мырҙым бей Һеләүһендәр эҙенән барҙы.

Уның артынан ҡалмай эйәргән Аҡсабикә:

— Атай, Һеләүһен өҫтөңә һикерергә тора, — тип йән әрнеткес тауыш менән ҡысҡырған ыңғайы, ағас ботағынан ташланырға әҙерләнгән инә Һеләүһенде уҡ менән атып өлгөрҙө. Инәһе аҫҡа тәкмәсләнеүен күреп ҡото алынған йәш Һеләүһен олон буйлап юғарыға үрмәләне. Ләкин ҡасып ҡотола алманы. Уның ғүмерен дә Аҡсабикәнең уғы **өҙҙө...**

Ҡыҙының сослоғона һәм мәргәнлегенә ихлас ҡыуанған Мырҙым бей:

— Ҡайһылай уңғанһың, — тип маҡтаны ла, үҙе эстән генә көйөндө: «Кейәүгә сыҡҡан кешенен хушһынмай маташһа ғына ҡыйын булыр. Сөнки ул баш бирмәйәсәк. Холҡона тура килмәһә, бер нәмә менән дә иҫәпләшмәйәсәк...»

Бер аҙ ваҡыт үҙғас, Һеләүһен тиреһен ирҙәрсә һыҙырған Аҡсабикәне өйрәтелмәгән байталға оҡшатып, Мырҙым бей уйҙарға күмелде. Мосолман егетенә кейәүгә сығып, ислам диненә күсһә, бәлки, тыйнаҡланыр? Тик көрьән тәғлимәттәре ҡушыуы буйынса йәшәргә теләрме икән? Аллаһы тәғәлә бирҙән-бер, Ул бөйөк, ер йөҙөндәге барлыҡ нәмә Уға буйһоноуын аңлаһа, холҡо үҙгәрмәҫ микән ни? Балыҡтарға, йыландарға, йылҡы, урман, һыу, тау, ямғыр, әле, төн, көн, күк эйәләренә табыну ҙа, Мырҙым бейҙең фекеренсә, алйотлоҡ. Сөнки улар барыһы ла мәңгелек Алла көҙрәттәре буйынса яҡты донъяға яралғандар...

йәш Һеләүһен тиреһен һөйрәтеп алдан барған Аҡсабикә, ҡалтағайҙа шыуыуын яйлатыбыраҡ, ағастарға табынды ла артына боролоп ҡараны.

— Атай, урман шаулағанын ишетәһеңме?

— Ел сыҡҡас, ни эшләһен, шаулар инде.

— Юҡ! — Ҡыҙ, атаһы менән ризалашмайынса, баш сайҡаны. — Бөгөнгө урмандың шаулауы ел сыҡҡанға түгел, Һеләүһендәрҙе атып үлтергән өсөн, урман эйәһе ҡоторона. Беҙгә үс итеп, берәй яманлыҡ ҡылмаһа ғына ярар ине!

— Бушҡа борсолаһың, ҡыҙым. Ҡыр хайуандарын күплəп ҡырған йыртҡыстарҙы атып үлтереү әүəл-әүəлдəн изге эш һанала.

Аҡсабикə өндəшмəне. Əммə уның борсолоуы тигенгə булмаған икəн. Өйҙəренə ҡайтып тамаҡ туйҙырырға ғына ултырғайнылар, күрше ауылдан килгəн сапҡын Мырҙым бейҙең бер туған ҡустыһы Шоборғолдоң ауырымай-нитмəй ҡапыл үлеүе тураһында əйтте.

Көтөлмəгəн ҡайғылы хəбəрҙе Аҡсабикə Һеләүһендəрҙе үлтергəн өсөн урман эйəһенең ус алыуына юраһа, Мырҙым бей ислам диненə күсмəй икеләнеүле тойғоларға күмелеп йөрөүенең бəләһе тип һананы.

— Тыуымдан ҡалмаған əҙəм заты үлемдəн дə ҡасып ҡотола алмай, — тип ул ҡыҙҙарына тыныс булырға, ҡайгы-хəсрəткə тарыҡҡанда ла күңел төшөнкөлөгөнə бирелмəҫкə, сыҙамлы булырға өндəне.

Иртəгəһе көндө, ғаиләһе менəн туған-тыумасаларын эйəртеп Мырҙым бей юлға сыҡты. Күрше ауылға барғас, Шоборғол ҡустыһының мəйетен ниндəй ысул менəн ерлəргə белмəйенсə, ул баш ватты. Аҙаҡтан, ислам диненə ылыҡмаған күпселек кешеларҙең шау-шыу ҡубарыуынан ҡурҡып, һəммəһен йыйын ҡарамағына ҡуйырға ҡарар итте.

Ул заманда һəр ырыу, һəр ҡəбилə кешеларе араһында берҙəмлек булмағас, йыйындағы фекер төрлөлөгө бəхəс тыуҙырҙы.

Ҡараҡыя ҡалаһынан килгəн мəрхүмдең ике аталаш туғандары мəйетте мосолмандарса ерлəүҙе талап итте. Икенсе ырыу кешеларе, мосолмандар менəн ризалашмайынса, табутка һалынған мəйетте тау-таш араһында йəшерергə теләне. Икенселəре табутты бейек ағас ботағына аҫып ҡуйырға, йəки яндырырға тигəн тəкдим индерҙеләр. Э Гəйнə ырыуындағы мəжүсиҙəр үҙҙəренең боронғо йолаларына тоғролоҡ белдерҙеләр.

Йыйында үҙ-ара тартҡылашыуҙан арығас, Шоборғол мəрхүмде баҫҡынсыларға ҡаршы көрəшеүсе ысын батыр-

ҙарға тиңләргә һәм уны донъяға мәжүсиҙәр йолаһы буйынса оҙатырға тигән ҡарарға килделәр.

Йыйын тамамланыу менән добулбастар-барабандар даңғыр-доңғор геүләргә тотондо. Уларҙың тауышына ҡушылып таҡмаҡ һамаҡлаған ырымсылар, тыпыр-тыпыр бейегән ыңғай:

Һөлдәһе ҡалды иләндә,
йәне осто бейеккә.
Әжәл шәрбәтен эсеп,
Кинәнер мәңгелеккә, —

тип үҙҙәренә мәғлүм булған бик күп хоҙайҙарҙың **исемдәрен** бер-бер артлы теҙеп сыҡҡас, оло йәштәге ырымсы ирҙәргә ҡарап баш эйҙе:

— Хоҙайҙар **һеҙҙән** бүләктәр көтә!

— Иң өлкән булаҡ күптәнән әҙер, — тип яуаплаған кеше **мәрхүмден** иң яратҡан күк атын өй ишегенен тотҡаһына килтереп бәйләне.

Баш ырымсы, өҫтөндәге кейемдәренә тағылған тимер-томорҙо зыңҡылдатып бейей-бейей, алға сыҡты. Күк аттың башына, маңлайына, муйынына бал ҡатыш май һөртөп, ебәк таҫма менән ялын үрҙергәс, көлгә күмеп бешерелгән икмәкте ашатырға ҡушты.

Төн уртаһы етеүгә күк атты йылға буйына алып барҙылар. Уның муйынына ауыр ҡул тирмәндәрен таҡтылар ҙа мәкегә батырҙылар.

Кешнәй-кешнәй боҙ аҫтына китеп, ат **күҙҙән** юғалғас та:

— Һыу эйәһе оло бүләгебеҙҙе ҡабул итте, — тип ҡыҫҡырҙы баш ырымсы һәм, ярҙамсылары менән бергә барабандар ҡаҡҡан тауышҡа ҡушылып ниҙер һамаҡлай-һамаҡлай, мәке тирәһендә ҡотороноп-шашынып бейергә тотондо. Бейеүҙән туҡталғас, һыу эйәһенең оло бүләккә ҡәнәғәт икәнлеген белдереп, сит-сото ҡабаттан боҙланған мәкегә ҡарап баш эйҙе лә күҙ ҡарашын күккә йүнәлтте. — Ер өҫтөндәге барлыҡ хоҙайҙар менән бик күп нәмәләрҙең эйәләренән юғарыраҡ тороусы Бөйөк һауа эйәһе, һиңә оло **үтенесем** бар. Шоборғол менән икенсе донъяға барасаҡ **ҡыҙҙы** һәм уның туған-тыумасаларын да ожмахтың иң түренә урынлаштыр. Был донъяла Шоборғол бай булды, мал-тыуары ишле булды...

Күп хоҙайҙарға табыныусыларҙың фекеренсә, теге донъялағы ер өҫтө гөл баҡсаһындай йәшеллеккә күмелгән, иң изгелекле кешеләр өсөн икенсе бер урында ожмах төҙөлгән, унда йәнең теләгән нәмәләр бөтәһе түгел, ти. Был хаҡта ҡорьәндә лә әйтелгән. Ләкин бында бер ни тиклем айырма ла бар. Мырҙым бейҙең ҡорьән сүрәләрен

уҡып белеүе буйынса, икенсе донъялыҡтағы ожмахҡа эләгеү өсөн, ерҙә йәшәгән әҙәм заты үтә намыҫлы, изгелекле, ғәҙел, тыйнаҡ, әҙәпле, эшсән, таҙалыҡ яратыусан, алдашыу тигән нәмәне белмәгән, кешеләргә ҡарата ихтирамлы, ярҙамсыл, йомарт, ураҙа тотоп, хәйер-саҙаҡа биргән, ҡорьән Кәрим сүрәләрен өйрәнеп, Мөхәммәт ғәлиәссәләм тәғлимәттәренә ихлас күңелдән инанырға тейеш булһа, мәжүсиҙәр өсөн иң мөһиме — байлыҡ.

«Күп хоҙайға инанып, меҫкен атты мәкегә тереләй батырыу ҡырағайлыҡ түгелме ни?» — тип уйланы Мырҙым бей. Мәжүсиҙәрҙең аңлауынса, имеш, ергә күмелгән мәйеттә селәүҙәрҙән, төрлө ҡуңыҙҙарҙан, ҡорттарҙан ашаттыртыусы ғәрәптәр алйотлоҡ ҡыла. Яндырғанда, йәнәһе, үлгән кеше туп-тура ожмахҡа барыш инә.

Мырҙым бейҙең уйынса, күп хоҙайға инаныусыларҙың йолаһы күптәнән иҫкергән, уны ҡулланыу ҡырағайлыҡ. Әммә **мәжүсилектә** бөтөрөү һәм ислам диненә кешеләрҙе күсертеү үтә ҡыйын һәм яуаплы. Барлыҡ мөһим мәсьәләләрҙе йыйында ҡатнашыусылар күпселек тауыш менән хәл ҡылғанлыҡтан, ырыуҙаштары араһында ислам динен таралыуына, мәсет-мәҙрәсәләр күпләп төҙөлөүенә, ғәрәпсә белем алыуға һәм мәҙәниәт үҫешенә тоткарлыҡ яһала. Ҡалаларҙа йәшәүселәр тотошлай мосолманлашты, ә ырыуҙаштары уларҙан һаман артта ҡала...

Ат батырылған мәке эргәһенән фатирына ҡайтҡас та тыныслана алмаған Мырҙым бей ырыуҙаштарының тормошон, көнкүрешен нисек итеп мосолмандарса үҙгәртеү тураһында уйланды.

Иртәгәһе көндө Шоборғолдоң **мәйете** һалынған табут эргәһенә кешеләр йәнә йыйылды.

Был юлы тире тундың йөнлө яғын әйләндереп кейгән баш ырымсы, добулбасын домборҙатып, кешеләр ҡаршыһына сығып баҫты.

— Мәрхүмдең күктә осоп йөрөгән йәне ерҙәге һөлдәһе менән теге донъяға бергә барасаҡ ҡыҙға — һөйгән йәренә йәһәтерәк ҡушылырға теләй. Уны оҙаҡ зарыҡтырыу килешмәҫ, — тип белдереү яһаны ла, **мәжүсилек** йолаһы буйынса, мәрхүмдең барлыҡ байлығын өс өлөшкә бүлде. Уның өҫтән бере мәрхүмдең ҡатындары менән бала-саға-һына, ҡалғаны ҡәбер әҙерләүселәрҙе бүләкләү һәм мәр**күмде** ерләүҙә ҡатнашыусыларҙы һыйлау өсөн тәғәйенләнде.

Ваҡ-төйәк нәмә башҡарылғас, теге донъяла Шоборғол байҙың ҡатыны булырға ризалашҡан һылыу ҡыҙ эргәһенә күмәкләп барҙылар. Уның менән бергә ашап-эсеп, көнө буйы күңел астылар, йырланылар һәм бейенеләр.

Ике көн уҙғандан **һуң,** ауыл осондағы ҡалҡыулыҡта ҡарағай бүрәнәләрҙән буралған махсус йортҡа Шоборғолдоң ыәйетеп алып килделәр. Табуттан сығарып, **уның** өҫтәнә алтын төймәле ҡупшы кейем, башына кеш тире-һенән тектерелеүле бүрек, аяғына тула ҡуңыслы ҡата кейҙергәс, тәҙрәһеҙ ҡараңғы йорттоң бер яҡ стена-һына һөйәп ултырттылар ҙа тирә-яғына бал, май, икмәк, бешкән пт, ҡаҙылыҡ, ҡорот һәм башҡа ашамлыҡтарҙы өйҙәләр, буҙа, ҡатыҡ, ҡаймаҡ, айран тултырылған ағас сеүәтәләр менән яндауҙар ҡуйҙылар.

— Хәҙер Шоборғол байҙы ҡоралландырыр мәл етте,— баш ырымсы мәйеттең билендәге ҡайышҡа хәнйәр менән ҡылыс таҡтыртты, эргәһенә һөңгө, селтәрле күлдәк, ук-һаҙаҡ, төркә-шлем, аяғы осо тәңгәленә ҡалҡан һалдыртты.

Шоборғолдо теғе донъяға оҙатыуға бағышланған әҙерлек бипың менән бөтмәне. Теге донъяға барғас йәйәү йөрөп ыҙаламаһын өсөн, ҡап уртаға ҡылыс менән өҙә сабылған ике атты, мәрхүмдең яратҡан этен, күп һөт һауҙырттыған һыйырын һәм әтәс-тауыҡтарын түр башындағы икенсе мөйөшкә урынлаштырҙылар. Йорттоң бирге мөйөшөнә арыш, арпа, тары ярмаһы тултырылған тоҡтар, теге донъяла сәсеп үҫтереләсәк бөртөклөләрҙе урыу өсвн алты **ураҡ,** һыулы күнәктәр, игенде тартыу өсөн таштан эшләнгән ҡул тирмәне, һауыт-һаба, алтын-көмөштән яһалған төрлө-төрлө биҙәүестәр һәм аҡсалар һалынды.

Шунан һуң ғына төҙәнеп-биҙәнеп, ашап-эсеп, ожмахҡа китеү ҡыуанысынан күңел асҡан йәп-йәш **ҡыҙҙы** теге донъяла нре буласаҡ Шоборғол мәйете эргәһенә алып **килделәр.**

Баш ырымсы, ҡыйығы тәңгәленә һәм тышҡы яҡ стеналарына бүрәнә киҫәктәре ҡатыш таҡталар, ҡыу ағастар өйөүле өйҙәң ишеген шар асып ебәрҙе лә ожмахҡа барасаҡ **минуттың** яҡынлашыуына ҡыуанып ни эшләргә белмәгән һылыу ҡыҙға һүҙ ҡушты:

— Ожмахҡа алып китәсәк өй эсендәге барлыҡ байлыҡ — Шоборғол ирең менән **һинеке!** Йә, байлыҡ оҡшаймы?

Ожмахҡа оҙатыласаҡ һылыу ҡыҙ, ҡояш яҡтыһы саҡ беленер-беленмәҫ төшкән өй эсенә ишектән һонолоп ҡарау менән, ҡыуанысынан тыпырсынып бейей-бейей, ҡыскырып ебәрҙе:

— Оҡшай, бында минә бик тә оҡшай! йәнем теләгән байлыҡ менән теге донъяла интекмәй йәшәйәсәкмен!..

Һылыу ҡыҙҙың ҡыланышы Мырҙым бейгә йәл, үтә ҡыҙғаныс булып тойолдо. Ул янып үләсәгенә түгел, теге донъяға барғас, Шоборғол ире менән ҡайғы-хәсрәтһеҙ

ожмахтың түрендә йәшәйәсәгә өсөн ихлас шатлана. Әммә, ырыу башлығы була тороп та, йыйын ҡарары буйынса башҡарылған йоланы туҡтатырға хәленән килмәүе үкенесле ине.

Төркөм-төркөм өйөлөшөп тороусы кешеләр, киреһенсә, бындағы күренешкә тантана кисерҙе. Улар, ожмахҡа китәсәк һылыу **ҡыҙҙың** бәхетенән көнләшеп, өҙлөкһеҙ ҡыскырыштылар.

Тауыш бер аҙ баҫылғас, өй эсендәге байлыҡтарҙан күҙ**ҙәрен** алмай һоҡланып ҡараған һылыу ҡыҙ эргәһенә баш ырымсы ҡабаттан килде.

— һеңлекәш, икенсе донъяла йәшәгән атай-әсәйең күренмәйме?

Тәүлектәр буйы төн йоҡоларын йоҡламай, белеш-таныштары менән күңел асыуҙан һәм аң томалағыс эсемлектәрҙе эсеүҙән тамам йонсоған ҡыҙ:

— Кү-рәм... Икенен дә яҡшы күрәм, — тип яуапланы.

— йәнә нимәләр күрәһең?

— Күптәнән үлгән туған-тыумасаларым да атай-әсәйем эргәһендә ултырғандарын күрәм!

— Уларҙан башҡа тағы **нимәләр** бар унда? — тип төбәште баш ырымсы.

— Теге донъяла минең ирем буласаҡ кешене, Шоборгол әфәндемде күрәм... Ул йәм-йәшел баҡсаларҙа үҫкән сәскәләр араһында урынлашҡан! Ә-ә-әх, сәскәләргә күмелгән баҡсалар ниндәй матур, һоҡланғыс! Ирҙәр менән йәш үҫмерҙәр ҙә бик күп!.. Ана, әфәндем саҡыра! Уның менән мине йәһәтерәк бергә ҡушығыҙ!.. [1]

Баш ырымсы эйәк ҡаҡты. **Шуны** ғына көткән уның ярҙамсылары һылыу **ҡыҙҙы** өй эсенә индереп урынлаштырҙылар ҙа:

— Ожмахҡа китеүселәрҙең хеҙмәтсеһе булып ҡалабыҙ, — тип ишекте эске яҡтан бикләнеләр.

Баш ырымсы, ризалашып, баш ҡаҡты.

— Теләгәс, ҡалығыҙ, хужаларығыҙға тырыш хеҙмәт ҡылығыҙ, — тип ул ишек тышына өйөүле ағастарҙы тоҡандырҙы. Янғын әкренләп-әкренләп шәбәйҙе һәм ярты сәғәт самаһы ваҡыт эсендә өй һәм уның тирәһенә өйөүле бөтә нәмә үрткә солғанды.

Уттың иң көсәйгән мәлендә өйҙәң түбәһе һәм стеналары емерелеп төштө һәм унын өҫтөндәге тупраҡ өйөмө **ҡапыл** кәмене, аҫҡа һеңде...

---

[1] Мәҗүсиҙәр йолаһына арналған әҫәрҙең был өлөшө Әл-Моҡтәдир хәлфәнең илсеһе булып шул осорҙа Болғар һәм Башҡортостан мәдәрәнә килгән Әхмәт ибн-Фаҙландың яҙмалары буйынса ижад нтелде.

Ожмахҡа оҙатыусыларҙа арналған йолалар тамамланғас та, баш ырымсының ҡушыуы буйынса, көлгә әйләнгән өй урыны яр буйынан ташылған тупраҡ менән өйөлдө һәм бәләкәй генә тау — уба барлыҡҡа килде.

Әммә тантана бының менән бөтмәне, йылға ярында дауам итте. Ундағы **мәжлестә** кешеләр өс көн буйы ашаны-эсте, йырлап-бейеп күңел асты...

IV

Ожыахҡа китергә ризалашҡан ҡыҙҙың мәйет менән бергә яндырылыуы һәм уның йән әрнеткес тауыш менән ҡысҡырыуын ишетеү Аҡсабикәнең иҫ-аҡылын томаланы, өҙлөкһөҙ ғазапландырҙы, күңелен **изҙе** һәм ҡатын-ҡыҙ яҙмышы өсөн уйланырға сәбәпсе булды. Ислам диненән мәҗүсилекте өҫтөн күреүҙән ни файҙа? **Үҙҙәре** һайлап кейәүгә сыҡҡан ҡыҙҙар ошоғаса бәхетле, ирекле, бойон**дороҡһоҙ,** ирҙәре менән **тигеҙ** хоҡуклы һымаҡ тойола ине Аҡсабикәгә. Хәҙер, ҡырағай күренештәрҙе үҙ күҙҙәре менән күреп белгәс, күп хоҙайҙарға ышаныу тойғоһо ныҡ ҡаҡшаны. Үлгән ир менән ҡатын-ҡыҙ яндырылыуы ғәҙеллекме?, Ни өсөн киреһенсә түгел? Мәрхүмдән **мираҫҡа** ҡалған байлыҡҡа ла ҡатындары хужа булмауы сәбәбен нимә **менән** аңлатырға? Атаһы үлһә, тол ҡаласаҡ әсәһен, һеңлеләре **менән** Аҡсабикәне лә шундай аяныслы **яҙмыш** көтәме? Мәҗүсилеккә ҡарағанда, ислам дине изгелекле-рәк тугелме **икән** ҡатын-ҡыҙға?..

Ҡапма-ҡаршылыҡлы уйҙарынын осо-сигенә сыға алмайынса, үҙен борсоған мәсьәләләр буйынса атаһына мөрәжәғәт итергә мәжбүр булды **Аҡсабикә.**

Мырҙым бей бер динде лә яманламаны.

— Миңә **диндең** күп төрө мәғлүм, — тип башланы ла, үҙе белгәндәрҙе түкмәй-сәсмәй һөйләргә кереште:—Донъяла иң таралғаны өсәү. Бик борон заманда уҡ төньяҡ һиндостанда Сиддхатха Ғаутама тигән кеше ойошторған будда дине ҡайҙалыр икенсе донъя барлығын инҡар ҡылмай. Христиан дине **Иисус,** беҙҙеңсә әйткәндә, Ғайса пәйғәмбәр **исеме** менән тығыҙ бәйләнештә... Аҙаҡтаныраҡ, берҙән-бер, донъяла мәңгелек Аллаһы тәғәләне һәм уның иң яратҡан пәйғәмбәре Мөхәммәт ғәлиәссәләмде данлаусы изгеләрҙән изге ислам дине барлыҡҡа килгән, — тине лә уның ҡайҙа, ҡасан, **нисек** тыуыуы һәм таралыуы тураһында аңлатҡандан һуң, ҡыҙының күңеленә һеңдереҙәй итеп, ул бер үк һүҙҙе ҡат-ҡат ныҡыны: — Аллаһы тәғәлә берҙән-бер ул, ҡыҙым. Бөйөк Аллаһы тәғәләнән башҡа

Алла юҡ!.. Күктәге ҡояш, ай, йондоҙҙар, ер-һыу, тау-таштар, барлыҡ ҡош-ҡорт, әкәм-төкәм Бөйөк, берҙән-бер Аллаһы тәғәлә тарафынан яратылған. Аллаһы тәғәлә һәммәһен күрә һәм белә...

— Аллаһы тәғәләне **күргән** кеше бармы һуң? — тип һораны Аҡсабикә, атаһы һөйләгәндәрҙән ғәмгә ҡалып.

Мырҙым бей оло ҡыҙының **ислам** дине менән ихлас ҡыҙыҡһыныуына шатланды.

— Мөхәммәт пәйғәмбәр генә Аллаһы тәғәлә менән бәйләнештә булған. Уның менән бик йыш һөйләшкәи. Бер мәлде пәйғәмбәр Мөхәммәт ғәлиәссәләм Аллаһы тәғәләнең үҙенә **күренеүен** үтенеп һораған. «Һиңә **күренергә** теләһәм дә, мине күрә алмаҫһың шул», — тигән Аллаһы тәғәлә. «Күрә алмаһам да, күренергә тырыш», — тип ныҡыҡҡан Мөхәммәт ғәлиәссәләм. Аллаһы тәғәлә, яратҡан пәйғәм**бәренең** күнелен табырға тырышып: «Әләйһә, бына, мине күр», — тип күренеүе булған, ниндәйҙер көслө нурға күҙе сағылыуҙан иҫтән яҙып, **Мөхәммәт** ғәлнәссәләм ергә йығылған. Байтаҡ ваҡыт үҙғас ҡына аңына килеп, ҡояш нурынан да сағыуыраҡ көслө яҡты Аллаһы тәғәлә иҡәнлегенә төшөнгән Мөхәммәт пәйғәмбәр.

— Аллаһы тәғәлә менән аҙаҡтан да һөйләшкән микән Мөхәммәт пәйғәмбәр?

— Ҡорьән сүрәләренән күренеүенсә, **Мөхәммәт** пәйғәмбәр Аллаһы тәғәлә менән һөйләшеүҙән бер ҡасан да туҡталмаған. Унан ишетеп белгәндәренең һәммәһе аҙаҡтан ҡорьәнгә яҙылған. Шуға күрә ҡорьәндәге һәр сүрә изге **һәм** ҡәҙерле.

— Ҡорьәндә яҙылғандарҙы уҡырға кем өйрәтте һине?

— Атайым... Атайымды уның атаһы...

— Ә һин ниңә өйрәтмәйһең мине?

— Нисәмә маташып ҡарағайным, тыңларға ла теләмәнең бит, ҡыҙым!

— Яңылышҡанмын, атай. Әҙәм заты, ышанһа • — ышанмаһа ла, һәр нәмәне белергә тейеш, — тине Аҡсабикә. — • Мине ҡорьәндә яҙылған сүрәләрҙе уҡырға өйрәт!

— Уҡырға теләгең булғас, ҡалаға алып барып урынлаштырайым үҙеңде. Ғәрәбстандан килгән муллалар меиән хәлфәләр һине **миңә** ҡарағанда яҡшыраҡ өйрәтер нслам дине мәғлүмәттәренә, — тине бей, шатланып.

— Мәсет-мәҙрәсәләр һалдыртып, муллаларҙы пиңә үҙебезгә саҡырмаҫҡа, атай?

— Был мәсьәләне хәл ҡылыуы ҡыйын, бик тә ҡыйын, ҡыҙым. — Мырҙым бей уйға ҡалды. — Мин малай саҡта... башҡорттарҙы ғәрәпсә яҙырға-уҡырға өйрәтергә саҡырылған муллаларҙы ҡанға батырып туҡмауҙарын күҙ алдыма

килтерһәм, әле лә тәнем зымбырҙай, йөрәгем ҡалтырана башлай...

— Ул заманда.н бирле күп нәмә үҙгәрҙе. Йүнләберәк аңлатҡанда, бәлки...

— Юҡ, файҙаһы теймәҫ, — тине Мырҙым бей, Аҡсабикәне бүлдереп. — Бер йыйында балаларҙы ғәрәпсә укытыу өсөн мәҙрәсә һалдыртырға теләк белдергәйнем, шау-шыу кубарҙылар. Шуға күрә Гәйнә ырыуы кешеләренең дүрттән бер өлөшө генә ислам динен тота. Ҡалғандары, минең шикелле икеләнеп йөрөй, йәки мосолманлашыуға ҡаршылашырға әҙер торалар. Ауыл кешеләренең тарҡаулығы, ҡала кешеләре менән аралашмай, ныҡлы бәйләнеш тотмай, күпселек башҡорттарҙың бер урындан икенсе урынға өҙлөкһөҙ күсенеп йөрөүе — мосолман диненә күсеүҙе тотҡарлай һәм ғәрәпсә белем алыуға ла ҡамасаулай, ҡыҙым. — Мырҙым бей, һүҙ ыңғайында яйын тура килтереп, Сурман хандың улын, Дәржимәндең исемен телгә алды, уның ғилемле мосолман булыуы һәм күпте белеүе өсөн маҡтаны.

Атаһын бүлдермәй ихлас тыңлаған Аҡсабикә христиан динен таратыуға сәбәпсел булған Иисустың — Ғайса пәйғәмбәрҙең тормошо менән дә ҡыҙыҡһынды.

Мырҙым бей инәлтмәне, Иисус Христостың — Ғайса пәйғәмбәрҙең ниндәй шарттарҙа «алла» тип исемләнеүен ентекләберәк һөйләргә тырышты. Бөйөк Аллаһы тәғәләнең Мөхәммәттән башҡа Нух, Ғайса, Яҡуп кеүек бик күп пәйғәмбәрҙәре булған. Улар, бер-береһен күрә алмай, үҙ-ара бик йыш ыҙғышҡандар. Ағалы-энеле ике пәйғәмбәрҙең Иисус — Ғайса исемлеһе, ҡустыһының яуызлығынан ҡурҡып, төрлө ерҙә ҡасып йөрөгән. Ул берҙән-бер Бөйөк Аллаһы тәғәләгә табынған һәм күп хоҙайлыҡҡа — мәжүсилеккә ҡаршы көрәшкән. Шунлыҡтан, Аллаһы тәғәлә ярҙамында, үҙ маҡсатына ирешкән. Бер мәлде дошмандары ҡулына эләккән Ғайсаны ҡыҙыу итеп яғылған уткa һалғандар. Ул, фәрештәләре һаҡлау сәбәпле, утта янмайынса, нҙән-һай ҡалған. Ғәжәпкә ҡалған кешеләрҙең Ғайсаны буддаларҙың бутына [1] табындырырға маташыуҙары ла уңышһыҙ тамамланған, ситлектәге ас бүреләр араһына индереп бикләүҙен дә файҙаһы теймәгән. Ажарланып өҙгөләү, бер нәмәһен ҡалдырмай ашау урынына, ас йыртҡыстар уның алдында ҡойроҡтарын болғап шыңшый-шыңшый, ҡулын ялағандар, иркәләнгәндәр... Ғайсаны ситлектән сығарып, уның урынына индерелгән попҡа ташланған бүреләрҙең яман ҡыланышын көсөргәнешлек менән күҙәтеүселәр аптырауының иге-сиге булмаған. Ғайсаның артабанғы яҙмышы ла күптәрҙе хайран ҡалдырған. Дошмандары келәткә индереп бикләгәс, ул башы һыйырлыҡ тәҙрә тишегенән күккә һоноло.п ҡараған. «Берҙән-бер, мәңгелек, Бөйөк Аллаһы тәғәлә, барлыҡ ышаныс-өмөтөм һиндә генә, нрлыҡа! Ошоиан сыға алмаһаы, мине үлтерәсәктәр»,— тип бөршәйткән бармаҡтары менән тишектән һыйған маңлайына, тишектән һыймаған ике яҡ яурынына һәм күкрәгенә төртөп күрһәткән. Күп тә уҙмаған, Иисус — Ғайса, тишектән сыҡҡан ыңғайы, эҙһеҙ юғалған. Уның һәр хәрәкәтен ситтән күҙәтеп тороусылар: «Иисус Христос ысын алла икән! Ул беҙҙе нисек итеп үҙенә табынырға өйрәтте», — тип ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, Ғайса пәйғәмбәр кеүск маңлайына, ике яҡ яурынына һәм күкрәгенә төртөп күрһәтеп, Иисус Христоска сукына башлағандар...

— Беренсе булып Румда шулай барлыҡҡа килгән христиан дине аҙаҡтан бүтән ерҙәрҙә лә киң таралған,— тип тамамланы һүҙен Мырҙым бей. Байтаҡ ваҡыт шымып ултырғандан һуң, ниҙер иҫенә төшөрөп, ул өҫтәне: — Алла тип Ғайса пәйғәмбәргә табыныуы аҡылһыҙлыҡ. Бөйөк Аллаһы тәғәлә — берҙән-бер, мәңгелек. Унан башҡа алла юҡ.

— Беҙ йәшәгән ер ҙә мәңгелек микән? — тип һораны Аҡсабикә.

— Аллаһы тәғәләнән башҡаларҙың береһе лә мәңгелек түтел, ҡыҙым. Тыуымдан ҡалмаған — үлемдән ҡалмаясаҡ әҙәм заты шикелле, мәле еткәс, беҙ йәшәгән ер ҙә юҡҡа сығасаҡ.

— Ҡасан?

— Әйтеүе ҡыйын, — Мырҙым бей уйға ҡалды. — Көрьән сүрәләренән күренеүенсә, Ер ахырыҙаманғаса йәшәйәсәк.

— Ахырыҙаман ҡасан етә? — Аҡсабикәнең тауышы ҡалтыранды.

— Ахырыҙаманға саҡлы күп ваҡыт бар. Әҙәм затының боҙоҡлоғо көсәйеп, үҙ-ара ыҙғыш-талашты туҡтатып булмаған саҡта етәсәк... Ахырыҙамандың аҡтыҡ көнө яҡынлашҡан мәлдә ерҙең ҡыҙыу, иң төпкөл ҡатында йәшеренгән Мәһәҙи батыр өҫкә сығыр, ти. Беләк буйы озонлондай ҡылысын һелтәп, бер ҡысҡырған Мәһәҙи батырҙың **тауышына** икешәр йөҙ саҡрым алыҫлыктағы барлыҡ әҙәм **заты** ҡырылыр, йорт-ҡуралар менән тау-ташлы урмандар **көлгә** әүерелер, ти. Ул ерҙәрҙә ҡабаттан йәшел үлән үҫмоҫ, хатта ваҡ-төйәк бөжәктәр ҙә үрсемәҫ, ти.

— Был турала һинә кем һөйләне?

— Көрьән сүрәләрендә яҙылған, ҡыҙым.

[1] *Бут* — идол (бот, пот).

— Шунан һуң, донъя бөтөнләйгә бөтә микән?

— Бөтмәй. Мәһәҙи батыр һөрән һалып ҡырғандан иҫән ҡалған кешеләр имен ерҙең бер мәйөшөндә ҡырҡ йыл йәшәр, ти. Ожмахҡа тиң булырҙай ерҙә уҙған ҡырҡ йыл бик йәһәт уҙар, ҡырҡ көндәй ҙә булмаҫ, ти.

Атаһы һөйләгәндә тыныс ултыра алмаған Аҡсабикә, вҙлөкһөҙ борғолана-борғолана, һаман төбәште:

—• Мәһәҙи батыр үҙе кем булған?

— Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең кейәүе Ғәли бәһлеүәндең улы булған Мәһәҙи батыр. — Мырҙым бей мендәр аҫтында йәшереп тоткан ҡалын китапты сығарҙы. Үҙенә кәрәкле битте асып, ғәрәпсә яҙылған һүҙҙәргә күҙ йүгертеп сыҡты ла китапта яҙылғандарҙы һөйләргә кереште.

...«Тотҡаһы булһа, ерҙе күтәрер инем», тип маҡтанған Ғәли бәһлеүән һәм үҙенә тиң булырҙай көслө кешене эҙләп табыу теләге барлыҡҡа килгән. Ул донъя пиҙеп йөрөгән саҡта өйҙә ҡалған ҡатыны ир бала таба һәм уға Мәһәҙи исеме ҡушыла. Мәһәҙи бер аҙ үҫкәс, урамда бергә уйнаған малай-шалай «атаһыҙ тыуған тыума» тип үсекләй башлай. Ундай һүҙгә ғәрләнгән Мәһәҙи өйөнә ҡайтып инә лә атаһының кем икәнлеген һәм уның ҡайҙа икәнлеген һораша. Әсәһенән бер ни ҙә әйттерә алмағас, асыулана:

— Мин тыума баламы?

•— Юҡ, һинең атайың бар, — тип яуап ҡайтара әсәһе.

— Шулай булғас, атайым ҡайҙа?

— Ҡайҙа йөрөгәнен белмәйем...

Нығышып-нығышып әсәһенән бер ни ҙә һөйләтә алмағас, Мәһәҙи әсәһенән ҡурмас ҡурҙырта.

Әсә улының теләгенә ҡаршы килмәй, табала ҡыҙҙырылған эҫе ҡурмасты кәсәгә һалып бирә.

— Мә, аша.

— Кәсәләге ҡурмасты ашарға теләмәйем, табалағы ҡурмасты усың менән һоҫоп бир!

— Бер "касан да шулай ҡыланмағанды, ниңә тиҫкәреләнәһең әле бөгөн, — тип әсә асыуланһа ла, берҙән-бер улының күңелен табырға тырышып, кәсәләге ҡурмасты табаға кире ауҙара. Уны һоҫоп биргәп саҡта, Мәһәҙи эҫе ҡурмас менән әсәһенең усын ҡыҫа ла:

— Атайымдың ҡайҙа йөрөүен әйтмәһәң, ебәрмәйем, — ти.

Бармаҡтары ҡурмаҫка яныуға сыҙамаған әсә, тыпырсына-тыпырсына, Ғәли бәһлеүәндең ниндәй маҡсат менән лл пиҙеп йөрөүен әйтергә мәжбүр була.

Мәһәҙи, ашыҡ-бошоҡ йыйналып, атаһын эҙләргә сығып китә. Ул бик күп илдәрҙә була. Әммә атаһын таба алмай.

Бер мәлде күмәк көрәшселәр көс һынашҡан илгә барып ета. Ксшеләр шығрым тулы майҙан уртаһындағы көрәшССЈәре күҙәтеп тора-тора ла, сәмләшеп китеп, енеүсе даныи яулаған бәһлеүән ҡаршыһына сыға.

— Мпн һинең менән көс һынашырға теләйем!

— Тәүҙә, һис юғында, буйға үҫ. Шунан күҙ күрер, — Тине көрәшсе, йылмайып.

Уның һүҙе Мәһәҙиҙең зитвша тейҙе.

— Юҡ, мин һинең менән әле көс һынашырға теләйем!..

Ун — ун ике йәштәр самаһындағы малайҙың ҡыланышын ысынға алмаған кешеләр, үҙ-ара мәрәкәләшеп, оҙаҡ көлөштө.

Ксшеләрҙең мыҫҡыллауына иғтибар итмәйенсә, Мәһәҙи һаман ныҡышты:

— Мин көрәшергә теләйем!

— Ярар, бик еңмешләнгәс, самалап ҡараһын! — Көрәшсе, артыҡ көс түгергә теләмәйенсә, малай менән квршергә һыңар ҡулын һондо. Мәһәҙиҙең еңел ғенә бирешмәйәсәген аңлағас, көрәшергә ихласлап тотондо. Әммә, б....ләй аңғармаҫтан, Мәһәҙи бәһлеүәнде баш осо тәңгәленә күтәрҙе. Уны ике-өс тапҡыр һауала өйрөлттө лә |ргә күтәреп бәргән ыңғайы күкрәгенә атланып ултырҙы.

Салҡан ятҡан көрәшсе малайҙың нәҫелен, зат-ырыуын һораша башланы.

— Минең әсәйем Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең ҡарындашы, |тайым Ғәли бәһлеүән, ҡайҙалыр ил пиҙеп йөрөй, — тип Мәһәҙи әйткәс, аҫта ятҡан данлыҡлы көрәшсенең төҫө үҙгәрҙе:

— һа-ай, һин минең улым икәнһең!..

Донъялағы барлыҡ көрәшселәрҙән көслө һаналған атаһын еңеп, уны кешеләр алдында мәсхәрәгә ҡалдырыуына ояльган Мәһәҙи батир, ни эшләргә белмәйенсә, үҙен мәңгелеккә әҙәм заты күҙенән йәшереүҙе һораған Аллаһы Тәғәләнән. Аллаһы тәғәлә уның теләген ҡабул иткән. Ете ҡат ер аҫтына инеп йәшерен гән Мәһәҙи батыр ахырыза-мш еткәс кенә өҫкә ҡалҡыр һәм гонаһшомлоҡ ҡылған **варлыҡ** әҙәм заты менән яҡты донъяны ҡыйратыр, ти...

Мырҙым бей шымғас та тыныслана алмаған Аҡсабикә |Келсә ҡалтыранды.

— Ғәли бәһлеүәндең яҙмышы нисек бөткән?

— Улынан көрәштә еңелгәс тә, өйөнә ҡайтып киткән,— Мырҙым бейҙең тамағы кипте. Хеҙмәтсе ҡатын килтергән |йранды эскәс, тоҡос һаҡал-мыйығын ҡуш услап һыпырған ыңгайы тамшана-тамшана хәбәрен дауам итте. — Юлда барышлай осраған оло ҡаҙан эсендәге һыуҙың утһыҙынһеҙ ҡайнауын, ағас ботаҡтарындағы тутый ҡоштарҙың,

аҫҡа осоп төшөп, тиҙәктә соҡоноуын күреп ғәжәпкә ҡалып торғанда, Ғәли бәхләүәндең эргәһенән үтеп барған бик оло йәштәге һыбайлы ҡарттың ҡулындағы кәрзин ергә тәгәрәй. Ғәли бәхләүән эйәренән төшә. Ерҙәге кәрзинде сәтәкәй бармағы менән ҡартҡа алып бирергә теләй. Ҡуҙғата алмағас, һыңар ҡулы менән йәбешә уға. Шунда ла ҡыймылдата алмағас, асыуы ҡабарыуҙың аҡтыҡ сигенә етеп, кәрзингә ҡуш ҡуллап тотона һәм биленә тиклем ергә бата. Һыбайлы ҡарт, ләм-мим һүҙ ҡушмайынса, Ғәли бәхләүән урынынан да ҡуҙғата алмаған кәрзиыде кәкре таяғы осона эләктерә лә шундуҡ күҙҙән юғала.

Бындай хәлгә иҫ-аҡылы китеп, өйөнә ҡайғҡас, юлда күргән-белгәндәрен Ғәли бәхләүән Мөхәммәт пәйғәмбәргә түкмәй-сәсмәй һөйләгән дә:

— Уларҙы нимәгә юрарға? — тип һораған.

Мәһәҙиҙең яҙмышын мосолмандар өсөн ғорурлыҡ һанаған Мөхәммәт пәйғәмбәр. Утһыҙ-ниһеҙ ҡаҙан тулы һыуҙың ҡайнауын әҙәм затының боҙоҡланғандан-боҙоҡлана барыуына, тутый ҡоштарҙың тиҙәк араһында соҡсоноуын муллаларҙың ике йөҙлөккә әйләнәсәге, кешеләрҙе күңел сафлығына, изгелек ҡылыуға өндәп, үҙҙәре аҙғын эш башҡарасағы менән аңлатҡан...

— Уҡымышлы кешеләр араһында ла яман ҡылыҡлылары буламы ни? — Аҡсабикә ғәжәпләнде.

— Нәфсеһенә баш була белмәгәндәр уҡымышлы әҙәмдәр араһында ла етерлек шул, ҡыҙым...

— Ғәли бәхләүән күтәрә алмаған кәрзинде таяғы осона эләктереп алып киткән ҡарт кем икән?

— Ул ҡарт һөлдәһенә әүерелгән фәрештә, ә таяғы осона эләктереп алып киткән кәрзин — ер.

— Е-е-ер?.. Нисек ер?

— Эйе, кәрзин — ер, — тип дөрөҫләне Мырҙым бей. — Был турала Ғәли бәхләүән һөйләгәс, тоткаһы булһа, ерҙе һин, ысынлап та, күтәрә алыр инең, тигән Мөхәммәт ғәлпәссәләм пәйғәмбәребеҙ.

— Ер сите беҙҙән алыҫ микән?

— Ғилемле кешеләр яҙып ҡалдырған китаптарҙан күренеүенсә, беҙ йәшәгән ерҙең сиге юҡ, ти. Ул йомортка шикелле түңәрәк икән. Түңәрәк ер бик дәү үгеҙҙең ике мөгөҙө араһына ҡуйылған, ти. Ә үгеҙ бик ҙур балыҡтың мыйығына ғына баҫып тора икән. Балыҡ йәшәгән даръяпы, бер яҡҡа сайҡалдырмай, көслө ел-дауыл тота, ахырыҙаманда кешеләр ҡырылып бөткәс тә, ҙур күгәүен тызылдай башлар, ти. Уның тызылдауына сыҙамаған үгеҙ,

ҡаскөкләр һом мөгөҙө араһындағы ерҙе ситкә бырғытыр, ти.

— Үгез үҙе лә һәләк була микән?

— Кптантарҙа яҙылыуынан күренеүенсә, үгеҙҙе Ғәли теге ҡкшъяла салырға, баш осо тәңгәлендәге күмәк йондоҙ ирҙың береһендәге ожмахта йәшәүселәргә өләшеп бирергә тейеш.

— Шоборғол мәрхүм менән икенсе донъяла йәшәргә ризалашып, үҙен-үҙе тереләй яндырткан ҡыҙға ла элэгер мик.)м ул үгеҙ ите?

— Ул ҡыҙға ерҙе күтәргән үгеҙ итен ашатмаҫтар, — тине Мырҙым бей, нығлы ышаныс белдереп.

— **Ниңә?**

— **Сөнки** берҙән-бер Бөйөк Аллаһы тәғәләнән башҡаларға ышанып, үҙен-үҙе тереләй яндыртырға ризалашыуы — оло гонаһ ҡылыуға тиң. Шунлыҡтан, боронғо ғәрәп яҙмаҫтрынан күренеүенсә, ул ҡыҙ мосолмандарҙың ожмахы на пиҙәйәсәк, мәкге тамуҡ утында янасаҡ.

— Бахырҡай! — Ҡыҙҙы йәлләп, Аҡсабикәнең күҙҙәре-н.| ['],ип эркелде, ҡып-ҡыҙыл ирендәре дерелдәне, аҡһыл йөҙө томрайҙы. — Янып үлеүе етмәгән, икенсе донъяла ла тамуҡ утында интегәсәк икән! Яңылышыуын белә тороп, ул ҡыҙҙы ниңә киҫәтмәнең?

— Киҫәтеүемдән берәй нәмә үҙгәрер инеме? — тип һораи ла, ҡыҙы өндәшмәгәс, Мырҙым бей үҙе белгәндәрҙең һом|моһен ентекләберәк аңлатырға тырышты. — Мәжүсилек йолаһына ихлас ышанған ҡыҙ өгөтөмдө тыңлау-тыңламауы икеле. Ә мине, ислам диненә яраҡлашыуҙа ғәйепләгән, ырыу башлығынан төшөрөрҙәр һәм шау-шыу ҡубарырҙар ине. Ырыу башлығы булып ҡалһам, Аллаһы тәғәлә ирҙамына таянып, донъялағы иң саф, дөрөҫ, әҙәм затының ғик яҡшылыҡҡа, изгелек ҡылыуға өндәүсе ислам дине ырыуҙаштарым араһында таратырға, улар өсөн мәсет-мәҙрәсәләр һалдыртырға мөмкинлек тыуасаҡ.

— Кешеләрҙең белемле булыуынан һиңә ни файҙа?

— Изгелек ҡылған кешегә сауабы ҙур була, ти, ҡыҙым...

Лгл һынан ишетеп белгәндәре Аҡсабикәнең күңелендә әһәҙ юғалманы, уйланырға һәм әкренләп-әкренләп донъяға ҡлрата ҡарашын үҙгәртергә булышлыҡ итте. Күп хорайҙ|рға ышанған ырыуҙаштарының ҡырағайҙарса ҡылан ы у Ӣ, ысыллап та, алйотлоҡ түгелме ни?, Урман тулы ҡош!-ҡорттарҙан, ҡырағай хайуандар менән мал көтөүҙәренән башҡа бер ни күрмәй, белмәй яҡты донъяла йәшәүҙән ни файҙа? Әҙәм заты наҙанлыктан аң-белемгә Тпртылмаһа, тормошон, көнкүрешен яҡшыртыу өсөн кө-

рәшмәһә, Кеше исемен йөрөтөргә хаҡы бармы уның? Ашау-эсеү өсөн генә йәшәгән әҙәм заты менән хайуан араһында ниндәй айырма бар?..

Аҡсабикәнен йөрәген тик бер нәмә өйкәй. Ислам дияненә **кусеп,** Сурман хандың улына кейәүгә сыҡһа, ирке сикләнмәҫме? Бында һуғылып киткәне бирле икенсе мәртәбә Аҡсабикәне бисәлеккә һоратып яусы ебәреүсе Дәржпмәндән уңырмы, әллә туцырмы? Уның тәҡдимен кире ҡағып, яңылышманымы икән?

Ҡырылмаһа ҡырҡ төрлө һорауҙарына ыңғай яуап таба алманы Аҡсабикә. Хәҙер уға ҡалайтырға? Дәржимән тураһында уйлана башлаһа, ни өсөи тулҡынлана, тыныслығы юғала?..

V

Яҙ етте.

Ала-солаға әйләнгән ер өҫтө күҙ алдында йәмләнде, ә тирә-яҡ шау-шыуға күмелде. Бик юғарыла, зәп-зәңгәр йыһан киңлеген нурландырып, мәңге ҡабатланмаҫтай алтын нурҙарын услап-услап һирпкән көләс йөҙлө ҡояш тәңгәлендә, һабан турғайының моңло тауышы **ишетелә.** Әрәмәлектәге ҡоштар көтөүе, үҙҙәренә оя ҡороруҙай уңайлы ағас ботаҡтарын һайлап, ығы-зығы ҡысҡырыша. Ана яр ситендәге яңғыҙ аҡ тирәк янында ике һайыҫкан баҫтырыша. **Үҙҙәре** генә аңлаған телдә шыҡырыҡлаша-шыҡырыҡлаша, улар аҫҡа тәкмәстеләр. Шунан, аҡһыл ҡанаттарын йыш-йыш елпендереп, йәнә өҫкә күтәрелделәр. **Нимәлер** бүлешә алмау аҙабымы, әллә һөйөү-һөйөшөүгә арналған һайыҫкандар йолаһы баҫтырышыуҙан ғибәрәтме? Өҙлөкһоҙ ҡарҡылдашҡан ҡара ҡарғалар ҙа тынғыһыҙ. Уларҙан арыраҡ күренгән асыҡ ерҙә үләкһә бөркөттәре бер тирәлә ҡабаланмай ғына өйөрөләләр...

Оҙон ҡыш буйы тып-тыныс торған ҡышлау урамдары ла бала-саға тауышы менән тулды. Ялан аяҡ, ялан баш малай-шалай, һөрән **һалып** ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, төрлө уйын менән мошғүл.

Йәйләүгә күсер мәлде көтөп зарыҡҡан йылҡы малының кешнәшеүе, һыйырҙарҙың баҡырышыуы, кәзә-һарыҡтың тәзелдәшеүе ишетелә...

Ер өҫтө йылынғандан-йылына барған һайын, тирә-яҡтағы тәбиғәт күренеше лә танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе һәм төрләләнде.

Бындай ваҡытта Мырҙым бей ҙә өйөндә тыныс ултырып сыҙаманы, һәр иртәнсаҡ тау башына күтәрелеп, йәнәғына ҡаранып тороу ғәҙәтенә инде. Бигерәк тә матур,

иҫ **киткес** гүзәл, һоҡландырғыс шул башҡорттар төйәк **иткән** ср. Улар өсөн Бөйөк Аллаһы тәғәлә бер нәмәне лә **Яратмағаи,** һәммәһен мул биргән. Иҙел-Кама буйынан Тубыл йылғаһы һәм Каспий диңгеҙе ярҙарына тиклемге **ерҙәрҙә** йәнең теләгәне бар бит! Тау-ташлы урмандары, **кылған** үләнле киң-киң далалары, йәм-йәшел ялан-туғайҙары, күл һәм йылғалары башҡорттарҙы кинәндереп йә-**Шәтеү** өсөн хасил булмағанмы ни? Төрлө ҡырағай хайуандар, **йәнлектәр,** ҡош-ҡорттар, балыҡтар менән бөжәктәр **Мәңге** бөтәһе **түгел.** Бында йәшелсәгә лә мохтажлыҡ ниҙелмәй. Яҙ еттеме, ҡуянтубыҡ өлгөрә. Уның артынса, ha-**рына,** ҡымыҙлыҡ, ҡуҙғалаҡ, йыуа, балтырған, һөтләген, урман һарнаһы — оҫкон, тауҡыяҡ, алтын шөңгөр, емеш-**ВТЭК** башлана — теләгәненде һайла, аула, тот, йый, аша, кинән...

Томле-татлыны яратыусыларҙы ла мәхрүм ҡылмаған **Бөйөк** Аллаһы тәғәлә. Улар өсөн ағас ҡыуыштарына һәм **Солоҡтарға** оялаған бал ҡорттарының хуш еҫле балы **бер ҡасан** да бөтәһе түгел. Тик игенде генә үҙең сәсмәйенсә үҫтереү мөмкинлеге юҡ. Икмәк ашау өсөн яҙғыһын **Иген** сәсергә, йәйгеһен уны сүп-сар баҫыуҙан һаҡларға, көзгөһөн урып-йыйырға кәрәк. Иген менән шөғөлләнергә **Геләмәүселәр** ҙә, Аллаһы тәғәләнең биргәненә шөкөр, ик-**Ивкһеҙ** ултырғаны тойолмай. Ҡала баҙарҙарына **килә-китә** йө **рөүсе** ғәрәп сауҙагәрҙәренә алып барған йәнлек тирелә-**репә** алмаштыралар...

Пке тау араһындағы үҙәндә йөрөүсе ҡоралайҙарҙы **Күргәс,** Мырҙым бей уйҙарынан бүленде. Ҡояш нурҙарына **Кинәнеп** ҡыҙынған оҙон, нәп-нәҙек тояҡлы ҡоралайҙарҙың **береһе** яҙғы йылы көндәр етеүенә ҡыуанып шаяра. Ул, ыл яғынан эркелеп килеүсе малдарҙы күргәс, һикерәнләүенән ҡапыл туҡталды һәм ҡыуаҡлыҡтарға табан ҡасп.|. Ҡоралайҙар төркөмөнән аҫтараҡ урындағы дүнәндәр, **ҡонандар** менән тай — тулаҡтар араһында йөрөгән мышы-**Лар,** ҡабаланмай ғына бөрөләре төрткән саукаларҙы берәм-һәрәм өҙгөләйҙәр.

«Ерҙәге үлән күҙгә күренеп күкһелләнде. Сәсеүлектәргә бойҙайҙар ҙа тиҙҙән үҫә башлаясаҡ. Уларҙы, малдан **Тапатмаҫ** өсөн, көртәләтергә лә һабантуйҙы **уҙғарыуға Вҙерлек** эштәрен ойоштороргә кәрәк», — тип уйланы Мырҙым **бей.**

Ул, өйөнә ҡайтып төшкө тамағын туйҙырғас, ярҙамсыларын кәңәшмәгә йыйҙы.

— Ағай-эне, кисектергеһеҙ хужалыҡ эштәре һәм төрлө машәҡәтле нәмәләр күбәйеп китте бит әле, — тип аҡһа-**Кйлдар** кәңәшмәһен — кесе йыйын ултырышын асыҡ тип

иғлан иткәс, унда ҡатнашыусыларҙың һәр береһенә мөһим мәсьәләләр буйынса үҙ фекерен әйтеүҙе һораны.

Йыйын оҙаҡҡа һуҙылманы. Аҡһаҡалдарҙың тәҡдиме буйынса, һәр ара һәм ғаилә кешеләре башҡарасаҡ эш билдәләнгәс тә, кәңәшмә ҡарары үтәлеше ырыуҙаштары өсөн изге бурыс һаналды.

Яҙғы хужалыҡ эштәре тамамланыу менән ҡарға туйы уҙғарыуға әҙерлек башланды.

Байрам көнө килеп еткәс, хужалыҡ менән шөғөлләнеүсе ирҙәр өйҙә ҡалды, ә оҙон билле арбаларға сәк-сәк, бауырһаҡ, бәлеш, йомортҡа, ит, ярма һәм башҡа төрлө ашамлыҡтар тейәгән ҡатын-ҡыҙ йылға аръяғындағы асыҡ яланға табан йүнәлде. Алҡа-сулпыларын тағып, байрамса биҙәнгән Лҡсабикә менән уның һеңлеләре лә бүтәндәрҙән ҡалышманы.

Киң майҙанға етеп төркөм-төркөм урынлашҡас та, олораҡ ҡатындар аш-һыу әҙерләргә тотондо, ә ҡыҙҙар менән йәш килендәр, таҡмаҡтар әйтеп, бер-береһен бейеттеләр, төрлө уйындарҙа һәм ярыштарҙа ҡатнаштылар.

Дирүгәләр өҫтөндә әҙерләнгән ризыҡты ашарға ултырғас та, уйын-көлкө баҫылманы.

Табын башлығы итеп һайланған Юлбарсы әбей майҙан уртаһына сығып баҫты. Ул алтын-көмөш тәңкәләр һәм таҫмалар менән биҙәлгән башындағы йөнтәҫ ҡалпағын төҙәтеп кейҙе лә, тешһеҙ уртын сипылдатып тамшана-тамшана, һәр йылдың яҙында уҙғарыласаҡ ҡатын-ҡыҙҙар байрамы тарихы тураһында һөйләргә тотондо.

Ҡарға туйы, йәки, икенсе төрлө әйткәндә, ҡарға буткаһы бик боронғо, тәүтормош заманынан башлап быуынданбыуынға күсә килгән йолаларҙың береһе. Әүәл-әүәлдән бирле ырыу-ҡәбилә кешеләре хайуанды йәки берәй нәмәне алла һанап, уға табынғандар һәм шул йола ун өсөнсө быуатта ла үҙгәрмәне. Башҡорттарҙа, айырым тоҡом инә бүренән таралған йәки, икенсе араның атаһы айыу нәҫеленән таралған, имеш, **тигән** хәбәрҙәр ҙә һаҡланған..,

Юлбарсы әбейҙең сабый сағында ишетеп белеүенсә, башҡорттарҙың ҡатындары әүәл заманда ирҙәре менән бергә яуҙа ҡатнашҡан. Бер ырыу менән икенсе ырыу кешеләре алышҡан мәлде, имеш, йәш ҡатын бәпәйләгән. Баланы үҙҙәре менән бергә һуғышта йөрөтөргә мөмкинлек булмағанлыҡтан, уны ҡарға ояһына һалып ҡалдырғандар, ти. Ике йылға һуҙылған яуҙан һуң ҡайтып барышлай, сабыйҙың һөйәген булһа ла күмеп китәйек әле, тип улар ҡарға ояһына һуғылып китергә теләгәндәр. Ҡаҙан ҙурлығындай итеп өлкәнәйтелгән оя тирәһендә күмәк ҡарғалар көтөүе осоп йөрөүен, ә оянан аяғын һалындырған

малайҙың шишәйҙәр көй көйләп ултырыуын күргәс, улар ғәжәпкә ҡалғандар. Аҙаҡтан улы сығарған көйҙө ҡурайға һалыусы ата кеше уны «Бала ҡарға» тип исемләгән, ти.

Шунан аҙаҡ башҡорттар ҡарғаларға ла табыныр булғандар. Баланы ҡарап үҫтереүсе ҡарғалар хөрмәтенә ҡарға буткаһы байрамы уҙғарырға ғәҙәтләнгәндәр, ш. Байрам мәлендә ашағандан ҡалған буткаһы ташҡарға һәм ағас олондарына һылаған саҡта: «Әй, ҡарҙар, килегеҙ, килегеҙ, беҙ сәскән игендең умырылып ҡалыуын теләгеҙ! Игенебеҙ уңһа, киләһе йылда ла һеҙҙе **Һыйларбыҙ,** ҡунаҡ итербеҙ», — тип ҡарғаларҙы буткаға ашарға саҡырыр булғандар.

— Башҡорттар бик борон замандан иген сәскәндәрме ни? — тип һораны Аҡсабикә.

— Иген сәскәндәр, бик күпләп сәскәндәр! Аҙаҡтан, мал **Кәтөүе** күбәйгәс, аңһатҡа һалышып, бәҙәләре бүтәндәр сәсеп үҫтергән икмәкте йәнлектәр тиреһенә алмаштырып ала башлауҙы артыҡ күргәндәр!

— Борон, бик борон замандағы туйҙар ҙа беҙҙеке һымаҡ уҙғарылды микән?

Табын башлығы вазифаһын үтәүсе Юлбарсы әбей уйға **Калды.** Тәүтормош өйөрө осоронда барлыҡҡа килгән туйҙың йылдар артынса йылдар уҙыу менән бергә ныҡ үҙгәреүен, яйлап-әкренләп аталар ырыуы осоро менән алмашынып **ШЬһымын** ишеткәне булмағас, ул ни тип яуап ҡайтарһын ине? Тәүтормош өйөр осорондағы ҡарға туйында ирҙәр **Менән** ҡатындар бергә ҡатнашһа, инәләр ырыуы заманындағы байрамдарға ирҙәр ҡатнаштырылмай башлауы тураһында ла белмәй ине ул...

Беренсе көнө йәш ҡыҙҙарҙы тәжрибәле ҡатындар аш-**Һыу** әҙерләргә, бала-саға тәрбиәләргә, төрлө уйын ярыштары **ойоштороpға,** унда нисек итеп еңеп сығырға ейрәтһә, **иртәгеһе** көндө лә дауам ителәсәк **йыйын** ир-егеттәрҙең көсөн, сослоғон, зирәклеген, һүҙгә оҫталығын, бейергә, **йырлауға,** ҡурайҙа уйнауға йәки бүтән төрлө һөнәргә һә-**Лвтлеме** икәнлеген һынау өсөн уҙғарыла.

Көс һынашыу яғынан ҡатын-ҡыҙ ҙа ирҙәрҙән һис ҡалышмай.

Улар, бер-береһен мәрәкәләшеп тамаҡ туйҙырғас та, **Һәр** ҡайһыһы үҙҙәре өҫтөн күргән хоҙайына табынып рәх-**Мәт** әйткәндән һуң, йәнә көс һынашырға булдылар. Бер **теркөм** ҡыҙҙар, эйәрле аттарға атланып, һыбай сабышты, икенселәре сәптәргә уҡ атты, өсөнсөләре һырғаға менеү **ирышында,** ойоҡбаш, бейәләй бәйләү, күн **иләү,** итек-ҡата, **кейем** тегеү, һауыт-һаба йыуыу оҫталығын күрһәтте, ҡалрандары таҡмаҡ әйтте, йырланы, бейене, күңел асты...

Дөйөм йыйын ҡарары буйынса, йәйләүгә күсеү һәм шуға саҡлы һабантуй үткәреү көнө билдәләнде.

«Бер нәмәгә лә мохтажлыҡ кисермәйенсә, ҡайғы-хәсрәтһеҙ йәшәгән башҡорттар уғата ғәмһеҙләнде, һәр мөмкинлектән файҙаланып, байрам артынса байрам уҙғарырға әҙер торалар», — тип эстән генә ризаһыҙлыҡ белдергән ырыу башлығы Мырҙым бей, Асылыкүл эргәһендәге асыҡ яланда уҙғарыласаҡ дөйөм һабантуйҙа ҡатнашыуҙарыш һорап, ырыу башлыҡтары менән ҡалаларҙа йәшәүсе бейкенәздәргә сапҡындар ебәрҙе.

Әммә, Аҡсабикәнең Сурман хандың улын һабантуйҙа ҡатнаштырырға теләмәүе сәбәпле, бейҙең күңеле тыныс түгел ине. Күп хоҙайлыҡҡа табыныуҙан баш тартып, ислам диненә күсергә теләк белдергәндән һуң да ҡыҙыныҫ тиҫкәреләнеүен, Дәржимән менән осрашырға ҡурҡыуын нимә менән аңлатырға?

— Ҡыҙым, ғүмерең буйы кейәүгә сыҡмай йәшәргә уйлайһыңмы әллә?

— Ниңә улай тиһең, атай? — Аҡсабикә ғәжәпләнде.

— Кейәүгә сығырға ваҡытың етте бит, ҡыҙым. Дәржимәнде хушһынмаһаң, һабантуйҙа ҡатнашасаҡ берәй егетте һайлаһаңсы.

Тағатҡан сәстәрен үреүҙән бүленеп, Аҡсабикә баш сайҡаны:

— Теләмәйем!

Ҡыҙының тиҫкәреләнеүе әсәһенә лә оҡшаманы.

— Туҙға яҙмаған хәбәрҙе һөйләмә, ҡыҙым! Барлыҡ ырыу егеттәре араһынан, моғайын, берәйһен күңеленә оҡшатырһың. Былайтып ултырһаң, ысынлап та, ирһеҙ ҡалыуыңбар!

— Улар араһында минең күңелемә оҡшарҙай егет юҡ, — тип Аҡсабикә ҡырт киҫте.

Мырҙым бей менән уның ҡатыны ла, сигенергә теләмәйенсә, ҡыҫымды арттырҙылар:

— Күңеленә оҡшарҙай егет, һинеңсә, нисек булырға тейеш?

— Эйе, һынап ҡарамайса, уның шәпме-яманмы икәнлеген белеп буламы ни?

— Егеттең шәп, һәр ыәмәгә һәләтле, көслө, ҡыйыу, аҡыллы булыуы ғына аҙ. Минең өсөн утҡа-һыуға ташланырға әҙер тороусы егетте ир итеп һайларға теләйем! — тине Аҡсабикә.

Әңгәмә өҙөлдө.

Мырҙым бей бер нөктәгә төбәлгән көйө шаҡ ҡатып ултырыуҙан тамам ялҡҡас, аяғы аҫтында йәйеүле йәнлектәр тиреһенә, урындыҡ-стеналарҙағы кеҙәмдәргә, ялтыраулыҡлы алтын-көмөш ҡалай менән көпләнеүле һандыҡ өҫтөнә өйөүле балаҫ-юрғандар менән мендәрҙәргә күҙ йөрөтөп сыҡты ла:

— Әсәһе, Аҡсабикә ҡыҙыңды кейәүгә сығырға күндереү һинең намыҫында, — тине.

Атаһы тышҡа сыҡҡас, көҙгө алдында ултырып биҙәнгән Аҡсабикә әсәһенә ҡарап көләмһөрәне.

— Йә, әсәй, өгөтлә. Мицә кемде кейәү итеп һайларға ҡ) шаһын?

— Кемде һайлау, ҡыҙым, үҙ ихтыярыңда. Әммә, ваҡыТЫҢда кейәүгә сыҡмай, олоғайған ҡыҙ исеме тағылһа, укенәсәкһең.

Аҡсабикә өндәшмәне. Ҡашын ҡарайтып, күҙе тирәһенә Һырмә тартҡас ҡына, яманһыу көрһөнөп, әсәһе ултырған яҡҡа үрелеп ҡараны.

— Мин ҡайғыһыҙ-моңһоҙ, үҙемдең яҙмышым тураһында бер ни уйламай-нитмәй йөрөй, тиһендер инде? Күнелем төшмәгән егеткә кейәүгә сығып та, аҙактан уны яратмаһам, ни эшләргә? Ғүмерем буйы интегеп йәшәргәме? — тип һораны ла, әсәһе яуап ҡайтармағас, уйға ҡалды. Шуплп, пиндәйҙер ҡарарға килеп, ҡапыл тәүәккәлләне: — Ярар, тейһә тейеңгә, теймәһә ботаҡҡа, тигәндәй, самалап карайым. Мине бисәлеккә һоратып яусы ебәреүсе барлыҡ Кала егеттәрен дә һабантуйҙа көс һынашырға һәм үҙҙәрснең һәләтлектәрен күрһәтергә саҡырам!

— Мосолман егеттәре ундай бәйгелә ҡатнашырға ризалкиыр микән?

— Мине ихлас күңелдән яратһалар, ризалашырҙар, — тип туҙ менән ҡәләм һорап алды. Атаһынан өйрәнгән ғәрәп хәрефтәрен көс-хәлгә ипкендереп, еңелсә бөршәйгән туҙҙа рға яҙҙы ла йомошсо һыбайлыларҙы саҡырҙы. — Ҡалаларға барасаҡ юлдарҙы беләһегеҙме?

— Беләбеҙ, — тип берҙәм яуапланы сапҡындар.

— Белгәс, бик һәйбәт! — Аҡсабикә шатланды. — Һеҙ Квлаларҙа йәшәүсе мосолман егеттәрен һабантуйҙа уҙГврыласаҡ бәйгелә ҡатнашырға саҡырырға тейешһегеҙ. Кемдәр теләмәй, көсләмәгеҙ, — һәр егеткә исемләп яҙылған туҙҙы сапҡындарға берәм-берәм таратырға тотондо. — Мыныһы Бөрйән ҡалаһында йәшәүсе Шөғәйеп кенәздең Минйәр исемле улына, мыныһы Ҡараҡыялағы Сурман хан улына, мыныһы Минжан ҡалаһындағы...

— Ҡала наҡсылары беҙҙе эскә уҙғарырмы? — тип һораны сапҡындарҙың береһе.

— Атайымдың исеменән килеүегеҙҙе әйтһәгеҙ, ҡала ҒЛмлыҡтары эргәһенә һеҙҙе тоткарлыҡһыҙ уҙғарасаҡтар...

Сапҡындарҙы оҙатҡас, Аҡсабикә әлегәсә таныш булма-

ған борсоулы тойғолар кисерҙе. Мосолман егеттәре һабантуйға килерме, әллә юкмы? Килмәһәләр, ни эшләргә?..

Үҙенә таныш егеттәрҙең буй-һынын күҙ алдына килтергән һайын, ҡыҙҙың йөрәк тибеше йышайҙы, тулҡынланыуы көсәйҙе, төрлө уй-хистәргә күмелеп, һәр төндө йоҡоһоҙ уҙғарҙы.

Ғишыҡ уты тигән нәмәнең йөрәгенә ҡабыныу ғәләмәте ошолай була микән әллә? Әммә йөрәгенә ҡабынған утты дерләтеп яндырырҙай егет ҡайҙа, ул кем?..

VI

Таң яҡтыһы беленгәс тә, Асылыкүл яры буйындағы ҡиң яланға килгән кешеләр күбәйгәндән-күбәйә барҙы. Мырҙым бей ҡарамағындағы ырыуҙаштары ситтән килеүсе ҡунаҡтарҙы хөрмәт менән ҡаршыланылар һәм уларға был ерҙең тарихын ентекләп аңлатырға тырыштылар.

Ырыу бшлыҡтары менән Мырҙым бей үҙе шөғөлләнде. Улар өсөн ҡоролған аҡ тирмәләргә индереп урынлаштырғас, ҡымыҙ эсереп, бер аҙ ял иттергәс:

— Әле беҙ ултырған ер тотошлай урман булған борон заманда. Буранғол ауылы эргәһенән аҡҡан Асылы менән Сәрмәсән араһында әҙәм заты үтә алмаҫлыҡ тау-ташлы урман үҫкән, — тип башланы ла, әүәлдән быуындан-быуынға күсә килгән ғәҙәт буйынса, һабан туйы үткәреләсәк ерҙең тарихын һөйләне.

...йәмле йәйҙең бер мәлендә ошо тирәлә көслө ямғыр яуырға тотонған. Ул, көнөн-төнөн туҡталмай, яуған да яуған. Дөм-ҡара болотҡа солғанған һауаны сатай-ботай сыймаҡлап, өҙлөкһеҙ утлы йәшен балҡыған һайын көслө күк күкрәүе бөтөн ерҙе һелкендергән. Бер саҡ ҡалтыраныуға сыҙамайынса, Ташлытауҙың уртаһы аҫҡа уйылып төшкән. Көслө ямғыр ваҡытында ташҡан Асылы йылғаһы, ағышын үҙгәртеп, ер һелкенеүҙән барлыҡҡа килгән оло соҡорға тулған һәм шул урында хәҙерге Асылыкүл барлыҡҡа килгән, ти. Шул заманда бирле, изге һаналған Асылыкүл эргәһендәге асыҡ яланда башҡорт ырыуҙарының дөйөм ханын һайлау, уны аҡ кейеҙҙә күтәреү йәки һабантуйҙар уҙғарыу йолаһы барлыҡҡа килгән, имеш, тиҙәр. Әммә тәүге башҡорт ханы ҡайҙа, нисек итеп һайланыуын бер кем дә ныҡлап эйтә алмай. Ҡасандыр һайлап ҡуйылған хан исеме уның нәҫел-ырыуы буйынса күсә килә.

Донъя имен ваҡытта башҡорт ханының хоҡуғы дөйөм йыйын ҡарары буйынса сикләнгән, ҡәллы йәшәгән ырыу эштәренә туранан-тура ҡыҫылырға уның хаҡы юҡ. Хан

дәүләте ҡаҙнаһын тулыландырыу бурысы ырыу һәм ҡәбилә башлыҡтарына йөкмәтелгән. Яҙын-көҙөн түләнергә тейешле налым һуңлатылһа, йәки бөтөнләй түләнмәһә, башҡорт ханы дөйөм йыйылыш тарафынан тәғәйенләнгән аҡһаҡалдарҙың хөкөмөнә мөрәжәғәт итергә хаҡлы.

Быйылғы ырыу-ара һабантуй Гәйнә [1] ырыуы тарафынан, дөйөм йыйында ҡаралған сират буйынса, ойошторола, Шуға күрә ундағы тәртипте һаҡлау, ҡунаҡтарҙы һыйлау, төрлө уйынды һәм ярыштарҙы ойоштороу өсөн ырыу башлығы Мырҙым бей яуаплы.

Төрлө ырыуҙарҙан ғаиләләре менән арбаларға тейәлеп йәки һыбай килгән кешеләр күбәйгән һайын, тауыш артты.

Ҡсылыкүлгә ҡойған йылға яры буйындағы тағандарға ҫыулы оло-оло ҡаҙандарҙа йылҡы, һарыҡ, ҡуй ите бешереүселәр менән бүтән төрлө аҙыҡ-түлек әҙерләүселәргә генә ял тәтемәне. Улар, тирләп-бешеп, һәммәһен үҙ ваҡытында өлгөртөргә тырышалар.

Ҡалаларҙан килеүсе кенәздәр, бейҙәр менән ырыу башлыҡтары, ҡатындары менән бала-сағаһын эйәртеп аҡ тирмәләрҙән сыҡҡас, ырыуҙаштары араһында торған Мырҙым бей баш эйҙе.

— Изге ергә баҫҡан аяҡтарығыҙ ҡотло булһын, ҡәҙерле ҡунаҡтар! — тип, ул алдан әҙерләнгән бүләктәрҙе ырыуҙаштары исеменән өләште.

Ҡунаҡтар ҙа яуапһыҙ ҡалманы. Иң изе теләктәр теләп, ҡәҙәре менән алып килгән ҡиммәтле бүләктәрҙе һабантуйҙы ойоштороусыларға тапшырҙылар.

Танышыу йолаһына арналған күренеш тамамланғас, ЫГрыу-кәбилә башлыҡтарын, ҡаланан килеүсе кенәздәр меи.)‖ уларҙың ғаиләләрен һәм туған-тыумасаларын Мырҙым бей ҡорбан салына торған урынға алып барҙы.

Байрамса кейенгән оло ҡунаҡтарға башҡа кешеләр ҙә ойәрҙе.

Ҡорбан салынасаҡ ергә еткәс, тирә-яҡ тып-тын булып калды. Киртләс-киртләс тауҙар аръяғынан күтәрелгән ҡоп иурҙарына ләззәтләнгән ҡош-ҡорттарҙың кем уҙарҙан сыпылдашыуы, әрәмәлектәге һандуғастарҙың һайрауына Кушылып, асығыраҡ ишетелгәндәй тойолдо. Болоттарҙан әрселгән күк йөҙө зәп-зәңгәр. Был минутта барлыҡ йән әйәһе ниндәйҙер оло ҡыуаныс кисергән һымаҡ күренә.

[1] Гәйнә ырыуының күпселек өлөше хәҙерге Пермь өлкәһендә йәШвгән.

Мырҙым бей, ҡунаҡтарынан айырылып, алға сыҡты һәм ҡорбанға салынырға әҙерләнгән мал эргәһенә тары ярмаһы, арпа, бал тултырыулы алтын-көмөш ялатыулы ҡомғандар ҡуйырға ҡушты, ут яғыу өсөн малай-шалайҙан ҡоро ағас киҫәктәре менән сыбыҡ-сабыҡ йыйҙыртты.

Әҙерлек тамамланғас, йола буйынса Мырҙым бей борон заманда табыныу әйбере һаналған дүрт ҡыҫҡа аяҡды, эсе һай итеп соҡоулы, дүрткел таштабаҡ ҡаршыһында теҙләнде. Уға һары май һалып, ҡорбан салыуға бағышланған утты тоҡандырҙы. Ут алдында доға ҡылғандан һуң, ҡулдарын күтәреп, күҙ ҡарашын күккә йүнәлдерҙе.

— Бөйөк Аллаһы тәғәлә, һинең беҙгә, башҡорттарға борон заманда мәрхәмәтлек ҡылғаның өсөн рәхмәттәр белдерәбеҙ һәм изгеләрҙән изге һаналған Асылыкүл буйындағы һабантуйҙы оло ҡыуаныс-шатлыҡтар менән уҙғарырға ярҙам ит! Яҡуп пәйғәмбәрҙең төшөнә кереп, иң яратҡан кесе улын, Иосопто, ҡорбанға салырға ҡушҡанһын. Яҡуп пәйғәмбәр һинең әмереңә ҡаршылыҡһыҙ буйһонған. Иосоп улының аяҡ-ҡулын бәйләгән дә уны ҡорбанға салырға әҙерләнгән. Әммә улының үҙәсен ышҡығанда, үткер бысағы үтмәҫләнгән. Ныҡ ғәжәпкә ҡалған Яҡуп пәйғәмбәр ни эшләргә белмәй ғазап сиккәндә, һин, Бөйөк Аллаһы тәғәлә, ҡорбан итеп салынасаҡ малай урынына ҡуҫҡар мөгөҙлө һарыҡ тәкәһе ебәргәнһең. Шул заманда бирле ҡуҫҡар һарыҡ тәкәһен ҡорбанға салыу йолаһы һаҡлана...

Бөйөк Аллаһы тәғәлә, беҙ, башҡорттар, ҡышты имен-аман уҙғарыу ҡыуанысынан Асылыкүл буйына йыйылдыҡ. Оло рәхмәтебеҙҙе белдереп, һинең хөрмәткә ҡуҫҡар тәкәләрҙе ҡорбан итеп салырға булдыҡ.

Бөйөк Аллаһы тәғәлә, башҡорттар һиңә бүләккә тип килтергән ҡорбанды, бал-майҙы, тары ярмаһы менән арпаны ҡабул ҡылып, беҙ йәшәгән ер-һыу байлығын киләсәктә лә ишәйт. Айыу, төлкө, бүре, һыуһар, ҡамсат, шәшке, кеш кеүек йәнлектәребеҙ урман-тауҙарҙа артҡандан-арта барһын, йылға-күлдәребеҙҙәге балыҡтар күпләп үрсеһен, игендәребеҙ умырылып уңһын, солоҡтарыбыҙҙан бер ҡасан да бал өҙөлмәһен, йылҡы көтөүенә, һыйыр малына, кәзә-һарыҡҡа зыян теймәһен. Башҡорттарҙың иркенән яҙҙыртма, Аллаһы тәғәлә! Атай-олатайҙарыбыҙҙан мираҫҡа ҡалған үҙ еребеҙгә хужа булып, мал-тыуарҙарыбыҙ менән күсенеп, ҡайғы-хәсрәт күрмәй йәшәргә яҙһын. Тыуған илебеҙҙе ҡырҙан килеүсе яман бәндәләрҙән һаҡларға ярҙам ит, башҡорттарҙы шайтандарҙан аҙҙыртма!.. Йәйләүгә күсер алдынан һабантуй уҙғарыласаҡ ергә йыйылып, һиңә белдерәсәк изге теләктәребеҙ шул, Бөйөк Аллаһы тәғәлә!

Мырҙым бейҙең һүҙе менән теләктәшлек белдергәндәй, Офоҡ ситендә бәләкәй генә норғолт болот өйөмө күренде. Уға ҙур тиҙлектә баш осо тәңгәленә яҡынлашты. Йәм-йәшел япраҡлы ҡайын ботаҡтарын енелсә сайҡалдырып, ваҡ күҙле ямғыр тамсыларын ергә һибәләне лә үтеп тә китте.

Ныҫлы ямғыр һибәләүен яҡшылыҡҡа юраусы кешеләр, КЫуаныҫ белдереп, үҙ-ара оҙаҡ ғауғалаштылар:

— Һауа беҙҙе ишетте!

— Ныҫлымыҫ ямғыр яуҙыртып, болот эйәһе ҡанатын елпеп уҙҙы!

— Былай булғас, һәммәһе умырылып уңасаҡ, мал-ҒЫуарҙарыбыҙ көр буласаҡ!..

Мырҙым бей таштабаҡҡа ҡарап йәнә баш эйҙе. Ҡуҫҡар юкәләрҙең береһен таштабаҡ эргәһенә килтереп һалып, еп менән сырмалған тояҡтарын һыңар тубығын ҡуйып ергә ҡыҫты ла муйынынан салды. Ҡуҫҡар тәкә, боғазынан урғылған ҡып-ҡыҙыл ҡан ағыуынан хәлһеҙләнгәндән-хәлһеҙләнә барып, тояҡтарын тартҡылаштырҙы ла йән бирҙе.

Күп нәмә ҡөрьән йолаһы ҡушыуынса башҡарылған өсөн күп аллаға ышаныусыларҙың ризаһыҙлыҡ белдереүҙәре һиҙеп, Мырҙым бей мәжүсиҙәргә лә яраҡлашырға ҒЫрышты. Ҡорбанға салынған ҡуҫҡар һарыҡ тәкәһенең ҡаны һарҡҡан боғазына арпа менән тары ярмаһы һирпеп, мөгөҙҙәрен май ҡатыш бал менән һыланы ла тубыҡланды һәм Ер аллаһына табынды.

— Ҡәҙерле Ер аллаһы, беҙ һиңә арпа менән тары ярМаһы, бал менән һары май бүләк итәбеҙ, һинең тау-ташлы урмандарыңды әрәм-шәрәм ҡылмаҫҡа, йәнлектәреңде һаҡларға, йылға-күлдәреңде бысратмаҫҡа, балыҡтарҙы кәрвгенсә тоторға ант итәбеҙ...

Мырҙым бей, ырыуҙаштары һәм барлыҡ башҡорттар ЦСеменән, ҡояшҡа, йылҡы аллаһына, һыйыр малы аллаһыМ.Л. ҡозә-һарыҡ көтөүе аллаһына һәм башҡа төрле аллаЦрға айырым-айырым табынған һайын, уларҙың һәр берспенә бағышлап, ҡуҫҡар тәкәне ҡорбанға салды.

Бүтән ерҙән ҡунаҡҡа килеүсе ырыу-ҡәбилә башлыҡтары менән ҡала кенәздәре лә тантаналы был минутта ҡул ҡаушырып торманы. Улар ҡорбанға салынған ҡуҫҡар тәКвтәр тиреһен һыҙырышты, тимер шешкә беркетелгән түшкәләрҙе ҡыҙыу итеп яғылған утта ҡурырға ярҙамлаштылар.

Ниелсә төтөн еҫе һеңеп, тандыр утта ҡурылған һарыҡ тәкәләренең итен ваҡ-ваҡ киҫәктәргә бүлгеләп, һабантуйҙа ҡатнашасаҡ кешеләргә ауыҙ иттерер өсөн тараттылар.

Шунан һуң ғына Мырҙым бей ҡешеләрҙе йыл да уҙғарыласаҡ байрам менән ҡотланы һәм ярҙамсыларына уйын-көлкөлө ярыштар ойоштороpорға ҡушты.

Алдан билдәләнгән тәртип буйынса, һабантуйға йыйналыусылар ике төркөмгә бүленде. Күп хоҙайға ышаныусылар төркөмөндә — ырымсылар, мосолмандар йыйылған урында муллалар менән ғилемле кешеләр хакимлыҡ ҡылды.

Ярыш уйындары башланғас, һәммәһе бергә буталды. Берәүҙәр ҡурайҙа уйнаны, йырлап-бейеп күәел асты. Икенсе төркөмдәгеләре һырғауылға менде, көрәш майҙанында көс һынашты, аттар сабыштырҙы; өсөнсөләре әйтеш ярышында ҡатнашты...

Яҙғы сәсеү эштәре тамамланыуға арналған һабантуйҙа ҡатнашыусыларҙың ҡарты ла, йәше лә, саҡ иҫ белгән сабыйы ла ҡайғы-хәсрәтһеҙ иркен тормошҡа, мул байлыҡҡа, ҡояшлы көндәр башланыуына һәм йәйләүҙәргә күсер мәл яҡынлашыуына оло ҡыуаныс кисерә.

Ошондай күңелле байрам көнөндә Аҡсабикәнең күңеле генә бойоҡ. Уның бер кем менән дә аралашырға, йырлап-бейеп танһығы ҡанғансы күңел асырға теләге булманы. Ярыштарҙа еңеүселәрҙе алҡышланып ҡотлаусылар араһында ла, ата-әсәһе эргәһендә лә, бүтән ерҙәрҙә лә йәм тапманы.

Эй иркәм бағы, Уралым, йәки ерҙең кендеге,
Барса башҡорт һиндә йәйләй, ерҙәре иркенлеге.

һиндә ағас, һиндә емеш, төрлө ниғмәт күп, имеш,
Ннн үҙең мәғдән ояһы, ҡазһалар — алтын, көмөш.

Ҡыш көнөндә һин ятаһың ҡар менән пәрҙәләнеп,
Иәй көнө бөҙҙе һунарҙың һәм йәнә ҡылға булып.

Төрлө-төрлө сәскә була һыуҙарындың буйҙары,
Шул ваҡыт бөҙгә кәрәкмәй сауҙагәр хушбыйҙары, —

тип һамаҡлаған Бөрйән ырыуы егетенең бәйетен тыңлап бетөрмәйенсә, Аҡсабикә аҡ тирмә эсенә инде. Унда ла күңел бушлығын тулыландырырҙай йәм тапмағас, ҡабарынҡы мендәргә йөҙ түбән ҡапланды ла тиктомалға үкһеп-үкһеп иларға тотондо.

Уның илауын ишетеп тирмәгә ингән әсәһе, ни эшләргә белмәйенсә, аптырап, бер тирәлә өтәләнде.

— Ҡыҙым, ни булды?

Илауҙан тыйыла алмаған Аҡсабикә, танауын тыш та мыш тартып, ауыҙ эсенән генә ыңһарҙай-ыңһарҙай, яңы ғына донъяға яралған ҡолонсаҡтай, әсәһенең ҡуйынына һырынды.

— Әсәй, әсәкәйем!..

Яҡшыбиҡә, Аҡсабикәнең ни өсөн илауын аңламайынса, бер үк һорауҙы ҡабатланы:

— Ҡыҙым, ни булды?

— Бе-бе-белмәйем... — Аҡсабикә, шәмәреп, йыш-йыш һулаңы. — Әллә ниңә күңелем тула...

— Ауырыйһыңмы әллә, ҡыҙым?

— **Белмәйем...**

— Зәхмәт тейгәндер, — тип Яҡшыбикә тирә-яҡҡа төбөрөндө. — Мулланы йәки берәй ырымсыны саҡыртайым-мы?

— Кәрәкмәй, әсәй, миңә бер кем дә кәрәкмәй! — Аҡса-**бикә**, бумалалай туҙған сәсен ялпылдатып, баш сайҡаны. — Мнн ауырымайым, иҫән-һаумын!..

— Иҫән-һау булғас, тирмә эсендә ниңә тонсоғорға? **Пар,** саф һауаға сыҡ. Кешеләрҙең ҡыуаныс-шатлыҡтар мгп.щ байрамда ҡатнашыуын күрһәң, моғайын, күңелең асылыр.

— Мин улар эргәһендә булдым, барыбер йәм тапманым!

— Ошолай ситтә ҡасып йөрөр булғас, һис юғында, ҡыҙға сгеттәрен исемләп саҡырмаҫҡа кәрәк ине.

— Саҡырып та, ҡала егеттәре һабантуйға килмәгән! Әсә, ғәжәпләнеп, бот сапты.

— Атаҡ-атаҡ... Исемләп саҡырылғас, ниңә килмәһендәр, ти?! Улар һәммәһе килгән!

Лҡсабикә, ышанырға-ышанмаҫҡа белмәйенсә, баш ҡалҡытып ҡараны.

— Ҡала егеттәрен күрҙеңме?

— Күрҙем, ҡыҙым, күрҙем, — тип дөрөҫләне әсә.

— Дәржимән дә килгәнме?

— Эйе, Сурман хандың улы Дәржимән дә килгән.

— Улар әле ҡайҙа?

— Көрәш майҙанында...

Аҡсабикәнең йөҙө яҡтырҙы.

— Дәржимән дә шундамы?

— Шунда, — тине әсә, ҡыҙыныц ни өсөн илауы сәбәбси ацлап.

Лҡсабикә башҡаса төпсөнмәне. Тирмә ишеге тәңгәленцпге көҙгө ҡаршыһында ҡабаттан төҙәнә башланы. Бит плмаларын еңелсә ҡыҙартып, ҡашына һөрмә тартты ла сәсен төҙәтте, башындағы ҡашмауын таҡты, тәңкә-мәрйен, ялтын-көмөш аҡсалар, ҡиммәтле таштар менән биҙәлгән түшенә тағыулы селтәрен төҙәткеләне, ҡолағына икенсе Іл каны алмаштырып таҡты...

Уның һәр хәрәкәтен тауыш-тынһыҙ ғына күҙәткән

әсәһе: «Бына ҡасан ғишыҡ уты ҡабынған ҡыҙымдың йөрәгенә. Уның ялҡынлы шаукымы өҙгөләндергән икән! Ҡала егеттәренең һабантуйға килеүен белгәс тә, тынысланды», — тип уйланы.

Төҙәнеп-биҙәнеп, Аҡсабикә тирмәнән сыҡты. Кешеләр шығырым тулы көрәшселәр майҙанына барғас, алғы рәткә **уҙды** һәм **күҙҙәре** менән үҙе саҡырған ҡала егеттәрен эҙләне. Улар күренмәгәс, Аҡсабикә ҡабаттан күңел төшөнкөлөгөнә бирелде. Әсәһе юрамал, тирмәлә япа-яңғыҙы бойоғоп ултырмаһын өсөн, ебәрҙе микән ни уны көрәшселәр майҙанына?

«Әсәйем дә алдашҡас, хәҙер кемгә ышанырға?» Аҡсабикә ҡарашын майҙандағы көрәшсенән айыра алманы. Күмәк кешеләр ҡамауы уртаһында ялан аяҡ, ялан баш япа-яңғыҙы торған егет таныш түгелме? Эйе, Сурман хандың улы ла баһа!

Аҡсабикә, үҙе лә аңғармаҫтан, ҡысҡырып ебәрҙе:

— Дәржимә-ән!..

Майҙан уртаһындағы егет уны таныны, ахырыһы. Таҫтамал тоткан уң ҡулын башы осо тәңгәленә күтәреп һелкте лә күп көрәштәрҙә еңеп дан яулаған ҡатай ырыуы егете менән көрәшә башланы. Ҡатай егете **үҙен** ышаныслы тотто. Дәржимәндең биленә уралған билбауҙы һығып тартҡан ыңғайы, уны ергә тәкмәстерә һуғырға маташты. Әммә Дәржимән бирешмәне, урынында ныҡ торҙо.

Көрәшселәр ҡабаланманы. Улар, баҫҡан урындарын яй, һәлмәк тапанып, бер-береһен еңеү өсөн һәр уңай форсатты файҙаланырға тырышты.

— Ҡатай көрәшсеһе еңәсәк!

— Эйе, уға тиң булырҙай көрәшсе башҡорт иленда әлегә юҡ, — тип бышылдашҡан тауыштарҙы ишеткәс, Аҡсабикәнең тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте.

«Йә хоҙай, Дәржимәнгә дәрт-дарман бир! Уны енелдереп, әҙәм көлкәһенә ҡалдырма», — тип ер йөҙөндәге барлыҡ йән эйәһен ярҙамға саҡырҙы.

Шул саҡ, ҡапыл, бөтөнләй көтмәгәндә, Дәржммән, ҡатай егетен күтәреп алған ыңғайы, бер нисә тапҡыр өйөрөлттө лә ергә күтәреп һуҡты.

Аҡсабикә көтөлмәгән мөғжизәгә ышанманы.

— Сурман хандың улы енде!

— Ҡараҡыя ҡалаһы мосолмандарының данын арттырҙы!

— Бүләктең иң өлкәне Дәржимәнгә! — тип кешеләр ғауғалаша башлағас ҡына, ул ҡала егетенең көрәштә еңеүе өсөн ихлас ҡыуанды.

Күмәк кешеләрҙең ҡысҡырышыуы яйлап-әкренләп баҫылғас, көрәш майҙаны башлығы итеп һайланған аҡһаҡалдарҙың береһе ҡысҡырып һораны:

— Көрәштә еңеүсе менән алышырҙай бәһлеүән арағыҙҙа бармы? Булһа, майҙан уртаһына сығығыҙ!

Кешеләр тауыш-тын сығарманы.

Көрәш майҙаны башлығы һорауын яңынан ҡабатланы мы, бер кем дә өндәшмәгәс. Ҡараҡыя ҡалаһы егете Дәржимәнде быйылғы йылдың иң беренсе көрәшсеһе тип иғлан итте һәм аҡһаҡалдарҙың батырға оло бүләк тапшырырға тигән әмере сығарылды.

Дәржимән эйәр ҡашы, өҙәнгеһе һәм йүгән теҙгене алтын-көмөш менән биҙәүле менге юрғаға лайыҡ булыуы тураһында көрәш майҙаны башлығы белдереү яһағас, кешеләр алҡышланып ҡысҡырышты:

— Раҫ!

— Аҡһаҡалдар әмере менән ҡәнәғәтбеҙ!..

Майҙан уртаһына ҡабаттан сыҡҡан Дәржимән, күкрәген ҡуш **ҡуллап** ҡыҫып, тәүҙә аҡһаҡалдар менән көрәш **майҙаны** башлығына, шунан һуң кешеләргә ҡарап ҡат-ҡат **баш** эйҙе.

— Рәхмәт, мең-мең тапҡыр рәхмәт һеҙгә!..

— Үҙеңә лә рәхмәт, — тип яуапланы халыҡ.

Шау-шыу баҫылғас та урынынан ҡуҙғалмаған Дәржим.ш:

— Гәйнә ырыуы кешеләренә минең бер үтенесем бар... **Мырҙым** бейҙең өлкән ҡыҙын, Аҡсабикәне, ҡатын итеп алырға ризалығығыҙҙы бирһәгеҙ ине, — тине.

Г)ындай хәл элгәре булмағанлыҡтан, кешеләр шып-**шым** ҡалды.

Дәржимәндең ҡыланышы менән ризалашмайынса, ир-**егеттәрҙең** асыуы ҡабарҙы:

— Ниндәй әҙәпһеҙлек!

— **Беҙҙең** ырыу йолаһын боҙорға ни хаҡың бар?!

— Көрәш ярышында еңдем тигәс тә, артыҡ маһайырға юйеш түгелһең!

— Кәләш алыу мәсьәләһен **беҙҙә** һабантуйҙа һорашып хәл ҡылмайҙар!..

Хаталанығын аңлаған егет, ни эшләргә белмәйенсә, яптырап:

— Аҡсабикә ырыу башлығы ҡыҙы... — тип аҡлана ғына **башлағайны,** уға һүҙ әйтергә лә мемкинлек бирмәйенсә, бүлдерҙеләр:

— Ырыу башлығы ҡыҙы, һиненсә, кеше түгелме?

— Беҙҙең йола буйынса Аҡсабикә кейәүҙе үҙе һайларға тейеш!..

Шул сағ майҙан уртаһына Аҡсабикә сыҡты.

— Дөрөҫ, кейәүҙе мин һайларға тейешмен, — тине лә, тирә-яҡҡа алан-йолан ҡаранып, һораны: — Көрәш ярышында еңеүсенән дә шәберәк егет бармы арағыҙҙа? Ниңә шымдығыҙ? Әйҙәгеҙ, уртаға сығығыҙ, беҙҙең ырыу йолаһы буйынса, миңә кейәү булырға теләүселәрҙең ярышын ҡабаттан ойошторайыҡ!

— Кем еңеүсе икәнлеге асыҡланды бит инде. Күңеледә оҡшағанын һайлап, уның менән үҙең көс һынаш, — тине аҡһаҡалдарҙың береһе.

— Ризамын! Бөгөнгө ярышта еңеүсе Дәржимән менән көс һынашырға теләйем. Көс һынашҡанда оҡшаһа, мин — уныҡы! Оҡшамаһа, биғәйбә... — тине Аҡсабикә, сәмләнеп.

Тәү тормош заманынан ҡалған йола буйынса, ҡыҙ кейәүгә сығасаҡ егетенең етеҙлеген, сослоғон һәм башҡаға һәләтлеген һынау өсөн әүәл-әүәлдән ярыш ойоштороусы булған, Аҡсабикәнең теләгенә бер кем дә ҡаршы килмәне.

— Раҫ!

— **Һәммәһе** йола ҡушыуынса уҙғарылғас, беҙ риза!..

Бындай йоланы ҡырағайлыҡ тип һанаған Дәржимән, ырыуҙаштарына яраҡлашырға, улар менән мөнәсәбәтен боҙорға теләмәүсе **ҡыҙҙы** уңайһыҙ хәлдә ҡалдырырға ҡаҡы юҡлығын аңлап, ҡыйынлыҡ менән булһа ла ризалашты:

— Ярай, мин ҡаршы түгел...

Аҡсабикә, бер аҙ көтөп торорға ҡушып, күмәк кешеләр араһына инеп юғалды, Күп тә үтмәне, егеттәрсә кейенеп, күк айғырға атланған ҡыҙ майҙан уртаһында торған егеткә табан йүнәлде.

— йә, батыр, алыш бармы, әллә көрәшме?

— Алыш та, көрәш тә бар, — тип ерән ҡашҡаһына атланған ыңғайы, ҡулындағы элмәкле арҡанды бырғытты. Әммә ҡыҙ, элмәккә эләгергә теләмәйенсә, атын етеҙ хәрәкәтләндереп, ситкә тайпылды. Дәржимән, ерән ҡашҡаһын уйнаҡлатып, **ҡыҙҙың** һул яғына сыҡты. Алға һонолоп, Аҡсабикәне эләктерҙем генә тигәндә, алғы аяҡтарын һалындырып, үрә баҫҡан күк айғыр ҡамасауланы. Икенсе, өсөнсө, дүртенсе мәртәбә лә **ҡыҙҙы** эйәренән тартып алырға уның аты ҡамасауланы. Ул, Аҡсабикәгә ҡағылырға ла мөмкинлек бирмәҫкә тырышып, ажғыра-ажғыра, Дәржимән менгән ерән ҡашҡаның осаһынан умырып тешләне, күкрәге менән килеп төртөлдө, үрә баҫты, йәки артҡы аяҡтарын һелкә-һелкә, өҙлөкһөҙ тирбәләнде.

«Мине мәсхәрәгә ҡалдырыр өсөн саҡырҙы микән һабантуйға?!» Дәржимән һөжүмен көсәйтте. Оҙаҡ ыҙалана

торғас, эйәрепән айырып алған **ҡыҙҙы** үҙ атына меңгәштереп, ул ситкә тартылды.

Шунда ҡаршылашыуҙан туҡталған Аҡсабикә, егеттең муйынынан ҡосаҡлап, белдереү яһаны:

• — Дәржимәнде һайланым. Ғүмерем буйы уға тоғро булырға һәм уның нәҫелен һаҡларға ант итәм!..

Ата-әсәһенең фатихаһын алғандан һуң, күп хоҙайҙары **менән** һаубуллашып, берҙән-бер, мәңгелек Бөйөк Аллаһы Тәғәләгә табынасағы һәм мосолмандарҙың ҡөрьәне ҡушҡанса йәшәйәсәге тураһында әйтеп, ырыуҙаштарын да ислам диненә күсергә саҡырҙы.

Ырыуҙаштары, Аҡсабикә менән теләктәшлек белдереп, уға бәхет, иман, ғүмер теләнеләр.

— Асылыкүл йәштәрҙе ҡауыштырҙы. Шуға күрә Асылыкүлгә бағышланған йырымды һеҙгә бүләк итәйем,— тип һомғол кәүҙәле егет ҡурайҙа уйнай башлағайны, уға йырсы ҡушылды:

Асылыҡай буйы, ай, аҫыл таш,
Юрмый буйҡайҙары, шул, ҡырсын таш.
Эскенәйҙәрен бошһа, йөрәгең яһһа,
Асылыкүлгә килеп лә күңел ас.

Аҡ ҡарсыға менән күк ҡарсыға
Берен-бере ҡыуып талсыға.
Ашау-эсеү менән дандар сыҡмай,
Татыу йәшәү менән дан сыға...

VII

һабантуй уҙғарылғандың икенсе аҙна уртаһында Мырҙым бей менән уның ырыуҙаштары яҙғы йортҡа күсергә әҙерләнде, ә Дәржимән кейәүе менән Аҡсабикә Ҡараҡыя **калаһына** ҡайтырға теләк белдерҙе.

— Туйға саҡлы сабыр итһәгеҙсе, — тип Мырҙым бей уларҙы көҙгә саҡлы үҙҙәре менән бергә йәшәткәһе килде.

Кейәүе менән ҡыҙы ризалашмайынса ныҡышҡас:

— йә, әсәһе, ҡалайтабыҙ? — тип ҡатынынан кәңәш **һораны.**

— Туйға тиклем кейәү үҙҙәрендә, Аҡсабикә беҙҙә йә-**Шәһә,** яйлы булмаҫмы?

— Бер-береһен яратҡан йәштәрҙе айырыу килешмәҫ, **Кәһе.** Бик теләгәстәре, әйҙә, үҙ иркенә йөрөһөндәр, — Мырҙым бей ҡул һелтәне.

Ата-әсәһенең фекерен белгәс, Аҡсабикә үҙе лә икәлә-**Неүле** тойғоларға бирелде. Ошоғаса күрмәгән, белмәгән кешеләға барырға ниңә ҡабалана әле? Туған-тыумасаларынан, зат-ырыуынан айырылып китеп, тыныс йәшәй алыр-

мы? Йәйләүгә күсмәй, иҫәпһеҙ-һанһыҙ мал көтөүе менән тулы йәм-йәшел туғай-болондарҙы күреүҙән мәхрүм булыуы, сабый сағын таныш йылға-күлдәрҙә танһығыҡ ҡанһансы һыу кермәү оло бәхетһеҙлек түгелме ни? Шул уҡ ваҡытта өҫөлөп һөйгән йәрен айҙар буйына күрмәй йәшәүе еңел булырмы? Юҡ, Дәржимәндән айырылып, бер хенә көн дә яңғыҙы йәшәй алмаҫ, уны һағынып үләсәк!..

Аҡсабикәнең икеләнеүле тойғолар кисереүен һиҙгән Дәржимәнгә лә еңел түгел ине.

— Юҡҡа өҙгөләнеп, үҙенде үҙең яфалама, һөйөклөм! Ҡараҡыя ҡалаһына ҡайтып, туйҙы ҡасан, ҡайҙа, нисек уҙғарыу хаҡында атам-әсәм менән килешербеҙ. Йәй йәйдәүҙә үткәрергә килербеҙ.

— Ҡайным менән ҡәйнәм мине оҡшатмаһа, ҡалайтырбыҙ? —тип һораны Аҡсабикә.

— Атай-әсәйем һине яратасаҡ, иманым камил! Уларҙың ризалығынан тыш, һиңә ике рәт яусы ебәрер инемме? Һабантуйға сағырып хат яҙыуынды белгәс, шатландылар!..

— Һабантуйҙа ҡатнашыуың өсөн үкенмәйһеңме?

— Унда ҡатнашмаһам, һин минең йәрем булыр инеңме? — Дәржимән һорауға һорау менән яуап ҡайтарҙы.

— Көрәштә еңелһәң?..

— Еңелерҙәй булһам, көрәш майҙанына сыҡмаҫ инем.

— **Ә мин?**

— һине, мосолмандар йолаһы буйынса, урлап алып ҡитер һәм ҡалалағы берәй мулланан никах уҡыттырыр инем.

Аҡсабикә, яғымлы йылмайып, кейәүенең киң күкрәгенә һыйынды.

— һәммәһе ыңғай, мәшәкәтһеҙ бөтөүе минең өсөн оло ҡыуаныс!

— Миңә лә ҡыуаныс!.. Беҙгә Бөйөк Аллаһы тәғәлә ҡөҙрәттәре ярҙам итте, — тип Аҡсабикәнең яурынынан ҡыҫып һөйҙө лә, никах уҡытҡанға саҡлы уны ҡосаҡлауҙы гонаһ **һанап,** хәрәкәтһеҙ ҡалды.

Бына Аҡсабикәнең тыуған төйәген ташлап китер көн дә етте.

Никах уҡытылмайынса, ҡыҙ ата-әсәнеке һаналғанлыҡтан, һаубуллашыу мәлендә кеше күп булманы. Аҡсабикәнең **тиҙҙән** ҡайтасағына өмөтләнгән әсә лә **үҙен** тып-тыныс тотто.

— Иҫән-һау йөрөп ҡайтығыҙ, балаҡайҙарым, — тип уларға уңышлы юл теләне.

Һыбайлы һаҡсыларын эйәрткән Дәржимән менән Аҡсабикә алыҫлаша башлағас та, Мырҙым бей өйөнөң ҡапҡаһы тәңгәлендә тороп ҡалыусылар таралышырға өлгөрҙө.

Ҡая ташлы бейек тау һыртына артылғанда, Аҡсабикә **бер** нисә тапҡыр артына боролоп ҡараны. Ҡуйы ағастар араъяғындағы тыуған ауылы күҙҙән юғалғас, уның күңеле **Оойоҡланды.**

Урман эсенә төпкәрәк ингән һайын, төрлөләнгәндәнкфлөләнә барған тәбиғәт күренешенә мауығып, уның күКелһеҙ уйҙары тарҡалды һәм ул үҙен донъяла иң бәхетле **Кешеләрҙең** береһе тип тойҙо. Дәржимәне эргәһендә булАнлыҡтан, тормошонда йәм өҫтәлеүенә кинәнеп, ул тирәЦКһың һулышы менән ләззәтләнде, төрлө ҡош-ҡорт сипы.пдашыуын, һандуғастың монло һайрауын, кемдеңдер күмерен һанаған кәкүк сағырыуын мауығып тыңланы. **Аиа,** бәп-бәләкәй генә ҡыҙғылт ҡойроҡло ҡошсоҡ, үҙенә генә хас саф, таҙа тауыш сығарып, юлсыларҙы оҙатып ҡуйҙы. Ул һыбайлыларҙың баш осо тәңгәленән бер уңға, бер һулға осто ла, ҙур тиҙлектә яҡынлашҡан ҡарсығанан ҡурҡып, ҡыуаҡлыҡтар араһына инеп йәшеренде.

— Был тирә ҡайһылай йәмле!

— Эйе, Башҡортостан иленең ерҙәре ҡайҙа ла һоҡландырғыс, — тине Дәржимән, ризалашып.

Оло таш аҫтынан урғылып сыҡҡан һалҡын шишмә **Мында** тукталып ял иттеләр ҙә, тынғы бирмәгән серәҡәй әр көтөүенән нисек итеп ҡотолоу әмәлен таба алма**Ёынса,** улар йәнә ҡуҙғалдылар.

Юлда барышлай әлдән-әле быҙаулы боландар, ҡоралайҙар, төлкөләр менән башҡа төрлө йәнлектәр ҙә бик йыш осраны. Улар, кешеләрҙән ҡурҡмайынса, тыныс тороп ҡалалар. Ҡарағай, кедр ботаҡтары араһында сыбалған иҫәпһеҙ-һанһыҙ тейендәр ҙә, саҡ ҡына ла тынғы белмәй, ҡышҡылыҡҡа азыҡ хәстәрләй ине.

!шбайлылар бер-бер артлы эйәртенешеп барған һукмаҡты ике яҡлап ҡыҫырыҡлаған урман һаман ҡуйырҙы. **Кин** ҡоласлы кедрҙар менән ҡарағайҙар, шыршылар, сәнс**Мле** оҙон ботаҡтарын һоноп, Аҡсабикәнең ҡулын тырнайылар, йөнтәҫ бүрек кейгән башын һыйпанылар, мәрйен, алтын-көмөш тәңкәләр менән биҙәлгән өҫтөндәге кейемдәргә ҡағылдылар.

Лгастар бер аҙ һирәгәйгәс, аҡландарҙа йәшел үлән **І глаған** йылҡы көтөүҙәре лә бик йыш осраны. Һыйырҙар мспон кәзә-нарыҡтар ҙа күбәйгәндән-күбәйә барҙы.

Аҫта, талсыбыҡтар араһынан сылтырап аҡҡан йылға ырының буйынан-буйына бер-бер артлы ҡоролған ҡыуыштар менән кейеҙ тирмәләрҙе һәм һайғауҙар менән кәртәлопеүле йорттарҙы күргәс, Аҡсабикә ҡысҡырып ебәрҙе:

— Был яҡ башҡорттары йәйләүгә күскән!

— Йәйләүгә күсер ваҡыт бит инде, — тине Дәржимән.— Май айының һәр көнө ҡәҙерле, ғәзиз.

— Ә беҙҙекеләр бер нисә көнгә һуңланы.

Аҡсабикәнең күңеле йәйләүҙәге йәм-йәшел туғай-болондарға тартылыуын һиҙеп. Дәржимән өндәшмәне.

Ошондай һоҡландырғыс йәмле көндә тирләп-бешеп бер ҡасан да күрмәгән һәм белмәгән ергә китеп барыуы Аҡсабикәгә бигерәк тә аяныс, үтә ҡыҙғаныс тойолдо.

«Ҡараҡыя ҡалаһында ниндәй яҙмыш көтә икән мине? — тип һорарға уйланы ла, ул үҙен-үҙе шелтәләне: — Юҡ өсөн ниңә өтәләнәм әле? Атай-әсәйем йәшәгән төйәктән мине бер кем дә ҡыуманы, үҙем теләгән йәрем менән бергә китеп барам бит!..»

Тирә-яҡ иҫ киткес йәмле, һоҡландырғыс. Иң ҡиммәтле хушбый еҫе анҡытҡан төрлө-төрлө төҫтәге сәскәләр араһында бал ҡорттары бал йыя, йөнтәҫ иңкештәр геүләй... йән кинәндергес ҡош-ҡорттарҙың, төрлө бөжәктәрҙең тауышы менән буталған ҡыр хайуандарының, һыйыр малдарының, кәзә-һарыҡтың баҡырышыуы һыбайлы кешеләрҙе ойота, ләззәтләндергес уй-тойголар уята...

Көн томра.

Һалҡынса ел ағымы, йылға яғынан ҡыуып килтерелгән еләҫ һауаның ағымы һыбайлыларҙың битенә һирпелеп шаяра-шаяра ла, үлән өҫтөн һыпыртып, артабан уҙа,

йәйләүҙәге эттәр, сит кешеләр яҡынлашыуын күргәс, бер-береһен уҙырырға тырышып, өрә башланы.

Тирмә ишеге янындағы ҡайын төбөндә ултырыусылар, ҡымыҙ эсеүҙән бүленеп, ҡыуаҡлыҡтар араһынан сыҡҡан һыбайлыларҙы күҙәтте.

Дәржимән, эйәренән төшкән ыңғайы, аяҡтарын салып ултырыусы ирҙәргә табан ынғайланы.

— Иҫәнмеһегеҙ, ир-уҙамандар!

— Аллаға шөкөр, үҙегеҙ ни хәлдә, мосафирҙар, — тип йәйләү хужалары берҙәм яуапланы.

— Йәйләүгә имен-аман күсеүегеҙ менән!

— Рәхмәт! — Оло йәштәге кеше урынынан күтәрелде, Дәржимән менән ҡушҡуллап күреште лә баш ҡаҡты. — Әйҙәгеҙ, рәхим ҡылығыҙ, изге ниәттә йөрөһәгеҙ, ҡунаҡ булырһығыҙ!

— Изге ниәттәбеҙ, — тине Дәржимән.

— Әйҙәгеҙ, тирмәгә инегеҙ. Эстә еләҫ.

Ҡайын төбөндәге күләгәлә ултырыусылар, урындарынан һикерешеп тороп, көтөлмәгән ҡунаҡтарға ҡаршы атланылар.

Дәржимән, тирмә ишеге тәңгәленә еткәс, яман уй менән йөрөмәүҙәрен белгертергә теләп, ук-һаҙағын, һыҙма мылтығы менән ҡылысын һәм билендәге ҡайышҡа тағыулы бысағын бауҙан сисеп ергә һалды.

Уның юлдаштары ла үҙ теләктәре менән ҡоралһыҙланғас, йәйләү кешеләре тынысланды. Тимәк, һыбайлылар уларға дошман түгел, дуҫтарса мөнәсәбәттә.

Ҡунаҡтар килеүен ишетеп килгән ҡарттар ҙа тирмәгә йыйына башланы.

— Юлдан килгән ыңғайы тамағығыҙ кипкәндер, ҡымыҙ эсегеҙ алығыҙ, — тип тирмә хужаһы менән уның әбейе ишек ч.ниәлендәге көбө эргәһендә өтәләнде.

Ағас сеүәтәләрҙәге ҡымыҙҙы эскән саҡта, һүҙҙән-һүҙ сығып, тирмәлә ултырыусылар араһында тамъян, ҡатай, бөрйән, күбәләк һәм башҡа ырыу кешеләре лә йәйләүҙәге туғандарына ҡунаҡҡа килеүселәр барлығы асыҡланды.

Дәржимән менән уның кәләше ниндәй нәҫелдән икәнлеген белгәс, йәйләүҙәгеләр олпатланды.

— Һа-ай, изге заттан икәнһегеҙ!

— Башҡорт ханы вариҫы менән ошолай ултырыуы үҙе бер ғүмер!..

Һүҙгә әүрәп, ҡасан һуғым һуйылыуын һәм ҡаҙандар тулы йылҡы ите бешерелеүен һиҙмәй ҙә ҡалдылар.

Ҡунаҡтар хөрмәтенә саҡырылған йәйләүҙәге кешеләр һыйға йыйналғас ҡына, Аҡсабикә көндөң кискә һарҡыуына иғтибар итте.

Пртәгеһе көндө лә үтә ҡунаҡсыл, хәстәрлекле йәйләү кнмеләре Дәржимән менән уның кәләшен һәм уларҙы оҙатып йөрөүсе һыбайлыларҙы ебәрергә теләмәне. Әммә Дәржимән, юлда барыусыларҙың юлда булғаны һәйбәт тип, ытргә теләк белдерҙе.

Йәйләүҙән өс-дүрт саҡрым алыҫлыҡтағы һүрән йылғаһына саҡлы оҙатып ҡалған кешеләрҙән айырылып китеүҙәренә күп тә уҙманы, ҡаршынан килгән һыбайлылар ғнркәмә осраны. Уларҙың Мазира ҡалаһы кешеләре икәнлеген белгәс, Дәржимән аптыраны.

— Аҙашып йөрөйһөгөҙмө әллә бында?

— Ҡалалағы томра һауаға сыҙамай, йәмле тәбиғәт ҡосағында яҙын-көҙөн йәшәргә теләүселәрҙең именлеген һаҡлайбыҙ, — тип яуапланы һыбайлылар төркәмә башлығы.

Уларҙан айырылып киткәс, Аҡсабикә моңайҙы.

— Ҡалала йәшәүселәр ҙә ер-һыу ҡәҙерен белә икән!

— Нисек белмәһен, ти? — Дәржимән көләмһөрәне.— Улар ҙа шул ук кешеләр бит!

— Мал да аҫрайҙармы?

— Тимерселек һәм башҡа төрлө һөнәр менән шөғөлләнмәгәндәре, әлбиттә, аҫрай!

— Яҙғы-йәйге матур көндәрҙә беҙ ҙә атай-әсәй эргәһенә ҡайтып йәшәрбеҙме?

— Һис шикһеҙ, — тине Дәржимән. — Яйы тура килгәндә, ҡасан йәй етеүен көтөп тормайынса, ҡышҡы көндәрҙә лә һинең тыуған яғыңа йыш ҡайтасаҡбыҙ, алла бойорһа!

Ситлектәге ҡошсоҡ шикелле ирке сикләнеүҙән ҡурҡҡан Аҡсабикә йылмайҙы.

— Хәсемде уртаҡлашыуың өсөн рәхмәт, — тине лә һәр ерҙең үҙенсәлекле тәбиғәт күренеше менән һоҡланыуҙы белде.

Бер генә нәмәгә лә мохтажлыҡ кисермәйенсә, ошондай бай, иркен, ирекле ерҙә йәшәүе оло бәхет түгелме ни? Ожмахҡа тиң булырҙай бүтән ил бар микән донъяла? Башҡортостандағы ер-һыу Аҡсабикәнең уйынса, бер ҡасан да бөтәсәк түгел. Ул — мәңгелек! Аллаһы тәғәлә биргән ер-һыу байлығының ҡәҙерен белеп, күнеленә оҡшаған ҡырағай хайуанды, балыҡты тот, үҙеңә эйәләштер, урман-болон тулы емеш-еләкте, төрлө-төрлө йәшелсә һа? баҡтарын йый, аша, ҡышкылыҡҡа киптереп һаҡла — тик **йыбанма...**

— Йонсоманыңмы? — тип һораны Дәржимән.

— Юҡ. — Уйҙарынан бүленеп, Аҡсабикә баш сайҡаны. Әрәмәлектәге тау йылғаһы ярына етер саҡта ҡолаҡтарын ҡарпайтып, тирә-яҡҡа һағайышып ҡараған аттар ҡапыл аҙымдарын яйлатты.

— Алда йәнлек-маҙар бар микән әллә?

— Йәнлектәргә аттар улай аландамай, сит кешеләр барлығын тояларҙыр, — тине Аҡсабикә.

Ҡырсынды шығырҙата баҫып, яр аҫтындағы йылға уртаһына еткәс, Дәржимән менгән күк айғыр һыу эсергә туҡталды. Бер нисә мәртәбә башын ҡалҡытып ҡараны **ла,** ҡапыл тынысланып, мороно менән йәнә һыуға һонолдо.

Икенсе ярға сыҡҡас, Дәржимән Аҡсабикәгә һораулы ҡараш ташланы.

— Сайынып алырға теләгең юҡмы?

— Барын бар ҙа, ирҙәр араһында миңә йәпһеҙ.

— Беҙ — ошонда, ә һин аулаҡ урында яңғыҙың һыу ннерһең, — тип Дәржимән эйәренән төштө.

Танһыҡтарын ҡандырғансы һыу ингәс тә, улар китергә ҡабаланманы. Йылға ситендәге яҫы таш аҫтына ҡул тығып айғолаҡтарынан эләктерелгән аршин оҙонлоғондай шамбылар менән шаршылағы бәрҙеләрҙе мәскәүләп тоткас, таҙартып-йыуып үҙҙәре менән йөрөткән суйын көршәктә бешерҙеләр ҙә, сиҙәмгә ултырып, ашанылар. Аша-

гиндан ҡалған балыҡты яҡын-тирәлә осҡан ҡоштарға ҡалдырырға ҡушып, Дәржимән күк айғырына атланды.

Ҡуҙғалып киткәс, күк айғыр йәнә тынғыһыҙлана башланы. Юртып барышлай һөрән һалып кешнәне. Уға яуап итеп бүтән ерҙәге аттыц тауышы ишетелде.

Күп тә уҙманы, ҡаршы яҡтан килгән һыбайлыларҙы **Күреп,** Дәржимәндең һаҡсылары ҡоралдарына йәбеште. **Әммә** уларға алышырға тура **килмәне.** Ҡаршыға килеүсе һыбайлыларҙың башлығы, яҡшы ниәт менән йөрөүҙәрен белгертеп, үҙе башлап мосолмандарса иҫәнләште:

— Әссәләмәғәләйкүм!

— Вәғәләйкүм әссәләм, — тип яуапланы Дәржимән.

— Иҫән-һау йөрөйһөгөҙмө?

— Аллаға шөкөрбөҙ. Үҙегеҙ ни хәлдә, ир-уҙамандар?

— Беҙ ҙә ҡапылда арыу.

Башына кейеҙ ҡалпаҡ, аяғына тула ҡуңыслы ҡата, өҫтенә аҡ сәкмән кейеп, уҡ-һаҙаҡ, ҡылыс-һөңгө менән ҡоралланған һыбайлыларҙың башлығы, Дәржимәндең **Тургылан** хан улы икәнлеген белгәс, яғымлыланды.

— Беҙ Юрматы ырыуы кешеләре, — тип үҙҙәрен та-**Ныштырҙы** ла Дәржимән менән уның юлдаштарын йәйләүҙә йәшәүселәр эргәһенә ҡунаҡҡа саҡырҙы.

— Рәхмәт, беҙ яңыраҡ ҡына ял итеп, тамаҡ туйҙырҙыҡ. Зинһар, ғәйепкә алмағыҙ, икенсе тапҡыр **килгәндә Цотлаҡ** һуғылып китербеҙ, алла бойорһа, — тине лә, яйын ҡура килтереп, Дәржимән һораны:

— Юрматы ырыуы кешеләре мосолманмы ни?

— Эйе, Юрматы ырыуы кешеләренең күбеһе мосолм.|н. Ҡалғандары, ислам диненә әлегә күсмәһәләр ҙә, ба-**Яларын** мәҙрәсәләрҙә уҡыталар, мәсеттәргә йөрөүҙән дә тыймайҙар. һәр ауылда тиерлек мәсет, мәҙрәсә һалына. 0 Гәйнә ырыуы араһында мосолманлыҡ нисек тарала?

— Маҡтанырлыҡ түгел, — тине лә, Аҡсабикәне уңай-**Ыңғ** хәлдә ҡалдырмаҫ өсөн, Дәржнмән һүҙ йүнәлешен үҙгәртте. — Юрматы мосолмандарына Ҡараҡыя ҡалаһы мо-**Ьолмандарының** сәләмен тапшырығыҙ!

— Иншалла, тапшырырбыҙ, мотлаҡ тапшырырбыҙ, — тип хушлаштылар ҙа һыбайлылар артабан киттеләр. — **Кызыр-Ильяс** булһын юлығыҙ!

Дәржимәндең мәҙүсиҙәр һәм мосолмандар менән уртаҡ тел таба белеүенә, тиҙ арала дуҫлашыу һәләтлегенә ыжәпләнгән Аҡсабикә үҙенең күп нәмәне аңлауҙан мәхрүмІ нкәнлеген тойҙо.

— Баяғы һыбайлыларҙың башлығы: «һеҙгә Хызыр-**Ильяс** юлдаш булһын» тип оҙатты. Ниңә улай әйтте икән? **Кызыр-Ильяс** нимә тигән һүҙ?

— Хызыр-Ильяс, икеһе бер туған, ағалы-әнеле пәйғәмбәрҙәр. Береһе юлда барыусыларҙы бәлә-ҡазанан һаҡлай, икенсеһе һыуҙағыларҙы... Шуға күрә сәфәр йөрөүселәрҙе, бәлә-ҡазанан һаҡлатыу өсөн, Хызыр-Ильяс булһын юлдашың, тип оҙаталар.

— Башҡорттарҙың боронғо тормошо тураһында ла пәйғәмбәрҙәр яҙып ҡалдырғанмы әллә?

— Юҡ, башҡорттарҙың боронғо тормошо хаҡында беҙҙең илгә килгән ғәрәп ғалимдары яҙған. Уларҙың береһе, мин уҡып белгәндәрҙән, Әхмәт ибн-Фаҙлан...

— Ул Башҡортостанда ҡасан булған?

— Өс йөҙ йыл самаһы элгәре.

— О-о, уның Башҡорт иле буйлап йөрөүенә өс йөҙ йыл уҙғанмы ни? — Аҡсабикә ғәжәпләнде.

— Уҙған шул, — тип дөрөҫләне Дәржимән. — Ғәрәп илсеһе Әхмәт ибн-Фаҙлан яҙмаларынан күренеүенсә, башҡорттарҙың байтағы мосолманлашҡан булған. Әммә әле лә ислам диненә күсеү һаман тотҡарлана, ҡалаларҙан алыҫ ерҙәрҙә йәшәүсе ырыу башлыҡтарының аңы сикле булыуҙы аңлата был...

— Минең атайым да аңһыҙмы ни? — Аҡсабикә үпкәләпе.

— Ҡайнымды улар рәтенә индермәйем. Ул бәҙге бер ҡала мосолмандарына ҡарағанда ла белемлерәк. Әммә ҡайным үтә һаҡ ҡылана, ырыуҙаштары араһында ислам динен нығлап таратыуҙан ҡурҡа.

— Көслөк менән мосолманлаштырыу яраймы ни кешеләрҙе?

— Тотошлай мосолманлаштырмайынса, башҡорттарҙы наҙанлыҡтан ҡотолдороу мөмкин түгел, ҡәҙерлем. Күпселек ырыу башлыҡтары, шуны аңларға теләмәйенсә, бер-береһе менән һирәк аралашалар, ә ситтән килгән кешеләрҙе үҙҙәренә яҡын ебәрмәҫ өсөн һәр ерҙә һыбайлы һаҡсылар йөрөтәләр. Хатта Әхмәт ибн-Фаҙланды оҙатып йөрөүсе мосолман динендәге бик уҡымышлы башҡорт та, төрлөсә хәйләләшеп, Башҡортостандың эске өлөшөнә уҙғарырға теләмәгән уны. Әхмәт ибн-Фаҙлан ул замандағы башҡорттарҙың тыуған ил именлеге һағында нык тороуҙары, ситтән килеүселәргә үтә иғтибарлы, ҡунаҡсыл, ә яманлыҡ ҡылыусыларға ҡарата кәрәгенән артыҡ уҫал һәм мәрхәмәтһеҙ булыуҙары тураһында яҙа...

— Башҡорттарҙың уяулығы әүәл замандан килә икән!

— Эйе, борон заманда, — тип ризалашты Дәржимән. — Әммә бәҙге бер ырыуҙарҙың ислам диненә ҡарағанда мәжүсилекте өҫтөн күреүҙәре, Башҡортостан ҡалаларында йәшәүсе мосолмандар һәм ғәрәп илдәре менән

ҙың ыҙ бәйләнештә булырға теләмәүҙәре башҡорттар файҙаһына түгел. Улар үҙҙәре һайлап ҡуйған Башҡортостан Ҡаны хоҡуғын дөйөм йыйын ҡарары менән сикләнеләр, Башҡорт дәүләте әмеренә буйһонмаҫҡа маташалар.

— Башҡорт ырыуы башлыҡтары хоҡуғы ла йыйын мәсьәлә сикләнгәс, ҡалайтһындар, бында ла шулайҙыр инде? — Нисек кенә булмаһын, бындай хәл тотош ырыуҙарҙың Башҡорт дәүләте тирәһендә нығлы берләшеүгә, кешеләрҙең аң-белеме һәм мәҙәниәте үҫешенә бик нык ҡамасаулай, — тине Дәржимән. — Мәңгелек Бөйөк Аллаһы тәғәләгә ихлас күңелдән ышанып, ырыу башлыҡтары бер-бер ханға буйһонғанда һәм хан дәрәжәһе йыйындан өҫтөнөрөк торғанда ғына тейешле маҡсатҡа ирешергә мөмкинлек тыуасаҡ!

Дәржимән менән Аҡсабикә һөйләшкәнгә ҡыҫылмай шым ғына барған һаҡсылар башлығы сыҙаманы, ғәфү үтә:сп, һораны:

— Башҡорттар ҡасандан бирле йәшәй икән был ерҙә?, Дәржимән, йүгән тешенен шаҡара тартып, юртып барған күк айғырын аҙымға күсергәс кенә, һүҙҙе алыҫтан Спшланы.

— Тик ятҡан таш мүкләнә, йыш ҡуҙғалтылған шымарл, ти. Ғәрәп илдәрендә күп тапҡырҙар булырға тура килгәнлектән, миңә лә башҡорттар тураһында күпте ишетергә:.) һәм ғалимдар яҙып ҡалдырған боронғо китаптарҙы уҡырға насип булды... Туғыҙынсы-ун беренсе быуаттарҙа Ибн-Русте һәм Гардизи тигән ғалимдарҙың яҙмаларынан күренеүенсә, Башгирд исемле сардар[1], ике мендән ашыу Һыбайлыны һәм Каспий меңән Арал диңгеҙҙәренә яҡын ерлә-ҙәге Урта Азия далаларында йәшәүсе күмәк кешеләрҙе эйәртегг, әлеге беҙ төйәк иткән Башҡортостанда нигеҙ ҡорғандар. Уларҙың башлыҡтары Башгирд тип йөрөтмгән. Аҙаҡтан, күп быуаттар уҙғас, шул сардарға эйәреүсе барлыҡ кешеләргә «башҡорт» атын ҡушҡандар...

Дәржимән һүҙгә мауыҡты.

Дүртенсе-бишенсе быуатта йәшәгән башҡорттарҙың тормошон, көнкүрешен генә түгел, хатта уларҙың башлыҡтарының исемен ғәрәп ғалимдары яҙып ҡалдырғанды өтөп алған Дәржимәндең күпте белеүе Аҡсабикәне ғәжәпләндерҙе.

«Кейәүем һоҡланғыс кеше, аҡыллы, ә мин, уның менән сағыштырғанда, тома наҙан, һәр яҡлап кәм һәм түбән», — тип уйлап, Аҡсабикә күңел төшөнкөлөгөнә бирел-

[1] *Сардар* — ғәскәр башлығы.

де. «Үҙенә тиң булырҙай бүтән ҡыҙҙы нинә тапманы икән Дәржимәы?»

Аҡсабикәнең болоҡһоуын һиҙеп, Дәржимән боронғо башҡорттар тормошона бәйләнешле ваҡиғаларҙы бәйән итеүҙән туҡтала, мәгәр һүҙ дилбегәһен һаман тарих төпкөлөнә тартты.

— Мәхмүт Ҡашғариҙың «Диуану легәт әттөрк»[1] тигән хеҙмәтенән берәй өҙөк уҡып ишеттерәйемме? Ун беренсе быуатта йәшәгән атаҡлы ғалим һәм әҙип булған ул.

— Уҡы, тыңлайым.

— Уҡыйым, вә ләкин барығыҙ ҙа тыңлағыҙ, — тине лә Дәржимән төркисә уҡырға тотондо.

Иикитләрик эшлату
Ииғаш йәмиш ырғату
Ҡулан кәйик авлату
Бәзрәм ҡылыб авиа.чнм.

Оттуз нчиб никрәлим
йукар кубуб сәкрәлим
Арысланлайу көкрәдем
Ҡачты саҡинәк сәвиәлем...

Егеттәрҙе эшләтеп,
Ағас емеше ырғытып,
Ҡолан кейек аулатып,
Байрам ҡылып уйнаныҡ.

&с ҡат эсеп кикерҙем,
Юғары ҡубып һикерҙем,
Арыҫландай үкерҙем —
Ҡасты һағыш — һөйөндөм... [2]

VIII

Башҡортостан ханлығының баш ҡалаһы Ҡараҡыя Күгизел-Дим йылғаһы яры буйындағы ҡалҡыулыҡта [3] урынлашҡан. Бейек ҡойма-ҡәлғә менән уратып алыныулы ағас ейҙәр төҙөк һәм **иркен.** Башҡорт ырыуҙары башлыҡтары үҙ-ара ыҙғышҡанда, берәй ырыу кешеләре бәләҫ-ҡазаға тарыҡҡанда йәки бүтән төрлө мәсьәләне хәл ҡылырға кәрәк булғанда Ҡараҡыя ҡалаһында уҙғарылған **дөйөм** йыйында тикшерелде.

Ситтән дошман яуы килгән саҡта Ҡараҡыя ҡалаһы бер урындан икенсе урынға күсереп йөрөтөлгән. Тыныслыҡ урынлашыу менән, ул ҡабаттан ошо ергә күсерелеп,

[1] «Төрки телдәр һүҙлеге».
[2] һуңғы ике строфа башҡорт телендә.
[3] Бәгзе бер мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Ҡараҡыя ҡалаһы хәҙерге Йоматау тирәһендә булыуы ихтимал.

Һәммәһе тиҙ арала төҙөкләндерелгән булған. Бына хәҙер, **Аллаға** шөкөр, байтаҡ йылдарҙан бирле Ҡараҡыя ҡалаһы **бер** урында тора һәм уны бер кем дә борсомай.

Ҡараҡыялағы тормош, бүтән башҡорт ҡалаларындағы шикелле, Дәржимән иҫ белгәндән башлап, бер ниндәй **үҙгәрешһеҙ** үҙ яйына бара ла бара. Бөтөн нәмәне йыйған **хәл** ҡылғанлыҡтан, Дәржимәндең атаһы Сурман хан ырыу **башлыҡтарының** эшенә артыҡ ҡыҫылмай, һәммәһен уларҙың үҙ яйына ҡуйған. Сөнки Башҡортостан ханлығындағы бөтөн ер-һыу байлығы барлыҡ башҡорттарҙыҡы **һаиала.** Шуға күрә улар йыл әйләнәһе буйына **үҙҙәре** теләгән ерҙәрҙә мал-тыуарҙары менән күсенеп йөрөргә хаҡлы. Ситтән яу килгәндә генә башҡорт ырыуы башлыҡтары йәки ҡалаларҙағы бей-кенәздәр Сурман хандың бойороғона ҡаршылыҡһыҙ буйһонорға һәм ул ҡушҡандарҙы тайпылышһыҙ бойомға атҡарырға бурыслы. Әммә дошман яуына ҡаршы барырға теләү-теләмәү мәсьәләһе бәгзе **бер** ырыуҙарҙың үҙ иркенә ҡуйылған, ә яуҙа ҡатнашыусылар —тулыһынса хан ҡарамағында...

Ситтән яу булыры һиҙелмәгәндә, һәр ерҙә тыныслыҡ, тәмһеҙлек хөкөм һөрә. Ҡала менән ҡала, ырыу менән **Ырыу** ғына түгел, бер ғаиләләге ир менән ҡатын һәм **бала-саға** тигеҙ хоҡуҡлы һанала. Уларҙы мыҫҡылларға, **кешелек** сифатын кәмһетергә йәки алама эш ҡылырға **мәжбүр** итергә бер кемдең дә хаҡы юҡ.

Ҡараҡыя ҡалаһына яҡынлаша башлағас, Дәржимәндең белеш-таныштары йыш осраны. Улар, саҡ ҡына ла ыртынмайынса, Аҡсабикәгә һоҡланып ҡаранылар, ҡайһы **ырыуҙан,** кем затынан икәнлеген һорашып белешергә тырыштылар.

«Ҡала кешеләре, мосолман булһалар ҙа, уғата бәйләнсектәр икән! Ғүмере буйы ҡыҙ затын күрмәгән шикелле ҡыланалар», тип эстән генә асыуы ҡабарһа ла, бер аҙ күнеккәс, Аҡсабикә ирҙәрҙең һынаулы күҙ ҡарашына артыҡ иғтибар итмәне.

Күккә һонолған манаралар осондағы ураҡ-айҙы беренсе тапҡыр алыҫтан күргәс, Аҡсабикәнең йөрәге йыш-йыш тибә башланы, еңелсә тулҡынланыуын һиҙҙе. Ҡәлғә ҡапҡаһынан тоткарлыҡһыҙ үҙып, күркәм мәсеттәр менән мәҙрәсәләргә яҡынлашҡанда ла уның тетрәткес уй-тойғолары кимемәне, киреһенсә, артҡандан-арта барҙы. И, тәңре!.. Күңеленең ислам диненә тартылыуы ошо микән ни? Мосолмандарға аң-белем биреү, таратыу үҙәгенә әүерелгән мәсеттәр менән мәҙрәсәләр, ысынлап та, изге, иҫ киткес матур, һоҡландырғыс һәм күңелде үҙенә йәлеп иткәндәй тойолдо.

Төшкө намаҙға килеүсе мосолмандар менән дин әһелдәре, Дәржимәнде алыҫтан танып, оло ихтирам менән баш эйҙеләр.

— Әссәләмәғәләйкүм!

— Вәғәләйкүм әссәләм! — тип яуапланы Дәржимән.

— Юлың уңдымы?

— Аллаһы тәғәләнең ҡөҙрәттәре ярҙамында, уңды!

— Уңғас, иншалла!..

Ауылдағы тыныслыҡҡа өйрәнгән Аҡсабикә, ҡала урамдарында кешеләр күплеген күреп, ғәжәпләнде.

— Ҡала шау-шыулы. Ошондай тауышҡа кешеләр нисек сыҙай икән?

— Бүтән көндәрҙә ҡала урамдары тыныс була. Бөгөн йома, мосолмандарҙың ял көнө. Ҡала баҙарына ситтән дә күпләп киләләр, — тине Дәржимән.

— Берәй баҙарға һуғылып китмәйбеҙме?

— Юлдан **килгән** ыңғайы килешмәҫ. Аҙаҡтан, бер аҙ *хәл* йыйғас, **һәммәһен** иркенләп йөрөп күрербеҙ, Алла бойорһа.

— Иген сәсмәй, мал аҫрамай, һунарға йөрөмәй, нисек лтеп тамаҡ аҫрай икән ҡала халҡы?

— Кәрәк-яраҡлы нәмәләрҙе баҙарҙан һатып алалар.

— Уларҙы һатып алыу өсөн аҡса кәрәкмәйме ни?

Аҡсабикәнең бер ҡатлылығына, ҡала тормошон күҙ алдына килтерә алмауына Дәржимән көлөмһөрәне.

— Ҡалала йәшәүселәрҙең дә үҙ һөнәре бар, ҡәҙерлем, — тип шыбырланы ул, үҙен тәбрикләүселәргә ҡул болғап иҫәнләшкән арала. — Сауҙагәрҙәр һатыу итә, бүтәндәр мәғдәнселек[1] һәм төрлө-төрлө һөнәрселек эштәре менән шөғөлләнә. Уларҙың күпселек өлөшө иреткән баҡырҙан, тимерҙән, алтын-көмөштән, ҡорос менән ҡуланан[2] алҡа, беләҙек, йөҙөк, муйынсаҡ, түшелдерек менән сәсмәүҙе һәм башҡаларҙы биҙәү өсөн иң ҡиммәтле нәмәләрҙе эшләйҙәр. **Үҙебеҙҙә** үтмәгәндәрен Сәйен Йорт баҙарына алып барып һаталар.

Аҡсабикә, юҡ-бар нәмәләр тураһында һорашыуҙан тыйылып, байрамса кейенгән ҡала кешеләренең үҙ-ара мөнәсәбәтен, уларҙың буй-һынын ныҡлы иғтибар менән күҙәтә башланы. Сәстәре бәке менән тап-таҡыр итеп ҡырылған ирҙәрҙең башында алтын-көмөш менән биҙәлгән кәпәс-теүәтәй. Ҡайһы берҙәре, кәпәс өҫтөнән кейеҙ ҡалпаҡтарын сисеп, ялтасланған тап-таҡыр баштарындағы тир тамсыларын ус менән һыпыралар. Сит-сото киҫеүле

[1] *Мәғдән* — руда.

[2] *Ку.га* — бронза.

кейеҙ ҡалпаҡты кәпәс өҫтөнән ошондай эҫе көндә кейеү — **ислам** диненә табыныу йолаһын аңлатмай микән?

Күпселек ирҙәр аҡ күлдәк өҫтөнән еңһеҙ кәзәки кейгән, **бяҡтарында** тула ҡуныслы ҡата һәм бейек үксәле итек. **Балтырҙарын** ҡаплап торған оҙон балаҡлы ыштан ҡатын-**ҡыҙҙын** ислам динендә икәнлеген аңлата, ахырыһы. Уларҙың бәберкәле күлдәк өҫтөнән кейеүле камзулдары уҡалы ҡайтан, алтын-көмөш аҡсаларҙың ситен тишеп биҙәлгән, ҡтәге ситенә йәнлек тирене тегелгән. Һәр бер ҡатындың түшендә — мәрйен, алтын-көмөш, һирәк осрай торған ял-и.фауыҡлы таштар менән сыбарлапған түшелдерек. Ҡашмауҙары — нәфислектең иң юғары **билдәһе.** Оҫта ҡуллы кешеләр һәр нәмәнең асылына төшөнөп эшләгән уларҙы. **Кашмау** артындағы оҙон сәсмәүгә тағылы көмөш тәңкәләр ҙә, ҡояш нурҙарына сағылып, күҙ яуын ала. Алмас һырға менән көмөш беләҙектәр ҙә ҡатын-ҡыҙға килешеп тора.

«Миңә лә мосолман ҡатындары шикелле биҙәнергә яҙмаған микән», — тип уйланы Аҡсабикә.

— Ҡатын-ҡыҙ өҫтөндәге барлыҡ биҙәүестәр бында ошлəнəме?

— Эйе, **үҙебеҙҙә,** — тине Дәржимән, ғорурлыҡ менән. — Бүтән ҡалаларҙа ла оҫта ҡуллы кешеләр бармы?

— Башҡорт ҡалаларында оҫталар бөтәһе түгел. Улар ошлəгəн күпселек биҙәнеү әйберҙәре Сәйен йорт баҙарына һәм ғәрәп илдәренә оҙатыла.

Ҡала уртаһындағы ике ҡатлы хан һарайына яҡынлаша башлағас, Дәржимән менән Аҡсабикә, һөйләшеүҙән ГЫЙылып, бейек тимер ҡапҡа тәңгәлендәге һаҡсыларҙың йүгсрешеүен күҙәттеләр.

— Дәржимән кәләш алып ҡайтып килә!

— Уларҙы һәйбәтләп ҡаршылайыҡ, — тип ҡыскырыша-ҡыскырыша, тимер ҡапҡаны ике яҡҡа шар асып ебәрҙе-**Йәр.**

— Рәхим итегеҙ!..

Д;>ржимән, эйәренән төшкән ыңғайы, үҙҙәрен ҡаршыҡ алыусылар араһында торған ата-әсәһе менән иҫәнләшеп, уларҙы Аҡсабикә менән таныштырҙы. Шунан һуң ғына башҡалар менән күрешеп сыҡты.

Дәржимәндең әсәһе һөйөмбикә Аҡсабикә эргәһендә өтəонде.

— Эй, килен балаҡай, хоҙай тәғәләнән булып, еңел яғың менән изге мосолман еренә баҫ, — тип, уның арҡа-**ҺЫЙан** һөйә-һөйә, ҡатын-ҡыҙ өсөн тәғәйенләнгән кәртә өсендәге айырым йортҡа алып инде.

Улар күҙҙән юғалғансы тауыш-тын сығармаған Сурман хан Дәржимәнгә ҡарап эйәк ҡаҡты.

— Иә, улым, эштәр ҡалай?

— һәммәһе ыңғай, атай!

— Иншалла! Аҙаҡтан иркенләп һөйләрһең, улым. Әлегә беҙҙе ҡунаҡтар көтә.

— Ниндәй ҡунаҡтар? — Дәржимән ғәжәпләнде.

— Оноттоң дамы ни? — Сурман хан, улын шелтәләп, баш сайҡаны. — Төрөк иленән киләсәк оло вазифалы хәлфәләрҙе нисек итеп ҡаршылау тураһында кәңәшләшергә килешкәйнек бит. Бына шул мәсьәлә буйынса ҡала бейҙәре менән яҡын-тирәләге ырыу башлыҡтары йыйналды.

— Улар әле беҙҙәме?

— Беҙҙә, — тип Сурман хан Дәржимәнде ҡунаҡтар йыйналған бүлмәгә алып инде.

Кәцәшмә оҙаҡ барманы.

— Лә иллоһа иллола-а-а!.. тип киске намаҙға мосолмандарҙы саҡырған мәзиндең яңғырауыҡлы көр тауышы ишетелгәс тә, кәңәшмәлә ҡатнашыусылар, тиҙ генә тәһәрәт алып, мәсеткә китергә йыйнала башланылар.

IX

Ҡала тормошона Аҡсабикә йәһәт эйәләште.

Ислам динен ҡабул итеп никах уҡытылғандан һуң, ата-әсәһе, туған-тыумасалары, айырым ырыуҙаштары ҡатнашлығында төрләтеп туй уҙғарылды. Шунда ғына ҡала мосолмандары менән бер тигеҙ хоҡуҡлы икәнлеген аңлап, ул тынысланды һәм ислам дине ҡағиҙәләрен тиҙерәк үҙләштерергә тырышты. Ғәрәпсә уҡырға-яҙырға, ҡөрьән сүрәләрен ятҡа уҡырға өйрәнеүе Аҡсабикәгә ҡыйын булманы. Зирәк һәм илгәҙәклеге арҡаһында, уны ҡайны менән ҡәйнәһе генә түгел, хан һарайындағы барлыҡ кешеләр ҙә өҙөлөп яратты.

Ислам диненә күсеүе Аҡсабикәгә бер ниндәй ҙә ҡыйынлыҡ тыуҙырманы, иркен дә сикләмәне. Ул үҙ ыңғайына йәшәне, төрлө хужалыҡ һәм өй эштәрен башҡарыуҙан да тартынманы. Ҡатын-ҡыҙ күмәк йыйылғанда танһығы ҡанғансы уйнап күңел асырға, йырларға, бейергә, ҡурайҙа уйнарға, думбыра ҡылын сиртергә лә оҫтарҙы. Ире менән бергә бүтән ҡалаларҙа һәм ғәрәп илдәрендә булған саҡта ғилемле кешеләрҙе осратып, улар менән яҡындан аралашыуы ла Аҡсабикәгә күп нәмәне белергә һәм асыҡларға мөмкинлек бирҙе. Ул барлыҡ яҡшылыҡты, мәҙәниәт яңылыҡтарын үҙләштерергә, ҡанына һеңдерергә һәм үҙе күреп белгәндәрҙе яҡташтары менән уртаҡлашырға ашҡынды. Сурман хандың оло дәрәжәһен, абруйын файҙаланып, ырыуҙаштары йәшәгән бер нисә ауылда, Түңгәүер, Үҙәргән, Әй, Күбәләк, Ҡатай, Табын, Тамъян, Мең ырыуҙары араһында ислам динен таратыу өсөн бик күп көс һалды, мәсет-мәҙрәсәләр төҙҙөрөп, ундағы бала-сағаны тәрәпсә уҡытыу өсөн ҡалаларҙан муллалар ебәртте.

— Алыҫ ғәрәп илдәренән үрнәк алам тип, беҙгә әллә кайҙа йәрөргә лә кәрәкмәй. Теләге бар һәр башҡортҡа ут күршебеҙ Болғар иленең бөйөк ҡалаһы Сәйен Йортҡа барып, ундағы уҡымышлы кешеләрҙән дә бик күп нәмәгә ейәнергә мөмкин. Улар менән йыш аралашыу минең өсөн дә фәһемле,— тип яҡташтарын өгөтләүҙән туҡталмайынса, Аксабикә яйы тура килгәндә Сәйен Йортҡа бармай ҡалмыны.

Умдағы таш йорттар, алтын ялатылған ураҡ ай бер-Кстелгән оҙон манаралы мәсеттәр, күркәм мәҙрәсәләр, гирлө тауарҙар, аҙыҡ-түлек, тәм-том, йөҙөм емеше, ҡарҡ ҡауын, емеш-еләк, йәшелсә шығырым тулы кибеттәрҙә йәнең теләгән нәмәне күрергә һәм һатып алырға мөмкин. Сәйен йорттағы баҙарҙарға сит ил сауҙагәрҙәре бик күп йыйналғанлыҡтан, солоҡтарҙағы бал ҡорттары шикелле, геү-гөж килеп ҡайнайҙар.

Башҡортостанда ла Болғар иленең Бөйөк ҡалаһына тиң булырҙай таш ҡала төҙөү тураһында хыялланған Аҡсабикә үҙ фекерен әйткәс, Дәржимән оҙаҡ уйланып ултыруы. Шунан үтә тәүәккәл, ҡыҙыу ҡанлы ҡатынының күңелен табырға тырышып, тыныс ҡына аңлатты:

— Башҡорт иле шарттарында таш ҡала төҙөү, минеңсә, ярамаҡһыҙ.

— Ни өсөн?

— Сәйен йорт шикелле оло таш ҡала һалдыртһаҡ, сауҙагәрҙәр менән бергә яман уйлы килмешәктәр килеп тулғасаҡ, ас-яланғас кешеләр күбәйәсәк һәм аҙғынлыҡ тартасаҡ. Улар ер-һыу байлыҡтарын да әрәм-шәрәм итәсәк. Шуға күрә беҙгә, башҡорттарға, килмешәктәрҙе, ымһындырмаҫтай ваҡ ҡалаларҙа йәшәүе уңайлы. Яу-маҙар килә ҡалһа, ағас ҡалаларыбыҙҙы бер урындан икенсе урынға күсереп йөрөтөргә лә яйлы. Йөҙ илле-ике йөҙ йыл самаһы элгәре, башҡорт ырыуы башлыҡтары бер-береһен ҡушһыпмай, үҙ-ара өҙлөкһөҙ һуғышҡан заманда, Ҡарақурғаны ҡалаһы хәүефһеҙ ергә дүрт тапҡыр күсерелгән.

— Беҙ таш ҡала һалдырыуҙан ҡурҡабыҙ, ә Сәйен Йортто төҙөүселәр ниңә ҡурҡмаған? — Аҡсабикә аптыраны.

— Болғарҙарҙың күсенеп йөрөрҙәй иркен ере юҡ, бик оҙ һанлы кешеләре лә Сәйен Йорт эргәһендә уҡмашып

йәшәй. Шуға күрә улар өсөн оло таш ҡала һалдырыу һәм бейек таш ҡойма менән уратып алыу, ҡойманың тирәяғын дошманды яҡын ебәрмәҫтәй итеп нығытыу мөһим эштәрҙең береһе һаналған. Ә күп һанлы башҡорттарҙың тормошо болғарҙарҙыҡы менән сағыштырғанда бөтөнләйгә айырыла. Улар, икһеҙ-сикһеҙ бай ерҙәре күплегенән файҙаланып, мал-тыуарҙары менән өҙлөкһөҙ күсенеп, бер-береһенән айырым, тарҡау йәшәргә ғәҙәтләнгән... Башҡорт ырыуҙары түгел, хатта беҙҙең ханлыҡтағы һәр ҡала үҙ аллы, бер кемгә буйһонмай йәшәргә тырыша. Ошондай шарттарҙа Сәйен Иортҡа тиң булырҙай таш ҡала төҙөргә мөмкинме? — тип һораны ла, Аҡсабикә яуап ҡайтармағас, Дәржимән һүҙен дауам итте: — Бәхетһеҙлеккә ҡаршы, башҡорттар араһында борон заманда ла татыулыҡ булмаған, ырыу-ҡәбилә башлыҡтары бер-береһенә ҡаршы унар-егермешәр йылдар буйына һуғышҡандар. Оло Иҙел— Урал араһындағы ерҙә йәшәүсе мосолман динендәге башҡорттарҙы бындай ыҙғыш-талаш ялҡытҡан. Уларҙың күпселек өлөшө кенәз Би Хәсән менән бергә Венгрияға күсеп китергә мәжбүр булғас ҡына, Башҡортостанда тыныслыҡ урынлашҡан. Башҡортостандан унда күсеп барыусыларҙың күбеһе мосолманлыҡтан христиан диненә күсерелгән һәм улар мадьяр телендә һөйләшә башлағандар.

— Венгриялағы башҡорттар үҙ телен бөтөнләйгә онотҡандар түгелме?

— Әлегә онотмаһалар ҙа, тора-бара онотасаҡтар һәм тел менән бергә уларҙың башҡортлоғо ла юҡҡа сығасаҡ, — тине Дәржимән.

Башҡорттарҙың күпселеге икенсе илдә бүленеп йәшәүен белгәс, Аҡсабикә күңелһеҙләнде.

— Бында ҡалған башҡорт ырыуҙары, үҙ-ара һыйыша алмай, бик йыш ыҙғыша. Ни өсөн һыйышмайҙар? Беҙҙә, аллаһы тәғәләнең биргәненә шөкөр, һәммәһе етеш, ер-һыу байлығы ла мул...

— Мәсьәлә байлыҡта ғына тормай шул,— тине Дәржимән, ауыр һулап. — Кенәз Би Хәсән яҡлы башҡорттар, тарҡау-тарҡау йәшәгән ырыу-ҡәбиләләрҙе берләштереп, күп хоҙайға табыныуҙы бөтөрөргә һәм уларҙы ислам диненә күсерергә теләгәндәр. Ғәрәп илдәрендәге һымаҡ кеүәтле, берҙәм Башҡорт дәүләтен ойоштороп, һәммә башҡорттарҙы бер ханға ҡаршылыҡһыҙ буйһондороу, хан тәхетенең бер быуындан икенсе быуынға күсә килеүе өсөн көрәшкәндәр. Үҙ аллы иркенән мәхрүм булырға теләмәгән бүтән ҡалаларҙағы кенәздәр, ауылдарҙағы ырыу-ҡәбилә башлыҡтары менән берләшеп, мосолмандарға ҡаршы яуға күтәрелгәндәр. Оҙаҡ йылдарға һуҙылған һуғышта Би Хә-

сән яҡлы башҡорттар еңелгәс, улар Дунай йылғаһына табан юлланғандар. Ике тау араһына етеп, һуғым һуйғандар...

— **Ҡайһылай** ҡыҙыҡ, — тине Аҡсабикә, аптырап. — Бер нәмә күрмәй, белмәй, ишетмәй йәшәһәң — ап-аһат! Изге динле Илпгкарыусы кенәз Би Хәсән яҡлы башҡорттар мосолман динен таратыу өсөн күпме көс түгеп тә, аҙаҡтан, бүтән ерго күсеп барғас, үҙҙәре мосолманлыҡтарын юғалтыуҙары һәм христиан диненә күсеүҙәре өсөн эсем боша! Кенәз Би Хәсән кеүек ир-егеттәребеҙ бүтән бер ҡасан да тыумаҫ микән ни башҡорттар иләүендә?

— **Башҡорт** ханлығы тирәһендә көллө көстө туплап, тарҡау-тарҡау йәшәгән ырыу-ҡәбиләләрҙе берләштереүҙәй батыл) пр-егеттәребеҙ әле лә бөтәһе түгел, — тине Дәржимән, үҙе менән һәр саҡ теләктәшлек белдереүсе ҡатынының нкы үҫеүенә ҡыуанып. — Әммә үҙ алдына йәшәргә күнеккән ҡалалар менән ырыу-ҡәбиләләрҙе Башҡортостан ханлығы дәүләтенә буйһондороу мәсьәләһен ҡабаланмай, үтә һаҡлыҡ менән ислам дине ярҙамында башҡарыу мөһим. Кенәз Би Хәсән заманындағы шикелле тарҡау ырыу-ҡәбилә юлорҙе берләштереү өсөн көс ҡулланыу яраҡһыҙ ысул, фажиғәле күренештәрҙең яңынан ҡабатланыуына килтерәсәк. Шуға күрә беҙҙең төп бурыс—ырыу-ҡәбиләләрҙә йәшәүсе башҡорттар араһында ислам динен таратыу, мөмкин булған һәр ерҙә мәсет-мәҙрәсә һалдырыу һәм бала-сағаны ғәрәпсә уҡый-яҙырға өйрәтеү.

— **Дөрөҫ,** бик тә дөрөҫ! Мин мәсет төҙөргән ауылдарҙағы бала-саға, — тине лә, башлаған һүҙен әйтеп бөтөрмәйенсә, Аҡсабикә нык кәпәйгән ҡорһағын ҡуш услап алды. — Ай-ай, ниҙер килешмәне, яман тулай! Үтә шаян, ҡәтғәр, тоуәккәл бала булыр, ахырыһы!..

Ч.фжнмәндең етди йөҙө алсаҡланды. Ул, яғымлы йылмайып, ҡатынының ҡорһағы тәңгәленә һағайып ҡына ҡулын куйҙы.

— **Эйе,** ысынлап та ҡоторона бит! Малай, ахырыһы.

— **Малай** тыуһа, уға ниндәй исем ҡушырбыҙ?

— Белмәйем.

— Пошермә, әйт! — тип нығышты Аҡсабикә. — Мин һин юләгән исемде ҡушырға ризамын!

— **Әләйһә,** әйтәм: ҡыҙ тыуһа — Тәңкәбикә, малай булһа, Аҡман исемен ҡушырға теләйем.

Аҡсабикә, ире менән ризалашып, баш ҡаҡты:

— Миңә ике исем дә оҡшай, һәйбәт... Шулай ҙа беренсе булып тыуасаҡ сабыйыбыҙҙың малай булмауын теләр инем Бөйөк Аллаһы тәғәләнән.

— Ниңә? — Дәржимән аптыраны.

— Малай — һуғыш, ә ҡыҙ тыныслыҡ өсөн тыуа яҡты донъяға.

— Миңә кем тыуһа ла барыбер, тик Башҡорт ханы нәҫелен кем һаҡлар?

— Дөрөҫ, бик тә дөрөҫ, — Аҡсабикә, тәүбәһен ҡайтып, доға уҡыны. — Эй, Бөйөк Аллаһы тәғәлә, Башҡорт ханы затының тамырын ҡоротторма, яҡты донъяға ир бала тыуһа ине! Бөйөк Аллаһы тәғәлә, һинән ялынып-ялбарып һорайым!..

Аҡсабикә менән Дәржимәндең теләге ҡабул булды: шул йылдың көҙөндә уларҙың беренсе малайы тыуҙы. Ә Аҡманға ике йәш тулыр-тулмаҫтан, Тоҡман исеме ҡушылған икенсе сабый яҡты донъяға килде.

Аҡман менән Тоҡман татыу үҫте.

Бүтәндәргә ышанмау һылтауы менән Аҡман ыенән Тоҡманды ҡарау өсөн ҡалаға күсергән һеңлеләрен мосолман егеттәренә кейәүгә биргәс, өй нигеҙен һаҡлап ҡалған ата-әсәһе менән йәшәгән ырыуҙаштары өсөн һәр ауылда тиерлек мәсет-мәҙрәсә һалдыртыуға өлгәште Аҡсабикә.

Уның хәстәрлеге арҡаһында башҡа ырыу-ҡәбиләләрҙә лә ислам диненә әкренләп-әкренләп күскән башҡорттар арта барҙы, кешеләрҙең аңы һәм мәҙәниәте үҫешенә лә ыңғай йоғонто яһалды.

Ваҡыға артабан да шул йүнәлештә барһа, ҡалалағы бей-кенәздәр һәм ырыу-ҡәбилә башлыҡтары ҙә-ара берләшергә ризалашырҙар, улар тырышлығында уҙыҡ-кырҡ йыл эсендә Башҡортостан ханлығында берҙән-бер ҡеүәтле дәүләт ҙенән-ҙә ойошторолор һымаҡ булып тойолдо Аҡсабикәгә.

Әммә ул яңылышты. Ислам диненә күсеүселәр һаны артҡан һайын, мәжүсилек һағында тороусы башҡорттарҙың ҡаршылығы ла көсәйҙе һәм мосолмандар менән күп хоҙайҙарға ышаныусылар араһындағы мөнәсәбәт киҫкенләште, хатта ҡан ҡойолошона етеүгә сәбәп булды.

Мосрлмандар менән мәжүсиҙәрҙең көрәше көсәйгәндән-көсәйә барып, былай ҙа тарҡау көстең иң хәртәйгән ваҡытында Башҡортостандан алыҫ Алтай яғынан ҡуҙғалған ҡара яу, юлында осраған барлыҡ илдәрҙе тырыи-тырағай туҙҙыра-туҙҙыра, ел-дауылдар ҡубарыш яҡынлаша, имеш, тигән ҡот осҡос хәбәрҙәр таралды.

Яман яңылыҡтың ысынмы-бушмы икәнлеген бер кем дә йүнләп белмәне.

Уны асыҡлау өсөн Сурман хан төрлө яҡҡа сапҡындар ебәрергә йыйналған саҡта, байтаҡ йылдар буйы ситтә йөрөп ҡайтҡан башҡорт сауҙагәре Бурҙаш, ҡулдарын күкрәге тәңгәленә ҡуйып, баш эйҙе:

— Хаи, башҡорт иленә бәлә-ҡаза яҡынлаша!

— Ниндәй бәлә-ҡаза? — тнп һораны Сурман хан.

— Яман яу килә!

— Пүпләберәк аңлатһаңсы.

Ҡулҡыналыуҙанмы, әллә һҙ оҫталығы самалы булыуҙанмы, Бурҙаш үҙе белгән яңылыҡтарҙы яҡшылап аңлата **алманы.**

— Ҡара яу яҡынлашҡанын ишетмәнегеҙме ни? Ҡара яу килә, ҡара яу! Ҡара яу бер нәмәне лә аямай, кешеләрҙең мал-тыуарҙарын талай, ҡала-ауылдарын емерә-яндыра, һәммәһен ҡыра-ҡлтерә!

— Пиидәй «ҡара яу?» — Сурман хан аптыраны.

— Та-талар[1] менән монголдар яуы... Яу башлығы Сыңғыҙ хан тигән яуыз! Ул бер кемде лә йәлләмәй, һәләһен ҡыра...

— Гуктале, зинһар, мин барыбер бер ни ҙә төшөнмәм, — тип Сурман хан Бурҙашты бүлдерҙе. — Ниндәй хандың әйтәһең? Ундай кешеләр менән Сыңғыҙ хан тигән кеше поисң доиъяла барлығын ошоғаса ишетеп белгәнем юҡ, Уларҙың ҙә күҙең менән күрҙеңме?

— Үҙем күрмәнем, ҡара яуҙан ҡасып барыусылар һөйләне. Мицә ышанмаһаң, уларҙан һорашып бел, — Бурташ ишек артында тороусы бер төркөм кешеләрҙе Сурман ханға ергәһенә алып инде.

Клскындар бетөн донъяны ҡара болоттай иңләп килгән татар-монголдарҙың йыртҡыслығы тураһында әсенеп-өрһеп һөйләгәндән һуң да, Сурман хан икеләнеүле тойғо чпрыпан ҡотола алманы. Сыңғыҙ хандың яманатын юрамал ҡығармайҙар микән? Әҙәм заты, моғайын, улай ҡыланмаҫ. Ҡуркҡанға түңгәк тә бүре булып күренә, тигәндәй арттыраларҙыр!

Болғар дәүләте илсеһе Сөләймән хәзрәт Ҡараҡыя ҡаһһыка килгәс кенә, татар-монголдарҙың яуына бәйләнешле мәсьәләләр буйынса Сурман ханға күп нәмә аңлашылды.

X

Ун икенсе быуаттағы ҡеүәтле татар-монгол дәүләте шул тирәлә йәшәгән киреит, монгол, меркет, татар, ойрат, найман кеүек бик күп ҡәбиләләрҙе көс ярҙамында бер-Цвшеүҙән барлыҡҡа килгән.

Монгол ҡәбиләһе башлығы Еҙегәй баһатур заманында үк бср нисә ҡәбилә монголдарға буйһондорола. Еҙегәй

[1] *Та-та* — элгәре замандағы татарҙарҙың исеме.

баһатур үлгәндән һуң уның урынына ҡалған ун өс йәшлек улы Тәмуджинға [1] буйһонорға теләмәүсе ҡырҡ мен самаһы кеше бола ҡубара һәм яһаҡ түләүҙән ҡырҡа баш тарта. **Тәмуджин,** йәп-йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, утыҙ мең кешенән торған ғәскәр ойошторооуға өлгәшә һәм фетнәселәрҙе тулыһынса ҡыйрата. Уларҙың иҫән ҡалған башлыҡтарын тере көйө һыуы урғылып ҡайнаған ҡаҙан эсенә ташлатып үлтертә.

Тәмуджиндың ҡыйыулығы һәм дошмандарына ҡарата аяуһыҙ булыуы хаҡында белгәс, татарҙар [2] батшаһы Кераитский хайран ҡала.

— Миңә **ТэМуджин** шикелле батыр кәрәк, — тип уны үҙенең ғәскәр башлығы итеп тәғәйенләй.

Тәмуджин Татарстандың батшаһына тоғро хеҙмәт итә. Ҡурҡыу белмәҫ, һуғышҡа һәләтле полководец йәш монгол егетен Кераитский яңынан-яңы илдәрҙе һуғышып алырға ебәрә һәм ул буйһондорған ерҙәрҙе Татарстан дәүләтенә ҡуша.

Әммә бындай хәл оҙаҡҡа барманы.

Бер ҡасан да ҡурҡыу белмәҫ, дошмандарынан еңелмәҫ **тигән** даны артҡандан-арта барған һайын, Тәмуджин татар батшаһы-монархы Кераитскийға буйһоноп йәшәүҙән **нисек** тә булһа ҡотолоу һәм үҙ иркенә йәшәү хаҡында хыялланды. Шул маҡсат менән көс тупланы. Дошмандарының бер өлөшөн, юҡ-барға бәйләнеи, язалатты, файҙаһы тейерҙәйҙәрен, үс алыу менән ҡурҡытып, үҙ яғына ылыҡтырҙы, дуҫтарына иң ҡиммәтле бүләктәр таратып, әүрәтте.

Татар батшаһы Караитский ҡулы аҫтындағы барлыҡ татар-монгол төркөмө башлыҡтарын тулыһынса буйһондорғас, Тәмуджин баһатур бөтөн ғәскәрҙе Амур йылғаһы яры буйына йыйҙы.

Барабан ҡаға-ҡаға һауаны дер ҡалтырандырған шамандар башҡарған тантаналы күренештән һуң, Тәмуджин Амур яры аҫтындағы ҡырсынға төштө. Ҡуш усы менән һоҫкан һыуҙы эсте лә, ғәскәре торған яҡҡа боролоп ҡарап, баш эйҙе.

— Батыр яугирҙарым, мәңге онотолмаҫлыҡ булып иҫтә һаҡланасаҡ ошо ҡояшлы көндән башлап, ғүмеремдең аҙағына саҡлы һеҙҙең менән бергә булырға, ҡыуаныс-шатлыҡтарымды, ҡайғы-хәсрәттәремде уртаҡ бүлешергә изге теләгемде белдереп, Бөйөк һауа һәм һыу алдында ант итәм!..

[1] *Тәмуджин* — 1155 йылда тыуған.

[2] *Татарҙар* — ул заманда хәҙерге Ҡытайҙың төньяғындағы ерҙә монголдар менән йәнәшә йәшәгән булғандар.

Шул ваҡытта бер төркөм һыбайлы ярандары менән Ь.|ҫыларын эйәртҡән татарҙар батшаһы Кераитскийҙың ҙур **тиҙлектә** яҡынлашыуы күренде.

Яр аҫтынан күтәрелгән ыңғайы ерән айғырына атланған **Гэмуджин** Кераитскийға ҡаршы елдерҙе.

— Минән рөхсәтһеҙ ғәскәрҙе йыйған өсөн, яуыз, йә-**ИвНДе** аласаҡмын, — тип ажарланып ҡысҡырған ыңғайы **Кынынан** һурып сығарған кәкре ҡылысы менән татар **батшаһы** Тэмуджинға киҙәнде. Ләкин маҡсатына ирешә алманы, Тэмуджин уның башын алданыраҡ өҙә сабырға **өлөврҙө.**

І атар хакимының башы йәшел үләнгә ҡан һарҡытып тәгәрәп барыуҙан туҡталғас, Тэмуджин эйәрҙән төштө.

— Үлемеңде эҙләп килеүең өсөн үҙең ғәйепле, — тип татар батшаһының башын итек табаны менән төрлө яҡҡа әйләндерҙе лә ярҙамсыларының береһенә бойорҙо:

— Был башты көмөш ҡоршау менән ҡоршарға һәм Ҡытай татарҙарының ханы иҫтәлеге [1] итеп һаҡларға!

І а талар батшаһының үлтерелеүенә борсолмаған ту-**ы хәрби** стан Амур буйындағы ергә урынлаштырылғас, Тэмуджиндың ҡушыуы буйынса барлыҡ ғәскәр ҡатнашлығында **һый** башланды.

Мәжлестән һуң аҙна самаһы ваҡыт уҙғас. 1206 йылдың егерме алтынсы июлендә уҙғарылған ҡоролтайҙа Тэмуджин татар-монголдарҙың Бөйөк ханы тип иғлан ителде Ьш ул Сыңғыҙ хан исеме менән йөрөтеләсәге тураһында мәхс\с ҡарар сығарылды.

С мңғыҙ ханға тоғролоҡ белдереп барлыҡ сиреү[2] башлығы ммры менән татар-монголдарҙың антын ҡабул иткәс, та мрҷарҙың элгәрге Кераитский батшаһынан мираҫҡа ҡ Ипған дәүләт ҡоролошо өр-яңынан үҙгәртеп ҡоролдо. Ун нугырға түрә итеп — ун башлығы, йөҙ һуғышсыға — йөҙ **Ишлығы,** мең һуғышсыға — мең башлығы, ә ун биш мең кешене берләштергән сиреүгә башлыҡ итеп полководец, **Ьки,** нкенсе төрлө әйткәндә, төмән [3] тәғәйенләнде. Төмәнгә буйһондоролған сиреүҙән бер кемдең ситкә китергә ҡаҡҡы юҡ. һуғыш майҙанын ташлап ҡасыусылар хөкөмһөҙ-**Нйһеҙ** үлтерелде. Батырҙарса һуғышыусы бер-ике татар-**Ьонголға** бүтәндәре яҙамлашмаһа, ул төркөмдәге кешеләр тотошлай ҡырылды.

---

[1] Бик күп йылдар уҙғас, ул баш «Ҡытай татарҙарына Тэмуджиндың асыу тотоуы иҫтәлеге» тип йөрөтөлә башлаған.

[2] *Сиреү* — ғәскәр.

[3] *Төмән* — күп һанлы йәки ун биш мең кешене берләштергән сиреүҙе һом сиреү башлығын аңлата.

Сиреүҙәге һәр татар-монгол үҙ иҫәбенә уҡтар тултырыулы һаҙаҡ, балта, дошман ҡәлғәләрен емереү өсөн тәғәйенләнгән таш ватҡыс махсус машиналарҙы һөйрәп йөрөтөүҙә файҙаланасаҡ сүс арҡан менән ҡоралланды.

Быларҙан тыш, бай яугирҙар кәкре ҡылыс, төркә [1], брон һәм һаҡсыл аттар һатып алырға мәжбүр ителде. Үҙҙәре һәм аттары өсөн айырым брондар күндән тегелде, ә уларҙан да байырағы тимер сыбыҡтан үрелгән ҡалҡан һәм һөңгө менән ҡоралланды.

Сыңғыҙ хандың бойороғо буйынса татар-монгол яуынан алда барыусылар дошман һаҡсыларын үлтерергә йәки ҡасып китергә мәжбүр итергә бурыслылар, әммә теп көс килеп еткәнгә саҡлы баҫып алынған сит ил байлыҡтарына ҡағылырға хаҡы юҡ.

Алдағы отряд артынан саң-тузандар ҡубарып ябырылған төмәндәр юлда осраған кеше затын аяуһыҙ ҡырырға, байлыҡтарын таларға, мал-тыуарҙарын сиреү артынан ҡыуып алып барырға, ауыл-ҡалаларҙан бер ни ҡалдырмайынса, уларҙың көлән күккә осororға бурыслылар. Яугирҙар тәрән йылғаларҙы ат ҡойроҡтарына йәбешеп йәки төрлө кейем-һалым, аҙыҡ-түлек тултырыулы күн тоҡтар өҫтөндә ултырып, икенсе ярға сығырға тейеш.

Дошман ерен иңләп яуға барыусы төмәндәргә барлыҡ **мөлкәте** менән эйәреүсе яугирҙарҙың ҡатындары һәм бала-сағаһына башлыҡ итеп тәғәйенләнгән сиреүҙәр, һуғышта ҡатнашмайынса, далаларҙағы һуғышсыларҙың алышыуын алыҫтан күҙәтергә тейеш. Улар, татар-монголдарҙың сиреүе иҫәнһеҙ-һаулыҡ икәнлеген дошман ғәскәрҙәре күреп ҡоттары алынһын өсөн, алыштың иң ҡиҫкен, көсөргәнешле ваҡытында аттары һыртына кеше һөлдәһенә оҡшаған ҡараҫҡы ҡуйыуҙы ойоштороrорға тейеш.

Сыңғыҙ хан командалығындағы походтарҙа йөрөп, үҙ заманы өсөн иң алдынғы хәрби тәжрибәләрҙе, хәрби хәйләләшеүҙе үҙләштереүҙә оҫтарған татарҙар, алышта иҫәнһау ҡалыу өсөн бөтөн мөмкинлектәрҙе файҙаланды. Яуға барған саҡта, улар үҙҙәренән алда бүтән юл кешеләрен ҡыуҙылар һәм сигенергә маташыусылар шундуҡ атып үлтерелде йәки ҡылыс менән тураҡланды. Татар-монголдарға буйһондоролған бүтән илдәрҙең сая батырҙар командалығындағы сиреүҙәр дошмандың уң һәм һул флангыларынан һөжүм итеү өсөн ебәрелде.

Ҡул һуғышында ҡатнашыуҙан ҡурҡып, татарҙар уҡтар ярҙамында алыҫтан һуғышыуҙы өҫтөн һананы. Дошман спреүенең төп көсө ҡыйратылғас ҡына, улар ҡасып барыусыларҙы һыбай эҙәрләне.

Сыңғыҙ хан тарафынан тотошлай үҙгәртеп ҡоролған татар-монгол сиреүҙәре һәр саҡ яуға барырға ашҡынды. **< внки** сит илдәрҙе буйһондороу ваҡытындағы үлеш-ҡыйрылыш, еңел табыш, бөтмәҫ-төкәнмәҫ байлыҡтар рухландырҙы уларҙы.

Кораитский батша үлтерелгәндән һуң, Тибет батшалым.|. Көньяҡ Себерҙәге ҡырғыҙҙар менән уйғырҙар һәм Кесе Бохарстан сигендәге барлыҡ илдәр Сыңғыҙ ханды үҙҙәренең берҙән-бер хакимы тип танырға һәм уның төMвмдәре командалығындағы яуҙарҙа ҡатнашырға мәжбүр булды.!ар.

()ло сиреү туплап, бер ҡасан да еңелмәҫ исем менән дан яулаған Сыңғыҙ хан Ҡытай монархы Цзинға һалым **Ғүләүҙән** ҡырҡа баш тартты һәм уның илсеһен мыҫҡыллы һүҙ>р әйтеп ҡаршыланы:

— Батшлңа ҡайтып әйт. Цзин батшаға мин башҡаса **буйһонмайым,** Уның баһаһы минең бер ҡонаным хаҡы **Гиклем** дә тормай. Ҡытай монархы Цзин үҙең-үҙе Бөйөк һауа улы тип исемләп йөрөтөүен дә хуп күрмәйем. Сөнкн |ул, һоммә ябай кеше кеүек, ҡасан да булһа яҡты донъяны гашлап китәсәк...

— Ҡытай менән мөнәсәбәтеңде үҙгәрткәс, ысынлап та, **Иико** бында артабан ҡалыуҙан мәғәнә юҡ, — тине Ҡытай монархы илсеһе, тешөнкөлөккә бирелеп.

— Эйе, юҡ, — тип дөрөҫләне Сыңғыҙ хан һәм татар-**Монголдарҙың** баш ҡалаһы Ҡараҡоромдан Ҡытай илсеһе ҡ ыуылғандың иртәгеһе көндө Цзинға ҡаршы һуғыш башланы.

Был Ҡытай монархы өсөн көтөлмәгән хәл ине. Ляодун мөнән танһауттарҙың Си Ся дәүләтенә сиктәш булған Ҡытайҙың төньяҡ елөшөндәге ҡалаларҙы татар-монголдар аяуһыҙ ҡыйратыуы хаҡында белгәс тә, Цзин бөтөн көстө шул пүнәлештә тупланы. Әммә ҡара болот шикелле ябы-**|Ылмп** килеүсе Сыңғыҙ хан төмәндәренең уңышлы һөжүм-**Иенә** Ҡытайҙың Бөйөк һәм бейек стенаһы ла тоткарлыҡ яһай алманы.

Татар-монголдар сиреүе, Ҡытай ғәскәрҙәрен ҡыйрата-**КЫЙрата,** ҡыҫҡа ваҡыт эсендә тукһан бер ҡаланы һуғышы и алды һәм Ҡараҡором дәүләтенә файҙаһы теймәҫтән барлыҡ ҡарт-ҡороно аяуһыҙ ҡырырға тотондо.

Ьоләнән нисек ҡотолорға белмәгән Ҡытай монархы НШ йөҙ ир-егетте, менгә яҡын иң һылыу ҡатын-ҡыҙҙы, М **мең** баш атты, бик күп ебәк тауарҙар менән алтын-

1 *Төркэ* — боронғо һуғышсыларҙың башына кейә торған бүрек, тимер һауыт.

көмөштө Сыңғыҙ ханға бүләк итеп ебәрҙе һәм һуғышты туҡтатыуҙы үтенеп һорарға мәжбүр булды.

Әммә күпте, бик күп байлыҡтарҙы эләктерергә тырышҡан Сыңғыҙ хан сиреүе һөжүмен туҡтатманы.

1215 йылда Пекин ҡалаһын һуғышып алғас, Сыңғыҙ хан ундағы барлыҡ байлыҡтарҙы яугирҙарына таратты, ә кешеләрҙе ҡырҙыртты, һоҡландырғыс һарайҙары менән күркәм йорттарҙы тотошлай яндыртты.

Ошондай фажиғәле үлеш-ҡыйралыштың иң ҡыҙыу мәленде Ҡытай императоры нәҫеленән иҫән ҡалған берҙәнбер кешене, Илучцай **исемле** оло аҡыл эйәһен, Сыңғыҙ ханға алып килделәр.

Ул, Сыңғыҙ хандың күҙҙәренә туп-тура ҡарап, үҙе башлап һүҙ ҡушты:

— Мин, йәшәремде йәшәгән, ашарымды ашаған ҡарт диуана, үлемдән һис ҡурҡмайым. Әммә, иҫән ҡалһам, һинең өсөн күп файҙам тейеүе ихтимал. Мине үлтертергә һәр саҡ өлгөрөрһөң. Иң әүәл нимәгә һәләтле икәнемде һынап ҡара.

Сыңғыҙ хан Илучцайҙың үлемдән ҡурҡмауына, аҡыллы фекер йөрөтөүенә ғәжәпкә ҡалды.

— Ярар, һин теләгәнсә булһын, нимәгә һәләтле булыуыңды һынап ҡарарға ризамын, — тине ул.

Илучцай, ысынлап та, файҙалы кәңәштәр биреүе менән Сыңғыҙ хандың ихтирамын яуланы һәм иң яҡын ярҙамсыларының береһенә әүерелде. Шул мөмкинлектән файҙаланып, Илучцай миллионлаған ҡытайлыларҙы үлем язаһынан ҡотҡарҙы, ҡырағай татар-монголдарҙы бер ни тиклем тыйнаҡландырыуға, уларҙы мәҙәниәткә ылыҡтырырға һәм аң-белем биреүгә йүнәлтелгән кәңәштәрен Сыңғыҙ ханға ныҡыны.

Сыңғыҙ хан, яңынан-яңы ерҙәрҙе һуғышып алыу һәм байлығын артабан арттырыу тураһында хыялланып, Бохарстан менән Персияның бик күп ерҙәренә хужа булған Хиуа ханы Мөхәммәт Икенсегә яҡынлашырға һәм уның ярҙамында яҡын тирәләге илдәрҙе буйһондорорға теләне.

Әммә үҙен Бөйөк Искәндәр Икенсе[1] тип исемләргә ҡушҡан Мөхәммәт Сыңғыҙ хандың илсеһе менән йүнләп һөйләшергә лә теләмәне.

— Минән күпкә кәм Сыңғыҙ хан менән дуҫлашырға, солох төҙөргә мохтаж түгелмен, — тип ҡупырайып, татар-монгол империяһының баш ҡалаһынан — Ҡараҡоромдан ебәрелгән кешеләрҙе язалап үлтертергә ҡушты ул.

[1] Искәндәр тип Александр Македонскийҙы йөрөткәндәр.

Хиуа ханы Мөхәммәттең ҡыланышына асыуы ҡабарған **Сыңғыҙ** хан, Бөйөк һауа хөкөмөнә һәм үҙенең ҡорал көсенә нығлы ышаныс белдереп, өс тәүлек буйы төн йоҡоларын йоҡламайынса, тау һыртындағы ҡая таш өҫтөнә баҫып, Бөйөк күккә табынды.

— Хиуа ханы мине мәсхәрәләне, яҡшы ниәт менән ебәргән илселәремде язалап үлтертте. Бындай хурлыҡҡа **Сыҙар** әмәлем ҡалманы, ҡан дошманына әүерелгән Хиуа **Мңлыңына** ҡаршы һуғышырға, уны ҡыйратырға һәм үҙемә буйһондорорға көс-ҡеүәт бир!..

Дүртенсе көндө, бейек тау башынан төшөп сиреүе урынлашҡан ергә килгәс, Сыңғыҙ хан төмән башлыҡтарын **|ыйҙы.**

— Мин өс көн, өс төн Күккә табындым. Бер саҡ, **үҙем Ц һиҙмәҫтән,** ҡая таш өҫтөндә ултырғанда йоҡлап киткәнмен, — тине лә йоҡоһонда төш күреүе, уйғырҙар араһында йәшәгән христиан епископының Бөйөк һауа — Алла **ИСеменән** Хиуа ханлығына ҡаршы һуғышҡа барырға фатиха биреүе, дошманды мотлаҡ еңәсәге тураһында әйтеүен тантаналы рәүештә иғлан итте һәм төмәндәренә яуға әҙе|)ләнергә бойорҙо.

Ҡараҡором дәүләтенә буйһонған Азиялағы ерҙәрҙе улус гарға — өлкәләргә бүлгеләп, һәр улусҡа хужа итеп уландары менән ейәндәрен һәм алыштә күп батырлыҡтар **Күрһәткән** төмәндәрен билдәләне лә 1219 йылдың йәйендә йөҙ илле мең яугирҙы берләштергән сиреүе менән Сыңғыҙ ||Н походҡа сыҡты.

Киң даланы иңләп ҙур тиҙлектә алға табан ябырылған **Сыңғыҙ** хан сиреүенең осо-ҡырыйы күренмәне. Һыбайлы һ\ ышсыларҙың аттары тояғы аҫтынан урғылған баш осо **ГвКгәлендәге** саң-туҙан өйөмө, оло ҡалалар яндырылған **Цкыптағы** ҡуйы төтөн ағымы һымаҡ, юғарыға урғыла.

Сиреүенең ҡап урта өлөшөндә күп һанлы вәзирҙәре, ғрандары-яһауылдары менән бергә иң алда барған Сыңғыҙ хан, алтмыш дүрт йәшкә етеүенә ҡарамаҫтан, арыу-**Илыҙы** белмәне. Тирләп-бешеп хәлдән тайған атын алмаштырып, икенсеһенә менде лә, үҙе менән бәйләнеште **Мр ҡасан** да өҙмәгән төмәндәрен өҙлекһеҙ ҡабаландырып, яңынан-яңы бойороҡтар тапшырҙы.

Сыңғыҙ хан үтә уҫал, ҡырыҫ холоҡло. Саҡ ҡына ғә|ебе булған кешеләрҙе лә ярлыҡаманы, уларҙың йөрәген **КИҙп** алырға йәки сиреү менән йөрөтөлгән махсус баға-**Шҙларға** аҫырға ҡушты.

Көп кискә һарҡты.

Ҡояш байып эңер яҡынлаша башлағанда ғына сиреү **беренсе** тапҡыр ялға туҡтатылды. Ләкин хан хәл йыйырға

ҡабаланманы. Йыйылма тирмәһе тиҙ арала ҡоролғас та, төмән башлыҡтарын кәңәшмәгә йыйҙы. Һәр төмәндәге яңылыҡты берәм-берәм һорашып белгәс, унар мең кешене берләштергән өс төмәнде төп көстән айырып, Джэбэ командалығына буйһондорорға һәм уны Яйыҡ менән Оло Иҙел йылғалары тирәһендәге ерҙәрҙе һуғышып алырға ҡушты.

Ҡараҡором ҡалаһында йәшәгән сағында уҡ ныҡ ышаныслы кешеләрҙе — шымсыларын, сауҙагәрҙәр менән дәрүиштәрҙе ебәреп, төрлө халыҡтың ғөреф-ғәҙәтен, көнкүрешен, байлығын, ниндәй диндә булыуын, кешеләрҙең шөғөлен ентекле өйрәнгән Сыңғыҙ хандың һәр һүҙе кәңәшмәлә ҡатнашыусы төмән башлыҡтары өсөн шик тыуҙырманы.

Хәрби кәңәшмәнән һуң Джэбэ баһатур менән икәүҙәникәү генә аулаҡта ҡалғас, уҡый-яҙа белмәүенә ҡарамаҫтан, иң уҡымышлы ғалимдар белмәҫлек нәмәләрҙе Сыңғыҙ хан телдән аңлатты. Уның зирәклеге, һәр нәмәне алдан төҫмәрләүе, бер ҡасан да яңылышмауы Джэбэне ғәзкәпдәндерҙе. Шул тиклем күп уй-хыялдарҙы нисек башында һыйҙыра һәм үткәндерҙе хәтерендә тота ала икән?

Сыңғыҙ хандың әйтеүенә ҡарағанда, Джэбэ бер ҡасан да белмәгән-күрмәгән Башҡортостан иле Тубыл йылғаһынан Кама-һамарға, Каспий диңгеҙе ярҙарына тиклем барып тоташа икән. Джэбэ баһатур, 1219—1221 йылдарҙа, шул ерҙәрҙе тотошлай һуғышып алырға, ҡала-ауылдарын тулыһынса ҡыйратырға, яу ваҡытында йыйналған барлыҡ байлыҡ татар-монгол империяһының баш ҡалаһы-мәркәзе Ҡараҡоромға тотҡарлыҡһыҙ оҙатыла барылырға тейеш.

— Башҡортостанды буйһондорғас та, туҡталып тормайынса, Болғар иленең Сәйен Йортона һөжүм башларға бурыслыһың, — тип Сыңғыҙ хан Джэбэ баһатурға уңыштар теләне.

Иртәгәһе көндөң ҡараңғы танында Башҡортостан иленә яуға оҙатып ҡалған Сыңғыҙ хандың аҡ тирмәһе янында Джэбэ баһатур күренгәс тә, добулбастар даңғыр-доңғор гөүләргә тотондо. Уларҙың яңғырауыҡлы тауышына уянған барлыҡ яугирҙарҙың етеҙ хәрәкәтләнеүен иләүе туҙҙырылған ҡырмыҫҡаларға оҡшатып, Сыңғыҙ ғорурлыҡ тойғоһо кисерҙе. Ысынлап та, ер сигенә саҡлы барырға, донъялағы барлыҡ илдәрҙе буйһондорорға теләгән хандың уй-хыялдарын бойомға ашырырға әҙер тороусы оло сиреүе ҡыуаныс һәм ғорурлыҡ түгелме ни?!

Иртәнге тамағын туйҙырғас та, Сыңғыҙ хан аҡ тирмә ишеге алдындағы ярандары эргәһенә яҡынлашты. Улар менән баш һелкеп иҫәнләште лә, ҡыҙыл итек кейгән һы-

ҙар **аяғын** алтын өҙәңгегә тейҙергән ыңғайы, бер ынты-**ЙЬҰа** ҡола аты һыртындағы көмөш ҡашлы эйәргә атланды. **Байраҡ** тотоусы янына яҡынлашҡас та, ярандары уны уратып алды һәм тигеҙ сафтарға теҙелешергә өлгөргән **Күмәк** 11ыбайлылар бер үк ваҡытта урындарынан ҡуҙғалды.

Имйылма ҡыуыш-тирмәләре, аҙыҡ-түлек, кейем-һалымдары тейәлгән оҙон билле арбаларҙа ултырыусы ҡатын-ҡыҙ **менән** бала-саға һәм уларҙың һыйыр малы, көҙә-**һарыҡ** көтөүе лә оло сиреү артынан ҡалмай эйәрҙе .

Гөп көстән айырылып икенсе яҡҡа киткән Джэбэ баһатур командалығындағы утыҙ мең яугирҙы берләштергән сиреү ҙә был минутта ҙур тиҙлектә алға табан йүнәлде.

XI

Кара яу яҡынлашыуына эсе бошҡан Сурман хан, ни ишләргә белмәйенсә, ниндәйҙер мөғжизәләргә ышаныу **•мпнән** һаман да төҙөлмәне.

—- Джэбэ баһатур яуы, Башҡорт иленә һуғылмай, бәлки, птләтеп уҙыр?

— Джэбэ сиреүенең туп-тура Башҡортостанға килеүе хаҡ, — тине Болғар илсеһе Сөләймән. — Башҡорт илен ҡыйратып, ҡала-ауылдарын үрткә тотоп, байлыҡтарын та-ла п, барлыҡ нәмәне юҡҡа сығарғас ҡына Джэбэ сиреүе **ролгар** иленә һөжүм башлаясағы ла сер түгел.

— Былай булғас, ҡалайтырға? — Сурман төшөнкөлөк-Ц| бирелде.— Бәләнән ҡотолоу өсөн ниндәй әмәл табырға?

— Беҙ, Болғар иле кешеләре, ниндәй генә бәлә-ҡазаға тарыҡһаҡ та, Башҡортостан менән төҙөлгән солохҡа тоғро ҡаласаҡбыҙ. Һеҙҙең яҙмыш — беҙҙең яҙмыш, —тип **Волгар** илсеһе ҡара яуҙы бергәләп кире ҡағырға әҙер->н к башҡарылыу хаҡында ҡат-ҡат әйткәс кенә, хандың ->ш| асылғандай тойолдо.

— Иншалла, Һеҙҙән ярҙам ваҡытында килеп етһә, мотлайын, беҙ бирешмәбеҙ, — тип Сурман хан ҡуш услап доға ҡылды ла, ил яҙмышына бәйләнешле үтә мөһим мәсьәлә шс күмәк кәңәшләшеп хәл ҡылыу өсөн ҡала кенәздәре **Меион** бейҙәрҙе һәм ырыу-ҡәбилә башлыҡтарын йыйынға саҡырфтып, төрлө яҡҡа сапҡындар ебәрҙе.

Лшығыс уҙғарылған сираттан тыш йыйында ҡатнашыусылар Сурман ханға ғәҙәттән тыш оло вәкәләт бирep, **Калаларҙа** һәм ауылдарҙа ойоштораласаҡ ғәскәрҙәрҙе уға буйһондорорға, тигән махсус ҡарар сығарҙылар.

Йыйын тамамланыу менән тиерлек усаҡтарындағы утҡарҙы өрҙөрткөстәр менән өрҙөртөп, уҡтар өсөн осло ти-

мерҙәр, һоңғолар, ҡылыстар һәм ҡалҡандар әҙерләнде, тоҡтарға аҙыҡ-түлек, кейем-һалымы тултырылды... Ә төрлө яҡтан өҙлөкһеҙ ағылған һыбайлы отрядтар Ҡараҡыя ҡалаһы ситендәге уйһылыҡта тупланды.

Бер үк ваҡытта Башҡортостан иле сигенә ебәрелергә тәғәйенләнгән Болғар иле бағауылдары [1] һәм Джэбэ сиреүе ҡайһы тирәлә икәнлеге лә асыкланды.

— Былай булғас, дошманға ҡаршы торорлоҡ көс туплана. Уны яйлы урынға алып барып урынлаштырыуҙы тиҙләтергә кәрәк, — тине Сурман хан, өтәләнеп.

Мырҙым бей, яуҙаштарын эйәртеп, Сурман хан эргәһенә яҡынлашты.

— Көстән тыш, хәйлә лә кәрәк, ҡоҙа.

— Ниндәй хәйлә? — Сурман хан аңламаны.

— Ил сигенә яҡынлашҡан Джэбэ баһатурға бүләк-маҙар тапшырһаҡ, бәлки, мөлкәтебеҙгә ҡағылмаҫ?

— Белмәйем шул, ҡоҙа. Беҙ тапшырған бүләк менән генә ҡәнәғәтләнер микән дошман? — Сурман хан шик белдерҙе.

— Минең уйымса, дошман да кеше бит! Таш менән атҡанға аш менән ат, тигәндәй, моғайын, яҡшылыҡҡа ҡаршы яманлыҡ ҡылырға баҙнатсылығы етмәҫ.

— Дошмандың мәрхәмәтлегенә ышанаһыңмы?

— Ихлас ышанам, — тип яуап ҡайтарҙы Мырҙым бей һәм халыҡтан йыйған бүләк менән дошманға ҡаршы үҙе барырға теләк белдерҙе.

Икенсе көндөң таңында дөйәләр һәм аттар һыртына артылған бүләктәр менән Мырҙым бей ҡарамағындағы бер төркөм кешеләр алыҫ юлға сәфәр сыҡты.

Улар артынса ҡораллы ир-егеттәр ҙә ҡуҙғалды.

Иренән айырылып ҡалырға теләмәгән Аҡсабикә менән бүтән ҡатындар ҙа һуғышҡа оҙатылдылар.

Йылға-шишмәләр ҡушылыуынан ҙурая, таша барған Ағиҙел шикелле Сурман хан командалығындағы ғәскәр һаны ла юлда барған һыбайлы төркөмдәр ҡушылыушан ишәйҙе.

Мырҙым бей ҡарамағындағы каруан Башҡорт ғәскәренән ун-ун биш саҡрым самаһы алда барҙы. Улар эңер мәлендә осраған тау йылғаһы яры буйында туҡталып тен уҙғарҙылар ҙа, офоҡ сите күкһелләнеп яҡтыра башлағанда, йәнә ҡуҙғалдылар.

Ағастары һирәкләнә барған урман ситенә сыҡҡас, дала башланды.

Тауҙар теҙмәһе аръяғындағы һорғолт болоттар өйөме араһынан сыҡҡан ҡояш күренде. Уның нурҙарына ҡойонған ергә йәм өҫтәлде, ҡылғандар араһында сайҡалған **Свскәлэр** ҙә төҫөн үҙгәртҡәндәй һымаҡ.

Киң, иркен дала тулы йылҡы. көтөүе. Уларҙың үҙ иркенә йөрөүенән көнләшкәндәй, йөнтәҫ арҡандар менән бер- **береһенә** тоташтырып бәйләнгән дөйәләр аяныслы тауыш сығарып үкерҙе, ә йөк аттары, йылҡы көтөүен сәләмләп, һөрән һалып кешнәне.

Мал менән шығырым тулы дала тыныс. Унда шикләнерлек нәыә һиҙелмәй, һәммәһе тәбиғи. Тимәк, яҡын-тирәлә дошман сиреүенең булыуы мөмкин түгел.

Л.чда, ҡүҙ күреме етерлек алыҫлыкта, ҙур күл ялтлай. **Унын** сит-сото ҡамыш менән ҡапланған. Каруан яҡынлашҡы \ын **һиҙеп,** күмәк ҡыр ҡаҙҙары менән өйрәктәр көтөүе **Һвуаға** күтәрелде һәм торналар торҡолдашҡан һаҙлыҡҡа **ТпСан** осто.

Түңәрәк күл аръяғындағы талсыбыктар араһында болғар бағауылдары осраны.

—- һеҙ бында ни эшләйһегеҙ? — тип һораны Мырҙым (әйе.

—- Дошман яуынан ҡасып килеп, әҙ-мәҙ хәл йыярға туҡталдыҡ, — тине бағауылдарҙың олораҡ йәштәгеһе.

—- Дошман сиреүе ил сигенә еттеме ни?

—- Ике көн элгәре Тубыл йылғаһын аша сығып, Маҙара, Ҡыртыш, Ширгәнәк ҡалаларының көлөн күккә осоОП, юл ыңғайындағы башҡорт ырыуҙарын ҡыра-ҡыра, иртәнме, бөгөнмө ошо тирәгә килеп етәсәк. Иҫән-һау ҡал- **Гьпъҙ** килһә, каруанығыҙҙы кире борорғоҙ!

— Ә һеҙ?

—- Беҙ хәүефһеҙ урынға ҡасабыҙ, — тип бағауылдар аттарына атландылар ҙа күҙ асып йомғансы юҡ булды- **цар**.

Беҙгә ҡасып ҡотолорҙай әмәл ҡалманы. Ни булһа ла **Йулыр,** Аллаһы тәғәлә ярҙамына таянып, кешеләрҙән йыйып кнлтергән бүләкте тейешле әҙәм затына тапшырмау килешмәҫ», — тип бағауылдарҙан ишетеп белгәндәрен хә- **Мр** итеү өсөн Сурман ханға сапҡын ебәрҙе лә Мырҙым **рей** бүленгән юлын дауам итте.

Каруан уйһылыҡҡа яҡынлашҡан саҡта кеше буйы (мпнлоғондай үлән араһынан сыҡҡан һыбайлылар төркөмө \ ндан да, һул яҡтан да күренде.

Улар йән-фарман сабышып килгән ыңғайы, каруанды ур.пып алдылар. Каруан һаҡсыларын кәкре ҡылыстары менән тураҡланылар ҙа Мырҙым бейҙе йылға яры буйындағы дошман сиреүенә алып килделәр.

Мосолмандарса аяҡ салып ултырып тамаҡ туйҙырған

[1] *Бағауыл* — сторожевой, һаҡсы мәғәнәһендә.

нойон [1], ҡуш ҡуллап оло һөйәктең кимеген һурыуҙан бүленеп, Мырҙым бей торған яҡҡа эйәк ҡаҡҡан ыңғайы, ниҙер үҙенсә һораны.

Тәржемәсе Мырҙым бейгә яҡынлашты.

— Беҙҙең сиреү башлығы Джэбэ баһатур һинең кем икәнлегеңде һәм ҡайҙа барыуыңды белергә теләй, — тине ул.

Мырҙым бей бында ниндәй маҡсат менән килеүен тәржемәсе аҡылы әйткәйне, Джэбэ баһатурҙың киң яңаҡлы ҡара йөҙө томрайҙы, ҡыҫыҡ күҙҙәре тағы ла нығыраҡ ҡыҫыҡланды.

Уның тамаҡ туйҙырыу ҡайғыһы бөттө. Ҡулындағы һөйәкте ситкә бырағытты ла, майланған һаҡал-мыйығын ең осо менән һыпырғылай-һыпырғылай, ярылырҙай булып аҡырҙы.

— Мин бер ни ҙә аңламаным, — тип Мырҙым бей ҡурҡынған күҙҙәре менән тәржемәсегә уҡталды.

— Нойон Джэбэ баһатур һиңә ышанмай.

— Мин ихлас, алдашмайым. Валлаһи-биллаһи, — тип Мырҙым бей ант итте.

— Беҙгә бүләк итеп килтерер булғас, каруанды ни өсөн кире бороҏға маташтың?

— Кире бороҏға маташыр булһам, беҙгә ҡаршы кнлер инемме? — Мырҙым бей ҡалтыранды.

— Алдашаһың, Джэбэ баһатур һиңә ышанмай, — тине тәржемәсе.

— Ул ышанмағас, нисек итеп ышандырырға ла белмәйем.

— Бөйөк Сыңғыҙ хан ғәскәре башлығын алдаған өсөн, нойон алдында тубыҡланып, башынды эй һәм ғәфү үтен!

— Мин ирекле башҡорт ырыуы башлығы. Уның алдында тубыҡланып кәмһетелер, ялағайланыр, баш эйәр өсөн килмәнем. Сыңғыҙ хан нойонына бүләк тапшырыр, тыуған илем, халҡым яҙмышы тураһында һөйләшергә һәм бер-беребеҙҙе аңлашырға тип килдем.

Мырҙым бейҙең һүҙҙәрен тәржемәсе монгол теленә әйләндергәс, Джэбэ баһатур ярһыны. Ул Мырҙым бейҙең яңағына йоҙроҡлап һукты ла эргәһендә торған ялсыларына ниҙер ҡысҡырҙы.

Палаҡтар алға ябырылды. Улар Мырҙым бейҙе иҫтән яҙҙырырҙай хәлгә еткереп туҡманылар ҙа, танһыҡтарын ҡандыра алмағас, уның аяҡ-ҡулын киҫтеләр, күҙҙәрен соҡоп сығарҙылар.

---

[1] *Нойон* — кенәз, бей мәғәнәһендә.

Шуида ла рухын юғалтмайынса, ҡан төкөрә-төкөрә, **Мырҙым** бей барлыҡ көсөн йыйып ҡысҡырҙы:

— Бүтән башҡорттар ҙа һеҙгә баш эймәҫ!.. Улар минең нсөн үс аласаҡ!.. Һеҙ... Һеҙ — яуыз, әҙәм аҡтығы!..

Мырҙым бей тағы ла ниҙер әйтергә ниәтләнеп ауыҙын **Ц кайиы,** уның башы өҙә сабылды.

Мырҙым бейҙе үлтертеп тә тыныслана алмаған Джэбэ баһатур төмән башлыҡтарын йыйҙы һәм башҡорт сиреүенә ҡ.ршы һөжүм башларға ҡушты.

Дүңге ыр-доңғор геүләү ишетелеү менән татар-монголдар ҡысҡырыша-ҡысҡырыша үлән утлаған аттарҙы тотоп **Менергә** йүгереште.

Төмәндәр тиҙ арала хәрби рәткә уҡмаштырылды.

Сиреу һул, уң ҡанатҡа һәм урталағы үҙәккә бүленде. Ә ҙс төмәндең урталағыһын запаста ҡалдырып, ҡалған икенен күлдең бирге яғында тупланған башҡорт ғәскәрҙәреиә ҡаршы йүнәлдерҙе Джэбэ.

— Хәҙер алға, ҙур тиҙлектә дошманды ҡыйратырға, — тип ҡысҡырҙы ул.

Һыбайлы татар-монголдар саң-туҙан борхотоп алға ташланды.

Уларҙың йән-фарман сабышыуы, ҡырағайҙарса һөрән һнлыуы өҙлөкһеҙ геүләүгә әүерелде.

Бер үк мәлде башҡорттар сиреүе яғында ла етеҙ хәрвкәтләнеү һиҙелде.

Кнслө ел-дауыл шикелле ҙур тиҙлектә яҡынлашҡан татар-монгол һыбайлыларының сабауыллығынан ҡурҡып, баш корттар паникаға бирелеп ҡаса башлар һәм улар аяуһыҙ тураҡланыр һымаҡ тойолдо сиреүҙең Баш командующийы Сурман ханға.

Әммә бер генә һыбайлы башҡорт егете лә урынынан ҡуҙғалманы. Уларҙың алғы рәттәгеләре татар-монголдарҙың нстөнә иҫәпһеҙ-һанһыҙ уҡтар яуҙырырға тотондо. Дошман һыбайлылары, күпләп ҡырылыуҙарына ҡарамаҫтан, һаман туҡталманы, ҙур тиҙлектә яҡынлашты.

Ярандары менән ҡалҡыу урында торған Сурман хан, кпң далалағы күренеште көсөргәнешле күҙәтеп, әле бер, ә ле икенсе ырыу башлыҡтарына, ҡала-ҡаласыҡ кенәздәмнә сапҡындарын ебәрҙе һәм уларҙың һәр һорауын ҡәнәғатләндереү сараһын күрергә тырышты.

Дошмандың алғы сафтағылары башҡорт егеттәре торған ергә килеп еткәс тә, алыш башланды. Бер өҫкә күтәрслоп, бер аҫҡа төшкән ҡылыстар, ҡояш нурҙарына сағылып, өзлөкһеҙ ялтлай. Ана, бер нисә һуғышсы ергә ауҙы. Хужаһыҙ ҡалған аттар, бер-береһен аяуһыҙ ҡырған күмәк кешеләр ҡамауынан нисек ҡотолорға белмәйенсә,

артҡы аяҡтары менән тибәләнә-тибәләнә, бер тирәлә үрһәләнә. Үлеш-ҡыйралыш барған урындан ситкә тартыдырға тырышҡан хужаһыҙ аттарҙың кешнәүе Сурман ханды тетрәтте.

Алыш көсәйгәндән-көсәйә.

Һул яҡ фланг ауыр хәлдә икәнлеген аңлап, Дәржимән йәшел байраҡ янында торған атаһына һораулы ҡараш ташланы.

— Атай, минең һыбайлыларыма сират етте түгелме?

— Аллаһы тәғәлә көҙрәттәренә яҙмышыңды тапшырып, •бар, улым, ярҙамлаш, — тине Сурман хан.

Һыбайлы ир-егеттәрҙе эйәртеп, Дәржимән алыш көслә барған яҡҡа елдерҙе.

Бер үк мәлдә Джәбә баһатур тарафынан һуғышҡа индерелгән татар-монголдар ҙа урындарынан ҡуҙғалды. Улар, ҡамауҙағы башҡорттарға ярҙамға барыусы Дәржимән һыбайлыларының юлын бүлергә тырышып, тураға сыҡтылар.

— Егеттәр, ғәзиз еребеҙ именлеге, азатлыҡ өсөн үлһәк үләйек, әммә барлыҡ көсөгөҙҙө һалып һуғышығыҙ! Беҙҙең өсөн йә үлем, йә еңеү, — тип Дәржимән беренсе булып төмән башлығына ҡаршы ташланды.

Ике яҡ бергә килеп ҡушылғас, алыш ҡапыл көсәйҙе, үлеш-ҡыйралыш артты.

Дәржимән менгән күк айғыр татар төмәне башлығының атын күкрәге менән төрттө. Уны төртеп ауҙара алмағас, алғы аяҡтарын һалындырып үрә баҫҡан ыңғайы Дәржимәнгә һөжүм иткән төмән башлығының тимер күлдәк кейгән елкәһенән умырып тешләне лә, уны эйәренән айырып, күмәк ат тояҡтары аҫтына бырағытты.

Башлыҡһыҙ ҡалған татар-монголдарҙы ҡурҡыу алды. Ләкин улар һуғыш майҙанын ташлап ҡасманы, алыш дауам итте.

Төмән башлығы ҡылысы менән һелтәнгәндә һыңар ҡолаҡһыҙ ҡалған күк айғыр, тимер ауыҙлығын сәйнәй-сәйнәй, ыңғырашҡан тауыш менән ауыр хорхолдауҙан туҡталмайынса, иң хәүефле минутта һыртындағы хужаһын үлемдән ҡотҡарыға өлгөрҙө. Аты ярҙамына һәр саҡ ышанған Дәржимән үҙен ышаныслы тотто. Уның ҡыйыулығы ир-егеттәрҙең еңеүгә ышанысын арттырҙы һәм рухын күтәрҙе.

Дәржимән сираттағы дошманың башын өҙә сапты ла икенсеһенен кәкре ҡылысына аркыры ҡылыс ҡуйырға өлгөрҙө һәм һөжүмгә күсте. Бер-береһен еңә алмай, торған урындарында байтаҡ ваҡыт тапандылар. Дошман нойоны

|ты ла бик етеҙ, йылғыр булып сыҡты. Шул арҡала алыш озаҡҡа барҙы.

Дошман нойоны ҡаты яраланғас, Дәржимән ҡамауҙағы баш корттарға ярҙамға ташланды. Ул алыштың иң хәл **ИТкес,** хәүефле урынында татар-монголдарҙы аяуһыҙ **тураҡланы.** Ҡурҡыуҙың ни икәнлеген белмәгән Дәржимән **был** минутта үҙе лә йыргкыстарса ҡыланды.

Тыуған иленә яу менән килеүсе татар-монгол ҡанын ни **ПИКлем** күберәк ҡойһа, шул саҡлы уларҙы күберәк үлтерергә, ҡырырға тигән тетрәткес тойғо Дәржимәндең күКСлендә ҡуҙғыта барҙы.

Иренең батырлығына рухланған Аҡсабикә менән баш-**Ка** ҡатындар ҙа алыштан ситтә ҡалманы. Улар һуғыштың иң **хәүефле** урынынан китмәйенсә, ир-егеттәр менән бергә монголдарҙы тураҡланылар.

Сабый сағынан уҡ ирҙәр һөнәрен үҙләштергән Аҡса-**Викә** япа-яңғыҙы ҡалған саҡта ла, дошман ҡамауын йы-**ВЫП** сығып, һәр саҡ үлемдән иҫән-һау ҡотолдо. Әммә инсә к кенә ирҙәр менән бер тиң һуғышырға тырышмаһын, уның көсө һанаулы ине, ҡанға манылған ҡылысы ла ҡу ырая барған һымаҡ булып тойолдо.

— Үлһәк үләйек, дошман ҡоло булып йәшәмәйек, — |мп, ул хәле бик мөшкөлләнгәндә лә һуғыш майҙанын Гашлап китергә теләмәне.

Чалалағы алыш барышын көсөргәнешлек менән күҙәткән Сурман хандың йөрәге һыҡыранды. Ул әле бер, әле **цкенсе** ырыу башлыҡтарына һәм ҡала кенәздәренә ярҙамға өҫтәлмә көс ебәргән саҡта, бер үк һүҙҙәрҙе ҡабат-...ы:

— Ер-һыу именлеге, атай-олатайҙарҙан мираҫҡа ҡалған ирек-азатлыҡ өсөн көрәш — изгеләрҙән изге бурысыбыҙ. Дошманды мотлаҡ еңергә тейешбеҙ!..

Ьатырҙарса һуғышты башҡорттар.

Аттар һәм кешеләр мәйете менән тулы далалағы алыш **Вайтаҡ** ваҡытка һуҙылды. Яралыларҙың ярҙам һорап ҡысҡырышыуы, аттарҙың кешнәшеүе, ярһыу һуғышсыларҙың л\ та ох тын алыуы, һөңгөләрҙең һөңгөләргә, ҡылыстарҙың ҡылыстарға бәрелеп өҙлөкһеҙ сыңлауы туктауһыҙ буталсыҡ тауышҡа әүерелде.

Ике яҡ та еңелергә теләмәне.

Ҡояш байып эңер яҡынлашҡанда ғына татар-монголдарҙың ҡыҫымы бер аҙ кәмене. Улар ҡапыл, бөтөнләй көтмәгәндә, үлеләр менән яралыларҙы һуғыш майҙанында •калдырып, ҡайҙалыр тарҡалдылар һәм күҙ алдында юҡ **булдылар.**

— Уларҙың ҡыланышын нисек аңларға? — тип һораны вәзирҙәрҙең береһе, ғәжәпләнеп.

— Күрмәйһеңме, беҙ ендек, — тине икенсеһе.

Сурман хан да, һуғыштың ҡапыл бөтөүе сәбәбен аңламайынса, аптыраны.

— Евдек, тип ҡыуанырға иртәрәк түгелме? Берәй хәйләгә ҡоролманы микән бындай хәл? Татар-монголдарҙың аттары үтә сыҙамлы, йөҙәр саҡрым ерҙе ялһыҙ-нисһеҙ, бер тәүлек эсендә йән-фарман сабып уҙырға һәләтле, тиҙәр. Уларҙың сигенеүе, бәлки, хәйләгә ҡоролғандыр. Шуға һаҡ, үтә уяу булыу кәрәк. Ҡасып китеү һылтауы менән уларҙың икенсе яҡтан һөжүм башлауҙары ихтимал.

Дала шып-шым булып ҡалды.

Алыш ваҡытында өҫ кейемдәре бысранған һуғышсы ир-егеттәр, арып-талыуҙарына ҡарамаҫтан, үлеләр араһындағы яралыларҙы йыйып, уларҙы дауалаусылар ҡарамағына тапшырҙылар.

Иҫән-һау ҡалыуҙарына Дәржимән менән Аҡсабикә лә ҡыуаныс киҫерҙе. Улар, күл буйына барып йыуынғас, өҫ кейемдәрен алмаштырып хәл йыйырға ғына ултырғайны, төрлө яҡҡа ебәрелгән сапҡындар татар-монголдарҙың дала аръяғындағы уйһылыҡта төн уҙғарырға йыйналыуҙары хаҡында әйттеләр.

Дәржимән сапҡын күрһәткән яҡҡа ынғайланы. Бейек ҡалҡыулыҡҡа күтәрелеп, алыҫтағы күмәк уттарҙың ялҡынланып яныуын күргәс, ул яманһыу һуланы.

— Тимәк, һуғыш бөтмәгән, уның дауамы иртәгә булаҫаҡ!..

Сурман хан һуғышта ҡатнашыусы ҡала кенәздәре менән ырыу башлыҡтарын йыйҙы. Иртәгә ҡабатланаҫаҡ алышҡа ныҡлы әҙерлек башларға ҡушты ла аш бешереүселәр хәстәрләгән ризыҡты ашарға ултырҙы.

Шул саҡ бер төркөм башҡорттар, ҡыҫҡырыша-ҡыҫҡырыша, һыңар аяғы ҡаты яраланған кешене алып килделәр:

— Монголдарҙың оло түрәһен тоҙаҡҡа әләктерҙек!

— Ул, беҙҙе күргәс, ҡасып ҡотолорға маташты!

— Һөңгө менән сәнсеп үлтерергә булғайныҡ, беҙҙеңсә һөйләшә белә икән, үлтермәгеҙ, тип ялына башланы!

— Эйе, һеҙгә берәй файҙам тейер, ти!..

Аяғы аҫтында ҡанһырап ятҡан әсиргә Сурман хан ерәнес менән ҡараны.

— Һин кем?

— Мин Джэбэ баһатурҙың тылмасы [1], — тине әсиргә

[1] *Тылмас* — тәржемәсе.

әләкләгән кеше, яраһы һыҙлауына сыҙай алмайынса тештәрен ҡыҡырайта ҡыҫып.

— Тылмастың урыны яуҙамы ни?

— Мин яуҙа ҡатнашманым.

— Яуҙа ҡатнашмағас, нисек яраландың?

— Джэбэ баһатурҙың махсус йомошсоһо вазифаһын башҡарганда яраландым... Төркисә-ғәрәпсә һөйләшергә белгәнгә тем өсөн төмән башлығы мине үҙе менән бергә йөрөтә ине.

— Татар-монгол сиреүендә хеҙмәт итергә мәжбүри итмәһәң ҙә, бит?

— Мәжбүри иттеләр шул. Улар йыртҡыс, ҡан эскес!.. Бер кемде лә һуғышҡа барыуҙан ҡоткармайҙар. Минең кеүек мдс лә улар баҫып алдылар, таланылар, үҙҙәренә хеҙмәт итергә теләмәүселәрҙе яман ҡырҙылар.

— Һин татармы?

— Юҡ, мин — ҡжурчжэн.

— Ҡжурчжэн? — Сурман хан, аптырап, яурындарын ҡыймылдатты. — Ундай кешеләр барлығын ғүмеремдә ишеткәнем булманы. Илеңдә йәшәгәндә нимә менән шөғөлләнделәң?

— Һөнәрем буйынса мин — ғалим.

— Исемең нисек?

— Удбар...

Әсиргә алыныусы ысынлап та ябай кеше түгел икәнлеген белгәс, вәзирҙәр менән ырыу башлыҡтары нимә хаҡында ҡыҙ-ара ҡыҙыу бәхәсләште. Уларға иғтибар итмәйенсә, Сурман хан үҙен ғалим тип таныткан Удбарға ынаулы ҡараш ташланы.

— Һинең һөнәрең нимә буйынса?

— Минең һөнәрем күп төрлө. Шуның өсөн дә мине татар-монголдар үлтермәне, төрлө ғилми эшемде файҙаланыу маҡсатынан иҫән ҡалдырҙылар, — тине Удбар, тамам тынысланып.

— Ҡжурчжэндар дәүләте татар-монголдар тарафынан тотошлай ҡыйратылдымы?

— Дөрөҫөн генә әйтә алмайым. — Яралы аяғы һыҙлауына питегеп, Удбар байтаҡ ваҡыт өндәшмәй ултырҙы. — Ҡжурчжэндар күп һанлы. Уларҙың ҡыйратылғандан ҡалғаны байтаҡ өлөшө иҫән-һау булыуы ихтимал. Уларға бар көлемсә ярҙамлашырға, көс тупларға тырышыу — минең Ьл маҡсатым. Шуға күрә мин үҙемде үҙем һаҡларға те-

Ишмен...

— Татар-монголдарға үс тотҡас, ниңә беҙҙән ҡастың? — тип һораны уны тотоп килтереүселәрҙең береһе.

— Күрәләтә үлгем килмәгән есөн.

Чжурчжэн ғалимының бер нәмә лә йәшермәүе, һәммәһен асыктан-асык һөйләүе Дәржимәнде арбаны һәм ул күптәнән маҙаһына тейгән нәмәне һорамай булдыра алманы.

— Джэбэ баһатурға бүләк алып барыусы Мырҙым бей тигән кешенең яҙмышы һиңә билдәле түгелме?

— Билдәле.

— Әле ул ҡайҙа икән?

— Каруан Ҡараҡором ҡалаһына оҙатылды...

Мырҙым бей менән барлык башҡорттар Джэбэ тарафынан язаланып үлтерелеүе тураһында әйткәс, шау-шыу ҡупты:

— Ниндәй яуызлык! I

— Аш менән атҡанға таш менән атҡандар!

— Мырҙым бей татар-монголдарҙың мәрхәмәтлегенә ышана ине бит!

— Татар-монголдарҙан яманлыктан башҡаны һис көтөргә ярамай!

— Уларға бер ниндәй аяу булмаясаҡ!

— Үлемгә — үлем, ҡанға — ҡан!..

Атаһының фажиғәле үлемен үтә ауыр кисергән Аҡсабикә, үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр йән әрнеткес хәсрәткә бирелеп, үкһеп-үкһеп иланы.

Төн уртаһы етеүгә Аҡсабикәнең хәле ҡапыл мөшкөлләнде һәм ул етлекмәгән ауырынан бушанды...

Ҡатыны ғүмере өсөн ҡурҡҡан Дәржимән, уға нисек ярҙам итергә белмәйенсә, әле бер, әле икенсе дауалаусыны саҡыртты.

— Ниңә яуға алып сыктым икән һине? Әйткәнде тыңламаның, уғата үҙ һүҙлеһең шул! И, тәңрем, ярҙам ҡыл,— тип өзгөләнә-өзгөләнә мәжүсиҙәрҙең им-томсоларын саҡыртырға булғайны, Аҡсабикә иренең яурынына ҡуш ҡуллап йәбеште.

— Юҡ, зинһар, уларҙы саҡыртма!.. Мин — мосолман бисәһе, ақтык ғүмеремә саҡлы ислам диненә тоғро ҡаласаҡмын, һөйөклөм!.. Мине кәрәгенән артык сөсөкләүең дә килешмәй!.. Башҡорт бисәләре борон, бик борон заманда ла бешек булған... Хатта ирҙәре менән бергә яуға йөрөгәндә лә бәпәйләгәндәр. Башҡорт бисәһе, һыбай барышлай, берәй аулаҡ ерҙә туҡталып бәпәйләгән дә, сепрәккә төргән сабыйын түшенә аҫып, ире артынан сапҡан... Боронғо башҡорт бисәләренән мин кәмме ни?..

— Мөмкинлекте файҙаланмайынса, күрәләтә үҙеңде ниңә ыҙалатырға?

— Мин ыҙаламайым... — Аҡсабикә ауырлык менән

Ғмип йыш һуланы. — Миңә етлекмәй тыуған сабый менән атайымдың үлеме ҡыҙғаныс!

— Тыныслан, аҡыллым, тыныслан!

А ксабпкә, тынысланa алмайынса, баш сайҡаны.

— Иртәгә һуғыш ҡабатланғас, мивд нисек кенә ҡыйын **булмаһын,** яуыз дошмандан үс аласаҡмын!

— Һпнән башҡа ла үс алырҙай батырҙарыбыҙ күп,— тине Дәржимән.

А ксабикә, йөрәге түгел, йәне-тәне сыҙай алмаҫлык булып һыҙлауын иренә белгертмәҫкә тырышып, көс-хәлгә түҙҙе.

— Атайымдың нисек үлеүе тураһында һөйләгән кеше нәге күренә. Уны рәнйеттертмә, яраһы бер аҙ йүнәлгәс тә, тыуған нленә ҡайтырға ярҙамлаш.

— Ярҙамлашырмын, һөйөклөм, ярҙамлашырмын. Саҡ ҡына булһа ла серем итеп алырға тырыш, — тине Дәржимән.

.•\ ксабикә өндәшмәне. Бәлки, атаһы иҫәндер? Чжурчжэн ғалимының яңылышыуы ихтимал. Каруанды бер генә кеше оҙатып барманы бит! Кемдең кем икәнлеген татар-монголдар беләме ни? Юҡ, Аҡсабикәнең атаһы үлә торғандарҙан түгел, ул иҫән булырға тейеш!

Уйланып ята торғас, Аҡсабикә атаһының иҫәнлегенә үҙен-үҙе ышандырҙы. Иыйылма кейеҙ тирмә ишеге ана-**Вына** асылыр ҙа атаһы килеп инер һымаҡ тойолдо уға...

Бер нисә минут серем итеп алғандан һуң да, өмөтөцүп өҙөлмәйенсә, Аҡсабикә йоҡо аралаш атаһын саҡырҙы.

—- Атаһ, ҡәҙерлем, кил, минең эргәмә ултыр!..

Дарыу үләндәрен ҡатыштырып баҡырсала ҡайнатылған йылымыс һыуҙы эскәс, һаташыуынан баҫылып, Аҡса-**Викә** йоҡоға сумды.

Иртәнге тынлыҡты боҙоп, башҡорт егеттәрен һуғышҡа **перләнергә** өндәгән барабандар менән борҙо тауыштарын да пшетмәне ауырыу.

— Ярар, йоҡлаһын. Үҙе уянғанға саҡлы уятмағыҙ,— Аҡсабикәне һаҡларға иң ышаныслы егеттәрҙе тәғәйенләне лә Дәржимән дошман станына табан ыңғайланы.

Ләкин татар-монголдар төн уҙғарған буп-буш урынды **Күргәс,** Дәржимән ғәжәпкә ҡалды. Төрлө урындарҙа утлы торонбаштарҙың быҫкып яныуынан, ташландык нәмәләр менән сүп-сарҙан башҡаһы ҡалмауын нисек аңларға? Дошман сиреүен ер йотмағандыр бит?

«Бындай күренеш дошмандьщ яуызлык ҡылырға йүнәлтелгән хәйләһе түгелме икән? Ҡасып киткән һылтау менән беҙҙең көстө тарҡауландырырға һәм аңғармаҫтан **МЖум** итергә ниәтләнмәй микән Джэбэ?» — тип уйлап,

Дәржимән чжурчжэн ғалимын татар-монголдар төн уҙғарған ергә алып килергә ҡушты.

— Джэбэ баһатур сиреүе Башҡортостандан бөтөнләйгә киткән, — тине лә Удбар мәсьәләне асығыраҡ итеп төшөндөрөргә тырышты. — Мин татар-монголдарҙың тактикаһын яҡшы беләм. Бер тапҡыр көс һынашҡандан һуң еңеләсәктәре беленһә, улар һуғышты ҡабатламай...

— Татар-монголдар беҙҙе бүтән маҙаһыҙламаҫ микән? — тип һораны Сурман хан.

— Белмәйем... — Чжурчжэн ғалимы уйға ҡалыбыраҡ торҙо. — Уларҙың был яуы һеҙҙең көстө һынау өсөн башҡарылғандыр, бәлки? Сыңғыҙ хан теләһә, татар-монголдарҙың оло сиреүе ҡабаттан Башҡортостанға ябырылыуы ихтимал.

— Дошман сиреүенең килерен-килмәҫен нисек белергә?

— Татар-монгол сиреүенә ышаныслы шымсылар ебәреүҙе ойоторорға кәрәк. Сыңғыҙ хан ҡайҙа, ниндәй көс, байлыҡ барлығын һәм сит ил дәүләте башлыҡтарының уй-хыялдарын шымсылары ярҙамында белә.

— Сит ил дәүләте башлыҡтары шымсыларҙы үҙҙәренә яҡын юллатамы ни?

— Иң бай сауҙагәрҙәрҙең, шул уҡ сит ил дәүләте башлыҡтары йә хан эргәһендә өйөрөлөп-сөйөрөлөп йөрөүсе вәзирҙәрҙең, абруйлы кешеләрҙең, мулла-монтағайҙарҙың дуҫмы, дошманмы икәнлеген кем белә, ти?

Удбарҙың кәңәше өсөн рәхмәт белдереп, Сурман хан Сыңғыҙ хандың тәжрибәһен һис кисекмәҫтән файҙаланырға теләк белдерҙе. Әммә ундай эште башҡарыуға ваҡыт наҡыҫ. Нисек кенә булмаһын, дошман яуын кире ҡағыу өсөн ашығыҫ рәүештә көс туплау һәм ҡорал әҙерләү мөһим.

XII

Джэбэ баһатур сиреүе һөжүмен башҡаса ҡабатламаны. Башҡортостанды буйһондороу еңел булмаҫы асыҡланғас, Джэбэ Урта Азияға ҡарай юлланды.

Урта Азиялағы илдәргә ҡаршы һуғыш башларға әҙерләнгән Сыңғыҙ хан менән осрашҡас, ул башҡорттарҙың сая батырлыҡтары арҡаһында уңышһыҙлыҡҡа тарығыуы тураһында асыҡтан-асыҡ әйтте.

Дөрөҫөн һөйләгән өсөн нойон Джэбэ баһатурға Сыңғыҙ хан асыуланманы. Иәшкелт-һары күҙҙәре менән бейек үксәле ҡып-ҡыҙыл итегенә төбәлгән көйө, оҙон итеп үҫтергән һаҡалын һыпыра-һыпыра, оҙаҡ ендәшмәй ултырҙы.

Шунан, киң яурынлы елле кәүҙәһен еңелсә ҡыймылдатып ас **кәмәһенән** күтәрелгәс, Джэбэгә ҡәнәғәтләнеүен белдерҙе:

— Ҡайғырма, бушҡа йөрөмәгәнһең. Күп байлыҡтар **ртыулы** дөйәләр, аттар каруанын Ҡараҡором ҡалаһына оҙатыуың — үҙе оло табыш! Башҡорттарҙың көсө лә асыҡланды. Башҡортостанды барыбер буйһондорасаҡбыҙ һәм беҙгә ҡаршылашыуҙары өсөн башҡорттарға аҙаҡтан бик ныт **укенергэ** тура киләсәк! Әлегә төп көстө, тарҡалдырм.ш. Урта Азиялағы илдәргә йүнәлдереү мөһим.

Сыңғыҙ хандан маҡталыуға ҡыуанып, Джэбэ баш бйҙе.

— Рәхмәт! Миңә хәҙер ни бойораһың?

— Әлегә төмәндәреңә ял бир. Башҡортостандағы нуышта ҡыйыулыҡ күрһәтеүселәрҙе минең исемдән бүләкләә, — тип Сыңғыҙ хан күн тоҡсай тулы алтынды тоғро **Иойоһына** тотторҙо ла, бер аҙ уйға ҡалыбыраҡ, өҫтәне: — Хорезм шаһы Мөхәммәт менән беҙҙең мөнәсәбәт тулыһынса ҫасыҡланғас, һиңә ни эшләргә кәрәклеген әйтермен.

— Рәхмәт!

Джэбэ аҡ тирмәнән сыҡҡас, Сыңғыҙ хан Арал диңгеҙе ме**ә**н һырҙан фарсы ҡултығына, Памирҙан һәм Сөләймән тауҙарынан көнбайыштағы Загрос тауҙарына тиклемге ерҙәрҙе буйһондороусы Хорезм шаһы иленә ебәрелгән шымсыларын, мунхиҙары [1] менән сауҙагәрҙәрен берәм-берәм ҡарып һөйләште.

Мунхиҙар араһынан иң файҙалыһы Мәхмүт булды. Ул, сауҙагәр-мосолман булараҡ, Хорезм шаһы Мөхәммәт Икенсегә **бик** еңел яҡынлашты. Уның эс-бауырына кереп, ышанысын яуланы һәм уның барлыҡ серен асыҡланы. Бына хәҙер, Сыңғыҙ хан менән аулаҡта икәүҙән-икәү генә осҡ.ммҡас, һәммәһен түкмәй-сәсмәй һөйләне. Шуға күрә Хо**КӘМ** дәүләтендәге яңылыҡты, кешеләрҙең көнкүрешен, **Ьеодалдарҙыа** һәр саҡ үҙ-ара ыҙғышыуын, Мөхәммәт шаһтың Теркен-хатун [2] исеме менән йөрөтөлгән әсәһе менән \|н,гк тел таба алмауын асыҡлағас, Сыңғыҙ хан уларҙы дошманлаштырырға һәм шул ҡаршылыҡты файҙаланырға **Тырышты.**

— Беҙҙең көс-ҡеүәтебеҙ, бер ҡасан да еңелеү белмәҫ **Иреүебеҙ** хаҡында Урта Азия илдәрендә шымсылар ярҙа**Ьында** хәбәр таратырға һәм ундағы барлыҡ кешеләрҙең ҡәҙерен алырға. Паникаға бирелеүселәр көнбайышҡа табан **күплəп** ҡаса башлағас ҡына, беҙгә Хорезм мәмләкәтенә [3] **мжүм** башларға мөмкинлек тыуасаҡ, — тине Сыңғыҙ хан.

[1] *Мунхи* — шымсы, шпион.
[2] *Хатун* — госпожа, әфәнде.
[3] *Мәмләкәт* — ил, империя.

1219 йылдың сентябрь аҙағында күптәнге хыялын тормошҡа ашырырға ниәтләнеп, Сыңғыҙ хан ике улына, Сығытай менән Үгәҙәйгә, Азиялағы Отрар ҡалаһын ҡамауҙа тоторға ҡушты. Улар китеп аҙна самаһы уҙғас, оло улы Джучиға дошмандың Алаҡ нойон отрядын ҡыйратырға һәм һырдаръя ярындағы ҡаланы һуғышып алырға, ә Джәбә менән Сүбәдәй баһатур корпустарына Амударъя йылғаһы аръяғындағы Төньяҡ Иранды ҡыйратырға, Кавказдағы барлыҡ мәмләкәттәрҙе буйһондорорға һәм артабан хәрәкәт итергә бойорҙо.

Джучи командалығындағы сиреүҙең ҙур уңышлыҡтарға өлгәшеүен белгәс, Сыңғыҙ хан уға һуғышып алынасаҡ Иртыш, Арал диңгеҙе һәм Амударъя тирәһендәге барлыҡ улустарҙы бүләк итеп бирәсәген белдерҙе.

Сыңғыҙ хандың йомартлығы Джучиҙы ғына түгел, башҡа сиреү башлыҡтарын да еңеүҙәргә рухландырҙы.

Татар-монголдарҙың ҙур тиҙлектә ябырылып килеүен ишеткәс, Хорезм шаһы Мөхәммәттең ҡото алынды. Ғәскәре дүрт-биш тапҡырға күберәк булыуына ҡарамаҫтан, Сыңғыҙ хандың ҡыйыу нойондарьша ҡаршы һуғышырға уның баҙнатсылығы етмәне.

— Эре ҡалаларҙы дошман яуынан һаҡлап алып ҡала алһаҡ, беҙ бәхетле буласаҡбыҙ, — тип ул Джейхун — Амударъя йылғаларына табан сигенергә бойорҙо һәм шуның менән ғәскәре көсөн тарҡатты.

Сыңғыҙ хандың ғәскәрҙәре, ҡаршылыҡ осратмайынса, өҙлөкһөҙ алға барҙы.

Ҡамауҙағы Отрар ҡалаһының ҡасан һуғышып алынырын көтөргә теләмәйенсә, Сыңғыҙ хан менән уның кесе улы Толой командалығындағы сиреү, ҡыҙыл ҡомло сүл аша уҙғас, туп-тура Бохараға ынғайланы. Юлда барышлай Зернун һәм Нур ҡалалары буйһондоролдо. Ул ҡалаларҙа йәшәүсе барлыҡ ир-егеттәр татар-монгол хашарына ҡушылды, ә ҡалғандары тотошлай ҡырылды, байлыҡтары таланды. Ҡалаларҙағы гарнизондарҙы ҡалдырып ҡасҡан Хорезм шаһы сиреүе һуғышсылары ла үлемдән ҡотола алманылар, Амударъя ярҙарына етер саҡта ҡыуып еткән татар-монголдар тарафынан тулыһынса ҡыйратылдылар.

Ислам дине әһелдәре ҡәлғә ҡапҡаларынан сығып, Сыңғыҙ ханды икмәк-тоҙ менән ҡаршыланылар.

— Рәхим ит, Бөйөктәрҙән бөйөк хан!..

Сыңғыҙ хан уларҙы иғтибарһыҙ ҡалдырҙы. Ул, ҡулдарын алға Ъоноп ялағайланыусы дин әһелдәре эргәһендә туҡталып тормайынса, һыбайлы нойондарынан һәммәһен сыҡырата тапатып-иҙҙертеп, шар асыҡ баш ҡапҡанан уҙҙы һәм ҡалалағы байлыҡты таларға ҡушты.

Татар-монголдар шығырым тулған ҡала урамдарында Шлу-шыу, ығы-зығы күпты.

Нмам-хәҙрәттәр биргән ҡала асҡысы менән Сыңғыҙ хан баш мәсеткә табан ынғайланы.

Мосет эсенә һыбай ингәс, мәзиндән һорап алған ҡорьондс һуғышсыларының аяғы аҫтына бырағытты ла ул Пофротләнеп ҡысҡырҙы:

— һәммәһен онтарға, емерергә!..

Татар-монголдар ҡоторондо.

Баш мәсет эсе бысратылып-мәсхәрәләнеп, ундағы бөтә мөлкәт ҡырағайҙарса ҡыйратылды. Ҡорьәндәр кәртә эсе шығырым тулы кешеләрҙең аяғы аҫтына бырғатылды. Дини китаптар наҡланған һандыҡтарҙан яһалған кәритәләргә һоло һалып, ат ашаттылар. Имам-хәҙрәттәргә, шәйехтәргә һуғарыу бурысы йөкмәтелде.

Сыңғыҙ хан ҡала байҙарының исемлеген алдырҙы һәм уларҙың байлығын йыйҙыртыу өсөн махсус кешеләр тәғәйенләне.

Шаһтың төрөктәрен берләштергән төркөм ҡала эсен-Доге хисарҙа [1] бикләнеп ултырыуын белгәс, Сыңғыҙ хан кисәрҙы штурмлап алырға бойорҙо.

Ике көн ваҡыт эсендә ағас ҡала тотошлай янып бөтөп, Ьпш мәсеттең кирбес стеналары менән өс таш йорт ҡына имен ҡалды.

Вохаралағы төрөк хандары, ырыу-ҡәбилә башлыҡтары, йрифтар, ябай яугирҙар, эшкә яраҡһыҙ аҡһаҡалдар менән карттар тотошлай үлтерелеп, уларҙың катындары менән Рпла-сағаһы ҡоллоҡҡа оҙатылды, һылыу ҡыҙҙар татар ергеттәренә бисәлеккә таратылды йәки ҡала урамдарында орго йығып мәсхәрәләнде.

Имам Рукн ад-дин менән уның улы ҡазый Садр ад-дип, татар-монголдарҙың вәхшиҙәрсә ҡыланышына түҙә алмайынса, асыуҙарының ақтык сигенә етеп, катын-кыҙҙы урамда кесләүселәргә ташландылар [2].

— Аҙғынлыкты туктатығыҙ, ҡәбәхәттәр!..

Әммә көс тиң түгел ине. Ҡатын-кыҙҙы әрсәләргә матгаиыусы дин әһелдәре ҡоторонған татар-монголдар тарафынан шундуҡ тураҡланып ташландылар.

Татар-монголдар мәсхәрәләгән ҡатын-кыҙ ҡала ситендоге ҡола яланға кейемһеҙ-ризыкһыҙ ҡыуылғас, иҫән ҡалдырылған йәштәрҙе йыйҙыртты ла Сыңғыҙ хан уларҙың ҡаршыһына сығып баҫты.

[1] *Хисар* — цитадель.

[2] Ибн ал-Асир, Ал-Камил фи-т-тарих, т. XII, 238—240-сы биттәрҙе ҡарағыҙ. Бохаралағы фажиғәле куренештәр Джувейниҙың «Тарих-и джахангушай» исемле хеҙмәтендә лә яҙылған.

— Икенен берен һайлағыҙ: хашарға үҙ ирке менән яҙылырға теләүселәрҙе, иҫән ҡалдырып, уларға ғүмер бүләк итәм, теләмәүселәрҙе яҡты донъянан юҡ итәм!

Иәштәр Сыңғыҙ хан хашарына яҙылырға теләк белдерҙе һәм улар шул уҡ көндө Сәмәрҡанд ҡалаһын штурмлауға ҡыуылды.

Юлда йәйәү барышлай ризаһыҙлыҡ белдереүселәрҙе һәм хәлдән тайып йығылғандарҙы ҡылыс менән тураҡланылар.

Сәмәрҡәнд ҡалаһының стеналары эргәһендә йөҙ меңдән ашыу яугирҙар менән бик күп филдәре һөжүмгә әҙер тороуы хаҡында шымсыларынан хәбәр алғас, ҡараңғы яҡынлашыуына һылтанып, Сыңғыҙ хан нойондарын ялға туҡтатты.

Сыңғыҙ хан менән уның ярандарын хеҙмәтләндереүсе махсус кешеләр тирмәләрҙе тиҙ арала ҡорғас та, юлбарыҫ һүрәте төшөрөүлө аҡ байраҡ эргәһендәге Баш тирмәне һаҡсылар уратып алды, ә шамандар, тимер-томорҙо зыңҡылдатып һикерәнләй-һикерәнләй, әҙәм заты күҙенә бер ҡасан да күренмәгән шайтандарҙы ҡыуырға тотондолар.

Хан аҡ тирмә эсенә инергә ҡабаланманы.

Аҡ тирмә ишеге алдында туҡталып, ул тирә-яҡты күҙәтте. Уттар яғып киске тамаҡ туйҙырырға әҙерләнеүсе яугирҙарының ҡыланышы үтә мәҙәк һәм мәғәнәһеҙ һымаҡ булып күренде уға. Һуғышсыларының күбеһе иртәгә, иртәгә булмаһа иртәнән һуңға үләсәк һәм донъянан мәңгегә эҙһеҙ юғаласаҡ. Себендәрҙекеләй ҙә тормай бит уларҙың ғүмере! Ер сигенә саҡлы етеп, донъялағы барлыҡ мәмләкәттәрҙе үҙенә буйһондорһа, Сыңғыҙ хан ғына тарихта ҡаласаҡ. Уның исеме, батырлығы, ҡылған эше мәңгелек. Йөҙәр, меңәр йылдар уҙғанда ла уны онотмаясаҡтар. Бөтөн донъя кешеләре уға, тик уға ғына буйһонорға тейеш. Сөнки яҡты донъяла йәшәүселәрҙең берҙән-бер хакимы итеп Бөйөк һауа Сыңғыҙ ханды һайлаған. Ул Бөйөк һауа алдында ғына көсһөҙ. Тормошо, ғүмере, һуғыштарҙағы уңыштары ла Бөйөк һауаның мәрхәмәтлегенә тураһан-тура тығыҙ бәйләнештә...

Татлы уй-хыялдарын йәһәтерәк бойомға ашырырға ашҡынған хан Сәмәрҡәндте ҡамау планын тикшереү өсөн ғәскәр башлыҡтарын кәңәшмәгә йыйҙы.

Мәсьәлә ыңғай хәл ителгәс, тамам тынысланып, кәңәшмәлә ҡатнашыусы нойондары менән бергә ултырып тамаҡ туйҙырҙы ла ул аҡ тирмәнән сыҡты.

Яугирҙары ҡыҙыу итеп яғылған уттар янында һаман

•заплана. Сиреү артынан ҡыуып килтерелгән малдарҙы **Һуйып,** ит бешерә, сәй ҡайната торҡандарҙыр...

Кешеләр йоҡларға яткас, тирә-яҡ тын булып ҡалды. Дозорҙар меһән һаҡсылар бер-береһенә һүҙ ҡушҡан саҡта ғына төнгө тынлыҡ боҙола.

Таң яҡтыһы беленгәндә ер өҫтө дубулбастар менәге борҡо тауыштарына күмелде.

Уларҙың тауышын ишетеп уянғас та, Сыңғыҙ хан түшәгенән һикереп торҙо. Йәһәт кенә йыйынып тамағын туйҙырҙы ла, аҡ тирмә ишеге алдына килтерелгән атына атланғас, баш борғосоға борҡо уйнарға бойорҙо. Уға башҡалары ла ҡушылғас, яугирҙарҙың етеҙ хәрәкәтләнеүе һиҙелә.

Күп тә уҙманы, бер осонан икенсе осона тәүлектәр **буйы** ныбай сапҡанда ла барып етә алмаҫлыҡ оло сиреү, ҡуйы туҙан өйөмөн урғылтып, бүленгән юлын дауам итте.

* * *

Дошман ғәскәренең һан яғынан күп икәнлеген ишетеге **рорсолоуы** бушҡа ғына булған Сыңғыҙ хандың. Уның сиреүе яҡынлаша башлағас та, ҡоттары алынған яугирҙарҙың күбеһе ҡала эсенә инеп бикләнде, ә стена тышында гпроп ҡалғандары батырҙарса алышты.

Уларҙың көслө ҡыҫымына сыҙай алмайынса, татар-монголдар сигенә башланы.

— Әһә, беҙ ендек!

-- Дошман беҙҙән ҡурҡып ҡаса, — тип ҡыҫҡырыша-**Кыскырыша,** ҡаланы һаҡлаусылар ажарланып алға таштандылар.

Татар-монголдар һаман сигенде. Үҙҙәрен эҙәрләп киЛеүселәр ҡала стеналарына байтаҡ алыҫлашҡас ҡына, **СИгенеп** барыуҙан ҡапыл туҡталып, улар ҡаланы һаҡлауСЫларҙы уратып алдылар һәм аяуһыҙ тураҡларға тотондолар.

Ҡала тышындағы үлеш-ҡыйралышты ҡала эсендәге өҫкө ҡатлам кешеләре үҙҙәре өсөн файҙаланырға тырыштылар.

Шәйх әл-ислам, ҡазый һәм имамдар, ҡалала йәшәүселәргә белгертмәйенсә, Сәмәрҡәндте дошманға һуғышһыҙ (шрергә үҙ-ара килешкәс, Сыңғыҙ хан вәкиле менән йәшерен бәйләнеш булдырҙылар. Үҙҙәренә, туған-тыумасаларына, белеш-таныштарына татар-монголдар яманлыҡ ҡылмансағына Сыңғыҙ хандың ризалығын алғас та, улар ҡаЛа ҡапҡаһын астылар һәм дошман һуғышсылары эскә ябырылды.

Дошман ҡамауын көс-хәлгә йырып, меңәрләгән төрөктәре менән ҡала тышына сыҡҡан Алп-Әр-хан батыр үлем язаһынан ҡасып ҡотолдо, ә хисарҙа ҡалыусылар сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы һуғышып үлде.

Иҫән ҡалған хандар менән әмирҙәр, Сыңғыҙ хандың мәрхәмәтлегенә ышанып, илле мең кешене берләштергән ғәскәрҙе әсиргә бирелергә күндерҙеләр һәм улар бер төн эсендә тулыһынса тураҡланды.

Ҡатын-ҡыҙ аяуһыҙ көсләнде [1], бала-саға һәм утыҙ мең самаһы оҫта һөнәрселәр Сыңғыҙ хандың туған-тыумасаларына ҡоллоҡҡа таратылды, илле мең ир-егет хашарға-ялпыға яҙылды, ике йөҙ мең динарға азатлыҡ һатып алыусыларға ғына үҙ иркенә йәшәргә рөхсәт ителде [2].

Бохара менән Сәмәрҡәндте ҡыйратыуға ғорурлыҡ тойғоһон кисергән Сыңғыҙ хан, яңынан-яңы ерҙәрҙе буйһондорорға ашҡынып, сиреүен артабан барырға ҡабаландырҙы.

Сыңғыҙ хан таңдан алып киске ҡараңғыға тиклем эйәренән төшмәне. Арыған ат урынына икенсеһен алмаштырып менде лә, йән-фарман сабып барышлай, төмән башлыҡтарының әле береһенә, әле икенсеһенә яңынан-яңы бойороҡтар менән сапҡындарын ебәрҙе.

Бәйләнеш өҙолмәгәнлектән, сиреүҙәге хәл-ваҡиғаны Сыңғыҙ хан яҡшы белде. Мохтажлыҡ кисергән нойондарына тейешле ваҡытта ярҙам ойоштороргә ла өлгөрҙө.

Бөтә нәмә ыңғай, уңышлы барыуына Сыңғыҙ хан ҡыуаныс кисерҙе. Хонжендан [3] ҡалаһын һуғышып алыу тотҡарланыуы өсөн генә уның бер аҙ кәйефе ҡырылды. Ул ҡаланы ҡамауҙа тотоусы ғәскәренә Бохаранан, Сәмәрҡәндтән, Отраранан [4] ярҙам ебәреп тә файҙаһы теймәгәс, етмеш мең самаһы хашарҙы йыйып оҙаттырҙы. Әммә әмир Тимер Мәлик командалығындағы ҙур булмаған отряд, тереләй бирелергә теләмәйенсә, Хонжендан ҡалаһын һаҡлау өсөн батырҙарса һуғышты.

(Әмир Тимер Мәлик, тарихсы Джувейниҙың раҫлауынса, «Шаһнамә» әҫәрендәге Рөстәмгә тиң булырҙай батыр.)

Дошманға баш эйергә теләмәгән Тимер Мәликтең бәләкәй генә отряды һырдаръя тармағындағы утрауҙа торғав **Кәлә** степалары буйында көнөн-төнөн арымай-талмай һуғышҡылар. Татар-монголдарҙың уҡтары менән таш бал-**ЯКСтары** [1] уларға килеп етмәне, ә дошман яугирҙары ҡәлтә-**ләренә** яҡын ебәрелмәне.

Тимер Мәлик һуғышсылары һаҡлаған ҡәлғәне буйһондороу мөмкинлеге ҡалмағас, Сыңғыҙ хан бүтән төрлө әмәл габырға тырышты.

— Хәйләһеҙ донъя — файҙаһыҙ, — тип ул Джучи улы ҡарамағындағы һуғышсыларға һырдаръяны быуырға һәм **Гимер** Мәлик һуғышсылары һаҡлаған ҡаласыҡты һыу аҫтында ҡалдырырға ҡушты.

— Дамба төҙөргә таш юҡ, — тине Джучи.

— Яҡын-тирәлә булмаһа, таш ситтә күп, хашарға ҡулланған кешеләрҙән ташыт!

Шул көндө өс фарсан (егерме саҡрым самаһы) алыҫлыҡтағы тауҙа соҡолған ташларҙы йылға буйына ташый башланылар.

Дошмандың дамба төҙөүен белгәс, **Тимер** Мәлик ун ике баржа әҙерләтте. Татар-монголдар уҡтарҙан һәм нефттән >ш |энгән тиҙ тоҡаныусан туптарҙан аткан сакта зыян теймәһен өсөн, баржаларҙы еүеш кейеҙ менән көпләтте һәм шыйыҡ балсыҡ һылатты.

Караңғы төшкәс тә баржаларға тейәлгән Тимер Мәлик тең һуғышсылары, йылға буйлап йөҙөп барған ыңғайы, татарҙарҙың дамбаһып ҡыйраттылар.

Бәләкәй генә утрауҙағы ҡаласыҡты һаҡлауы ҡыйын-**Цша** барҙы.

— Артабан бында ҡалыуҙан файҙа юҡ, — тип **Тимер** М І ик етмеш карапҡа аҙыҡ-түлек, кейем-һалым, ҡоралдар менән иң мөһим һаналған әйберҙәрҙе тейәтте, сыраҡ-**Гарҙы** яндыртты һәм һырдаръя уртаһынан аҫҡа табан йөҙөргә бойорҙо.

Ике яҡ яр буйлап һыбай барған татарҙар уларға төбәп уҡтарҙан аттылар һәм **тиҙ** ялҡынланыусап нефть тул-**ГЫрылған** һауыттарҙы бырғыта башланылар. Әммә кейеҙ **Ценән** көпләнеп, өҫтән шыйыҡ балсыҡ һыланған карап-**Гарға** уларҙың зыяны теймәне.

Яр ситендәге дошман яугирҙарына ҡаршы һуғыша-һуғыша, Тимер Мәликтең батыр ир-егеттәре Дженда ҡалаһы-Ив иҫән-һау барып етте.

Әмир Тимер Мәликтең караптары туҡталған ерҙә **Джу**-чи баллистар менән ҡоралландырылған понтон күпере ҡорортто.

---

[1] Ибн ал-Асир, Ал-Камил фи-т-тарих, т. XII, 241-се бит.

[2] Татар-монгол баҫып алғандан һуң, Сәмәрҡәндтә 400000 кешеяәи 100000 кеше генә ҡала. Был мәғлүмәттәрҙе 1222 йылда Сәмәрҡәндкә барған Чань-чун яҙып ҡалдырған. (ТЧРМД, т. IV, СПб, 1866, 326-сы бит).

[3] *Хонжендан* — хәҙерге Ленинабад ҡалаһы.

[4] *Отрара* — Урта Азиялағы иң ҙур ҡала, Һырдаръяға Арыс йылғаһы ҡушылған урында төҙөлгән. 1219 йылда ҡыйратылып, кешеләре тотошлай ҡырыла. Ул ҡала урынында өйөмдәр генә һаҡланған.

[1] *Баллист* — туп (снаряд) хәрәкәтенең иң беренсе төрө-

— Хәлебеҙ мөшкөлләнде, дошманға ҡаршы һуғышырлыҡ кешеләребеҙ ҙә аҙ, — тип Тимер Мәлик иҫән ҡалған бер төркөм яуҙаштарын ярға алып сыҡты һәм һуҡмаҡтан сигенергә ҡушты. Улар, татар-монголдарға ҡаршы һуғыша-һуғыша, ҡыҙыл ҡом сүллегенә яҡынлаштылар. Әммә эҙәрләп килеүселәр менән алышырҙай көс ҡалманы, Тимер Мәликтең һуңғы яугиры һәләк булды.

Япа-яңғыҙы ҡалған Тимер Мәлик ҡыуып еткән өс татарҙың береһенә төбәп, уның күҙен сығара атты ла:

— Минең ике уғым ҡалды. Улар һеҙҙең икегеҙгә! Яҡын килһәгеҙ, һеҙҙең дә күҙегеҙҙе сығара атам, — тип ҡысҡырҙы.

Татарҙар, яҡын килергә баҙнатсылығы етмәйенсә, тукталды. Улар, үҙ-ара ниҙер һөйләнә-һөйләнә киргә боролғас, әмир Тимер Мәлик Хорезмға табан юлланды [1].

Хорезмға барғас, Хорезм шаһы Мөхәммәткә хеҙмәт итергә теләк белдереҙе һәм шаһтың оло улы Джалал менән ҡаланы баҫҡынсыларҙан һаҡлау өсөн бик күп эштәр башҡарҙы.

Әммә ул Хорезмдағы ислам дине әһелдәре менән уртаҡ тел таба алманы. Иң яуаплы, көсөргәнешле минутта дин әһелдәренең дошманға һатылыуын белгәс, үҙе ойоштороған отряд менән Хорасанға, унан Тохарстанға [2] барҙы һәм татар-монголдарға ҡаршы һуғышыу өсөн ҙур көс тупланы.

Бер тиҙлектә һыбай барған Сынғыҙ хан, әмир Мәликтең ҡыйыулығына бәйләнешле ваҡиғаларҙы һөйләгән нойон шымғас, ҡыҫыҡ күҙҙәрен ҡыҫыҡландырып, ярандарына ҡараны.

— Ишеттегеҙме?

— Ишеттек, Тимер Мәлик — яман бәндә, — тип ғауғалашты ярандары.

— Яңылышаһығыҙ! — Сынғыҙ хан асыуланды. — Әмир Тимер Мәлик кеүек батырҙар оло ихтирамға лайыҡ! Хорезм шаһы Мөхәммәт ғәскәрендә ҡыйыу кеше барлығын беренсе тапҡыр ишетәм. Шуныһы ҡыҙғаныс: Мәлик минең сиреүемдә түгел, ул — ҡан дошманым! Дошманым булмаһа, уны үҙемә яҡынайтыр, нойон иселе бирер инем, — тип үкенес белдереҙе. — Әммә күп нукерҙарымды һәләк иткән Тимер Мәлик минән ҡасып ҡотола алмаясаҡ. Тохарстанды һуғышып алғас, уны ҡаты яза көтә!..

Сынғыҙ хан, йүгән теҙгенен шаҡара тартып, юртып барған атын яйлатты. Уның күңелендә утлы өйөрмә ялҡынланыуын ацлаған ярандары, бер-береһенә һағайыулы ҡарашып, тауыш-тын сығарыуҙан ҡурҡты.

Байтаҡ ваҡыт өндәшмәй, уйға ҡалып барған Сынғыҙ хан, бер аҙ тынысланғас, йәнә һүҙ башланы:

— Бөйөк Искәндәр Икенсе тип үҙен данлатҡан Хорезм **Шаһы** Мөхәммәт ҡурҡаҡ, Тимер Мәликтең киреһе булып **СЫҠЫҒЫ**. Мактанып-ҡупырынып та, исмаһам, бер генә тапҡыр ҙа **минә** ҡаршы һуғышырға баҙнатсылығы етмәне. Мине и. спреүемдән ҡасып йөрөп, үҙенең ғүмерен бушҡа **ышҡара,** Келифеҙә [1] лә оҙаҡ ултырып сыҙаманы, ҡурҡты! Һәм Төркмән менән Сүбәдәй корпустары яҡынлаша башлағас та, **Иранға** ҡасты һәм эҙһеҙ юғалды.

— Мөхәммәттең эҙе бер аҙ асыҡланды, — тине Иран-дан ҡайтҡан шымсыларҙың береһе.

— **Белгәс,** ниңә әйтмәнең? — Сынғыҙ хан шымсы вазифаһын башҡарған сауҙагәргә сәнскеле ҡараш ташланы.

— Мөхәммәт Иранда юҡ. Кешеләрҙән һорашып белгән мәғлүмәттәр буйынса, оло улы Джалал ад-дин менән бергә алты яранын эйәртеп, ул Ирандан бер ай самаһы элгәрерәк киткән. Хәҙерге көндә Каспий диңгеҙе яры буйындағы ташландыҡ утрауҙа йәшәй, ти.

— Мөхәммәттең әсәһе Теркен-хатун да шунда микән?

— Юҡ, Теркен-хатун Мазендаран ҡалаһында.

Сынғыҙ хан нойондарының береһенә киҫкен ҡараны.

— Ғилмер, Теркен-хатун менән уның солтандарын Мазендарандан Онон һәм Керулен йылғалары буйында йәшәгән минең туғандарым ҡарамағына оҙатырға, — тине ул **күҙ** ҡарашын икенсе нойонға йүнәлтте: — Ә һиңә Кдсп'н диңгеҙендәге утрауҙа йәшәгән Мөхәммәттә эҙләп табырға һәм уны юҡ итергә!

Аҙна самаһы ваҡыт уҙғас, үпкәһенә һалҡын тейҙергән Хорезм шаһы Мөхәммәттең ауырып үлеүе тураһында хәбәр алынды.

XIII

Урта Азиялағы бик күп илдәрҙе баҫып алған татар-монголдарҙың Бохара, Сәмәрҡәнд, Отрара кеүек бик күп ҡалаларҙы буйһондороуы һәм Тохарстанға, Һиндостан менән Иранға, Әзербайжан менән Курдистандағы ҡалаларҙы вәхшиҙәрсә ҡыйратыуы тураһында шымсылары һөйләүе буйынса белгәс, Башҡорт ханы Сурман бик ныҡ борсолдо.

— Ул илдәр ҡыйратылһа, ҡара яу Башҡортостанға

[1] Джувейни. Тарих-и джахангушай, т. 1, 70—71-се биттәр.

[2] *Тохарстан* — хәҙерге Афғанстан.

[1] *Келифе* — Амударъя ярындағы ҡала.

ҡабаттан киләсәк, — тип Чжурчжэн ғалимы Удбар менән кәңәшләште лә, дәүләт ҡоролошон өр-яңынан үҙгәртеп ҡорорға, яу булмаған тыныс ваҡытта ла ханға оло вәкәләт биреүҙе талап итергә, ханға буйһонған сиреү ойошторорға, ҡәлғәләрҙе таштан һалдырырға, уларҙың тирә-яғын нығытыу өсөн бөтөн мемкинлектәрҙе файҙаланырға ниәтләнде. Әммә йыйында ҡатнашыусыларҙың күбеһе, Сурман хандың тәҡдиме менән ризалашмайынса, тауыш ҡубарҙылар.

— Ситтән яу килмәгән саҡта ханға буйһоноу — иректе сикләү бит!

— Ханға ҡол булып йәшәргә теләмәйбеҙ!

— Дошман яуы килгәндә һиңә ҡаршылыҡһыҙ буйһоноуыбыҙ етмәгәнме ни?..

Ҡәбилә-ырыу башлыҡтары, уҡ-һаҙаҡтан башҡаны танырға теләмәйенсә, ут бөркөүсе мылтыҡтар менән ҡоралланыуҙы гонаһ һананы.

Ҡала кешеләре, бер һуғышта ауыҙҙары бешкәс, татар-монголдар Башҡорт иленә бүтән • тығылмаясаҡтарына ышаныс белдереп, ғәмһеҙлеккә бирелделәр. Бәғзе берәүҙәр Ҡараҡыяны ябай ҡала итеп ҡалдырырға, Башҡортостан ханлығын бөтөрөп, уның урынына һәр ҡаланы, һәр ырыу-ҡәбиләне айырым-айырым ханлыҡҡа бүлгеләргә һәм үҙҙәренең ханын һайларға тигән тәҡдим дә индерҙеләр.

Уртаҡ фекергә килә алмаған кешеләр йыйындан таралышҡас, иң яҡын ярҙамсылары менән Сурман хан:

— Йә, аулаҡта саҡта әйтегеҙ. Башҡортостан ханлығынан баш тартып, һәр ырыу-ҡәбилә менән ҡаланың үҙ ыңғайына ҡуябыҙмы, әллә уларҙы бер ханлыҡҡа буйһондороу өсөн керәшергәме? — тип һораны.

— Әгәр ҙә барлыҡ көстө берләштереү всөн көрәшмәһәк, киләһе быуын кешеләре беҙҙе ғәфү итмәйәсәк, — тине Дәржимән.

Ул әйткәнде башҡалар ҙа хупланы:

— Ҡара яу ҡурҡынысы бөтмәгән саҡта Башҡорт ханлығын бөтөрөү һәм көстө тарҡатыуға юл ҡуйыу — хыянатсылыҡ ҡылыуға тиң!

— Яҡшылыҡты аңларға теләмәһәләр, һәммәһен көс менән берләштерергә!

— Үҙ башҡорттарыңа ҡарата ҡорал ҡулланыу, минең-сә, енәйәт.

— Тыуған илде килмешәктәрҙән һаҡларға әҙерлек алып бармау, нимә, һеҙҙеңсә, енәйәтселек түгелме? — тип һораны ла, бер кем дә яуап ҡайтармағас, бер аҙ тынысланыбыраҡ, Дәржимән аңлатты: — Беҙгә билдәле мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, татар-монголдар мәкерле, аяуһыҙ,

ҡ ҡлокор... Бер ниндәй ғәйебе булмаған ҡайным менән улың ярҙамсыларын тураҡлап үлтереүҙәре беҙгә оло һабаҡ түгелме ни? Нисек кенә ҡыйын, ҡатмарлы булмаһын, Башкорт ханлығын һаҡларға, дәүләтебеҙҙе яңы шарт-ц||)гп яуап бирерҙәй итеп үҙгәртеп ҡорорға, тарҡау көстө берләштерергә һәм дошманға ҡаршы көрәшеү өсөн хәҙер-ү Ш оҙсрлек башларға бурыслыбыҙ!

• Дөрөҫ, — тине чжурчжэн ғалимы Удбар, Дәржимән мгиоп рнзалашып, һәм тыуған илендә нуғышҡа әҙерләнеү ваҫьәләһе нисек хәл ителеүе тураһында ентекләп нейләне.

Сурман хандың бойоҡ йөҙө яҡтырҙы.

- Чжурчжэн иленең һуғыщ тәжрибәһе беҙгә фәһемле! «Күмоклəгəн яу ҡайтарған» тигәндәй, күмәкләп тотонһаҡ, бер бпрешмәйәсәкбеҙ, — тип ул һис кисекмәҫтән нуғышҡа әҙерлекте тиҙләтергә булды.

Сурман хандың һәммәһен үҙгәртеп ҡорорға тырышыуы ||||;шГиҙлыҡ тыуҙырҙы. Уны йыйын ҡарары менән иҫәп-!к)Шмоүҙә, үҙ белдеклегенә эш ҡылыуҙа, баш-баштаҡ-ныҡта гәйепләгән ырыу-ҡәбилә һәм ҡала башлыҡтары, (приттлп тыш йыйын уҙғарырға һәм Сурман хандың яраҡ-Ьы,1 ҡыланышын тикшерергә, тигән тәҡдим индерҙеләр.

Шул маҡсат менән кешеләр Ҡараҡыяға үҙ белдектәренә йыйыла башлағанда, Сәйен Иорттан сапҡын килде.

• Болғар иле башлыҡтары Боян менән Джик мине һеүгө оло йомош менән ебәрҙе һәм һеҙҙән ашығыс ярҙам көтәләр, — тине лә Джэбэ менән Сүбәдәй баһатур ||)моидалығындағы корпустар Иҙел буйлап Болғар иленә ниьшлашыуын әйтте.

Йыйын уҙғарыу ҡайғыһы бөттө.

Ҡараҡыяға килеүсе ырыу-ҡәбилә һәм ҡала башлыҡтары, ни эшләргә белмәйенсә, Сурман хан эргәһенә килделәр.

— Йә, ҡалайтабыҙ?

— Болғарҙарға ярҙамлашмаһаҡ, дошман яуы Башкортостанға баҫып инеүе лә ихтимал.

Сурман хан өндәшмәгәс, уны ныҡлабыраҡ өгөтләргә • Плопдолар:

— Ағай-эне талаша, атҡа менһә яраша, тигәндәй, юҡ өсөн асыуланма!

— Эйе, күршеләргә ярҙамлашыу әмәлен табайыҡ!.. •

Башҡорттарҙың бала-саға һымаҡ ҡыланыуҙарына ирониуы ҡабарған Сурман хан уйға ҡалды.

Ысынлап та, бәләкәй генә ерҙе биләп, игенселек һәм ауыҙ менән шөғөлләнгән аҙ һанлы, яусыл булмаған болғарҙар еңелһә, Башҡортостанға ла ҡурҡыныс яҡынлаша

бит! Бындай шарттарҙа, мәсьәләне оҙаҡҡа һуҙмайынса, болғарҙарға ярҙамды тиҙләтеү мөһим!

Болғар иленә дошман яуы яҡынлашыуын белгәс, Башҡортостан ханы дәүләтенә ҡаршы фетнә күтәрергә маташыусы ҡәбилә-ырыу һәм ҡала башлыҡтары, аңына килеп, бындай шарттарҙа Сурман хандың бойороғона буйһонорға ризалыҡ белдерҙеләр.

Үҙен баш командующий итеп иғлан итеүсе Сурман хандың ҡушыуына буйһоноп, берләштерелгән башҡорт сиреүе Сәйен Йортҡа • — Болғар иленең бөйөк ҡалаһына табан йүнәлде.

Оло Иҙелгә Кама йылғаһы ҡушылған ергә еткәс, уларҙы Болғар иле башлыҡтары Боян менән Джик ҡаршыланы [1].

Баигкорттар тамаҡ туйҙырып, Иҙел аша сығырға әҙерлек алып барған ваҡытта Болғар иле башлыҡтары менән Сурман хандың иң яҡын ярҙамсылары дошманға ҡаршы һуғышыу планын тикшерҙе.

Сәйен Иорт етәкселәренә билдәле мәғлүмәттәр буйынса, дошмандың өс төмәне берләшт.ергән утыҙ мең һуғышсыһы барлығы асыҡланды. Уларҙы Сәйен Йортка уҙғармау иң мөһим хәрби бурыстарҙың береһе һаналды. Шул маҡсаттан сығып берләштерелгән болғар-башҡорт сиреүенең Боян менән Сурман хан командалығындағы ярты һы Иҙел буйлап кәмә-һалдарҙа аҫҡа йөҙөү, ә Джик менән Дәржимән командалығындағы һыбайлы ир-егеттәргә ярҙан барыу бурысы йөкмәтелде.

Беренсе көн тыныс уҙҙы.

Икенсе көндөң таныңда Джәбә менән Субәдәй баһатурҙарҙың сиреүенә яҡынлашыуҙарын белгәс, Дәржимән тулҡынланды.

— Дошман сиреүен осратырға күп ара ҡалды ыикән?

— Улар, шымсыларыбыҙ хәбәр итеүенә ҡарағанда, беҙҙән ун — ун биш саҡрым алыҫлыҡтағы ерҙә ялға туҡталған булырға тейеш, — тине Джик.

— Уларға ҡаршы һөжүмде үҙебеҙ башлайбыҙмы?

— Минеңсә, артыҡ ҡабаланыу килешмәҫ, — тип яуап ҡайтарҙы Джик. — һуғыш алдынан беҙгә лә ял итеп алыу зыян итмәҫтер, моғайын. Ял ваҡытында арттағы төркөмдәр ҙә ҡыуып етәсәк, кәмә-һалдарҙағы сиреү ҙә яҡынлашасаҡ.

Дәржимән, ризалашып, баш ҡаҡты.

— Дөрөҫ. Көстө тарҡауландырһаҡ, бөләсәкбеҙ.

[1] *Боян менән Джик* — тарихи шәхестәр. Уларҙың исеме күп илдәргә билдәле булған.

Пнкып кесөргәнешле уҙҙы.

«Татар-монголдар һөжүм башлаһа, кешеләргә ял тәте-МоПосок», тип уйлап, Дәржимән тирә-яҡты һағайып тыңлаһы, һәммәһе тыныс. Үләнгә һонолған аттарҙың бышҡы-М.УЫ!0П һәм ҡош-ҡорттарҙың сыр-сыу килеүенән башҡа ||1\ыш пшетелмәй. Алышта үлһә, ошондай донъяны мәңгә куро алмаясағы ҡыҙғаныс!..

Кпмо-1шлдарҙа йөҙөп килеүсе яугирҙар яҡынлашыуын белдөс, Дәржимән тынысланды.

Уцайлыраҡ ергә барып урынлашмайыҡмы?

Мии дә шулҳаҡта әйтергә уйлағайным,— тип Джик с рдоп торҙо.

Улар, ярандары менән сапҡындарын эйәртеп, Оло Иҙелгә ҡойған Сәрҙек ярындағы ҡалҡыулыҡҡа күтәрелпппщ.

йылғаның икенсе яҡ ярындағы уйһыулыҡта урынлашҡан пҫәпһеҙ-һанһыҙ дошман һуғышсыларын күргәс, Дәржимәндең тәне зҫеде-һыуыҡлы булып китте, йөҙө ағарынды, күҙҙәре баҙлап янды.

«Былай булғас,-һуғыш ҡотолғоһоҙ» тнгән уй йөрәген ҡанһып уҙҙы. Әммә-хәлен белгертмәне, үҙен тыныс тоторға тырышты.

• Дошман сиреүенең ниндәй тәртиптә һуғышасағын белергә ине.

- Уларҙың һежүм итеү тәртибе беҙгә мәғлүм, — Джик уҫ бслгәндәрҙе Дәржимәнгә һөйләне.

Сорҙек йылғаһы аръяғындағы дошман сиреүе һөжүм башларға ашыҡманы.

Шул саҡ, Дәржимән есөн бөтөнләй көтөлмәгәндә, ярҙамсыларының береһе ҡысҡырып өндәште:

• Татарҙар-килә!

- Ҡайҙа?

— Ана, был яҡҡа, яр буйына ҡара!..

Сорҙек йылғаһының бирге яҡ ярына сыҡҡан дошманның һыбайлылары күренгәс шау-шыу ҡупты.

— Алышҡа әҙерләнергә!

Доржимәндең бойороғон ырыу-ҡәбилә һәм ҡала башлыҡтарына тапшырырға ашҡынған сапҡындар таралышырға ла өлгөрмәне, борғосо борғо уйнаны.

Болғар-башҡорт отрядтары, алдан билдәләнгән урындарға етеп, тигеҙ еафтарға теҙелешергә ҡабаланды. йәПЮЛ байраҡтар күтәргән болғар-башҡорт тейешле урыиға Г гкөс, ҡасан һуғыш башланыуын көттө.

Ылға аръяғындағы татарҙар, был яҡ ярға сыҡҡан төп көстән айырылмаҫҡа тырышып, йән-фарман сабыштың.

Төп көстән айырылған татарҙарҙың авангардтағы от-

рядын ҡыйратып, болғар-башҡорт отрядтары яр буйындағы дошман сиреүенә ҡаршы үҙҙәре беренсе булып ташланды.

Һыбайлы татарҙар ҡыҫымы көсәйгәс, Дәржимән запастағы отрядтарҙы һуғышҡа индерҙе. Әммә дошман сиреүе уларҙың ҡыҫымына бирешмәне һәм кисеү тәңгәлендәге алыш ҡабаттан ҡыҙҙы.

— У-р-ра-а-гх! — тип һөрән һалып ҡысҡырышҡан татар-монголдар йылғаға ҡыҫырыҡлап төшөрөлгән һайын, алыш ҡыҙғандан-ҡыҙа барҙы.

Алыш барышын ҡалҡыулыҡта тороп күҙәткән Дәржимән Иҙел буйлап көмә-һалдарҙа йөҙгән сиреүҙең ваҡытында ярҙамға килеп етмәүенә борсолдо. Улар ниңә оҙаҡланы икән? Әллә көтөлмәгән берәй бәлә-ҡазаға тарыҡтылармы?

Һуғыш башланыуға өс сәғәт самаһы үҙҙы, ә ярҙам һаман юҡ.

— Ярҙам оҙаҡлаһа, ни эшләргә? Әллә сигенәбеҙме?— тип һораны Дәржимән.

— Сигенеү — үлем, — тине Джик, уның менән ризалашмайынса. — Резервтағы актыҡ көстө файҙаланайыҡ. Шунда ла дошман ҡыҫымынан ҡотола алмаһаҡ, Иҙел буйындағы сиреүгә табан сигенербеҙ.

Дәржимән бәхәсләшмәне.

Әрәмәлектәге яугирҙарҙы һуғышҡа индерергә ҡушып ырыу-ҡәбилә, ҡала һәм мең башлыҡтарына сапҡындар ебәргәс кенә, уның йөрәген ҡурҡыу алды.

«Актыҡ көсөбөҙ ҡыйратылһа, йылға буйлап йәйәп килеүсе сиреү ҙә татар-монголдарға ҡаршы тора алмаясаҡ», тигән уй менән Дәржимән алыш барышын күҙәтте.

Өҫтәлмә көс барып ҡушылғас, башҡорттар үҙҙәре һөжүмгә күсте. Улар, һөрән һалып, яр буйындағы татарҙарҙы ҡыҫырыҡлай башланылар.

Татарҙар ҙа бирешмәне. Улар, ҡылыстарын ялтлатып, башҡорт егеттәрен тураҡлай-тураҡлай, батырҙарса алышты. Шунан, бөтөнләй көтмәгәндә, һуғыш майҙанын ҡалдырып ҡаса башланы.

— Егеттәр, алға!

— Дошман сиреүе ҡаса! — тип башҡорттар уларҙы эҙәрләргә тотондо.

Субәдәй баһатур командалығындағы һыбайлылар корпусы тоткарлыҡһыҙ ҡасты. Башҡорттарҙың тылына Джәбә баһатур командалығындағы отрядтар үтеп ингәс кенә, Субәдәй баһатур яугирҙары ҡасып барыуҙан туҡталды һәм үҙҙәрен эҙәрләп килеүселәргә ҡаршы ташланды...

Башҡорттарҙың ҡамауға эләгеүен күргәс, Дәржимәндоҫ ҡото алынды.

«Былай булғас, һәммәһе ҡыйрала», тип ҡамауҙағы башҡорттарға ярҙамға ул үҙе ташланды.

Доржимәндең һыбайлылары йылғаны кисеп сыға башлағанда, Иҙел яры буйынан асыҡ яланға сыҡҡан Сурман хан менән Боян командалығындағы болғар-башҡорттар Джәбә ғәскәренә ҡаршы ҙур тиҙлектә яҡынлашыуы тоҫмарлонде.

- Беҙҙекеләр!

- Ана, беҙҙекеләр ҡамауҙағыларға ярҙамға йән-фарман Исабышыпкилә!

• йә, хоҙай, бәләҫ-ҡазанан ярлыҡа! — тип ҡысҡырышҡан Доржимәндең һыбайлылары.

Сурман хан менән кенәз Боян командалығындағы болғар башҡорт ғәскәрҙәре, сабышып барышлай уҡтарҙан ата-ата, һаман алға барыуын белде. Татар-монголдар ҙа, иүп итеп, уҡтар яуҙырҙы. Иң алдан барыусы болғар-башҡорт егеттәренең бер нисәһе, эйәренән ҡолап, арттағы күмәк аттар тояғы аҫтында ҡалды. Хужаһыҙ ҡалған һәм нрилипған аттар §а, йән әрнетерҙәй тауыш менән кешнәй-Иошиәй, ябырылып барған күмәк аттар ыңғайына сағылпты.

Ҙур тиҙлектә бер-береһенә яҡынлашҡан татар-монголдар меиән болғар-башҡорттар ҡапма-ҡаршы килеп бәрелгәс, һәммәһе бер юлы буталды һәм үлеш-кыйралыш башланды.

Ғоскәр башлығы алышта ҡатнашмаҫҡа, һуғыш барышын алыҫтан күҙәтеп торорға һәм кәрәк саҡта тейешле урҙам ойоштороргә тейеш икәнлеген белһә лә, Дәржимән үлпр-моиголдарҙы ҡыйратыусы башҡорт егеттәренә барып ҡушылды. Дошманды ни тиклем күп тураҡлаһа, ул шул тиклем ярһыны, үҙен-үҙе онотоп һуғышты. Уның ҡышҡырыуы бүтән ир-егеттәрҙе лә алышҡа рухландырҙы.

Ҡул һуғышын яратмаған татарҙар артҡа сигенде, болғар-башҡорт. егеттәре уларҙан ҡалышмайынса, эҙәрләргә тотондо.

«Татар-монголдарҙың был сигенеүе лә берәй хәйлә түгелмикән», тип уйланы Дәржимән.

• Ана, киләләр!

- Кемдәр? — Джик күрһәткән яҡҡа ҡарағас, Дәржимән атаһы менән кенәз Боянды күрҙе һәм ҡыуанысынан ҡысҡырып өндәште:— Аллаға шөкөр, һеҙ иҫән-һау!

Сурман хан, яғымлы йылмайып, Дәржимән менән Джикты ецеү менән тәбрикләне.

— һуғыш бөтмәгән әле, атай, ҡан ҡойош һаман дауам итә!

— Дауам итә, әммә Джэбэ менән Субәдәй төмендәренең арҡа һырты һындырылды. Уларҙың ҡалдыҡ-боҫтоҡ сиреүе нисек ҡасып барыуын күрмәйһеңме? — тине Боян ғорурлыҡ менән.

Эйе, кенәз хаҡлы ине. Аҙаҡтан, байтаҡ йылдар уҙғас, был һуғыш барышы тураһында тикшеренеүсе тарихсылар: «Сыңғыҙ хан сиреүенең көнбайышҡа йүнәлтелегән һуғышы ваҡытындағы берҙән-бер еңелеүе булды», — тип яҙасаҡтар.

Әлегә һуғыш бөтмәгән, болғар-башҡорт егеттәре ҡасып барыусы **татар-монголдарҙы эҙәрләй...**

Ҡараңғы төшөп, күк йөҙөндәге йондоҙҙар берәм-һәрәм күренә башлағанда ғына һуғыш бөтөп ёрҙә тыныслыҡ урынлашты. Баҫҡынсыларҙан ҡотолған Болғар иленең Еңеүен билдәләгән ҡолаҡ зыңлатҡыс тантаналы тынлыҡ ине был.

Сурман хан яралыларҙы йыйырға һәм уларҙы дауалауҙы ойошторорға ҡушты.

Ҡыҙыу итеп яғылған ут эргәһендә өйөлөшөп ултырғас, сиреүҙең баш муллаһы еңеү хөрмәтенә доға уҡыны. Ислам динен тотмаған мәжүсиҙәр ҙә, муллаларҙан ҡалышмаҫҡа тырышып, үҙ хоҙайҙарына табындылар.

Төркөм-төркөм булып киске тамаҡты туйҙырырға ултырғас, алыш барған беренсе сәғәттәрҙәге көсөргәнеште иҫенә төшөрөп, Дәржимән атаһы ултырған яҡҡа ҡараны.

— Ниңә һуңланығыҙ һуғышҡа?

— Беҙ һуңламаныҡ, — тине Сурман хан, хәйләле йылмайып. — Джэбэ баһатур һеҙгә засада ҡороуын белгәс, уның ҡасан һөжүм башлауын Иҙел яры буйындағы ағастар араһында көттөк.

— Беҙгә ниңә хәбәр итмәнегеҙ?

— Хәбәр иткәйнек, һеҙгә ебәрелгән сапҡындар барып етмәгән...

Кенәз Боян, ата менән улдың үҙ-ара аңлашыуын бүлдереп, ҡул һелкте.

— Үткән эштән төш яҡшы, тигәндәй, үткән яңылышлыҡтар өсөн баш ҡатырмайыҡ әле. Иң мөһиме шул: татар-монголдарҙың тактикаһын уларҙың үҙҙәренә ҡаршы ҡулландыҡ һәм оттоҡ!

— Эйе, һүҙең раҫ, — тип уҡына-уҡына Сурман хан һакал-мыйығын ҡуш услап һыпырҙы. — Аллаға шөкөр...

Кенәз Джик та шымып ҡалырға теләмәне.

— Был Еңеү өсөн беҙ башҡорттарға бурыслыбыҙ. Улар тейешле ваҡытына ярҙамға килеп етмәһәләр, белмәйем,

оҫолайтып ултыра алыр инек микән, — тине ул, башҡорттарға рохмәт белдереп.

Олбиттә, был еңеүгә беҙ башҡорттарға бурыслыбыҙ, — тине Боян, Джик менән теләктәшлек белдереп. — Беҙҙең төп бәлә — кешеләребеҙ күп түгел. Ә башҡорттар оло даръя шикелле...

Беҙҙе даръя менән сағыштырыу дөрөҫ булмаҫ, — тине Сурман хан. — Яу ваҡытында биш башҡорттан бер кеше ир заты хеҙмәткә алына. Унда ла уның теләге һәм ирекле-ҡәбиләләй йыйылыуы йәки башлыҡтарының рөхсәте кәрәк.

- Оло яу сығһа, шул иҫәптән башҡорт сиреүенә нисә мең писне ылыҡтырырға мөмкин?

Беҙҙә дүрт йөҙ мең ярым самаһы кешелек сиреү ицшиторорга мөмкинлек бар, — тине Сурман хан [1].

Бояны иҫ-аҡылы китеп аптыраны.

Башҡорттарҙың сиреүе генә лә, болғарҙарҙың барлыҡ кешеләренә ҡарағанда, ике тапҡырға күберәк! Азатлыҡты һаҡлап алып ҡалыуыбыҙ менән беҙ тик һеҙгә бурыслыбыҙ, — тип ҡабатланы ул.

Кем кемгә бурыслы икәнлеге дуҫтар өсөн хәҙәт түгел. Иң мөһиме — берҙәмлекте һаҡларға тырышайыҡ. Башҡорт менән болғар иле үҙ-ара татыу һәм дуҫ булһа, бөйөк Сыңғыҙ хандың татар-монголдары ла һәм башҡа дошмандар ҙа ҡурҡыныслы түгел, — тине Сурман хан.

Хаҡ һүҙ!

Раҫ! — тип шаулаштылар Болғар иле башлыҡтары.

Мәтәрәһе көндө, үләләр ерләнеп, һуғыш майҙаны һыҙылған ҡорамалдары һыныҡтары менән сүп-сарҙан таҙартылғас, башҡорт сиреүе тыуған иленә табан ыңғайланы. Ҡабалаңманылар. Ылға ярҙары буйында туҡталып, ялы ҙы ито ҡайттылар улар.

Коп аяҙ, кинәндергес.

Луҙыҡтарын сылтлатып сәйнәй-сәйнәй барған аттар ҡ ҡаплы һуғыштан һуңғы тыныслыҡҡа ләззәтләнгән һәм ҙур ҡалыуҙарына шатланған һымаҡ күренә.

Сентябрь яҡынлашыуына ҡарамаҫтан, көндәр йәйгесә ҡы томра торҙо, яуым-төшөм күптән булғаны юҡ.

Олһерәгән ҡайын япраҡтары араһында һарғылт төҫтәр күренгеләй, ҡош-ҡорт тауышы ишетелмәй.

Болғарҙарҙың малы күп булмағас, иген баҫыуҙары фтоломмәгән. Туҡ бойҙай башаҡтары ергә эйелгән, әрһыны бәҙзе бер урындарҙа ура ла башлағандар.

---

[1] Был турала урыҫтарҙың Лаврентий йылъяҙмаһында ла бар. (Полн. собр. русских летописей, 1897 г.)

Ат тояҡтары аҫтынан урғылған саң-туҙан өйөмө тын юлын быуа, һуғышсыларҙың өҫ-кейеменә һәм асыҡ тәненә ҡуна.

Кисеүҙе аша сығырҙан алда Сурман хан артына әйләнеп ҡараны.

— Йылға буйында хәл йыйып алабыҙмы әллә?

— Туҡталайыҡ, тешкө намаҙ ваҡыты ла етеп килә бит, — тине сиреүҙең баш муллаһы.

Уның һүҙен ҡеүәтләп, башҡалар ҙа туҡталып хәл йыйырға теләк белдерҙе.

Яугирҙар төркөм-төркөм булып ағастар араһына таралышыуына күп тә уҙманы, тиҙ арала ҡоролған поход мәсете яғында мәзиндең яңғырауыҡлы тауышы ишетелде:

— Лә иллоһа иллола-а...

Мосолмандар, йылға буйында йыуынып, тәһәрәт алғас, йыйылма мәсет эргәһенә йыйналдылар һәм, ҡибла яғына күҙ ҡараштарын йүнәлтеп, көндөҙгө намаҙ уҡыныларҙар.

Ислам динен тотоусыларға ҡамасауламаҫҡа тырышҡан мәжүсиҙәр, ситкә китеп, үҙ хоҙайҙарына табындылар.

Төшкө намаҙҙан һуң тамаҡ туйҙырғас, ир-егеттәр ағас күләгәләрендә ял иттеләр, тышауланған аттар үлән утланы.

Йылға аръяғындағы егеттәр генә ял итмәне. Уларҙың ҡурайсыһы ғыжғылдатҡан һуҙынҡы ҡурай моңо, изрәткес эҫе һауаны еңелсә ҡалтырандырып, алыҫҡа, бик алыҫҡа таралды.

Ылғаның бирге яғында ял итеүсе яугирҙар ҙа, тылсымлы ҡурай көйөнә тәьҫирләнеп, йыр башланылар:

Алтынлы ла эйәр, алты айыл,
Алтауы ла атҡа етмәйзер.
Ир-егеткәй ҡайҙа йөрөһә лә,
Үҙ илкәйе иҫтән китмәйзер.
Үҙ илкәйем минең бынан йыраҡ,
Баҫып ҡарар инем, баҫҡыс юҡ.
Иөрәккәйем минең эллә нишләй,
Асып ҡарар инем, аҫҡыс юҡ...

XIV

Термез ҡалаһын ҡыйратып, кешеләрен тотошлай ҡырҙырғандан һуң, Сыңғыҙ хан да Несефа ҡалаһы ситендәге уйһылыҡта ялға туҡталды һәм Амударъяның текә ярындағы кеҙгө йортта йәшәне [1].

[1] Джувейни. Тарих-и джахангушай, т. 1, Ю2-се бит.

Болғар иленән ҡыуылған Субәдәй һәм Джэбэ баһатур менән осрашҡас, нойондарының төшөнкө күнелен күтәрергә тырышып, ул көлөмһөрәне.

— Һуғыш гел еңеүҙәрҙән генә тормай. Уңышһыҙлыҡҡа осраған, ҡыйралған. саҡтар ҙа булғылай. Әммә шунан фоһсм алырға, етешһеҙлектәрҙе бөтәһ ҡабатламаҫ өсөн гсЛсшле һығымта яһарға, һәммәһен алдан күрә белергә өйрәнергә кәрәк. Беренсе тапҡыр Башҡортостанға, икенпсһсидә Болғар иленә барып, уларҙы еңә алмауыбыҙҙың дп файҙаһы асыҡланды.

— Ҡайһы яҡтан? — тип һораны Субәдәй.

-- Уларҙың һуғыш тактикаһын, көсөн һәм ҡоралдарын игыҡлау беҙҙең файҙаға түгелме ни? — Сыңғыҙ хан, фенср туплап, оҙаҡ өндәшмәй ултырҙы. — Өсөнсө тапҡыр уппрга оло сиреү менән барасаҡбыҙ һәм һәммәһенең көчөн күккә осорасаҡбыҙ!

- Яу ҡасан ҡабатланасаҡ?

- Ҡабаландырма, нойон. һәр илде буйһондороуҙың үҙ сираты бар. Ваҡыты еткәс, мотлаҡ әйтермен, — тип сығыҙ хан барлыҡ нойондары менән төмән башлыҡтарын йыйып кәңәшләште лә, көстө бер йүнәлештә туплап, Пррсняиы һәм Кавказ артындағы илдәрҙе бер-бер артлы ҡыйратырға тотондо.

Һҙобе-һаны булмаған татар-монгол яуы көслө дауыл сшкслле үткәндә, ер өҫтө өҙлөкһөҙ геүләне, юлда осраған бөтөн пәмә тапалды, иҙелде...

Пнсомә илдәрҙе баҫып алып та, Сыңғыҙ хандың нәфсе тһо ҡанманы, киреһенсә ҡуҙғыра барҙы.

Ул, ер шарындағы бетон илдәрҙе буйһондорорға ашҡынып, Европалағы иҫ киткес бай, күркәм ҡалаларға һөжүм башларға әҙерләнде. Ләкин маҡсатын бойомға ашырырра өлгөрмәне, Ҡараҡоромдан килгән сапҡын кенсылынтағы Чжурчжэн дәүләте бер ҡыйратылғандан һуң ҡабаттан көс туплауы һәм һалым түләргә ҡырҡа баш тартыуы тураһында әйткәс, Сыңғыҙ хандың планы үҙгәрҙе. Ғ)Пкй тылындағы ҡеүәтле Чжурчжэн ҡуркыныслы. Ул ваҡытында тотошлай ҡыйратылмаһа, татар-монгол империяһына асыктан-асыҡ һуғыш башлаясаҡ һәм дәүләт ҡоролошон ҡаҡшатасаҡ.

Чжурчжэн дәүләтен ҡыйратыу бурысын кемгә йөкмәтергә белмәй, аптырап-алъяп, Сыңғыҙ хан ике көн буйы уйҙа ҡатырҙы. Йүнле әмәле табылмағас, Европа илдәрен һуғышып алыуҙы улдары менән ейәндәре ҡарамағына ыншырып, ул тыуған иленә ҡайтып китте. Оҙон юлға сыҡҡас та, Сыңғыҙ хан тыныслана алманы. Ул, борсоулы уйҙарынан нисек тә булһа ҡотолорға теләп, бала саҡын

һәм икенсе әсәнән тыуған ағалары менән бик йыш ҡыҙғы-шыуын иҫенә төшөрҙө.

Уларҙың атаһы — Еҙегәй баһатур ҡәкты донъяны ҡуйғас, Сыңғыҙ хандың көнө бөттө. Ағалары уны һәр саҡ рәнйетте, тукмап интектерҙе. Беренсе әсәнән тыуған бала булараҡ Тэмуджин-Сыңғыҙ хан үҙен һәммәһенән баш һәм түш итеп танытырға теләне. Икенсе әсәнән тыуған Бәктәр, буйһонорға теләмәйенсә, уға ҡаршы бүтәндәрҙе һөсләне һәм асыҡтан-асыҡ дошманлашты.

Тэмуджиндың асыуы сигенә етте.

— Ике тәкә башы бер ҡаҙанға һыймай, — тип Хасар ҡустыһы менән Бәктәрҙе үлтерергә ниәтләнде.

Шул маҡсатын тормошҡа ашырыр өсөн ул далаға сапты.

Тау итәгендәге йылҡы көтөүен күҙәтеп түмәр өҫтөндә тыныс ҡына ултырған Бәктәрҙе күргәс, уҡ-һаҙаҡ менән ҡоралланған Тэмуджин уның ҡаршыһынан, ә ҡустыһы Хасар арт яғынан яҡынлашты.

Уларҙың ниндәй маҡсат менән килеүен һиҙеп, Бәктәр урынынан күтәрелде.

— Миндә ни үсегеҙ бар? Бер ата балалары бит беҙ. Бер-беребеҙҙе рәнйетмәй, үҙ-ара тыныс. йәшәйек.

— Мине үҙеңә баш итеп ризалашырға теләмәүең — беҙгә ихтирам белдереүме, үҙ-ара тыныс йәшәргә мөмкинлек бирәме? — Тэмуджин керешкә һалышған уғын Бәктәргә төбәне.

— Мин дә үҙ яйыма йәшәргә теләйем, — тине Бәктәр.

— Минең менән һүҙ көрәштерергә, баҙнатсылығың еткән өсөн генә лә һинең яҡты донъяла йәшәргә хаҡың юҡ! — Тэмуджин ярһыны.

Бәктәр үҙен тыныс тоторға тырышты.

— Минең яҡты донъяла йәшәүемде артыҡ күргәс, әйҙә ат, үлтер. Тик үлер алдынан бер үтенесем бар. Минең ғаиләмде, эйнһар, рәнйетмә һәм Бәлгутәй ҡустыма яманлыҡ ҡылма.

— Мивд аҡыл өйрәтмә, — тип ярыла яҙып ҡысҡырҙы ла Тэмуджин керешкә һалған уғын ысҡындырҙы.

Ҡан урғылған күкрәген тотоп, Бәктәр ергә ауҙы.

Бәктәрҙең йән менән тартҡылашҡан кәүҙәһе ҡыймылдауҙан туҡталғансы шып-шым ғына баҫып торған Тэмуджин, оло эш башҡарған кеше һымаҡ, күкрәк тултырып иркен һуланы.

— Бер дошманым дөмөктө!

— Мәйетте ҡайҙа ҡалдырабыҙ? — тип һораны Хасар.

— Мәйетте ошонда ҡалдырабыҙ. Ана, уларға ла ашамлиҡ кәрәк, — тип Тэмуджин баш осо тәңгәлендә урал-ған йыртҡыс ҡоштарға эйәк ҡаҡты.

— Бәктәрҙең йылҡы көтөүе лә ошонда ҡаламы?

— Уның йылҡылары хәҙер минеке, — тип аттарҙы Тэмуджин үҙ йәйләүенә ҡыуып алып ҡайтты.

ЛоЛге йортта йәшәгән әсәһе эргәһенә улар кисләтеп кенә ҡайтҡас, Оэлун-уджин [1] аптыраны.

— Балаҡайҙарым, ошолай оҙаҡ ҡайҙа йөрөнөгөҙ?

— Эшебеҙ булды, әсәй, — тине Тэмуджин.

— Ниндәй эш?

— Ҡуйсәле, юҡты төбәшмә, — асыуланып, Тэмуджин ҡул һелтәне.

Оэлун-уджин да мәсьәләне асыҡламайынса туҡтала торған ҡатын түгел ине.

- Мин төбәшмәй, кем төбәшергә тейеш? Нимә булға-ның бит, — тип асыуланғас ҡына Бәктәрҙе үлтереүҙәрен әйтергә мәжбүр булды Тэмуджин.

Малайҙарының яуызлығына иҫ-аҡылы китеп аптыраған Оэлун-уджин, ҡапыл хәлһеҙләнеп, ергә сүкәйҙе, ҡуш ус-ҡа п ҡеҙөн ҡапланы һәм үкһеп-үкһеп иларға кереште.

Тэмуджин менән Хасар, ике яҡтан атылып барып, әсә-һе йыуата башланылар:

- йә, илама!

- Бәктәр менән беҙ бер әсәнән тыуған балалар түгел бит!

Оэлун-уджин малайҙарының нимә әйткәнен аңламаны һәм игтибарға ла алманы. Бер аҙ тынысланғас, Тэмуджин-ың яуызлығы сиктән тыш яман гонаһ икәнлеген әйтеп, уны шиғри юлдар менән хараҡларға [2] тотондо:

Һин, эт кеүек, үҙ нәҫелевде **ашайһың,**
Һин, **бөркөт** кеүек, ҡояларға ташланаһың,
Һин, арыҫлан кеүек, уҙ асыуыңа хужа **түгелһең.**
Һин, имәнес, кешеләрҙе тереләй йотаһың.
Һнн — үҙ балаһын тешләгән дөйәһең,
Һнн, сүл буреһеләй, һыйыша алмайһың.
Һин, һуҡырға ташланған эт кеүек, —
Барыһын өҙгөләп ташларға әҙерһең!..

Осоһе ҡарғышынан ҡурҡып ни эшләргә белмәгән Тэ-муджин, кешеләргә башҡаса яманлыҡ ҡылмаясағын әйтеп, ыфҡ үтенде. Әммә ул үҙ һүҙендә торманы.

Ябай Тэмуджин исемле малайҙан Сыңғыҙ хан дәрә-жәһенә етеп күптәрҙе үҙенә буйһондорғас, ул бер ата-әсә-нән тыуған Хасар ҡустыһы менән мөнәсәбәтен боҙҙо һәм нфсиләп уның менән дә дошманлашты.

[1] *Уджин* — ханым, байбисә.
[2] *Хараак* — ҡарғыш.

Уларҙың мөнәсәбәте боҙолоуына Баш шаман Тәб-Тәнгриҙең дә ҡатнашлығы бар. Сөнки Тәб-Тәнгри Хасарҙы уның бер туған ағаһы Сыңғыҙ урынына хан итеп ҡуйырға теләне. Әммә Хасар Баш шаман тәкдиме менән ризалашманы. Аҙаҡтан, ризалашҡас, Тәб-Тәнгри Сыңғыҙ ханды тәхетенән ҡолатыу һәм уның урынына татар-монгол империяһының ханы итеп Хасарҙы ултыртыу өсөн әҙерлек башланы. Әммә Сыңғыҙ хан да ҡул ҡаушырып ултырманы. Бәһлеүән кәүҙәле хонхотандарҙы — ир-егеттәрҙе эйәрткән Баш шаман Тәб-Тәнгри шул маҡсат менән килергә тейеш икәнлеген белгәнлектән, Сыңғыҙ хан Үҙ тәхетен һаҡлау хәстәрлеген күрҙе.

— Мин хан тәхетенән үҙ теләгем менән баш тартмаясаҡмын, — тине ул хонхотандарын эйәрткән Баш шаман аҡ тирмәлә күренгәс тә.

— Ризалашмаһаң, үҙеңә яманлыҡ ҡылаһың, — тине Баш шаман.

— Яманлыҡ ҡылып, ни эшләрһең?

— Хан тәхетенән һине ҡолатыу сараһын күрәсәкмен!

— Ҡулың ҡыҫҡа, — тине Сыңғыҙ хан тыныс ҡына.

Улар байтаҡ бәхәсләште.

Сыңғыҙ ханды үҙ теләге менән хан тәхетенән баш тартырға күндерә алмағас, Баш шаман Тәб-Тәнгри тирмә ишегенә табан ыңғайланы.

Сыңғыҙ хан ишек янындағы күмәк һаҡсыларына эйәк ҡаҡты. Шуны ғына кеткән нукерҙар алға ташланды. Баш шаман менән уның хонхатандарын ергә йығып, уларҙың аяҡ-ҡулын сүс арҡан менән сырманылар ҙа кейеҙ өҫтөндә аяҡ салып ултырған Сыңғыҙ ханға һораулы ҡараш ташланылар.

— Быларҙы хәҙер ни эшләтергә?

— Әлегә шунда ятһындар, — тине лә, яғымлы йылмайып, Сыңғыҙ хан тоғро нукерҙарын маҡтаны. — Барлыҡ ышаныс-таянысым һеҙ! Ошо көндән башлап һеҙ маҡтаулы «мәргән атыусы» тигән исем менән йөрөтөләсәкһегеҙ!

Нукерҙар хан алдында баш эйҙеләр.

— Рәхмәт!..

— Ә хәҙер Хасарҙы алып килегеҙ, — тине Сыңғыҙ хан. Ярты сәғәт самаһы ла үтмәне, «мәргән» нукерҙар Хасарҙы аҡ тирмәгә алып килделәр.

Хасар ҡустыһын күргәс, Сыңғыҙ хандың асыуы ҡабарҙы.

— Йә, Хасар, минең урынға ултырырға теләйһеңме? Хан тәхете һиңә ныҡ оҡшаймы? Хан тәхетенә ынтылыусыларҙы ниндәй яҙмыш көтөүе билдәле түгелме ни? — тип һораны ла, Хасар өндәшмәгәс, ул ныҡ ашалған алғы тешләрен күрһәтеп көлдө. — Ха-ха-ха!.. Ҡурҡма, һине язалап үлтерсергә уйламайым. Яманмы-яҡшымы, бер туған ҡустыһыҙ бит! Әммә әҙ-мәҙ һине аҡылға ултыртыу зыян итмәҫ!..

Сыңғыҙ хандың күҙ ҡарашынан нимә теләүен аңлаған иркәҙәр, монголдарҙың йолаһы буйынса, Хасарҙы комһетергә һәм мәсхәрәләргә тырышып, уның кейеҙ ҡалфогы менән билен быуған билбауын систерҙеләр ҙә тукмарға тотондолар.

Шул саҡ аҡ тирмә ишеге алдында Оҙолун-уджин күренде.

— Ни ҡыланаһығыҙ, яуыздар? — тип ул нукерҙарҙан тунмалған кесе улын әрсәләргә ташланды.

Әсоһенә ҡаршылашырға баҙнатсылығы етмәгән Сыңғыҙ пғарынды һәм уның алдында аҡлана башланы:

— Хасар ҡустым үҙе ғәйепле...

Сыңғыҙ ханды тыңларға теләмәйенсә, Оҙолун-уджин Чисарҙың ҡанға мансылып шешенгән йөҙөн һыпырҙы, өҫ кәлсмснә ҡунған туҙанды ҡаҡҡылап, уның башына кейеҙ һилфағын кейҙертеп, билен билбау менән быуҙы ла:

— Бер туған ҡустыңды ошолай мәсхәрәләргә нисек пцлмайһың? — тип һораны һәм сәнскеле күҙ ҡарашын Сыңғыҙ ханға йүнәлтте. — Үҙ токомона ҡарата хатта йыртҡыстың йыртҡысы мәрхәмәтле була, ә һинең өсөн яҡты шпъяла ғәзиз нәмә ҡалмаған!..

Осәһе әрләгәндә ҡаршылашмай, ғәҙәтенсә, башын һашпдырып ултырған Сыңғыҙ хан тауыш-тын сығарманы.

Оммә дошманлашҡан ике улын яраштырырға, уларҙы кәбаттан татыулаштырырға тырышҡан Оҙолун-уджиндың мгот-иәсихәтенән файҙа булманы.

Опю ваҡиғанан һуң Хасар ағаһынан бөтөнләйгә ситыште һәм унан үс алыу тураһында хыялланды.

Бер мең өс йөҙ кешене берләштергән отряд ойоштороп, үҙенә теләктәшлек белдереүсе хонхотандар менән сәләмләшкәс төҙөп, Хасар Сыңғыҙ ханға ҡаршы көрәшкә йыйналды.

— Былай булһа, мәсьәлә ҡатмарлана. Беҙҙең үҙ-ара ызғышыуыбыҙҙы дошмандар файҙаланыуы ихтимал, — тип Сыңғыҙ хан Субәдәй баһатурҙы саҡыртты һәм Хасар ҡустыһының ғәскәрен ҡыйратырға бойорҙо.

Локин Хасарҙы көс менән буйһондорорға ниәтләнгән Сыңғыҙ хандың маҡсаты тормошҡа ашманы. Хасар яҡынлашып килгән Субәдәй баһатурҙың корпусына беренсе булып үҙе һөжүм башланы һәм көслө алыш ваҡытында Нпшрҙарса һәләк булды...

«Хасар ҡустым һис шикһеҙ һәләтле, аҡыллы ине. Минең һүҙҙән сыҡмаһа, үҙ-ара ызғышҡандан һуң татыула-

шырға ризалашһа, әле лә йәшәр ине», — тип үкенес бәл т дереп, Сыңғыҙ хан ҡапыл арыуын һиҙҙе һәм алда төҫ: мөрләнгән монголдарҙың йәйләүендә туҡталып хәл йы йырға булды.

Иртәгәһе көндө бүленгән юлын ул дауам итте.

Бер ниндәй үҙгәрешһеҙ оло дала күренешенә эсе бө- шоп, Сыңғыҙ хан беренсе тапҡыр нисек итеп ҡатын алыуын иҫенә төшерҙө.

...Сыңғыҙ хандың атаһы, Еҙегәй баһатур, ул саҡта йәп-йәш Тәмуджинға көләш эҙләп сығып китте. Ул, аҙнаун көн самаһы ҡайҙалыр йөрөп ҡайтҡас, тантаналы рәүештә белдереү яһаны:

— Тәмуджин ульша ун йәшлек Бортә исемле һылыу, һәр яҡлап унған, эшлекле, аҡыллы кәләш таптым! Шәп, бик тә шәп ҡыҙ! Уның йөҙө яҡты, күҙҙәре осҡондар сәсеп балҡый!...

Тәмуджиндың атаһы Бортәне маҡтап яңылышмаған. Бортә, ысынлап та, һылыу, үтә яғымлы, әҙәпле, зирәк ҡатын булып сыҡты. Тәмуджин Бортәне ғүмере буйы өҙөлеп яратты һәм һәр нәмәне уның менән кәңәшләшеп башҡарыуға ғәҙәтләнде [1].

Әммә һәммәһе ыңғай барманы. Тәмуджин йәп-йәш һылыу ҡатыны менән бер ай самаһы ла йәшәргә өлгөрмәне, уларҙың еренә меркеттәр баҫып инде.

Әсәһе һәм туғандары менән Тәмуджин дошман яуынан ҡасып ҡотолдо, ә монголдар ғәҙәте буйынса иң түбәнһетелгәне ҡатын-ҡыҙ һаналғанлыҡтан, Бортә өсөн һыбай сабырға ат етмәне. Ул үгеҙ егеүле арбала ултырып ҡасырға мәжбүр булды һәм уны ҡыуып еткән меркеттәр ҡулына эләкте.

Меркеттәр башлығы Ядги Бортәне үҙенә икенсе бисә итеүен ишеткәс, Тәмуджин, ни эшләргә белмәйенсә, оло ҡайғы кисерҙе, яҡты донъяла йәшәү йәме ҡалмаған һымаҡ итеп тойҙо.

Ҡайғы-хәсрәтенең аҡтыҡ сигенә еткәс, өҙелеп һөйгән Бортәһен әсирлектән ҡотҡарырға ярҙамлашыуын һорап, атаһының элгәрге яҡын дуҫы Ван-ханға барҙы. Ван-хан егетте оло хөрмәт менән ҡаршыланы һәм шул, уҡ кисте меркеттәр биләгән ергә һөжүм итте.

Төнге алыш ваҡытындағы буталышта Бортәне икенсе өҙлөкһеҙ яҡка алып ҡасыуҙарынан ҡуркып, Тәмуджин ҡысҡырҙы:

— Бортә!.. Бортә-э!..

[1] Рашид ад-дин. **Йылъяҙма йыйынтығы**, т. 1, китап 2, М.-Л., 1952, 51-се бит.

Ҡатыиының тауышы ишетелмәгәс, бер урындан икенсе урынға сабып барҙы.

- Бортә-э!..

'Ҡатыны бер ерҙә лә табылмағас, Тәмуджин, күңел тпшөнкөлөгөнә бирелеп, үҙен-үҙе өҙгөлән ташларҙай хәлгә етте.

— Бортә-э!..

Шул саҡ, бөтөнләй аңғармаҫтан, ҡатыны тауышы ишеголдс:

— Мин бында-а-а!..

Тәмуджинға йән ингәндәй тойолдо. Ул, юлын быуырға мпташыусы меркеттәрҙе ажарланып тураҡлай-тураҡлай, Бортәнең тауышы сыҡҡан яҡҡа атын ыңғайлатты.

Лй яҡтыһы төшкән асыҡ урынға сыҡҡан Бортә Тәмуджиндың аты теҙгененә килеп йәбеште.

— Мин!.. Был — мин!..

Тәмуджин, эйәрҙән һикереп төшкән ыңғайы, ҡыуанысынан пи эшләргә белмәйенсә, Бортәне ҡыҫып-ҡыҫып ҡосаҡланы...

Бортә менән бергә ҡабаттан йәшәй башлағас, Тәмуджин ниндәйҙер аңлайышһыҙ борсоулы уй-тойғоларынан кптола алманы. Ул өҙлөкһеҙ күңелен ейкәне, иҙҙе, эшенә кимасауланы.

— Ниңә үҙгәрҙең, нимә булды һиңә? — тип һораны Цптэ.

— Белмәйем, — тип яуап ҡайтарҙы Тәмуджин.

Ҡатынының ҡорһаҡҡа ҡалыуын асыҡлағас, уның яфа спгеүе бигерәк тә көсәйҙе. Яҡты донъяға тыуасаҡ бала һпмдеке? Үҙенекеме, әллә меркеттәр башлығы Ядгиҙыҡымы?..

Малай тыуыуын ишеткәс, ауыр хәлдә ятҡан ҡатыны ɔрғһенә барманы, юҡ һылтауҙы бар итеп, Тәмуджин тепоно ҡайҙа йеренө.

Уны йәйләүҙә эҙләп тапҡан әсәһе Оэлун-уджин:

— Ниңә яман ҡыланаһыщ? Улың беҙҙең заттка тартҡпн, һинең сабый сағыңа оҡшаған, — тип әйткәс кенә, Тәмуджин ниндәйҙер көс еткеһеҙ ауырлыҡтарҙан ҡотолЮидай һымаҡ һиҙҙе үҙен.

— Улыма ниндәй исем ҡушырға теләр инең, әсәй?

— Белмәйем. — Оэлун-уджин уйға ҡалыбыраҡ торҙо.— Джучи исемен ҡушһаҡ, нисек булыр?

Тәмуджиндың йөҙө яҡтырҙы.

— һәйбәт, бик һәйбәт исем тапҡанһың, — тип әсәһепсц яурынынан һөйҙө лә ҡатыны менән улы эргәһенә йәнфарман елдерҙе.

Сыңғыҙ хан исеме менән хан тәхетенә ултырғас та,

Бортэне ихтирам итте һәм акыллы кәңәшенә һәр сак мохтажлык кисерҙе ул.

Сит ил походтарында йөрегән сакта уйнаш кылыусы иренә карата булған асыуын Бортэ бер касан да белгертмәне һәм уға тоғро хеҙмәт итеүен белде.

Көнсығыш илдәрен һуғышып алған йылдарҙа Сыңғыҙ хан Солонгос [1] ханының һылыу кыҙына ғашик булды. Ул кыҙҙы икенсе бисәлеккә алғас, тыуған илендәге йәйләүҙәрҙә йәшәгән монголдар эргәһенә оҙак ваҡыт ҡайтманы.

Баш ҡатыны Бортэ сапкын итеп ебәргән Аргасун хуурсыны [2] күргәс, Сыңғыҙ хан ғәжәпләнде.

— Ни йомош менән килдең бында?

— Һинең һаулығыңды, нисек йәшәүеңде белергә ҡушты Бортэ-уджин, — тип яуап ҡайтарҙы Аргасун хуурсы.

— Минең һаулығым һәйбәт, тормошом шәп!.. Бортэ-уджин менән минең малайҙарым һәм халҡым ни хәлдә?

Сыңғыҙ хандың һорауына Аргасун хуурсы йыр менән яуапланы:

Һинең ҡатыңың һәм уландарың һау!
Тик белмәйһең һин халҡың тормошон.
Һинең ҡатыңың менән уландарың һау,
Тик белмәйһең бөйөк халҡың ҡыланышын!
Ауыҙ йыртып, ҡайыр-тире ашай халҡың,
Ә һин ҡайғыртмайһың халҡың яҙмышын!
Һыуһынын ҡандырыу өсөн ҡар һыуын эсә халҡың,
Ә һин монголдарҙың гөрөф-ғәҙәтен оноттоң!..

Аргасун-хуурсының нисек итеп үҙен фашлауын Сыңғыҙ хан аяныс менән тыңланы. Туған халҡы менән бәйләнештә өҙөп, ҡайғыһыҙ-моңһоҙ сит илдә йәшәүе мәғәнәһеҙ мауығыу һымаҡ тойолдо уға...

— Бортэ-уджин минең икенсе бисә менән донъя көтәүемде беләме?

— Белә, — тип яуап ҡайтарҙы Аргасун-хуурсы.

Бортэ менән мөнәсәбәте боҙолоуынан ҡурҡып эсе бошҡан Сыңғыҙ хан тыуған илендәге башҡа яңылыктарҙы һорашманы. Солонгос кыҙына өйләндермәҫкә тырышкан ярандары һүҙен тыңламауы өсөн беренсе тапҡыр үкенеп, ул уйға сумды.

«Үҫмер сағымда атайым табып биргән Баш ҡатыным Бортэнең күҙенә нисек күренергә? Мине ул нисек ҡаршылар? Ғаиләләге Баш ҡатыным менән татыулығым булмаһа, монголдар минең хан тәхетендә ҡалыуымды теләрме?..»

[1] *Солонгос* — Кореяның элекке исеме.

[2] *Хуурсы* — хуур исемле уйын ҡоралында уйнаусы музыкант.

— Бортэ-уджин нимә һөйләне?

— Сит илдә икенсе бисә алыуыңды белгәс, Бортэ-уджни асыуын бер кемгә лә белгертмәне. Ул үҙен әүәлгесә тыйнаҡ һәм әҙәпле тота, — тип яуап ҡайтарҙы ла, Бортэ-уджиндан ишетеп белгән бәғзе бер һүҙҙәрҙе көйгә һалып, Лргасун-хуурсы һамаҡланы:

Баш бармаҡ шәп булһа,
Текә яр аҫтындағы һыуҙа йөҙгән
Ике өйрәкте атырға була, тиҙәр.
Әгәр ҙә ирең бик теләһә,
Апалы-һеңлеле кыҙҙарҙы
Бисәлеккә алырға хаҡы бар, тиҙәр.
Күп бисә алыу яманмы?
Әҙҙе алыу яҡшымы?..[1]

Бындай һамаҡлауҙы ишетеп ярһыған Сыңғыҙ хан, сит илдә ҡалырға теләмәйенсә, тыуған иленә ҡайтып китте.

Үҙен яғымлы йылмайып ҡаршы алған Бортэ менән осрашҡас та, ул тыныҫланды һәм туған-тыумасалары менән берәм-берәм күрешеп сыкты.

Кешеләр таралышып, аулакта ҡалғас:

— Аргасун һәләтле хуурсы. Уға бүләк тапшырырға кәрәк, — тине Сыңғыҙ хан.

— Аргасун-хуурсыны мин бүләкләнем. — Бортэ яғымлы йылмайҙы.

— Нимә менән бүләкләнең?

— Һинең алтын хуурыңды бирҙем.

— Миңә оло бәхет килтерә торған алтын хуурымды ул алдымы?

— Көйләп биргәс, хуурҙы алырға мәжбүр булды..

— Аргасун әле ҡайҙа йөрөй икән?

— йәйләүгә китте.

Алтын хуурын алырға баҙнатсылығы еткән Аргасунға асыуы ҡабарған Сыңғыҙ хан уны йәйләүҙән алып килергә ҡушты.

Аргасун-хуурсы, язаға тартылырға тейеш икәнлеген аңлпн, Сыңғыҙ хан алдында теҙләнде.

— Мин яңылыштым. Яраҡлы тапһаң, ярлыҡа, — тине ул, йән тетрәтерҙәй аянслы һүҙҙәрҙе көйгә һалып, алтын Хуурҙа уйнарға тотондо.

Уны күңел биреп тыңларға мәжбүр булған Сыңғыҙ, хандың ҡырыҫ йөҙө әкренләп яктырҙы.

Тәмле-татлы һүҙҙәрең
Күңелемде арбаны, —

[1] Сыңғыҙ хандың өсөнсө һәм дүртенсе ҡатындары бер ата-әсәнән тыуған.

тип үҙе лә һамаҡлай-һамаҡлай, ул данлыҡлы Аргасун-хуурсыны үлем язаһынан ярлыҡаны һәм ҙуға алтын хуурын бүләк итте [1].

Ошо ваҡиғанан һуң Бортэ-уджинға сэчэн-хатун [2] тигән икенсе маҡтау исеме өҫтәп ҡушылды. Сөнки һәммәһе уның кәңәше буйынса башҡарылды. Бортэ аҡылын тотмаһа, Аргасун-хуурсыны иҫән-һау ҡалдырыр инеме Сыңғыҙ хан? Субәдәй, Джэбэ, Мухали, Хубалай, Тухачара, Шиги-Хутуху кеүек ҡыйыу, һәләтле полководецтарҙы ла Бортэ-уджин сэчэн-хатун кәңәше буйынса яҡынайтманымы ни? Уларҙы яҡынайтмаһа, хәрби походтарҙа уңыштарға өлгәшә алыр һәм төрлө ил кешеләрен берләштергән ҡеүәтле дәүләт ойошторорға мөмкинлек тыуыр инеме?

Сыңғыҙ хан үҙе лә Бортэгэ һәм полководецтарыңа ҡарата ихтирамлы һәм иғтибарлы булды. Улар өсөн ул бер ләмә лә йәлләмәне.

Бөйөк Яссы [3] боҙоп, табыштарҙы ғәҙел бүлмәгән нойондарына ҡарата Сыңғыҙ хан рәхимһеҙ булды, ҡайһы берҙәрен хатта язалап үлтертте.

Ҡырыҫ холоҡло, үтә талапсан, бәҙэе ваҡытта мәсьәләле үтә ҡыҙыулыҡ менән эш ҡылыуына ҡарамаҫтан, Сыңғыҙ ханға ярҙамсылары асыу тотманы, ә дошмандарының ҡайһы берҙәре уның иң яҡын дуҫына әйләнде. Шундайҙарҙың береһе — нойон Богурчи.

Богурчи Сыңғыҙ хандың ҡан дошманы ине. Уның ғәҙел якәнлеген бер һуғыш ваҡытында һынағас, Богурчи ҡыҙыл ҡанға мансылған һөңгөһөн ергә ҡаҙаны ла, ялан сыҫҡаны төҫлө иң шәп аты һыртында айҡала-сайҡала, Сыңғыҙ ханға арнап сығарған йырҙы һуғышсылары алдында йырларға тотондо:

Һинең атайың Егәҙәй баһатур,
Һинең әсәйең Оэлун-уджин,
Һинең туғыҙ онлуктарың бар;
Биш төҫтәге халҡыңдың дүртһе — килмешәк.
Уларҙы һин үҙеңә буйһондорҙоң,
Һин, Сыңғыҙ хан, бөйөк хужам минең! —

Артабан, йырын икенсе төрлөгә үҙгәртте:

Барыбыҙ бергә барғанда,
Ниңә ҡурҡтың һин
Сит дошмандарыңдан?..

[1] Был мәғлүмәттәр XII быуаттағы «Сказание об Аргасун-хуурчи» тигән йыйынтыҡла һаҡланған.

[2] Сэчэн-хатун — «аҡыллы батша» мәғәнәһендә.

[3] «Тайная история монголов».

Шаярыу ҡатыш яңғыраған йырында Богурчи Сыңғыҙ хопга өгөт-нәсихәт нықыуҙан да ҡурҡманы:

Аҡҡош себеше кеүек
Ҡайҡанлап йөрөмә һин.
Ялағай менән алдаҡсыға
Бер ҡасан да ышанма һин!
Дошман менән алышҡавда
Мәрхәмәтле булма һин!

Һорғолт ҡаҙ себеше кеүек
Бер ҙә юҡҡа ҡаңғылдама!
Алама кешеләр һүҙен
Һин ысынға алма!
Кеше үлтергән дошманға
Үҙең дә яҡшылыҡ ҡылма!..

Богурчн менән ярышып, нойон Гоа-Мухли дуҫы ла Оицгыҙ ханға маҡтаал [1] яуҙырҙы:

Һиннең оло маҡсатың диңгеҙ кеүек сайҡалманы,
Һауанан һорағаң һәр теләгең, ышанысың аҡланды.
Дошманыңа бер ҡасан да аяу булманың,
Көс менән берләштергән халҡыңдан маҡталдың.

Иң ҡеүәтле Чжурчжэн дәүләтен ҡыйратыуҙа һәм Цзнн ноҫслен төбө-тамыры менән ҡоротоуҙа батырлыҡтар күрһәткән нойон Гоа-Мухли дуҫын Сыңғыҙ хан үҙе лә маҡтамай булдыра алманы:

Һин, яһыу филем, көслө янғындай, дошманды ҡырҙың.
Һин — байрағымды һәм бунчугымды тоткан таш стена.
Һин мәжлестә һый таратыусы бай кеше,
Һин алышта ҡуркыу белмәгән ҡорос ҡоралым минең,
Һин, Гоа-Мухлем, шуны бел: донъяла ҡалыр эшең!..

Сыңғыҙ хан иң яҡын, тоғро ярҙамсыларын маҡтай, ә ярҙамсылары уны данлай...

Аҙаҡтан, Сыңғыҙ хан яҡты донъянан китеп бик күп йылдар уҙғас, уның исемен данлаусылар булырмы икән, юллә ул онотолормо?

Күп, бик күп мәмләкәттәрҙе буйһондороп, нәҫел-ырыуының ғүмеренә етерлек байлыҡ һәм дан яулаған Сыңғыҙ ханға йәшәргә лә йәшәргә ине!.. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ғүмерҙе алтын-көмөшкә, байлыҡҡа һатып алыу, хатта уны бер аҙға оҙайтыу ҙа мөмкин түгел шул! Үлемгә бай ҙа, хоПерсе лә, хан да, ярлы ла типә-тиң...

Ер йөҙөндә берҙән-бер бөйөк хаким була тороп та, Сыңғыҙ хан үҙен Бөйөктән дә Бейек һауа алдында ғына

[1] *Маҡтаал* — маҡтау.

көсһөҙ тойҙо һәм хан ерҙәге бөтөн нәмә уның ҡушыуы буйынса башҡарылыуына ихлас инанды.

Бөйөк һәм Бейек һауа Сыңғыҙ ханға ниндәй яҙмыш дәғүә итә икән киләсәктә? Үҙе сит ил походтарында йөрөгән саҡта кес тупларға һәм Ҡараҡором дәүләтенә ҡаршы һуғышырға әҙерләнгән чжурчжәндәрҙе ҡабаттан ҡыйратырға көс-кеүәт бирһәсе Бөйөк һауа Сыңғыҙ ханға?

«Уғата яйланыҡ, ахырыһы. һыҙылып-мыҙылып барһаҡ, Ҡараҡором ҡалаһына тиҙ ҡайта алмаясаҡбыҙ», — тип уйлап, Сыңғыҙ хан ярандары менән һаҡсыларын ҡабаландырҙы:

— Ҡалмағыҙ, шәберәк ҡыуығыҙ аттарҙы!..

XV

Монголдарҙың феодаль дәүләте заманында хан һарайы төҙөлмәгәйне, оло дәрәжәле кешеләрҙе тантана менән хөрмәтләп ҡаршылау ҡағиҙәләре лә юҡ ине. Шунлыҡтан сит ил походында оҙаҡ ваҡыт йөрөп Керулен йылғаһы буйындағы йәйләүгә туп-тура ҡайтҡан Сыңғыҙ ханды Баш ҡатынынан башҡа бер кем дә ҡаршыламаны.

Байтаҡ ваҡыт уҙғас ҡына туған-тыумасалары менән бала-саға йыйнала башланы. Шамандарын эйәртеп аҡ тирмә эргәһенә килгән Баш шаман Тәб-Тәнгри, Сыңғыҙ ханға ҡарата булған асыуын онотоп, шар шикелле йомро шөңгөҙәген дөңгөрҙәтә-дөңгөрҙәтә һикерәнләгән ыңғайы, өҫтөнә тағылы тимер-томорҙо сылтлатты.

Аҡ тирмәне өс тапҡыр урап сыҡҡас, Тәб-Тәнгри ишек алдындағы уттар эргәһендә сатай-ботай һикерәндәргә тотондо.

— Ҡасығыҙ, шайтандар, ҡасығыҙ! Хан йортона яҡын килмәгеҙ, үҙегеҙҙе харап итербеҙ, — һамаҡлай-һамаҡлай, дөрләп янған утлы торонбаштарҙы тирә-яҡҡа бырағытты ла ул Сыңғыҙ ханға баш эйҙе. — Бортә-уджин сәүән-хатун менән Баш йортта шатлыҡлы йәшәгеҙ!

Тәб-Тәнгри асҡан ишектән хан менән уның баш ҡатыны эскә үҙғас ҡына, бүтәндәргә лә Баш йортҡа инергә рөхсәт бирелде.

Сыңғыҙ хан, арып-талып ҡайтыуына ҡарамаҫтан, ял итмәне. Ғаиләһе һәм туған-тыумасалары менән бергә ултырып тамаҡ туйҙырғас та, ишек алдында көткән шымсыларынан үҙе юҡта кемдәрҙең нимә эшләүен һәм яңылыҡтарҙы һорашты.

Чжурчжән дәүләтенең ҡабат тергеҙелеүе, уның элекке хакимиәтендәге кешеләрҙең күбеһе һаҡланыуы, уларҙың ғалимдары кеүәтле яңы ҡорал уйлап сығарыуы, төньяҡта ҡабылған рудаларҙы иретеп, һөнәрселәр тимерселектә эшлоүс, йәштәрҙең көнөн-төнөн һуғыш уйынына өйрәтелеүе тураһында белгәс, Сыңғыҙ хан уйға ҡалды. Уның борсолоуы тигенгә булмаған икән! Ситтә йөрөүенән файҙалаиып, чжурчжәндәр һуғышҡа ныҡлы әҙерләнә... Уларҙың оҫта дипломат булыуҙары ла татар-монгол империяһы фпЛҙаһына түгел. Чжурчжәндәрҙең танғуттар менән солох төҙөп, ҡытайҙарҙы үҙҙәре яғына ылыҡтырырға маташыуҙары ла һағайта. Чжурчжәндәрҙең утлы осҡондар сосеп шартлай торған туптары менән тиҙ тоҡаныусан патроидары ла ошоғаса бер кемдең башына килмәгән өр-яңы корал. Уларҙы нисек итеп алыҫтағы кешеләргә аталар пкоп? Бәлки, укты файҙалана торғандарҙыр? һәммәһен ситсклоп асыкламайынса, чжурчжәндәргә ҡаршы яу меИОП барыу — аҡылһыҙлыҡ!..

Иң яҡын ярҙамсыларын саҡырып кәңәшләшкәс, Сыңғыҙ хан байтаҡ көс туплаған Чжурчжэн дәүләте менән шгкытлыса иҫәпләшергә һәм уның менән бәйләнеш тоторга п мәжбүр булды.

Әммә Чжурчжэн дәүләтен ҡыйратыу тураһындағы уйыпон Сыңғыҙ төңөлмәне, киреһенсә, киләһе һуғышҡа әҙерлоиеү өсөн барлыҡ мөмкинлектәрҙе файҙаланырға тырышты. Иң әүәл ул күрше-тирәләге бойондороҡһоҙ илдәрҙе үҙенең яғына ылыҡтырҙы. Шул маҡсат менән Барсук хон менән дә һөйләшеүҙәр • башланы. Ул алтын-көмөш, ыйыы, төрлө тауарҙар һатырға теләгән сауҙагәрҙәре менон бергә Монголияға килгәс, өс тәүлек буйы үҙендә ҡуипҡ итте. Сыңғыҙ хандың хәйләһен дуҫлыҡ мөнәсәбәте тип аңлаған Барсук, алсаҡланып китеп, уға Алтун-беги [1] иемле ҡыҙын бүләк итергә вәғәҙә бирҙе һәм ҡаршылыҡлиҙ буйһонорға теләк белдерҙе. Барсук артынса, ҡараҡытай ханы Арыҫлан менән Буҙар ханы Алмалыҡ таҙ үҙ,оренең иң яратҡан ҡыҙҙарын бүләк итеп, Сыңғыҙ ханға буйһонорға теләк белдерҙеләр.

Уйғырҙарҙы, ҡарлуктарҙы, төрөкмәндәрҙе, ҡашҡарсылпрҙы, күгәрселәрҙе һәм башҡа халыҡтарҙы дипломатия лрҙамында буйһондорғас, уларҙы берләштереп ойошторған бер ғәскәрҙең башлығы итеп Сыңғыҙ хан нойон Мәликшаһты, икенсеһенә уйғыр Әли-Бахшиҙы тәғәйенләне. Бүтои уйғыр феодалдарын да ул үҙенә күпләп яҡынайтты.

[1] *Алтун-беги* — Сыңғыҙ хан үлеү сәбәпле, уның ҡатыны булып Лошоргә өлгөрмәне. Үтәҙәй хан, атаһының васыяты буйынса, Алтун-Сспше икенсе кешегә бүләк итә. Ул кеше ҡайтып барышлай юлда үлсу сәбәпле, Алтун-беги, Бишбалыҡ ханлығындағы атаһы үлгәс, уның урынына батша булып ҡалған Кишмаинға һатыла. (Джувейни, Тарих-и джахангушай, л.л. 18-б — 19а).

Уйғыр Тататун-а Сыңғыҙ хандың мисәтен һаҡлаусы итеп тәғәйенләнде. Уйғыр Ғәбли хандың уландарын уҡырға, яҙырға өйрәтте. Уйғыр Атай — Сали монголдар араһында будда динен таратыуҙа ярҙамлашты. Уйғыр Сяннай көнбайыш даруғалағы [1] Сыңғыҙ хан ғәскәренең Баш командующийы итеп үрләтелде. Чиннай исемле уйғыр Сыңғыҙ хандың беренсе министры вазифаһын башҡарҙы...

Сыңғыҙ хан уйғырҙарға таянды һәм ышанды. Сөнки, ниндәй генә яуаплы йомош ҡушмаһын, улар хандың һәр теләген намыҫ менән үтәнеләр. Танғуттар, киреһенсә, Сыңғыҙ хандың ышанысын аҡламаны. Улар, тоғро булырға вәғәҙә биреп тә, иң көсөргәнешле минутта хыянат ҡылып, күп мәшәҡәт тыуҙырҙылар.

Си Ся [2] дәүләте императоры Цзуньсян үлгәс, уның улы Дә-ван император булып ҡалды. Шул мөмкинлекте файҙаланырға тырышып, Сыңғыҙ хан Дә-ван менән килешеү төҙөнө һәм уның аръҡылы чжурчжэндәр уйлап сығарған ҡеүәтле һуғыш ҡоралын уларҙың үҙҙәренә ҡаршы йүнәлдерергә теләк белдерҙе. Чжурчжэндәргә ҡаршы һуғыш башланғанға саҡлы, Дә-ван менән мөнәсәбәтте яҡшыртыу, уның барлыҡ мөмкинлектәрен файҙаланыу — иң мөһим бурыстарҙың береһе һаналды. Дипломаттары ярҙамында чжурчжэндәр менән танғуттарҙың дуҫлығын ҡаҡшата алһа, Сыңғыҙ хан тәү башлап Си Ся императоры Дә-вандың сиреүен ҡыйратырға тейеш. Сөнки танғуттар мәкерле, ышанысһыҙ, иң көсөргәнешле ваҡытта хыянат итеп, чжурчжэндәргә ярҙамлашыуы ихтимал. Амур йылғаһы буйында батшаларының башы өҙә сабылғандан һуң, татарҙар Сыңғыҙ ханға буйһондоролдо. Шунан бирле улар тоғро хеҙмәт итә, ә танғуттар, алышта еңелгән һайын дуҫлыҡ солохон төҙөүҙәренә ҡарамаҫтан, бер аҙ көс туплағас, һәр саҡ хыянатсылыҡ ҡылды.

Танғуттарға бәйләнешле ваҡиғаларҙы Сыңғыҙ хан -иҫенә төшергән һайын, асыуы ҡабара.

Бер мең ике йөҙ туғыҙынсы йылдың яуынлы һалҡын йәйендә танғуттарҙыҡ баш ҡалаһы Чжунсинды һуғышып ала алмағас, Сыңғыҙ хан, йылғаны быуҙыртып, уларҙың баш ҡалаһын һыуҙан баҫтыртты. Шунда ғына танғуттарҙың ул замандағы императоры Аньцюань Сыңғыҙ ханға

[1] *Даруға* — елкә, татар-монгол империяһының бер өлөше.

[2] Кытайҙағы Танғут дәүләте XI быуат башында Си (көнбайыш), йәки Да (Бөйөк) Ся тип йөрөтелгән. 1038 йылда Да Ся (Бөйек Ся), ә XI—XII быуаттарҙа Бейек-Бөйөк Аҡ Ся дәүләтенә Си исеме ҡушыла XI быуаттағы Ҡытай һүрәтенән күренеүенсә, Си Ся дәүләтенең ил сиге «дадинь цзе» — «татарҙарҙың ил сиге» менән тоташҡан Һәм улар үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә булған.

Оуйһонорға һәм уның «уң ҡанаты» булырға ризалашты. Оммо һүҙендә торманы. Аҙаҡтан, ҡуркыныс бөткәс, чжурчжэндәргә ҡаршы һуғышҡан Сыңғыҙ хан сиреүенә ярҙам-Лпшырға теләмәйенсә: «Беҙ алыҫҡа күсеп йөрөмәйбеҙ, Пыл буйы балсыктан буралған ҡәлғә эсендәге ҡалала йәшәйбеҙ. һөжүм итеүсе татар-монголдарҙың артынан эйәЮ алмабыҙ, аттарыбыҙ шәп сабышып барыуға күнекмәгән, ҡалҡылы бәрелешкә лә өйрәнмәгәнбеҙ» [1], — тип Аньцюань Һылтау тапты. Чжурчжэндәрҙең еңелерен белгәс кенә, Сыңғыҙ хан менән мөнәсәбәтен боҙмаҫҡа тырышып, ул үҙенең Чахэ исемле ҡыҙын бүләк итте, уға өҫтәп һунарға оПротелгән ыласындар менән дөйәләр һәм алтын-көмөш Опрҙс.

Танғуттарҙың шул заманда һуғышҡа ҡыҫылмауынан фпПҙаланып, Сыңғыҙ хан Иртыш йылғаһы буйындағы наймандар менән меркеттәрҙе тулыһынса ҡыйратты, ә наймандар ханы Куслук Ҡара-ҡытай дәүләтенә ҡасыш ҡотолЮ. Уйғырстан [2] батшаһы Килиҙе генә буйһондора алманы Сыңғыҙ хан. Ул уйғыр иленең азатлығы өсөн оҙаҡ йылдар көрәште...

«Танғуттарҙы ҡыйратмайынса, чжурчжэндәргә ҡаршы һуғыш башлау — аҡылһыҙлыҡ. Сабыр итергә кәрәк. Са(Илр иткән — моратына еткән», — тип Сыңғыҙ хан писарь ин ифаһын башҡарған уйғырҙы саҡырҙы.

• - Сн Ся дәүләте императоры Дә-ванға хат яҙабыҙ. •)ерһеңме?

- Әҙермен, — тип яуап ҡайтарҙы писарь.

- Әләйһә, мин әйткәндәрҙе түкмәй-сәсмәй яҙ:

«...Бер ваҡыт һин, Борхан [3], танғуттарың менән бергә чинго буйһонорға һәм уң ҡулым булырға теләк белдерыписц. Шунан аҙаҡ мин һине сартауылдарға ҡаршы һуғышырға саҡырҙым. Солохто боҙоп, һин уларға ҡаршы һуғышыуҙа ярҙамлашырға теләмәнең, ғәскәр ҙә бирмәнең. Мииеи илсемә, минең исемемдән һиңә барғас, яман һүҙҙәр әйтеп орлағанһең. Ул ваҡытта һине аҡылға ултыртырға ваҡыт тапманым. Бына хәҙер, Бөйөк һауа ярҙамында Сартауыл илен ҡыйраткас, һүҙендә тормай, алама ҡыланған өсөн, һинән, хөрмәтле Борхан, яуап алырға барам...» [4]

Си Ся дәүләте императоры исеменә яҙылған хатты ... ныл киткән сапҡынды оҙаткандың иртәгеһе көндө, 1226

[1] Козин С. А. Сокровенное сказанне. Монгольская хроника. 1240 ил М.-Л., 1941, 180-се бит.

[2] Уйғырстан — Көнсығыш Төркөстандағы, Турфан, Ҡара-Ходжо, Хомул (Хами) ерҙәре менән ҡалаларын берләштергән ил.

[3] *Порхан* — Танғут императорына монголдар ҡушҡан ҡушамат.

[4] Козин С. А. Сокровенное сказание, 100-сы бит.

йылдың егерме икенсе майында, Сыңғыҙ хан командалығындағы сиреү танғуттарҙьщ еренә бағып инде.

Хәйшуй (Эдзинә, Хара-Хото) ҡалаһын һуғышып алғандан һуң, танғуттар яҡлы сали, тәлә, чиминь ҡәбиләләрен тулыһынса ҡыйратып, Сыңғыҙ хан сиреүе ҙур тиҙлектә алға ябырылды.

Әдзин-ғол йылғаһы яры буйлап Наньшаня тауы итәгенә барып еткәс, Сыңғыҙ хан сиреүен ялға туҡтатты.

Иртәгәһе көндөң таңында татар-монголдар Сучжоу ҡалаһына һөжүм башланы. Ҡаланы һаҡлаусылар батырҙарса алышты. Ике көн буйы һуғышып, улар тамам хәлһеҙләнгәс кенә, ҡыйратылған ҡәлғә аша үҙған татар-монголдарға Сучжоу ҡалаһын буйһондорорға мөмкинлек тыуҙы.

Сучжоу ҡалаһын һуғышып алғас, уны һаҡлаусылар ҡаршылыҡ күрһәткән есен, Сыңғыҙ хан бер кемде лә йәлләмәне, һәммәһен ҡырҙыртты, ә ҡаланы ер менән тигеҙләтте. Теләһә ҡайҙа йәшеренеп ҡалған йеҙ ҙә алты кеше, сит ергә ҡасып ҡотолғас, ер эше менән шөғөлләнергә мәжбүр булды.

Сыңғыҙ хан сиреүе, туҡталып тормайынса, артабан ябырылды. Ганьчжоу ҡалаһын ҡыйратҡас та, Хуанхэ йылғаһы аша сыҡҡан ыңғайы, Линчжоу ҡалаһын ҡамауға алдылар.

Ҡаланы штурмлағанда Си Ся императоры Дэ-вандыц үлеүе һәм уның урынына кенәз Наньпин ван Сянь ҡуйылыуын белгәс, Сыңғыҙ хан танғуттарға ҡаршы ҡыҫымды көсәйтте. йөҙ мең кешене берләштергән Вәймин командалығындағы сиреүҙе ҡыйратып, танғуттарҙьщ унарлаған ҡалаларын үҙенә буйһондорорға өлгөрҙө.

Си Ся дәүләтенең баш ҡалаһына килеп еткәс, император ван Сянь Сыңғыҙ хан менән һөйләшеүҙәр башларға мәжбүр булды һәм Чжунсин ҡалаһын ҡыйратмауҙы үтенде.

Сыңғыҙ хан, ван Сянь тәҡдимен тикшереү өсөн, сиреү башлыҡтарын кәңәшкә йыйҙы.

— Йә, әйтегеҙ. Чжунсин ҡалаһын ҡамауҙа тотоуҙы туҡтатабыҙмы, әллә көҙгә саҡлы ошонда ҡалабыҙмы? — тип һорағас, нойондар шып-шым ҡалды.

Байтаҡ ваҡыт үҙғас, Сыңғыҙ хандың фекерен асыҡларға теләп, кәңәшмәлә ҡатнашыусыларҙың береһе ҡыйыуһыҙланып ҡына урынынан күтәрелде.

— Танғуттарҙың баш ҡалаһы ҡасан баш һалыуын көтөп, көҙгә саҡлы бер урында тороуҙың файҙаһы тейерме?

— Ә һин нисек уйлайһың? — Сыңғыҙ хандың үткер күҙ ҡарашы нойонға йүнәлде.

— Көндәр ошолай эҫе торһа, кешеләрҙең хәле мөшкөлләнәсәк, аттарҙы ашатыу мәсьәләһе лә ҡыйынлашасаҡ... Шуға күрә, минең уйымса, ҡан дошманыбыҙ чжурмжәндәргә ҡаршы һуғышыу өсөн, көстө һаҡлайыҡ.

— Көсөбөҙ кәмеһә, Ҡытай менән солох төҙөп, һуғышҡа нықлы әҙерлек алып барған чжурчжәндәр менән алышыуы ҡыйынға тура киләсәк, — тип өҫтәне икенсе нойон.

Сыңғыҙ хан, ризалашып, баш ҡаҡты.

— Дөрөҫ! Йөҙ кешенән береһе генә ҡасып үлемдән ҡотолған танғуттар ере мәйеттәр менән тулған саҡта, аҡлп һейәге һындырылған Чжунсин ҡалаһын ҡамауҙа тотоуҙың мәғәнә юҡ. Ул былай ҙа дөмөгәсәк,— тип Сыңғыҙ хан снрсүенә ял бирҙе.

Алыҫтағы Калка йылғаһы буйынан Сыңғыҙ хандың Кушыуы буйынса ҡайтҡан Субәдәй баһатур, чжурчжэнДОрго ҡаршы һуғыш башларға тейеш икәнлеген белгәс, уйға ҡалды.

— Ауыр, ғәҙәттән тыш ауыр мәсьәлә. Уларҙы икенсе тптҡыр ҡыйратыуы еңел булмаясаҡ, — тип ул чжурчжэндорҙсц өр-яңы һуғыш тактикаһын, стратегияһы менән һуғыш ҡорамалдарын нықлап өйрәнергә кереште.

Чжурчжэндәрҙең ҡоралын үҙҙәренә ҡаршы файҙаланырға, ҡәлғәләрен штурмларға, йылға-күлдәрҙе йөҙөп сығырға йәштәрҙе өйрәтеү өсөн, Субәдәй баһатур барлыҡ мөмкинлектәрҙе файҙаланды.

Чжурчжэндәргә ҡаршы һуғышҡа нықлы әҙерлек барЮП ваҡытта шамандары ҡамауында Сыңғыҙ хан да тыныс ултыра алманы. Ул, аҙаҡҡы ваҡытта һаулығы нык ҡаҡшиуына ҡарамаҫтан, һуғышҡа әҙерлек барышы менән өҙлөкһөҙ ҡыҙыҡһынды.

Чжурчжэндәргә ҡаршы һуғыш 1227 йылдың июль аҙаһында башланды.

Татар-монголдарҙың беренсе һөжүме уңышһыҙ тамамланды. Икенсе көндөң таңында, уҡтарҙы иҫәпһеҙ-һанһыҙ туҙыра-яуҙыра, улар ҡабаттан һөжүмгә ташланды һәм чжурчжэндәрҙе ҡәлғәнең тышҡы яҡ стеналарына ҡыҫырыҡланы. Шул мөмкинлектән файҙаланып, татар-монголдарҙың чжурчжэндәрҙән һатып алынған таш ырғытҡыс ыпишалары ҡалын ҡәлғә стеналарын онтарға тотондо...

Ксшеләр ике яҡтан да күплəп ҡырылды.

Ҡаланы һаҡлаусыларҙың дары тултырыулы көршәк-оре утлы ялҡындар урғылтып бер-бер артлы ярыла башлағас, ҡото алынған татар-монгол араһында паника ҡупты. Улар менгән ҡырағай аттар ҙа, күк күкрәүҙе хәтерләткән көслө шартлауҙарға сыҙамайынса, аҡылдан шаш-

ҡандай ҡотороноп кешнәй-кешнәй, бер-береһен типкәлә-не, эйәрҙәренән ҡолаған хужаларын тапаны. Иҙҙе.

Алдағыларҙың мөшкөл хәле менән иҫәпләшмәйенсә, арттағылар уларҙы ҡәлғә стеналарына ҡыҫырыҡланы.

Ҡәлғә ситендәге тәрән соҡорҙар аттар һәм кешеләр мәйете менән тулып тигеҙләнгәс, баҫма-күпер һалыуҙыҡ кәрәге булманы. Яралылар һәм мәйеттәр' өҫтенән үҙған татар-монголдар таш ватҡыс бүрәнәләр ярҙамында ҡәлғә стеналарын соҡой башланы, икенселәре, стеналарға баҫ-ҡыстар ҡуйып, юғарыға менергә маташты...

Алыш барышын күҙәткән Сыңғыҙ хан, ғәҙәттәгесә, ты-ныс тора алманы. Әле бер, әле икенсе урынға ебәрмә көс ебәрергә ҡушып, Субәдәй баһатур.ҙы бер туҡтауһыҙ өтәләне.

Үлеш-ҡыйралыш төштән һуң да кәмемәне.

Һуғышсыларына ярҙам итерҙәй мөмкинлек ҡалмауын белгәс, Сыңғыҙ хан үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр хәле мөшкөлләнеүен һиҙҙе.

— А-ах, ни булды миңә? — тип йөрәге тәңгәлен тотоп, ул ергә сүкәйҙе.

Баш шамандың им-томо ла, үлән дарыуы эсеүенең дә файҙаһы теймәгәс, аптырап:

— Бейеклегеҙ Бөйөк һауа чжурчжәндәрҙе ҡыйраткуым-ды теләмәй, — тине лә ул һуғышты туҡтатырға ҡушты.

Йортона ҡанҡас та, Сынғыҙ хандың хәле еңеләймәне. Әжәле яҡынлашыуын һиҙеп, ул төрлө ҡатындарынан тыуған уландары менән ейәндәрен саҡырҙы.

Уларҙың һәр береһенә ғүмере буйы йыйған табыш ме-нән һуғышып алған ерҙәрҙе билдәләп, уйғырҙан махсус дәфтәргә яҙҙырты ла, үҙе үлгәндән һуң ҡайһы илдәрҙе һуғышып алырға ҡушып, өгөт-нәсихәтте көйгә һалып ны-ҡыны:

Табыш өсөн бейек тауҙар аша артылығыҙ,
Киң диңгеҙҙе аша сығыр урын табығыҙ.
Алыҫ китһәгеҙ, ҡыйын булһа ла,
Аҙағына саҡлы барығыҙ!
Ауырлыҡты күтәргәс, ҡыйын тип,
Бер ҡасан да ыңһарҙамағыҙ!

Ҡыйынлыҡтарҙы еңеү өсөн, Сыңғыҙ хан уландары ме-нән ейәндәренең үҙенән үрнәк алыуҙарын теләне:

Бейек тауҙар аша артылдым мин,
Киң йылғаларҙы ла кистем мин.
Шул саҡ өр-яңы ҡайышым туҙҙы,
Көмөш өҙәнгем дә иҫкерҙе,
Һеҙ ҙә, ана шулай, йыбанмағыҙ.
Күп илдәрҙе буйһондорҙом мин,

Халыҡтарын да берләштерҙем мин.
Уларҙың йәнен тотһаң ҡыҫып,
Тәндәре китмәҫенә инандым мин...

Өгөт-нәсихәт ныҡыуҙан туҡталғас, Сыңғыҙ хан байтаҡ шҡыт өндәшмәй ятты.

— Минең васыятымды аңланығыҙмы?

— Төшөндөк, — тип яуап ҡайтарҙы Үгәҙәй һәммәһе исе-менән.

— Төшөнгәс, бәхил булығыҙ, — тип Сыңғыҙ хан улан-дары менән ейәндәренә китергә ҡушты.

Икәүҙән-икәү генә ҡалғас, Сыңғыҙ хан Бортәгә иғти-Опр менән ҡараны.

— Мине Бейөк һауа үҙенә алһа, һин яҡты донъяла ҡа-лаһыңмы, әллә бергә китәбеҙме?

— Баш ҡатының булғас, йоланы боҙорға хаҡым юҡ. Ммн һинең менән бергә китәсәкмен, — тине Бортэ.

Сыңғыҙ хан, еңелсә тулҡынланып, иң яҡын серҙәшенә, көҙгөсенә күҙҙәрен мөлдөрәтеп, ҡабаттан ҡараны.

— Рәхмәт. Теге донъяла ла бер-беребеҙҙән айырыл-мһаҡ, мин бәхетле!..

— Мин дә, — тине Бортэ-уджин.

— Үҙ урыныма кемде хан итеп ҡалдырырға?,

— Йола буйынса, ин оло улың Джучи хан булырға ТСЙеш ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уны Бөйөк һауа һинеа мспои минән элегерәк алды үҙенә. Хәҙер белмәйем...

— Джучи иҫән булһа ла, хан булырға эшкинмәҫ ине. Цомшаҡ, кешелекле булыуы арҡаһында, үҙенә буйһоноу-гмларҙы ла ауыҙлыҡлап тота алманы. Ҡатын итеп ал-ған апалы-һеңлеле Есуй менән Есүген исемле татар ҡыҙ-ҙары һүҙен тотоп, ул меңәрләгән татарҙарҙы үлем язаһы-нан ҡоткарҙы... Бер мең ике йөҙ дүртенсе йылда миңә буйһонорға теләмәүсе ун мең самаһы татарҙар, уның йом-Шпклығы сәбәпле, иҫән ҡалды [1].

— Ул татарҙарҙы барыбер буйһондорҙоң бит. Шулай булғас, ниңә үкенергә?

— Фәһем өсөн әйтәм... Шул саҡта ҡаты яза менән иурҡытмаһам, татарҙар миңә тырыш хеҙмәт итер инеме?

Джучи уларҙы иркәләтте, бисәләренә ярамһаҡланып, уларҙың туған-тыумасаһын үҙенә яҡынайтты...

- Исмаһам, хәҙер, үлгәс, яманлама Джучиҙы. — Бор-т уджиндың иренә хәтере ҡалды. — Уға ҡарата һин һәр саҡ гәҙелһеҙлек күрһәттең!

---

[1] Ш. Сандаг. Образование единого монгольского государства к Чингисхан. Москва. Наука, 1977 йыл.

— Ошондай вакытта, зинһар, асыуланма, — тине Сынғыҙ хан, ғәфу үтенеп. — Толуй улымды хан итеп ҡалдырғанда нисек булыр?

— Кемде хан итеп ҡалдырыу үҙ ихтыярында.

Сыңғыҙ хан, әйтә башлаған һүҙенән ҡапыл бүленеп, быуылып-быуылып сәсәргә тотондо. Тын алышы тигеҙләнгәс, шымыбыраҡ ятты.

— Әләйһә, Толуйҙы саҡыр... Васыятымды уға әйтеп ҡалдырам...

Ишектән атылып ингән Толуй, салҡан ятҡан атаһының ауыр хәлдә икәнлеген аңлап, ҡото алынды.

— Атай, һине тыңлайым, — тине ул, тауышын ҡалтырандырып.

Сыңғыҙ хан уға иғтибар итмәне.

— Атай, мин килдем, — Толуй икенсе тапҡыр әйткәс кенә, хан тоноҡланған күҙҙәрен асты.

— Мин әйткәндәрҙе ҡағыҙға теркәр өсен уйғырҙы саҡырт!

Уйғыр егете ингәс, Сыңғыҙ хандың күҙ ҡарашы Толуйға йүнәлде.

— һиңә бер һорауым бар, улым. Ир-уҙаман өсөн яҡты донъяла йәшәүҙең ҡәҙере нимәлә?

— Ғаилә татыулығындалыр, — тине Толуй.

— Донъяла йәшәүҙең мәғәнәһен аңламағанһың, улым. — Бер нөктәгә төбәлгән Сыңғыҙ хандың йөҙө бер аҙ алсаҡланғандай күренде Толуйға. — Ир-уҙамандың бәхете шунда, улым: дошманды аяуһыҙ ҡырыу, уларҙың бисәләре менән түшәктә ләззәтләнеүҙән һәм имсәктәрен имеүҙән дә ҡәҙерле кинәнес юҡ донъяла!..

Толуй, ни әйтергә лә белмәй, аптырап, шаҡ ҡатты.

— һине үҙ урыныма хан итеп тәғәйенләйем. Шуға күрә был хәкикәтте бер ҡасан да иҫеңдән сығарма, — тип өҫтәне Сыңғыҙ хан.

— Минә ниндәй васыятың бар, атай?

— Иң әүәл ҡанғуттарҙың баш ҡалаһын ҡыйратырға һәм ундағы кешеләрҙең береһен дә ҡалдырмай үлтертергә бурыслыһың! Танғут исемле бер генә кешенең дә яҡты донъяла йәшәргә хаҡың юҡ. Әгәр ҙә мәгәр мин иҫән саҡта дошмандарҙы ҡырыу маҡсатына өлгәшә алмаһаң, үлемемде белгертмәй, мәйетемде ерләүҙе бүтән ваҡытҡаса һаҡлама. Танғуттарҙың береһен дә ҡалдырмай тотошлай ҡырғас ҡына, мәйетемде кешеләр аяҡ баҫмаҫтай ерҙә ерләт һәм минең өсөн берәү ҙә иламаһын, ҡайғырмаһын! — Сыңғыҙ хан фекер туплап, шымыбыраҡ ятты. — Мин һуғышып алырға өлгөрмәгән барлыҡ илдәрҙе буйһондороуҙы дауам итергә...

— Васыятыңды намыҫ менән үтәргә Бөйөк һауа алдында амт итәм, — тип теҙләнгән Толуй баш эйгәс, Сыңғыҙ хан тынысланды. Әммә уға танғуттар тотошлай ҡыйратылған, ҡырылған көнгә саҡлы яҡты донъяла йәшәргә нпсии булманы.

Сыңғыҙ хандың хәле ҡапыл хөртәйҙе, тәне өтөлөп ипды.

Ул нке көн буйы, аңына килә алмайынса, түшәгендә ҙәүләнеп-сәбәләнеп ята торғас, аяҡ-ҡулын тартҡылаштыра-тартҡылаштыра 1227 йылдың ун бишенсе августында яҡты доиъяны ташлап китте.

Сыңғыҙ хан үлгәндең аҙна аҙағында, атаһы урынына хлп булып ҡалған Толуйҙың ҡушыуы буйынса, татар-монголдар танғуттарҙың баш ҡалаһыиа ябырылдылар. Уны пр мспән тигеҙләп, кешеләрҙең береһен дә ҡалдырмай ҡырғас ҡына, оҙаҡ ятыуҙан серей башлаған Сыңғыҙ хандан ҡалған мәйетте тейәп алып киттеләр. Юл ыңғайында исроран йән эйәһе, уның кем булыуына ҡарамаҫтан, нимә күргәнен аҙактан һөйләп йөрөмәһен өсөн, бер-бер артлы үлтерелә барҙы [1].

Борхан-халтун тауына яҡынлаштылар. Уның итәгендә ҡарылған киң, тәрән ҡәбергә үҙен-үҙе ҡорбан иткән Бортә Мпнои Сыңғыҙ хандың мәйетен, уларҙың кейемдәрен, һуғышҡоралдарын, алтын-көмөштө, һауыт-һабаларҙы һәм нң яҡшы менге атты бергә һалып күмделәр.

Лҙәктан, ҡәбер өҫтөндәге өйөм тигеҙләнһен есөн, йылҺЫ көтөүенән ҡат-ҡат тапаттылар һәм ул ерҙе көнөн-төнөн һаҡсылар һаҡланы.

Ҡобер өҫтөнә үлән үҫеп, тирә-яҡтағы тәбиғәт күренешө менән бер төҫкә ингәс кенә Толуй хан тынысланды һәм ундағы һаҡсыларҙың һәммәһен үлтерергә бойорҙо.

XVI

Атаһының васыятын тормошҡа ашырырға тырышып, Голуй татар-монгол сиреүе менән Башҡортостанға өс тапҡыр һөжүм башланы. Әммә, Даях [2] йылғаһы буйында тупланған башҡорттарҙың ҡаршылығына осрап, улар һәр ҡаҡ кирегә боролорға мәжбүр булдылар.

Татар-монгол яуынан һуң биш йыл самаһы ваҡыт уҙҙпс, тыныслыҡ урынлашты. Башҡорт иленә. аяҡ баҫырға бүтән бер кемдең дә баҙнатсылығы етмәҫ һымаҡ тойолдо.

---

[1] Рашид ад-дин. Иылъяҙма йыйынтығы. Беренсе том, икенсе кисә, 233-сө бит.

[2] *Даях* — Яйыҡ-Урал йылғаһының боронғо исеме.

Үҙ төйәктәренә таралышҡан яугирҙар бала-сағалары һәм мал-тыуарҙары менән йәйләүҙән-йәйләүгә күсеп йөрөнө һәм һоҡландырғыс тәбиғәт күренеше менән ләззәтләнделәр.

Әрәмәлектәге һандуғастың һайрауы, тартайҙың тартылдауы, кәкүктең кемдәрҙендер ғүмерен һанап зарығыуы, күҙ күреме етмәҫлек бейеклектә осҡан һабан турғайынын яңғырауыҡлы моңо, зәңгәр күк йөҙөндә йөҙгән төйәлгәндәр менән ҡарсығаларҙың һирәк-мирәк ҡысҡырышыуы йәйләүҙә ял итеүсе Сурман ханды ғына ҡыуандырманы, киреһенсә, ниңәлер борсолдорҙо.

Бындай тынлыҡ оҙаҡҡа микән? Бөтөн донъяны ҡанға батырған Сыңғыҙ хандың вариҫтары. ҡотороноуына сик ҡуйылырмы бер заман? Башҡорт илен дошман яуынаи ҡотолдороу өсөн ниндәй әмәлен табырға? Анғармаҫтан дошман яуы ҡабатланһа, үҙ ырыу-ҡәбиләләреңә һәм ҡалаларына таралышҡан ир-егеттәрҙе тиҙ арала йыйырға мөмкин булырмы? Башҡортостанға сит илдән яу килере һиҙелмәй, тыныслыҡ мәңгегә урынлашты, Ҡараҡыя ҡалаһындағы хан дәүләтенә буйһонру — азатлыҡты сикләүгә тиң тип һанаған бейҙәр менән ырыу-ҡәбилә башлыҡтарының һәр ҡайһыһы үҙ яйына йәшәргә матацыуы аҡылһыҙлыҡ түгелме ни? Уларҙың ғәмһеҙлеге арҡаһында, ағас ҡоймалар урынына таш ҡәлғәләр төҙөү, өр-яңы һуғыш ҡоралдары эшләү, кешеләрҙе һуғышҡа өйрәтеүҙең тоткарланыуы, ауылдарҙа мәҙрәсә-мәктәп-мәсеттәр һалдырылыуының туҡталыуы киләсәк быуын башҡорттары өсөн хәстәрлек күрмәү бәләһе икәнлеген нисек аңларға теләмәйҙәр икән?..

Яҡын тирәләге ырыу башлыҡтары менән осрашып, Сурман хандың үҙ фекере менән уртаҡлашыуҙан да файҙа теймәне.

«Иртәгәһен ишәк уйлаған, бөгөнгө көн менән йәшәп киңәнергә кәрәк», — тип, улар ғәмһеҙлек күрһәтте.

Изге маҡсатына ирешә алмаған Сурман хан, башҡорттарҙың көсөн берләштерергә маташыуынан бер ни ҙә ырып сыҡмаясағын аңлап, үҙ вазифаһынан баш тартырға һәм Башҡорт дәүләтен бөтөрөргә ниәтләнде. Әммә Дәржимән улы менән чжурчжэн ғалимы Удбар ундай хәлдә «беткә үсеген, тунды утҡа яғыу»ға тиңләнеләр.

— Барлыҡ көстө берләштерерҙәй Башҡорт ханы һәм унын дәүләте булмаһа, һәммәһе тарҡаласаҡ, юҡҡа сығасаҡ. Киләсәк быуын хаҡына һин ҡыйынлыҡтарға сыҙарға, ырыу-ҡәбилә башлыҡтарының ҡаршылашыуына ҡаршы көрәшергә тейешһен, — тине Удбар.

Дәржимән дә шул уҡ фекерҙә булыуын белгәс, Сур

ман хандың күңеле күтәрелде һәм ул ең һыҙғанып эшкә тотоидо.

ЙоЛгслеген йәйәләүҙә лә томра, эҫе.

'Кала йомошо менән килгән кенәз-бейҙәрҙе оҙатты ла Сурман хан бүрәнәнән буралған йәйге йорттан сыҡты.

Ишск алдындағы күләгәлә ултырып, ҡатыны менән килене Аҡсабикә йөн иләй, аш бешереүсе ҡаҙан тирәһендә урплл, о Акман менән Токман ҡайын төбөндәге сиҙәмдә

Йөндәре, Сурман ханды күргәс, уйындарынан бүлеПСП:

Олатай!

Олатай эшенән бушаны, — тип ҡысҡыряша-ҡысҡырыша, Сурман хандың эргәһенә йүгереп килделәр.

Йә, йәйләүҙә ял итеү ялҡытманымы?

Йөндәре кем уҙарҙан яуап ҡайтарҙылар:

Ю-уҡ!

Пойләүҙә күңелле!

Всҙ һыу индек, балыҡ тоттоҡ!

Ҡыҙыл яр буйында малайҙар менән уйнаныҡ!..

Акман менән Токман олаталарына һыйынып иркәләнә '|0|) ҙо Ҡара йылға ярына күтәрелгән Дәржимәнгә табан күтәрҙеләр һәм атаһы менән бергә күҙҙән юғалдылар.

Сурман хан тирә-яҡты айҡап сыҡты. Бөтә ерҙә ҡолаҡ ишетерҙәй тынлыҡ хөкөм һөрә.

)ҪСРО әлһерәгән донъялағы барлыҡ йән эйәһе халҡынә күлоголәргә йәшеренеп бөткән. Иртәнсәк сыр-сыу киII гаугалашҡан ҡош-ҡорт тауышы бөтөнләй ишетелмәй. Һуш нөбө эсенә ингән йөнтәҫ иңкеш кенә, иреккә сығырға мһышып, иҙрәткес тауыш менән еҙләкһеҙ гөүләй, көбөнең бер бср, әле икенсе стенаһына барып һуғылды ла юғарыға

Пцкеш гөүләүе баҫылғас, нескә тауышлы ҡыҙ йырлаПшетелде.

Әсәкәйем минең, әсәкәйем...

ЯЛ ғына ағылған йырҙың һүҙҙәре асыҡ ишетелмәне. , эҫегә әлһерәгән һымаҡ, тоноҡланыбыраҡ торҙо ла н косойҙе. Ҡыҙ бер урындан икенсе урынға йөрөп, нинйүер ой эше башҡарғанда йырлайҙыр, ахырыһы.

Әсәкәйем минең, әсәкәйем,
Үтә бит йәш ғүмерем.
Табылырмы миңә үҙ тиңдәшем,
Өҙөлөп тә һөйөр бәғерем?..

«Һәр нәмә, мәле еткәс, үҙ ишенә тартыла»... Сурман

хан, офоҡ ситендә күренгән аҡһыл болот өйөмөнән күҙҙәрен алмайынса, ҡыҙ йырлағанды тыңланы.

Ләйсәлкәйҙәрҙең ай ҡамышы
Шаулашалыр, ғүмер үтә, тип,
Иәш йөрәгем йәшәй өмөт менән,
Алда һөйөр йәрем көтә, тип...

Иыр нисек башланған булһа, шулай ҡапыл еҙелдө һәм йәнә тынлыҡ урынлашты. Әммә моңло тауыш менән башҡарылған моң хан ҡолағы төбөндә һаман сыңлағандай тойолдо. Ул, йәш сағындағы шикелле йән тетрәткес һөйөү-һөйөшөү хистәрен уятып, йөрәген елкендерҙе. Күңеле, яҡтыға ынтылған төнгө күбәләктәй, шул ҡыҙға тартылды, уны барып күргеһе, һөйләшкеһе килде. Моңло тауышына, йырҙың һүҙҙәренә ҡарағанда, алыҫтағы мехәббәтен зарығып һағынған ҡыҙ насар булғанға оҡшамаған. Уның саф күңеле дәрт һәм сәм менән донъяға яҡтылыҡ, нур сәскән һымаҡ тойола...

Төштән аҙаҡ Сурман эргәһенә чжурчжэн ғалимы Удбар килде.

— Әссәләмәғәләйкүм!

— Вәғәләйкүм әссәләм, — тип яуапланы ла хан аптыраны. — Төҫөң ҡасҡан. Әллә ауырыуһыңмы?

— Юҡ.

— Нимә булды?

— Мин үҙ илемә ҡайтып китергә теләйем, — тине Удбар төшөнкө тауыш менән.

— Башҡортостанда башлаған эшевде ҡалдырыпмы?

— Башлаған эш — бөткән эш, ти. — Удбар көслөк менән тигәндәй йылмайҙы. — Өйрәнсектәрем уны минһеҙ ҙә эшләп бөтөрәсәктәр.

— Ниңә ҡапыл? Һис юғында, Башҡорт дәүләте ҡоролошо үҙгәртеп ҡоролғандың һөҙөмтәһен күрергә ҡалһаңсы!

— Аҙаҡтан килеп күрермен. Әлегә ашығам. Мине көнсығышта тыуған илем, халҡым көтә!

— Тыуған илендән берәй хәбәр килдеме әллә? — тип һораны Сурман хан.

— Эйе. — Удбарҙың тоноҡ тауышы ҡайғылы ишетелде. — Дүрт миллион кешеһе булған танғуттар иле дәүләте ҡыйралып, кешеләре тотошлай ҡырылған, яҡты донъянан береһе лә ҡалдырылмай, татар-монгол тарафынан юҡ ителгән. Хәҙер минең илемде ҡабаттан ҡыйратырға, ҡалаларыбыҙҙы ер менән тигеҙләргә һәм кешеләрен ҡырырға маташалар икән, ҡәбәхәттәр!

Удбарҙы тыныслandырырға тырышып, Сурман хан әйтте:

— Алты миллион ярым кешеһе булған ҡеүәтле Чжурчжэн дәүләте ҡырағай татар-монголдарға бирешмәйәсәк!

— Донъяла иң алдынғы фән ярҙамында ҡеүәтле ҡорал ишлән, етерлек кес тупларға өлгөргән тыуған илем, әлОнтто, дошман алдында баш һалмаясаҡ, аҡтыҡ кешеһе -нилгінсы көрәшәсәк, — тине чжурчжэн ғалимы, ҡайғылы йөҙөн үҙгәртмәйенсә. — Әммә аҙ һанлы монголдарға оҫта ирпҡлашҡан татарҙарҙың иҫәбе-һаны чжурчжэндәргә ҡарағанда ла күберәк. Улар яуыз, хәйләкәр, туранан-тура мугишта ҡатнашмайынса, бүтән илдәрҙән йыйылған кешеҙәрҙе арттан ҡыуып баралар. Алға барырға теләмәүсеҙәрҙе аямайҙар, шундуҡ атып үлтерәләр!

— Иисәмә тапҡыр килеп Башҡортостан менән Болғар илдәре сиген уҙа алмаған татар-монголдар алты миллион Шәм кешеһе булған Чжурчжэн илен бер нисек тә буйһондора алмаясаҡтар, — тине Сурман хан.

Удбар, ризалашмайынса, баш сайҡаны.

— Башҡортостан менән Болғар илдәре сигенән татар-монголдарҙың эскә уҙа алмауының төп сәбәбе икенселә...

— Уның сәбәбе билдәле инде, — тине Сурман хан, Удбарҙың һүҙен бүлдереп. — Беҙҙең ир-егеттәрҙең батырҙарса Ьуғышыуында сәбәп. Улар ҡыйыулыҡтар күрһәтмәһә, Башҡорт-болғар илдәренә татар-монголдар күптәнән хужа булырҙар ине!

— Уиыһы дөрөҫ, — тип ризалашып, Удбар бүленгән һүҙен дауам итте. — Болғар-башҡорт һуғышсыларының ҡыйыулыҡ күрһәтеүҙәренән тыш, икенсе мәсьәләне лә иҫтән сығарырға ярамай. Татар-монголдарҙың тылындағы танғуттар менән чжурчжэндәрҙең һуғышын Болғар, Башҡорт и мырспдәге ваҡиғаларҙан тыш, тығыҙ бәйләнештә икәнлеген ацларға теләмәү — оло хата! Танғуттар менән чжурчжэн илдәр татар-монгол сиреүенең теп көсөн үҙҙәренә йәлеп итмәһәләр, белмәйем, һеҙгә үҙ илегеҙҙең бойондороҡһоҙлоғон һаҡлап алып ҡалырға мөмкин булыр инеме икән?

Хпк уйға ҡалды.

— Һинеңсә, танғуттар менән чжурчжэндәр беҙҙе, әлбиттәр менән башҡорттар, үҙ сигенән уҙғармайынса, Европа илдәрен татар-монгол яуынан ҡотолдорған булып Иымы?

Олбиттә, — тип дөреҫләне чжурчжэн ғалимы. — Танғуттар донъя йөҙөнән юҡ ителгәс, хәҙер чжурчжэндәргә ҡыйын, бик тә ҡыйынға тура киләсәк. Татар-монголдар беҙҙе ҡыйратһа, болғарҙар менән башҡорттарға ла ҡул яу килеүе ихтимал. Шуға күрә беҙ тығыҙ бәйләнештә торырға тейешбеҙ һәм бер-беребеҙгә ярҙамлашырға буласаҡбыҙ!

— Нисек ярҙамлашырға? — Сурман хан аптыраны.

— Беҙгә ғәскәр менән ярҙамлашығыҙ, — тине Удбар.

— Болғарҙар менән башҡорттарҙың алыҫтағы Чжурчжэн илен[1] һаҡларға барыуын теләйһеңме?

— Теләйем, — тине Удбар.

— А-ай-һай, — Сурман хан баш сайҡаны, — уғата алыҫ ара шул! Бейҙәр менән ырыу-ҡәбилә башлыҡтары алыҫ сит ергә ғәскәр ебәрергә ризалашыр микән?

— Йыйын ҡарары сығарылһа...

— Йыйын йыйыуҙың файҙаһы теймәйәсәк! Башҡорт-останда донъя имен, тыныс ваҡытта хандың хоҡуғы сикле икәнлеге үҙенә мәғлүм бит!

— Беләм, — тине Удбар, теләр-теләмәҫ ризалашып. — Башҡорттар ғәскәр менән беҙгә ярҙам итергә теләмәгәс, ҡалайтырға? Яңғыҙыма ҡайтып китергәме миңә?

— Ҡайтырға ҡабаланма, ҡал. Һинең иленә ярҙамлашырға, бәлки, берәй әмәле табылыр. Болғарҙар менән дә һөйләшеп килешәһе бар...

— Тыуған илем яҙмышы ҡыл осонда саҡта, бында оҙаҡ ҡалырға хаҡым юҡ, — тине Удбар.

— Бәлки, бушҡа борсолаһыңдыр?

— Бушҡа булһа, беҙҙең император Айцун миңә сапҡын ебәрмәҫ ине. Чжурчжэн иленә болғар-башҡорт яугирҙарының ярҙамға килеүен һорап, минең аша һиңә хат тапшырыуымды үтенгән, — тип Удбар ең осона йомарлап тыҡҡан ҡағыҙҙы Сурман ханға бирҙе.

Ҡағыҙға күҙ йүгертеп сыҡҡас, Сурман хан Удбарға текләнде.

— Императорығыҙ исеменән килеүсе кеше ышаныслымы?

— Сапҡын вазифаһын үтәүсе Укаш ышаныслы, бада сағымдан беләм уны. Хәҙер Укаш император һарайы хеҙмәткәре...

— Танышың әле ҡайҙа?

— Кисеү янында ҡалды. Уны бында һинең һаҡсыларың уҙғарманы.

Сурман хан, Чжурчжэн иле илсеһен кисеү аша уҙғарырға ҡушып, һаҡсыларына йомошсо егетте ебәрҙе.

Император Айцун исеменән килгән ҡырҡ биш йәштәр самаһындағы мыҡты көүҙәле кешене күргәс тә, Сурман хандың шиге ҡалманы. Илсе вазифаһын үтәүсе, ысынлап та, әҙәпле һәм ышаныслы һымаҡ тойолдо.

— Татар-монголдарға ҡаршы һуғышырға ныҡлы әҙерлек барыуы Чжурчжэндәргә башҡорттар ғәскәр менән ярҙамлаша алмау сәбәбен белгәс, Укаш күңелһеҙләнде.

Ул, Сурман хан алдында түбәнселек менән баш эйеп, бындерсү яһаны:

• Император Айцун һеҙҙеә ярҙамға бик ныҡ ышанып килде. Әммә уның өмөтө аҡланманы. Шуны белегеҙ: Чжурчжэн дәүләте икенсе тапҡыр ҡыйратылһа, болғарҙар инде башҡорттарға ла ирекле тормош бөтәсәк!

«Беҙҙе юрамал ҡурҡыта», — тип уйланы Сурман хан.

Купактар хөрмәтенә әҙерләнгән һыйҙы ашағас та, Удбар инде император сапҡыны китергә йыйналды.

Чжурчжэн ғалимы менән айырылышыуы ҙтә аянысло ИМ кыйыл булды. Сөнки уға барыһы ла ныҡлы эҫеңергә ине.

Башҡорттарҙы күп һөнәргә өйрәтеүе өсөн рәхмәт әйтеп, Удбарҙың ҡулын ҡыҫты ла:

• Ошо аҙнала йыйын йыйып, беҙгә ярҙамға ғәскәр ебәреү мәсьәләһен тикшертәм. Чжурчжэндәр ҡыйратылһа, беҙгә лә насар буласағын аңлатһам, моғайын, һәммәһе лә ошо хал ҡылыныр. Императорыңа минең исемдән әйт: башҡорттар беҙҙе бәлә-ҡазанан ҡоткарырға барлыҡ мөмкинлеккә файҙаланасаҡ, — тип Сурман хан чжурчжэн ғалимына алтын бөртөктәре тултырылған күн тоҡсай бүләк итте. — Был һинең хеҙмәтең өсөн! Әлегә хуш! Иҫән-һау инеп осрашырға яҙһын!

Хапдың һүҙен ҡеүәтләп, башҡалар ҙа шаулашты:

Беҙҙе онотма!

• һиңә Хызыр-Ильяс юлдаш булһын!..

Урата бер ҡатлы, хәйләһеҙ, ихлас күңелле башҡорттарҙан айырылып китеүе Удбарға ла еңел түгел ине.

Ул, йәшләнгән күҙҙәрен ҡулъяулығы менән һыпырғылап, ҡул болғаны.

• Осрашҡанға саҡлы һау булығыҙ, дуҫтарым!..

Чжурчжэн ғалимын оҙатҡас, Сурман хан юкһыныу шикәһен кисерҙе. Удбар етәкселегендә башҡарылған бөйөк помәгә етемһёрәгән теҫ ингәндәй тойолдо.

Удбар ҡайтып ҡиткәндән бирле, ағас ҡалаларҙы яңыса нығытландереү, ағас ҡоймалар урынына таш ҡәлғәләр төҙөү, стена тышында ҡазылған тәрән соҡорҙар менән сағыштырғанда һыу тултырыу, ҡораллы ғәскәр торасаҡ урынларҙы пығытыу, ҡеүәтле һуғыш ҡоралдары етештереү эше бүтәнәйҙе һәм ауылдарҙағы күсмә халыҡты һуғыш уйынына еЛрәтеүгә лә иғтибар кәмене.

Чжурчжэн ғалимының һөйләгәндәре ысын булһа, ғәмһеҙ ырыу башлыҡтары арҡаһында, Баигкорт иле лә бәләкә-ҫәгә тарығыуы ихтимал. һуғышҡа әҙерлекһеҙ-ниһеҙ та-

[1] *Чжурчжэн иле* — хәҙерге Приморье ерендә булған.

тар-монгол яуына ҡаршы торорға мөмкин түгел икәнен аңламайҙар микән? Сурман хан, бәлки, бушҡа борсола торғандыр?

Нисек кенә баш ватмаһын, борсоулы уйҙарынан ҡотолорҙай әмәлен тапманы Сурман хан. Чжурчжэн иленең императоры сапҡыны килеүе, Удбарҙың ҡабаланып ҡайтып китеүе бер ҙә бушҡа түгелдер бит?

Башҡортостандағы тыныслыҡ ваҡытлыса, көслө ел-дауыл башланырҙан алдағы күренеш булып тойолдо Сурман ханға.

«Мәлһеҙ ниңә еҙгөләнәм әле. Чжурчжэн ғалимын оҙатып китеүсе егеттәр әйләнеп ҡайтҡас, моғайын, һәммәһе асыҡланыр һәм шунда берәй әмәле табылыр», тип ул үҙен тыныслandырырға тырышты.

XVII

Чжурчжэн иле вәкиле Укаш менән Удбарҙы Тубыл йылғаһыньщ аръяғына саҡлы һыбайлы башҡорт егеттәре оҙатып барҙы.

Юлда барышлай, улар Укаштың һаҡсылары менән дуҫлашты.

Сыңғыҙ хандын кесе улы Толуй урынына монгол феодалдары тарафынан Бөйөк ҡаан(хан) итеп Үгәҙәй ҡуйылыуын белгәс, Удбар аптыраны.

— Толуй хан нимәһе менән оҡшаманы икән монголдарға?

— Толуй йомшаҡ, монголдарға Сыңғыҙ хандың васыятын бойомға ашырырҙай ҡаты ҡуллы хан кәрәк ине, — тине Укаш.

— Үгәҙәй көслө, ҡаты ҡуллы ханмы?

— Бөйөк хан итеп һайланғас, билдәле инде... — Укаш башлаған һүҙен әйтеп еткермәне.

«Тел тебөнә ҡарағанда, Укаш минән нимәлер йәшерә, ышанмай. Белгән-күргәндәрен сер итеп һаҡларға тырыша, ахырыһы», тип уйлап, Удбар монголдарҙың Ҡараҡором дәүләте менән ҡыҙыҡһынды.

— Бөйөк хан булып Үгәҙәй һайланғас, һәммәһе ьщғайланды. Кореяны буйһондорҙолар. Ҡытайҙың ярты ерен баҫып алғас, Чжурчжэнгә һөжүм башланылар...

Удбар Укашты асыу менән бүлдерҙе:

— Татар-монголдарҙың Корея менән Ҡытайҙы ҡыйратыуына ҡыуанаһыңмы әллә?

— Ниңә улай тиһең?

— Тын алышыңа ҡарағанда, Чжурчжэн иленән ситләшкән һымаҡ күренәһең!

Әллә ниндәй бәлә таҡма миңә, — тине лә, һүҙ йүнәлешен үҙгәртеп, Укаш тыныс ҡына һораны: — Чэнхошанды яҡшы беләһеңме?

Чжурчжэн иленең данлыҡлы, ҡыйыу полководецы Чжошанды белмәгән кеше бармы ни?

Снреуе ҡыйратылғандан һуң әсиргә алынған Чэнхошан, Толуй хан алдында теҙләнергә, уға хеҙмәт итергә баш тартҡан өсөн, язалап үлтерелгән!

Ҡобәхәттәр, — тине Удбар. — Минең күҙ алдымда Мырҙым бей исемле башҡорт бейе лә үлтерелде!..

• Һип Джэбэ баһатур сиреүендә хеҙмәт иткәндәме?

Эйе. Уның сиреүендә хеҙмәт иткән өсөн әле булһа ғаыллапам.

Улай ҡырка әйтмә. — Укаш, мәғәнәле итеп, эйәк ҡаҡты. — Тормош үтә ҡатмарлы. Үгәҙәй хан ҡулына эләкһә ни, монголдарға ҡабаттан хеҙмәт итеүең ихтимал...

Ниңә эләгергә тейешмен әле мин Үгәҙәй ҡулына?— Удбар күҙҙәрен аҡайтып ҡараны.

• Үҙ иленә хыянат итеп, чжурчжэн ғалимдарының байтағы Үгәҙәй ханға хеҙмәт итергә ризалашҡанға әйләнгән.

Оллә һатлыҡ йәндәргә тиңләйһең инде мине?, Укаш яуап ҡайтарманы.

Г)пшкортостан сигенә яҡыная башлағас, Укаштың аҡыл Нолан ҡараныуы Удбарҙы аптыратты.

Пиңә сәбәләнәһең?

Ил сигенә етәбеҙ бит, — тине Укаш. — Беҙҙе артабан оҙатып барасаҡ һаҡсыларыбыҙҙың күбеһе Тубыл ШШпһы аръяғында көтөргә тейеш ине. Күренмәйҙәрсе...

Ул тиклем күп һаҡсы ниңә кәрәк булды?

Император ҡушҡас, киреләнергә баҙнатсылығым юмаһа.

Ил сигендәге болғар-башҡорт бағауылдары йылға аръяғында һирәк-мирәк ниндәйҙер кешеләрҙең күренгеләүе и оПткәс, Укаш тынысланды.

Сит ил вәкилдәрен оҙатып килеүсе һыбайлы башҡорттар йылғаның бирге яғында тороп ҡалырға булғайны, бағауылдар башлығы ризаһыҙлыҡ белдерҙе:

Улай килешмәй. Йола ҡушҡанса, ҡәҙерле ҡунаҡтарҙы йылғаның икенсе ярына саҡлы оҙатырға тейешбеҙ!

Пишкорт егеттәре ҡаршылашманы. Мәгәр йылға аръяғына сиҡҡас, уларҙы ниндәйҙер һыбайлылар ҡамай башланы.

Татар-монголдар, — тип ҡысҡырҙы Удбар һәм ҡорайынан йәбеште.

Күмәк уҡтар тейеүҙән ҡырыла башлағас ҡына аңдарына килгән башҡорт егеттәре татар-монголдарға ҡаршы ташландылар. Әммә уларҙың ҡамауын йырып сығырҙай хәлдәре ҡалмағайны инде...

Алыш барышынан файҙаланып, Укаш Удбарҙы инрәтә һукты ла, уның ҡулындағы бер тоҡсай алтынды үҙ сәрмәһенә һалған ынғайы, ярыла яҙып аҡырҙы:

— Хыянатсы ғалимды ла дөмбәйтегеҙ! Ул — яман, Үгәҙәй ханға хеҙмәт итергә теләмәй!

Бер теркөм татарҙар Удбарға ташланды. Мәгәр:

— Теймәгеҙ ғалимға! Ул Үгәҙәй ханға тере көйө кәрәк, — тип башлыҡтары сабып сыҡты...

Һыбайлы башҡорт егеттәре тулыһынса тураҡланғас, нукерҙар башлығы атын Укашҡа табан ыңғайлатты.

— Чжурчжәндәргә ярҙамға барасаҡ болғар-башҡорт сиреүе ҡайҙа?

— Ю-уҡ! — Үҙен император Айцун илсеһе тип таныткан Укаш, чжурчжәндәргә ярҙамға аҙып барыу һылтауы менән татар-монголдар ҙасадаһына башҡорт сиреүен эләктерә алмауы ҡурҡышынан дер ҡалтыранып, тотлоға-тотлоға яуапланы:

— Су-Сур-ман хан те-теләмәне...

— Беҙҙең хәйләне һиҙҙертмәнем, — Укаш һәммәһен түкмәй-сәсмәй һөйләргә тотондо.

Шунда ғына Укаштың һатлыҡ йән икәнен аңлап, Удбар ни эшләргә белмәй өҙгөләнде: «Үгәҙәй ҡаанға хеҙмәт итергә тейешлегем хаҡында юҡҡа ғына әйтмәгән икән, ҡәбәхәт! Э-х, уның һатлыҡ йән икәнлеген алдан белгән булһамсы!..»

Төмән башлығы һаман төбәште:

— Ил сиге буйында болғар-башҡорт һағауылдары күпме?

— К-ү-үп, бик күп, — тип яуапланы Укаш.

— Башҡорт ханлығындағы сиреү ҙурмы?

Ни әйтергә белмәй ык-мык килгән Укаш урынына Удбар яуап ҡайтарҙы:

— Болғар-башҡорт сиреүе йөҙ мең самаһы кешене берләштерә!

Башҡортостандың эске өлөшендә бер ниндәй ҙә сиреү барлығын һиҙмәүе хаҡында әйтергә ауыҙын ғына аскайны Укаш, Удбар уны бүлдерҙе:

— Үгәҙәй ҡаанға тапшырылырға тәғәйен алтынды миңә бир!

— Ниндәй алтын?

• Бер тоҡсай алтынды Укаш минән тартып алды! Ормоһсндә булырға тейеш!

Укаш, күҙҙәрен аҡайтып, ҡалтырана-ҡалтырана, артҡа сигеиде.

-- Мнн... Мин...

Укаш сәрмәһенән алтынды сығарғас та, төмән башшгы иукерҙарына эйәк ҡақты:

- Ҡулға алырға!

- Мине ҡулға алырға хаҡығыҙ юҡ, — тип ҡысҡырҙы Укаш.

- Үгәҙәй ҡаан ышанысын аҡламаған өсөн, һине яза көтә, — Төмән башлығы шулай тине лә, Тубыл йылғаһын сығырға баҙнат итмәйсә, киргә юлланды.

Сығыҙ хандың васыяты буйынса, монголдарға файҙалы тсйерҙәй һөнәрмәндәр менән ғалимдар үлтерелмәне. Егерҙе ҡалыуынан файҙаланып, Удбар ғүмерен туған халҡы иатлығы есен бағышларға йөрәкһенде.

иДпплыклы сәрдар Чэнхошан, ҡанға мансылып ятҡанда ла Толуй хан алдында баш эймәгән, аҡтыҡ һулышында тиклем туған халҡына тоғро ҡалған. Был шәхес — ... пнсәмә быуыш кешеләрен хайран ҡалдырырҙай батырлыҡтың бер өлгөһө. Әммә мин, ғалим булараҡ, яҡ... допъяла йәшәргә һәм бөтөн белемемде милләтем мәнфәғәте өсөн сарыфларға бурыслымын», — наҡсылар ҡамауында һыбай барышлай, Удбар ана шулай елкенде.

Титпрстан иленең нәҡ урта өлөшөндәге яңы ҡалаға ... ашлаштылар.

Кытай рәссамдары тарафынан оста биҙәлгән, зауыҡлы иихщлпппдырылған ике ҡатлы хан һарайы күренде. Үҙен ... ханға алып барыуҙарын һиҙеп, Удбар тулҡынланып: Татар-монгол ханына ул ниңә кәрәк булды икән? Башҡа чртюрга әсир тешөүем өсөн һорауҙы үҙе алырға һәм ... м яһаһына тартырға теләй микән?

Әсир төшөүемде, башҡорттарға ҡалаларын яңыртырға тпш ҡәлғәләр төҙөшергә ярҙамлашыуымды мин һөйләрһәм дә, шымсыларынан күптән белгәндер инде», — ... уЦлап, Удбар Үгәҙәйгә мәғлүм ваҡиғаларҙы ғына һөйләргә шютләнде.

Әммә Удбарға Бөйөк хан алдында аҡланырға һәм белдш нүргопдәрен һөйләргә лә тура килмәне. Башҡортостанда ... ҡурт йөҙ мең кешене берләштергән сиреү ойошторорға ... мкиилск барлығын Үгәҙәй шымсылары ярҙамында яҡшы Оело ине. Башҡорттарға яңы ҡорал етештереүгә һәм ... ытмалар төҙөргә ярҙамлашыуы өсөн дә хан уны язаға ... ртпдырырға йыйынманы.

Чжурчжэн иле императоры Айцун ике аталаш аға-

йьщмы? — тип бетонлəй кетолмəгəн hорауҙан башланы ул əнгəмəне.

— Император' Айцундың мидə бер ниндəй ҙə туғанлығы юк.

— Туғанмы, түгелме, hин уның менəн заманында яҡшы мəнəсəбəттə булғанһың, тиҙəр.

— Уның менəн генə түгел, мин həммəhе менəн яҡшы мəнəсəбəттə.

— Император Айцун hинең фекерең менəн иҫəпləшə инеме?

— Əлбиттə.

.— Ə хəҙер?

— Əле, уның менəн бəйлəнеш өҙөлгəс, əйтə алмайым. Үгəҙəй хан, Удбарҙың нимəгə həлəтле икəнлеген асыкларға теляғəндəй, hыңаулы ҡараш ташланы.

•— Ирек бирhəм, император Айцун менəн осрашырға həм минең сиреү менəн бергə чжурчжэндəрҙең сиреүен Башҡортостанға ҡаршы hуғышырға күндерə алырһыңмы?

— Айцун мине тыңламаясаҡ, — тине Удбар, тештəрен ҡыҫып.

— Ныҡлап өгөтлəhəң, тыңлаясаҡ! — Үгəҙəй хандың ҡыҫык күҙəре бəзерəйҙе. — Айцунды беҙҙең менəн килешеү төҙөргə пəм Башҡортостанға яу менəн барырға күндерергə тейешһең!.. Шуның өсөн саҡыртып алдырҙым мин hине Башҡорт иленəн...

Үгəҙəй хан тəҡдиме менəн иҫəпləшмəhə, əнгəмə аҙағы нисек бөтəсəген аңлаған Удбар:

— Минə ышаныс белдереүегеҙ өсөн рəхмəт, император Айцунды hеҙҙең менəн килешеү төҙөргə күндерергə тырышырмын, — тине.

Үгəҙəй хандьщ йөҙе бер аҙ алсаҡланды.

— Император минең тəҡдимемде кире ҡаҡһа, əлегесə тиҫкəреләнеүенəн баш тартмаһа, үҙенə ҡаршы барамын həм бер генə чжурчжэнде лə ҡалдырмай ҡырамын!

Үгəҙəй хандың иҫкəртеүе бушка түгел икəнлеген аңлап, Удбарҙың ҡото алынды. Ниндəй яҙмыш көтə чжурчжэндəрҙе! Татар-монголдар менəн килешеү төҙөүҙең дə файҙаһы тейер микəн? Улар менəн килешеү төҙөлһə, чжурчжэн иленең бойондороҡhоҙлоғо бөтəсəк, үҙ дəүлəте юкка сығасаҡ. Чжурчжэндəрҙең фəн елкəһендəге ҡаҙаныштарын дошман файҙаланасаҡ. Туған халҡының боронғо мəҙəниəте, сəнрəте, əҙəбиəте, ғөрөф-ғəҙəте həм теле лə эҙhеҙ юғаласаҡ. Ошондай яҙмыш ҡотолғоhоҙ икəнлеген белə тороп, Үгəҙəй хан тəҡдименə ризалашыу чжурчжэндəргə ҡарата хыянатсылыҡ ҡылыу түгелме ни?..

— Император Айцундьі килешеү төҙөшөргə күндерə

илһаң, Башҡортостандан алып ҡайтҡан алтынынды үҙенə пнро бирəм, — тине Үгəҙəй хан, Удбарҙы үҙ яғына ылыҡшрыу маҡсатынан. — Алтынға еҫтəп, «нойон» исеме бирһəм hом йəш бисə бүлəк итəсəкмен.

Үгəҙəй хандың ышанысын Удбар аҡламаны: Чжурчжэн >n плс императоры Айцун менəн осрашҡас та, Үгəҙəй хандың тоҡдимен кире ҡағырға кəнəш итте.

Чжурчжэн дəүлəтендəге шымсылары ярҙамында Удбардың ҡыланышы хаҡында белгəс, Үгəҙəй хан ярһыны.

• Мнп ул ғалимды үҙем язалаясаҡмын!.. Чжурчжэн пмсн саҡта — беҙҙең ҡул бəйле!..

Шул уҡ аҙнала, Үгəҙəй хандың бойороғо буйынса, Субодой баһатур, уның ейрəнсеге Толуй хан, нойон Монке, Цзебэ командалығындағы темəндəр Чжурчжэн иленə hеҙүм башланы.

У-р-ра-а-гх!

У-р-ра-а-гх! — бер-береһен сəмləндереп, татар-монюллпр йон-фарман алға табан сабышты.

Сабышып барған ыңғайы, иҫəпhеҙ-hанһыҙ уҡтар ярҙамында чжурчжэндəрҙе ҡырҙылар ҙа, тукталып тормайынса, дплаға кире боролдолар.

Готар-монголдар, ғəҙəттəге' уратып алыу тактикаһын ҡулланмайынса, чжурчжэндəрҙең баш ҡалаһын ҡаршы •ипп атакаланылар.

Уларҙың атакалары бер-бер артлы кире ҡағылды.

Каланы һаҡлаусы чжурчжэндəр батырҙарса алышты. Улар, галимдары уйлап сығарған сөгөн көршəктəргə тулғырылы дарыны яндырып, махсус машиналары ярҙамында татар-монголдар еҫтенə бырғыттылар, ə ҡəлғə стеналы буйындағы наҡсылар тиҙ токаныусы утлы уктарҙан аттылар.

Ялкынлы ут ҡатыш сөгөн ярсыктарын урғылткан көрЦ||||пор менəн тиҙ токаныусан патрондар гөрһөлдəп ярылып, ялкынлы уктар осондағы бəлəкəй көршəктəрҙең үлем усиои ҡоттары алынған татар-монголдар араһындапаннип ҡупты. Улар, ҡайҙа ҡасып ҡотолор урын таба алм |Пыпса, аҡырышып ҡырылдылар...

Юғалтыуҙар менəн Үгəҙəй хан иҫəпləшмəне.

Упыц ҡушыуы буйынса, үлеләр урынына яңынан-яңы монголдар һуғышҡа индерелде.

Ллыш киҫкенləшə барҙы, ҡараңғы төшкəс тə дауам ||Ге

Колғəнең тыш яғындағы тəрəн соҡорҙар -менəн канау• ||1 тулган үле аттар һəм мəйеттəр өҫтөнəн тоткарлыҡһыҙ үткон татар-монголдар таш стеналарҙың аҫкы өлеһенə торлө яктан соҡой башланылар.

Удбарҙың тәкдиме буйынса, кешеләрҙән ашығыс рәүештә керамик көршәктәр йыйҙыртылды. Көршәктәргә тиҙ ялҡынланыусан шыйыҡсалар тултырҙылар ҙа, утлы филтә ярҙамында, уларҙы аҫҡа төшөрҙөләр. Таш стеналарҙы аҫтан өңөүселәргә ут ҡабынды һәм улар, аҡылдан шашьфҙай хәлгә етеп ҡысҡырыша-аҡырыша, янып үлделәр...

Бөйөк Чжурчжэн дәүләтенең баш ҡалаһы өсөн көслө алыш ун алты төн һәм ун алты көн буйы барҙы.

Баш ҡаланы һаҡлаусылар ҙа, һөжүм итеүсе татар-монголдар ҙа хәлдән тайырҙай хәлгә етеп арынылар. Чжурчжэндәрҙең «утлы көршәктәре» менән тиҙ ялҡынланыусан патрондарынан ҡотолоу мөмкин түгел икәнлеген аңлап, нукерҙар күңел төшөнкөлөгөнә бирелде.

Алыш ваҡытында күпләп ҡыфылған чжурчжэндәргә лә баш ҡаланы һаҡлау еңел түгел ине.

Уларҙың рухын күтәрергә тарышҡан император Айцун да ял итмәне.

Ул, көслө алыш барған ерҙән аулағыраҡ урынға сыҡҡас, Удбарҙан кәңәш һораны:

— Беҙҙең ҡүәтле ҡоралдарыбыҙ бөттө. Хатта яҙбай уҡтар осона ҡуйырҙай тимер-томоробоҙ ҙа ҡалманы. Хәҙер ни эшләргә?

— Баҡыр аҡсаларҙы кешеләрҙән йыйҙыртырға! Уларҙы ваҡ-ваҡ киҫәктәргә • бүлгеләтергә лә, уҡ башаҡтарын эшләтергә кәрәк, — тине Удбар.

Әммә императорҙың иң яҡын кәвдшсеһенә әүрелгән Удбарҙың үҙенә оҙаҡ йәшәргә ҡалмағайны. Ул, көслө алыш барған ваҡытта яуҙаштарын өр-яңы һуғыш ҡоралын файҙаланьфға өйрәткән саҡта, Үгәҙәй хан шымсылары тарафынан үлтерелде.

Ғалимдың мәйете менән аҙапланырға мөмкинлек булманы.

— Уны аҙаҡтан ҡәҙерләп ерләрбеҙ, — тине лә Айцун алыш барышын күҙәтте.

Ҡаланы һаҡлаусылар, һан яғынан бик аҙ ҡалыуҙарына ҡарамаҫтан, әүәлгесә батырҙарса һуғышты.

— Император Айцун беҙҙең менән!

— Татарҙарҙы еңәсәкбеҙ! — бер-береһен сәмләндереп, улар дошман һөжүмен һәр саҡ кире ҡаҡтылар.

Чжурчжэндәрҙең иҫ киткес ҡыйыулығы императорҙың үҙенә лә ынғай тәьҫир итте.

Баш ҡаланы һаҡлаусыларҙың ҡаршылығына татар-монголдар оҙаҡ сыҙамаҫ, һуғыш майҙанын ҡалдырып, улар үҙ далаларына ҡайтып китерҙәр һымаҡ тойолдо Айцунға.

Ысынлап та, дошман ҡыҫымы ҡапыл кәмене.

Тптар-м,онголдар ҡала стеналарынан ситкә киткәс, ялпылыҡ урынлашты.

«Күк беҙҙе үлемдән, тулы ҡыйралыштан ҡотҡарҙы», — ти шатланып, император Айцун юғарыға ҡараны.

Күк-һаya өндәшмәне.

Колто-көлтә нурҙарын ергә һирпкән ҡояш болоттар араһына инеп йәшеренгәс, императорҙың йөрәген ҡурҡыу мшгшы. Чжурчжэндәр иле өсөн бәлә-ҡаза бөтмәне микән ии? Эйе, бөтмәгән шул!

Лйцунға Үгәҙәй хандың ультиматумын тапшырҙылар.

Ппш ҡаланы һаҡлаусылар ҡаршылыҡ күрһәтеүҙән туҡтамаһа, Чжурчжэн иле императорының ата-әсәһе, туған-тыумасалары, ғалимдары менән яҙыусылары, мәҙәниәт-• эшлек кешеләре менән батырҙары ерләнгән зыяратты туҙ-ыырырға тейештәр...

Үгәҙәй хандың шундай вәхшиҙәрсә ҡыланасағына Айцун ышаиманы.

Изгеләрҙән дә изге зыяратҡа Үгәҙәй ҡағылмаҫ. Бигүе ҡурҡытыр өсөн, юрамал яҙғандыр был хатты, — тип уй иуоп ҡайтарманы.

Ьпйтаҡ ваҡыт уҙғас, ҡала комендапты килде. Ул, өнмшмәйенсә, ҡулындағы ҡағыҙҙы императорға һондо.

- Нимә хаҡында?

- Үгәҙәй хандың талабы үтәлмәһә, татар-монголдар Илфптты тиҙҙән туҙҙырасаҡтар, —тине ҡала комендапты.

Пмператор Айцун ҡапыл ағарынды.

• Вәхшиҙәр, — тип ул юғарыға ҡараны. — Дошман-ШҢ ллама ҡыланышын туҡтат! Барлыҡ ышаныс-өмөтөм һинда гснә, Бөйөк haya!

Бойөк haya яуап ҡайтарманы. Ҡуйы болоттар өйөмө ||)о|!Ында йәшеренгән ҡояш та күренергә теләмәне. Тимәк, Бойөк haya дошман яҡлы!..

Үгоҙәй хан билдәләгән ваҡыт еткәс, ҡәберҙән ҡазып пипған император Айцундың ата-әсәһе, туған-тыумасаһы һөйәктәре өйөлөп тейәлеүле арбаны тимер ҡапҡа эргәһенә алып килделәр һәм һөйәктәр алып киләсәк бүтән арбаларҙы көттөләр.

Беренсе арбалағы аҡ һөйәктәрҙе туҙҙырып төрлө яҡҡа ташлай башлағас та, император Айцундың күҙ алды томаланды һәм ул иҫе юғалырҙай хәлгә етеүен тойҙо. Әмма, писек кенә ҡыйын булмаһын, ҡапҡаны асырға телә-ине.

Ҡпланы ҡамауҙа тоткан дошман сиреүе лә урынынан ауҙралманы.

Далаларҙа иәшәүсе кешеләрҙе көтөү-көтөүе менән ҡыуып килтереп, өр-яңы көс туплағас, йәнә һөжүм башланды.

Дары бөтөү сәбәпле, утлы көршәктәр менән бүтән һуғыш ҡоралдарын файҙалана алмаған ҡжурнжәндәр ҡаланы уҡтар һәм һөңгөләр ярҙамында ғына һаҡланы. Ә таш онтағыс машиналары ҡәлғә стеналарын көнөн-төнөн соҡоно.

Стенала уйылған тишектәрҙән эскә уҙған бер төркөм татарҙар, ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, ҡаланы һаҡлаусыларға ташландылар.

Татар-монголдарҙың ҡысымы көсәйгәндән-көсәйә барҙы. Бындай шарттарҙа ҡаланы һаҡлап алып ҡалыуҙан төңөлөп, император алыш көслө барған ерҙән китергә мәжбүр булды. Ул, ҡала эсендәге икенсе ҡалалағы һарайға ҡайтҡас, дошман ҡулына эләгеүҙәренән ҡурҡып, ҡатыны менән бала-сағаһын һәм иң яҡын туғандарын үлтертте. Шунан, үҙенең өҫтөнә бер биҙрә кәрәсин ҡойоп, ут төрттө...

Үҙен-үҙе һәләк итеүсе император урынына ҡалған Моди командалығындағы ҡаланы һаҡлаусылар, барлыҡ көстәрен туплап, татар-монголдарға ҡаршы һуғыштылар.

Ирҙәр тотошлай ҡырылып бөткәс, алтмыш меңгә яҡын ҡатын-ҡыҙ бейек ярҙан ташланып үшде.

Шунан һуң ғына алыш туҡталды һәм татар-монголдар буп-буш ҡалған ҡаланы баҫып алды.

XVIII

Ул заманда иң алдынғы илдәрҙән һаналған Бөйөк Чжурчжэн империяһының бөтөн ҡалаларын ер менән тигеҙләп, кешеләренең береһен дә тиерлек ҡалдырмай ҡырҙырткас, Үгәҙәй хан Батыйҙы саҡыртты.

— Минен бер туған ағайым Джучи — һинең атайың. Уға олатайың Сыңғыҙ хан бүлеп биргән ерҙәрҙе белә-һеңме?

Мәғәнәһеҙ һымаҡ янғыраған Үгәҙәйҙең һорауына сәйерһенгән Батый хан ғәжәпләнде.

— Нисек белмәҫкә, ти? Белмәһәм, минә атайымдан мираҫка ҡалған ерҙәрҙә йәшәүселәрҙән һалым йыйҙыртмаҫ инем, — тине Батый.

Үгәҙәй хан, бер туған ағаһының улы яуабы менән ҡәнәғәтләнмәйенсә, ризаһыҙлыҡ белдерҙе:

— Атайыңдан мираҫка ҡалған ерҙәрҙә һалым йыйшартыу ғына әллә ни ҙур эш түгел. Минең Бөйөк атайым, Бишбалыҡ олатайың Сыңғыҙ хандың васыяты буйынса, донъяның барлыҡ мәмләкәттәрҙе буйһондороу — беҙҙең изге Оурыс!

— Олатайымдың Бөйөк васыятын минең бер ҡасан да онотҡаным юҡ, ағай! — тине Батый.

— Уның васыятын бойомға ашырырға ла әҙерһеңме?

- Ҡәрәкһә, яуға барырға ҡуш, мин бөгендән әҙер!

Үгәҙәй хан йылмайҙы.

— Ихласлығыңа ышанам, ҡустым. Әммә артыҡ ҡабаныммын. Башҡортостанды, Идел-Кама буйы болғарҙарын менән Европа илдәрен буйһондороу өсөн ныҡлы әҙерлек тамамлаштелә, — Үгәҙәй хан был мөһим мәсьәләне хәл ҡылыу өсөн ҡоролтайыйҙыртты.

Упда көнбайыш илдәренә яуға барыу мәсьәләһе ыңғай хәл ителгәс, Үгәҙәй хан йәнә Батыйҙы саҡыртты.

• Бына һиңә яуға сығыр мәл етте. Кемде сиреү башлы итеп алырға теләйһең?

- Нойон Субәдәй баһатурҙы теләйем!

- Субәдәй баһатур монгол түгел. Өҫтәүенә, ҡартайҙы та .. Бүтән берәйһен һайла.

• Бүтәндәрҙе теләмәйем, ағай. Субәдәй баһатур, монгол булмаһа ла, олатайыма тырыш хеҙмәт иткән һәм бик күп яуҙарҙа дошмандарҙы еңгән кеше. Ул, оло йәшенә ҡарамаҫтан, һинең ышанысыңды аҡларҙай берҙән-бер нокөн, — тине Батый хан, Үгәҙәйҙең тәкдиме менән ризалашһынһа. — Олатайым уның тәжрибәле һуғышсы булғаны, бүтән халыҡтарҙың ҡылығын, уларҙы алышта оҫта файланыуға белгәне өсөн мактай торғайны...

Үгәҙәй хан уйға ҡалыбыраҡ ултырҙьь

Батый, бәлки, хаҡлылыр. Субәдәй баһатур, ҡартайыуына ҡарамаҫтан, һуғышҡа һәләтлеген һаман юғалтмаған, хәйләкәр, ҡыйыу. Чжурчдэндәрҙе унан башҡа ҡыйратыуы мөмкин булыр ине микән?

Үгәҙәй хан һаман икеләнде:

• Субәдәй баһатурҙың монгол булмауы үкенесле.

• Бөтөн сиреүгә башлыҡ итеп ҡуйырҙай монголдарҙы ни өсөн табырға? — тип һораны ла, Батый хан ныҡышмаҡлыҡ мәиән үҙ хәбәрен һөйләне. — Олатайым һуғышсыларҙың монголмы, монгол түгелме икәнлегенә түгел, һәммеләгенә ҡараған. Шуға күрә беҙҙең сиреүҙәге күпселектең томән башлыҡтары бүтән мәмләкәттән. Шиги-Хутуҡтатар, Джэлмә — урянхай, Мухали — джәләир, Боорсыҡтайчиут, Борохул — джурки ҡәбиләһенән... Данлыҡлы иоПои һәм нукерҙарыбыҙҙан тыш, йөҙ, мең, ун мең баш-

лыктарыбыз, темәндәребеҙ һәммәһе бөтән. мәшәкәттән[1], ә сиреүҙәге төп көсөбөҙ — татарҙар. Татарҙар тоғро хеҙмәт итмәһә, шул тиклем илдәрҙе буйһондора алмаҫ инек.

— Фекерен дөрөҫ, — Үгәҙәй хан Батыйҙы маҡтаны. — Сиреүҙе ниндәй тәртиптә алып барырға уйлайһың?

— Олатайым заманындағы хәрби тәртипте үҙгәртмәйем, — тине лә бер аҙҙан Батый ҫтәмә индерҙе. — Татарстандағы барлыҡ татарҙарҙы ҡатындары, бала-сағаһы, туған-тыумасалары, мал-тыуарҙары менән бергә алып барам был яуға!

— Сиреүгә мәшәҡәт тыуҙырыр өсөнмө?

— Татарҙарҙың ғаиләһен үҙебеҙ һуғышып аласаҡ ерҙәрҙә нығыныу өсөн файҙаланасаҡмын, — тине Батый хан.

— Татарстан ере татарҙарһыҙ ҡаламы?

— Татарстан еренә монголдарҙың ҡолдарын һәм сит мәмләкәттәренән һатып алынасаҡ кешеләрҙе урынлаштырырбыҙ.

— Татарстандан тотошлай күсеп китергә ризалашырҙармы ни татарҙар?

— Һи, улар есен күңелдәренә оҡшаған һәр ер Ватан буласаҡ...

Батыйҙы күңел биреп тыңлаған Үгәҙәй хан, тулҡынланып:

— Фекерең төпле, ҡустым! Уй-хыялдарынды бойомға ашыра алһаң, Бейөк Сыңғыҙ хан ейәне икәнлегенде бөтә донъяға танытасаҡһың!

— Миңә ышаныс белдереүең өсөн, ағай, һиңә рәхмәт, — Батый Үгәҙәй алдында баш эйҙе.

— Мине бер нәмә борсой, ҡустым. Татарҙарҙы тотошлай үҙең менән алып китһәң, Ҡараҡором дәүләте менән бәйләнешең өҙөлмәҫме?

— Өҙөлмәҫ, һинең менән бәйләнеш тотоу яғыш да ныклы уйланым, — тип Батый ярҙамсылары менән төҙегән планды аңлатты. Йөҙ саҡрым һайын улачы[2] ҡуясаҡмын һәм ям[3] төҙөртәсәкмен. Ҡараҡором дәүләте менән бәйләнешен тотоусы ылаусыларҙы туҡландырыу өсөн, йылҡы менән һарыҡ ҡитөүҙәрен ҡалдыртасаҡмын...

[1] Йөҙ, мен, ун мең — төмән башлығы званиеһы нәҫелдән-нәҫелгә күсә килгән. Улар һәммәһе «нойон» титулина, йәғни, «бей» — кенәз, әфәнде, синьор, хәрби синьор исеменә лайыҡ булғандар, һәр береһенә тейешле ер — улус ғүмерлеккә беркетелгән. (Кара: Владимирцов Б. Я. «Общественный строй монголов» 104-се бит.)

[2] *Улачы* — элемтәсе.

[3] *Ям* — станция. Станция аша йөрөүсе вәкилдәр һәм уларҙы оҙатып йөрөүселәр махсус пайҙзыны — ҡултамғалар ҡуйылған пластинкаларҙы үҙҙәре менән йөрөткәндәр.

— Яҡшы, һәммәһен хуплайым, — тине Үгәҙәй хан.

Шул көндән башлап яңы яуға ныклы әҙерлек эштәре башланды.

* * *

1236 йылдың яҙында төп көстө татарҙар тәшкил иткән оло сиреү көнбайышҡа табан йүнәлде.

Батый хан, олатаһы Сыңғыҙ хан заманындағы шикелгә, хорәкәттәге сиреү уртаһында ярандары менән бергә барҙы. Уның ике яҡ ҡанатын ун дүрт төмән тәшкил итте (һәр төмәндә — ун мең кеше).

Яугирҙарҙы туҡландырыу өсөн сиреү артынан йылҡы, һыйыр, ҡуй-һарыҡ көтөүе менән ике төмән барҙы.

Уларҙан бер аҙ артта ҡалыбыраҡ, оҙон билле арбаларға йыйылма йорттары, ҡаралтылары, науыт-һабалары, ашлыҡ-сағалары менән бергә тейәлгән татарҙарҙың ҡатындары эйәрҙе.

Уларҙың мал-тыуарҙарын һаҡлау һәм яу артынан ҡыуыу өсөн махсус кешеләр тәғәйенләнде...

Көп эҫе, томра.

Таидан кискә тиклем саң-туҙан араһында хәрәкәт итеүе кыйын, көстө ала, изрәтә.

Эцср етеп, халҡынса берәй ерҙә туҡталғас ҡына, кешлорҙец йәнен кинәндергес тынлыҡ урынлаша.

Оммә ял оҙаҡҡа һуҙылмай. Иртәнге яҡты беленә башлауы менән, барабандар доңғорҙауына уянған күмәк кешелар йәнә ҡуҙғала.

Батый хан сиреү эшенә туранан-тура ҡыҫылманы, һәминһси Субәдәй баһатурға тапшырҙы һәм уны бер туҡтауһыҙ кабаландырҙы:

Сиреүҙе яйлатма, шәберәк алып бар! Былай яйлап, халҡын көҙгә саҡлы Оло Иҙелгә тиклем етә алмаҫһың!

Бөйөк Сыңғыҙ хандың ейәне Батыйға ҡаршылыҡһыҙ буйһонған баһатур, үҙ сиратында, төмәндәренә тынғы бирмәне.

— Ниңә яйланығыҙ? Етеҙерәк ҡыймылдағыҙ!..

Күк йөҙөн иңләгән ҡара болот кеүек, алға ыбай ябырылып барыусы иҫәпһеҙ-һанһыҙ һыбайлылар артынан эйәргән ылауҙар, малкөтөүҙәре, татарҙарҙың ғаиләлорс, баш командующийҙың ҡаты талаптарына буйһонщюлоп, сиреүҙең бөтөнләгән тәшкил итте.

Аҙау диңгеҙенә яҡын урындағы Сығанаҡ ҡалаһына ынос, Сыңғыҙ хан заманында буйһондоролған ерҙән

барыуҙан тукталып, Батый хан сиреүе уңға табан ыңғайланы.

Башҡорт иле сигенә йөҙ илле сакрым самаһы ара ҡалғас, сиреүҙе ялға туктатты ла:

— Алышһыҙ-ниһеҙ бирелһендәр өсөн, беҙҙең сиреү яҡынлашыуы хаҡында сапҡындарҙың башҡорттар араһында ҡот оскос хәбәрҙәр таратыуы мөһим, — тине Субәдәй баһатур.

Уның фекерен Батый хан аңламаны:

— Башҡорттар яуға ҡаршы сыҡһындар өсөнмө?

— Киреһенсә, уларҙың хәрби рухын һындырыу, көстәрен тарҡалдырыу һәм беҙҙең сиреүгә бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ Болғар иленә һөжүм итеү мөмкинлеге тыуасаҡ, — тине Субәдәй. Шунан, Батый хан икеләнеүен һиҙеп, еҫтәне. — һинең олатайың Бейөк Сыңғыҙ хан, сиреүҙән алда һәр саҡ үҙенең сауҙагәрҙәре менән шыпсыларын ебәреп, дошман араһында ҡоттарын алырҙай ҡурҡыныслы хәбәрҙәр тараттырҙы. Рухы һындырылған кешеләр паникаға бирелеп ҡаса башлағас ҡына, сиреүгә һөжүм итергә бойоролдо.

Сыңғыҙ хандың хәрби тәжрибәһен ҡулланған Субәдәй баһатурҙың тәҡдимен кире ҡағырға Батый хандың баҙнатсылығы етмәне.

— Олатайымдың һуғыш тәжрибәһен беҙ ҙә ҡуллана йыҡ, — тип ул шымсыларын алға ебәрергә ҡушты.

Әммә Сыңғыҙ хандың һуғыш тәжрибәһен файҙаланған дошмандың хәйләһе барып сыҡманы, уңышһыҙлыҡҡа осраны.

Татар-монгол сиреүе яҡында ғына икәнлеге тураһындағы ҡот оскос яман хәбәрҙәр таралғас та, башҡорт ырыу-ҡәбиләләрендә һәм ҡалаларҙа шау-шыу, ығы-зығы ҡупты.

— Ҡара яу килә!

— Ҡара яу!.. — тип һөрән һалып, ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, башҡорттар бер-береһен «ҡара яу» кесәнә ҡаршы барырға өндәнеләр.

Күп тә уҙманы, уҡ-һаҙаҡтар менән ҡоралланып, иң яҡшы арғымаҡтарына атланған ир-егеттәр Ҡараҡыя ҡалаһы уйһылығына йыйналдылар һәм Сурман ханды үҙҙәренең Баш командующийы итеп иғлан иттеләр.

Сурман хан командалығында тупланған башҡорт сиреүе дошманға ҡаршы ыңғайланы. Юлда барышлай уға алыҫтағы ҡәбилә-ырыу башлыҡтарына буйһондоролған теркөмдәр ҙә бер-бер артлы килеп ҡушыла торҙо.

Ошондай яуаплы, көсөргәнешле ваҡытта башҡорттарға үзен иң кәрәкле кешеләрҙең береһе һанаған Сурман хаи тыуған иле яҙмышы өсөн борсолдо.

Бер ниндәй әҙерлекһеҙ, үҙ ихтыярына ашыҡ-бошоҡ йыйылған йөр-егеттәр дошман яуына ҡаршы тора алырмы?

Маҡлайына шлемын батыра кейеп, билен быуған ҡалышҡа — ҡылысын, яурыны аша һыҙма мылтыҡ менән уҡһҙағын аҫҡан Дәржимән дә атаһының уй-хистәрен киҫерҙе.

Дошман яуы үтәсәк Даяҡ-Йайыҡ йылғаһы ярына еткос, ырыу-ҡәбилә кешеләре буйһондоролған мең һәм ун мси башлыҡтары командалығындағы ғәскәрҙәрҙең урыны бнлдәләнеп, уларҙың һәр береһенә хәрби бурыс йөкмәтелде.

Разведкаға ебәрелгән кешеләр дошман сиреүенең Даяҡ ярыиа яҡынлашыуын хәбәр итте.

Оҙаҡламай Субәдәй сиреүенең авангардтағы төркөмө - ҡарауылы ҡаршы яҡтағы ҡыуаҡлыҡтар араһында күренде.

Уларҙы иғтибар менән күҙәтеүсе Сурман хан сатырындағы вәзирҙәрҙең береһе бышылдап ҡына өндәште:

— Туҡтанылар. Иылға аша сығырға беҙҙән шөрләйҙәр, ахмырыһы.

— Дошман сиреүенең төп көсө килеп етеүен көтәләр, — тине икенсе вәзир.

— Нисек кенә булмаһын, дошман сиреүен ҡыйратабыҙ!

— Дөрөҫ, беҙҙең дүрт йөҙ мең кеше [1] барлығын белһә', дошман сиреүе йылға аша сыҡмаясаҡ һәм ҡойрокто һыртҡа һалып ҡасасаҡ!..

Вошҡорт сиреүе тейешле урынға урынлаштырылып, улар менән бәйләнеш булдырылғас, Сурман хан бер аз ЛМПыслаңды.

«Лллаһы тәғәләгә шөкөр! Ҡара яуҙың яҡынлашыуын алдан белеп, һуғышҡа әҙерләнергә өлгөрҙөк», — тип уйлап, ул ҡор һәм ун мең башлыҡтары ебәргән сапҡындар аша дошман сиреүенең ҡайҙа һәм ниндәй тәртиптә урынлашырылыуын асыҡланы.

Всренсе көн тыныс үтте.

Пкенсе көндө лә татарҙар урынлашҡан ҡаршы яҡта Пореолорлоҡ нәмә һиҙелмәне.

Ҡараңғы төшкәс, йылға аръяғындағы ярҙың буйынан-буйына һуҙылған күмәк уттарҙың ялҡынланып яныуы күренде. Татарҙар ит бешерә, сәй ҡайнатып эсә торғандарыр...

Улар йоҡларға ятҡас, тынлыҡ урынлашты.

---

[1] Башҡорт ғәскәренең шул осорҙағы һаны Лаврентий йылъяҙмаһында һаҡланған.

Башҡорт егеттәре лә, борсоулы көндөң имен-аман уҙыуына шөкөр ҡылып, ял итте.

Һағауыл хеҙмәтен башҡарыусы егеттәр генә, ҡерпек тә ҡаҡмайынса, ҡаршы яҡтағы дошман сиреүенең һәр хәрәкәтен көсөргәнешлек менән күҙәтте.

Сурман хан сатырына килә-китә йөрөгән ҡор башлыҡтары менән уларҙың ярҙамсылары ла был төндө йоҡоһоҙ уҙғарҙы.

Ваҡыт үтә яй, көсөргәнешле уҙған һымаҡ тойолдо Дәржимәнгә.

— Дошман сиреүенең ҡасан ҡуҙғалыуын көтмәйенсә, ҡуҙебеҙ һөжүм башлайбыҙмы әллә? — тип һораны ул, сыҙамлығын юғалтып.

— Кешеләрҙе күрәләтә ҡырҙыртасаҡбыҙ... Дошманға ҡаршы һөжүм башлаһаҡ. Татарҙарҙы был яҡ ярға сығармау — беҙҙең төп бурыс, — тине Сурман хан.

Атаһы ҡушҡанға ризалашырға мәжбүр булған Дәржимән икеләнеүле тойғоларға күмелде.

Күп яуҙарҙа йөрөп бай һуғыш тәжрибәһе туплаған Субәдәй баһатур командалығындағы күп һанлы сиреүҙең юлын тотҡарландыра алырмы әҙерлекһеҙ-ниһеҙ йылға буйында тупланған башҡорт егеттәре? Бүтән ерҙән йылға аша сығып, татарҙарҙың тылдан һөжүм итеүен булдырмау өсөн ниндәй әмәл табырға? Башҡорттарҙың көсөн, ул ҡайҙа, нисек урынлаштырылыуын дошман белә микән? Уларҙың яуызлығынан ҡотолоу өсөн, аңғармаҫтан һөжүм башлау отошло булмаҫмы?

«Юҡ, ҡабаланырға ярамай, атайым хаҡлы. Ҡыҙыу жанлы башҡорттарҙың үҙҙәре башлап һөжүмгә күсәсәгенә өмөтләнгән татарҙар, бәлки, засада ойоштороргандарҙыр». Дәржимән үҙен тынысландырырға тырышты, әммә борсолоуы кәмемәне, киреһенсә, көсәйә барҙы.

Был яҡ ярҙа хәрәкәтһеҙ тороуҙан ни файҙа? Дошмандың бик күп яуҙарҙа ҡатнашып бай тәжрибә туплаған сиреүе, моғайын, ошо ваҡытта берәй боҙоҡлоҡ әҙерләй торғандыр... Уны нисек асыҡларға? Бәлә — башҡорттарҙың моңһоҙлоғонда! Ҡала бейҙәре менән ырыу-ҡәбилә башлыҡтарының да Башҡортостан алдында ғәйебе ҙур. Берләшеүгә, Башҡорт дәүләте эргәһендә барлыҡ көстө туплауға, ханға буйһоноуға ҡаршылашыуҙары арҡаһында ошондай хәлгә ҡалды түгелме ни башҡорттар? Сәйен Йортҡа ебәрелгән сапҡындарҙан да бер ниндәй хәбәр юҡ. Улар, Болғар иленә барып етмәйенсә, дошман шымсылары тарафынан үлтерелде микән?..

Эс бошорғос уйҙарға күмелгән Дәржимән, исмаһам, саҡ ҡына булһа ла серем итеп алырға булғайны, иртәнге

тыныслыҡты боҙоп, Даяҳ-Яйыҡ йылғаһы аръяғынан даңғыр-доңғор тауыш ишетелде.

— Дошман сиреүе һөжүмгә әҙерләнә!

— Уянығыҙ!

— Татарҙарҙы был яҡ ярға сығармау өсөн, урындарығыҙҙа нығ торорғоҙ!

— Уҡ-һаҙаҡтарҙы йәлләмәҫкә! Яҡын килеүселәрҙе һоңғо-ҡылыс ярҙамында ҡырырға! — тигән командалар ишетелеп ҡалды.

Сурман хан менән уның вәзирҙәренә эйәреп, Дәржимән хан сатырынан сыҡты. Ҡаршы яҡ яр буйындағы күмәк татарҙарҙың ҡуҙғыртылған бал ҡорто шикелле итеп ҡорҡотләнеүен күргәс, уның йөрәге алҡымына тығылғандай булды.

Үҙ башлыҡтары ҡушыуына ҡаршылыҡһыҙ буйһонған Омшкорт егеттәре лә алышҡа әҙерләнде.

Ҡаршы яҡтағы татарҙарҙың бер өлөшө ат ҡойроктарына йәбешеп, икенселәре кәрәк-яраҡ тултырылы күн шктарға ултырып, йылғаның был яҡ ярына табан йөҙә оашлапы.

— У-р-ра-а-гх!

— У-ра-ра-а-гх! — тип төрлө яҡтан ҡысҡырышҡан татарҙарҙы көсөргәнешлек менән күҙәткән Сурман хандың Асфогеи ҡуркыу алды.

Татарҙар был яҡ ярға сығырҙар микән ни?

Ҡтаһының борсоулы уйын һиҙгәндәй, Дәржимән тыныс кына әйтте:

— Татарҙар башҡорттарҙың ҡотон алырға маташа. Әммә уларҙың хәйләһе барып сыҡмаясаҡ, яр буйындағы иҫәгеттәр ҡуркаҡтарҙан түгел!

— Татарҙар ярға яҡынлашҡанға саҡлы, уҡтарҙан атығыҙ, — Сурман хандың бойороғо ҡор, мең, йөҙ, ун башлыҡтары менән ябай һуғышсыларға шунда уҡ еткерелде. Һыуҙағы дошман һуғышсыларын башҡорттар көсөргәнешлек менән күҙәтте.

Татарҙар киң һәм тәрән йылғаның яртыһын үҙғас, башҡорттарға уҡтарҙан атырға ҡушылды.

Иҫәпһеҙ-һанһыҙ осҡан уҡтар тейеүҙән үлемесле яраланған татарҙар һыуға ҡолаһы, батты, аҡты. Иҫән ҡалғандары, үҙҙәре уҡтарҙан ата-ата, бирге ярға яҡынлашмылар. Яҡын килергә мөмкинлек ҡалмағас, һөрән һалып ысҡырыша-ҡысҡырыша, киргә табан ыңғайланылар...

Татарҙарҙың икенсе, есенсә, дүртенсе тапҡыр йылға аша ҡырға маташыуҙары уңышһыҙ тамамланғас, Батый хан П) (Шсион бер төркөм вәкилдәр килде һәм килешеү тәҙөү ҡағыҙында һөйләшеүҙәр башланды.

— Татар-монголдар ҙа, күпселек башҡорттар һымаҡ, күсмә халыҡ. Шуға күрә беҙ һеҙгә яманлыҡ теләмәйбеҙ. Үҙ-ара дуҫ мөнәсәбәттә булырға теләйбеҙ һәм Башҡортостан аша Европа илдәренә барырға рөхсәт биреүегеҙҙе генә үтенәбеҙ, — тине Батый хан илсеһенең башлығы.

— Килешеү мәсьәләһен яңғыҙым хәл ҡыла алмайым, — тип Сурман хан ҡала кенәздәрен, ырыу-ҡәбилә, ҡор, ун мең һәм мең башлыҡтарын саҡыртты. Әммә, уртаҡ фекергә килә алмайынса, улар үҙ-ара оҙаҡ бәхәсләште.

Батый хан ебәргән бүләктәр таратылғас ҡына, дошман сиреүен Башҡортостан ере аша уҙғарырға күпселек тауыш менән ризалашҡан кәңәшмәлә ҡатнашыусылар ҡунаҡтар хөрмәтенә Сурман хан әҙерләткән сәйҙе эсергә генә ултырғайнылар, тауыш ҡупты:

— Та-тар-ҙар!

— Кисеү аша сыҡҡан татар яуы килә!..

Хан сатыры эсендә тамаҡ туйҙырыусылар, бер ни аҡламайынса, бер-береһенә һораулы ҡараш ташланы.

— Ниңә зыҡ ҡубалар икән?

— Бер урында тик тороуға ялҡҡандарҙыр!..

Шул саҡ татарҙарҙың да ҡыҫҡырышыуы ишетелде:

— У-р-ра-а-гх!

— У-р-ра-а-гх!..

һөжүмгә барғанда ғына татарҙарҙың шулай оран һалыуын иҫенә төшөргәс, Дәржимән урынынан һикереп торҙо.

— Алышҡа әҙерләнегеҙ!

Улы артынса сатырҙан сыҡҡан ыңғайы, терлө яҡтан йән-фарман сабышҡан татарҙарҙы күреп, Сурман хан да өтәләнде.

— Беҙҙең уяулыҡты юғалтыу өсен төҙешкән килешеүгә ышанмағыҙ, — тип ул атына атланды һәм һыбайлы татарҙарға ҡаршы һуғышыусы Дәржимәнгә ярҙамға ташланды.

Әммә дошман сиреүенең һеҙүмен кире ҡағырҙай төп көс ваҡ-ваҡ төркөмдәргә тарҡауланырға өлгөргәйне инде.

Шул мөмкинлектән файҙаланып йылға аша сыҡҡан дошман сиреүе, һәммәһен тапап-изеп, ҙур тиҙлектә алға ябырылды.

Бер төркөм татарҙар ҡамауына эләккән Сурман хап оҙаҡ ҡаршылаша алманы, ҡамауҙы көс-хәлгә йырып сыҡҡас, сигенеп барыусы башҡорттар артынан сапты.

Яр буйында ҡалған сатыры менән унын ҡыйығындағы бүре һүрәте төшөрөүле йәшел байраҡ ергә ауғас, Сурман хан командалығындағы һуғышсылар араһында ла паникә ҡупты һәм, улар алыш майҙанын ҡалдырып, ҡаса башланылар... [1]

XIX

Сурман хан тәртипһеҙ рәүештә ҡасып барыусы башҡкрттарҙың төп көсөн ҡыуып етә алманы. Уларҙан айырылып ҡалғас, бер төркөм һаҡсылары менән әсиргә алыңыц, Батый хан хөкөмөнә тапшырылды.

Аҡ кейеҙ өҫтөндә мосолмандарса аяҡ салып ултырщп Батый хан, кемде тотоп килтереүҙәрен белгәс, йылмайҙы.

— йә, ниңә шаҡ ҡаттың?

Ецелсә бөкөрө кеше Батыйҙың һүҙен башҡортсаға тәржәмә яһаны ла, үҙенән өҫтәп, әйтте:

— Башҡорт илен ҡаршылыҡһыҙ буйһондорорға, яһаҡ түләргә һәм тоғро хеҙмәт итергә вәғәҙә биреп, Батый хан ҡаршыһында теҙләнеп баш эйһәң, һин үҙ илендә хан булып ҡаласаҡһың!

— Ул — алдаҡсы хан! Килешеү төҙөү һылтауы менән щпрмаҫтан һөжүм башлаған яуыз илбаҫарға бүтән ышацырга теләмәйем, — тине Сурман хан, Батыйҙың күҙҙәренә туп-тура ҡарап.

Косөргәнешле тынлыҡ урынлашты. Ул тынлыҡты беронсс булып боҙорға бер кемдең дә батырсылығы етмәне.

Сурман хан да, Джэбэ баһатур тарафынан язаланған Мырҙым бейҙең яҙмышын көтөп, тауыш-тынһыҙ ҡалды.

Ьатый хан сыҙаманы, беренсе булып тынлыкты боҙҙо:

— Миңә буйһонорға теләмәүсене үлем язаһы көтә!

— Ни ҡылһаң да, үҙ ихтыярында, — тине Сурман хан. Уның түбәнһенергә теләмәүе Батый ханды ғәжәпкә ҡалдырҙы.

Иц көсөргәнешле минуттың нимә менән бөтәсәген аңлап, тәржемәсе ағарынды. Батый хандың вәзирҙәре лә, үҙенә-үҙе үлем хөкөмө теләүсе Сурман хандың ҡыланышынан оптырап, шып-шым булды. Бейөк Сыңғыҙ хандың ейәшчю ҡарата насар мөнәсәбәттә булыу аҡылһыҙлыҡ түюлме ни?

Батый хандың саҡ һиҙелер-һиҙелмәҫ эйәк ҡағыуын ||ү,|hсҙ ҙә аңлаған палачтар Сурман ханды аҡ тирмәнән ылып сыҡҡан саҡта, Батый хандың һуңғы бойороғо ишеГОлле:

- Бөтөн башҡорттарға фәһем алырҙай итеп язаларға!.. Ҡолоп билле арбалағы бағаналарҙы ергә беркетеп, уға

[1] *Рәшид-ад-дин.* Ыылъяҙма йыйынтығы, т. 2, М.-Л., 37-се бит.

арҡыры ҡуйылған ағас ботағына һыпыртмаҡлы ҡыл арҡан таҡтылар ҙа әсиргә алынған башҡорттарҙы ҡыуып килтерҙеләр.

Батый хандың хөкөмө иғлан ителгәс, барабандар донғорҙарға тотондо.

Барабандарҙың тауышы ябай башҡорт һуғышсыларышғына түгел, ундағы ырыу-ҡәбилә башлыҡтарын да ҡалтырандырҙы. Тик Сурман хан ғына үҙен тыныс һәм ғорур тоторға тырышты. Әммә ҡояшлы салт аяҙ, һоҡландырғыс йәйге көндө башҡа бер ҡасан да күрә алмаясағын белгерткән ниндәйҙер ят тойғо уны өҙлөкһөҙ изҙе...

Элмәк ҡыл арҡан тәңгәлендәге түмәргә баҫтырылғас Сурман хан күмәк башҡорттар араһынан Дәржимәнде эҙләне.

Улы бер ерҙә лә күренмәгәс, Сурман хан шөкөрана ҡылды:

«Иншалла! Улым әсирлеккә эләкмәгән! Дәржимән иҫәнһау ҡалһа, Башҡорт иле дошмандан азат ителәсәк!..»

Ҡыл арҡан осондағы элмәкте Сурман хандың үңәсенә кейҙерҙеләр. Аяғы аҫтындағы түмәрҙе тибеп, палач ситкә яҡтайҙы. Шул ыңғайы аҫылынған көүҙә йән менән тартҡылаша башлағас, барабандар йәнә донғорҙарға тотондо.

Бындай ҡот осҡос күренеште ирекһеҙҙән күҙәткән башҡорттар, үҙҙәрен үҙҙәре онотоп, палачтарға ташландылар, мәгәр бер нисәһе тураҡланып үлтерелгәс, йәнә тығылҡандылар.

Әсиргә алынған ун мең самаһы башҡорттан ойошторолған айырым төркөмдөң башлығы итеп монгол нойоны тәғәйенләнгәс, Сурман хандың башын алып килделәр. Уны оҙон таяҡ осона беркеттеләр ҙә иң алғы рәттә тороусы һыбайлы башҡорт егеттәренең береһенә тотторҙолар һәм байраҡ урынына алып барырға ҡуштылар.

Әҙерлек эштәре тамамланғас, бер тапҡыр ҡыйратылғандан һуң ҡабаттан төҙөлгән Ҡазира ҡалаһын һуғышып алыу бурысы һыбайлы башҡорт төркөмөнә йөкмәтелде, ә татар-монгол сиреүе уларҙы арттан ҡыуып тигәндәй барҙы. Ҡаланы ҡыйратырға барырға теләмәүселәр йәки ситкә тартылыусылар үлтерелде.

Дошмандан ҡасып барып Ҡазира ҡалаһында ныҡынған Дәржимән, һыбайлы башҡорт егеттәре үҙҙәренә ҡаршы килеүен күргәс, иҫ-аҡылын юйҙы.

— Башҡорттарға ҡаршы башҡорттарҙы һуғыштырыу— ҡот осҡос хәл!

— Арттан татарҙар ҡыҫырыҡлағас, улар ҡалайтһын? — тине Ҡатай ырыуы башлығы.

— Былай булғас, беҙгә ни эшләргә? — тип һораны мең башы.

— Һуғышырға! — тине Дәржимән.

— Үҙ башҡорттарыбыҙға ҡаршымы?

— Бҙҙең башҡа әмәлебеҙ ҡалманы.

Дәржимән менән теләктәшлек белдереп, ҡәлғә стенаһы артында йәшеренгән ир-егеттәр Ҡазира ҡалаһын һаҡлау псоп алышҡа әҙерләнде.

Таяҡ осона беркетелгән Сурман хандың башын күтәреп килеүсе башҡорттарҙың башҡорттарға ҡаршы һуғышасағы борсой ине, ахырыһы.

Ҡолғәгә утыҙ-ҡырҡ аҙым самаһы ара ҡалғас, улар ҡапыл яйланы һәм үҙҙәрен арттан ҡыҫырыҡлап килеүсе Шйрҙарға ҡаршы ташланды.

Уларға ҡәлғәне һаҡлаусылар ҙа ҡушылғас, алыш ҡыҙҙы.

Татарҙар сигенә...

Уларҙың сигенеүен еңеү тип аңлаған башҡорттар, ҡала » гоиллары тышына сығып, ажарланып алышҡа ташланды.

Ласадаға эләккән алдағы төркөм татарҙар тарафыиан ауыҡыҙ ҡыйратыла башлауын күргәс кенә, эҙәрлөү менән ауырғыу хата икәнлеген аңлап, башҡорттар ҡала эсенә нисн бикләнергә тырышты. Әммә һуңланылар. Уларҙың артын дошман һыбайлылары быуҙы һәм үлеш-ҡыйралыш ҡабаттан көсәйҙе...

Кирылғандан ҡалған төркөм менән Дәржимән тауҙағы урманға сигенгәс, Ҡазира ҡалаһын баҫып алған татарҙар ҡоторондо. Баҡыр, көмөш, алтын, тимер, ҡорос, тун-бронза менән эш итеү, ҡорал етештереү, балта оҫтамрын һәм бүтән төрлө һөнәрселәрҙе һайлап алып, Монголияға оҙатҡандан ҡалғандарының һәммәһен ҡырҙылар, Ікпыш-ҡыҙ ябай монгол-татар һуғышсыларына бисәлеккә таратылды.

Таланыр нәмә таланып, кешеләре тотошлай ҡырылғас, ҡ убодәй баһатур Ҡазира ҡалаһын яндырырға ҡушты. ҠаІ ағай бүрәнәләрҙән буралған өйҙәр менән мәсет-мәҙрәләрҙә шунда уҡ ут ҡабынды һәм бер тәүлек эсендә мөһәбәт огас ҡала урынында көл ҡатыш утлы торонбаштар •нІомо генә ҡалды.

Онрсүенә ҡаршылашырға баҙнатсылығы еткән башҡорттарға асыуы ҡабарып, Батый хан уларҙы нәҫел-рыуы менән ҡороторға теләне һәм ҙөлөкһөҙ Субәдәй баһадирҙы ҡабаландырҙы:

Яй барабыҙ! Көҙгө һалҡын көндәр еткәнгә саҡлы Ішел аша сығып ҡалырға тейешбеҙ!

Пош хандың кәрәгенән артыҡ өтөкләнеүе Баш коман-

дующий Субәдәй баһатурға оҡшамани. Ул, асыуын белгертмәйенсә, Яйыҡ яры буйында уҡ тейеүҙән һытылған һыңар күҙе менән сикәһендәге яраһын теҙәтеп бәйләтте лә, ҡарттарға хас тауыш сығарып, тыныс ҡына мығырҙаны:

— Ҡалаларҙы ҡыйратыу беҙгә бер ни түгел. Әммә ошондай ҙур илгә тарҡауланған ырыу-ҡәбиләләрҙе ҡырыу өсөн, киләһе йылға саҡлы Башҡортостандан ары китә алмабыҙ!

— Башҡорт илендә оҙаҡ аҙапланырға минең ваҡытым юҡ! Дүрт-биш йыл эсендә барлыҡ донъя буйһондоролмаһа, Бөйөк олатайым Сыңғыҙ хандың васыяты үтәлмәй, — тине түҙемһеҙ Батый хан.

— Бөйөк Сыңғыҙ хандың васыятын ҡыҫҡа ваҡыт эсендә бойомға ашырыр булһаҡ, ҡәбилә-ырыуҙар менән маташмайынса, төп көстө башҡорттарҙың ҡалаларын ҡыйратырға йүнәлдереү мөһим.

Батый хан бер аҙ тыйнаҡланды.

— Ул саҡта Иҙелде аша сығырға өлгөрөрбеҙмө быйыл?

— Көстө башҡорттарҙың ҡалаларын ҡыйратыуға ғына йүнәлтһәк, Иҙел аша сығып, Болғар илендә ҡыш уҙғарырға мөмкинлек тыуасаҡ.

— Фекереңде ентекләберәк төшөндер!

Субәдәй баһатур тимер һандыҡта йөрөткән ҡағыҙҙы сығарып Батый хан алдына йәйҙе лә, ундағы билдәләргә бармағы менән берәм-берәм төртөп, күрһәтте:

— Бына ошо, ошо ерҙәрҙе тотошлай беҙҙең сиреү биләгән. Ул йөҙ илле-ике йөҙ сакрым самаһы киңлектә. Былары — беҙҙең сиреү инләп барасаҡ ерҙәрҙә башҡорттарҙың ағас ҡалалары...

— Ҡасан, ниндәй башҡорт ҡалалары ҡыйратыласағып төмән башлыҡтары беләме?

— Әлегә белмәйҙәр. Минең тәкдимгә ҡаршы килмәһәң, һәр төмәндең үҙ йүнәлешендәге хәрби бурысын төшөндерәсәкмен, — Субәдәй баһатур үҙенең фекерен айырым миҫалдар менән дәлилләне. — Бына, ҡара. Бөйек Үгәҙәй хандың улы Көйөк хан менән нойон Буралдай баһатурға башҡорттарҙың Башғыр ҡалаһын, Меңгу хан менән Шейбаниға — Мәзираны, һинең ҡустыларың менән уларҙың нойондарына Башҡортостандың баш ҡалаһы Ҡараҡыяны ҡыйратыу бурысы ҡаралған...

— Башҡорттарҙың етмеш дүрт ҡалаһын ҡыйратасаҡ һәр төмәндең хәрби бурысы билдәләнгәс, мин ризамын, — тине Батый хан, Субәдәй баһатур менән теләктәшлек белдереп. — Үҙеңдең урыңдың сиреүҙең ҡайһы өлөшөндә билдәләнгән?

— Урянх-Ҡадан улым командалығындағы еңелеү белмәҫ нукерҙарым менән һинең һаҡсыларыңа сиктәш урындарҙа барасаҡмын, — Субәдәй баһатур, Батый хан алдындағы ҡағыҙға эйелһә лә, тейешле урынға төртөп күрһәтмәпс. Ул, сепрәк аҫтындағы зәғиф күҙе һыҙлауына сыҙай алмайынса, киң яңаҡлы йонсоу йөҙөн сирылдырып, үҙе лә аңғырмаҫтан еңелсә ыңғырашты. — А-а-ах!..

— Ныҡ һыҙлаймы? — тип һораны хан.

— Зарар юҡ. — Баһатур, тешен шығырҙата ҡысып булһа ла, хәлен белгертмәҫкә тырышты.

Субәдәй баһатурҙан ишетеп белгәндәрен үҙ әмере итеп Һипарға күнеккән Батый хан эйәк ҡаҡты:

— Ҡуҙғалырға ваҡыт, сиреүҙе яуға күтәр!

— Тыңлайым!..

Субәдәй баһатур хан тирмәһенән сығыуға борҙо уйналды һәм барабандар ҡағылды.

Оло сиреү, саң-туҙан борҡотоп, йәнә ҡуҙғалды...

Шул заманда ил гиҙеп йөрөүсе минорет Иоани Плано Карпини яуға барған татарҙар тураһында ошондай мәғлүмоттәр яҙып ҡалдырған:

«Бүтән ҡәбиләләргә ҡарағанда, татарҙарҙың төҫө үҙенсәлекле. Уларҙың күҙҙәре бәләкәй, бер-береһенән алыҫ урынлашҡан, яңаҡ һөйәктәре йәйеңке, танауҙары йәлпәк, ыҙолоре тәпәшәк, һаҡалдары һирәк — тышҡы ҡиәфәттәрен сағылдырыусы төп билдәләр ошо.

Тпмаҡтарын аҫырарға хәле етһә, татарҙар күп бисә Мспоп йәшәргә хаҡлы. Бер әсәнән тыуған һеңлеләренән башҡа ҡатын-ҡыҙҙы бисәлеккә алырға рөхсәт ителгән. Күпсслек татарҙар яу ваҡытында буйһондоролған илдәрҙең пр-егеттәрен ҡырғандан һуң, тол ҡалған ҡатындарға өйләнгәндәр, ә хәллерәктәренә ҡатынды ҡиммәт хаҡҡа һатып алырға ла мөмкин булған.

Тптарҙар нәҙек һайғауҙар һәм сыбыҡ-сабыҡтан үрелгән түцорәк йорттарҙа йәшәгәндәр. Ул йорттарҙың ҡыйығы кеҙ менән ябылған; түбәһенең урта өлөшөндә ҡалдырылған тишектән төтөн сыға һәм эскә яҡты төшә. Сөнки осто һәр саҡ ут янған. Йорттар еңел һүтелгән һәм ф.ж саҡта яңы урынға күсереп ҡоролған.

Һугышҡа йәки берәү сәфәргә барғанда ла йыйылма Һпрттар арбаларға тейәп йөрөтөлгән.

Тптарҙарҙың төп байлығы мал: дөйәләр, эре мөгөҙлө мал, козо-нарыҡ һәм йылҡы. Улар шикелле күп мал аҫырап пн халыҡ бүтән ерҙә юҡ. Бер аллаға — һауаға инанған. Төрлө нәмәнән кешегә оҡшатып эшләнгән һындарға табынмалар, уларға ҡорбан килтерәләр. Малдар теүәл, улар өсөн һаҡланһын өсөн, үҙҙәре табынған идол аҫтына им-

сәккә окшаған әйберҙәр һалалар. Үлгән хандарын аллаға тинләп, уларҙың һөлдәһенә табыналар, ҡорбан килтереп һалалар; ҡояшты, айҙы, һыуҙы һәм ерҙе яраталар. Төрлө ырымға ышаналар, мәҫәлән, утка ҡағылыуҙы, ҡамсыны укка тейҙереүҙе, бала ҡоштарҙы тотоуҙы йәки уларҙы һуғыуҙы, бер һөйәккә икенсе һөйәкте ҡуйып һындырыуҙы, ергә һөттө йәки бүтән төрлө эсемлекте түгеүҙе гонаһ һанайҙар һ. б. Йәшен утын ҡатындарҙы ауырға ҡалдырыу есөн күктән төшкән утлы аждаһа тип һанайҙар. Ерҙәге шикелле икенсе донъя барлығына ышаналар. Күрәҙәлек ҡылыуҙы һәм сихырлауҙы йыш ҡулланалар. Мәҫәлән, ут барса яманлыктан таҙарта тип уйлайҙар. Шуға күрә, хандарға зыян булмаһын есөн, ситтән бүләк менән килеүсе илселәр менән кенәздәрҙе хан йорто ҡаршыһында янған ике ут араһынан уҙғаралар. Үҙ түрәләреп ихтирам итеп, уларға ҡаршылыҡһыҙ буйһонорға әҙер тороусы татарҙар кеүек бүтән халыҡ донъяла юҡ. Үҙ-ара һирәк ыҙғыщалар, һуғышмайҙар ҙа. Улар араһында бурҙар булмағанлыктан, йорттары менән кәртәләре бер ҡасан да бикләнмәй. йомоштары төшкәндә, бер-береһенә ярҙамлашалар... Араҡы эсергә яраталар. Ләкин иҫергән саҡтарыщда һүгенмәйҙәр һәм һуғышмайҙар».

Иоанн Плано Карпини татарҙарҙың яҡшылығы менән бер рәттән яманлығын да яҙған. Үҙҙәрен әллә кемгә һанап ҡыланған татарҙар башҡа халыҡ вәкилдәрен кәмһетеп ҡарауы Иоанн Плано Карпиниҙы бигерәк тә ғәжәпкә ҡалдырған. Бере-береһенә ҡарата кешелекле була тороп та, татарҙарҙың бүтән халыҡҡа ҡарата тупаҫ ҡыланышы, яуызлығы, хәйләләшеүе, алдашыуы, ялғанлашыуы, үтә һаранлығы, кешеләрҙе үлтерергә әүәҫлеге һәм айҙар буйынса йыуынмай бысраҡ йөрөүҙәре лә яҙылған.

Бына хәҙер, монгол нойондары, төмәндәре командалығындағы татарҙар сиреүе, Башҡортостан илендәге ҡалаларҙы ҡыйрата-ҡыйрата, алға табан ябырылып бара. Сөнкй улар башҡорттарҙан таланып алынасаҡ байлыктарҙың мал-тыуарҙары һанын икеләтә-өсләтә арттырырға һәм һоҡландырғыс ерҙәрҙе үҙләштерергә ашҡыналар. Шул маҡсат уларға тынғы бирмәй, һаман алға барырға рухландыра.

Байлыктары менән ғаиләләре сиреү артынан йөрөтөлгәнлектән, алыҫлашҡандан-алыҫлаша барған Татарстан иле есөн улар бошонмай. Башҡорттар ни тиклем күберәк ҡырылһа, уларҙың байлығы шул тиклем күберәк татарҙарға эләгәсәк. Бөйөк Сыңғыҙ хандың васыяты буйынса ғына ла, таланған илдең ун бер өлөшө монгол хандарына тәғәйенләнһә, ҡалғандары татарҙарға таратыла...

XX

Дошман яуынан ҡасып Ҡараҡыя ҡалаһына килгәс, Доржимән чжурчжэн ғалимы Удбар заманында башланған нығытмаларҙы тиҙ арала төҙөкләндерергә ҡушты.

Дошманға ҡаршы һуғышыу өсөн әҙерлек эштәре көнөнтөпөн барҙы.

Лғас ҡоймалар урынына һалынған таш стеналар бейеыПтелде. Уның тышҡы яғынан ҡазылған тәрән соҡорҙарға һыу тултырылды, ике ҡатлы тимер ҡапҡалар өҫтөндә Һпксылар өсөн махсус нығытмалар ҡоролдо, ә һөнәрселек цехтарында ҡоралдар эшләнде...

Ҡараҡыя ҡалаһы кешеләре генә түгел, дошмандан ҡағып килеүсе төрлө ырыу-ҡәбилә кешеләре менән бергә Оила-саға ла хәленән килгән эште башҡарҙы.

Лтаһы урынына Башҡортостандың ханы булып ҡалШП Дәржимән менән уның ғаиләһенә лә ял тәтемәне был мждорҙә.

«Үҙ мәлендә тейешле әҙерлек башҡарылған булһа, ошопдай ауыр хәлдә ҡалмаҫ инек. Ҡала кенәздәре меҢН ырыу-ҡәбилә башлыҡтарының тиҫкәреләнеүе, көстө бөрләштерергә теләмәүе, һәр береһе үҙ иркенә йәшәргә тырышыуы арҡаһында бәлә-ҡазаға тарыҡтыҡ. Татар-монголдар Башҡортостанға баҫып ингәс кенә хатаһын аңланмлпр. Әммә, мөмкинлекте ваҡытында файҙаланмағас, үкеп—үкенмә, дошманды ныҡлы әҙерлекһеҙ ҡаршыланыҡ», тип уйлап, Дәржимән һис юғында Ҡараҡыя ҡалаһын һаҡтан алып ҡалырға тырышты. Ҡараҡыя ҡыйратылмаһа, гарнизонланған көстө аҙаҡтан бергә тупларға мөмкинлек тыуасаҡ.

Доржимән кешеләрҙе нисек кенә ҡабаландырмаһын, ышыҡа ныҡлы әҙерләнерҙәй ваҡыт ҡалмағайны.

Юл ыңғайындағы ҡала-ауылдарҙы ер менән тигеҙләп, гсшелорҙе аяуһыҙ ҡыра-ҡыра, ел-дауылдай ҙур тиҙлектә иишлашты татар-монгол сиреүе.

Уларҙан ҡасып ҡотолған башҡорттар Ҡараҡыя ҡалаһына кнлеп тулды.

Урамдарҙа буш урын ҡалмағанлыктан, Дәржимән уларҙың малын ҡала тышына сығарырға ҡушты.

Уныщ бойороғо менән ризалашмайынса, кешеләр тауыш нүбпрҙылар:

• Малһыҙ беҙгә ни эшләргә?

• Малдан яҙыу — үлемгә тиң!..

һибайлы ир-егеттәр яҡынлащҡас ҡына, улар Дәржимән ҙц хандың ҡушыуына буйһонорға мәжбүр булдылар.

Доржимән ҡәлғә эсендәге нығытмаларҙы, һыҙма мыл-

тыктар менән уктарҙан атыу өсөн тәғәйенләнгән бойницаларҙы һәм башняларҙы тикшереп сыкты. Шунан һуң бер аҙ тынысланып, хан һарайындағы ғаиләһе эргәһенә кайтты.

Акман менән Токманды косаклап, танһығы канғансы һөйҙө лә тамак туйҙырырға ултырҙы ул.

— Бисәкәй, калала һуғыш башланғанға тиклем, әсәйем менән кәйнәмде һәм балаларҙы хәүефһеҙ ергә алып кит.

— Хәүефһеҙ ер кайҙа бар? — тип һораны Аксабикә.

— Тау-ташлы урманға барығыҙ.

— Караҡыя нығытылғандан һуң да, ҡуркыныс бөтмәвеме ни?

— Ваҡиғаның кетөлмәгәндә катмарланыуы ихтимал,— тине Дәржимән, мөмкин тиклем тыныс күренергә тырышып. — һаҡланғанды һаҡлармын, тигән Аллаһы тәғәлә.

— Әсәйемде, кәйнәм менән балаларҙы Шәғәйеп утарына алып барып урынлаштырам да, үҙем калаға кире кайтам, — тине Аксабикә.

— Уларҙың яңғыҙын калдырыпмы? — тип һораны ла, Аксабикә баш каккас, Дәржимән асыуланды. — Дошманға каршы һуғышырҙай ирҙәр бөткәнме ни, һинән башка?

— Бөтһә-бөтмәһә лә, мин һинең менән бергә булырға тейеш!

— Акылһыҙланма, бисәкәй!

Акман менән Токман да, тиҫкәреләнеп, шаулаштылар:

— Әсәйем урманда калырға теләмәгәс, беҙ ҙә бында калабыҙ!

— һуғышты күргебеҙ килә!..

Шунда ғына Аксабикә урманда калырға һәм калала һуғыш тамамланғас та кире әйләнеп килергә ризалашты.

Юлға әҙерләнгән сакта, икәүҙән-икәү калғас, Аксабикә иренә һыйынды.

— Кара яу башланғаны бирле һин мине бар тип тоғмайһың! Исмаһам, хәҙер, балалар килеп инмәҫ элек, бер косакла!

— Бушамайым бит, бисәкәй!

— Минең бисә икәнлегемде онотоуың килешмәй, — тип Аксабикә ишеккә табан ыңғайланы.

Ғаиләһен урманға оҙаткас, Дәржимәнгә капыл күңелһеҙ булып китте. Аңлайышһыҙ юкһыныу тойғоһон енергә тырышып, ул тыуған иле яҙмышы тураһында уйланы. Караҡыя калаһын кыйралыштан ҡоткарып булырмы, юкмы? Үҙе менән берәй яман хәл булһа, тарҡауланған көсто кем берләштерер? Инәһе үлһә, бал ҡорттарының күсе лотошлай кырыла. Башлыктары булмаһа, кешеләр ҙә, бал ҡорто күсе шикелле, кырыласаҡ. Иҫән ҡалғандары ла, дошман сиреүе кешеләре менән бергә буталып, үҙ йоҙон, телен, ғөрөф-ғәҙәтен юғалта... Башҡорттарҙың төп болоһе — хан власын тыныс ваҡытта танырға һәм уға буйһынырға теләмәүҙә. Шунлыктан калалар менән ырыу-кәбилә тарҡау йәшәне, бөтөн бер көс булып тупланырға Олғормәне...

— Кара яу!

— Кара яу яҡынлаһа! — тип кыскырышҡан тауыштарҙы ишеткәс, Дәржимәндең тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте.

Ул бағауылдар торған башняға күтәрелде.

Ялбыр яллы, кыҫка тояҡлы, тәпәшәк аттарға атланған татарҙар, кара болоттай бөтә ерҙе иңләп яҡынлашыуын күргәс, Дәржимән был юлы ла алыш ҡотолғоһоҙ икәлегеп аңланы.

— Уктарығыҙҙы йәлләмәгеҙ, атығыҙ, — тип ул керешкән һалынған уғын ысҡындырҙы.

Упыҡ артынса бүтәндәр ҙә ук-һаҙаҡ, кылыс-һөңгө менән ҡоралланған дошман һыбайлыларына төбәп ата башланы.

Алғы рәттәге бер нисә татар эйәрҙәренән ҡолап ҡалды, ҡалғандары, сабып барышлай, ҡаланы һаҡлаусыларға ҡаҙаре уктар яуҙыра башланы.

Кпла тышындағы тәрән соҡор аша уҙа алмағас, дошман һыбайлыларын ситкә табан ҡайырҙы, йәйәүлеләр һыуҙы соҡор аша сығыу өсөн күпер төҙөргә әҙерләнде. Әммә улар соҡорға яҡын ебәрелмәне, һағыҙаҡ шикелле оса аи башҡорт уғы тейеп, кырыла торҙолар.

Алыш ҡараңғы төшкәс тә баҫылманы.

Сыралар яктыртылды.

Опрсүенең мәғәнәһеҙгә ҡыйралырынан ҡуркып, Субәҙәй һпжүмде туктатты.

Пксисе көндө, Батый хан ҡушыуы буйынса, Караҡыя ғ пиһыи һуғышһыҙ буйһондорорға теләп, Субәдәй Дәржимән меиән һөйләшеү башларға мәжбүр булды. Һөйләшеүҙең кнлешеүҙең төп шарты: Батый ханға баш һаласаҡ башҡорттар бүтән илде буйһондороуҙа татар-монголдарға ярдамлашырға, уларҙың хужалыктарында ҡол вазифаһын үтәү осөн һәр ике ғаиләнән бер кыҙ йәки тол ҡатын бирергә тсйештәр. Унан тыш, кешеләрҙән даими рәүештә һалымды Батый ханға, уның ҡатындарына, балаларына, төмәндәренә, нойондарына, мең һәм йөҙ башлыктарына тапшырырға бурыслылар.

Оубодойҙең талабы Караҡыя калаһындағы ырыу-кә-

башлыктары, кенәздәр һәм дин әһелдәре тарафынан билә кирә каһылғас, көсөргәнешле тынлык урынлашты.

Татарҙар ниңә- шымды? Ҡараҡыя ҡалаһын ҡалдырып, артабан китергә ниәтләнә торғандарҙыр? «Юҡ, бәлки, һәммәһе үҙ урындарында. Арттағыларҙы көтә торғандарҙыр, ахырыһы», —тип уйланы Дәржимән.

Алыш алдынан ял биргән булғандар икән яугирҙарына.

Тештән аҙаҡ дошман сиреүе яғында етеҙ хәрәкәтләнеү һиҙелде һәм улар, уҡтарҙан ата-ата, йәнә һежүмгә ташландылар.

— У-р-ра-а-гх!..

Ҡаланы һаҡлаусылар ҙа уҡтарын . йәлләмәне. Әммә кешеләрҙең күпләп ҡырылыуына иғтибар итмәгән дошман сиреүенең ҡыҫымы кәмемәне.

Һыулы соҡорҙар аша сығырға өлгөргән дошман һуғышсылары ҡәлғә стеналарына күтәрелергә маташты. Ҡаланы һаҡлаусылар уларҙы ҡайнаған һыу, дегет шыйыҡ менән ҡойондорҙолар, өҫкә күтәрелгәндәренең башсаһын ҙә саптылар, һөңгөләр менән сәнсеп үлтерҙеләр.

Дошман ҡыҫымы шунда ла кәмемәне. Ҡырылғандары урынына икенсе, өсөнсө, дүртенсе... тулҡындағы һуғышсылар туҡтауһыҙ өҫтәлә торҙо.

Тиҙ арала төҙөлгән күперҙәр аша һыулы соҡорҙарҙың яҡ ярына сығарылған дошмандың махсус таш ватҡыс машиналары ҡәлғә стеналарын соҡоно, таш ырғытҡыс машиналары ла ҡоторондо...

Иң көсөргәнешле, хәл иткес минутта Дәржимән ҡажрэкән ғалимы Удбар ярҙамында эшләнелгән дары тултырылы көршәктәрҙе бырғытырға ҡушты. Улар гөрһөлдәп ярыла башлағас, уңышлы һежүм итеүсе дошман һуғышсылары араһында паника ҡупты.

Ҡуйы төтөн Дәржимәнгә һуғыш барышын күҙәтергә ҡамасауланы.

Утлы көршәктәр гөрһөлдәп ярылыуы баҫылғас та, дошман сиреүе ҡыҫымы ҡабаттан көсәйҙе.

Бер тирәлә үрһәләнгән күмәк аттарҙың ер һалып китеү аҙәүе, яралыларҙың ынғырашыуы, һыҙма мылтыҡтарҙан атҡан тауыштарға ҡушылып, көсергәнешлекте тағы ла нығыраҡ арттырҙы.

Һуғыш майҙанын ҡалдырып татарҙар артҡа сигеноп, ҡапҡа тышына сабышып сыҡҡан башҡорттар башлағас, уларҙы тураҡланылар ҙа, ҡәлғә эсенә инеп бикләнделәр, ҡаланан алыҫлашыу хәүефле, хәйлә менән ҡасып дошман засадаһына эләгеү ҡурҡынысы бар.

Бығынлап та, татар-монголдар юрамал ҡаскан

лидар икән. Улар башҡорт егеттәре артынан ҡабаттан ырғылдылар. Әммә был юлы, ҡәлғә стеналарына яҡын ылмәйенсә, ҡажрҷжәндәрҙең шыйыҡса тултырылыуы тиҙ ҡатылануса уҡтарын осора башланылар, мәйеттәрҙең ҡалынан киҫеп алынған майға ут тоҡандырып ташланылар. Шытырлап янған кеше майы тиҙ ялҡынланды һәм ҡала и ғмдогс ағас нығытмаларҙы утҡа солғ.аны.

Огена артына ышыҡланған башҡорттар, әҙәйә барған һуғыш ҡорамалдарын һаҡларға тырышып, тауыш-тынһыҙ ғалдылар. Оҙон баҫҡыстар ҡуйып стенанан күтәрелә башланғас иыпа, уҡтар яуҙыра-яуҙыра, ҡылыс-һөңгө менән алға ташландылар һәм алыш ҡабаттан көсәйҙе.

Дошман яугирҙары күпләп ҡырылды.

Корпҡыя ҡалаһын һаҡлаусылар сафы ла ныҡ һирәгәйҙе.

Похеткә ҡаршы, ҡояш байыр ваҡытта татарҙарҙың ҡыҫымы кәмене. Ҡәлғәнән алыҫыраҡ ергә китеп, улар ялға уҡланы һәм кискә тамаҡ туйҙырырға әҙерләнде.

Ғожәп хәл, татарҙарҙың һежүме икенсе, өсөнсө, дүртенсе көндә лә ҡабатланманы.

Бөтөн ер тып-тын.

Гптар-монголдар Ҡараҡыяны ҡалдырып киттеләрме ыны? Юҡ, дошман яғындағы күмәк уттарҙың һәр кисте ҡабынланып яныуынан күренеүенсә, ҡала һаман ҡамауҙа.

Дошман һежүменең ҡабатланмауы сәбәбен асыҡларға ҡырышып, Дәржимән бер нисә кешегә ҡапҡа тышына сығырға ҡушҡайны, ҡаршы яҡтан уҡтар яуҙыра башланыуҙар. Тпмәк, улар бер ҡайҙа ла китмәгән. Башҡорттарҙың ғәҙәттә баш һалырға теләк белдереүен көтә торғандарҙыр.

Калапы һаҡлаусыларҙың аслыктан ҡырылыу ҡурҡынысы тыуғас, Дәржимәндең ҡул ҡаушырып тик ултырмһы кплмәне. Ул ҡалалағы барлыҡ көстө төньяҡ ҡапҡа ғәләндә тупланы һәм, дошман ҡамауын йырып сығып, рмапга табан барырға бойорҙо.

Кпрацғы төшкәс тә, ҡапҡа тәңгәлендә тупланған башҡорттар ҡаланы ҡамауҙа тотоусыларға аңғармаҫтан ташиндылар. Йыйылма йорттар эсендә ҡатындары һәм балаһы менән ял итеүсе татарҙар йоҡо аралаш аңына ҡайтҡас, башҡорттар ҡамауҙы йырып сығырға өлгөрҙөлөр.

Урманға етеп туҡталғас, алышта әсиргә алынған йөҙ ғәскәрбашынан Дәржимән һорау алды. Шунда ғына татарҙарҙың өсөн һежүм итмәү сәбәбе асыҡланды. Батый Ш Ҡараҡыя ҡалаһында оҙаҡ торорға теләмәгән. Ҡаланы башҡорттарҙың бирелеүен көтөргә ҡушып, егерме

мең кешене берләштергән ике төмәнде ҡалдырған да сығыш яһаған. Иртәгәһе көндөң таңында Ҡараҡыя ҡалаһының ер менән тигеҙләнеүе тураһында белгәс, Дәржимән күнел төшөнкөлөгөнә бирелде. Сөнки Башҡортостандың баш ҡалаһын ҡыйралыштан ҡотҡара алмауға ул үҙен ғәйепле тойҙо...

XXI

Башҡортостанда «тәртип» урынлаштырыу һәм һалым йыйҙыртыу өсөн ҡалдырылған төмәндәр ышанысын аҡламауын ишеткәс, Батый хандың асыуы ҡабарҙы.

— Ҡараҡыяны ҡыйратыу менән генәме ни, башҡорттар ҡамауҙы йырып ҡасҡас! Улар беҙҙең тылда тынғы бирмәйәсәк! Башҡорт ханының башын киҫеп минә килтермәһәләр, ҡаты язалаясаҡмын, — тип Башҡортостандағы нойондарына сапҡындарын ебәрҙе лә Субәдәй баһатурҙы ҡабаландырҙы:

— Сиреү ниңә яйланы? Төмән башлыҡтарын ашыҡтыр!..

Был юлы ла Сыңғыҙ хан заманындағы тәртипте боҙорға теләмәне. Ул, үҙенә буйһондороласаҡ кешеләрҙең ҡотон алырға, уларҙың рухын һындырырға, ҡаршылашыуһәләтлеген юҡҡа сығарырға ниәтләнеп, шымсылары менән сауҙагәрҙәрен сиреүҙән алға ебәртте. Улар татар-моңғолдарҙың еңелмәҫ, ҡеүәтле көсөн данланылар, башҡорттарҙың ҡалалары тулыһынса ҡыйратылыуы, ҡаршылыҡ күрһәтергә маташыусы етәкселәре язалап үлтерелеүе һәм сиреүҙәре юҡҡа сығарылыуы хаҡында хәбәр тараттылар.

— Ҡасып ҡотолмаһағыҙ, берегеҙ ҙә иҫән ҡалмаясаҡ, — тип оран һалды улар.

Дошманға ҡаршы тороҙай көс Башҡортостанда ҡалмауын ишетеп ҡоттары алынған кешеләр, барлыҡ байлыҡтарын ҡалдырып, үлемдән ҡасып ҡотолорға тырышты.

— Ҡара яу килә!

— Ҡара яу бер кемде лә аямай, һәммәһен язалап үлтерә, ҡатын-ҡыҙҙы мәсхәрә итә, бала-сағаны сит илгә һатта! — тип улар бер-береһен ҡурҡытты һәм хәүефле ерҙәнйәһәтерәк китеп ҡалырға маташты.

Әммә алыҫҡа ҡасып ҡотола алманылар. Ҙур тиҙлектә килеүсе дошман сиреүе ҡыуып етеп, паникаға бирелеүселәрҙе тураҡлай-тураҡлай, артабан ябырылды.

Субәдәй менән Джэбэ командалығындағы корпустар, болғар-башҡорт сиреүенең берҙәм ҡаршылығына осрап,

Һолғар иле сигенән кире ҡыуылғайны...[1] Хәҙер, Башҡортостан ҡыйратылғас, яусыл булмаған аҙ һанлы болғар-төрки ҡыпсылыҡ күрһәтә алмаясағын аңлап, Субәдәй баһатур уҙси ышаныслы тотто.

Докин сиреүҙең уңышлы һөжүм итеүе Монгол иленең Көйөк хпиы Үгәҙәйҙең Көйөк исемле улына, оҡшаманы. Ул, Көйөк хан вариҫы булараҡ, Батый ханды һанға һуҡмаһынса, сиреү эшенә ҡыҫылды һәм ошоғаса буйһондорелмаған ерҙәрҙе үҙенең хеҙмәте тип күрһәтергә тырышты.

Батый ханды сиреүҙән ситләштереү өсөн, Көйөк хан Субәдәй баһатурҙы үҙенең яғына ылыҡтырырға тырышты һәм уның ярҙамында үҙен яу хужаһы итеп танытырға теләне.

Үҙ планы һыйыша алмаған ике хандың ыҙғышыуын Субәдәй баһатур иғтибарға алманы. Ә.ҙаҡтан, Батый хан менән Көйөк хан араһындағы мөнәсәбәт нык киҫкенләшеп, Субәдәй Батый ханды яҡланы һәм уның ҡушыуына буйһонасағын асыҡ әйтте.

Көйөк хандың бүләген дә, ҡыҫымын да кире ҡағып, Субәдәй баһатур сиреүгә бәйләнешле мәсьәләләрҙе Батый менән бергә хәл ҡылды.

Субәдәй баһатур, сиреүҙең Баш командующийы булараҡ, һор эште белеп эш итте. Төмәндәре менән бәйләнеш оешоу өсөн тәғәйенләнгән сапҡындар килтергән яңылыҡ, иғтибар менән тыңланы. Алышта ҡыйыулыҡтар күрһәткән лугирҙарын бер ҡасан да иғтибарһыҙ ҡалдырманы. Батырҙы маҡтаны, йөҙ, мең башлыҡтары итеп үрләтте, ә иң юлорсиә дархан[2] тигән иң юғары исемде бирҙертеүгә иреште, яйы тура килгәндә Батый хан менән асыуланышыуҙан да ҡурҡманы.

Йор мәлде Батый хандың нахаҡтан ябай һуғышсыларҙы комһетергә маташыуын ишеткәс, Субәдәй баһатур уға ғәҙеллеҡлыҡ белдерҙе:

Яугирҙарҙы рәнйетеүең миңә һис оҡшамай. Һинең кеүек, Көйөк Сыңғыҙ хан, бер ҡасан да ябай һуғышсыларҙы кәмһеткәне булманы. Ул һуғышсыларҙы түрәләр араһында ялағайлана, ярамһаҡлана белеүҙәренә ҡарап түгел, ә алышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн баһаланы. Сүл хундарға[3] маҡтаулы «дархан» исемен биргән саҡта Орхлн-Шира ошоғаса кем булды? Тайчиут Тодеге араты түгелме Ипдай менән Кишлик кем булды? Цереновскийҙың ғәрһеҙ ҡараусы ябай бер әҙәм ине. Хәҙер һеҙ минең ин

[1] СМИЗО, т. 1, 27, 28-се биттәр.
[2] *Дирхан* — тархан.
[3] *Сүл хун* — ирекле арат.

якын кешеләрем. Дархан исемемедән кинәнегеҙ»[1] — тип әйткән һүҙҙәре әле лә хәтеремдә...

Бөйөк олатаһы Сыңғыҙ исеменән ябай һуғышсыларҙы яҡлаған Субәдәй баһатурҙың хаҡлы икәнлеген аңлап, Батый өндәшмәне..

Ғалимдарҙы, укымышлы кешеләрҙе, һөнәрселәрҙе, атаҡлы дин әһелдәрен, мәҙәниәт-сәнғәт кешеләрен яҡлағанда ла Субәдәй баһатур Сыңғыҙ хан исеменә һылтанды һәм Батый хандың уларға ҡарата иғтибарлы булыуын теләне.

Сыңғыҙ хан менән бергә бик күп илдәрҙе буйһондороп, уға ғүмере буйы тоғро хеҙмәт иткән Субәдәй баһатур эргәһендә саҡта Батый хан да үҙен ышаныслы тотто һәм олатаһының васыятын йәһәтерәк тормошҡа ашырырға ашҡынды.

— Башҡортостандағы темәндәрҙән ниндәй хәбәр бар?— тип һораны ул.

— Янылыҡтар ишетелмәй. Башҡорттарҙың ырыу-ҡәбиләләре берәм-һәрәм ҡыйратылып, уларҙың байлыҡтары Ҡараҡором дәүләтенә оҙатыла...

— Башҡорт ханы Дәржимән һаман иректәме?

— Иректә, — тине Субәдәй баһатур.

— Ҡайҙа ҡасып йөрөй икән?

— Дәржимән бер ҡайҙа ла ҡасмаған. Урмандағы тарҡау-тарҡау көстө берләштереп, беҙҙең төмәндәргә аңғармаҫтан һөжүм яһай, ти.

— Асығауыҙҙар! — Батый хандың асыуы ҡабарҙы. — Ҡараҡыя ҡалаһы ҡамауын йырып, урманға ҡасҡан башҡорттарҙы ҡырыуҙы ойоштороpға ебәрелгән Буралдай баһатур ҙа минең ышанысымды аҡламаны!

— Дала шарттарында һуғышырға күнеккән Буралдай баһатурҙың нукерҙарыша тау-ташлы урманда йәшәгәи башҡорттарҙы ҡырыуы еңел түгел. Уның еҫтәүенә, башҡорттар ваҡ-ваҡ отрядтар менән һөжүм итәләр. Аңғармаҫтан килеп сығып, һуғышсыларыбыҙҙы тураҡлай-тураҡлайҙар ҙа, ағас араһына инеп, эҙһеҙ юғалалар...

— Буралдай баһатурға ярҙам ебәрәбеҙме әллә?

Батый хандың тәкдиме менән Субәдәй баһатур ризалашманы:

— Төп көстө тарҡауландырмайыҡ. Башҡортостанда тәртип урынлаштырыу өсөн ике төмән еткән.

Батый хан ныҡышманы.

Ул сиреүҙе нисек кенә ҡабаландырыуына ҡарамаҫтан, йәйге-айҙар үтеп, сентябрь килеп еткәнсе, торҙо. Иртәнге томан таралғас, көндөҙгө тәбиғәт күренеш

үҙ һоҡландырғыс һәм кинәндергес булып тойолдо Батый ханға. Ҡояш нығлы йылытмаһа ла, уның алтын нурҙары ер йөҙөн яҡты сағыу яҡтырта, ер йөҙөнә йәм бирә. Батый хандың баш осо тәңгәлендәге болот өйөмө таралғас, зәп-зәңгәр күк йөҙө ышҡылып йыуылған тап-таҙа быяланы хәтерләтте.

Кис, сиреү ялға туҡталғас, асыҡ ҡалҡыулыҡта ҡорол-ған хап тирмәһеиә Батыйҙың әсәһе Ори-Фуджин килеп инеп,

һиҙә бисәлеккә алынған башҡорт ҡыҙы яман ҡы-ланмаҫ-тине ул, аптырап. — Мине һанға һуҡмай, тамағы-нан ашамай, эсмәй ҙә... Ҡол ҡатындар уның эргәһенә бар-ып, тошләшә йәки һуғыша...

Лҡылынан шашҡанмы әллә ул? — тип һораны Ба-тый хан.

Тоҙҙә мин дә шулай уйлағайным. Аҙаҡтан аҡылы ентекләп пкәнлегенә инандым. Ислам динен тотмаған баш-орт ҡыҙҙары, үҙ иркенә йәшәргә һәм ир һайларға өйрән-електән, баш-баштаҡ ҡыланырға ғәҙәтләнгәндәр, ти.

Эргәмә алып килһең, бәлки, эйәләшер?

Белмәйем шул. — Ори-Фуджин баш сайҡаны. — ЛОШсрҙәйгә бер ҙә оҡшамаған. Түшәгеңә юлатһаң, үҙе-пмаилыҡ ҡылыуы ихтимал!

Былай булғас, ҡалайтырға? — Батый хан да апты-ИИЫ.

Ул ҡыҙҙы ситкә һатырға ҡуш йәки берәй төмәнеңә ҡунаҡ пт.

Башҡорт ҡыҙын бер кемгә биргем килмәй, үҙемә ятырам!

Утыҙ ике бисә яңғыҙыңа етмәгәнме ни?

Буйһондоролған һәр мәмләкәттән бисә алырға те-ешем, — тине Батый хан еңмешләнеп. — Миңә башҡорт ҡыҙы кәрәк!

Бик теләгәс, Дәржимән хандың ҡатынын бисәлеккә ырға тырыш. Уны үтә һылыу, бик тә уңған, тиҙәр.

Ярар, һинеңсә булһын, әсәй: был башҡорт ҡыҙын ең ыуҡка һатырбыҙ. Ә үҙемә Дәржимән хандың ҡатынын ргоп килтерергә ҡушам, — тип Башҡортостандағы нойоны Буралдай баһатурға сапҡын ебәргәс кенә тамам тыныс-ынған Батый әсәһе ҡарамағындағы махсус ылауҙарҙа ентеүсе ҡатындарының береһен — Зөбәй[1] исемле татар ха-ымды аҡ тирмәһенә саҡыртты.

Иҙҙәр ҡулы теймәгән йәп-йәш Зөбәне күргәс, Батый

[1] Батый хандың әсәһе, ҡатындары һәм бутән ҡатын-ҡыҙҙар ҙа ҙемдәре менән бирелде.

Козин С. А. Сокровенное сказание. 219—167-се битте ҡ.

хан башкорт кыҙы хаҡында онотто һәм төндөң уҙғаның һиҙмәй ҙә ҡалды. Тынғы белмәгән Субәдәй баһатурҙың ҡушыуы буйынса даңғыр-доңғор килгән барабандар менән борғо тауыштарын ишеткәс кенә, йәш ҡатыны менән ләззәтләнеүенән тыйылырға һәм түшәктән торорға мәжбүр булды.

Ул аш бешереүсе әҙерләгән ризыкты тиҙ генә ашани ла тирмә ишеге алдында көткән Субәдәй баһатур эргәһенә сыҡты.

— Сиреү әҙерме?

— Әҙер!

— Ҡуҙғалайыҡ, — тине Батый хан.

Субәдәй баһатурҙың ҡушыуы буйынса, нукерҙарҙы алға барырға өндәп, борғо яңғыраны.

Оло сиреү ҡуҙғалғас та, уға эйәреп арттан барыусы поход йорттары тейәүле майһыҙ арба тәгәрмәстәре шығырланы, күмәк мал көтөүе ығы-зығы килеп баҡырышты...

Унар меңләгән нукерҙарҙы берләштергән сиреү, ер өҫтөн иңләп, алға, һаман алға табан йән-фарман сабышып барыуын белде.

Күмәк аттар тояғы аҫтындағы ер гөүләне, ҡалтыранды. Төндө йоҡоһоҙ уҙғарған Батый ханға һәммәһе тоноҡ, мәғәнәһеҙ һымаҡ күренде. Һуғыш аллаһы һаналған күк айғыр — Сульдә лә, шамандары менән вәзирҙәре лә уны бөгөн ҡыҙыҡһындырманы. Берәй ерҙә ҡалып, танһығы ҡаңғансы йоҡлағыһы, яЛ иткеһе килде уның. Әммә уның теләгенә буйһонып алға барған сиреүҙе туҡтатыу ҙа, ҡунаш артта тороп ҡалыу ҙа мөмкин түгел...

Тешкә ялдан аҙаҡ Батый хан эргәһенә Субәдәй баһатур яҡынлашты.

— Сиреүҙең һул ҡанаты Иҙелгә, уң яғы Камаға яҡынлашты, ә яр буйындағы барлыҡ болғарҙар Сәйен Иоргкй ҡасып бөткән, — тине. ,

— Бер кем дә ҡалмағанмы?

— Ҡалмаған. Уларҙың ярты-йортоһо ғына урылған игендәре, малдары, батмандар тулы солоҡ балдары, йәнлек тиреләре менән башҡа байлыҡтары ла шул көйе тороп ҡалған.

— Байлыҡтары ҡалғас, үҙҙәренең кәрәге юҡ, — тинс Батый хан, — беҙҙән ҡасып, барыбер ҡотола алмаясаҡтар. Болғар иле ҡыйратылһа, Европаға ла туранан-тура гал асыла!

— Ә беҙ болғарҙарҙан ҡаласаҡ байлыҡ менән ҡышты ҡайғы-хәсрәтһеҙ Сәйен Иортта уҙғарасаҡбыҙ, — тине Субәдәй баһатур теләктәшлек белдереп.

Болғарҙарҙың бында ҡасандан бирле йошәүе билгеһеҙмер?

Субәдәй баһатур уйға ҡалыбыраҡ торҙо.

Ғолммдарҙың раҫлауынса, болғарҙар бик боронғо заманда Каспий һәм Ҡара диңгеҙ тирәһендәге далаларҙа йәшәгән. Ләкин, хазарҙар ҡыҫырыҡлай башлағас, болғарҙың бер өлөшө Балҡан яғына киткән, ә ҡалғандары Иҙел — Кама йылғалары буйына килеп төпләнгән. Балҡанға барып урынлашҡандары — славян телендә, ә Идел Кама ярҙары буйындағы болғарҙар сыуашса һөйләшә, ти. Мәҫәлән, ҡыҙ тигән һүҙ болғарса — «хир», ә сыуашса «хер» тип атала икән[1]. Сыуаш менән болғар телдәре араһында айырма юҡ та тиерлек. Улар — туғандаш...

Ләкин бармы-юҡмы икәнлеген ҡайҙан беләһең?

Болғар иленә яу менән барырға әҙерләнгән саҡта бер Ильим һөйләне. Ул күп телдәрҙе ейрәнгән, — тине Субәдәй баһатур.

Болғар иле юғары мәҙәни үҫешле илдәр рәтенә инә.

Эйе, билдәле мәғлүмәттәр буйынса, Болғар иле ошо көндәрҙә юғары мәҙәни үҫешенә зйә булған. Болғар илендә йәшәгән ин ябай, ярлы һаналған кешеләрҙең дә белемгә ихтыяжы мәҙрәсәләрҙә уҡып белем ала һәм ҡупшы ғилемдәр йөрөйҙәр. Сауҙагәрҙәрҙең һөйләүенә ҡарағанда, Сәйен Йорттағы мәсет-мәҙрәсәләр яҡшы итеп йыһазланған. Шрилгап. Уларҙы матурлау өсөн иң аҫыл таштарҙы Башҡортостандан — Уралдан ташыткандар. Сәйен Йортта йәшәүселәрҙең ейҙәренә һәм мунсаларына ла торбалар аша ҡыш, һалҡын һыу үҙғарылып, бассейндар менән фонтандар эшләтелгән, ти.

Полғарҙарҙың тормошонан көнләшеп, Батый хандың улы пуы ҡабарҙы:

Окиот донъяһында уларға оҙаҡ йәшәргә ҡалманы!..

---

[1] Горкиәнең күренекле ғалимы, Анкара университетының кафедра мөдире, төркн телдәре буйынса белгес, ете монография авторы профессор Толғәт Текин раҫлауынса, боронғо болғар теленең хәҙерге сыуаш теле икәнлеге асыкланды. Урындағы халыҡ ғәҙәтен, ишетеп тәлсен үҙләштергән татар теленең болғарҙарҙыкына бер ниндәй ҙур ҡатнашлығы юҡ. Татар теленең төүге төп формаһы — «Алтын Урҙа» теле. Ҡыпсаҡ теленән өс ҙур төркөм барлыҡҡа килгән. Беренсеһенә — үҙ-ара ҡатнашыу һәҙәмтәһендә башҡорт һәм татар, икенсеһенә — ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, нуғай, өсөнсөһөнә — ҡарасай-балҡар, ҡараҡалпаҡ һәм башҡа телдәр инеүен раҫлай төрөк ғалимы. Ҡаҙаҡ менән ҡарағай телен бер тип әйтеп булмаған һымаҡ, хәҙерге башҡорт менән ҡыпсаҡ тилси ҡушып ҡарарға маташыу ҙа дөрөҫ түгел. Ике тел — ике ...

Донъяла һәммәһе 22 төркн әҙәби теле барлығы билдәле.

Иҙел яры буйына етеп, татар-монгол сиреүе ялға туҡталды.

Аттарҙы туғ"айлыҡтарҙағы ҡурпы үләнен ашатырға ебәргәс, кешеләр' арбаларға тейәп йөрөткән тирмә-ҡыуыштарын ҡорҙо, ҡатын-ҡыҙ тағандарға аҫылынылы оло ҡаҙандарҙа йылҡы-һарыҡ итен бешерҙе, сәй ҡайнатты, балаҫағаһы һәм малдары менән аҙапланды.

Субәдәй баһатурға ғына ял тәтемәне. Ул туҙан ҡунған шлемы менән өҫ кейемен сисеп таҙартты ла, йүнләп тамаҡ туйҙырып тормайынса, хужаһыҙ ҡалған өйҙәрҙең стена бүрәнәләрен ташытып, һалдар бәйләтте һәм төрлө яҡтан кәмәләр йыйҙыртты.

Башҡорттар ҡыйратылғандан һуң болғарҙарға ярҙам итеүсе ил булмаясағын аңлап, Субәдәй баһатур артыҡ бошонманы. Аҙ һанлы, яусыл булмаған болғарҙарҙыңҙ Иҙел яры буйында һуғышырға баҙнатсылығы етмәйәсәге мәғлүм.

Октябрҙең беренсе яртыһында кәмә-һалдарға тейәлгәи сиреүҙең беренсе төркөмө Иҙелдең икенсе ярына йөҙөп сыҡты.

Нойон Судай командалығындағы нукерҙар уң яҡ ярҙың ҡыуаҡлыҡтары араһында урынлашҡас, сиреүҙең төп көсө, урындарынан ҡуҙғалып, яр аҫтындағы кәмә-һалдарға яҡынлашты.

Дүрт тәүлек ваҡыт эсендә Иҙел аша сыҡҡан сиреү, алдан билдәләнгән маршрут буйынса барышлай, Болғарҙарҙың Биләр, Кернек, Жукотан, Сувар ҡалаларының көлөн күккә осороп, кешеләрен тураҡлай-тураҡлай, Сәйен Йортҡа — Бөйөк Болғар ҡалаһына табан ыңғайланы.

Стена тышында тороусы болғарҙар, татар-монгол сирҙүе яҡынлаша башлағас, ҡоттары алынып ҡысҡырышҡысҡырыша, таш ҡәлғә эсенә йәһәтерәк инеп ҡалырға тырыштылар. Бөтәһе бер ыңғай тығылғас, ҡапҡа аша уҙа алмайынса, бер-береһенә ҡамасауланылар. Ә арттағылар, уларҙы ҡабаландырып, өҙлөкһөҙ ҡысырыҡланы.

Дошмандың авангардтағы төркөмө күренгәс, болғар иле батшалары Боян менән Джик ҡәлғәнең тышҡы яғындағы һуғышсыларын контратакаға ташланылар.

Ике яҡ бер-береһенә ҡаршы барып бәрелгәс, һуғыш башланды.

Алдағыларға арттағылары килеп ҡушылып, һуғышҡатнашыусылар һаны күбәйгән һайын, көсөрпәнеш артты...

Алыш барышын ҡәлғә стеналарындағы бойҙҙҙ

һын альш, ҡапҡа тышына сығырға һәм Батый хан алдышда баш һалырға-мәжбүр булдылар.

Болғар иле батшалары Боян менән Джик һәм уларҙың яҡын кешеләре иҫән ҡалдырылды. Әммә Көнсығыш Европала беренсе осратҡан юғары цивилизациялы илдс Батый хан аяманы. Болғарҙарҙы нукерҙарынан талатыуҙы туҡтатмай, ҡатын-ҡыҙҙы уларға таратып бирергә, икенсс илдәргә ҡаршы һуғыштырыу өсөн йәштәрҙән махсус отрядтар ойоштороруға ҡушҡас ҡына, ул ялҡынға солғанған Сәйен Йорттоң имен ҡалған елөшөн һаҡлап алыу сараһын күрҙе.

Бөйөк Болғар иле ҡыйратылғас, мордва-мукшы, саҡсин, буртас, сириес-мари, арджан халыҡтары ла татар-монголдарға буйһондоролдо.

Әммә шунан һуң да күпселек халыҡ үҙ иле азатлығы өсөн сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы көрәште туҡтатманы.

Венгр монахы Юлиандың яҙмаларынан күренеүенсә, күпселек мордва кенәздәре, туған-тыумасалары һәм ғаиләләре менән дошманға буйһонорға теләк, белдереүҙәрено ҡарамаҫтан, кенәз Гентәр етәкселегендәге.отрядтар үҙ илс азатлығы өсөн көрәшеүҙе туҡтатманы.

XXII

Татар-монгол сиреүе һалҡын ҡышҡы айҙарҙы Иҙел буйы халыҡтарының йылы өйҙәрендә уҙғарҙы.

Батый хан өсөн ҡарағай бүрәнәләрҙән махсус йорт һалынды.

Уның әсәһе ҡарамағындағы ҡатындары менән балаларынан һәм туған-тыумасаһы Сәйен Иортта йәшәне, о Субәдәй баһатур Батый хан йортона ҡаршы торған әҙер торлаҡты һайланы. Ул, фатир хужаһы өгөтөнә бирелеп, мунсала йыуынырға, ҡайын миндеге менән сабынырға һом сәғәттәр буйы мунса эләүкәһендә ҡарт һөйәктәрен йылытып ятырға ғәҙәтләнде.

Әммә уға мунсала оҙаҡ кинәнергә тура килмәне, уның ҡартлығы менән иҫәпләшергә теләмәйенсә, һәр саҡ Батый хан саҡыртты. Ул Каспий диңгеҙе далаларына ебәрелгән төмәндәрҙән хәбәрҙәр бармы, юкмы икәнлеген һорашып, теңкәһен ҡоротто.

Каспий һәм Аҙау диңгеҙҙәре араһындағы далаларҙа йәшәүсе ҡыпсактар менән аландарҙың [1] ҡыйратылыуы менән нойон Чармаган командалығындағы нукерҙар Әрмән

[1] *Алан* — осетин.

поп Кавказдағы бәрелыҡ илдәрҙе буйһондороуы тураһында. Ослгәс кенә Батый хан бер аҙ тынысланды.

Яҙ яҡынлашты.

Тиро-яҡтағы ер-һыу ҡорой башлағас та, Батый хан кпрплтай уҙғарҙы.

Упда дейөм фекер тупланғас, ул урыҫ ерҙәренә һөжүм О.шларга бойорҙо.

Дүрт төркөмгә бүленгән сиреүҙең Иҙел йылғаһы буИЫидағыһы — Суздалгә, икенсеһе — Рязангә, өсөнсөһө — Воронежға, дүртенсеһе Дон йылғаһына табан йүнәлде.

Тптар-монгол сиреүе яҡынлашыуын ишеткәс, Рязань князе Юрий үҙенең Федор исемле улын Батый ханға вәкилдәр меиән ебәрҙе.

Вотый кенәз улын яғымлы ҡаршыланы, ашатты, алдынан кплгансы ҡунаҡ итте.

Фсдорҙың Епраксия исемле һылыу ҡатыны барлығын һиҙҙе.1шып белгәс, ҡыҫыҡ күҙҙәрен майландырып, Батый ханға Ш ягымлы йылмайҙы.

Ҡатыныңды миңә буләк ит.

Бәй... үҙемә кәрәк. Унан ҡилеп, дин ҡушмай ҙаһа. һмс юғын, миңә килтереп күрһәт, — тип ныҡышты Батый хан.

Спт-ят күҙҙәргә христиан ҡатындарын күрһәтергә ярамай.

Күрһәтергә яраймы, ярамаймы, уны бер кис үҙ түшәгендә ҡундырырға теләйем.

Улай ҙа гонаһ, — тине Федор. — Бик теләһәң, ҡатыңдың һеңлеһен килтерәм һиңә.

Миңә һинең ҡатыныңдан бүтәне кәрәкмәй. Ул баһадирҙар минекеҙе буласаҡ,— тип мәкерле йылмайып ажғырҙы Батый хан һәм, уның ҡушыуы буйынса, тирмә ишеге алдында торған палач Федорҙың йөрәген киҫеп-йолкоп сығарҙы.

Шул кендө Рязанде штурмлау башланды. Әммә Федордың ҡатыны Батый ханға эләкмәне. Епраксия, иренең ҡанҡа уон белгәс тә, кесе йәштәге Иоанн исемле улы менән биек теремдән [1] ташланып һәләк булды.

Миксатына өлгәшә алмағас, Батый хандың асыуы артты.

Рязанде ҡыйратырға, кешеләрен язалап үлтерергә,— шуларҙо, туҡталып тормайынса, төп көс менән Ока йылғаһы буйлап юғарыға табан ынғайланы.

Млпдимир ҡалаһынан Бөйөк кенәз Юрий Всеволодович

[1] *Терам* — боронғо урыҫ йортоноң өҫтөндә башня рәүешендәрәк ҡалҡыу аҫырым ҡоролма.

ебэргән ғәскәр Коломна эргәһендә ҡыйратылып, кенәз Роман Игоревич, воевода Еремей Глебович менән бергә бик күп ратниктар үлтерелгәс, бүленгән юлын Батый хас сиреүе дауам итте.

Воевода Филипп Нянко командалығындағы ратниктар ҡыйратылғас, баҫҡынсылар Мәскәүгә ябырылды.

Мәскәүҙе буйһондороу менән рухланған татар-монгол сиреүе, 1238 йылдың икенсе февралендә, Владимир ҡалаһының алтын ҡапҡаһы ҡаршыһындағы уйһылыҡҡа килеп тукталды.

Ҡаршылыҡһыҙ буйһоноуҙы талап итеп, Субәдәй баһатур Владимир ҡалаһының Бөйөк кенәзенә илсе ебәрҙе лә һуғышсыларына бер көнлөк ял бирҙе.

Хәрбн хеҙмәте өсөн жалованье алмай, һуғыштағы табыштар менән генә ҡәнәғәтләнгән татарҙарға ҡатындары һәм балалары эргәһендә ял итеүҙән дә ҡыуаныслы нәмо юк ине.

Уларға ғаиләһе менән мал-тыуары туҡталған һәр ер ватан һаналды.

Бына әле лә, тиҙ арала ҡоролған ҡыуыш-тирмәләрс эсенә ҡатындары һәм бала-сағалары менән бергә йыйылғас, ауыр яу ғазабын онотоп, улар ғанлә ғәме менән гено йәшәргә тырыштылар.

Сиреүенә ял биреүе Субәдәй баһатурға ла ҡыуаныс ине. Унар меңләгән тирмә түбәһенән урғылған төтөн ағымы менән һоҡланып, ул ошо күренеште йәйләүгә оҡшатты. Татарҙар бында мәңгегә килгәндәрме ни? Туған-тыумасалары һәм ғаиләләре бергә булғас, уларға шунан да оло бәхет юҡ...

Владимир кенәздәре Батый хан исеменән ебәрелгән ультиматумды яуапһыҙ ҡалдырҙы.

Алтынсы февралдең таңында татар-монгол сиреүе Владимир ҡалаһына һежүм башланы.

Икенсе көндө, таш ватҡыс машиналары ҡала стеналарын ҡыйратҡас, илбаҫарҙар ҡала кешеләрен аяуһыҙ ҡырырға тотондо...

Владимир ҡалаһы артынса урыҫтарҙың төньяҡ-көнсығыш ерендәге Ростов, Углич, Ярославль, Юрьев Польский, Переславль, Кенятин, Кашин, Тверь, Торжок, Дмитров, Волоколамск, Гордец, Кострома, Галич, Мерьский ҡалалары һуғышып алынғас, татар-монгол сиреүе Сит йылғаһы буйындағы кенәз Юрий Всеволодовичтың ғәскәрен тар-мар итте. Әммә Ока йылғаһы үрендәге Козельск ауылы кешеләренең ҡаршылығына осрап, хәрәкәтһеҙ торорға мәжбүр булды. Нойон Кадан менән Бури командалығындағы теләгән теләгән ергә ебәрелә.

ағы теләгән ергә ебәрелә. Козельск ауылы кешеләре буйһондоролдо.

1238 йылдың йәйге эсе көндәре.

Квйөк хан менән мөнәсәбәтен асыҡларға ниәтләнеп, Һнш(1 хан сиреүен ялға туҡтатырға ҡушты. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәте яҡшырманы, киреһенсә, кпсҡенләшкәндән-киҫкенләшә барҙы. Ҡөйөк хан, бөтөн монголдарҙың Бөйөк ханы Үгәҙәйҙең улы булараҡ, һуғышып олған барлыҡ ерҙәрҙе үҙенеке һананы һәм, сиреү менән Батый ханды буйһондорорға теләп, шау-шыу ҡуборҙы.

- Бетөн монголдарҙың Бөйөк ханы вариҫы мин! Урыҫтар мсиән ҡыпсаҡтарҙы еңеүсе лә мин! Шуға күрә һин, Батый хан, минә буйһонорға, баш эйергә һәм һәр телә-семдс ҡаршылыҡһыҙ үтәргә бурыслыһың, — тип ажғырҙы ул.

Уларҙың көн дә ыҙғышыуы сиреүгә кире йоғонто яһаған аңлап, Субәдәй баһатур Батый ханға тауыш ҡубормаҫҡа кәңәш итте. Аҙаҡтан, атаһының абруйына таянған Көйөк хан Субәдәй баһатур урынына сиреү башлығы итеп икенсе кешене ҡуйырға маташыуын белгәс, Батый хан асыуының сигенә етте:

- Сиреү башлығы итеп Үгәҙәй хан тәғәйенләгән Субәдәй баһатурға ҡағылыу түгел, тел тейҙерергә хаҡың юҡ!

- Субәдәй ҡарт, — тип ҡыҫҡырҙы Көйөк хан.

- Ҡарт булһа ла, барлыҡ енеүҙәребеҙ менән беҙ уға бурыслыбыҙ!

Бөйөк олатайым Сыңғыҙ хандың изге васыяттарын Субәдәй баһатурҙан башҡа ла бойомға ашырасаҡмын! Мин бетөн донъя хакимы буласаҡмын! Юғарыла — Бөйөк Хүк, ерҙә — Көйөк хан хужа тип әйтәсәктәр!

Пптый хан мыҫкыллы көлдө.

- Монголдарҙың Бөйөк ханы — һинең атайың, минең— ағайым Үгәҙәй түгелме ни? Барлыҡ мәмләкәттәрҙе буйһонороуҙы ул минә йөкмәтте. Шулай булғас, сиреү хужаһы

Койек хандың йөҙө ҡарайҙы.

— Хужа, имеш! Минә буйһоноуҙан баш тартһаң, һине ҡапҡылап ташлаясаҡмын, — тип ул көмеш һаплы ҡылысына Гюбеште.

Субәдәй баһатурҙың ҡоторғандары[1] Көйөк хандың янына арҡыры төшөп, уны ҡоралһыҙландырҙылар.

---

[1] Субәдәй баһатурға туранан-тура буйһоноусы кешеләрҙе «еңелгәстәр» һәм «ҡоторғандар» исеме менән йөрөткәндәр.

Монголдарҙың Бөйөк ханы вариҫы менән мөнәсәбәте боҙолоуын Батый хан ауыр кисерҙе.

Ул, аптырап, һәммәһен Үгәҙәй ханға яҙып ебәрҙе.

Август аҙаҡтарында Бөйөк Үгәҙәй хандан бер юлы ике яуап хаты алды Батый хан.

Үгәҙәй хандың беренсе хатында Батый хан менән Субәдәй баһатурҙың яу ваҡытындағы хеҙмәте оло баһаланһа, Көйөк улына уҡытылырға тейешле икенсе хатында ошондай һүҙҙәр яҙылғайны:

«Күренеүенсә, һин үҙеңде әлдә кемгә тиңләп маташаһың. Ағайыңа үсләшеп, үҙеңде берҙән-бер еңеүсе итеп танытырға тырышыуың — хата. Өйөңдән беренсе мәртәбә сығып та, әллә ниндәй оло эш башҡарған кеше һымаҡ ҡупырынаһың һәм тамағывды ярып аҡырынаһың. Урыҫтар менән ҡыпсаҡтарҙы буйһондорған ваҡытта бер генә урыҫты йәки ҡыпсаҡты үлтерә алмағанһың, хатта кәзә тояғын да эләктермәгәнһең бит һин!..»

Атаһының хатын уҡығандан һуң, Көйөк хан тыйнаҡланды. Әммә Батый ханға асыуы бөтмәне. Монголдарҙың Бөйөк ханы тәхетенә ултырһа, бәлки, үсен алыр әле. Ваҡыт бар, ваҡыт күрһәтер.

Батый хан менән Көйөк хандың низағы баҫылғас, татар-монгол яуы көньяҡҡа табан бик ҡыҙыу ябырылды.

Юл ыңғайында Переславль менән Черниговты һәм йәнә бер нисә ҡаланы емереп, илбаҫарҙар Ҡырымғаса еттеләр.

1240 йылдың ноябрендә Киев ҡалаһын һуғышып алғас, татар-монгол сиреүе Польшаға, Венгрияға, Дунай Болғарстанына, Молдоваға, Чехияға, Валахияға, Трансильванға баҫып инде һәм Европаның бөтән илдәренә хәтәр ҡурҡыныс тыуҙырҙы.

ИКЕНСЕ БҮЛЕК

I

1236 йылғы ҡара яу башҡорттарҙың ҡайғыһыҙ-моңһоҙ тыныс тормошон бөтөрҙө. Шул заманда башлап бик күп ырыуҙарға һуҙылған сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы көрәшә башланды.

Башҡорт ҡалаларының тотошлай ҡыйратылыуы, мәсет-йәмәселәрҙең яндырылыуы, мулла-ғалимдарҙың һәм белемле кешеләрҙең күбеһе ҡара яуҙа ҡырылыуы мәҙәниәт менән сәнғәт үҫешен юҡҡа сығарҙы.

Ошондай ауыр һәм ҡатмарлы шарттарҙа ваҡ-ваҡ төркөмдәргә бүленеп төрлө яҡҡа тарҡалған көстө ҡабаттан игрлоштереү һәм Башҡортостандағы дошман гарнизонына ҡаршы көрәшеү өсөн Дәржимән бөтә мөмкинлектәрҙе файҙаланырға тырышты.

Әммә һәр ырыу-ҡәбиләлә һалым йыйыусы баҫҡаҡтар менән уларҙың һаҡсылары шығырым тулы сәкта башҡорттарҙың көсөн берләштереү еңел түгел ине. Баҫҡаҡтарға ҡаршылыҡ күрһәтергә йәки урманға ҡасып китергә әҙерҙәшыусыларҙың ғаиләһе үлтерелде, йорт-ҡуралары яндырылды, малдары Монголияға ҡыуылды, иҫән ҡалдырылған ҡатын-ҡыҙ мәсхәрәләнде йәки ҡоллоҡҡа таратылды [1].

Пошҡортостандағы дошман гарнизонының төп бурысы М уҙ иркенә йәшәргә маташыусы башҡорттарҙы карателдар урынлаштырған тәртипкә күндереү, ырыу-ҡәбиләләрҙең ҡасаҡтарының «баш-баштаҡ» ҡыланышын бөтөрөү һәм һуғылым йыйыусы баҫҡаҡтарға ярҙамлашыу.

Баҫҡаҡтарҙың иң юғары хакимы вазифаһын башҡар-

[1] Плано Карпини. История монголов, 33-сө бит.

ған Бөйөк Амаган [1] ҡушыуы буйынса, башҡорт ырыуҙары баҫҡаҡтар тарафынан аяуһыҙ таланды, мәсхәрәләнде, йәберләнде, меҫкен хәленә килтереп еткерелде.

Дәржимән командалығындағы һыбайлылар төркөмөнөң баҫҡаҡтарға ҡаршы һөжүме һәр саҡ уңышһыҙлыҡҡа осраны. Улар эҙәрләүҙәрҙән ҡасып ҡотолған һайын, башҡорт-ырыу ҡәбиләләренән һалым йыйыусы баҫҡаҡтар тағы ла яманыраҡ ҡыланды. Хатта иң ябай. баҫҡаҡ та үҙен ырыу башлығынан юғары һананы. Унан йәне теләгән нәмәне талап итте һәм алды. Берәй баҫҡаҡҡа ҡаршылыҡ булһа, уның өсөн бөтөн ырыу йәки ҡәбилә кешеләре тармар килтерелде.

Башҡорттар, түҙемлектәренең аҡтыҡ сигенә етеп, яйы тура килгәндә урманға ҡасып ҡотолдо һәм Дәржимәндец баш күтәреүселәр төркөмөнә барып ҡушылды.

Баш күтәреүселәр һаны байтаҡҡа артҡас, Дәржимән Болғар иле башлыҡтары Боян менән Джикка ебәрелгәи кешеләре аша бәйләнеш булдырҙы.

Болғар иле етәкселәренең ризалығын алғас та, Дәржимәндең һыбайлы ир-егеттәре Башҡортостандағы дошман төмәндәрен тырым-тыраҡай туҙырырға тотондо.

Қарателдәрҙең башлығы нойон Буралдай баһатур, һалымды кәметергә ризалашып, һөйләшеүҙәр башларға теләк белдерҙе.

Дәржимән уның тәкдимен кире ҡакты.

— Башҡорттар сит илгә бер ҡасан да яу сапманы. Ғәзиз еребеҙ дошмандан тапалған, таланған һәм мәсхәрәләнгән саҡта, ҡул ҡаушырып ултырырға хаҡыбыҙ юҡ, — • тине ул.

Дәржимән менән теләктәшлек белдереп, мең һәм йөҙ мең башлыҡтары ла берҙәм ғауғалашты:

— Әйткәнең раҫ!

— Сит ил кешеләре ҡаныбыҙҙың тамсыһын да ҡалдырмай һурырға маташҡанда, тик ятыуы — ғәрлек!

— Татар-монголдар, ҡала-ауылдарыбыҙҙың көлөн күккә осороп, ер-һыуыбыҙҙы тартып алды!

— Беҙҙе үҙ иркебеҙгә йәшәүҙән мәхрүм иттеләр!

— Ҡан өсөн — ҡан, үлем өсөн — үлем!..

Башҡорт иле ҡабаттан алыш майҙанына әүерелде.

Ырыу-ҡәбиләләргә тарҡалған көстө берләштергәс, дошман гарнизонындағы төмәндәр баш күтәреүселәрго ҡаршы үҙҙәре һөжүм башланы.

[1] *Амаган* — баш баҫҡаҡ, Владимир ҡалаһында йәшәгән һәм татар-монголдар буйһондорған күп илдәрҙәге баҫҡаҡтарҙың башлығы булған өсөн уны «бөйөк» исеме менән йөрөткәндәр.

Икс яҡтағы һыбайлылар төркөмө бер-береһенә ҡапмаҡыршы килеп бәрелгәс, һәммәһе бер ыңғай буталды, үлешкымралыш та күбәйгәндән-күбәйә барҙы.

Башҡорттар батырҙарса алышты.

Дошманға ҡаршы һуғышта беренсе тапҡыр ҡатнашҡан Дәржимәндең Аҡман менән Тоҡман уландары үҙҙәроп үтә ауыр тойҙо.

Тир ҡатыш ҡан еҫе уҡшытты, тыш алыуға ҡамасаулаһы. Томра көн уларҙың хәлен алды. Аяҡ аҫтынан урылған саң өйөмөндә булыу ғазапҡа әүерелде. Бер-береһсүю тығыҙ уҡмашҡан кешеләргә етеҙ хәрәкәтләнергә, ҡыҡыу алышырға мөмкинлек булманы. •

Ллыш башланыуға ун биш-егерме минут самаһы ғына үтеүгә ҡарамаҫтан, үлеләр менән яралылар ятмаған ер ҡалманы. Күптәр, көсөргәнешле ҡыҫымға сыҙай алмайынса, һорән һалып аҡырыша-аҡырыша, яҡты донъяға тыуған өсөн үкенес белдерҙеләр...

Ллы томаланыу хәленә ётеп, Аҡман да дошмандарына мршы һуғышты. Оҙон һайғау шикелле һонтор көүҙәле нүкер ҡылысы ыенән киҙәнде. Ҡустыһына ярҙамға ташланған Аҡман ул нукерҙың үҙен үлтерергә өлгөрҙө...

Ҡуҙғытылған ҡырмыҫҡа иләүен хәтерләткән алыш майҙанындағы малайҙары яҙмышына борсолһа ла, Дәриимои ҡатынына хәлен белгертмәне.

- Аҡман менән Тоҡман өсөн яфаланма, бисәкәй! Бүшдор нл азатлығы өсөн алышҡанда, улар йәшенеп ҡалырга тейешме ни?

- Аҡман менән Тоҡмандың һуғышта сынығырға тейешлии.шси дә аңлайым, атаһы, — тине Аҡсабикә, тауышын ҡалтырандырып. — Тик балаҡайҙар йәл бит!..

- • Бүтәндәрҙеке йәл түгелме? •

Қослө ҡыҫымға сыҙай алмаған башҡорт сиреүенең уң як ҡанаты сигенә башлағас, Дәржимән менән Аҡсабикә арһындә тороусыларҙың ҡото алынды.

• Беҙҙекеләр енелә!

- Ярҙам кәрәк!..

Доржимән асыуланды:

- Сыҙағыҙ! Ҡасан ярҙам ебәрергә икәнлеген белмәйеммс ни? Дошман сиреүе башлығы Буралдай баһатур М тои кесөн алышҡа индереүҙе һуҙғанын күрмәйһегеҙме?

Буралдай баһатур һуғыш майҙанындағы яугирҙарының ол нткес минутын көткән икән.

Ул, сиреүенең уң ҡанатындағы башҡорттарҙың ҡыҫымы көсәйеүен күргәс тә, күҙ күреме алыҫлығындағы һыбайлыларының торошон үҙгәртеп ҡорҙо. Ләкин үҙәктән һпжүм итергә теләмәне. Ағиҙел яры буйына сигенеүсе

башҡорттарҙың йомшаҡ һул ҡанатын ҡыйратып, сиреүҙең тылына сығырға теләне.

Буралдайҙың хәйләһен аңлап, Дәржимән дә запастағы һыбайлыларын Ағиҙелгә яҡынлашҡан дошман төмәненә ҡаршы йүнәлтте. Уларҙың бер өлөшө дошмандың уң яҡ ҡанатын, икенсеһе яр буйындағы һыбайлыларын атакаланы.

Дошман төмәндәренең тылдан һөжүм итергә маташыуы был юлы аҡланманы.

Башҡорттарҙың аңғармаҫтан һөжүмгә күсеүенә аптыраған Буралдай баһатур үҙен ҡанаттары ҡайырылған сәмре ҡоштай хис итте. Бер яҡтан Ағиҙел, икенсе яҡтан уға ҡойған Дүлгәр йылғаһы юлын быуһа, есенсә яҡтан соҡор-саҡырлы әрәмәлек ҡамасауланы.

Иркен далала һуғышырға күнеккән нукерҙар өсөн бындай шарттар яраҡһыҙ ине.

Ике яҡтың да уҡсылары менән һыбайлылары бер аҙым да алға уҙа алманы. Уландары яҙмышы билдәһеҙлеге Дәржимәнде ныҡ борсолдорҙо. Уғата йәш һәм тәжрибәһеҙҙәр шул әле. Дошманға ҡаршы һуғышты уйын күрәләр! Хәҙер уларҙың яҙмышы Бөйөк Аллаһы тәғәлә ҡулында. Аҡман менән Тоҡман берәй бәлә-ҡазаға тарыҡһа, Алла Ъаҡлаһын, хан нәҫелен дауам итерҙәй кеше ҡалмаясаҡ. Бигерәк тә шуныһы ҡыҙғаныс!.. Хан тамыры ҡороһа, башҡорттарҙы берләштерерҙәй һәм дәүләт ҡоролошон тергеҙерҙәй мемкинлек файҙаланылмаясаҡ...

Күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәҫкә тырышып, Дәржимән һуғыш майҙанын күҙәтте.

Дошман сиреүе ҡамауҙа ҡалды. Хәҙер ағастар менән йылғалар тарҡауландырған нукерҙарҙы берәм-берәм ҡыйратыуы — иң мөһиме.

Ике урындан ҡамауҙы йырып сыҡҡан татар-монголдар башҡорттарҙың үҙҙәрен атакалай башланы.

Дәржимән резервтағы һуңғы меңде һуғышҡа индерерго адәжбүр булды.

Улар барып етеү менән, тылдан һөжүм итеүсе дошмаи ялгиҙҙары кирегә табан боролдо. Башҡалар ҙа, паникаға бирелеп, ҡасып барыусыларға ҡушылды.

Уларҙы эҙәрләүсе һыбайлы башҡорт егеттәре, бер-береһен сәмләндереп, ҡысҡырышты:

— Татарҙың башлығын эләктерергә ине!

— Буралдайҙары алда булырға тейеш!..

Ир-егеттәр, нисек кенә теләмәһен, сиреүе менән бергә ил сигенә табан ҡасып барған Буралдай баһатурҙы баҫтырып тота алмайынса, артта тороп ҡалды.

Үлеләр менән шығырым тулы һуғыш майҙанында тыныслыҡ урынлашҡас, Аҡсабикә тирә-яҡҡа ҡаранды.

— Малайҙарым иҫән микән?

Ҡатынының ипләп кенә әйткән һүҙе Дәржимәндең Оорогспә барып ҡаҙалғандай тойолдо.

Аҡман менән Тоҡмандың яҙмышы, ысынлап та, нисек илон? Уларҙы ҡайҙан эҙләргә? Әгәр ҙә мәгәр берәй ерҙә кппһырап ятһалар, иртәгә саҡлы харап буласаҡтар...

Аҡман менән Тоҡман үлеләр һәм яралылар араһында ли табылманы.

Ҡояш офоҡ ситенә яҡынлашты.

Олһерәткес эҫе көн һүрелгәс, кешеләргә бер аҙ хәл цргоидәй тойолдо.

Аҡман менән Тоҡман эҙһеҙ юғалды.

Ер өҫтө ҡараңғылана башлағанда ғына Дәржимәнгә цнлгон һаҡалтай бер-береһенә тотонған ике малайҙы Дүлгәр йылғаһының үр яғында осратыуын әйтте.

Уларҙың кем икәнлеген белмәһә лә, Дәржимән ихлас ишгланды.

- Уландарым табылһа, һиңә бер ҡонан бүләк итәм. Йүр, малайҙарҙы күргән ергә алып бар!

һаҡалтай кешегә эйәреп, Дәржимән менән уның һаҡчылары Дүлгәр яры буйынан һуҙылған һуҡмаҡтан атланы. Өс-дүрт саҡрым самаһы барғас, һаҡалтай туҡтаны.

- Мин осраткан малайҙар ошо тирәлә булырға тейеш. Улар берәй ағас төбөндә ятмай микән?

- Малайҙарҙан башҡа тағы кемдәр бар ине? — тип һорапы Дәржимән.

- Бейәләрен һауып, мал көтөүсе татар бисәләренән башҡаһы күренмәне.

- Татар бисәләре бында юҡ та!

- Күсеп киткәндәрҙер. Ана, ҡыуыш урындары ла буш-һуш бит, — тине һаҡалтай кеше.

Доржимәндең йәне өҙгөләнде.

«Аҡман менән Тоҡман татарҙар ҡулына эләкһә, эштәр тошколләнәсәк».

Вср төркөм һыбайлы егеттәргә татарҙар ғаиләһе ҡыуған мал көтөүе артынан барырға ҡушты ла Дәржимән ергәбан ынғайланы.

Ҡыуаҡлыктар араһында ҡалдырылған татарҙарҙың дерҙән-бер ҡыуышы төҫмөрләнде. Уның ишеге ҡаршыһына ҡуйылған озон һөңгө осо ҡара кейеҙгә уралыуына иғтибар итеп, һаҡалтай ҡапыл ҡурҡты.

- Артабан барырға ярамай!

- Ниңә?

— Кейеҙгә уралған һөңге ҡыуышта ауырыу бар̆лығын аңлата.

— Ауырыуҙы нинә ҡалдырғандар икән?

— Татар-монголдарҙың ғәҙәте буйынса, ауырыу ҡыуышта япа-яңғыҙы үлергә тейеш.

Дәржимән аптыраны.

— Ауырыу ятҡан ҡыуыш эсенә кеше инһә, ни була?

—- Уның зәхмәте һуғыла, ти.

•— Шуға ышанаһыңмы?

— Эйе, ышанам, — тине һаҡалтай.

— Һин үҙең монголмы, әллә татармы?

— Мин Сыңғыҙ хан заманында монголдарға ҡоллоҡҡа һатылған башҡорт. Буралдай баһатур сиреүе еңелеүен белгәс, татар-монгол бисәләренең мал көтөүен ташлап ҡастым.

— Исемең нисек?

— Шолман.

— Башҡортостанда туғандарың бармы?

— Бер кемем дә юҡ, — тине Шолман. — Атайым менән әсәйемде Сыңғыҙ хан нукерҙары үлтерҙе, үҙемде ҡоллоҡҡа һатып ебәрҙеләр. Аҙаҡтан монголдар ҡулына ҡабаттан барып эләктем.

— Тормоштоң әсеһен-сөсөһөн татып та, ошо ҡыуыш эсенә инергә ҡурҡаһыңмы?

— Ошо ғәҙәткә күнеккәс, ҡалайтайым, — тине Шолман. — Ауырыу кеше ҡояшты ла, айҙы ла, туғандарын күрергә лә хаҡы юҡ. Уның мәйете, аҙаҡтан, ҡыуышы менән яндырылырға тейеш.

Ислам диненә инанған мосолман өсөн мәжүси-ҙәр менән ботҡа табыныусылар уйлап сығарған ырым ҡырағайлығына.

•— Ауырыуға берәй ярҙам күрһәтеп булмаҫмы? — Дәржимән алға ыңғайланы. Ҡыуыш эсенә ингәс, «бисмилла» әйтеп, төкөрөнә-төкөрөнә, еыра йәки бүтән берәй нәмә яндырырға ҡушты. — Ауырыу, һин ҡайҙа?

Сыра яҡтыһы төшмәгән ҡыуыш мөйөшөнән ыңғыраш-жан тауыш ишетелде.

— А-а-ah!..

Сыра яҡтыһы күсерелгән урындағы ауырыу эргәһендо ҡанһырап ятҡан малайҙарын күргәс, Дәржимән үҙе ло лңғармаҫтан ҡысҡырып ебәрҙе:

— Малайҙарым минең!..

Ҡыуыш эсендә үлергә ҡалдырылған ауырыу татар егете лә иҫән ине.

Уларҙың есөһөн бергә алып ҡайтҡас, Дәржимән табиб саҡыртты.

Табнб татар егетен дауалауҙан баш тартҡас, Дәржимон асыуланды:

— Малайҙарымдың иҫән ҡалыуына мин уға бурыслы!.. Упыц эргәһенә инеп йәшеренмәһәләр, малайҙарымды иҫән ҡалдырмаҫтар йәки үҙҙәре менән алып китерҙәр ине татар Опсоләре...

Мал-тыуарҙары менән сиреү артынан ҡасып барыусы чптар ҡатындарын кире бороп килтергән мең башы Дәржимән эргәһенә килде.

— Әмерең үтәлде, беҙгә ял итергә рөхсәтме? „

— Рәхмәт, — тип Дәржимән мең башы ҡарамағындағы ир-егеттәргә ял бирҙе.

— Беҙ йоҡлағанда татарҙар ғаиләһен ҡотҡарырға тырышһа, ни эшләрһең?

— Тыныс бул, — тине Дәржимән.

II

Мең башы тирмәнән сыҡҡас, Дәржимән малайҙарын үлән табыуҙа ярҙамлашҡан Шолманды саҡыртты.

— Хәҙер әсиргә алынған төмән башлығын килтерәләр. Уппи һорау алғанда, башҡортсаға тәржемә яһарһың.

Хан тирмәһенә һаҡсылар алып ингән төмән башлығы Дәржимәндең һорауҙарына яуап ҡайтарыуҙан баш тартты.

— Ваҡытты бушҡа һуҙыуҙан мәғәнә юҡ, — тип Дәржимән уны тышҡа сығарып атырға ҡушҡас ҡына, төмән башлығының теле сиселде.

— Мин һинең һорауыңа яуап ҡайтарырға риза! Тик, инһар, үлтертмә, ярлыҡа!

— Башҡорттарҙы талап йыйған байлыҡты кире ҡайшрип бнрергә ярҙамлашһаң, һиңә ел-ямғыр теймәйәсәк,— пше Дәржимән.

- Ярҙамлашырмын... Тик мине үҙ сиреүемә, хыянат-ыликта ғәйепләп, яҡын юлатмаясаҡтар.

- Яҡын юлатмаһалар, беҙҙә ҡалырһың. Аллаға шөкөр, Башҡортостандың ере етерлек — Идел-Каманан Тубыл йылғаһына һәм Каспий диңгеҙе ярҙарына саҡлы... Йәлгн тсләгән урында йәшәрһең.

— Рәхмәт. Миңә Башҡортостан иле сигендәге Сирмсшон йылға буйы оҡшай, [1] — тип төмән башлығы Дәржимән алдында теҙләнде.

— Тор, зинһар, тор! Кешеләрҙе ундай кәмһетеү ғәҙәте башҡорттарҙа юҡ, —тине Дәржимән.

[1] *Ковалевский А. П.* Книга ибн-Фадлана... Харьков, 1956, 131-се бит.

Төмән башлығын тирмәнән һаҡсылар алып сыҡҡас та тыныслана алмаған Дәржимән, борсоулы уйҙарына күмелеп, йоҡларға ятманы.

Һоҡландырғыс ғәбиғәтле, ҡош-ҡортка, ҡырағай хайуандарға һәм ер аҫты байлыҡтарына бай тыуған илендә имен-аман йәшәргә яҙған микән башҡорттарға? Азиянан Европаға туҡтауһыҙ ташҡын кеүек ағылған һәм үткән ерҙәрендәге бөтөн нәмәне емереп юҡҡа сығарған халыҡтарҙан ҡурсалап, һаҡлап, ул күпме йылдар керәште! Әммә ҡара яу замаиындағылай үлеш-ҡыйралыш ошоғаса булғаны юҡ ине. Ҡара яу мәңге онотолмаҫ ҡайғы-хәсрәт килтерҙе. Башҡорт сәнғәтен, әҙәбиәтен, яҙма ҡомарткыларын тергеҙеү өсөн нисәмә быуын кешеләренең ғүмере кәрәк буласаҡ! Хәҙер һәммәһен өр-яңынан башларға тура хиләсәк. Дошманға буйһонорға теләмәүсе башҡорт ғалимдары, һөнәрселәр, сәнғәт-мәҙәниәт кешеләре, яҙыусылар, белгестәр менән төрлө оҫталар үлтерелеп бөттө. Ә тере ҡалғандары Ҡараҡорамға оҙатылды. Шундай хәлдән һуа эште нисек юлға һалырға? Ҡалаларҙы өр-яңынан ҡорорға һәләтле кешеләрҙе ҡайҙан табырға? Төҙөлөш менән шөғөлләнергә форсат бирерме татар-монголдар?..

Һорауҙарына яуап таба алмай баш ҡатырған Дәржимән, арыуының сигенә етеп, күҙҙәрен йомдо. Әммә оҙаҡ йоҡларға тура килмәне. Тирмә тышындағы тауышты ишетеп, ул һикереп торҙо.

— Ниңә ҡысҡырышалар?

— Бисәләре менән бала-сағаһы эргәһенә татарҙар килгән, — тине хан һаҡсыларының башлығы.

— Мине ниңә уятманың?

— Сәрдар һине борсорға теләмәне.

— Әле ул ҡайҙа?

— Бала-сағаһы менән ҡатындарын алып китергә маташыусы татарҙарҙы дөмбәҫтерә!..

Алыш барған ергә Дәржимән барыуға, татарҙар төркөмө ҡыйратылып, һуғыш тамамланырға өлгөргәйне инде.

— Дошманды тулыһынса ҡыйратмайынса, беҙгә иркенләп йәшәргә бирмәйәсәктәр, — хан Башҡортостан иле сигендәге Буралдай баһатур сиреүенең ҡалдыҡ-боҫтоҡтарын артабан эҙәрләргә бойорҙо.

...Аҙна аҙағында тыуған илде дошмандан азат итеүгә арналған һабантуй уҙғарылды.

Башҡорттар көрәш майҙанында көс һынашты, аттар сабышпырҙы, ҡурай көйенә ҡушылып йырланылар, таҡмаҡ әйтеп бейенеләр.

Дәржимәнгә һабантуйҙа ҡатнашырға тура килмәне. Болғар иле вәкилдәрен оҙаткас ҡына, кисектергеһеҙ эше-

ПӨ)] бушап, урындарынан ҡуҙғала алмай ятҡан яралы улапдары эргәһенә барҙы.

— Иә, хәлегеҙ нисек?

— пәйбәтләнә, — тине Аҡман.

Шул саҡ һабантуй уҙғарылған яҡтан ағылған йән тетрәткес йыр Дәржимәндең ҡолағына сағылды. Ошоғаса упы бер ҡасан да ишеткәне юҡ ине...

Күгәрепкәй яткан Урал тауы —
Атай-олатайҙарҙың да төйәге.
Ерен-һыуын һаҡлап, ҡорбан булған,
Шунда ла ята баҫырҙар һөйәге.

Ай Уралым, һинән ҡыркып алһам
Ат ҡыуырҙай яңғыҙ ҙа талдарың,
Тамып та ғына ҡала, ҡырҡкан саҡта,
Яуҙа үлгән батыр ҙа ҡандары...

Яңғыҙ йырсыға ҡурай моңо ла ҡушылғас, уның тәьҫиро көсәйҙе, күңелде ярһытып, йөрәктең иң нескә ҡылдарын Пфболдерә-тирбәлдерә, үҙ илкәйе өсөн ҡорбан булған ирҙәттәр данланды:

Яҡшы атка менеп, ҡулына алған
Уҡ-һаҙаҡҡай тигән ҡоралын,
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын.

Башҡорттарҙы азатлыҡ яулауға, ере-һыуы именлеген шшмаидан ҡурсалауға рухландырыусы йыр Дәржимәндең Килогы төбөндә оҙаҡ сыңланы. Кем сығарҙы икән уны? Ксм генә сығармаһын, башҡорттарҙың уй-хыялын, көрәшсн сагылдырған йыр мәңге йәшәйәсәк һәм киләһе быуын ксшеләренең гимнына әүереләсәк...

III

Буралдай баһатур сиреүен ҡыуыу менән генә тыуған илде осөн ҡуркыныс бөтмәүен яҡшы аңланы Дәржимән. Ләмм ул киләһе алышҡа әҙерлек башланы. һәр ырыу — кәбилә ир-атты ашығыс ҡоралландырырға һәм уларҙы һуғыш уйынына өйрәтергә ҡушты. Иң һәләтлеләренән йөҙ, мрц, ун мең башлыҡтары итеп үрләтте. Ҡара яу мәлендә клсып ҡотолған тимерселәрҙе йыйҙыртты, ҡорос, бронза протсү оҫталарына мәғдәнселек эше менән шөғөлләнергә ҡушты, һөнәрселәргә тимер кейемдәр, тимер төркә, ҡылыс, һөңгө һәм башҡа яу ҡоралдары етештереү бурысы йөкмәтелде.

Мәсет-мәҙрәсәләре яндырылғандан һуң да кешеләрҙе мосолман диненә ылыҡтырырға һәм уларҙы нлһөйәрлек рухында тәрбиәләр*гә тырышҡан мулла-дин әһелдәре лә был көндәрҙә ғәмле йәшәне.

Карателдәр тарафынан яндырылған Ҡараҡыя ҡалаһын гергеҙергә форсат теймәгәнлектән, ағас күп булған нкенсе урында Башҡортостандың яңы баш ҡалаһын төҙөтөү хәстзрлеген күрҙе Дәржимән һәм уны Истәриләү [1] тига атаны.

Ваҡыты аҙ, үтә ашығыс булыуға ҡарамаҫтан, Дәржимән күрше болғар иле башлыҡтары Боян һәм Джик кеүек дуҫ-иштәре менән бәйләнеште еҙмәне.

Бәләкәйерәк ерҙе биләгән аҙ һанлы, әллә ни яусыл булмаған болғарҙар үҙҙәре генә дошманға ҡаршы тора алмаҫын аңлап, башҡорт ханы уларға ярҙамға улы Аҡман башлығында отрядтарҙы — һөлөктәй һуғышсылар ебәрҙе.

Иҙел ярына еткәс, Аҡман ғәскәрен ялға туҡтатты.

Үҙенә ял тәтемәне.

— Ваҡыт барҙа, мин Сәйен Йортҡа барып әйләнәйем. Бер-бер яман хәл булһа, шунда уҡ кире боролорға тырышырмын, — тине ул ваҡытлыса сәрдар итеп тәғәйенләнгәп мең башына.

Мең башы разведкаға икенсе кешене ебәрергә тәҡдим иткәс, Аҡман ҡырт киҫте:

— Миңә, Сәйен Иортта атайым менән бик йыш булғанлыҡтан, Иҙел аръяғындағы тәбиғәт күренеше генә түгел, Болғар иле башлыҡтары ла яҡшы таныш!

— Һинең именлегең өсөн атайың алдында мин яуаилы, — тине мең башы, асыуланып.

Шунда ғына ҡайтымһаҡланып, Аҡман отряд менән бергә барырға ризалашты.

Кәмә-һалдар артынан йөҙөп барған аттар икенсе ярға сыҡҡас, яр буйындағы һукмаҡтан ыңғайланылар.

Ямғыр яуа башланы.

Юл ыңғайында борсолорлоҡ нәмә һиҙелмәне.

«Тәртип» һаҡлаусы карателдәр Сәйен Йорттан алыҫ ерҙәге туғайлыҡта икәнлегён асыҡлағас, Аҡмандың борсолоуы кәмене.

Таң яҡтыһында ҡара яуҙан һуң төҙөкләндерелгән Сәйен Йорттоң — Болғар иленең Бөйөк ҡалаһы стеналары менән уның эсендәге мәсеттәрҙең оҙон манаралары төҫмөрләнде.

[1] *Истәриләү* — Стәрлетамаҡ ҡалаһының боронғо исеме.

— Дүрт-биш йыл эсендә Сәйен Йорт тотошлай терге-

ҙелгән! Әйтерһең, бында бер ниндәй ҙә яу булмаған, — тннс Лҡман.

Баш ҡапҡа тәңгәленә еткәс, уларҙы ҡала комендан-ҺЫ — старшинаһы ҡаршыланы.

—Ҡоралыңды ҡалдыр ҙа, үҙең батшалар эргәһенә рохим ит, — тине ул, Аҡманға баш эйеп.

Тимер ҡапҡанан эскә уҙғас, Аҡмандың күңеле күтәрелде.

Сойен Йорт күренеше һоҡландырғыс. Төтөнгә ыҫланІ ш дүрт-биш емерек таш өй стеналарынан башҡаһы өряцыиан төҙөкләндерелгән. Эзбиз таш плитаһы түшәлгән ·кплаиың баш урамы еүешләнгән. Көн иртә булыуға ҡаримяҫтан, үҙәк баҙар тирәһе кешеләр менән шығырым тулы. Ундағы сауҙагәрҙәр Болғар наместнигы йортонда баҫыш сығарылған аҡса һәм төрлө биҙәнеү әйберҙәре менән һатыу итә. Кибет тулы азыҡ-түлек, кейем-һалым. йәнеңә пкшпғанын һатып алып кей, аша, кинән!

Өйҙәр эргәһендәге бәләкәй генә баҡсаларҙа үҫтерелгән төрлө-төрлө сәскәләр күҙҙең яуын ала. Ҡомло балсыҡ-ІШ эшләнгән ер аҫтындағы торбалар буйлап бассейндар-Ш яҡҡан һыу, күләүек уртаһындағы таштарға килеп бәрслгән ыңғайы ваҡ-ваҡ тамсыларға әүерелеп, шул тирәһәге срҙе дымландыра.

«Бөйөк Болғар иле ҡалаһына ҡара яу һуғылмай үтмәш һымаҡ, — тип уйланы Аҡман. — Ә Башҡортостандағы пмеш дүрт ағас ҡалаларҙың, исмаһам, береһен төҙөкләнІ рсрго мөмкинлек ҡалдырылманы. Истәриләү ҡалаһын ·и,шп бөтөп, уны ошондай хәлгә еткереү өсен күпме ваҡыт, кпс, байлыҡ кәрәк!..»

-- Атайым менән бер килгәндә ҡала уртаһындағы емеІ к таш мунсала йыуынғайныҡ, ул да төҙәтелде микән?

- Яңыраҡ төҙәтелде, — тине Аҡманды оҙатып барыусы кпмендант-старшина.

— Ер аҫтынан аҡҡан эҫе һыуы ла бар, тиҙәр, ысынмы?

- Әлбиттә,,бар.

- Өйҙәрҙең иҙәндәре лә элеккесә аҫтан йылытыламы?

- Йылытыла...

Йопә күп нәмәләрҙе һорашып белгеһе килде Аҡман-ШЦ, Ҡырыҫ йөҙлө ҡала комендантының теләр-теләмәҫ ЬСИО яуап ҡайтарыуы оҡшаманы уға.

Батша һарайы ҡапҡаһы тәңгәлендә торған вәзирҙәр-,пц береһенә Аҡманды тапшырғас, ҡала коменданты кирсю ыңғайланы.

Мормәр таштар менән стеналары көпләнеүле, тәҙрә ·ктауҙарының сит-сото алтынға ялатылған иркен, саф һыуалы коридорҙан атлаған вәзиргә эйәреп барышлай,

Болғар иле батшалары һарайының күркәмлегенә Аҡмаидың иҫ-аҡылы китте. Бындағы кешеләр ысын ожмахта йәшәй! Башҡортостандағы тормош бөтөнләй башҡаса. Ҡәбилә-ырыу башлыҡтарының ислам динен һанға һуҡмауы, ауылдарҙа мәсет-мәҙрәсәләр төҙөөрөргә теләмәүе, балаҫағаны ғәрәпсә уҡытырға ҡаршылашыуы, башҡорт ханының хоҡуғы йыйын тарафынан сикләнеуе арҡаһында, башҡорттар ошоғаса ныҡлы берләшә алманы. Мосолмандар йәшәгән башҡорт ҡалаларының көлө күккә осоуы, ҡырылғандан ҡалған барлыҡ белемле кешеләрҙең монгол империяһы баш ҡалаһы Ҡараҡоромға оҙатылыуы — ин теп бәлә...

Аҡмандың уйын бүлдереп, вәзир коридор осондағы ишекте асты.

— Рәхим ит, Болғар иле батшалары бүлмәһенә!

Аҡман алға үҙҙы.

Паркет иҙәнгә иран балаҫы йәйеүле иркен, меһәбәт бүлмә түрендәге тәхеттә ярыш ултырыусы Болғар иле батшаларын күргәс, Аҡман ҡаушаны.

Ул, минут самаһы ишек тәңгәлендә туҡталыбыраҡ торғандан һуң, байрамса кейенгән кешеләргә иғтибар итмәйенсә, Боян менән Джик ҡаршыһына барып баш эйҙе лә атаһының туҙға яҙылған хатын тапшырҙы.

Дәржимәндең хатына күҙ йөрөтөп сыҡҡас, Боян яғымлы йылмайҙы.

— Ғәрәбстандан килеүсе илсе менән осрашыу тамамланғансы көтөп тор, — тип Аҡманды төпкө бүлмәгә алып инергә ҡушты.

Ғәрәбстан илсеһе менән осрашыу мажараһы тамамлапғас, Болғар иле батшалары Аҡман ултырған бүлмәгә инделәр.

— Башҡортостан сиге аша ҡыуылған татар-монголдар башҡаса борсомаймы? — тип һораны Боян.

— Аллаһы тәғәләгә шөкөр, татар-монголдарҙың беҙгә һөжүм итерҙәй көсө ҡалманы, — тине Аҡман,

Джик та шымып ҡалырға теләмәне:

— Дошмандың беҙҙәге сиреүе лә ҙур түгел, ун — уп биш мең кеше самаһы. Башҡорттар ярҙамы менән уларҙы еңел дөмөктөрәсәкбеҙ!

Джиктың һүҙен иғтибарһыҙ ҡалдырыш, Боян икеләнде.

— Башҡорттарҙың ярҙамға килеүен һорап сапҡын ебәреүгә ебәрҙек тә... — тине лә, башлаған һүҙен әйтеп бөтөрмәйенсә, байтаҡ ваҡыт өндәшмәй ултырҙы. — Батый ханға, Субәдәй баһатур менән уның төмәндәренә, мең, йөҙ, хатта ун башлыҡтарына барлыҡ мөлкәтебеҙҙе бүләк итеп, үлемдән саҡ ҡотолғайныҡ... Хәҙер, уларға һалым түләүгә баш тартып бола ҡубарһаҡ, аҙаҡтан яман булмаҫ мпкәи?

— Ҡурҡһаң, беҙ ҡайтып китәбеҙ, — тине Аҡман.

Джик, уға ҡабаланмаҫҡа ҡушып, ҡул һелтәне.

— Өтөкләнмә әле, сабыр ит!

— Карателдәр үҙ яйығыҙға йәшәткәс, ниңә борсолорго һҙгә?

— Борсолорлоҡ урын бар шул, — тине Боян. — Улар йөҙҙәц һәр эшкә ҡыҫыла. Баш баҫҡаҡ менән кәңәшләшеп ишләмәһәң, бүләк биреп, күңелен тапмаһаң, дүрт-биш сәғрым алыҫлыктағы карателдәр һә тигәнсе килеп етеүе ||.)м һәммәбеҙҙе тырым-тыраҡай туҙҙырыуы ихтимал.

- Баҫҡаҡтарҙың шымсылары һәр аҙымыбыҙҙы күҙәл), — тип өҫтәне Джик.

— Беҙҙең килеү һеҙгә зыян итмәҫме?

Боян менән Джик икеһе бер юлы яуап ҡайтарҙы:

— Зыян тейеүе ихтимал!

— Ниндәй маҡсат менән килеүеңде белһәләр, башыбыҙҙан һыйпамаясаҡтар!..

Лкмандың кәйефе боҙолдо.

— Ҡурҡыр булғас, ниңә беҙҙе саҡырҙығыҙ?

— Аҙағы нимә менән бөтөрөн уйлап еткермәгәнбеҙ, — тип Боян ғәфү үтенде.

— Әләйһә, һеҙ — мине, мин һеҙҙе күрмәнем, — тип Аҡман ишектән сығырға әҙерләнгәндә, Баш баҫҡаҡтың батша һарайына яҡынлашыуы хаҡында әйттеләр.

15ҙәдай хәбәр Боян менән Джик өсөн аяҙ көндә күк күкрәгәнгә тиң булды. Улар, ҡобаралары осоп, бер-береһенә һораулы ҡараш ташланы.

— Башҡорттарҙың беҙгә килеүен ишетте микән әллә Баш баҫҡаҡ?

— Ишетмәһә, моғайын, килмәҫ ине.

Дорәжәләрен онотоп, Боян менән Джиктың малайҙарса ҡыланышы Аҡманды ғәжәпләндерҙе.

— Баш баҫҡаҡҡа әйтегеҙ: мин һеҙҙең өсөн — ҡунаҡ, һеҙгә үҙ белдеклегемә йомош менән килгәнмен...

- Дөрөҫ!

- Дөп-дөрөҫ!

- Һин ултырған урыныңдан ҡүҙғалма, беҙ уны ҡарашылайбыҙ, — тип өтәләнә-өтәләнә, Болғар иле батшалары шиоктән сығып йүгерҙе.

Биида килеүенә үкенеп бөтә алмаған Аҡман, бәләнән котолоу сараһын таба алмайынса, эсе бошоп, оҫталарынан оҫтаһы тарафынан йыһазландырылған ҙур, бейек, яҡп.! булмәне айҡап сыҡты. Бүлмә эсендәге күренеште төҙ-

шөндә күргән һымаҡ хис итте. Йоҡонан уяныр, һәммәһе бер юлы эҙһеҙ юғалырҙай тойолдо.

Болғар батшалары һарайындағы ваҡиға өнөндә икәнлеген иҫенә төшөргәс, Аҡмандың йөрәге жыу итеп ҡалды. Хәҙер ни эшләтерҙәр уны? Ҡәлғә тышындағы башҡорттарҙы ла анғармаҫтан килеп ҡырыуҙары ихтимал. Уларға хәбәр итерҙәй бер ниндәй ҙә мөмкинлек юҡ шул!

Аҡмаидың тәҡәтен ҡороторға теләгәндәй, Болғар иле батшалары менән Баш баҫҡаҡ та бүлмәгә инмәне. Аулаҡта берәй хәйлә ҡора торғандарҙыр. Серләшһә-серләшмәһәләр ҙә, Аҡман уларҙан ҡасып ҡотола алмаясаҡ. Уныц хатта ҡоралын да ҡапҡа тышында ҡалдырттылар.

Билдәһеҙлекте көтөүҙән дә ҡыйын нәмә юҡ! Ғүмерс ҡыл осонда саҡта батшалар һарайы матурлығы ла Аҡманды башҡаса һоҡландырманы. Ошо минутта уның бик тә йәшәгеһе, яҡты донъяның йәмен, һөйөү-һөйөшөү тигән нәмәнең тәмен татығыһы килде! Ун алты йәше тулыр-тулмаҫтан үлеү үтә ҡыҙғаныс түгелме ни?..

Коридорҙа аяҡ тауышы ишетелде.

Киләләр!

Алтын тотҡалы ҙур ишек ике яҡҡа шар асылған ыңғайы, бүлмәгә Боян менән Джик килеп инде.

— Баш баҫҡаҡ ҡайҙа? — тип һораны Аҡман.

— Китте.

— Ҡала ситендәге карателдәрен саҡыртырғамы?

Боян менән Джик, сабыштырған аттай йыш-йыш һулап, бер-береһенә ҡараны.

— Башҡорттарҙың Болғар иленә килеүен Баш баҫҡаҡ белмәй!

— Ул бүтән йомош менән килгән.

— Йомошон йомошланы ла ул өйөнә ҡайтып китте.

Болғар иле батшаларының тулҡынланыуы Аҡманға ла күсте.

— Хәҙер миңә ҡайтып китергә мөмкинме?

— Юҡ, ҡайтма!

Боян әйткәнде Джик та дөрөҫләне:

— Эйе, ҡайтма! Тик башҡорттар ғына беҙҙе бәлә-ҡазанан ҡотолдорасаҡ!

— Ниндәй бәлә-ҡазанан? — Аҡман аптыраны.

— Батый хандың әмеренә һылтанып, Баш баҫҡаҡ һалымды беҙгә икеләтә арттырған!

— Быйыл үҫтергән игенде, малдарыбыҙҙың яртыһын, Сәйен Йорттағы барлыҡ алтын-көмөштө, бисә-сәсәләрҙең алтын алҡаларын, беләҙектәрен, бәлдәктәрен ҡырып-сырып тапшырырға ҡушты!

— Ул тиклем һалымды түләргә мөмкин булмауын оПткойиек, Баш баҫҡаҡ асыуланды.

— Ул талап иткән һалым аҙна-ун көн эсендә йыйылмаһа, Ҡаҙан йылғаһы буйындағы төмәндәрҙе саҡыртырға һәм беҙҙе тырым-тыраҡай туҙҙыртырға вәғәҙә итте.

— Татар-монголдар Сәйен Иоргка ҡабаттан килеп тулһа, эштәр харап!

— Улар беҙҙе харап итәсәк, ҡатындарыбыҙҙы нукерҙарына таратасаҡтар йәки ҡоллоҡҡа һатасаҡтар!

— Дошманға ҡаршы күтәрелеүҙән башҡа әмәлебеҙ колмамы!..

Боян менән Джик шымғас, бүлмәлә тынлыҡ урынлашты.

— Хәҙер ни эшләргә уйлайһығыҙ? — тип һораны Аҡман.

• Дошманға ҡаршы бола күтәрәбеҙ!

- Эйе, һеҙ беҙгә иң ҡәрәкле ваҡытта килгәнһегеҙ!..

Башҡорттарҙың Сәйен Йорт эргәһендә икәнлеге бер ҡомға лә сер түгел икән.

Баш баҫҡаҡтың батшалар һарайы эргәһендә булып киткәнә күп тә уҙманы, оҙон яллы, ҡыҫҡа тояҡлы аттарға атланған татар-монголдарҙың Ҡаҙан йылғаһы яғынан ҙур тизлектә яҡынлашыуы күренде.

Ҡала стенаһы буйындағы башҡорттар уҡ яуҙыра башлаҫ, кәкре ҡылысын алға һоноп, «У-ра-а-ғх!» ҡысҡырып йөҙ башы эйәренән тәкмәсте. Уның артынса тағы,

Ябырылып килгән татар-монголдар туҡталманы.

Улар башҡорттар торған ергә килеп еткәс, алыш башланды.

Алыш барышын көсөргәнешлек менән күҙәтеп, Аҡмаи һуғышта ҡатнашмауҙан көс-хәлгә түҙҙе.

Уиың сәрдары, киреһенсә, үҙен тыныс тотто. Аҡмандыц бер номәгә лә ҡыҫылмай тик кенә тороуын үтенеп, күҙ күреме алыҫлыктағы маяҡтарына ҡуйылған кешеләргә ҡул болғап, яңынан-яңы көстәрҙе һуғышҡа индерә, ҡайҙа, ниҫек һөжүм итеү өсөн ишара яһай. Сәрдарҙың полководец һөнәрен Аҡман ғына ныҡлап төшөнә алманы. Элгәрге командә Башҡорт ханына һуғыш һөнәрен үҙләштереүсең корәге булмағандыр. Хәҙер, ҡара яу һөрөмө Башҡортостанга таралғас ҡына, Дәржимән оло улын һуғыш һөнәренә өйрәтергә теләне. Шул маҡсат менән уны сәрдар Мотош менән Болғар иленә ебәрҙе...

Сәрдар Мотош, хан улы булараҡ Аҡманға буйһонһа ла, Оогзс саҡта уның менән иҫәпләшмәне. Мотош үҙ һөнәрец бслеп башҡарҙы. Ана, ым менән сәрдар ниҙер күрһәт-

кәйне, һул флангылағы башҡорт егеттәре татарҙарҙың тылынан атакаға ташланды.

Ҡамауға эләгеүҙән ҡурҡып, татарҙар Иҙел яры буйлап сигенде. Шул саҡ уларҙың ҡаршыһына резервтағы болғарҙар сыҡты.

Өс яҡлап Иҙелгә ҡыҫырыҡланған татарҙарҙың байтағы тураҡланды, ҡалғандары әсиргә бирелде йәки ҡамауҙы йырып ҡасырға өлгөрҙө.

Алыш болғар-башҡорттарҙың тулы еңеүе менән тамамланды.

Иртәгәһе көндө Болғар иленең азат ителеүенә арналған тантаналы мәжлес ойошторолдо.

Байрамса биҙәлгән Сәйен Йорт урамдарына йыйылған кешеләр ҙә ҡыуаныс-шатлыҡтар кисерҙе.

Улар бер-береһен еңеү, азатлыҡ яулап алыу менән тәбриклəп, яугирҙарға арналған дан йырын йырланылар:

Илбаҫарҙан ҡотолдо Ватан,
Дан һеҙгә, батырҙар, дан!..

Ике көн буйы барған тантана Болғар иле батшаларының иң яратҡан, иң йәш, иң һылыу Әйшә исемле һеңлеһен Акманға йәр итеү менән тамамланды.

Ҡаланың ҙәк мәсетендә Акман менән Әйшәгә никах уҡыҡҡас, уларҙың өйләнешеүенә арналған туй үткәрелде.

Йәштәргә шунан да ҙур, мәңге иҫтә ҡалырлыҡ ваҡиға һәм бәхеттең булыуы мөмкинме?..

IV

1242 йылдың башында монголдарҙың бөйөк ханы Үгөҙәйҙең үлеүе, Башҡортостандағы һәм Болғар илендәгс төмәндәре ҡыйратылыуы хаҡында ишеткәс, Батый хан оло ҡайғы кисерҙе.

Рязандә, Киевта, Черниговта, Мордва ерҙәрендә, Урта Азияла, Кавказда, Көнсығыш Төркөстанда, Ҡытайҙа һәм Кореяла татар-монголдарға ҡаршы болалар башланыуы тураһында хәбәр алынды.

Тылда ныҡлы тәртип урынлаштырылмайынса, Европа илдәрен тотошлай һуғышып алыуҙы мәғәнәһеҙ һанап, Батый хан иң яҡын ярҙамсылары, нойондары, төмәндәрс, мең башлыҡтары һәм Сыңғыҙ хандың утыҙлаған ейәис ҡатнашлығында Адриатика диңгеҙе яры буйында көнәшмо уҙғарҙы.

Ул көнәшмәлә Башҡортостандағы, Болғар һәм Иҙел Оуйыпдағы илдәргә бәйләнешле мәсьәләләр тикшерелде [1].

Унда фекер берҙәмлеге булманы.

Табышҡа ҡаныҡмаусылар яуҙы артабан дауам итеүҙе тялап итһо, ҡалғандары тылда тәртип урынлаштырыу яҡлы булды.

Субодэй баһатур ҙа, Батый хандың тәкдиме менән риҙалашып:

Башгирдтарҙы ла, болғарҙарҙы ла, ҡыпсаҡтарҙы ла, урустарҙы ла ныҡлап «акылға» ултыртмайынса, Европа илдәрен тотошлай һуғышып алыуҙы максат итеп ҡуйыу хата буласаҡ, — тине [2].

Уцың сығышынан һуң, Батый хан сиреүҙе кирегә табан борорға ҡушты.

Ғптпр-монголдар тылындағы восстаниеларҙың йышаиуы арҡаһында һөжүмдең туҡтатылыуы көнбайыш Европа илдәрен үлемдән ҡотолдорҙо.

Поҙәр саҡрымға һуҙылған ерҙе иңләп, татар-монгол ғирпус киреге табан ҙур тиҙлектә барҙы.

Мраҡ тауҙарын уҙғас, улар Болғар иленә ҡабаттан ҡайтылды. Ҡаршылыҡ күрһәтә алмаған аҙ һанлы болғарҙарҙың ғәскәрен ҡыйратып, хыянатсылыҡта ғәйепләнгән Болғар иле батшалары Боян менән Джик бағаналарға ҡылды...

Полгар илендә «тулы тәртип» урынлаштырылғас, та- ||) монгол сиреүе Башҡортостанға йүнәлде.

Пыҡлап көс тупларға, яңыса ҡоралландырырға өлгөрмəгəн госкәр менән ярты-йортоһо ғына төҙөлгән Истәри- Iүҡалаһын һаҡлау мөмкин түгел икәнлеген аңлап, Дəрəмəн урманға табан сигенергə бойорҙо.

•)ммо улар ҡасып ҡотолорға өлгөрмәне.

Ҙур тиҙлектә ҡыуып етеп, татар-монгол сиреүе башҡорттарҙы тулыһынса ҡыйратты һәм Урал аръяғына тикләм ҡорлане.

Башҡорт иле ҡабаттан тергеҙелә алмаясаҡ хәлгә еткерелгəс, татар-монгол сиреүе көнбайышҡа табан боролдо. Ғмма Батый хан буйһондоролмаған Европа илдәренә поҡырыла Оорманы.

Атаһынан мираҫҡа ҡалған Джучи улусында ҡыш уҙғарыу ло ул ҙә өсөн өр-яңы ҡала төҙөргə ниәтләнде.

Шул максат менəн уңайлы ер эҙләп, оҙаҡ йөрөнө.

Иҙелдең аҫ яғындағы һоҡландырғыс тәбиғәтле урынға

[1] *Тихонинский С. Л.* Татаро-монгольские завоевания в Азии и Европе. М. Наука, 1977, 8-се бит.

[2] *Чивилихин Вл.* Память. М. Худ. литература, 1984.

еткәс, Батый хайран ҡалды. Ожмахҡа тиңләрҙәй ер бына ҡайҙа! Төрлө ағастар менән сейәләр үҫкән утрауҙарҙы уратып алған һаҙлыҡтар һәм күлдәр, ҡояш нурҙарыпа ялтлап, күҙҙе сағылдыра.

Ылғалар менән күлдәрҙе тоташтырған ылымыҡтар, ҡамыш ҡатыш үҫкән күрән үләндәре, муйыл, балан, тал, ерек, имән, уҫаҡ ағастарын һанап бөткөһөҙ.

Еңелсә боҫланған саф һауа ниндәй йылы, кинәндергес! Һаҙлыҡтағы тумар ылымыҡ ҡатыш сәскә еҫе аңҡып, Батый ханды ләззәтләндерҙе, иҫертте, башын әйләндерҙе.

Сыр-сыу килеп оя ҡоросы ҡоштарҙың иҫәбе-һаны юҡ! Һаҙлыҡта торналарҙың торҡолдашыуы, күлдәрҙә ейрәктәрҙең быжҡылдауы, ҙур тиҙлектә яҡындан ғына осоп үҙған аҡсарлаҡтарҙың ҡысҡырышыуы, йыртҡыс ҡоштарҙың аңғармаҫтан үҙ табыштарына ташланыуы, беләк буйындай суртандарҙы, һыла һәм ҡорбан балыҡтарын уларҙың оҫта аулауы Батый ханды ғәмһеҙ ҡалдырманы.

— Ошонан да матурыраҡ ерҙе табыу мөмкин түгел, — тине ул баҫҡан урынында тыпырсына-тыпырсына.

Уның эргәһендә торған Көйөк хан:

— Башҡортостандағы тәбиғәт күренеше, һинеңсә, һоҡланырлыҡ түгелме? — тип һораны.

— Ул яҡты ла, бигерәк тә Урал тирәһендәге ерҙәрҙе яманлай алмайым, — тине Батый. — Унда ла һәммәһе шәп, адатур, йылға-күлдәре — балыҡтарға, урмандары ҡош-ҡортҡа һәм төрлө йәнлектәргә бай. Тик ҡышҡы көндәрҙә үтә һалҡын, ә бында — йыл буйы йәм-йәшел. Алтын урҙаныҙ баш ҡалаһын ошонда һалдырасаҡмын!

— Ул ҡалаға ниндәй исем ҡушырға уйлайһың?

— һарай исеме оҡшаймы? — тип һораны ла, бер кем дә өндәшмәгәс, Батый хан үҙенә үҙе яуап ҡайтарҙы. — Эйе, Алтын Урҙа империяһының баш ҡалаһы һарай исемс менән йөрөтөләсәк!

Көйөк хаи, бәхәсләшергә булғайны, Субәдәй баһатур ҡырт киҫте:

— һәммәһе Батый хан теләгәнсә буласаҡ!

һарай ҡалаһын төҙөү мәсьәләһе ыңғай хәл ителгәс, хәҙерге Волгоградтан көнсығышҡа табан илле саҡрыш алыҫлыктағы Аҡ түбә йылғаһы тармағының һул яҡ ярына йөҙәр меңләгән ҡолдар ҡыуып килтерелде һәм уларға Алтын урҙа ханлығының баш ҡалаһы һарайҙы төҙөү бурысы йөкмәтелде.

һарай ҡалаһы, Батый хандың фекеренсә, болғарҙарҙың Сәйен Иортона ҡарағанда ла шәберәк булырға тейеш!

Төҙөлөш көнөн-төнөн барҙы. Хәлһеҙләнеп үлгән ҡолдар урынына яңылары ҡыуып килтерелә торҙо.

— Кпла тормошон Бөйөк олатайым Сыңғыҙ хан яратманы. Мпп, уның ейәне, Джучиҙың улы, үҙем өсөн донъяла мц шәп ҡала төҙөртәм һәм шунда йәшәргә йыйнамм», - тнп уйланы Батый хан.

Ул төҙөлөш барышын күҙәтеп йөрөүҙән ялҡты.

Мииһеҙ ҙә төҙөрҙәр әле, — далала көтөүгә ҡыуылгш мецләгән йылҡы, һыйыр, кәзә-һарыҡ өсөн яуаплы кешс саҡырып һөйләште лә Батый хан Аҡ түбә йылғаһының үр яғындағы йәйләүгә күсеп барырға теләк белдерҙе.

Нәйләү өсөн һайланған ер Аҡ түбә йылғаһының үренсә яны теҙөләсәк һарай ҡалаһынан йөҙ саҡрым самаһы ситлекта, билдәләнгән.

Эшерлек эштәре тамамланғас, беренсе булып Батый ин урынлашҡан ылау ҡуҙғалды, артынса әсәһе ҡарамағындағы ҡатындары менән бала-сағаһы тейәлгән арбалар ноҡты. Хапдың һәр ҡатынына айырым арба тәғәйенләнгән. Арбаларҙың өҫкө яғы ҡояш төшмәҫлек итеп сепрәк менән шпппгаи. Оло арба уртаһында урынлашҡан хандың һәр ҡатынын оҙатып барыу өсөн тәғәйенләнгән йәп-йәш һылы ҡыҙҙар ҙа ефәк тышлы ҡабарынҡы мендәр өҫтөндә пырып бара: йыр йырлап, әкиәт йәки көләмәс һөйләп, ин ҡатынының күңелен асалар.

Күпшы кейем кейеп, төҙәнеп-биҙәнгән һылыу ҡыҙҙар-Ш Опшҡа һәр бер хан ҡатынына оло йәштәге ябай ҡатындар беркетелгән. Улары һылыу ҡыҙҙар менән уратып алышыулы хан ҡатыны ултырған арбаны һыбай оҙатып баралар.

Оло йәштәге ҡол ҡатындарҙан бер аҙ арттараҡ хан ҡатынының именлеген һаҡлаусы ир-егеттәр менән ябай ҡатындар бара.

Батый хан йәйләүгә күсеп барышлай ҙа ваҡытын бушҡа үтергмаҫҡа тырыша. Оҙон билле киң, иркен арбаға урнаштан ыксым кейеҙ тнрмәһенә сиратлап саҡыртылған ҡатындары уны ашатырға, эсерергә, күнелен асырға һәм ял итергә ятасаҡ икенсе ҡатын менән осрашыу урынын хәл итергә бурыслы...

Көндөҙ ашап-эсеп, ҡатындары менән күңел асып барышҡан, Аҡ түбә яры буйлап һуҙылған йөҙ саҡрым тирәһе ылыҡтағы юл аҙабы Батый ханға һиҙелмәне.

ИиПлоугә күсеп килеп йәшәй башлағас, ул тәбиғәт ҡосағында ләззәтләнде. һыбайлы һаҡсыларын эйәртеп, һәр көн урманға сапты. Ундағы ҡырағай хайуандарҙы уҡ менән птыу ярышын ойоштороо, йылғала һыу керҙе йәки

балык тотто. Хан бүтән бер нәмә хакында уйламаиы, бөйөк олатаһы Сыңғыз хандың васыяттарын да онотто бындай вакытта.

Ут тандырыңда илек түшкәһен кырган сакта килгәи Субәдәй баһатурҙы күргәс, ул аптыраны.

— Ни булды?

— Нисек ял иткәненде күрергә килдем. Аҙаккы осрашыуыбыҙға байтак вакыт үҙҙы бит, — тине Субәдәй баһатур.

— Ниндәй яңылыктар бар?

— Әллә ни юк...

— Булмаҫ, ниңә килдең? — тип һораны Батый хан.

— Кәңәшләшәһе мәсьәләләр бар ине, — Субәдәй баһатур Алтын урҙаға буйһондоролған бөтә илдәрҙә тыныслык урынлаштырыуын кыҫкаса аңлатты ла үҙе эйәртеп алып килгән татар егетенә эйәк какты. — Башкортостандағы хәлде, ана, ул һөйләр!

Башкортостандағы баҫкактарға һалым йыйырға ярҙамлашыусы төмән башлығының кушыуы буйынса килгән токос һакаллы йөҙ башлығы Даваағ, Батый хан алдында теҙләнеп, түбәнселек менән баш эйҙе.

— Һинең әмерең теүәл үтәлә! Башкортостандағы быуаҙ катындарҙың корһағын йыртып, тыуасак балалары юк ителде. Үлтерелгән ирҙәренең ун колағын киҫеп, тоҡтарға йыйҙырттыҡ, [1] — тип йөҙ башлығы арбаға тейәп килтергои башкорттарҙың колағын һанарға булғайны, Батый хаи кул һелтәне.

— Кәрәкмәй. Бөтәһе нисә колак?

— Ике йөҙ етмеш мең!

— Башкорт ханы Дәржимәндең уң колағы ла ошондамы?

— Уныкы юк. Дәржимән хан әлегә иректә.

— Башкорт. ханының катынын тотоп килтерҙегеҙме?

Йөҙ башлығы Даваағ, кыҙарына-бүртенеп, аклана башланы:

— Башкорт ханы катынын табырға әлегәсә мөмкинлек булманы. Ул тау-ташлы Урал аръяғындағы урманда. Дәржимән хан үҙе лә шунда. Беҙгә аңғармаҫтан һөжүмнтә лә, әллә кайҙа эҙһеҙ юғала...

— Башкорт ханы менән уның катынын тоторға ярҙамлашыусы башкорттарға «дархан» исеме бирәсәкмен. Был турала хәбәр таратылһа, улар йәһәт тотоласак, — тине лә Батый хан Даваагка ирҙибар мөһән караны. — Ә һиңә, тырыш хеҙмәтең өсөн, «нойон» исеме бирәм!

[1] *Джувейни.* Тарих-и джахангушай, т. 1.

Нойон-бей исеменә лайык булыуына кыуанған йөҙ башлығы Данааг, шашынып-кото роноп, Батый ябынған күкһел тәҫтәге татар халаты итәген һәм бейек үксәле кыҙыл итегенен үпте.

Рәхмәт!.. Мең, мең рәхмәт!..

Питый хан итеге табаны менән йөҙ башын ситкә этте. Карашын Субәдәй баһатурға йүнәлтте.

Башкортостандағы төмән менән һин кәнәғәтме?

Субәдәй баһатур тура яуап кайтарырға кыйынһынды.

Минең кәңәшем бар.

Ойт, тыңлайым.

Башкортостанда ошоғаса тулы тәртип урынлаштырылмауы борсой мине. Башкорттарҙың күплән кырылыуынан ҡарамаҫтан, бола һаман баҫтырылмаған, яһаҡ түләүҙәр ,ю күп түгел. Һинең исемдән идара кылыу өсөн, Башкортостанға хан итеп берәй кустыңды тәғәйенләгәндә ниҙек булыр?

Һиңеңсә, Башкортостанға хан итеп кемде ебәрергә?

Көйөк хан Уралды ярата...

Субәдәй, тоткан дәрәжәңде онотма, — тип кысқырды Көйөк хан. — Минең яҙмышыма кыҫылырға хакың юк.

Уралды мактайһың бит...

Ниндәй ерҙе мактау-мактамауымда кыҫылышың бармаһын, — Көйөк хан Субәдәй баһатурҙы йәнә бүлдерҙе.

Өтәс шикелле баһатур өҫтөнә ташланырға әҙер торған Көйөк хипды тынысландырырға тырышып, Батый хан тынысланы әйтте:

Уралға карата Көйөк хандың фекере бер аҙ үҙгәрҙе. Ул тыуған иленә кайтып, вакытһыҙ яҡты донъянан китеп Үгәҙәй урынына монголдарҙың бөйөк ханы булырға тейеш. Башкортостанға хан итеп ебәреү өсөн бүтән бер кешелектәге кешелектәр...

Тынлык урынлашты.

Сығыҙ хандың күмәк ейәндәре араһынан береһе — Менгу хаи алға сыкты.

Бошкорт иленә хан булып мин барам!

Һынык хан оҙак өндәшмәй торҙо. Шунан теләр-теләмәҫтән ризалашты:

Гсләгең булғас, әйҙә, көсөвдө самалап кара...

Үҙ белдегенә йәшәргә, хакимлык кылырға күптәнән әҙерләнеп йөрөгән Менгу ханды алыҫтағы Башкорт иленә оҙатты.

Кымөк хан да Батый хан эргәһендә оҙак йәшәмәне. Бер ниәсә гспә әҙерләнде лә, күп ылауҙарға өйөп тейәлгән сәскәлектарын һәм малдарын һаклаусылар менән яранда[1] ғына йөртеп, тыуған иленә табан юлланды.

Ҡойошҡанға ҡыҫылған тиҙәк кеүек, һәр нәмәне үҙ яйына бороҏға маташыусы Кейөк хандан ҡотолоуына Батый хан ҡыуаныс киҫерҙе.

«Атаһы урынына бөтә монголдарҙың бөйөк ханы булып һайланһа, Көйөктөң миндә эше булмаясаҡ. Һарай ҡалаһын төҙҙөртөп бөтәм дә үҙемә буйһонған һәр плгә хаи тәғәйенләйем. Улар минең исемдән идаралыҡ ҡыласаҡ һәм һалым йыйыусы баҫҡаҡтарға күҙ-ҡолаҡ буласаҡ. Алтын Урҙа дәүләте эше ныҡлы юлға һалынһа, минә бошоңҡоһоҙ йәшәргә мөмкинлек тыуасаҡ», тип уйланы ул.

йәйләүҙә йәшәй башлағаны бирле, Батый хан уйғыр мөғәллимдәре ярҙамында белемен арттырҙы. Яйлап-әкренләп элекке ҡырағай йыртҡыс ғәҙәтенән төңөлгәс, өр-яңы сифатҡа эйә булған ханға әүерелде һәм көнбайыш Европа илдәрен буйһондороуҙы дауам итергә тейешлеге хаҡында ла онотто.

Төрлө илдәрҙән килә-китә йөрөгән Батый хан шымсыларының береһе Европа илдәренә ҡасан ҡара яу ҡабаттан килеүен көтөп ҡото алынған Германия нмператоры Фридрих П-нең өндәмәһен укыны:

«Йоҡонан уянырға, рухн һәм есем донъяһына күҙ асып ҡарарға ваҡыт етте... Тотош христнандарҙы һәләк итерго йыйынған дошман тураһындағы ҡот осҡос хәбәрҙең барлыҡ илдәргә таралыуы мәғлүм...»

— Ҡурҡалар! Минән һаман да ҡурҡалар, — тине Батый хан. — Нимә миңә Германия? Үҙемә буйһонған илдәрҙән йыйылған табыш та бөтәһе түгел! Әммә минә буйһонған илдәрҙә бола ҡубарыусыларға, һалым түләмәҫкә маташыусыларға бер ниндәй ҙә аяу булмаясаҡ!..

V

Батый хандың ярандары Башҡортостанда нисек кепо ҡотороноуына ҡарамаҫтан, Дәржимән етәкселегендәгс башҡорттар тыуған иле азатлығы өсөн көрәште туҡтатманы[1]. Барлыҡ мөлкәте таланып, өйҙәре каратслдәр тарафынан яндырылғандан һуң урманға ҡасып ҡотолған ҡала мосолмандары ла күсмә тормошка күсерго мәжбүр ителде, ә ир-егеттәр үҙ ғүмерен көрәшкә бағышланы.

Ҡышҡы һалҡын көндәрҙе тау-ташлы Урал урмандарындағы землянкаларҙа уҙғарҙылар ҙа, яҙғы йылы көндәр

[1] Венгр монахы Юлиан менән француз монахы Плано Карпини шуны раҫлай.

пгү мснән, улар йәнә сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы ауға күторелде.

Пмшкортостанға Менгу хан килгәс, донъя ҡатмарланды.

Уныщ ҡушыуы буйынса, боласылар аяуһыҙ ҡыйратылды, ҡулға алынған башҡорттар ҡолға әйләндерелде йәки сит илго һатылды.

Әммә башҡорт егеттәренең дә ҡаршылашыуы көсәйҙе. Шул заманда иң ҡеүәтле, иң алдынғыларҙан һаналған ЬирИ.щ ырыуы артынса Тамъян, Ҡатай һәм башҡа ырыу-Ф Доржимән сиреүенә барып ҡушылды һәм каратслдәр-Потрядтары берәм-берәм ҡыйратылды.

Менгу хан, боласыларҙың ерен тартып алып, үҙенең пиумасаларына һәм нукерҙарына бүлеп бирҙе. Ка-тарға теләктәшлек белдереүсе башҡорт ырыу-ҡәбиларе башлыҡтарына «дархан» исеме юлланы, улар өсөн шрылган ерҙәрҙә айырым тамға, оран, ағас, ҡош билдә Оулдырҙы.

һчЛгаҡ ырыу башлыҡтарын үҙ яғына ылыҡтырғас, Менгу хапдың илсеһе Дәржимән ставкаһына барҙы.

Ьниә Менгу хан асыу тотмай. Ҡорал ташларға ҡаршылыҡһыҙ буйһонорға ризалашып ант итһәң, ул ҡатынының береһен бүләк итергә һәм Башҡортостан-чЧ бер өлөшөндә үҙ ихтыярыңа йәшәтеү есөн һиңә гра-бирергә риза.

Лтай-олатайҙарымдан мираҫка ҡалған ерҙә йәшәү щ кплмешәк хандың рөхсәте миңә кәрәкмәй, — тип ф пмоп Менгу хан исеменән килгән илсенең тәкдимен мәкакты.

Доржимәндең бойондороҡһоҙ холҡо Менгу хандың ҡабартты. Ләкин ул ҡәтғи саралар ҡулланырға ҡыймаиы. Дәржимән яғындағы башҡорттарҙы үҙенең ылыҡтырыу өсөн, һалым күләмен ике-өс мәртәбәгә ттс. Урман тулы солоҡ балының яртыһынан күберәк һом йәнлек тиреләренең яртыһын ғына баҫҡаҡтарыпшырырға рөхсәт итте.

Мошу хан ислам дине әһелдорен дә ситкә типмәне. ЬЬ ирҙамында башҡорттарҙы буйһондороуҙы төп маҡсцгсц ҡуйҙы.

Менгу хан бер юлы өс дингә инанды. Поп ҡулындағы рсис үбеп, христиандарса суҡынды, мулланан ҡорьән ҡарлырен өйрәнде, аҙаҡ жрецтарын саҡырҙы.

Ир саҡ христиан, мосолман һәм мәжүси вәкилдәренең ҡарашбпхосләшеүен тыңлап ултырыуҙан ялҡҡас, уларҙың ҡайһыһына ышанырға белмәй, Менгу хан аптыраны.

Ппидәй дин дөрөҫ икәнлеген нисек асыкларға?

Уртаҡ фекергә килә алмаған дин әһелдәренең яуабы менән ҡәнәғәтләнмәйенсә, Менгу хан шул заманда Башҡортостанда йөрөгән көнбайыш илсеһе минорит Рубруквисты саҡыртты. Ләкин ул да мәсьәләне ыңғай хәл ҡылырға ярҙамлаша алманы.

Христиан динен яҡлап, Рубруквис мәжүсилекте тәпҡитләне, ә мулла Рубруквисҡа ябырылды:

— Беҙ, мосолмандар, бер аллаға инанып йәшәйбеҙ һәм үләбеҙ. Бөйөк Аллаһы тәғәлә әҙәм заты бармаҡтарын төрлө ҙурлыҡта ҡуҫтергән шикелле, кешеләргә бәләҡазанан ҡотолоу өсөн дә төрлө юлды күрһәткән. Аллаһы тәғәлә һеҙгә яҙыу-һыҙыу һәләтен биргән, ә һеҙ уны намыҫ менән үтәмәйһегеҙ. Беҙгә әүлиәләрҙе насип иткән һәм беҙ уларҙың ҡушыуы буйынса доиъя көтәбеҙ... [1]

— Бер-5ерегеҙҙе еңә алмағас, ғүмеремдең аҡтыҡ көнөнә саҡлы өс дингә инанасаҡмын, — тине лә, Сыңғыҙ мәкән Үгәҙәй-Октай заманында сығарылған законға һылтанып, Менгу хан барлыҡ дин әһелдәрен һалым түләүҙән азат итергә бойорҙо.

Өс дингә таянып, Менгу хан төрлө телдә һөйләшкоп кешеләрҙең ыҙғышыуына сик ҡуйҙы һәм уларҙы үҙе эргәһендә туплауға шарттар тыуҙырҙы.

Ҡәҙимге татар-монгол ғаиләләре лә, башҡорттар менои бәйләыеш тотоп, аралашып, үҙ-ара тыныс йәшәргә күнего башланылар.

Бөйөк һәм дәрәжәле сурәттә күренергә маташҡан татарҙар үҙҙәрен «монгол» тип атап, монголдарҙың ғөрөфғәҙәтен, холҡон, телен үҙләштерергә тырышыуҙары сәбәпле [2], бәғзе бер башҡорттар ҙа монголса һөйләшергә маташты.

Тотошлай Алтын Урҙа биләмәһенә көслəп индерелгоН Башҡортостан тупрағында әүәлге ҡеүәтле дәүләтте ҡабаттан тергеҙергә һәм ҡалалар төҙөргә мөмкинлек ҡалманы.

Ошондай шарттарҙа байтаҡ башҡорт ырыу-ҡәбиләләренә, ҡорал менән көрәшеүҙе туҡтатып, Менгу хаи власып таныуҙан һәм уға бойһоноуҙан башҡа сара ҡалманы. яу

Башҡортостанда тыныслыҡ урынлашҡас та, кара ваҡытында сит илгә ҡасып үлемдән ҡотолған данлыҡлы Бөрйән ырыуы батырҙары Сәнжар әл-Башҡорди, Бейбарс, Ҡалауын менән бергә Урта_Азиянан Әйле ырыуы башҡорто, данлыҡлы шағир Ҡол Ғәли ҡайтты.

[1] Был ваҡиға Рубруквис тарафынан яҙып ҡалдырылған.

[2] *Рашид ад-дин.* Сборник летописей, т. 1, к. 1, М.-Л., 1952, 103-сө бит.

Улорҙын Башҡортостанда икәнлеген белгәс, Дәржимәндең рухы күтәрелде.

Мпп Ҡол Ғәли менән осрашырға тейешмен!

Хоп юлға сыҡты. Ҡол Ғәли уны дуҫтарса ҡаршыланы. Дәржимән Башҡортостан хәлдәрен түкмәй-сәсмәй һөйләне, Ҡол Ғәли бер килке яманһыулап ултырҙы.

Илебеҙ азатлығы өсөн башҡорттарҙың ҡаны күп ғәйәлоуын ишетеп ҡайттым мин. Ошондай ауыр, ҡатмарлы көндәрҙә һеҙгә, бәлки, ярҙамым тейер, — тине лә үҙе менән «Киссаи йософ» тигән бер нисә өҙөк укыны.

Дәржимән дә, бурыслы булып ҡалырға теләмәйенсә, ҡобайрәлҙы йырланы:

Ай Уралым, һинән ҡырҡып алһам
Ат ҡыуырҙай яңғыҙ ҙа талдарың,
Тамып та ғына ҡала, ҡырҡкан саҡта,
Яуҙа улған батыр ҙа ҡандары.

Гогроткес көйҙең һәр һүҙен мейеһенә һеңдереүҙәй бунан ихлас тыңлаған бөйөк башҡорт шағиры Ҡол Ғәли, ишетеп ҡыҫып, урынында шаҡ ҡатты.

Уралдан ғына бейек, ай, тау булмаҫ,
Ураткайҙы һөймәҫ тә йән булмаҫ.
Үҙ илкәйе өсөн ҡорбан булған
Ир-егеттең ғүмере йәл булмаҫ

Ҡара яу ваҡытында ҡырылған ир-егеттәрҙең ҡаны менән йыуылған башҡорт ерен күҙ алдына килтереп, Ҡол Ғәлигә күцеле тулды.

Үҙе йырлаған көслө моңға тәьҫирләнеп, Дәржимәндең ҡобайрәһы быуылды, күҙҙәренә йәш эркелде:

Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алған
Уҡ-һаҙаҡҡай тигән ҡоралын,
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын.

Йыр тамамланғас та тыныслана алмайынса, Дәржимән ошо йыш һуланы.

Ҡол Ғәли, киреһенсә, сәм-дәрт, аяныс, ҡайғы-хәсрәт ташып яцгыраған «Урал» көйөнә арбалып, тауыш-тынһыҙ ҡалды.

Ыпҡтк пакыт шымып ултырғандан һуң, ул баш ҡалҡытып караны.

Поп һыҡратырҙай йырҙы кем уйлап сығарған?

Уиы кем сығарғанын бер кем дә белмәй.

Ғммәк, ул бөтөн башҡорттар ижады, — тине Ҡол Ғәли.

Башҡорт илен бәләнән ҡотолдороу әмәлен таба алма-

йынса, улар оҙаҡ баш ватты. Аҙаҡтан, Ҡол Ғәлиҙең кәңәше буйынса, Дәржимән башҡорт ерендә йәшәүсе монголдар менән бәйләнеш тоторға һәм уларҙы әкренләп-әкренләп үҙ яғына ылыҡтырырға теләне.

Шул маҡсат менән ул монголдар йәшәгән ергә киттс.

Дәржимәндең килере алдан хәбәр ителмәгәнлектән, аҡлан уртаһындағы йыйылма йорттан сыҡҡан монгол ҡысҡырып һораны:

— Сайн байна уу? [1]

— Сайн, сайн уу? [2] — тип яуапланы Дәржимән.

Таныш булмаған һыбайлы башҡорттарҙың яманлыҡ менән йөрөмәүен асыҡлағас, монгол тынысланды һәм йорт эсенә инергә ишара яһаны.

Йорт тупһаһына абынып йығылған кешене Сыңғыҙ хан ҡылыс менән тураҡларға ҡушканын ишетеп белгәнлектән, Дәржимән монголдар тормошондағы ғәҙәттә боҙмаҫҡа тырышты.

Ул, йорт ишеге алдында туҡталыбыраҡ, барлыҡ ҡоралын ишек алдына һалды. Шуның менән изге ниәттә йөрөүен белгертеп, уң бармағын ишектең өҫкө яғына тейҙерҙе.

— Сайн байцгаана уу?

— Сайн, та амархан сайн байна уу, — тип яуап ҡайтарҙы йорт эсендә ултырыусы монголдар.

— Иәйҙе һимеҙ үҙараһығыҙмы?

— Эйе, йәйҙе һимеҙ үҙарабыҙ.

— Мал-тыуарығыҙ теүәлме?

— Эйе, мал-тыуарыбыҙ теүәл...

Сәләм алышыу йолаһы бөткәс, йорт хужаһы башҡорттарҙы ҡап уртаға бүленеүле йорттоң уң яҡ яртыһындағы ирҙәр бүлмәһенә алып инде.

Дәржимән, башҡорттарҙың башлығы булараҡ, йорт хужаһының теләге буйынса йорт ишеге ҡаршыһындағы хойморға — йорттоң төньяҡ өлөшөнә үҙҙы һәм берҙән-бер ултырғысҡа ултырҙы. Уның юлдаштары ер иҙәнгә йәйеүле ҡырағай хайуандар менән йәнлектәр тиреһенә ултырышты.

Монголдарҙа ҡунаҡтыа кем икәнлеген, ниндәй йомоил менән йөрөүен һорашыу ғәҙәттә юҡ. Ҡунаҡ та үҙе тураһында һөйләргә ҡабаланмаҫҡа тейеш.

Танышыуҙың үҙ тәртибе бар. Йорт хужаһы, ҡунаҡтарын урынлаштырғас, ёҫтөндәге кейеме — дәли кеҫәһенән сығарған табакерка эсендәге тәмәкене еҫкәргә бирҙе.

1 Сайн байна уу? — Һеҙҙең һәммәһе именме?

2 Сайн, сайн уу? — Эйе, һәммәһе имен, ә Һеҙҙең?

Д.ржимән, яуап итеп, йорт хужаһына үҙенең табакерһын бирҙе.

Оидошмәй-нитмәйенсә, табакеркалағы тәмәкене таҡ ҡуйып тоҡголеиә ҡуйып еҫкәгәс, йорт хужаһы менән Дәржимои табакеркаларын алмаштырып, трубкаларына тәмәке тултырҙылар.

Мосолман кешеһенә тәмәке төтәтеүе гонаһ, — тип өйрәтәс, Гюрт хужаһы Дәржимәнде тәмәке тартырға көсләмәне.

Монголдарҙың ҡунаҡтарға ҡарата әҙәпле булыуҙарын ... баһалап, Дәржимән йорт эсендәге күренешкә күҙ һалгертеп сыҡты. Монголдарҙың тормошо ла ауылдарҙа ... башҡорттарҙың көнкүрешенә оҡшаш икән. Ирҙәр ... юғйенләнгән йорттоц көнбайыш яғында һуғыш һәм ... ҡоралдары, эйәр, йүгән, ҡамыт, ыңғырсаҡ, дөйә, ... сеү ҡорамалдары өйөлгән. Ишек тәңгәлендә ҡымыҙ ... оло күн турһыҡ ҡуйылған, урҙала киптерелгән ит ... н торс аҫылыныулы. Ҡатын-ҡыҙ йәшәгән йорттоң көнсығыш ягында аҙыҡ-түлек, һауыт-һаба һаҡлана.

Цирттоц ҡап урта өлөшөндә оло сөгөн ҡаҙан урынлашҡан. Уның аҫтында ялкынланып янған уттың төтөнө ... тағы тишектән — төнлөктән асыҡ һауаға ағыла.

Ирҙәр әңгәмәләшкән ваҡытты файҙаланып, ҡаҙан эргәһенә ҙурланған монголдың баш ҡатыны һыу ҡайнатырға ла елгөрҙө. Ярты иң самаһы ҙурлығындағы тахта ... суутай цайҙан һындырып алған оло киҫәкте ҡайнатҡаны һыуға һалып ҡайнатты ла уны дөйә, һыйыр, ... һотә менән бутаны. Шунан һуң ғына йылыны оҙаҡ ... торған ағас домборға ҡойолған әҙер сәйҙе ҡуйырға өләшеп сыҡты.

Томле! Бының ише цайҙы ошоғаса ауыҙ иткәнем ... юк, — тип Дәржимән тахта сәйен маҡтағас, йорт ... ның йөҙө яҡтырҙы.

Цайға өҫтәп тоҙ, ҡурылған он ҡатыш иретелгән ... маңы менән һарыҡ елеген һалһаң, быға ҡарағанда тәтлыраҡ була һәм туклыклы ла тота, — тине ул ...

Маҡталыуға шатланған монголдың баш бисәһе, кәрәгенән иргыҡ йомартланып китеп, ҡунаҡтар алдына ылаштырып өйрәтелгән эзгийҙы — ҡаҡ ҡоротто, араул, хурутты, ... ғыны — сөсө эремсекте һәм иретелгән һарыҡ майынан ... онюрслгән боорцогты — бауырһаҡты килтереп өйҙө.

... йҙе эсеп бөтөүгә, хужабикә ит бешерергә лә өлгөрҙө. ... ҡаға һалынған шифалы үләндәрҙең витамины юғалмаһын осоп, төрлө үлән тәме һеңгән итте ҡаҙандан тиҙ генә сығарып, уны һауыт-набаларға бүлеп халды.

Хужабикә бешергән итте ауыҙ иткәс, Дәржимән йорт хужаһын йәнә маҡтамай булдыра алманы.

— Бик тәмле! Монголдар ҙа, башҡорттар щикелле, йылҡы итен ашарға әүәҫ икән!

Һөйәкле йылҡы итен ҡуш услап тотоп ашаған йорт хужаһы, майланған ирендәрен сапылдатып, тамшана-тамшана, йылмайҙы.

— Зйе, беҙ ҙә йылҡы яратабыҙ! Йүгән кейҙерелмәгәи дүнән менән ҡонан ите бигерәк тә шәп була. Уларҙан ҡала — ҡуй ите. Дөйә, һыйыр һәм кәзә ите әллә ни шәптәи түгел.

— Ҡырағай хайуандар итен яратамы монголдар?

— О-о, — тип йорт хужаһы тамағын сыҡылдатты. — Ҡырағай хайуан ите ауырыуҙарға ла шифалы! Урман сускаһы менән илек итен беҙ дарыу урынына файҙаланабыҙ. Яралы тәнде дауалауға бурһыҡ майын һөртөү килешә...

— Монголдарҙың тормошо ла беҙҙекенә оҡшаш, — тине Дәржимән.

Йылҡы итен ашағандан һуң, ҡымыҙ эстеләр.

Ҡымыҙ өсөн дә маҡталғас, йорт хужаһы бөтөнләй алсаҡланды.

— Изге ниәт менән йөрөгән ҡунаҡтарымды бөгөн ҡайтармайым, — тип ул ҡолдарына яңы һуғым һуйырға ҡушты.

Иорт ишеге алдында ҡыҙыу итеп яғылған утта һайғауға беркетеүле һуғым түшкәһен ҡурҙырткас, бер төркөм яуҙаштары менән мең башлығын йорт хужаһы ҡунаҡҡа саҡырҙы.

Үҙен оҙатып йөрөүсе егеттәрҙең бер нисәһен Дәржимән ҡайтарып ебәрергә булғайны, ҡунаҡсыл монгол ризалашманы:

— Болохгуй! [1]

«Нимәнәндер шикләнә, ахырыһы», — тип уйланы Дәржимән.

Утта ҡурылған иттең беренсе киҫәге Дәржимәнгә, икенсеһе мең башлығы нойон Чойсүрәнгә, Батый хан эргәһендә булып ҡайткан йөҙ башлығы Даваагка, уларҙан аҙаҡ ҡалған ит, тоткан дәрәжәләре буйынса, бүтән ҡунаҡтарға киҫеп бирелде.

Иорт хужаһының баш ҡатыны һөттән яһалған араҡы тултырыулы бер турһыҡты килтереп ҡуйгас, ҡунаҡтарҙың күңеле күтәрелде.

Ҡыҙмасаланып алғас, йөҙ башлығы Даваағ Батый ханға башҡорттарҙың киҫелгән ҡолаҡтарын алып барыуы һәм нойон булыуы менән маҡтана башланы.

[1] *Болохгуй* — ярамай.

Урманда ҡасып йәшәгән Дәржимән хан менән уның ыпипып табырға ярҙамлашһағыҙ, һеҙгә лә маҡтаулы «Тархан» псеме бireләсәк.

Тсленде әҙерәк тыя бел,— тип асыуланды мең башы. Дппааг ҡупырайҙы.

Ницә миңә тыйылырға? Мин дә һинең шикелле нойон! Дәржимән менән уның һылыу бисәһен тотһам, мең буласаҡмын!..

Олегә һин йөҙ башы, — тип, уны мең башы аяҡ- чанан бәйләп һалдыртҡас та, тыныслана алмайынса, ҡысҡырҙы:

Дәржимән хан тотолһа, башҡорттар тотош ҡырыМ(..!..

Үҙҙәренең милләтен танымай, «саф» монгол булып ••| ..... татарҙар ҙа, Батый хандан нойон исемен алыу- ... булған йөҙ башлығына ярамһаҡланып, шау-шыу ... ҙы:

Йөҙ башлығы дөрөҫөн әйтә!

Батый хан уны ярата!

Башҡорттарҙы беҙ ҡырасаҡбыҙ!..

Мең башлығы Чойсүрәндең асыуы ҡабарҙы.

Үҙегеҙҙең кем икәнлегегеҙҙе иҫегеҙҙән сығармағыҙ! ... кем булып ҡылаиһағыҙ, ни эшләтергә белермен,— ... ,гпы иҫкәрткәс кенә тауыш баҫылды һәм татар егет- ... мең башлығы алдында ялағайлана башланылар.

Шул мемкинлектән файҙаланып, Дәржимән менән юлдаштары туғайлыҡтағы аттары эргәһенә ынғайланылар ... пҫсректәр аңына килгәнсе, эҙһеҙ юғалдылар.

VI

Ййыҡтың аҡылы — башында, иҫеректең телендә, ти. Иҫерек йөҙ башлығының ҡыланышы арҡаһында, дош- ... сорс асыкланды, ә енәйәт ҡылыусы монгол нойоны, ... ыҙ хан заманында сығарылған закон ҡушыуы буйынүлем язаһына хөкөм ителде [1].

Йөҙ башы үҙ белдеклегенә һөйләнеүе тураһында хәбәр ... фгтырга ҡушты ла, болаға күтәрелергә йыйналған баш-

[1] Сыңғыҙ хан заманындағы закон буйынса, үлем язаһы ун дүрт ... ... кпгыла: никахты боҙоусыларға, урлашыусыларға, кеше үл- ... ларға, ҡош-ҡортто ыҙалатыусыларға, ата-бабаларҙан ҡалған ... мөлкәттө һанға һуҡмаусыларға, дәүләт серен һаҡламаусыларға I I Моиголдың законлы ҡатыны менән һөйәркәһенән тыуған балаһығеҙ хоҡуклы һаналған. Уның кесе улы нигеҙ һаҡлаусы һәм ... үлгән ағаһы балаларын тәрбиәләп үҫтереүсе. Ҡатын-ҡыҙға ... хужалыҡ эше бурысы йөкмәтелгән.

ҡорттарҙы тыныслandырырға тырышып, Ағиҙел менән Күгиҙел — Дим йылғаһы ҡушылған тәңгәлдәге тау түбәһендә [1] Менгу хан үҙе өсөн һарай төҙөргә башланы.

— Минең һарай Аҡ түбә йылғаһы буйындағы Батый хандың һарайынан да күркәмлерәк булырға тейеш, — тип ул сит илдән иң шәп архитекторҙы килтертте.

Ағиҙел ярындағы тау башында хан һарайы төҙөлә башлағас, аҡсаға мохтажлыҡ кисергән Менгу хан һалым күләмен ҡабаттан арттырырға мәжбүр булды. Уның өҫтәүенә, күпселек башҡорттар төҙөлөш эшенә ылыҡтырылды, ә ир-егеттәр Батый хан сиреүенә оҙатылды.

Менгу хандың яңы фарманы ризаһыҙлыҡ тыуҙырҙы. Башҡортостандағы тыныслыҡ ир-егеттәрҙең уяулығын, берҙәмлеген ҡамсылау, «дархан» исемен алыуға алданғаи ырыу-ҡәбилә башлыҡтарын Менгу хан яғына ылыҡтырыу өсөн ваҡытлыса ғына булған икән.

— Башҡорттар, йоҡоғоҙҙан уянығыҙ! Татар-монголдарға ғына түгел, уларға һатылған үҙебеҙҙең ҡәбилә-ырыу башлыҡтарына ла ҡаршы көрәшер мәл етте, — тип оран һалып, Дәржимән ҡабаттан үлемесле алышҡа әҙерләнде. Батый хан сиреүенә оҙатыласаҡ ир-егеттәр, дошманга һатылған ырыу башлыҡтарына буйһоноуҙан баш тартып, Дәржимән командалығындағы сиреүгә ҡушылдылар.

Татар-монголдарҙың ике ҡара яуындағы. тәжрибәһеи сығып, Кол Ғәлиҙе, теҙмә һәм сәсмә әҫәрҙәр ижад итеүсс Насретдин әл-Наср, әл-Әшәрәф Хәлил, шағир Таңбаға кеүек [2] киң танылған әҙиптәр менән ғалимдарҙы Дәржимәп донъя именләнгәнгә саҡлы сит илдә йәшәп торорға күндерҙе.

Бер төркөм аҡыл эйәләренең сит илгә оҙатылыуын ишеткәс тә, Башҡортостандан китергә өлгөрмәгән ғалимдарҙы, яҙыусыларҙы, мәҙәниәт-сәнғәт белгестәрен һәм укый-яҙа белгән барлыҡ башҡорттарҙы нәҫел-ырыуҙары менән ҡырырға тигән фарман сығарҙы Менгу хан.

Күренекле кешеләре ҡасан ҡырылып бөтөүен көтөп тормайынса, башҡорттар яуға күтәрелде.

Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алған
Уҡ-һаҙаҡҡай тигән ҡоралын.
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын, —

тип ҡысҡырып йырлай-йырлай, башҡорт егеттәре татар-монголдарға батырҙарса ташландылар.

[1] *Тау түбәһе* — хәҙерге Өфө мосолмандары зыяраты урыны.

[2] *Амин ал-Холи.* Связи между Нилом и Волгой. М., 1962, 31—32-се биттәр.

Тыуған ил азатлығы өсөн алыш көндән-көн көсәйә барҙы.

Туғыҙ ырыу кешеләрен берләштергән Дәржимән командалығындағы башҡорт сиреүе, татар-монголдарҙың хәрби төркөмдәрен ҡыйрата-ҡыйрата, дошман ҡоллоғонда инеүсе ырыу-ҡәбиләләрҙе бер-бер артлы азат итте.

Ыпшҡорт сиреүенең ҙур тиҙлектә яҡынлашып килеүен ишеткәс, Менгу хандың борсолоуы артты.

Ҡыйыҫыс ярҙам ебәреүен һорап, Батый ханға һәм Сәрип Ппрттағы уның вариҫына сапҡындар ебәрҙе.

Өммә ярҙам тиҙ килеп етмәне.

Ағиҙел аша сыҡҡан башҡорттар тауға күтәрелә башлағас, Менгу хан һарайҙың ннгеҙ ташы өсөн әҙерләнгән ҡорбаш таштарҙы һөжүмгә килеүселәрҙең өҫтөнә тәгәрәтергә ҡушты.

Юғарынан күпләп тәгәрәтелгән таштарға ҡаршы баҫып тора Момкинлеге ҡалманы.

Дошманды икенсе яҡтан, тылынан сығып атаҡаларға чигпыигон Дәржимән башҡорт сиреүенең тотошлай бирге килеп сығыуын көтөргә булды.

Мсигу хан уның хәйләһен аңланы, ахырыһы.

Ул Агиҙел ярының буйынан буйына оборона ойоштороп нушты һәм 1246 йылдың йәйге төнөндә, бер кемгә әйтмәй-һиҙҙермәй бөтә монголдарҙың бөйөк ханы булып һоПланасаҡ Көйөк хан эргәһенә ҡасып китте.

Менгу хан ҡасҡандан һуң да башҡорттарҙың азатлыҡ өсөн көрәше туҡталманы. Сәйен Йорттағы татар-монголдарҙың сиреүе килеп етеү менән, алыш ҡабаттан көсәйҙе.

Пмкламай Батый хан ебәргән сиреү ҙә килеп етте.

Башҡорттарҙың батырҙарса һуғышыуҙарына ҡарамаҫтан шуны әйтергә кәрәк, килгән татар-монголдарҙың берләштерелгән сиреүе ҡыҫымы кәмемәне.

У-р-ра-а-рх!

У-ра-а-арх!— һерән һалып, ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, төрлө яҡтан ябырылды.

Башҡорттарҙың хәле мөшкөл. Ярҙам килерҙәй ер ҙә юҡ.

Ана, йән-фарман сабышып килеүсе татар-монголдар ҡабат ҡысҡырышҡан ваҡытта шар асҡан ауыҙҙарының ыңғайлашыуы, күҙҙәренең осҡондар сәсеп балҡыуы ла күренеп тора.

Һоҙ һөҙ илле аршын самаһы ара ҡалғас, һөҙәк яҡтан ҡамауланып килеүсе татар-монголдар ҡамауҙағы башҡорттарҙы патс-ваҡ төркөмдәргә тарҡалдырҙылар һәм уларҙы ҡырым-айырым тураҡларға тотондолар.

Ҡылайышһыҙ буталышта тарҡауланған башҡорт сиреүе

менән етәкселек итеүе ҡыйынлашты. Башҡорттарҙың сәрдары Тукым һәләк булды. Уның артынса ҡаты яраланып, Бөрйән ырыуының данлыҡлы батырҙары Бейбарс, Ҡалауын, Ғирҙан, Байҡып, Ҡатай ырыуы башлығы Мөлгәи һәм башҡа бик күп ир-егеттәрҙе дошман әсиргә алды[1].

Төп көс ҡыйратылғас, Дәржимәндең үҙенә лә ҡурҡыпыс тыуҙы һәм ул ҡамауҙы нисек тә йырып сығырға тырышты.

Алыштың иң ҡыҙыу барған бер мәлендә монгол ғәскәрендә бергә ҡунаҡта булған бәһлеүән кәүҙәле мең башы Чойсүрән Дәржимәнгә ҡапма-ҡаршы осраны. Тик был юлы ул төмән башлығы итеп үрләтелгәйне.

«Дәрәжәһе артһа ла, яурынындағы ук-һаҙағын ташламаған» тип уйлаған Дәржимәнде нойои Чойсүрән дә таныны.

— Башҡорт ханымы ни һин?

— Эйе, мин хан, — тип дөрөҫләне Дәржимән.

— Үҙ иркең менән әсиргә бирелһәң, үлемдән ҡотҡарасаҡмын!

Дәржимән, ризалашмайынса:

— Беҙҙең яҡҡа үҙең сыҡ! Мин һине сәрдар итеп үрлотәм, —тип ҡысҡырҙы.

— Ҡыйратылған сиреүҙең баш командующийы булыу мине шатландырмаған кеүек, хан исеме йөрөтөүҙән һиңә лә файҙа юҡ, — Чойсүрән тәкдимен ҡабатланы. — Үҙ иркең менән әсирлеккә бирелһән, әҙәмсә йәшәйәсәкһең!

— Мин тыуған илемә хыянатсылыҡ ҡылмаясаҡмын!

— Әләйһә, беҙ — дошмандар! Ошонда үләсәкһең, ә һинең башың өсөн Батый хан вәғәҙә иткән бүләкте мин алаcаҡмын, — тип нойон Чойсүрән Дәржимәнгә ташланды.

Чойсүрән һелтәгән кәкре ҡылысҡа Дәржимән үҙенең ҡылысын арҡыры ҡуйып өлгөрҙө.

Улар, бер-береһенең ҡыҫымына бирешмәйенсә, ҡыйыу алыштылар.

Дәржимән нойон Чойсүрән менгән ҡола аттың елкә тарамышын өҙә сапты. Ҡаты яраланған меҫкен хайуан, ҡанҡа һалынғын башын ҡалҡыта алмайынса, ҡан урғылырып кешнәй-кешнәй, ергә ауҙы һәм хужаһының һыңар аяғы ергә ҡуша ҡыҫты. Аты ҡорһағы аҫтындағы өҙәңгенән аяғы бушатырға өлгөргән нойон, һикереп торған арала, ҡылысы менән йәнә киҙәнде. Әммә сабырға өлгөрмәне, атын ситкә яртайтып, Дәржимән Чойсүрәндең өсөнсө өҙә сапты.

Нойон үҙәсенән урғылған ҡан еҫе Дәржимәнде оторо әрбытты.

Алыш барышы менән мауығып, Дәржимән һаҡсыларынан писек итеп айырылыуын һиҙмәне. Татарҙар ҡамауына әләгеүен күргәс кенә, хаталаныуын аңлап, үҙенә ярҙамға ташланған яугирҙары эргәһенә йәһәтерәк барып ҡушылырға тырышты.

Һорлө яҡтан ҡыҫырыҡлаусы татарҙарҙан инде ҡотолған тигәндә, Дәржимән яурынынан ҡаты яраланды һәм, ҡулын эйәрҙә тота алмайынса, эргәһендәге Аҡман мергән Һоҡман уландарының ҡулына ауҙы.

Чоржимәнде хәүефһеҙ ергә оҙатҡас, Аҡсабикә үҙен сиҙә башлығы йәтә иғлан итте һәм Уралға табан сигенергә әмер бирҙе.

Беренсе ерҙә туҡталып ял итергә теләүселәрҙең тәкдимен Иризалашмайынса, Аҡсабикә ҡырылғандан ҡалған ике ҡоралдаш тау-ташлы урманға йәһәтерәк алып барырға ашыҡтыра.

Үҙегеҙ! Нисек кенә интекһәгеҙ ҙә, сыҙағыҙ! Татарҙарҙың ҡасып ҡотолмаһаҡ, улар беребеҙҙе лә имен ҡалдырмаясаҡ, — тип ир-егеттәрҙе өҙлөкһөҙ ҡабаландырҙы.

Һуңғы көндәрҙә арттан эҙәрләп килеү сәбәпле, һуғыш бик ҡаты ҡабатланды. Ҡаты яраланыусылар юлда барышлай ҡала башланы. Ғүмерҙәре дирүгәгә һалып күтәргән Дәржимәндең хәлен ҡайғыға һалмаған ине. Аңына килә алмайынса, ул өҙлөкһөҙ һайҡай ине. Кара яу башланғанда һәләк булған атаһы менән ҡатынынан бей ҡайныһын үҙенә саҡырҙы һәм алыштағы һәләк булған батырҙарҙың исемен ҡат-ҡат телгә алды...

Һуңғы ҡараңғылана башлағас, эҙәрләп килеүсе татарҙар артта тороп ҡалды. Әммә көсөргәнешлек кәмемәне. Ҡасып еҫеп һиҙгән бүреләрҙең олоуы ишетелде. Ниндәйҙер ҡош, дошмандан ҡасып барыусылар артынан ҡыуышһа, бер туҡтауһыҙ ҡысҡыра. Күк йөҙөн сыбар-һыбар шыдоҙҙар ҙа, ерҙәге кешеләр яҙмышына борсолғандай, бөлсөнөп-беленмәҫ ҡалтырана.

[1] Әсиргә алынған башҡорт егеттәренең күбеһе аҙаҡтан дошман тарафынан язаланып үлтерелгән. Тере ҡалдырылған меңәрләгән батырҙар, бала-сағаһы һәм ҡатындары менән бергә сит илгә ҡоллоҡҡа һатылған. Ҡоллоҡҡа һатылған башҡорт егеттәренән Мысырҙа ойошторолған ғәскәрҙәр татар-монголдарға ҡаршы һуғышыу һәм башҡа илдәр яуын кире ҡағыу өсөн файҙаланылған, Мысырҙағы башҡорт ғаскәрҙәре араһынан Ғилметдин Сәнжар әл-Башҡорди Мысырҙың әмире итеп үрләтелгән. (Рамзи М. Тальфик ал-ахбар. Т. 1, Ырымбур, 1907, 328-се бит). Башҡорт Бейбарс солтан итеп ҡуйылған, башҡорт егете Ҡалауын менән уның балалары бер быуаттан ашыуырақ Мысырҙа хакимлыҡ ҡылған. Башҡорт Насретдин әл-Наср Мысырҙа ғәйәллекле әмир, фән белгесе булараҡ танылған (Амин ал-Холи. Свя... между Нилом и Волгой М., 1962).

Дошманды тоткарлау өсөн артта ҡалдырылған һыбайлылар йәйәүлеләрҙе ҡыуып етте.

Аҡсабикәнең -рөхсәте буйынса һөҙәк тау аҫтындағы бәләкәй генә йылға буйында туҡталып ял иттеләр ҙә, тағы яҡтыһы беленер-беленмәҫтән, йәнә ҡуҙғалдылар.

Урманда ҡасып йәшәусе ҡарт-ҡоро, бисә-сәсә, балаҫаға эргәһенә еткәс кенә, Аҡсабикә яугирҙарына туҡталырға рөхсәт итте.

Ул, ырыу-ҡәбилә башлыҡтары ыенан йөҙ һәм мең башлыктарын йыйып, хәрби тәртипте һаҡлау тураһында кәңәшләште лә ире яткан ергә барҙы.

— Атайығыҙҙың хәле нисек?

— Үҙгәрешһеҙ, — тине Аҡман.

— Барығыҙ, һеҙ ҙә бер аҙ ял итеп алығыҙ.

— Әсәй, һин дә арығанһың бит!

— Мин әҙ-мәҙ серем итеп алдым, — тип алдашты Аҡсабикә. — Йоҡом бик килһә, берәйегеҙҙе уятырмын.

Шунда ғына Аҡман менән Тоҡман ял итеп алырга ризалашты.

Нисек кенә ҡыйын булмаһын, Аҡсабикә уландарыи уятманы, ире эргәһендә ултырып төн уҙғарҙы.

Таң беленә башлағанда аңына килеп, Дәржимән күҙҙәрен асты.

— Беҙ ҡайҙа?

— Урал урманында, — тине Аҡсабикә.

— Малайҙар ниңә күренмәй?

— Улар ял итә.

— Сиреү нисек?

— Имен, борсолма.

— Аллаға шөкөр! — Дәржимәндең күҙҙәренә йәш эркелде. — Сиреүебеҙ имен булһа, тыуған илебеҙ дошмандан азат ителәсәк, Алла бойорһа!

Ирен борсорға теләмәйенсә, Аҡсабикә уға сиреү юк хәленә еткерелеүен белгертмәне.

Дәржимән, яраһы һыҙлауға сыҙай алмайынса, тештарен шыҡырайта ҡыҫып, ыңғырашты.

— Ы-ы-ыһ!..

Аҡсабикә дауалаусыны саҡыртырға булғайны, Дәржимән уны тыйҙы:

— Кә-әрәкмәй!.. Зиһар... Ярам ауыртыуы әҙерәк басылды... һин эргәмдә булғас, бер кем кәрәкмәй!.. Мицл һәйбәт, рәхәт, кинәндергес!.. Ҡара яу арҡаһында, һине бәхетле итә алмауым өсөн эсем боша...

— Юҡты һөйләмә, ҡәҙерлем, мин бәхетле! — Аҡсабикә иренең тир мансылған маңлайынан үпте. — Ҡайҙа, ниҙ

дә генә шарттарҙа йәшәһәк тә, һинең менән бергә булғанда мин бәхетле!

— Әле ләме?

— Әле лә...

Дорҗимән ҡатынына текләп ҡараны.

— Рәхмәт, бисәкәйем!

— Күп һөйләшһәң, ҡыйын булыр, ҡәҙерлем...

— Юҡ, — Дәржимән, тамағындағы күмәгәйен ҡалҡытып, ауыҙын сипылдатты, — үлмәҫтән элгәре, һинең менән һөйләшеп ҡалырға теләйем.

Һауығырһың әле, Алла бойорһа.

Дорҗимән ҡыйынлыҡ менән тын алды.

Ожәлем яҡынлашыуын мин һиҙәм... Тыуған илебеҙгә дошмандан таҙартылыуын күрмой үлеүем ҡыҙғаныс... Бер үтенесем бар, бисәкәй... Тыуған илебеҙ азатлығын көрәш, мин үлгәндән һуң да, туҡталмаһын ине. Уланым Ильма мираҫҡа дошман тарафынан тапалған, таланған ватан олатайҙар ерен ҡалдырам. Башҡортостандың киләсәге малыштары хәҙер улар ҡулында...

Аҡман менән Тоҡман яуыз дошманға бер ҡасан да бирешмәҫ, атаһы. Уларға ышан, — тине Аҡсабикә.

Уларға мин ышанам, әсәһе...— Күҙҙәрен йомоп, Дәржимән тыңланы. — Сеү, кемдер йырлай түгелме?

Бер ни ҙә ишетелмәй. Бөтә ер тып-тын, — тине Аҡсабикә.

Мин ишетәм, әсәһе! Ҡайһылай һәйбәт йырлай, уның һүҙҙәре шәп, үҙәк өҙҙөргөс: «Үҙ илкәйе өсөн ҡорбан булған ир сәскә кеүек ҡыҫҡа ғүмере йәл булмаҫ».

Ироиен фекере буталыуын аңлап, Аҡсабикә өндәшмәне, Дорҗимәндең керпектәре араһына йәнә күҙ йәше әреп килде.

Аямаған йәнен, түккән ҡанын, һис бирмәгән башҡорт Уралын, — тип саҡ ишетелер-ишетелмәҫ бышылдаған ул, ул мәңгелеккә хәрәкәтһеҙ ҡалды.

Ирс үлеме нисек кенә ҡыйын булмаһын, боронғо йоласы буйынса Оҙпһоноп, Аҡсабикә иламаны, үҙен-үҙе тыныс тотарға тырышты.

Ьш! мулланы саҡыртып ясин укытҡас, Аҡсабикә ирен ике плмапдарса ерләүҙе ойоштороо.

Пыуҙыртҡандан һуң, ире мәйетен кәфенлеккә һалдыртҡан һыртындағы йыуан ҡарағас эргәһендәге ҡәберҙең ташлаған урынына мәйетте салҡан һалғас, уның йөҙөн Мәккә ҡыбылаға борҙолар. Ҡулдарын мәйеттең терһәге, аяҡ-ҡарын тубыҡ тәңгәленән еңелсә бөгөп, тәрән сокор төш-

бөндәге уйылған ерҙең буйынан-буйына ләхет ҡағалары теҙелде.

— Хәҙер ҡәберҙе күмергә мөмкин. Тәүге тупраҡты шләберәк төшөрөгөҙ, ләхет таҡталары тарҡалмаһын, — тине Баш мулла.

Ҡәберҙең яртыһынан күберәк өлөшө тупраҡ менән тултырылғас, Дәржимәндең ырыу тамғаһы һәм исеме ғәрәпсә соҡоп яҙылған ҙур ташты мәйеттең башы осона, бәләкәйен аяғы тәңгәленә ҡуйҙылар.

Ер өйөүле ҡәбер өҫтөн ҡаҙ менән ҡаплағас, Баш мулла доға уҡыны. Шунан, хәйер таратылғандан аҙаҡ, Дәржимәнден мәйетен ерләүҙә ҡатнашыусыларға өгөт-нәсихәт ныҡыны:

— Башҡорт иле азатлығы өсөн ғүмерен сарыф ҡылған Сурман хандың улы Дәржимән хәҙрәт[1] ожмахтың иң түрендә буласаҡ. Сөнки ул изгенән дә изге мосолман ине. Ул берҙән-бер Бөйөк Аллаһы тәғәләгә һәм уның иң яратҡан пәйғәмбәре Мехәммәт ғәлиәссәләмгә ихлас күңеленәи инанды. Көнөнә биш тапҡыр намаҙ уҡыны.' Ураҙаны ҡалдырманы, фытыр-хәйер биреүҙе бер ҡасан да онотманы. Ҡара яу сыҡмаһа, Мәккәгә лә барып ҡайтырға ниәте бар ине...

Мулла шымғас, меҫкен хәлгә еткерелгән ҡарт-ҡороға, ата-әсәһеҙ етем бала-сағаға, төрлө ярлы-ябағаға Аҡсабико иренән ҡалған байлыҡтың яртыһынан күберәген таратты, ә дин әһелдәренә уның кейемдәрен өләште һәм хәйер бирҙе.

VII

Бәхетһеҙлек менән бәхет икеһе бер тамырҙан үҫә тигәндәре дөрөҫтөр, ахырыһы. Дәржимәнде ерләгәндеа төнөндә Аҡмандың ҡатыны Әйшә бәпәйләне.

Ире үлеүенә хәсрәтләнһә, киленененең ир бала табыуына ҡыуаныс кисерҙе Аҡсабикә.

«Донъя үтә ҡыҙыҡ яралған. Ирем үлгәс тә, уның урынына ейәне тыуҙы. Аллаһы тәғәлә бәхетен бирһен, олатаһы кеүек ҡыйыу булһын», — тип ул бәп-бәләкәй гепо төйөнсөктәге йән эйәһен ҡулына алды.

— Бисмиллаһир-рахманиррахим!

— Әсәй, төшөрөп ебәрмә! — Аҡман сабыйы өсөн ҡурҡты.

— Төшөрмә-әм. һине лә мин үҫтергән түгелме ни?

— Мин уҫкәндә ике өләсәйем бар ине, — тине Аҡман.

1 Уҡымышлы кешеләрҙе әлгәре «хәҙрәт» исеме менән йөрөткәндәр

— Еңмешләнмә, улым!

Лҡсабикә көмөш балғалаҡ ситендәге бал менән һары майҙы бәпестең ауыҙына ҡаптырҙы.

- Бпсмилләһир-рахманниррахим! Ауыҙ-мороноң бал да мол булһын, Аллаһы тәғәләнән булып. Бәхетеңде бирһен Лллаһы тәғәлә. Олатайыңдың данын арттыр, дошмандарың һпнән дер ҡалтырап торһон!..

Сабый, тешһеҙ уртын сәпелдәтеп тамшана-тамшана, Пашп спрылтып, борғаланды. Шунан, ҡыҙарына-бүртенә, өсө тяуыш менән сарылдай башланы.

Асыҡҡан! Мә, килен, йәһәтерәк имеҙ, —ҡыҫҡырып илдған сабыйҙы Аҡсабикә әсәһенә тоттороҙо.

Өйшә, кешеләр юҡ яҡҡа яртылаш боролоп ултырғас, І улдоге иҙеүен ысҡындырып, имсәген сығарҙы һәм бәпәйенең пуыҙына ҡаптырҙы.

һайбәт имә, бешек булыр, — тине Аҡсабикә.

Осоһенең сабыйға һоҡланып ҡарауы Аҡманға оҡшаманы.

Күҙ тейҙерәһең инде!

Мыжымасы, улым. Өләсәй икәнемде онотма. Уны бпп б\тондәрҙең күҙе тейеүҙән һаҡла, әсәйендән түгел.

Кендек әбейе, күҙ теймәһен өсөн, сабыйҙың маңлайнпп буяу һөртөргә, беләгенә сепрәк бәйләргә ҡушты, — пнпе Өйшә.

Шәне эргәһендә оҙаҡ ултырырға тура килмәне Аҡсамиыго.

Гпрмә тышындағы тауышты ишетеп, ул ишеккә табан пнрғайланы.

Пимә булды?

Спреүҙән айырылып ҡалған ир-егеттәр килде, — тип һа ксылар башлығы.

Ҡайҙа улар?

Кумок кешеләр араһында торған бер нисә егет яҡынпнпы.

Бсҙ — Әйле ырыуы кешеләре, — тине уларҙың олорғп йоштәгеһе. — Сиреүҙән айырылып ҡалғас, үҙ ырыуыбыҙға ҡайткайныҡ. Татарҙар туған-тыумасаларыбыҙҙы ишмлай ҡырғандар. Бисәләребеҙҙе алып киткәндәр. Малдарыбыҙды һалдырып алыр өсөн, беҙгә ярҙам кәрәк!

Татарҙарға ҡаршы һуғышырҙай көсөбөҙ ҡалманы.— Аҡсабикә бойоҡланды.

Көс ҡалмағас, бисәләребеҙҙе нисек ҡотҡарырға?

Бслмәйем. Әйҙә, батырҙарҙы йыйып, кәңәшләшеп ҡарайык. Берәй әмәле, бәлки, табылыр, — тип Аҡсабикә ғпторҙе икенсе тирмәгә алып китте.

Ирҙе ырыуы егеттәре менән һөйләшкән әсәһе тирмәгә

ҡабат инмәйәсәген аңлап, Аҡман сабыйҙы имеҙгән ҡатыны ҡаршыһына барып ултырҙы.

— Һаман һурамы?

—• Һура, —тине Әйшә.

Үҙҙәрен ата-әсә тип тойған Аҡман менән Әйшәнең барлыҡ иғтибарын биләүҙәге тере йән эйәһе йәлеп итте. Улар өсөн был минутта донъя ҡайғыһы онотолдо.

Бәпәй арыны. Ул имсәкте ауыҙында ҡапҡан көйө йоҡлап китте. Бәп-бәләкәс кенә сабый ҙа төш күрә белә, ахырыһы. Бик йыш тертләне. Йоҡо аралаш борғоланғап ыңғайы ирендәрен ҡыймылдатып, имсәкте бер-ике тапҡыр һурҙы ла йәнә тынысланды. Тамағы туҡ булһа, бүтән нп 'кайғыһы бар инде сабыйҙың? Аллаһы тәғәлә тарафынап һәммәһе үҙенсәлекле яралған. Кешенән — кеше, хайуандан — хайуан, ҡоштан — ҡош балаһы тыуа. һәр мәхлүк, хатта тиҙәк ҡорттарына саҡлы үҙҙәреиең нәҫелен һаҡларға тырыша...

Сабыйҙы ҡулына алғас, уны ипкендереп тоторға яйып таба алмайынса, Аҡман байтаҡ аҙапланды. Бәпесенен башын һыңар ҡулына һалып, икенсеһе менән уны күкрәгено еңелсә ҡыҫҡас ҡына, ул ҡатынына йылмайып ҡараны.

— Бәпәйебеҙ еп-еңел!

— Булыр бала биләүҙән беленә тигәндәй, малайыбыҙ теремек күренә, — тине йәш әсә, ғорурланып.

— Беҙҙең зат-ырыуға тартҡас, нисек теремек булмаһын. Ана, күр, ҡашы, эйәге менән танауы хас атайымдыҡына оҡшаған!

Әйшә үпкәләне.

— Минең нәҫелем хөртмө ни? Боян менән Джик ағайҙарым Болғар иле батшалары булыр инеме эшкинмәһәләр?

— Ҡайнағаларым бик шәп ине!.. Улыбыҙ кем затыпа тартһа ла, үҙен һынатмаясаҡ, Алла бойорһа, — тине Аҡман, ҡатыны әйткән менән бик тиҙ ризалашып. — Бояи менән Джик ағайҙарындың икеһен дә ихтирам иттем, яраттым. Аҡыллы һәм батыр булғандары өсөн уларҙы болғарҙар ҙа маҡтай торғайны. Татар-монголдар менән икенсе тапҡыр Сәйен Йортто баҫып алғанда Субәдәй баһатур аҫтыртмаһа, ҡайнағаларым һаман да иҫән-һау йәшәр ине...

Үткәндәрҙе иҫенә төшөрөп, икеһе лә шым ҡалды.

— Кире ҡайтарып булмаҫтай нәмәгә үкенеүҙән хәҙер ни файҙа, — тине Әйшә, моңайып ҡына. — Яҙмыштан уҙмыш юҡ, ти. Болғар иленә дошман яуы баҫып инмәһә, бәлки, һинең менән миңә лә ҡауышырға наснп булмаҫ ине...

Лкмап, Әйшәнең күңелһеҙ уйҙарын тарҡалдырырға нимәлөнеп, ҡулындағы сабыйы менән һоҡланыуын әйтте.

Ошондай сабыйҙан тора-бара бәһлеүән ир-егет үҫеүе гожоп хәл бит! Сабыйҙы мин, ниңәлер, ағас үҫентеһенә оҡшатам. Аяҡ аҫтындағы үҫентене тапап китеүе бер нигтсл. Аҙаҡтан, тамыры нығынып буйға үсһә, уны бер кем до һындыра, тамырынан ҡутара ла алмай. Әлегә бәләкәс улым да бер заман ҡарағастай ҙур үҫәсәк, Алла боЛорһа.

Хикмәт буйға үҫеүҙәме ни? Аллаһы тәғәлә улыбыҙға Гюхет, иман, оло ғүмер биреүен теләйек, — тине Әйшә.

Улыбыҙға ниндәй исем ҡушабыҙ?

Үҙен ниндәй исем теләйһең?

Иҙеүкәй! Оҡшаймы? — тип һораны Аҡман.

Үҙенә оҡшаһа...

Әләйһә, килештек! Әсәйемә әйтәйек тә мулла саиртсһыҡ!

Л'Кмапдыщ ҡысҡырып һөйләшеүенә уянған бала бер ни аңламаған күкһел күҙҙәрен тоноҡландырып ҡараны ла, ҡ чрылып-кирелеп, иларға тотондо.

Эц-ңә, эң-ңә...

Шул саҡ бер төркөм ярандарын эйәрткән Аҡсабикә ҡ мрмою килеп инде. Ул үтә ярһыу һәм ҡыҙыу ине.

Иицә платаһығыҙ? — тип сабыйҙы әсәһе ҡулынан ҡ ҙы. Уныщ еүешләнгән йүргәген алмаштырҙы ла ишек ҡ *Лш* япында шаҡ ҡатып торған ярандарына асыулы күҙ ҡ ршыи ташланы. — Бызмырларға ваҡыт юҡлығын аңлаһығыҙ! Башҡорт ырыу-кәбиләләрендә дошмандың нисек ҡ ршыкысланыуын үҙ ҡолағығыҙ менән ишеттегеҙ! Башҡорттарҙы тотошлай ҡырыуҙы маҡсат итеп ҡуйған улар. Ҡ шеләрҙе бәләнән ҡотҡарыу өсөн, ниндәй кәңәш бирәһегеҙ? Йә, әйтегеҙ!

Кырыҫ холоҡло, уҫал Аҡсабикәгә нисек итеп яуап ҡ ргә белмәгән ярандары шым ғына торҙо.

Лкмаи менән Әйшә тирмәнән сыҡҡас, яралы һыңар ҡ , ның сепрәк менән сырмап күкрәге тәңгәлендә тотҡан Ҡ ҫон хоҙрәт баҫалҡы ғына һораны:

Ярҙам һорап, урыҫтарға сапҡын ебәрәйекме әллә?

Ышҡалар гөж итеп ҡалды.

Урыҫ кенәздәренә сапҡын ебәреүҙән файҙа сыҡ ҡ ҫмаҫ!

Алтын Урҙа биләмәһенә эләкмәй, татарҙарға яһаҡ ҡ ҙлап ксиә ҡотолған урыҫтар беҙҙең хәлде аңламаясаҡ!

Лцлаған хәлдә лә үҙ-ара һыйыша алмаған урыҫ ҡ ңдәренән өмөт юҡ!

— Сәйәси һәм иҡтисади яҡтан татарҙарға буйһоимаҫ, урыҫтарға ап-аныһат!

— Алтын Урҙа биләмәһендә булҫас, беҙгә татарҙар хужа!

— Урыҫтар ҙа үҙ аллы йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, татар-монгол иҙеүенә ай-һай ныҡ зарлана ләһа!

— Беҙгә лә урыҫтар шикелле йәшәргә мөмкин булһа, ҡылыр инек ҡылыҡты!..

Ярандарының ғауғалашыуын Аҡсабикә баҫты:

— Кемгә йәшәргә еңел, кемгә ауыр икәнлеген белмәйемме ни мин? Бәләнән ҡотолоу өсөн, берәй әмәлен табырға теләмәйһегеҙме ни?

— Хакимә — һин, беҙ ни... — тип һүҙ башлаған бейҙс Аҡсабикә асыу менән бүлдерҙе:

— Донъя имен саҡта Сурман хандың хоҡуғын сикләргә тырышҡайныҡыҙ, хәҙер, тыуған илебеҙҙе дошман тапаған саҡта, бөтә яуаплылыҡты миңә генә япһармаҡсыһығыҙмы? Ундай ғәҙелһеҙлеккә мин ҡырҡа ҡаршы! Дошмаи ҡоҡсоһон таратыусылар менән һатлыҡ йәндәргә лә минән аяу булмаясаҡ! Йә, кемдәр мине хушһынырға теләмәй, әйтегеҙ!

Бер кемдең дә ҡаршылашырға баҙнатсылығы етмәгәс, Аҡсабикә тынысланды һәм ырыу-ҡәбилә, мең, йөҙ башлыҡтары ҡатнашлығындагы беренсе кәңәшмә лә ыңғайланы.

Аҡсабикә, кәңәшмәлә ҡатнашыусыларҙы булдермән, ихлас тыңланы.

Сиреүҙе тулыландырыуға һәм дошманға ҡаршы һуғышыуға йүнәлтелгән уртаҡ фекер тупланғас, Аҡсабико һәр тармаҡ буйынса яуаплы кешеләр тәғәйенләне.

Тирмәлә япа-яңғыҙ ҡалғас, күнеле бушлығына, иреи юҡһыныуына, ошондай ҡатмарлы, яуаплы заманда ирҙәр эшенә тотоноуына эсе бошкан Аҡсабикә мендәргә йөҙ түбән ҡапланды ла үкһеп-үкһеп иларға кереште.

VIII

Башҡортостандағы ваҡиғалар Алтын Урҙа хакимы Батый ханды артыҡ ҡыҙыкһындырманы.

Ул, һарай ҡалаһын төҙөрткәс, уның ҡап урта өлөшөндә һалынғаи алтын көмбәҙле «Алтын батша» тип исемләнгән һарайында йәшәй башлағаны бирле, донъя холенән ситләшеп, бөтә иғтибарын шәхс.и тормошона йүнәлтте.

Ысынлап та, үҙ маҡсатына ирешкәс, ҡимә өсөн бошонорға уға? Батый хандан да байыраҡ, бәхетлерәк һәм ҡанлыраҡ әҙәм заты бармы икән ер йөҙөндә! Батый хандыц тормошо Көйөк хан үлгәндән һуң уның урынына бөтә монголдарҙың бөйөк ханы булып һайланған Менгу хан-ИЬЦ төшөнә лә кермәйҙер, моғайын. Әгәр ҙә ул Батый хипдыц нисек йәшәүен килеп күрһә, көнләшеүенән шартлар ине.

Дошманды ҡыйратыуҙы, талауҙы, бала-сағаһын тамырыиап ҡоротоуҙы, еңелгән кешеләрҙең ҡатындары менән түшәктә ятыуҙы, уларҙың имсәктәрен имеп ләззәтләнеүҙе ейәндәренә васыят итеп ҡалдырған Сыңғыҙ хан да донъяла йәшәүҙең мәғәнәһен нык.лап аңламаған икән!

Уның ейәне, Джучиҙың улы Батый хандың һарайынлағы харам-хана тулы ҡатындарының һылыулығына тиң Оулырҙайҙары ҡалды микән бүтән берәй илдә? Йәнең тетәлнен саҡырып иркәләп, кинән.

Батый хандыц ҡатындары эргәһенә хеҙмәтсе ҡол ҡатындар менән бестерелгән ирҙәрҙән башҡаһына инергә ҡаҡ юҡ.

Ватый хан үҙе һалдыртҡан һарай ҡалаһы менән дә горурланырға хаҡлы. Уға тиңләшерҙәй һоҡландырғыс ҡам Опр микән бүтән берәй илдә? Ер аҫтындағы торбалар буйлап аҡкан һыу, баҡсаларҙағы таштар өйемөнә килеп ҡиелгән ыңғайы, ваҡ-ваҡ тамсыларға әүерелеп, тирә-яҡка ҡарҙан, урамдарҙа түшәлгән таш плиталарҙы еүешләй, тузанды баҫа, эҫе көндәрҙә һауаны еләҫләндерә. Ҡала сиселә аҡҡоштар йөҙә, аҡсарлаҡтар ҡысҡырыша.

Һр йөҙөндәге күпселек илдәргә Батый хан үҙе хужа ҡылғас, уға ситтән киләсәк яуҙан да ҡурҡыныс көтөлмәй. Шуны күрә һарай ҡалаһы бейек-бейек стеналар-ҡәлғәләр менән уратып алынмаған. Сөнки Батый хан үҙе баш, үҙе ҡул, барлыҡ илдәрҙе дер ҡалтырандырып тотоусы берҙәнбер дпиъя хакимы, бойороусыһы.

Һирай ҡалаһының тәбиғәт күренеше менән дә һоҡланбото алмай Батый хан. Төрлө балыҡтар шығырым тулы күл-йылғаларынан, ҡырағай хайуандарҙан, йәнлектәрҙән, кош-ҡорттан өҙөлмәгән урмандарҙан башҡа, далаларында ҡымылкы, һыйыр, дөйә, кәзә-һарыҡ көтөүҙәренең дә иҫе һапы юҡ.

Батый хан сауҙа эштәрен дә тергеҙҙе. Шау-шыулы ике баҙарҙарында ғына түгел, «Ебәк юл» тип исемләнгән караван сауҙаһын да киң йәйелдерҙе.

Алтын Урҙалағы татарҙарҙың тормошо яҡшыра барыуы Татарстан илендә тороп ҡалыусы татарҙарға ла йоғонто яһамай ҡалманы. Улар, менәр саҡрым алыҫтағы ошо ғаиләләре менән күсеп килеп, үҙҙәренә оҡшаған ерҙәрҙә урынлаштылар.

Татарстандан килеүсе татарҙар яңы ергә тиҙ ҡулайлашты һәм үҙҙәрен бында хужа итеп тойорға ла өлгөрҙө. Уларҙың бер өлөшө сауҙа эше буйынса дан яуланы. Икенселәре, мосолман динен ҡабул итеп, төркисә һөйләшерго өйрәнде һәм муллалыҡҡа уҡыны. Ҡалғандары, Алтын Урҙа дәүләте сиреүендә хеҙмәт итергә ризалашып, Батый ханға буйһонған илдәрҙә ҡаты тәртип урынлаштырыуҙа һәм һалым йыйыуҙа тырышлыҡ күрһәтте.

Татарҙарҙың "һан яғынан тиҙ арала күбәйеүе, Алтын Урҙа дәүләте аппаратында һәм хан һарайында өҫтөнлөк итеүе, ә ике мең ярым самаһы ғына ҡалған монголдарҙың яйлап-әкренләп юҡҡа сығыуы һәм тарҡалыуы Батый ханды борсолдорҙо.

Ләкин татарҙарҙың хыянатсылығы тойолмағас, ул үҙеиүҙе тыныслandырҙы.

«Кемгәлер таянырға кәрәк бит. Алтын Урҙа ханлығына ямanатлыҡ ҡылмағас, әйҙә, йәшәһеңдәр, миңә хеҙмәт итһендәр», — тип уйлап, ул һаулығы ҡаҡшауына, ҡартлығы етеүгә йыш зарланды.

Ғүмерҙе һатып алырға, оҙайтырға мөмкин булһасы!

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бай менән ярлы ла, хан менәи ябай кеше лә үлемгә типә-тиң! Ожмах шикелле шәп тормошто татығандан һуң, ошондай донъяны ташлап китеүе Батый ханға бигерәк тә аяныслы! һис юғында, йәнә биш-алты йыл ғына булһа ла йәшәргә насип ҡылһасы Бөйек haya!..

Үлем хаҡында уйлана торғас, Батый хан күңел төшөвкөлөгөнә бирелде һәм эскелеккә һалышты.

Бер саҡ, ситтән килеүсе илселәрҙе ҡабул иткәндо, айный алмайынса, тиктомалға ҡыҙып китте.

— Яғышлы күренергә маташып йылмайһағыҙ ҙа, һеҙҙең эсегеҙ тулы боҙоклоҡ! Барығыҙ ҙа минән элгәре үлергә тейешһегеҙ, —тип ул бер ниндәй гонаһы булмағаи кешеләрҙе язалап үлтерергә бойорҙо.

Батый хан шунда ла тыныслана алманы һәм һаулығып ҡаҡшатты.

Бите ҡып-ҡыҙыл таптар менән сыбарланып, Батый хаи түшәккә йығылды. Ул оҙаҡ ауырыманы, 1256 йылдың йәйендә яҡты донъяны ташлап китте.

Бөйөк Сыңғыҙ хандың нәҫел-ырыуынан бер Батый хандың мәйете генә тыуған иленә оҙатылманы. Уның мәйетс Каспий диңгеҙе далаһында ҡазылған тәрән соҡорға ҡатындары, хеҙмәтсәндәре, аттары һәм һарыҡтары менән бергә күмелде [1].

[1] Большая Советская энциклопедия.

Батый хандың урынына ҡалған уның улы Сартак та бер ппсә ай ғына йәшәне.

Сартак үлгәндән һуң, Алтын Урҙаның хакимы булып Батый хандың бер туған ҡустыһы Берке хан ҡалды.

1257 йылда, Берке хандың бойороғо буйынса, Алтын Урҙа биләмәһендәге илдәрҙә йәшәүсе бөтә кешеләрҙең, сабыйҙан алып иң оло йәштәге ҡарт-ҡороға саҡлы, һанын исәпкә алыу эше уҙғарылды. Шул переписган сығып, һәр Пои башына һалым билдәләнде.

Алтын Урҙаға буйһонған илдәрҙә бола сыҡмаһын өсөн, һалым йыйыласаҡ илдәргә йөҙ, мең һәм төмән башлыҡтары ер-яңынан тәғәйенләнде. Баҫҡаҡтарға буйһонорға теләмәүселәрҙе, һалым түләргә теләмәүселәрҙе йәки ҡаршылыҡ күрһәтеүселәрҙе ҡаты язаларға, үлтерергә һәм сит илгә ҡоллоҡҡа һатырға ҡушылды.

Карателдәр менән баҫҡаҡтарҙың этлегенә сыҙамаған башҡорттар йәнә яуға күтәрелде. Әммә уларҙың һәр бонтһы аяуһыҙ ҡыйратылып, унда ҡатнашыусылар ҡоллоҡҡа һатылды.

Купселек татарҙар ислам диненә күсеп, төркисә һөйләниоргә һәм ғәрәпсә уҡырға һәм яҙырға өйрәнде.

Берке хан, мосолмандарға яраҡлашырға тырышып, һарай калаһына Багдадтан баш мулла итеп ебәрелгән Әбү Хатип әл-Шакир имам-хәҙрәткә барҙы һәм ислам динен ҡабул итергә теләк белдерҙе [1].

Изге ниәт, бик тә изге эш. Аллаһы тәғәлә һиңә оҙон гүмер, һаулыҡ бирһен, байлығыңды арттырырға ярҙам итһын, — тип имам-хәҙрәт уны иртәнге намаҙға йыйылыусы мосолмандар эргәһенә алып барҙы һәм Алтын Урҙаның беренсе ханы — Берке хан ислам диненә күсергә мөмкүе тураһында тантаналы белдереү яһаны.

Был мөһим яңылыҡты мәсеттәге мосолмандар үтә тыйнаҡлыҡ һәм һағайыу менән ҡабул итте.

Берке хандың ислам диненә күсергә теләүе ихлас үҙгәреш микән? — тип мосолмандар араһынан кемдер шик Ослдерҙе.

Длғын Урҙала уҫаллығы менән даны тарал.ған Берке үҙ үҙен бында йыуаш тотто һәм мосолмандар ҡаршыһында сығып баҫырға мәжбүр булды.

Пслам диненең сафлығына ихлас инанам. Берҙәнсәр Бөйөк Аллаһы тәғәләгә, уның иң яратҡан пәйғәмбәре Мич.шмот ғәлиәссәләмгә табынырға, доға-сүрәләрҙе ятмрго, намаз ҡалдырмаҫҡа һәм, мосолман динен барлыҡ илдәрҙә таратыу өсөн көрәшәсәгемде белдереп, ант итә-

[1] *Голюбев С. М.* История России. М, 1960, т. 3, 167-се бит.

мен, — тип Көрьәнде үпкәс кенә, мосолмандар араһында йәнләнеү һиҙелде.

— Иншалла!

— Берке хац ысын мосолман!

— Берке хан ислам диненә күскәс, ул беҙгә ныҡ ярҙамлашасаҡ!

— Кешеләрҙе мосолманлаштырыу эше лә ыңғайлана!..

Берке хандың ислам диненә күсеүе Алтын Урҙа дәүләтендә генә түгел, донъялағы барлыҡ мосолман илдәрендо оло ваҡиға нне.

Шул уҡ көндө имам-хәҙрәт Әбдел-Хатип әл-Шакирҙыц тәҡдиме буйынса ҡала ситендәге далала Берке хандың ислам диненә күсеүенә арналған тантаналы мәжлес уҙғарылды.

Унда көрәшселәр көс һынашты, мәргәндәр уктарҙаи сәпкә атты, һыбайлылар ат сабыштырҙы...

Халыҡ өсөн ашау-эсеү бушлай әҙерләнде, дәрәжәле кешеләр хан һарайына саҡырылды.

Мәскәүҙең Бөйөк кенәзе илсеһе Василий Пашков Алтын Урҙа хакимы һаулығына тост тәҡдим иткәс, Берко хан араҡы эсеүҙән беренсе тапҡыр баш тартты.

— Мосолманға эсеү — гонаһ, — тип ул ҡымыҙ һорап алды.

— Берке ханға ярамағас, мин дә эсмәйем, — тип Василий Пашков үҙенә ҡымыҙ ҡойҙортто.

Мәскәү кенәзе илсеһенец илгәҙәклеге, шартына ҡарай яраҡлаша белеүе Берке ханды арбаны һәм улар мәжлестең аҙағына тиклем дуҫтарса һөйләшеп ултырҙы.

IX

Башҡорттарҙың азатлыҡ өсөн көрәше Берке хан заманында ла дауам итте.

Аҡсабикә, аҙ һанлы ғәскәре менән асыҡ урында дошманды еңә алмаясағын аңлап, һуғыш тактикаһын үҙгәрттс.

Яһаҡ түләтергә, ыал йыйырға, ир-егеттәрҙе хан сирсүенә оҙатырға тип ауылдан ауылға, йәйләүҙән йәйләүгo йөрөүсе хан нөгөрҙәрен яйлы урында һағалап тороп, башҡорттар ,шулар өҫтенә аңғармаҫтан ябырылдылар һәм уларҙан һуғышып алған малды хужаларына тапшырҙы йәки Урал төпкөлөнә ҡыуҙы.

Аҙаҡҡы һуғыш Аҡсабикәнең ҡаты яраланыуы меноп тамамланды.

Ул, яҡты донъяла инде күп йәшәй алмаясағын һиҙси, Аҡман менән Тоҡманды түшәге эргәһенә саҡырҙы.

— Уландарым, атайығыҙ артынан китергә миңә лә сирит стте. Донъя мәшәҡәте минән һеҙгә ҡала. Үлер алдынан атайығыҙ әйтеп ҡалдырған васыятты һеҙгә әйтеп ҡалдырыуҙы үҙ бурысым тип һанайым. — Аҡсабикә уғата ям, бүленә-бүленә һөйләне. Түшендәге ҡаты яраһы һыҙлауына интегеүҙән бик йыш шымып ятырға тура киләлер, болки, уға. — Дошманға ҡол булып йәшәүҙән азатлыҡ өсөн һуғышып үлеүҙе биш артыҡ күрҙе атайығыҙ. Үиың һүҙен иҫегеҙҙән сығармағыҙ. Уны бер ҡасан да онотмаһағыҙ ине.

Атайымдың васыятын бер ҡасан да онотасаҡ түгелбеҙ, осой. Тыныс бул, — тине Аҡман.

Лҡсабикә, йыш-йыш һулап, күҙҙәрен йомдо.

Йәнә бер үтенесем бар... Мине лә атайың ҡәбере башында мосолмандарса ерләһәгеҙ ине.

һәммәһе үҙең теләгәнсә башҡарыласаҡ, әсәй,— тине Аҡман, тамағын ҡалҡындырып. Ә Тоҡман, илауын әсәйҙән бслгертмәҫкә тырышып, тауыш-тын сығарманы.

Оммә кесе улының илауын әсә һиҙҙе.

Тоҡман, балаҡайым, балауыҙ ныҡма. Ир кешенең ғайбы га бирешергә хаҡы юҡ!

Гпкман сыҙай алманы.

Осәй, әсәкәйем минең, • — тине лә буҫлығып илай бешплппы.

Лҡмандың да керпектәре йәшләнде.

Аҡсабикәнең һөйләшер хәле ҡалманы.

Бә-бә-бәхил бу-булығыҙ, — тине лә йән меңән тартышлаша башланы.

* * *

Аҡсабикәнең мәйете ире ҡәбере эргәһендә ҡазылған ҡабырҙа күмелде.

Әсәһенең етеһен укытқан көндө тынғылыҡ булманы. Әсиргә алынған ҡатын-ҡыҙ менән бала-сағаны ҡоллоҡҡа һпгырға алып барыуҙарын ишеткәс тә, Аҡман менән Тоҡман командалығындағы отряд уларҙы ҡоткарып алырға тырышты.

Аҡсаттарына ирешеүгә рухланған йәп-йәш яу башлилпры Баҙы йылғаһы буйындағы башҡорттарҙан һалым Пыйыусы баҫҡаҡтарҙы эҙләп китте.

Юлда һейләшмәнеләр.

Кпра яуға саҡлы бөтөн ер ҡырағай хайуандар һәм ҡ|»| квтөүҙәре менән шығырым тулы ине. Утыҙ йыл самаһы ваҡыт эсендә һәммәһе ҡоротолдо. Исмаһам ҡуян йәки ҡ м.) Оорәсе осраһасы! Өҙлөкһөҙ талана торғас, мал бөтө-

рөлдө, сәсеүлектәр ҙә ташландыҡ хәлгә еткерелде. Хеҙмәткә яраҡлы башҡорт егеттәре аттары, ҡоралдары, аҙыҡ-түлектәре менән Берке хан сиреүенә оҙатылды. Ә өйҙә ҡалған ҡатындарына хужалыҡ эше менән шөғөлләнеү бурысы йөкмәтелде. Өҫтәүенә, бала-саға ауыҙынан өҙөп, баҫҡаҡтарға барлы-юҡлы ризыҡтарын тапшырырға Һәм көс еткеһеҙ һалымды түләргә тейештәр.

Башҡорттарҙың, йәшәү шарты үҙгәрмәһә, аслыҡтан ҡырыласаҡтарын аңлап, Аҡмандың йөрәге әрнене.

Ҡараңғы төшкәс, төнгө тынлыҡты боҙоп, һаҡ ҡошонон тауышы ишетелде. Әрәмәлектә илек бәрәсе баҡыра башланы. Һирәк-мирәк булһа ла, ҡырағай хайуандар ҡалған икән әле...

Юл ыңғайында осраған йәйләүҙә туҡталып, төн уҙғарырға килештеләр.

Йәйләүҙәге ирҙәр, карателдәрҙең үс алыуынан ҡурҡып, боласы башҡорт егеттәрен теләр-теләмәҫ ҡунырға калдырҙылар.

— Бында йоҡлап кнтеүегеҙҙе баҫҡаҡтар ишетһә, беҙҙе имен ҡалдырмаясаҡтар, — тине ҡохо алынған ҡарт.

Ғәрәп сәйәхәтсеһе Әхмәт Һбн-Фаҙлан менән осрашҡаи «ғәйрәтле, уҫал, ҡурҡыныслы, батыр» башҡорттарҙыц ейәндәре ошондай меҫкен хәлгә еткерелеүе Аҡманды тетрәтте.

— Ҡурҡма, бабай, һеҙҙе бәләгә ҡалдырмабыҙ, — тип ул яугирҙарына ятып ял итергә ҡушты.

— Үҙең ниңә йоҡларға ятмайһың? — тип һораны Тоҡман.

— Мин һеҙҙе һаҡлайым.

— Әләйһә, мин дә һинең эргәндә ултырам.

— Бар, әҙерәк ял пт тә, мине алмаштырырһың, — тиир Аҡман.

Шунан һуң ғына ағаһы әйткәнгә буйһонорға мәжбүр булған Тоҡман, баш аҫтына эйәрен ҡуйып, йоҡларга ятты.

Тоҡмандың өҫтөнә кәзәкей япты ла Аҡман һүрелп башлаған утлы торонбаштарҙы өйөп һалды. Ут ҡабаттаи ялҡынланды. Ул, осҡондарын сарт та сорт сәсә-сәсә, шашынып бейергә тотондо.

Аҡман ҡыҙыу янған уттан ситкәрәк шылды.

Яҡында ғына өкө оһолданы. Уның тауышына уянған һайыҫҡандар йоҡо аралаш шаулашып туҡталғас, йәпо тынлыҡ урынлашты.

Тау аръяғынан ҡабаланмай ғына күтәрелгән ай яҡтыһы ергә йәйелде, ә күк йөҙө йондоҙҙар менән сыбарланған. Ана, йондоҙҙан бер оскон айырылды. Ул ергә табап

ıyp тпҙлектә осоп килде лә, ниндәйҙер эҙ ҡалдырып, ирты юлда һунде.

Үлгәи кешенең йәне йондоҙҙағы ожмахҡа оса тигән-40р0 дөрөҫ микән әллә? Бәлки, тамуҡ та шул йондоҙҙарҙың берәйһендәлер? Икенсе донъялағы тормоштоң нисек икәнлеген атаһы менән әсәһе төшөндә булһа ла белергәһәсе Аҡманға.

Клрто эсендәге аттар хорһолдап сапсына башлағас, ишек һпзенгән эттәр ҙә лауылдап өрөргә тотондо.

Быҫҡып янған утты таратып һүндерҙе лә Аҡман яугирҙарын уятты.

Апа, кемдәрҙер беҙҙең яҡка яҡынлаша, һаҡ булығыҙ. тпп ул яугирҙарын уңайлы ерҙәргә урынлаштырҙы.

Поҙ-йөҙ илле аҙым самаһы ара ҡалғас, һыбайлылар шринмо йәйләүҙе уратып алды.

Уларҙың һис шикһеҙ дошман икәнлеген аңлап, Аҡман ·.·.ларҙан ·атырға бойорҙо.

hcp ппсә кеше ергә йығылды, ҡалғандары киреге бо-

Эҙәрләргә! — тип ҡыскырҙы Аҡман.

Ҙиз арала аттарына атланған егеттәр ҡасып барыусыларҙы эҙәрләне. Уларҙы ҡыуып еткәс тә, ҡамауға алдылар.

Тоңдо һөжүмгә килеүселәрҙең башҡорт икәнлеген күрҙе, Аҡман аптыраны.

Яуыздар! Беҙҙе үлтереп, дошманға ярамһаҡлы буларға тсләгәйнегеҙме?

Ҡолдарға алынған башҡорт егеттәре, ҡоралдарын ташланы. Аҡман алдында теҙләнде.

Зинһар, беҙҙе ярлыҡа!

Хыянатсы башҡорттарҙың йәшереп ҡалдырылған быялырын тапҡас, Аҡмандың асыуы ҡабарҙы.

Уларҙы ниндәй маҡсат менән һаҡлап алып ҡалды-

Чи.гпасылар өндәшмәне.

Аҡман һорауын йәнә бер тапҡыр ҡабатланы ла уң ҡулында Оиклəп тоткан ҡамсыһын һелтәне.

Камсыларға!

Хыппатсы башҡорттарҙың тәне телгеләнеп бөттө. Әммә бер белгәндәрен әйтергә теләмәнеләр.

Аҡман һорау алыуҙы дауам итте:

Инпдой маҡсат менән беҙҙе үлтерергә килдегеҙ?

Шунда ла хыянатсылар өндәшмәгәс, боласы егеттәрҙең ишенер пыгы бөттө:

Үҙ башҡорттарын үлтерергә маташыусы һатлыҡ ҡолдар мсиәп ниңә сөсөкәйләнергә!

— Улар дошмандан да яманыраҡ!
— Һатлыҡ йәндәрҙе аямаҫҡа!
— Язалап үлтерергә!..

Аҡман, ярһыған яуҙаштарын көс-хәлгә тыныслandырып, әйтте:

— Хыянатсыларҙы тере ҡалдырһаҡ, ҡабаттан яуызлыҡ ҡыласаҡтар. Шуға күрә уларҙың яҙмышын үҙегеҙ хол ҡылығыҙ.

Аяу булмаясағын аңлап, хыянатсылар ҡысҡырыша башланы:

— Туҡтағыҙ!
— Беҙҙе кем ҡоторттоғанын әйтәбеҙ!
— Бернексәгә ярлыҡағыҙ!..

Аҡман ҡамсыһын һелкте.

— Сабыр итегеҙ, егеттәр!

Хыянатсыларҙы әрәмәлеккә алып барып язаларға йыйналған боласы ир-егеттәр туҡталғас, Аҡман шымыбыраҡ торҙо.

— Йә, көтәм. Ни әйтергә теләгәйнегеҙ?

Ҡулдары артҡа шаҡара бәйләнгән хыянатсы егет ҡаршыһындағы бәһлеүән кәүҙәле, һөмһеҙ ҡарашлы кешего ым менән күрһәтте:

— Беҙҙе ул ҡоторттo!

Ул әйткәнде дөрөҫләп, бүтән башҡорттар ҙа ҡысҡырышты:

— Эйе, беҙ уға ялландыҡ!
— Бишәр тәңкә акса бирәм, тине!..

Аҡман беренсе булып һүҙ башлаған егет эргәһсио барып баҫты.

— Бөтәгеҙ ҙә бер юлы ғауғаламағыҙ. һәммәһен һии һөйлә. Беҙҙе үлтерер өсөн ялландығыҙмы?

— Бөтәгеҙҙе лә түгел... Башҡорт ханының нәҫел-ырыуын ҡороторға ялландыҡ. Уның тамыры ҡороһа, илдә тыныслыҡ урынлашасаҡ, татарҙар беҙҙе имен-аман ҡалдирасаҡ, тине ырыу башлығыбыҙ.

— Ырыу башлығығыҙ кем?

Бәһлеүән кәүҙәле бер кеше:

— Ырыу башлығы — мин, —.тип яуап ҡайтарҙы.

Аҡмандың күҙ ҡарашы ырыу башлығына йүнәлде.

— һинең ниндәй үсен. бар башҡорт ханының нәҫел-ырыуында?

— Башҡорт ханының нәҫел-ырыуында минен үсем юҡ, — тине ырыу башлығы.

— Булмағас, ниңә хыянат юлына баҫтың?

— Аптырағанлыҡтан... Шохор баҫҡаҡ ҡатыным менән

Сала-сағамды аманатлыҡҡа [1] алды. Аҡман менән Тоҡманды үлтерһәм, ғаиләмде өйгә ҡайтарасаҡ. Ул ҡушҡанды үтомоһәм, сит илгә ҡоллоҡҡа һатасаҡ, — тине ырыу баш-

Үҙенең кем икәнлеген танытҡас, Аҡман һораны:

— Беҙҙең бында икәнлегебеҙҙе ҡайҙан белдең?

— Йәйләүҙә йәшәүселәр ебәргән бер малай килеп әйтте, - тине ырыу башлығы.

Кнсо кис башҡорт егеттәрен йәйләүҙә ҡундырырға теләмәгән ҡарт Аҡман ҡаршыһына сығыш теҙләнде.

Зинһар, ярлыҡа. Яңылыштым. Татар баҫҡағының кәте бойороғо шулай булғас, мин ҡалайтайым?

Тор, бабай, — тине Аҡман.

Карт, тормайынса, үҙ хәбәрен һөйләне:

Язалаһаң, минең яңғыҙымды язала! Бүтәндәрҙең өшө яманлыҡҡа ҡыҫылышы юҡ!..

Киртты иғтибарһыҙ ҡалдырып, Аҡман ырыу башлығынын төбәлде:

Ғаиләнде аманатҡа алған Шохор баҫҡаҡ әле ҡай-

Гөмбәр ауылында, — тине ырыу башлығы.

Ул ауыл алыҫмы?

Ун биш саҡрым самаһы алыҫлыҡта.

Шохор баҫҡаҡтың кешеләре купме?

Пөҙҙән артығыраҡ, — тине ырыу башлығы.

Артобан ниндәй ҡарарға килергә белмәйенсә, Аҡман ошо калыбыраҡ торҙо.

Башҡорт ырыу башлығының һатлыҡ йәнгә әүерелеүе, үҙ ҡштлығы өсөн көрәшәһе, берҙәмлекте нығытаһы урынға башҡорттарҙы башҡорттарға ҡаршы һуғышырға алып киткән уояуызлыҡтың яуызлығы түгелме?

Болаға күтәрелеүсе ир-егеттәр, Аҡмандың икеләнеүле ошоға күмелеүен аңлап, шаулашты:

һатлыҡ ырыу башлығын ярлыҡаларға теләйһенме?

Уға — үлем!

Рас!

һотлыҡ йәндәргә — эт үлеме!..

Аҡман һаман икеләнде.

Ул, ҡҡ яҡын ярҙамсыларын ситкәрәк алып барып кәңәшләшкәс ҡснә, кире әйләнеп килде.

Бернексегә ярлыҡайым. Әммә белегеҙ: икенсе мәрәт ялҡаулыҡ ҡылыуығыҙҙы ишетһәм, яҡшылыҡ көтмәгеҙ, тип мҫкәртте лә хыянатсы башҡорттарҙы баҫҡаҡ ырыуына ҡаршы һуғышырға алып китте.

---

[1] *Аманат* — бороиғо заманда заложникты шулай йөрөткәндәр.

Шохор баҫҡаҡ отряды ҡыйратылғандан һуң, Аҡман менән Тоҡмандың даны ил буйынса таралды. Дошмаи тарафынан талана-туҡмала торғас күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән башҡорттарҙың рухы ҡабаттан күтәрелде, тыугаи ил азатлығы өсөн көрәшергә ышаныс тыуҙы.

Боласыларға яңынан-яңы кешеләр ҡушылған һайын, карателдәрҙең хәле мөшкөлләнә барҙы. Берке хан ебәргән төмәндәр ярҙамға килеп еткәс кенә, улар бер аҙ иркенләне. Әммә төндә аңғармаҫтан һөжүм итеп, көндөҙ ҡайҙалыр эҙһеҙ юғалған баш күтәреүселәрҙе ҡыйратырға мөмкин булманы.

Көҙ етте.

Ер өҫтө туңып, һалҡын көндәр башланғас, башҡорт яуы һүрелде.

Яҙ еткәнсе дошманға ҡаршы көрәште туҡтатырға мәжбүр булған боласы ир-егеттәр карателдәр үтеп инә алмаған Урал төпкөлөндә ҡыш уҙғарырға әҙерләнде.

Буранлы ҡышты үткәреүе еңел булманы уларға. Шулай ҙа барлыҡ ауырлыҡтарға сыҙанылар. Аттары тибеин лектә ҡышланы, ә екке аттарға йыла ағасы ҡайыры ваҡлап ашатылды.

Март еткәс, Аҡман:

— Аллаға шөкөр, яҙғы ай етте! Ҡара ергә аяҡ баҫырға күп ваҡыт ҡалманы, — тип яҙ һулышы менән һоҡланды.

Ҡояш нурҙарына сағылған ҡарҙың күҙ алдында комөүенә, земләнка ҡыйығынан тамсылар супылдап тамыуыии Аҡмандың ҡатыны Әйшә лә шатланып бөтә алманы.

Ҡара башлы турғайҙың сутылдаған моңло тауышын, беренсе тапҡыр ишеткәс, аяҡтарын сатай-ботай һелкетеп сыр-яланғас урындыҡҡа йәйеүле түшәктә ятҡан малайыңң ҡарап, ул көләмһөрәне.

— Иҙеүкәй, бәпесем минең, ишетәһеңме, ҡара башлы турғай һинән көлә бит! Иҙеүкәй ыштанһыҙ, бестәтәү, бестәтәү, ти!

Иҙеүкәй, әсәһе әйткәнде аңлаған һымаҡ тешһеҙ ауҙтын йәйелдереп, көлдө.

— Ыгы-гы, ыгы...

— Әһә, һин дә ояла беләһеңме ни?- Эх, тумастайым минең! — Әйшә малайының яланғас осаһынан супылдатып үбеп, һөйҙө-һөйҙө лә бала ҡараусы ҡатынға тоттороҙо. — Мә, биләүгә билә!

Бала ҡараусы Миңниса исемле ҡатын, Иҙеүкәйҙе ҡосаро сөрәк онтағы һалынған төргәккә төрөп, сәңгелдәкйоклатырға һалғас, уфтанды.

Эх, замана! Башҡорт ханы вариҫы ошондай сәңгелдәгә ятырға тейеш инеме?

Допъяның эсеһен-сөсөһөн татып үҫһә, бешегерәк ҡалар, тмп Әйшә үҙенең ҡайғы-хәсрәтһеҙ уҙғарған баланың иҫенә төшөрҙө.

Ләкин ул тормоштоң иң ауыр михнәте алда икәнлеген белмәй ипе әле.

Нкыидагы ауылдан аҙыҡ-түлек килтерергә тейешле ике поҫ дошман яғына ҡасыуы асыҡланғас, землянкаларҙың ышлаусыларҙың ҡото алынды.

Ярабыҙҙа һатлыҡ йән йәшәгән икән!

Ҡзылай булғас, ҡалайтырға?

Ьолки, ул беҙҙе һатмаҫ? .

Һатмаҫ әҙәм дошман яғына ҡасамы?..

Ир егеттәрҙең борсолоуы Аҡманға ла тәьҫир итте.

Ьүтән берәй хәүефһеҙ урынға китергә кәрәк, — тип ҡарарына юлға әҙерләнергә бойорҙо.

Ләкин улар ҡасып китергә өлгөрмәне, ҡасҡын башҡорт плып кнлгән карателдәр һөжүм башланы.

Карателдәргә ҡаршы ир-егеттәр батырҙарса алышты. Боласыларҙың күбеһе ҡырылып, нуғышырға ҡоралданмаған ниарга ризыҡтары бөттө.

Шундай шарттарҙа оҙаҡ ҡаршылаша алмаясаҡтарын аңлаған Ләкман, япа-яңғыҙы йәшәүсе һунарсыға бала ҡалдыҡотыпды, Әйшә менән малайын ҡалдырҙы ла ҡарлы томан уртаһында ҡамауҙы йырып сығырға һәм тау аръяғындағы ауылға табан сигенергә ҡушты.

Ирҙәр көрткә бата-сума ҡая ташлы тау һыртына күтәрелә, көн боҙолдо. Яҙғы буран да көсәйә. Көн яҡтыһы ҡалмаҫҡа ло баҫылманы, киреһенсә, бөтөн ерҙе томалап, ҡараңғылыҡ до яманыраҡ ҡоторондо.

Ирҙәр пскыһыҙ буранда аҙашып үлеүҙән ҡурҡып, кешенең пср Осреһенә һырығышты. Ут яғырға, ышығыраҡ ҡыуышлы эҙләп табырға ла мөмкинлек булманы уларға.

Ни|> ойөмөн борхолдороп ҡоторонған буран икенсе, өсөнсө, дүртенсе көндө лә баҫылманы.

Урал аръяғындағы яҙғы буран алты көн, алтыһы ла «ете көн» тигәндәре ошолор инде. Ул баҫылыуға йәнә ике көн ҡалды. Беҙҙең эш мөшкөлләнә. Асығыуҙан да бигерәк, гуцып үлеүселәр һаман күбәйә», — тип уйланы Ләкман.

Бер аҙ ваҡыт уҙғас, уның фекере буталды, өшөүе һиҙелмәс, ә ҡолағы төбөндә еҙ ҡыңғырау тауышы сыңлап киткәндәй тойолдо...

Ирҙәр пскыһыҙ яҙғы буранда Аҡман менән Тоҡман колағындағы боласы башҡорттар туңып үлгәндән

шуң[1], кешеләрҙе дошманға ҡаршы күтәреүҙәй һәләтлс ир-егеттәр ҡалманы һәм Башҡорт иле буйынса ҡанлы террор башланды.

Башҡорт ханының нәҫел-ырыуынан бер кемде лә ҡалдырмаҫҡа тырышҡан карателдәр Аҡмандың берҙән-бер улы Иҙеүкәйҙең ҡайҙа икәнлеген хәбәр итеүсегә оло бүләк бирергә вәғәҙә итте.

Утарҙа йәшәүсе һунарсы карателдәргә һатылманы. Яҙғы ер-һыу ҡороғас та, татарҙар яҡын-тирәләге урманды пиҙеп йөрөүе тураһында хәбәр таралды.

— Уларҙың йөрөүе бер ҙә бушҡа түгел. Иҙеүкәйҙе эҙләмәйҙәр микән, — тип һунарсы Әйшә менән уның улын иҫке кәбән аҫты төндөгөнә йәшерҙе.

Карателдәр килгәс, ул бер ни белмәмешкә һалышты, ә бала ҡараусы Миңнисаны үҙенең ҡыҙы тип таныты.

Карателдәр китергә ҡабаланманы.

Улар һунарсы өйө тирәһендәге ерҙәрҙе ҡат-ҡат тикшереп сыҡтылар. Бер нисә тапҡыр былтырғы кәбән эргәһенә килделәр.

Асығыуға һәм тонсоҡторғос һауаға сыҙамаған сабыйҙы Әйшә өҙлөкһөҙ имеҙҙе. Сабыйы тауышын сығармаҫҡа тырышып, ул йәнен усы төбөндә ҡыҫып тоторҙай хәлгә етте.

Карателдәр кәбән эргәһенән китмәй оҙағыраҡ торһа, Иҙеүкәйҙе Әйшә тынысландыра алмаясаҡ.

Аяҡ тауышы ҡабаттан яҡынлашты. Ул төндөктө кәбән тишеген ҡаплаған бесәнде аҡтара башлағас. Әйшәнең ҡото алынды: «Иә, хоҙай, әҙәлебеҙ етеүе ошомо?!»

Әйшәнең борсолоуы бушҡа булған. һунарсы:

— Йә, сығығыҙ, тегеләр китте, — тип әйткәс кенә, малайы бәләнән ҡотолоуын аңлап, ҡыуанысынан ни эшләргә белмәгән Әйшә ҡыҫҡырып ебәрҙе һәм тауыш-тынһыҙ ғына иларға тотондо.

* * *

Ислам диненә күскән Берке хан, үҙенең нсемен мәңгеләштерергә ниәтләнеп, Аҡ тубә йылғаһының үрендәге һоҡландырғыс тәбиғәтле ерҙә өр-яңы ҡала төҙөттөрҙө һәм унда Гөлстан тип исемләнгән күкһел төҫтәге хан һарайы һалдыртты.

Берке ханға яңы ҡалала оҙаҡ йәшәргә насип булманы. Ул 1266 йылдың көҙөндә яҡты донъяны ташлап китте.

[1] Урал аръяғындағы яҙғы буран шул замандан бирле Аҡман-Токман бураны тип йөрөтөлә.

Ьсркс хап үлгәндән һуң ҡораллы көскә генә таянған Алтын Урҙа дәүләте үҙенән-үҙе тарҡаулана башланы.

Иң оуол Ҡара диңгеҙ далаларында йәшәүсе Нуғай Ел Ллгып Урҙа дәүләтенә буйһоноуҙан баш тартты һәм П ҰЮ бойопдороҡһоҙ Нуғай Урҙаһының ханы тип иғлан ИIV.

Ҡаҡучңзың нәҫел-ырыуынан сыҡҡан кенәз Нуғай Алтын Урҙа менән дошманлашты һәм уға ҡаршы көрәште.

Ул, Алтын Урҙа дәүләтендәге туғандары менән бер I ы, Берке хан урынына ҡалған Тудай-Менгуны тәхетеңцплатты.

Тудай-Менгу урынына Нуғай теләге буйынса ҡуйылған хпп тәхетендә ике аҙнанан артыҡ ултыра алманы. хаи тәхетенән Тудай-Менгуның улы Тимер бәреп пр,ю һәм Алтын Урҙа дәүләтендә хан артынса хан алмашына башланы.

Алтыи Урҙа хакимы булырға тырышҡан Сыңғыҙ хан иропең балалары бер-береһен аяманы. Улы — атаһын, ағаһын, туған-тыумасаларын үлтереп, хан тәхете өсөн көрәште.

1312 йылда ике аталаш ҡустыһы Елбасмышты үлтергән хап аҡ кейеҙгә күтәрелгәс кенә, Алтын Урҙалағы башҡаҡ ҡыланышҡа сик ҡуйылды һәм бөтөн ерҙә үзәкләшеү урынлашты.

Алтын Урҙаның хакимы тип иғлан ителгәндең беренсе ҡарарынан үк Үзбәк хан үҙенең күптәнге уй-хыялын бойомға ашырырға ашҡынды.

Уның ҡушыуы буйынса, иң әүәл Алтын Урҙаның баш ҡалаһы һарай-Батыйҙан Берке хан төҙөткән һарай-Берем.чпһына күсерелде. Сөнки һарай-Берке караван юлыныңүҙәге — Монголияға, Ҡытайға, Һиндостанға, Перем I, Пугайға, икенсе төрлө әйткәндә, Күк Урҙаға илткән ҡулайлығында тороуы менән әһәмиәтле ине. Ҡырым, Урта Азия I юм башҡа илдәрҙең караван сауҙаһы менән бәйләнешен оуалдырыу яғынан да һарай-Берке уңайлы һаналды.

Ырғыҡ илдәрҙе бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә тоткан караван юлы бер ҡасан да буш торманы, шау-I ыы, ығы-зығылы ылауҙар менән шығырым тулы булды.

Караван юлынан Алтын Урҙа дәүләтенә өҙлөкһөҙ ағылған ҡайлыҡ менән ҡәнәғәтләнмәйенсә, Үзбәк хан үҙенә ҡарашлы илдәрҙә әйәүсе кешеләрҙең йән башына билдәләнгән һалымды өҫләтә арттырҙы: һалымды түләргә хәлләре килмәүселәрҙе, ғаиләһеҙ кешеләр менән ирһеҙ тол ҡатындарҙы төрлө хужалыҡ эштәрендә файҙаланырға йәки ИҘдорго ҡиммәтле хаҡҡа һатырға ҡушты.

Үзбәк хандың шәфҡәтһеҙлеге арҡаһында, Башҡорт-

остандағы күпселек ирҙәр ауыр төҙөлөш эштәрендә интск-
тереп үлтерелде, ҡатын-ҡыҙ менән етем бала-саға төрлө
илдәргә оҙатылды.

Алтын Урҙа дәүләтенең экономикаһын нығытыу меиәи бер рәттән, Үзбәк хан уның сәйәси тормошона бәйләнешле мәсьәлә буйынса ла тейешле хәстәрлек күрҙе.

Шул маҡсат менән Һарай-Берке ҡалаһы уртаһындағы иҫ киткес күркәм, мәрмәр стеналары алтын-көмөш мемон биҙәлгән «Гөлстан» тип исемләнгән хан һарайына Алтып Урҙа биләмәһендәге ислам дине башлыҡтарын йыйҙы.

Бөйөк Аллаһы тәғәлә һәм уның яратҡан пәйғәмбәрс осорҙа
Мөхәммәт ғәлиәссәләм исеме менән ислам дине әһелдәро
йыйынын асҡас, Үзбәк хан ҡыҫҡаса сығыш яһаны.

— Хөрмәтле имам-хәлфәләр, беҙ үтә яуаплы уның
йәшәйбеҙ. Берҙән-бер Бөйөк Аллаһы тәғәләне һәм яратҡан пәйғәмбәре Мөхәммәт ғәлиәссәләм исемен һирок боҙол-
телгә алыуҙары сәбәпле, күпселек мосолмандар ҙа до. Улы — атаһын, кесе олоно хөрмәт итмәй. Әҙәм за-
тында иман, әҙәп, бер-береһенә ҡарата ихтирам тигән
мә бөттө. Ҡайҙа ғына барма, тупаҫлыҡты осратырға һәм
һаҡрат һүҙҙәр ишетергә тура килә. Кешеләрҙә шәриғәт
ҡушыуы буйынса йәшәргә күндергәндә генә аҙғынлыҡтан
ҡотолорға мөмкинлек тыуасаҡ.

Мин, ислам диненә ихлас күңелемдән инаныусы мо-
солман булараҡ, бөтә ерҙә мәсет-мәҙрәсәләр һалдырыуҙы, тап-
кешеләргә көрьән сүрәләрен өйрәтеүҙе, көнөнә биш байри-
ҡыр намаҙға йөрөүҙе, ураҙа тотоуҙы, мосолмандар йо-
мында ҡорбан салыуҙы, хәйер-фытыр биреүҙе, динн итәм, — тий
лаларҙы уҙғарыу хәстәрлеген күреүҙе талап мосолман-
Үзбәк хан Алтын Урҙалағы барлыҡ кешеләрҙе лаштырырға тигән белдереү яһаны.

Гөлстан һарайының Баш мәсетенә шығырым тулы ин
лам әһелдәре, Үзбәк хан менән теләктәшлек белдереп
шаулашты:

— Иншалла!

— Изге ниәтле мосолман ханына дан!

— Ислам дине сафлығы өсөн хәстәрләүеңә рәхмәт!

— Аллаһы тәғәлә һинә оҙон ғүмер бирһен!..

Тыныслыҡ урынлашҡас, Үзбәк хан йыйында ҡатна
шыусы дин әһелдәре ҡаршыһына сығып баҫты.

— Бындағы һөйләшеүҙе ислам динен Алтын Урҙаны
дәүләт дине тип иғлан ителеүгә арналған мәжлестә ,ләү
уам итербеҙ, — тип ул дин әһелдәре менән сит ил вәкш
дәрен махсус бүлмәгә саҡырҙы.

Мәжлес уҙғарыласаҡ иркен, яҡты, күркәм бүлмәго ин
гән һәр кеше, Үзбәк хан эргәһендә ултырған уның бө

ҡатыһына, унан һуң ҡалған ҡатындарына бүләк тапшыр-
ҙы. Ҙур өсөй тәғәйен урынға ултырҙы.

Мәжлес тиҙ башланманы.

Киҫәлыр йомош менән киткән Үзбәк хандың бер ҡа-
ҙыны кирс әйләнеп килгәс кенә, мәжлесте башларға мөм-
кин тыуҙы.

Хандың уң яғындағы баш ҡатыны көрьән сүрәләрен
ятлап уҡыны ла кәсәләге ҡымыҙын күтәрҙе.

Погеҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтар, байрам һыйын ауыҙ ите-
ҙәйек.

Мәжлестә ҡатнашыусылар, Бөйөк Аллаһы тәғәлә менән
Мөхәммәт пәйғәмбәр исемен әйтеп, тейешле сүрәләрҙе
уҡып, үҙҙәренең алдындағы ризыҡҡа һоналдолар.

Мосолмандарҙан бер яҡ ситтә ултырыусы сит ил вә-
кил / мрию араҡы эсеү тыйылманы. Шулай булыуға ҡара-
мастан, мосолмандарға ихтирам белдереп, ҡымыҙҙан баш
тартылар исемлеккә ҡағылманылар. Табында һүҙ әйтергә тура
килһә, хап һарайындағы ғәҙәт буйынса, хандың ҡатында-
ры, бигерәк тә баш ҡатыны Мөршидәне маҡтарға ты-
рыштылар. Сөнки Мөршидә, хан һарайындағы көндәлек
тормошта ғына түгел, дәүләт эше буйынса ла Үзбәк хан-
ға бсренсе кәңәшсһе икәнлеге һәр кешегә мәғлүм
булған. Үзбәк хан менән бер-бер яман хәл булһа, уның баш
катыны Мөршидә регент[1] вазифаһын башҡарасағы һәм
шул ф,ісц яҙмышын хәл ҡыласағы ла сер түгел.

Үзбәк хандың ислам динен өҫтөн күреүе, уға ихлас
булыуы ла Мөршидәнең йоғонтоһонан башҡа булмаған-
тыр тигәйһен. Бағдад ханы ҡыҙы булараҡ, Мөршидә
үҫеп сарыһан уҡ ислам диненә инанып, көрьән сүрәлә-
рен ятлап үҫкән. Үзбәк ханға кейәүгә сыҡҡас та, ул эл-
дәге проф-ғәҙәтен үҙгәртмәне, шәриғәт ҡушыуы буйынса
йәшәне. Үзбәк ханға йомоштары төшкән саҡта имам-хәл-
фәләр менән мулла-монтағайҙар иң башта хандың баш
ҡатынын барҙылар һәм йомоштарын ьщғай хәл ҡылмай
ҡайтып киттылар.

Мөршидәнең шөһрәтлелеге Үзбәк хандың абруйын тө-
шөрмәне, киреһенсә, үҫтереүгә булышлыҡ итте. Сөнки ул
һәр эшкә бер ҡасан да иренән өҫтөн итеп күрһәтергә тырыш-
маны. Ипмә генә башҡармаһын, Үзбәк хандың исеменә,
абруйына, уҡымышлығына, аҡылына, бөйөклөгөнә һәм да-
һаһына һылтанды.

Мәжлес ваҡытында ла Үзбәк хандың бөйөклөгөнә ишә-
ттерҙән, Мөршидә уның янында ҙур кеселекле,, тыйнаҡ

[1] *Регент* — хан эшен ваҡытлыса башҡарыусы.

һәм ихтирамлы тотто. Берәйһе мактау һүзен әйтһә, ярым лы йылмайып, уны Үзбәк хаиға йүнәлдерергә тырышты:

— һәммәһе бөйөк хан теләге буйынса башкарыла. Мии уының тоғро ярҙамсыһы, ҡоло дәрәжәһендә генә... Бөйөк хандың һаулығын теләгеҙ Аллаһы тәғәләнән. Ул иҫәп саҡта ислам дине киң тараласаҡ һәм сәскә атасаҡ...

Мөршидә әйткәнде ҡүәтләп, дин әһелдәре уның ығ-ғайына «олуғ хан», «бөйөк имам» исеме менә мөрәжәгот итә башланылар Үзбәк ханға...

Мәжлестә ҡатнашыусылар таралышып, аулаҡта ҡалғас, үҙенә ҡарата мактау һүҙҙәрен иҫенә төшөргән Үзбәк хан ҡабаттан йөрәкһенде. Уның сәйәси эшмәкәрлеге хупланыуы һәм ислам Алтын Урҙа дәүләте дине тип иғлан ителеүе оло еңеү түгелме ни?..! Ислам дине ярҙамында Берм хан заманындағыса Алтын Урҙа ханлығы данын тергеҙә алһа, ул бәхетле буласаҡ һәм исеме тарихта мәңге һаҡланасаҡ. Кешеләрҙе мосолманлаштырыу, шәриғәт ҡушыуы буйынса йәшәтеү өсөн күп көс, хатта ҡан ҡойоласаҡ. Ошоғаса әҙ ҡойолдомо ни ҡан?

Маҡсатына ирешеү өсөн Үзбәк хан бер кем менән иҫәпләшмәне һәм артабан да йҫәпләшмәйәсәк! Хан тәхетеи уны ултыртмаҫҡа маташыусыларҙы ғына түгел, хатгй Сыңғыҙ хан нәҫеленән сыҡҡан үҙенең туған-тыумасалтм рын да күплән ҡырҙы [1]. Ислам динен таратыуға ҡаршы лыҡ күрһәтеүселәр булһа, Үзбәк хан уларҙы ла аяман саҡ. Аҙаҡтан, кетеләрҙе мосолманлаштырыу эше ыңғай лаһа, көс ҡулланыуҙың кәрәге булмаясаҡ...

Үзбәк хан боронғо яҙмаларҙы ҡыҙыҡһынып укый. Яңы раҡ уға унынсы быуатта йәшәгән монголдарҙың тормошо тураһында яҙып ҡалдырған Европа сәйәхәтсеһе Плано Карпиниҙың хеҙмәте менән танышырға тура килгәйне Уның яҙмаларынан күренеүенсә, ул замандағы монголдар бүре, төлкө, төрлө йыртҡыс, хатта кеше итен ашауҙап ҡо сирҡанмаған. «Туҡ этте һунарға алып сығыуҙан файда юҡ», — тип Үзбәк хандың олатаһының олатаһы бөйөк Сыңғыҙ хан үҙенең һуғышсыларын яуға ас алып барған...

Ул замандан бирле көллөһө ныҡ үҙгәрҙе. Сыңғыҙ хан менән Батый хан яуындағы татар-монголдар менән хәҙге татар-монголдарҙы ла сағыштырыу мөмкин түгел. Улар болғарҙар, башҡорттар, ҡыпсаҡтар, урыҫтар, мордвалар, хәрәземдәр [2], кавказсылар менән буталышып, үҙҙәрсмкЕ

[1] Бәғзе көнсығыш авторҙарының раҫлауынса, Үзбәк хан үҙ аяҡ салырға маташыусы Сыңғыҙ хандың 120 ейәне менән уларҙың улдарын ҡалтерткән.

[2] *Хәрәзем* — Урта Азияла (хәҙерге Ҡарағалпағстандағы) дәүләт

мырғс гөрөф-ғәҙәтен, көнкүрешен, йолаларын оноттолар һәм урыидағы халыктарҙың тарихын, мәҙәниәте менән ҡатта телен үҙләштерҙеләр [1]. Сыңғыҙ хан менән уның ҡандары — мәжүсйлеккә, Буддаға, ейәндәре бүтән төрлө (шин •) табынһа, Үзбәк хан ислам диненә ихлас ышана, мосолман булыуы менән ғорурлана һәм кешеләрҙе мосолммштырыуға ғүмерен бағышлаясаҡ...

Икенсе яктағы кесе ишекте асып, һаҡлык менән генә Мөршидә бүлмәгә инде. Башын һалындырып түшәктә япа-ялгыз ултырған ирен күргәс, ҡуркты.

Оллә ауырыйһыңмы?

Юҡ.

Мпщә ял итмәйһең?

Поҡом ҡасты.

Үзбәк хан баш ҡатынына куңелендәге бөтә нәмәне ә-әмә-сәсмәй һөйләгәс кенә, тамам тынысланып, йоҡларға ятты.

XI

Үзбәк хан башында торған Алтын Урҙа дәүләтә ҡыҫҡа ә-әк 1Ш г зсепдә донъялағы иң алдынғы илдәрҙең береһенә әйләнде.

Көүәтле сиреү ярҙамында һәр ерҙә ныҡлы тәртип инә таштырылып, кеше талаусы шайкалар бөтөрөлгәндән һ >| кпруап юлындағы ылауҙарға ҡурҡырлыҡ нәмәләр м ҡалмаһын һом ябай кешеләр ҙә иркенләп йәшәй башланы.

Кешеләр һаны күбәйгән һайын, Һарай-Берке йәнләнде бө-ә ә тора-бара донъялағы сауҙагәрҙәрҙең баш ҡалаһына әйәрелде.

Ҡыйратылған ҡалалар менән өр-яңынан барлыҡҡа килгән ҡалаларҙа һатыу-һатып алыу эше үҙгәртеп ҡоролдо. Бер-ике ҡала аҙым һайын тиерлек шау-шыулы баҙар. Йәшелсә м.)гои ашамлыҡ менән кейемде һайлап алырға мөмкин ә ә ксаң ғына булһын.

Үзәк кеше аяғы аҫтынан урғылған туҙанды йотоп ә-ә. Шҡы эҫелә торған һатыусылар, үҙҙәренең әйберҙәрен мактай-мактай, кешеләрҙе саҡыралар. Хужалыҡтың ҡарлыҡҡан тауышына ҡушылып, йөк ташыусы ишәктәр мсиән ишәктәр ҙә аҡыруша...

Ҡалған Пыйылыусылар, шау-шыулы тормошҡа күнегелгәнмдыр үҙҙәрен аяуһыҙ ҡырған татарҙарҙың баш ҡалаһында икәплеген дә онотто. Хәҙерге татарҙар Сыңғыҙ ханға ш мснәи Батый хаи заманындағы шикелле яман

[1] Маркс К., Энгельс Ф., т. 20, 188-се бит.

ҡыланмай. Улар яғымлы, һатып алыусылар менән дуҫтарса мөғәмәләлә һатыулаша, ә үҙе әйберҙәрҙе осһоҙ хаҡҡа эләктерергә тырыша.

Баҙарҙарҙа бурҙар ҙа етерлек. Сауҙагәр саҡ ҡына һаҡһыҙлыҡ күрһәттеме, алдындағы әйбере эҙһеҙ юғала. Әммо урлашыусылар тотолһа, уларға мәрхәмәт юҡ. Шәригәт ҡушыуы буйынса, уларҙың һыңар ҡулы киҫелә йәки үлтергәнсе туҡмала.

Һарай-Берке ҡалаһындағы һатыусылар, каруан юлындағы сауҙагәр һәм башҡа ылаусылар үҙҙәренең именлеге һаҡланыуы һәм табышҡа мөмкинлек тыуҙырылғаны өсөн Үзбәк хан дәүләте ҡаҙнаһына пошлина түләргә бурыслы. Мосолман сауҙагәрҙәренән пошлинаның яртыһынан кәмерәге түләтелә. Сөнки улар Үзбәк хандың шымсылары нәзифаһын башҡара, сиреүҙе ҡорал менән тәьмин итә, төҙөлөш материалдарын ташыуҙа ҡатнаша һәм сит илдәрҙәге ҡолдар һатып алып килә.

Үзбәк хандың махсус ышанысын яулаған Алтын Урҙа ханлығындағы мосолман сауҙагәрҙәр өсөн бер ниндәй ҙә сикләнеү ҡуйылмаған, нн ҡылһалар ҙа, уларҙың үҙ ихтыярында.

Һарай-Берке ҡалаһындағы күпселек кеше бер нәмәгә лә мохтажлыҡ кисермәй. Төрлө илдәрҙән сауҙагәрҙәр тарафынтып алып килгән ҡолдар өсөн генә хан дәүләте ҡаланан хәстәрлек юҡ. Ғүмеренең ахыр көнөнә саҡлы ситендәге мейесеҙ, тәҙәһеҙ-ниһеҙ бысраҡ землянкаларҙа аслы-туҡлы йәшәргә тура килә уларға.

Фән, яҙыусылыҡ, мәҙәниәт, сәнғәт эшенә һәм бүтән һөнәрҙәре булған һәләтле ҡолдарға саман торлаҡлә ҙәләү. Ваҡ-төйәк нәмәләр яғып торлаҡтарын йылытыусы мейестә аш бешерергә, сәй ҡайнатып эсергә, хатта ҡатыҡалырға ла рөхсәт бирелгән. Әммә фән, мәҙәниәт һәм нәрселек эшенә һәләтле ҡолдар бер урында оҙаҡ йәшәтелмәне. Сит илдәрҙән килеүсе сауҙагәрҙәргә ҡыйбат һатылып, улар урынына икенселәре килтерелә...

Мысырҙан һатып алып киленгән ҡолдар араһында ропанан ябырылған тәрелеләрҙе ҡыйратыусы башҡорттар данлыҡлы ғәскәр башлыҡтары, мәҙәниәт һәм сәнғәт кешеләре барлығын белгәс, Үзбәк хан уларҙы үҙенә найтты, ә Бөрйән ырыуы егеттәрен Алтын Урҙа сиреүсе йөҙ һәм мең башлыҡтары итеп тәғәйенләне.

Башҡортостанда тулы тыныслыҡ урынлаштырылыуын Үзбәк хан ҡыуанһа, ислам дине таралыуы тоткарланыуына асыуы килде. Ҡара яу заманында ҡалаларҙағы солмандар тотошлай ҡырылмаһа, башҡорттарҙы мосолмшлаштырыу эше һүлпән барыр инеме? Юҡты бар итеү осн

нисомә быуат ваҡыт кәрәкһә, барҙы юҡҡа сығарырға да, оллә ни тиклем тырышлыҡ та талап ителмәй.

Үзбәк хапдың фекеренсә, ҡасандыр бай Башҡорт илен II мәҫкеп хәлгә еткерелеүенә башҡорттар үҙҙәре ғәйепсе. Ҡара яу заманында һәм унан һуңғы йылдарҙа фшылыҡ күрһәтмәһәләр, ҡалалары ҡыйратылыр, аң-бе-Һ,м пслам динен таратыусы мосолмандар тотошлай ырылыр һәм ошондай ҡыйын хәлдә йәшәр инеме улар?

Имүмон, башҡорттарҙы ниңә йәлләргә? Башҡорт дәүтсргеҙеүҙән, ҡалаларын ҡабаттан һалдырып, мәсет-рәсәләр төҙҙәртеүҙән Алтын Урҙа дәүләтенә ни файҙа?

Һйшҡорттарҙы мосолманлаштырырға тырышыу, улар-бирем биреү, ысынлап та, Алтын Урҙа дәүләте өсөн ҡорҡоты. Ҡәбилә-ырыуҙарға тарҡалған башҡорттар бермепән бәйләиеш тотмай, һәр ҡайһыһы үҙ яйына генә уларҙы ауыҙлыҡлап тоторға мөмкин бутип уйланьь Үзбәк хан. Әммә, ысын мосолман бутүгел, умыц күңел тыныслығы ҡаҡшаны.

Башҡорттарҙы мосолманлаштырыуҙан баш тартып, Бөйүллаһы тәғәлә һәм Мөхәммәт пәйғәмбәр алдында горурлыла түгелме?

Юҡ, мосет-мәҙрәсәләр төҙҙәртеү һәм кешеләрҙе «көрьәндәренә өйрәтеү — изге эш», тигән һығымтаға килгән Үзбәк хан Баш мулланы саҡырҙты.

Имам-хәҙрәт, башҡорттарҙы мосолманлаштырыу эше ни хәлдә?

Якшы, олуғ хан. — Баш мулла Башҡортостанға бер ҡайтып «м муллалар менән мәзиндәр ебәреүен әйткәс, Үзбәк ханы папысланды.

Баш мулла артынса ишек ябылғас та, хандың баш ҡайғы п.| Мөршидә инде бүлмәгә.

ПоПләүгә күсергә һәммәһе әҙер. Ҡасан бушауывды Һарайға көтөк булдыҡ, — тине ул, ире алдында юхалап.....

Үзбәк хаи өтәләнде.

Ҡаҙағандағе халатын алмаштырып кейҙе лә баш ҡатыусы булып бсргә хан һарайы эргәһендәге күмәк ылауҙарҙың олдағыһына яҡынлашты.

Ханҡаз далаһындағы Биштау янындағы йәйләүенә күтәрелгәс, Үзбәк хан йыйылма мәсеттә төшкө намаҙ уҡыған аҡ тирмәһенә ҡайтҡас, иркенләп ултырып ҡымыҙ гуПҙырҙы ла ял итергә ятты.

Йәйләүгә күсеп килгәне бирле, төрлө ауырыуҙан ҡотолоп толоп, Үзбәк хан ер аҫтынан урғылып сыҡҡан йы-

лы һыуҙа сәғәттәр буйы ҡойондо йәки махсус быуала йөҙҙө.

— Э-эх, ниндәй рәхәт! Көкөрт еҫе аңҡыған әскелт һыуҙың шифаһын бүтән бер нәмәгә лә алмаштырырлыҡ түгел!

Кинәнес белдереп, аһылдай-бохолдай һыуҙа кинәнгои Үзбәк хандың бер генә һүҙе лә сауҙагәрҙәр тарафыиап иғтибарһыҙ ҡалманы.

— Мосолман ханы ҡойонған һыу шифалы, ул мең төрлө сырхауҙарҙан һаҡлай, — тип улар хәбәр таратып та өлгөрмәне, ер аҫтынан уғылып аҡҡан йылға яры буйынп төрлө илдәрҙән кешеләр килеп тулды.

Сауҙагәрҙәр, һәр мөмкинлекте файҙаланырға тырышып, тауарҙарын һатты, шифаханалар төҙөнө, шифалы һыуҙарҙы сит илдәргә алып барып һатыуҙы ла ойоштороҙолар.

Дауаланырға килеүсе кешеләр кәрәгенән артыҡ күбәйгәс, Үзбәк хан Биштауҙан йөҙ саҡрым самаһы алыҫлыҡтағы бүтән ергә күсеп барырға һәм шунда йәйләү ҡорорға мәжбүр булды.

Йылға-күлдәр туңып, көҙгө һалҡын көндәр башланғас ул Евразияла иң күркәм һаналған Һарай-Берке ҡалаһындағы Гелстан һарайына ҡайҙы һәм дәүләт эшенә тотондо.

Үзбәк хан ҡайҙа ғына барып йәшәмәһен, көнөнә биш тапҡыр намаҙ уҡыны, ураҙаны ҡалдырмай тотто, дингә байрамдарҙа хәйер йәлләмәне, ҡорбанға салдырҡан һарыҡ итен һәр мосолманға ауыҙ иттерергә ҡушты.

Ҡорьән сүрәләрен ятҡа уҡып, шәриғәт ҡушыуы буйынса ғына йәшәргә ғәҙәтләнгән Үзбәк хан ярҙамында күпселек илдәр мосолманлаштырылды һәм ул Мөхәммәт пәйғәмбәр ғәлиәссәләмдең изгеләрҙән изге эшен дауам итереүсе тип иғлан ителде.

Алтын Урҙа **дәүләтенең** баш ҡалаһы Һарай-Беркә мосолмандарҙың фән һәм мәҙәниәт үҙәгенә әүерелдерә есен дә Үзбәк хан күп көс түкте. Мысырҙан һәм Урта Азиянан саҡырып килтерелгән ғалимдар ярҙамында Һарай-Берке ҡалаһындағы мәсет һәм мәҙрәсәләрҙә фарсыса-ғәрәпсә укыу-укытыу өҫтөнлөк алды. Ғәрәпсә яҙылған Ҡөрьән менән бергә «Салсал», «Зәрҡүм», «Дүрт дәрүиш», «Мең дә бер төн» кеүек донъяға киң билдәле китаптар ҙа күпләп таратылды.

Мосолманса никах уҡытыу, сабыйға исем ҡушыу, мәлайҙарҙы сөннәтләү, дини байрамдар үҙғарыу һәм мойсәте ерләү ҡағиҙәләре лә шул заманда ҡағыҙға теркәлә. Мәсеттәрҙең манараһы осона алтын ялатылған ураҡ-

йыртыу ҙа Үзбәк хандың ҡушыуы буйынса башҡарылды.

— Христос беззең менән, — тип бер-береһен дəртлəн-дереп, кыскырыша-кыскырыша улар алға ябырылдылпр,

Биш-алты казак ук тейеүзән үлемесле яраланғас, кы-лыс һəм һөңгө зарзамында татарзарга каршы һуғышыу мəғəнəһез икәнлеген аңлап, Ермак һежүмде туктатыр-ға һəм пушкаларзан атырга кушты.

Дружиналағы немецтар менән литовецтар бер-бер ар-лы туптарзан ата башлағас та каршынан ябырылғаи ял-пы кысымы капыл бушаны. Татарзарзың икенсе, осот ә-дүртенсе тапкыр кабатланған атакалары ла, каршыла-оскан туптарзың өзлекһез гөрһөлдəп ярылыуы арканһыл-кире кагылды.

Ермак менән Иван Кольцо, казактарзы енеүгə рухлан-дырырга тырышып, алыштың иң кызыу барған урынын-булдылар.

— Братцы, ныk тороғоз!

— Артка сигенһək — үлем!

— Эйе, артка сигенһək, Мəмбəтколдоң һыбайлылар-беззе тапап-изеп уҙасаk!

— Христос беззең менән!

— Без едəсəкбез! — һөрəн һалып, атаман мепəп үш-

арзамсыһы бер хәүефле урындан икенсе урынға йүгереп сырылар һəм казактарзың рухын күтәрергə маташтылар.

Ғау һыртында торған Күсем хан да кафырзарзы кый-ратыу осөп хәленəн килгəн сараларзы күрзе. Ул үзенең ергəшендəге күп һанлы имам-муллаларзан һуғыш майза-нындағы алыш барышын өзлекһез һорашты һəм ғəскəр башлыктарына яңынан-яңы əмер тапшырзы.

Татар егеттəренең сираттағы һөжүме лə кире кағы-ныуын Оелгəс, Күсем хан Бөйөк Аллаһы тəғəлəнəн мосол-ман шДирга көс-кеүəт биреүен, Себергə хужа булырга ма-ташыусы яуыз кафырзарзы енергə ярзамлашыуын ялынып-ялбарып һораны. Хандың теләге кабул булды. Мəмбəт-колдоң һыбайлы ир-егеттəре, юғалтыузар менəн иçəплəш-мəçəсə, бандиттарзың тылынан ябырылды. Улар, пушка-ларзан атыусы немецтар менəн литовецтарзы тураклара шпғюиип, йəн-фарман сабыштылар.

Ллаһы тəғəлəнең ярзамына шөкөр! Былай булғас, ...кафырзарзы еңəсəкбез, —тине Күсем хан, баçкан ...ышында тыныс тора алмайынса.

Шундай көсөргəнешле, хəл иткес минутта, кото алы-...кемдер кыскырзы:

Ай, Алла!..

Ни булды? — тип һораны һуғыр хан.

Момбəткол эйəренəн коланы!

...уның һыбайлылары? — Күсем хан куркышынан ...ранды.

...ргəһендəге имамдар менəн муллалар үззəре кур-...хаига хəбəр итергə ашыктылар:

Һыбайлылар сабышып барыузан туктaлдылар!

Юк, улар киргə боролдолар!..

Момбəгкол кайза? — тип һораны хан.

Ул күренмəй!

Мəмбəтколдо ташлап каскандарзыр, ахырыһы», — тип ...ы Күсемхан.

Бер аз вакыт уззас, каты яраланған Мəмбəтколдо ...мырзалары Иртыш йылғаһының икенсе ярына алып ...ары, о башлыкһыз калған һыбайлы ир-егеттəр ме-...гнк ' кеиəздəре ейззренə таралышыуы тураһында хə-...ттелəр.

Шәүлə татарзарзың да һуғыш майзанын ташлап ка-...Оелгəс, һуғыр хан рухи төшөнкөлөккə күмелде.

Ә, хозай тəғəлə! Хəзер миңə ни эшлəргə? Ғəзиз ...урыçтар хужа булыр микəн ни?..

Башлай шарттарза Себер ханлығының баш калаһын-

...хəзерге ханты халкы.

да ҡалыу үтә хәүефле ине. һуҡыр Күсем хан, ҡаҙна аҡсаһының яртыһынан күберәк өлөшөн үҙе менән алып, шул уҡ төндө Ишем далаһына табан ҡасып китте.

XVI

Күсем хан ҡасып киткәндән һуң, атаман Ермактың башкиҫәрҙәренә Урал тауҙарының таш һыртынан Обь менән Тубыл йылғаларына тиклемге ерҙәрҙе Рәсәй империяһына буйһондорорға мөмкинлек тыуҙы.

1581 йылдың 26 октябрендә атаман Ермактың казактары Себер ханлығының баш ҡалаһы Искергә табан йүнәлде.

Буп-буш ҡала урамдарында бер кем күренмәгәс, Ермактың асыуы ҡабарҙы.

— Ни өсөн беҙҙе тантаналы ҡаршы алмайҙар?! Бөтә кешеләрҙе өйҙәренән ҡыуып сығарырға һәм хан һарайы эргәһенә йыйырға!

Казактар, атамандың бойороғон йәһәтерәк үтәргә ашҡынып, тирә-яҡҡа таралыштылар. Ләкин улар бер кемдо лә эҙләп тапманылар. Ҡала урамдары ғына түгел, өйҙор ҙә буп-буш ине.

— Хан һарайында нимә бар? — тип һораны Ермак.

— Бер нәмә лә ҡалдырмағандар, — тине Иван Кольцо.

— Ышанмайым!

— Бөтә ерҙе үҙем тикшереп сыҡтым, атаман.

— Ризыҡ бармы, исмаһам?

— Аҙыҡ-түлек күп түгел. Әммә кейем, йәнлек тирсьмре, алтын-көмөш, аҫыл таштар, азиат ҡытаттар хаи һарайында һәм хужаһыҙ ҡалған өйҙәрҙә етерлек.

— Шул байлыҡ түгелме, Ваня? — Ермак һаһылдап көлдө. — Ә һин, хан һарайында бер нәмә лә ҡалмаған тигән мине аптыраттың!

— Мин ҡаҙна аҡсаһы ҡалдырылмауын әйттем, атаман, — тине Иван Кольцо.

— Ярар, беҙгә ҡалғаны ла еткән, — тип Ермак байлыҡтарҙы казактарға бүлеп бирергә ҡушты.

— Алтын-көмөш күп була тороп, аҙыҡ-түлек ыпын алырҙай ер алыҫ булыу эсте бошора, атаман, — тине Иван Кольцо, үкенеп.

— Хан һарайында араҡы бармы?

— Юҡ!

— Ышанмайым, баҙҙарында араҡы булырға тейеш!

— Бындағы мосолмандар араҡы эсмәй, атамаи...

— Ниндәй әшәке халыҡ! — Ермак ҡаты итеп һүгенде. Араҡыһыҙ ни эшләргә белмәне атаман. Хан һарай

дары бүлмәләрҙе йөрөп, исмаһам иҫерткес эсемлектең бер тамсыһын да эҙләп таба алмағас, Күсем ханды иң ыпокс, һаҡрат һүҙҙәр менән әрләне-әрләне лә, шунда ла мрһыуып баҫа алмайынса, нығытмаларҙы тикшереп сыҡырға шөтләнде атаман.

Ссбер ханлығының баш ҡалаһы Искер Иртыш йылғаһының бейек ярында урынлашҡан. Уның бер яҡ өлөшө тоҡо яр һәм тәрән соҡор ярҙамында нығытылһа, ә икенсе ягы ҡолҡә валы — өс ҡатлы ер өйөмө менән һаҡлана.

Ермакка эйәреп йөрөүсе бер төркөм казактар, берәй шьорҙа араҡы йәшерелмәгән микән тип ымһанлап йөрөй торлас, алтын-көмөш, биҙәлгән науыт-һаба, беләҙектәр, алмаслар һәм башҡа төрлө ҡиммәтле биҙәүестәр эҙләп таптылар.

Өйө-төшөнә лә инмәгән байлыҡты күргәс, Ермактың ҡыуаныс-шатлыҡтары башынан ашты.

Былай булғас, йәшәйбеҙ икән, — тип, ул яҡыныраҡ берәй ҡалаға аҙыҡ-түлек һатып алыу өсөн кешеләр оОорергә ҡушты.

Иван Кольцо шик белдерҙе:

Ссберҙәге ҡырағай халыҡ беҙгә ашамлыҡ һатырға ризалашыр микән, атаман?

Яуыз шайтан бисәләре аҫыл таштарҙан һәм алтын-көмөштөн эшләнгән һәр нәмәне ярата. Ошондай биҙәүестәрҙе күрһәләр, улар ирҙәрен аҙыҡ-түлек һатырға күндерәсәк, — тиие Ермак.

Атаман яңылышманы. Уның казактары китеүгә аҙна ғына һуң паҡыт уҙғас, 1581 йылдың 30 октябрендә, Боар Алдегендәге бер төркөм остяктар, алтын-көмөшкә һәм матур ҡыҙ биҙәүестәренә алмаштырыу есөн аҙыҡ-түлек килделәр.

Россйгә ҡушылырға теләк белдереүсе остяк кенәзҙәренә имен-аман ҡайтып китеүҙәрен ишеткәс, таяр ҙа ҡатындары һәм бала-сағалары менән Искер ҡалаһына аҙыҡ-түлек һәм араҡы алып килә башланылар.

Уларҙың һәр ҡайһыныһын яғымлы ҡаршылаған Ермак (н.) тулопергә тейешле һалым күләмен билдәләне. Таяр ҙа элгәрге өйҙәрендә йәшәргә рөхсәт итеп, ул бала сағынан йәки ирһеҙ ҡатындарҙы казактарына бүләк итеп ҡушты.

Былар Күсем ханға буйһонған остяктар, вогулдар һ. б. Оашка аҙ һанлы халыҡтар азатлыҡ яулаған, имеш-тигеи хәбәрҙәр тиҙ арала таралғанлыктан, Ермактың пбруйы, даны артты. Ул ғауғасыл, ҡоторонҡо

Ясындар — мансиҙарҙың боронғо исеме.

бандиттар башлығы ғына түгел, яуыз Күсем хандың иҙеүенән ҡотолдороусы иң ғәҙел һәм кешелекле, батырҙарҙың-батыры исеменә лайыҡ булды.

Үҙ маҡсатына өлгәшкәс, Ермак казактарына ҡарата талапсанлыҡты арттырҙы. Ул, тәртипте нығытырға тырышып, баш-баштаҡ ҡылыуыларҙы ҡаты язаланы һәм зыяны теймәгән кешеләрҙе талауҙы тыйҙы.

Ермактың холҡо үҙгәреүе казактарға ғына түгел, нс •яҡын ярҙамсыһы һәм дуҫы Иван Кольцоға ла оҡшаманы. Икәүҙән-икәү аулаҡта ҡалғас, ул атаманға ризаһыҙлыҡ белдерҙе:

— Диннеҙ ҡәбәхәттәрҙе талауҙы тыйып, казактарҙы үҙендән биҙҙерһең, аҙактан ни эшләрһең?

Ермак һорауға һорау менән яуап ҡайтарҙы:

— Ваня, Себерҙәге аҙ һанлы халыҡтар менән мөнәсәбәтебеҙҙе боҙһаҡ, улар Күсем ханды эҙләп китәсәктәрсн беләһеңме?

Иван Кольцо, байтаҡ ваҡыт уйланып ултырғандан һуң, теләр-теләмәҫтән ризалашып, баш ҡаҡты.

— Эйе, һин хаҡлы, атаман. Себерҙәге аҙ һанлы халыҡтар Күсем ханға ҡабаттан барып ҡушылһа, ысынлап тц, беҙгә ҡыйынлыҡтар тыуасаҡ...

— Уныһы — беренсенән, — тнп Ермак баш бармағин бөктө. — Икенсенән, Иван Грозныйҙы һәм күктәге тәңрене лә онотма! Үҙебеҙҙе әҙәпле тоторға өйрәнмәһәк, беҙҙо үлем язаһына хөкөм итеүсе Иван Грозныйҙан мәрхәмәтлек •булмаясаҡ. Беҙгә татарҙарҙы еңергә ярҙамлашыусы тәңрегә өҙлекһеҙ табынырға һәм унан гонаһтарыбыҙҙы бөтерөүҙе ялынып-ялбарып һорарға бурыслыбыҙ. Шуның -әлегә ҡурҡыныс бөтмәгән.

•— Аңлаштыҡ, атаман. Казактарға ла һәммәһен ентекле төшөндөрһәк, улар араһында ризаһыҙлыҡ бөтәсәк, - тип ныҡлы ышаныс белдерҙе Иван Кольцо.

Кис Семен Строгановтан сапҡын килде.

Тоҙ эшкәртеүсе сауҙагәр ебәргән хат менән таныш•ҡас, Ермак ярҙамсыларын йыйҙы.

—• Көтмәгәндә бәлә-ҡаза килде, братцы!

Казактар, аптырашып, бер-береһенә ҡарашты.

— Ниндәй бәлә-ҡаза?

— Иван Грозный Строгановты ҡаты яуапҡа тарттырырға тейеш, — тине Ермак.

— Ни өсөн?

— Батшанан рөхсәтһеҙ беҙҙе Себер ханлығына ҡариш ҡуғышырға ебәргән өсөн... Бөтәбеҙҙе лә аҫырға ҡушыр Иван Грозный беҙгә ҡаршы ғәскәр ебәрергә тейеш, -

ие ло батша Указы күсермәһенең аҙаҡҡы өлөшөн Ермак уҡып ишеттерҙе:

«Әгәр ҙә мәгәр ошо Указ тиҙ арала үтәлмәһә, Себер гплтаиы Пермь ерҙәренә берәй төрлө яуызлыҡ ҡылһа һәм Себсрго оҙатылған казактарҙы тотоп аҫтыртмаһағыҙ, һеҙҙе улсм язаһы көтә...» [1]

Асыуынан ҡара көйгән Иван Кольцо ҡалтыранды.

• Бушҡа ҡан түккәнбеҙ икән!

Атлмапдың бүтән ярҙамсылары ла, батша указына ризаһыҙлыҡ белдереп, шаулашты:

Рәҙелһеҙлектең-ғәҙелһеҙлеге бит был!

-- Мпан Грозный беҙҙе ярлыҡарға теләмәгәс, тормошшҡыҙығы ҡалманы!

• Себерҙәге барлыҡ байлыҡты ылауҙарға тейәйек тә (и рай сит яҡҡа ҡасып китәйек!..

Козактарҙың баш-баштаҡлығынан ҡурҡып, Ермак үҙенә •ныс тоторға тырышты. ,

Братцы, мәлһеҙ ғауғалашмайыҡ әле. Үҙебеҙ ултырған Оотаҡҡа балта менән сабыу өсөн әллә ни аҡыл кәрәлмәй! Аҙағын уйлағыҙ!..

Аҙағы нисек бөтөрө билдәле бит инде, атаман!

Бер ҙә билдәле түгел, — тине Ермак. — Үҙебеҙгә яҡ•мшык эшләргә, бар хәленсә ярҙамлашырға тырышҡан •строгановты ла ниндәй яза көтөүен онотмайык! Ғауға • •, мрһогеҙ, уны иң беренсе булып аҫасактар... Былай, исһам, ипдәйҙер ышаныс бар. Себер ханлығын ҡыйраты,ыбыҙҙы Иван Грозный белмәйҙер, моғайын. Белһә, ем хпндың Пермь ерҙәренә яманлыҡ ҡылырынан ҡурҡ- ,ше.

Уиыһы хаҡ, — тине Мещеряков.

Ьпшҡаларға ла йән кергәндәй тойолдо.

Пптша түгел, Строганов та белмәй Себер ханлығы••• беҙ хужа икәнлекте!

Пелһо, бошонмаҫ ине!

Эйе, Строгановҡа хат яҙып ебәрәйек!..

Мптшаға ла хәбәр итәйек, братцы, — тип ризалашты Ермак писарҙы саҡыртты.

Писарҙы терлө яҡтан уратып алған казактар беренсе •••• Гомси Аникеевич Строгановҡа, икенсенен Иван Г•••••йҙың үҙенә исемләп яҙҙырттылар:

Досток Государь!

Беҙҙең Указыҡыз менән танышҡас, Себер ханлығын ••••••ып плырға беҙгә ышаныс белдергән өсөн Строганов••• ••••лык ҡылырға теләүегеҙҙе һәм беҙҙе аҫырға ҡу-

[1] Мил С. II., 145-се бит.

ацыуығыҙҙы белгәс, ғәжәпкә ҡалдыҡ. Беҙ, бөйөк Государь, һеҙҙең ярлыҡаясағығыҙға һәм мәрхәмәтле бульфығыҙға өмөтләнеп, Рәсәй империяһы алдындағы бурысыбыҙҙы намыҫ менән үтәргә тырыштыҡ. Батша хөкүмәте ҡазнаһына яһаҡ түләүҙән баш тартҡан диңһеҙ ҡәбәхәттәрҙе аяуһыҙ ҡыйраттыҡ. Себерҙе яуыз шайтандарҙан таҙарткас, рустар йәшәмәгән буш ерҙәрҙе Рәсәй империяһына ниндәй шарттарҙа ҡушыуыбыҙҙы һөйләү өсөн һеҙгә бер төркөм казактарҙы ебәрергә тигән дөйөм ҡарарға килдек...»

Батша исеменә яҙылған хатты ҡыҫҡырып уҡығандаи *hуң,* Ермак ярҙамсыларынан һораны:

— Йә, ошо хатты батшаға кем алып барырға теләй?

Уйлап-нитеп тормайынса, Иван Кольцо урынынан һикереп торҙо.

— Атаман, ул хатты батшаға алып барып тапшырырра миңә рөхсәт бир!

— Ашыҡма, Ваня, ашыҡма! Киҫерҙән алда, ете тапҡыр үлсә, — тип иҫкәртте Ермак. — Үлем язаһына хөкем ителеүсе казактың туранан-тура Иван Грозныйға барыуы — тамуҡ утына кереүгә тиң! Холҡона тура килмәһо, батша берегеҙҙе лә иҫән ҡалдырмаясаҡ, аҫтыртасаҡ!

— Батшаның шундай икәнлеген белгәнгә күрә лә, уның ыенан тәү башлап мин осрашырға теләйем, атамап. Улемем тураһында ишетһәгеҙ, Иван Грозныйҙан мәрхәмәтлек көтмәгеҙ, тере ҡалыу әмәлен табырға тырышығыҙ!

Иван Кольцоның ныҡышмалы теләгенә Ермак ҡаршы булманы.

— Улайһа, алыҫ юлға әҙерлән, Ваня. Ҡабат осрашырға насип булмаһа, бәхил бул, дуҫҡай!

Бүтән казактар ҙа Иван Кольцо менән дуҫтарса һаубуллашты.

Себерҙәге ҡар бик тәрән ине. Шунлыҡтан Иван Кольцоны оҙатып барасаҡ ҡораллы илле казак боландар менән эттәр егеүле саналарға урынлаштылар...

XVII

Ишем далаһына ҡасып ҡотолған Күсем хан эҙһеҙ юғалды.

Уның ҡайҙа йөрөүе, ни эш башҡарыуы тураһында бер нәмә ишетелмәгәс, Ермактың казактары ғәмһеҙлекко бирелештеләр. Улар, көн дә ҡабатланған үҙгәрешһеҙ бер үк көнденештән ялҡып, Искер ҡалаһынан утыҙ-кырҡ саҡрым алыҫлыҡтағы Абалац күленә балыҡ тоторға киттеләр. Төрле урындан мәке уйып, боҙ аҫтындағы балыҡтарҙы ҡыр

маҡлпй гына башлағайнылар, Мәмбәтколдоң һыбайлылары ацгармаҫтан һөжүм итте. Ҡаршылыҡ күрһәтергә өлгермәгән балыҡсы казактарҙың берәһе генә ҡасып ҡотолманы. Күпселеген татарҙар тарафынан тотошлай тураклап үлтерелде.

Ҡасып ҡотолған казак менән Абалац күле буйына тиҙ арала кнлеп еткән Ермак Мәмбәтколдоң отрядын эҙәрләп Локпп декабрь башындағы ҡышҡы көн үтә ҡыҫҡа, һалҡын, бер туктауһыҙ ыжғыр ел ажғырыуы сәбәпле, киреснә боролорға мәжбүр булды.

Пскер ҡалаһы ситендәге боронғо мосолмандар зыяратында Абалац күле буйында үлтерелгән казактарҙың мәйетен ерләткәс, уларға ғибәҙәт ҡыльфға Ермак священникты саҡырттты.

Ктактарҙы ерләгәндең иртәгәһе көнөндә Ермак йәшәп хаи һарайына вогулдарҙың кенәздәре Ишбердея менән Суклема килде. Улар Рәсәй батшалығына тейешле ҡымды түләнеләр ҙә Мәмбәткол отрядының ҡайҙа йөрөүсе псыҡларға, уның ниндәй яуызлыҡ ҡыльфға ниәтләүе түкмәй-сәсмәй Ермакка хәбәр итеп торорға һүҙ бирҙеләр.

Кусом хан ҡоллоғонан ҡотолоп, Рәсәй ҡанаты аҫтында ирекле азатлыҡ, ирекле тормош яуларға хыялланған кенәздәре Искер ҡалаһында ҡышлаусы казакларға хыянатсылыҡ ҡылманылар.

Ищул кенәздәре ярҙамында Ермак идаралыҡ эшен көйгөрҙө, яһаҡты уңышлы йыйҙы, быҫаса кеше аяғы баҫманын ерҙәргә һунарға йөрөнө һәм балыҡ тотоу менән шөғөлләнде.

Күсем ханға хыянат итеп, Ермак урынлаштырған яңы урынына Себер татарҙары ла йәһәт ҡулайлашты.

Ермактың ихтирамын яуларға тырышҡан татар мырҙаһы Бөрөйән Мәмбәтколдоң ғаиләһе Иртыш яры буйына күсеп килеүе тураһында әйткәс, атаман йөрәкһенде.

— М.)мбәтколдоң ғәскәрендә кешеләр һаны күпме?

— Күп түгел, уның ялпыһында егерме ике кеше генә, Бөргөйән мырҙа.

— Улир ҡайһы тирәлә?

— Иртыш йылғаһы буйындағы Вагай тигән ерҙә.

— Шул урынға беҙҙе алып барьфһыңмы?

Ермак чиамтгар атаманы Ермак үҙенә ышаныс белдереүенә Бөрөйән мырҙа ихлас шатланды.

— Дпып барам, мотлаҡ алып барам!..

Ермак уйлауҙарҙан-ҡыйыу, тәүәккәлдәрҙән-тәүәккәл алтмыш кеше һайлап алды ла шул уҡ кисте Ермак юлға сыҡты. Төн уртаһы ауышҡанда Вагай тип исемләнгән ергә

барып еткән ынғайы бер ни һиҙмәй һушһыҙ йоҡлап яткан һаҡсыларҙы тиҙ арала тураҡланылар ҙа әсиргә алынган Мәмбәтҡолдо Искер ҡалаһына алып килделәр.

Иртәгәһе көндө, Күсем хандың ҡайҙа йөрөүен белерго теләп, Ермак Мәмбәтҡолдан һорау алды.

Атаманға яуап ҡайтарырға теләмәйенсә, Мәмбәтҡол ажғырҙы:

— Һин, бандит, беҙҙе хәйерсе хәлгә ҡалдырыуын етмәгән, Күсем ханды тереләй тотоп ашарға теләйһеңме?! Үлтерһәң — үлтер, әммә хан тураһында Һин ҡәбәхәткә бор ни ҙә әйтмәйәсәкмен!

Ермак көлдө.

— Юҡка сәбәләнмә, Мәмбәтҡол. Мин һине үлтертмәйем. Миңә һин тере көйе кәрәкһең, бик тә кәрәкһең! Күсем хандың ғәскәре бында яу менән килһә, һине амаиот урынына файҙаланасаҡмын, — тип ул таныһығы ҡанғаиси мыҫҡылланы ла, Мәмбәтҡолдо хан һарайы баҙы аҫтындағы төрмәлә ябып тоторға ҡушты.

Мәмбәтҡолдоң әсиргә алынуына аҙна самаһы ла үтмаңы, Ишбердея менән Мүклема Ишем далаһы аръягыпа ҡасҡан Күсем хан тураһында Ермакка килеп һөйләнелор

— Беҙ һәммәһен асыҡланыҡ, атаман. Хандын ҡайҙа йәшәгәнен барып күрҙек, уның үҙен дә осраттыҡ. МәмбО1-ҡолдоң әсиргә алыныуын әйткәйнек, хан күҙ йәштәрси түгеп иланы.

— Күсем хандың ғәскәре ҙурмы? — тип һораны Ермак.

— Элгәре хан яҡлы кешеләр бик күп ине. Мәмбәтҡолдоң тотконлокта икәнен белгәс, татар кенәздәренең күбеһе үҙ йорттарына ҡайтып китте.

— Эйе, эйе, Күсем хандың хәле шәптән түгел, — тип вогул кенәзе Суклема, Ишбердея кенәздең һүҙен ҡуәләп. — Бохар илендәге үзбәктәр менән берлектә, Себер нәзе Бикбулат та һуҡыр хандан үс ҡайтарырға ти.

— Ни өсөн?

— Татар кенәзе Сәйҙәкте, Бикбулаттың атаһын сем хан язалатып үлтергән булған...

— Былай булғас, йырткыс ханға йәшәргә күп ны, — тине Ермак.

Вәғәҙәләрен намыҫ менән үтәгән вогул кенәздоро Күсем хан йәшәгән ергә нисек барырға икәнлегеи ләп һорашҡас, Ермак Иртыш буйлап төньяҡҡа йөҙҙө.

Ул ҡабаланманы. Иртыш яры буйында ялға туҡтған һайын, үҙенең власын танырға теләмәүсе

ҡабаҡтарынан талатты, уларҙың йорт-кураларын яндырырға ҡушты.

Караптарҙа йөҙөп барыусы дружина казактары бер ергә ҡаршылыҡҡа осраманы. Аримдзян [1] йылғаһы тамагындағы ҡәлғәгә еткәс кенә, бандиттарға бирелергә теләмәһәсә, татарҙар уҡтар яуҙырҙылар.

Яуыздар, — тип һүгенде Ермак һәм пушкаларҙан атырға бойорҙо.

Колгонец бер яҡ стенаһы туптар ярҙамында тотошлай ғәйратылғас та казактар атакаға ташланды.

Ура!

Ура-а-а!..

Колгә һуғышып алынғас, ҡаршылыҡ күрһәтеүселәр сараклап үлтерелде йәки ағас ботаҡтарына аҫыуға хөкөм ителде. 0 тере ҡалған татарҙар Аҡ батшаның тоғро ҡолдарыйы сифатында йыл да яһаҡ түләргә ризалаштылар

һүтои полостарҙа йәшәүсе татарҙар ҙа, йыртҡыс казактарға ҡаршылыҡ күрһәтеүҙе мәғнәһеҙ һанап, уларға тоғро хеҙмәт итергә теләк белдерҙеләр. Остяктар күпләп йәшенеп Иртыштың бейек ярындағы ҡәлғәгә еткәс, ҡаршылыҡһыҙ буйһоноуҙы талап итеп, Ермак бер казакты ебәрҙе.

Уның ультиматумы остяк кенәзе Демьян тарафынан ҡырҫ копллғас, туптарҙан атырға бойоролдо.

Ҡатылаш ҡыйратылған ҡәлғәне казактар штурмлап алғас, Ермактың ҡушыуы буйынса, остяк кенәзе Демьян менән уның ярҙамсылары язалап үлтерелде.

Ҡаҡҡул быуындары киҫелеп язаланған остяк батырҙарының береһе, атамандың битенә ҡан төкөрөп, ҡысҡырҙы:

Һеҙ, ҡан эскес яуыздар, нисек кенә яманлыҡтар эшләгәнһеҙ ҙа, көс биреүсебеҙ, алтын кумирыбыҙ [2] бар саҡта беҙҙе сцә алмаясаҡһығыҙ!..

Ермак ярһыны. Остяк батырын ҡылысы менән ажарланып ураҡланы ла, алтын кумирҙың ҡайҙа икәнлеген үҙҙәренә теләп, кешеләрҙе йыйҙы. Уның бүтән билдәһеҙ икоилсген һорашып белгәс:

Алтын кумирығыҙҙы барыбер эҙләп табасаҡмын,— тип Ермпк артабан йөҙҙе.

Ғарҙан волосындағы кешеләрҙең береһен дә ҡалдырмай ҡырғандан һуң, юлбаҫар казактар остяк кенәзе Самар ҡалкимлык ҡылған Нарым ҡаласығына яҡынлаштылар. Тигән илем килмешәктәрҙән азат итеү есөн бик күп

[1] Аримдзяге Ныпа, ер, тау исемдәре үҙ исемдәре менән бирелде.
[2] Кумир —идол.

кес туплауына ҡарамаҫтан, кенәз Самар, һаҡһыҙлыҡты онотоп, ғәмһеҙлеккә бирелде.

Остяктарҙың бер ни һиҙмәй хыр ҙа мыр йоҡлауынап файҙаланып, бер ниндәй тотҡарлыҡһыҙ төн уртаһында ҡаласыҡҡа баҫып ингән казаҡтар кешеләрҙе аяуһыҙ тураҡларға тотондолар.

Шау-шыуҙы ишетеп йоҡоһонан уянған Самар, түшәгенән һикереп торған ыңғайы, ҡоралына йәбеште. Ләкин казаҡтарға ҡаршылыҡ курһәтергә өлгөрмәне, дошман пуляһынан үлемесле яраланды.

Башлыҡһыҙ ҡалған кенәздең һуғышсылары тарҡалгпс, остяктарҙы талап байыҡҡан казаҡтар оло еңеүҙе таита налы байрам итте. Казактарҙан атаман менән уныц яр ҙамсылары ла ҡалышманы. Остяк кенәзенең ҡатындары менән ҡыҙҙарын бүлешеп алып, төнө буйы ашап-эсеп, күңел астылар.

Иртәгәһе көндө казактар артабан юлланды.

Обь ярындағы остяктарҙың Назым ҡалаһы менән шул тирәләге ҡәлғәләрен һуғышып алған саҡта Никита Пон үлемесле яраланды. Уның һәләк булыуына үсләшеп, атаман яман ҡоторондо. Ундағы остяктарҙы ҡатыщдары һым бала-сағалары менән тотошлай ҡырҙыртып, уларҙың кенәздәрен аҫтыртҡандан һуң да Ермак тыныслана алманм.

— Ниндәй батырымды һәләк иттеләр, динһеҙ ҡәбәхәттәр!..

Никита Панды юғалтыуына ҡайғырып, атаман аҙып буйы эсте. Эс бошорғос уй-хистәренән шунда ла ҡотоля алмағас, артабан барырға теләмәйенсә, киргә боролдо.

Искер ҡалаһына яҡынлаша башлағас, яр буйыпча иҫәпһеҙ-һанһыҙ йыйылған кешеләрҙе һәм дәртле көй яңғыратҡан музыканттарҙы күреп, Ермак шатланды.

— Братцы! Халыҡ беҙҙе ҡаршы алырға йыйылған. Беҙҙең кем икәнде күрһендәр өсөн байрамса кейенегеҙ!

Күп байлыҡтар тейәлгән караптар яр буйына килеп туҡталғас, алҡышлап ҡысҡырышҡан тауыштар артты:

— Казактар молодец!

— Ҡыйыу атаманға дан!

— Дан, дан, дан!..

Үҙен батшаларса һиҙгән Ермак ярға сыҡҡас та кеШ ләрҙең алҡышлауы баҫылманы.

Байрамса кейенгән бер төркөм казактар атаманды к тәреп алып, ҡалҡыу урындағы йомшаҡ креслоға ултыр ҡас, яр буйында тантаналы байрам башланды.

Ҡайҙа ғына ҡарама, уйын-көлкө.

Байлыктары менән мактанған казактар остяктар араҡы эсергә һәм тәмәке тартырға өйрәтте. Ап-аруҡ пс

тан остяктар ҙа, бурыслы булып ҡалырға теләмәйенсә, һомарт, хуш күңелле казактарҙың үҙ ҡатындары менән тиң үҙарыуына ризалаштылар...

Казактарҙы ҡаршы алыуға бағышланған тантананан 11 да, йән тетрәткес уй-хистәргә күмелеп, Ермак үҙен тотнлла иң бәхетле кешеләрҙең береһе итеп тойҙо.

Мәскәүгә барып етә алмаған Иван Кольцоның һалҡын үлеүҙән ауьфып ятыуы тураһында белгәс, атаманды көтмәгән бер уй тетрәтте: «Иван Грозныйға буйһоноуҙан баш тартып, үҙемде Себер иле батшаһы итергә микән Батша булһам, ҡүәтле ғәскәр ойоштораҫҡмын һәм ... м'Хосрәтһеҙйәшәйәсәкмен!..»

Бер аҙ ваҡыт уҙғас, батша хөкүмәтенең ғәскәренә ҡаршы тора алмаясағын аңлап, ул йән кинәндергес фекерен тиҙәлдө. Ундай хыял бойомға аишаясаҡ. Сөнки, сит ... иф мсиән бәйләнеш булдьфылмайынса, алыҫ Себерҙә ... сцел булмаясаҡ. Уның өҫтәүенә, үҙәккә үтерҙәй ... ҡыш, аҙыҡ һәм ҡорал етешмәүе ҡурҡыныс тыуҙыр ...

Яҙмыштан уҙмыш юҡ. Иван Грозный менән нисек ...ha бәйләнеш тотоуҙы ашыҡтьфЬфға кәрәк, — тип Ер... дружина писарын саҡыртты. — Ҡағыҙ-кәләмәнде ал, ... р Оатшаға хат яҙабыҙ.

Икенсе тапҡьфмы, атаман?

Эйе, икенсе ташшр... Беренсе хатты батшаға алып ... щ Иван Кольцо ярты юлда ауырып ята. — Ермак пи... ,1 л'юк ҡаҡты:

Я,.!

Бойок Государь!

Беҙ, һеҙҙең тарафтан ҡаты кәһәрләнгән ярлы казактар, ... газабы кисерәбеҙ. Хаталаныуыбыҙ өсөн үкенәбеҙ. Хрнстос исеме менән Батша хаҡына үлемгә ҡаршы ... к һәм данлыҡлы Рәсәй империяһына Обь йылғаһы... ьлемге Себер ерҙәрен ҡуштыҡ. Хәҙер һеҙҙән воевода ... р сбореүегеҙҙе көтәбеҙ. Бер ниндәй шарт ҡуймайынса, ... Себер ханлығындағы ерҙәрҙе тапшьфырға, әгәр ҙә ... Христос һәм һеҙҙең өсөн үлергә йәки яңы ... Фаилыҡҡа барьфға әҙербеҙ...»

Батша исеменә икенсе тапҡьф яҙылған хатты алып баҫ... помошоп Ермак үҙенең икенсе ярҙамсыһы Матвей V ... ковҡа йөкмәтте.

Ы һаҡ бул, дуҫкай! Туранан-тура Мәскәүгә бар... Бит хатты Семен Строганов аркылы тапшырт батша... Батша һарайындағы кешеләрҙе ул яҡшы белә. Иван ... ныңыц асыуын баҫыу өсөн, бәлки, ул берәй әмәлен ...

— Аңлашыла, атаман, әмерең үтәлер!

Бер төркөм һыбайлы казактарҙы эйәртеп, Матвей Мещеряков шул уҡ көндө Рәсәйгә табан юлланды.

Тубыл йылғаһы буйындағы башҡорт ауылында туҡталып, тапҡыр юлдан алып барырҙай кешене ялланылар.

Ике аҙна самаһы ваҡыт уҙғас, Мещеряков Иван Кольцоны осратты һәм улар Семен Строганов йәшәгән ҡалага бергә килделәр.

Себерҙәге хәл-ваҡиғаны оло еңеү тип һанаған Строганов, ҡыуанысынан ни эшләргә белмәйенсә, казактарҙы берәм-берәм күкрәгенә ҡыҫып ҡосаҡланы.

— Ҡәҙерлеләрем, үҙегеҙҙе генә түгел, мине лә үлем язаһынан ҡотолдорҙоғоҙ! Хәҙер Иван Грозныйҙың асыуы ҡуркыныс түгел. Ул барыбыҙҙы ла ярлыҡаясаҡ!..

Семен Строганов казактарҙы ла үҙе менән бергә Мәскәүгә алып барҙы. Батша һарайында юғары вазифа биләгән Федор Басманов менән осрашып һөйләште лә казактарға батша эргәһенә инергә рөхсәт һораны.

Үҙе шикелле аҙғын Басманов менән иң яҡшы мөнәсәбәттә булғанлыҡтан, Иван Грозный казактарҙы тотҡырлыҡһыҙ ҡабул итте.

Батша ултырған бүлмәгә инеү менән Иван Кольцо, түбәнселек менән баш эйеп, үҙҙәре менән алып килгән кеш, төлкө, ҡондоҙ тиреләрен тапшырҙы.

— Бөйөк Государь, был бүләктәр — беҙҙән. Беҙ дин һеҙ ҡәбәхәттәрҙән һуғышып алған Себер ерҙәрен дә Рәсәй империяһыныҡы итеп раҫлауығыҙҙы үтенеп һорайбыҙ!..

Үлем язаһына хөкөм ителеүсе казактарҙың Рәсәй (ш>|| башҡарған эшен Федор Басмановтан ишетеп белеүгә ҡарамаҫтан, Иван Грозный үҙен асыулы тотто. Аҙаҡким, Себерҙәге ваҡиғаны ентекле һорашып белгәс, уныц ҡырыу холҡо енәйәтселәргә ҡарата ихтирам менән алмашынд

— һеҙ, казактар, Рәсәй империяһының ысын улдарын! Барығыҙ ҙа оло хөрмәткә, мактауға, данға һәм Яр ҡауға лайыҡ батырҙарһығыҙ! Тоғро хеҙмәтегеҙ өсөп рәхмәт!

Бәләкәзанан имен-аман ҡотолоуҙарына ҡыуанып илай-илай казактар Иван Грозныйҙың ҡыҙыл ситегеи сәкмәне салғыйын үпте.

— Беҙ Христос һәм Һеҙҙең алда изге бурысыбыҙ ғына үтәнек, — тине Иван Кольцо.

Иван Грозный, бурыслы булып ҡалырға теләмәйен Ермактың илселәрен бик күп аҡса, буҫтау менән бүләкләне һәм Себер ерҙәрен Рәсәй империяһына ҡушыуға налған оло мәжлес ойошторорға бойорҙо.

Өс көн буйы Мәскәү халҡы Ермак казактарының

ңеүен тантаналы байрам итте. Сиркәүҙәрҙәге еҙ ҡыңғырауҙар, даң-доң тауыш сығарып, өҙлөкһөҙ гөүләне, христыпдар ғибәҙәт ҡылды, священниктар буҙланы...

Батша һарайында ла, Ҡыҙыл майҙанда ла һәм башҡа урыҙҙа лә, бер-береһе менән яңы ҡыуанысты уртаҡлашып, шаулаштылар:

Ссберҙәге яңы ерҙәрҙе Рәсәйгә Христос ебәргән!

- Ермак менән уның казактары бер ҡасан да еңелеү белмәгән ысын батырҙар!

Улар бусурмандарҙы тулыһынса ҡыйраткан!..

Ҡуырыу булыуына ҡарамаҫтан, бындай ҡыуанысты кендерҙә Иван Грозный үҙе лә батша һарайында ултырып үтманы. Ярандарын эйәртеп, кешеләр менән шығырым ш Ш урамға сыҡҡас, йәш сағындағы һымаҡ, тетрәткес шатлыҡ кпсерҙе. Ошондай шау-шыулы күңел асыуы Ҡазан һом Острхан ханлыҡтарын һуғышып алғандан бирле үрмәне юҡ ине әле уның.

Чоскәү халҡы тантана кисерә, батыр казактарҙы шәрәф һәм уларҙы кәрәгенән артыҡ ҡупыртып маҡтай. Шәш, Себер ханлығын ҡыйраткан Ермактың казактары Ю "мәшәүсе кешеләрҙең ғүмеренә етерлек байлыҡты ғәмәлгә килтереп тапшырған. Ундай күп байлыҡ, йәнәһе, үтә птәшкән...

Ханлыҡтың нимә һейләгәнен Иван Грозный үҙ ҡолаҡтары менән ишетмеһен күберәк ишеткеһе килде. Ләкин, һаулығы ҡабат боҙола башлағас, батша һарайындағы йоко бүлмәһенә ҡайтып ятырға мәжбүр булды.

Тантаналы байрам тамамланғандан һуң, Иван Грозный воевода кенәз Семен Дмитриевич Глуховты саҡыртты һәм үҙенә! йөҙ кешелек отряд менән Себерҙәге Ермак әрбәленә Оарырға ҡушты. Иван Кольцоға ла ҡайтышлай, Ыиипыпда осраған урыҫ ғаиләләрен үҙе менән алып барырға һәм Себерҙәге иң яҡшы ерҙәрҙе уларға таратып биреү рөхсәт итте.

Иван Грозный Тубыл аръяғындағы уңайлы урындарҙа (ш.| ҡалалар төҙөү, уларҙы ҡәлғәләр менән нығытыу, ҡәлғәнеңына туптар ҡуйыу, сиркәүҙәр һалдырыу, Себер-ҡ буйы ерҙәргә тиҙ арала урыҫтарҙы алып барып тулыландырыу һом урындағы кешеләрҙе христианлаштырыу хәстәрлеген до күрҙе.

Шуң мпксаттан сығып, Вологодский епископын һәм ҡаҙанлы священниктарҙы ғаиләләре, туған-тыумасалары менән Себергә күсерергә, тигән махсус Указ сығарҙы.

Ҡыҙғыс саралар ойошторолмайынса, Себерҙәге варварҙар, ир Росой империяһына тынғы бирмәйәсәк, — тине

Рәсәй империяһына намыҫлы хеҙмәт иткәне өсөн атаман Ермакка оло ышаныс белдереп, ҡиммәтле бүләктәр ебәрҙе, ә экспедицияны ойоштороусы Семен Строгановҡа Иван Грозный Оло һәм Кесе тоҙ яттарын бушлай бирҙе. Максим менән Никита Строгановты ла иғтибарһыҙ ҡалдырманы, уларға барлыҡ ҡалаларҙа иркен һатыу итергә һәм пошлина түләмәҫкә рөхсәт бирҙе.

Батшаның махсус Указы буйынса дәүләттән эш хаҡы алғаи Иван Кольцо һәр нәмәне үҙ белдеклегенә баш ҡарҙы. Ул Себергә ҡайтып . китергә ҡабаланманы, ҡыш буйы ҡунаҡсыл Семен Строгановта үпкә ауырыуынап дауаланды, иркенләп ял итте. Яҙғы йылғалар өҫтө боҙҙарҙан таҙарғас ҡына, Строганов эшләткән караптарға казактары менән тейәлеп, Чусовой йылғаһы буйлап йөҙҙ

Искер ҡалаһына әйләнеп ҡайткан казактарын Ермлк оло ҡыуаныс менән ҡаршыланы.

Казактарға эйәреп килгән воевода кенәз Волховский Иоанн IV сәләмен Ермакка тапшырғас, казактар алҡышлап «ура» ҡысҡырҙылар һәм дәртле музыка яңғыраш.

Тауыштар бер аҙ баҫылғас, кенәз Волховский атаман дың ярҙамсыларына һәм казактарға бүләктәр өләштс, • атаман Ермакка ике тимер күлдәк, көмөш кубок мсп,н| Иван Грозный үҙ өҫтөнән һалып биргән тунды тапшырҙы.

Государь Ермакка Себер кенәзе исемен бирҙе, юғары дәүләт исеменән уға Себерҙә әүәлгесә хакимлыҡ ҡылырға, барлыҡ ерҙә тәртип урынлаштырырға, Рәсәй ИМРП« леге өсөн көрәште артабан көсәйтергә һәм элекке аяпыслы ваҡиғаны мәңгелеккә оноторға ҡушты. — Ул атаманың ҡулын ҡыҫҡас, йәнә дәртле көй яңғыраны һәм «Ура» ишетелде.

Яғымлы һүҙ ташты ла иретә тигән мәкәл дөрөҫтөр, ахырыһы. Батша исеменән кенәздән мактаныуына күнеп тулып, Ермак беренсе тапҡыр күҙ йәштәрен ағыҙып идцм ны, ә казактар алҡышлап ҡысҡырышты:

— Ура-а!

— Батша менән беҙҙең атаманға — дан, дан, дап!

XXIII

Юлбаҫар казактарҙың ҡыуаныс-шатлыҡтары оҙцщЦ барманы: зәңге ауырыуы көсәйеүенән, үпкәләрено һалтеүҙән һәм Себер шарттарына ҡулайлаша алмайынс уларҙың ярты-йортоһо ғына ҡалды. Ҡыш еткәс, аҙыҡ наҡыҫланды. Тәрән көрт, үҙәккә үтерҙәй киҫкеп һалҡ ел ағымы ситтән иген алып килергә йәки балыҡ го менән шөғөлләнергә мөмкинлек бирмәне.

Себерҙәге батша вәкиле кенәз Волховский аслыҡтаю һәм юцгенәи интеген үлгәс, Ермак Рәсәйгә ҡушылған Себер сҙорен һәм Иван Грозныйҙың үҙенә ҡарата ышаныРын югалтыуҙан ҡурҡты. Шуға күрә, казактарҙың көсөн һпклорға тырышып, ул тирә-яҡтағы аҙ һанлы халыҡтарҙың барлы-юҡлы мөлкәтен таланы.

Яҙ отсп, ҡояшлы көндәр башланғас, Үҙәк Рәсәйҙән Сегн ры пҙыҡ-түлек ебәрҙеләр һәм ауырыу казактарҙы дауалау юлға һалынды.

Хоҙер аслыҡтан ҡырылыу ҡурҡынысы бөттө, казактар оторлек көс йыйҙы, — тип шатланған Ермак Себер ины варҫы Мәмбәтколдо [1] Мәскәүгә оҙатты һәм Иван Грозныйҙың мактау һүҙен ашҡынып-талпынып көттө.

Ләкин атамандың өмөтө аҡланманы. 1584 йылдың уге һинсрсисс мартында Иоанн IV үлеүе тураһында белгәс, : ийны хосрәткә күмелеп, ул эскелеккә һалышты.

Ятаһы урынына Рәсәй батшаһы булып ҡалған Фе- р Цоашювичтан яҡшылыҡ көтмәйем! Уның менән уртаҡ и) килә алмаһам, белмәйем, артабан нисек йәшәргә,— ии ацҡы-тиңке йөрөгән сағында татар кенәзе Ҡарасәй' хапдан ҡасып килде һәм батша хекүмәтенә тоғро нтсргә ризалашты.

Кос еткеһеҙ ауырлыктарҙан күңеле бушанып ҡалыуыге птпмаи шатланды.

Үҙең менән һуғышсыларыңды ла алып сыктыңмы ҡ?

Әлбиттә, һуғышсыларымды ла алып сыҡтым, — тип иоПтпрҙы кенәз Ҡарасәй.

Ппцә улар күренмәй?

Порттарыбыҙҙы нуғай мырҙаларынан һаҡлап ҡал-

Нуғай мырҙаларын ҡыуып ебәрергә һиңә ярҙам кә-

Юк, беҙ һинең ярҙамға мохтажбыҙ, атаман, — тине ммюзе.

Ермпк пуғайҙарҙы ҡыуып ебәреү бурысын Кольи!(мотте.

Ҡарасәй менән бергә бер теркөм казактарҙы ч> ген, Ппап Кольцо походка сыкты.

Сыбыҡтар араһынан аҡҡан йылғаға етерҙән алдпрга һыбайлы татар егете осраны.

Нуғайҙарҙың ҡайҙа тупланғанын һорашып беләйем;

[1] ю\го алып барылғас, мосолман динендә ҡалған Мәмбәт- чоҡумотенэ хеҙмәт итергә ризалаша.

әле. Һеҙ бара тороғоҙ, тиҙҙән ҡыуып етермен, — тип кенәз Ҡарасәй һыбайлы егет менән һөйләшеп ҡалды.

Кисеүҙән сыҡҡан казактар бөтөнләй аңғармаҫтан дошман ҡамауына эләкте. Дуҫ булып ҡыланған кенәз Ҡарасәйҙең хәйләһен шунда ғына аңлап, Иван Кольцо ҡамауҙы йырып сығырға тырышты, әммә көс тиң түгел ине. Көсло алыш ваҡытында отряд башлығы Иван Кольцо үлемеслс яраланды, Яков Михайлов осо ағыуланған уҡ тейеүҙән үлде, казактар ҡылыстар менән тураҡланды.

Атаман Ермактың иң яҡын ярҙамсылары менән йөҙгө яҡын казактарынан берәһе лә иҫән ҡалмауы тураһындағы хәбәрҙе ишетеп, бүтән улустарҙа йәшәүсе татарҙар мс нән аҙ һанлы халыҡтар ҙа кенәз Ҡарасәй отрядына ҡушылдылар.

— Бандиттарҙы ҡәлғәнән сығармай, асыҡтырыш үлтерергә кәрәк. — Кенәз Ҡарасәй Искер ҡалаһын ылауҙар менән ҡат-ҡат уратып алырға бойорҙо.

Атаман Ермак та ҡул ҡаушырып ултырманы, пушкаларҙан атырға ҡушты. Әммә алыҫта торған баш күтәрсүселәргә туптарҙың зыяны теймәне.

...12 июндең ҡараңғы төнөндә Ермак ҡаланы һаҡларги ҡалды, ә Матвей Мещеряков командалығындағы казактар ҡәлғә тышына сыҡты.

Ул, казактары менән тауыш-тыныһыҙ ғына ылауҙар арһынан дошман станына уҙғас, йоҡлап ятҡан баш күтәреүселәрҙең муйындарынан салырға ҡушты. Тик кенәз Ҡарасәйҙе бер ерҙә лә эҙләп таба алманылар. Баш күтәреүселәрҙең мәйеттәре менән тулы тирә-яҡ ныҡлап яҡырҙан ҡына Ҡарасәйҙең яҡындағы күл аръяғына йөҙеп сығыуы һәм ҡабаттан Ишем далаһына табан ҡасып китеүе асыҡланды.

— Данлы Иван Кольцо менән Яков Михайловты һәләк итеүсе Ҡарасәйҙең яҡты донъяла йәшәргә хаҡы юҡ, тип Ермак татар кенәзен эҙәрләү бурысын Матвей Мещеряковҡа йөкмәтте.

Мещеряков командалығындағы казактар атамшин әмерен бойомға атҡарырға ҡабаланды. Походҡа сығыу дың икенсе аҙнаһында татар кенәзе Бигиштең төркөмө ҡыйратып, улар Ишем далаһында йәшәүселәрҙе яуҙы ҡырҙы. Мәғәнәһеҙгә ҡан ҡойорға теләмәгән Тебен ҡәл һындағы татар улустарыиың башлығы кенәз Еличай, ю баҫар казактарҙы икмәк-тоҙ менән ҡаршылап, атаман макка Күсем хандың улының кәләшен, ә Матвей Мещер ковҡа үҙенең ун биш йәшлек һылыу ҡыҙын бүләк итте.

Кенәз Еличайҙың хәйләләшеүенән ҡурҡып, Матвей у

но Оҙлөк итеп бирелгән һылыу ҡыҙ урынына йәнлек тиреләре биреүҙе һораны.

Һрмак Иван Кольцо менән Яков Михайловты һәләк итеүсе ксиәз Ҡарасәйҙе эҙәрләүҙән төңөлмәне. Ике йыл буйы татар кенәзен эҙләп Себерҙе гиҙеп йөрөгән ваҡытта алыҫтағы Азия илдәре менән бәйләнеш булдырырға һәм р менән сауҙа эшен яйларға ла өлгәште.

Ирал дицгеҙе эргәһенән һәм ҡыр-ҡаҙаҡтар далаһы. ша уҙған Бохара сауҙагәрҙәренең каруандары бер-бер рәтлы Себергә килә башлағас, уларҙың именлеген һаҡлауҙы Ермак үҙ өҫтөнә алды.

Ләкин нисек кенә һиҙгер, уяу булырға тырышмаһын, ыр койоп яуған бер төндө, арып-талып, атаман йоҡоға ҡ ды. Упың һәр хәрәкәтен күҙәтеүсе шымсылар, Күсем ша Оарып, пушкаһыҙ ҡалған казактарҙы ҡыйратырға ҡ ылы шарт булыуын әйттеләр.

Шул уҡ төндө һөжүм башлаған Күсем хандың ғәскәре ятҡан казактарҙы тураҡларға тотондо. Матвей июряков менән бер казак ҡына үлемдән ҡасып ҡотолоп атаман Ермак йоҡо аралаш Иртыш ярынан аҫҡа и р,ю,

Ҡал йыртҡыстай ажарланып, тулҡындарын текә ярға-ҡаға аҡҡан йылға ҡосағына эләккән атаман,. ҡ ҡауефһеҙ тойоп, икенсе яҡтағы кәмәләргә табанПылғаның артынан күберәген уҙғас, ауыр тимер акренләп-әкренләп аҫҡа һөйрәүен, хәлһеҙләндереүев

Иван Грозный бүләк итеп ебәргән тимер кейем мине птсрме?» тигән ҡот осҡос уй Ермактың йөрәгенһом ул, тын алырға ҡамасаулаған һыу тамсылаЕсәй-сәсәй, Иртыш йылғаһының төбөнә китте...

Атаман Ермактың мәйетен Епанчин ауылында йәшәүсе кенозс Бигиштең ейәне Яниш ярға сығартты.

Ҡала бандиттар атаманы мәйетен күрергә килеүсе таәргәһенә һуҡыр Күсем хан да барып баҫты.

Ермак мәйете ниндәй хәлдә? — тип һораны ул.

Яҡшөшөп тороусы күмәк кешеләр яуап ҡайтарманы. ыр, урта буйлы, ныҡ мускуллы, киң яурынлы, йәйеңке ҡ, бөдрә сәсле, сем-ҡара һаҡал-мыйыҡлы мәйеткә текҡ ҡ ҡ, бер урында шаҡ ҡатып торҙо ла торҙо. Ермак ҡ ҡ һуҡ да ҡурҡыныс, яуыз күренде...

И\мчдыщ төҫө үҙгәргәнме? — Күсем хан ҡабатлап ҡ ҡ ына кенәз Бигиштең ейәне ханға күтәрелеп ҡа-

) ектән белмәгәс, яуыздың төҫө үҙгәреүе-үҙгәрмәҡ ҡ ҡ ҡ ыйын.

— Уның кейеме именме?

— Имен.

— Нимә кейгән?

— Уның өстөндә тимер кейем... Күкрәге тәңгәлендә алтын сәмреғош төшөрөлгән һүрәт...

— Яуыз ләғнәт, — тип асыулы төкөрөнә-ҡаҡырына, Күсем хан ситкә китте.

Шуны ғына көткән һәр кеше, ажарланып ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, салҡан ятҡан Ермактың мәйетенә уҡтар яуҙыра-башланы.

— Мә, яуыз, кәрәгеңде ал!

— Теге донъяла ла интек, дөмөк!..

Мәйеттән үс алыу мажараһы алты аҙнаға һуҙылды.

Иҫәпһеҙ-һанһыҙ тапҡыр уҡтар мөнән атыуҙан имси урыны ҡалмаған атаман мәйете тәңгәлендә, ығы-зығы ҡубарып, йырттыҫ ҡоштар көтөүе өйөрөлдө.

Күсем хандың ҡушыуы буйынса, мәйеттән һалдырЫи ллынған тимер кейем Белогóродскийҙың тораташ — идол жрецына, эске күлдәген Ҡандаулу мырҙаға, кафтаныи көнәз Сәйдеккә, ҡылысы менән ҡайышын кенәз Карасобға бирҙеләр.

Һөҙәк тау түбәһендә ҡаҙылған тәрән соҡорға атаманДың мәйетен күмделәр ҙә, яуыздан ҡотолоуҙарына ҡыуанышып, татарҙар утыҙ ике үгеҙҙе һуғымлыҡҡа һуйҙырҙылар һәм тантаналы байрам иттеләр.

XIX

Ермактың үлеме Күсем ханды ҡыуандырһа, үлемһын ҡасып ҡотолған Матвей Мещеряков ҡайғы-хәсрәтко һүлмелде. Ул ҡайғыһын, йөрәге әрнеүен нисек баҫырға бөлә мәйенсә, эскегә һалышты. Араҡының да файҙаһы теймәгәс, күңел төшөнкөлөгөнә күмелде.

— Себерҙә казактарҙың хакимлыҡ ҡылыуын ҡыргпЦ азиаттар һис яратмай! Атаманды һәләк итеүҙәре етмәгән хәҙер беҙҙе лә ҡырыуҙары ихтимал. Иван Грозный үлгәндән бирле, яңы батша хөкүмәте беҙгә ярҙамлашмай, Строганов менән Строганов та онотто, — тип зарланды-зарланды ли Рәсәйгә ҡайтып китергә ниәтләнде [1].

Алыҫ юлға сығырға казактар әҙерләнеп бөткәндә ге воеводалар Тарский һәм Войков командалығындағы дүрт йөҙ казакты, литовецтар менән немецтарҙы берләштерҙе

[1] *Карамзин Н. М.* «История государства России», т. IX, *Ш*шд. «Книга», 1989, 249-сы бит.

ынҫыс отряд Искер ҡалаһындағы Матвей Мещеряковтын I чиктарыпа ярҙамға килеп етте.

Цоеңодалар, юлдан килгән ыңғайы ял итеп тормайынса, Себер ханлығындағы хәл-ваҡиғаларҙы ентекләп һораштылар.

Бөҙөсц хәл атаман Ермак менән күпселек казактарыбыҙ һоләк булғандан бирле үтә мөшкөлләнде, — тине Матвей Мещеряков.

Күсем хандыҡы нисек?

Ирмак үлгәс, уның ҡайғыһы бөттө. Үҙенә тоғро ҡалған ксчнсләр менән Брабин далаһында сәсеп үҫтергән икмәкте ашаи йәшәй. Әммә беҙгә һөжүм башларға батырлығы стмәй.

Күсем хандың ғәскәре ҙур микән? — Воевода Войков йорокһенде.

Шымсыларыбыҙ хәбәр итеүенә ҡарағанда, уның ярмсилек ғәскәре булырға тейеш.

Сармәһенән сығарып ауыҙына ҡапкан урт тулы аҙыкты сәйнәүҙән тыйылып, воевода Тарский алан-йолан ҡаранды.

Искер ҡалаһындағы һинең алтмыш ете казагыңды ншһаҡ, беҙҙең отрядтағы кешеләр һаны яа шул сама. Күсем ханға һөжүм башлайбыҙмы әллә?

Касан? — тип һораны Матвей Мещеряков.

Цртәгә иртүк.

Ктактарығыҙға ял бирмәйһегеҙме ни?

Күссм хандың отрядын тулыһынса кыйратҡас ял ит ҙ.

Тарскийҙың тәҡдиме менән воевода Войков та ризалашты.

Дорос, Күсем ханға һөжүмде һуҙмайыҡ. Беҙҙең Сеиһ I и нилсүсбеҙҙе ишетһә, ул көс туплаясаҡ.

Ошоһо, тәүәккәлләнек, — тине Матвей Мещеряков та ҡушылышып.

Күртенсе августың ҡараңғы таңында берләштерелгән ҡаҙаҡтар отряды походҡа сыҡты. Обь ярҙарына барып ет, һонан, отряд шул тирәләге ныҡытмаларҙы кыйратып тотондо.

Ғәйләп дошман ғәскәре килерен көтмәгәнлектән, яр буйында плыш оҙаҡ барманы. Ныҡытмаларҙан ҡыҫырыҡланып ятырылған хан яугирҙары текә яр буйлап аҫҡа таһ . . . нмдолор. Казактарға ҡаршылыҡ күрһәтеүсе Күсем ханың Оор туған ҡустыһы Илитен, Ҡаан исемле улы, ... , уи мырҙаһы, йөҙ илле батыр нуғышсыһы тултерелде, йөҙләбе йылғаға батырылды, иллеләбе

әсиргә алынды, ҡалғандары Күсем хан менән бергә ко
мәләрҙә ҡасып ҡотолдо.

Кәмәләргә ултырырға өлгөрмәгән Күсем хандың яр
буйында тороп ҡалған һигеҙ ҡатынын, һигеҙ ҡыҙын, бнш
улын, биш кенәзе менән барлыҡ байлыҡтарын атамаиднң
үҙ-ара бүлешеп алды.

Батша хөкүмәт-е алдында бурысы үтәлеүгә һылтаппш
Матвей Мещеряков үҙенә буйһонған казактар менок Р.)
сәйгә ҡайтып китергә теләк белдергәс, уны ебәрерго)П
залашмайынса, воеводалар шаулашты:

— Себерҙе һинән дә яҡшыраҡ белгән кеше юҡ!

— Ҡайҙалыр ҡасып ҡотолған Күсем ханды эҙлэп тп
бырға ярҙамлашмауың — хыянатсылык!

— һин китһәң, беҙ ҙә Искерҙә ҡалмайбыҙ!..

Уларҙың ҡыланышы Матвей Мещеряковҡа оҡшамаиы

— Миңә кендегегеҙ йәбешмәгәндер бит! Себерго ки
леп етер-етмәҫтән миңә эйәреп ҡайтырға хаҡығыҙ юҡ!
Күсем ханды минһеҙ ҙә табырһығыҙ. Ул чадтар ерендә
йәшәй, ти. Татар муллаһы Тол Мөхәмәтте ебәрһәгеҙ, Кү
сем ханды һеҙгә әсиргә бирелергә күндерәсәк. Сөнки хан
дың Тол Мөхәммәттән башҡа ышаныслы кешене ҡалмаиы.

•— Кәңәшең яҡшы, тик ул кешене беҙгә нисек табыр
ға? — тип һораны воевода Войков.

— Сәйет мулла минең дружинала, — тип Матвс(' Ме
щеряков уны саҡырып килтерергә ҡушты.

Тол Мөхәммәткә Күсем ханды эҙлэп әллә ҡайҙарын
йөрөргә тура килмәне. Шул аҙна аҙағында уҡ кеше мәйет
менән үле аттар шығырым тулы Обь йылғаһы буйыпдшиҡ
урманда Күсем ханды осратты. Йыртыҡ-йортоҡ күлдәк
ыштанда ғына ҡалған Күсем хан, ялан баш, ялаи аяк,
үтә меҫкен ярлы ҡарт хәлендә өс улы һәм тоғро хезмәт
селәре араһында башын иҙеүе асыҡ күкрәгенә һалынды
рып ултыра ине.

Тол Мөхәммәттең килеүенә һуҡыр хан ғәжәпләнмәне
Воеводалар вәкиле вазифаһын башҡарған Сәйет муллиП
булдермәй, ихлас тыцлап ултырҙы-ултырҙы ла тын
ҡына әйтте:

— Өгөт-нәсихәтең һәм воеводаларҙың мине ярлыкар
телэк белдереүҙәре өсөн рәхмәт. Мөлкәтем теүәл, бай д
ғым күп, үҙем йәш, көслө ваҡытта Аҡ батшаға бай
лырға теләмәгәнде, хәҙер үлем эҙлэп барырғамы ни
һуҡырайҙым, һаңғырауландым, үтә меҫкен ярлы хәлд
мен, ҡартайҙым да. Байлығымды, мал-тыуарҙарымдм.
сәләрем менән ҡыҙҙарымды юғалтыуға ла артыҡ үиеи
йем. Урыҫтар әсиргә алып, Мәскәүгә оҙатылғаи ин
иң ярагкан Әсмәнәке улым йәл, үтә йәл! — Томи һуҡ

ындың ксрпектәре араһынан һығылып сыҡҡан берсөк-
борсоҡ күҙ йоштәре һаҡал-мыйығынан тәгәрәп килделәр ҙә
ағалағы бүҫелеп төшкән тубығына тамдылар. — Әсмәнәке
үлем)ргомдә булһа, бер ниндәй байлыҡһыҙ, туған-тыу-
ғас-ынаһыҙ ҙа йәшәргә тырышыр инем. Хәҙер яҡты донъяла
бөтөм ҡалманы. Бындағы уландарымды Бохарстанға
"ПШМ да, үҙем нуғайҙар яғына сығып китәм.

Өҫтөндә йүнле кейемең, менергә атың булмаған
һәм нуғайҙар яғына нисек барырһың? — тип һораны Тол
Мөхәммәт мулла.

Мицо тоғро кешеләр, һирәк-мирәк булһа ла, ҡал
ғ ш оло. Чад волосы кешеләре ат бирергә вәғәҙә итте.
Бында уларҙың килеүен көтөп ултырам.

Росәй гражданлығын алған чадтарға ышанаһыңмы?

Ышаиам, — тине Күсем хан.

Чад полосы кешеләре, ысынлап та, элекке Себер ха-
ныиың ышанысын аҡланы. Улар үҙҙәре менән эйәрле ат,
, кейеме, иҫке бүрек, тире тун һәм йөнтәҫ аяҡ кейеме
ғ ш кмлде.

Погои үк сәфәр сығаһыңмы? — тип һораны Тол Мө-
ә мәт мулла.

Юҡ әле, бында эшем бар, — тип Күсем Себер хан-
ғ ғ ғ

байрам иғлан ителде.

Мәскәүҙәге был тантана элеккеләренә ҡарағанда лм ҡыҙығыраҡ һәм күңеллерәк үтте. Сөнки Күсем хан замаһындағыса үтә ҡупшы кейендерелеп, иң ҡиммәтле аҫыл таштар, алтын-көмөш менән биҙәлгән хан ҡатындарын, ҡыҙҙарын, килендәре менән уландарын һәм туған-тыумасаларын бәрхәт йәки айыу тирене йәйеүле кашауай саналарға ултыртып, уларҙы кешеләр шығырым тулы бер урамдан икенсеһенә йөрөттөләр.

Элекке Себер ханының күп һанлы ғаиләһен алдаи дп, арттан да оҙатып йөрөүсе баярҙар менән һыбайлы ка- закстар, бер-береһен уҙырырға тырышып ҡысҡырышҡан кешеләр араһынан ҡушарлап ат егеүле күмәк кашауп саналарҙы тотҡарлыҡһыҙ уҙғарыу сараһын күрҙеләр.

Сиркәүҙәрҙәге иҫәпһеҙ-һанһыҙ еҙ ҡыңғырауҙарҙың о- лөкһөҙ гөүләүе лә Мәскәүҙәге оло тантанаға йәм өҫтә- ғәндәй тойола.

Бындай ваҡытта батша һарайында ултырып сыҙай ал маған Аҡ батша Федор ҙа ярандары менән ығы-зығылы тантананы ҡарарға сыкты. Үтә ҡупшы кейенгән элсшһ хан ҡатындары менән ҡыҙҙарын күргәс, уның да күҙҙәре дүрт булды.

— Ҡайһылай һылыуҙар!

Баярҙар ҙа, Федор батша алдында ялағайланып, үҙ фекерен әйтеп ҡалырға ашыҡтылар:

— Государь хаҡлы!

— Азиат ҡатындары ла һылыу икән!

— Алтын-көмөшкә күмелһә, беҙҙекеләр ҙә уларҙпи ка- булмаҫ ине, моғайын.

— Уларҙың шәшке тиреләренән генә тегеүле тундар- ғына ла ни тора!

— Шул тиклем күп бисә менән нисек йәшәис ин Күсем хан!..

Шау-шыулы тамаша эңер мәлендә генә бер аҙ һүрелә

Киске ҡараңғы төшкәс, Күсем хандың элекке ҡатын- дарын, улдары менән ҡыҙҙарын Мәскәү дворяндарына өйҙәренә урынлаштырҙылар, ә ҡалғандар сауҙагәрҙәр т рамағына тапшырылды.

Уларҙы аҙна буйы ҡунаҡ иткәндән һуң, ҡатын-И- ҙарҙы Аҡ батшаға хеҙмәт итеүсе Мәмбәтколға, хан уландары менән килендәрен ҡазаҡ ханы Ураз-Мөхоммс Андрей исеме менән христиан диненә күскән Күссм дың улы Әбелгә оҙаттылар.

Элекке Себер ханлығындағы ерҙәр тотошлай Рос- ҡушылыуына арналған Мәскәүҙәге тантанаион Федор оҙаҡ йәшәмәне. Уның урынына Рәсәй империя-

батшаһы булып ҡалған Борис Годунов воевода Анд- Войковҡа алтын миҙал тапшырҙы, Матвей Мещ- мриоп воевода Тарскийға һәм айырым казактарға кпп бүлок бирҙе.

XX

Элекке Себер ханы ерҙәренә яҙ иртә килде. Күҙ ас- бураидар бағылыу менән тәбиғәт күренеше көндән- үҙгәрҙе. Ҡарҙан әрселгән Урал аръяғындағы тау ландшафтары ала-солаға әүерелде. Ваҡ-ваҡ йылғалар килеп ташыуҙан көс туплаған Исет, Миәс, Уй йылғалары, ярҡыс шикелле шашынып-ҡотороноп, юлдарында бер ломәне емерә, онтай, ағыҙа.

Күсем хаи һәм уның мырҙалары иҙеүенән, өҙлөкһөҙ ташыуҙан ҡотолған беренсе яҙҙы Урал аръяғы башҡорт- ҙары ла оло ҡыуаныс менән ҡаршылай. Татарҙарҙың йә- ломонан ҡотолғас, улар мәңге-мәңгегә үҙ иркенә йә- күплән мал үрсетер һәм бер кемдән ҡурҡмайынса Ләйләүгә күсенеп йөрөр һымаҡ тойолдо.

Бөтә ерҙә һоҡландырғыс яҙ хөкөм һөрә. Тиҙҙән ер өҫ- ЙМ оҫтоп, үгәй инә үләне менән умырзая сәскә ата- ии, ҡасан ер-һыу ҡороуын көтөргә теләмәйенсә йы- ҡайтҡан ҡоштар ҙа сыр-сыу ыҙғыша. Улар псц ноҫелен һаҡларға тырышып, оя ҡора һәм киләһе тоҡомдарға тыуасаҡ себештәрен нисек итеп тәрбиәләү тураһында үҙ-ара кәңәшләшә...

Бер тпркөм һыбайлы ир-егеттәрҙе эйәртеп алдан юрт- Төлкосура ла яҙғы тәбиғәт һулышы менән бер тук-

ох, йылдың ниндәй шәп миҙгеле етте! Үҙеңде сит иыпсыларынан азат, ата-олатайҙарҙан мираҫҡа ҡал- срҙоргә хужа итеп тойоуҙан да оло бәхет бар им

Ҡаҡтыр, — тине һыбайлы егеттәрҙең береһе.

Юҡ, Хобибназар ҡустым, — тип дөрөҫләне Төлкөсу- Тәкин ысын азатлыктың ни икәнен күптәр күҙ ал- кплтсрә алмайҙыҡ. Тубыл йылғаһынан Каспий Нәсл һәм Сулман йылғаларына тиклемге кин, ара урманлы бойондороҡһоҙ илдә йәшәүсе баш- мы йоҡоһонан *сәк* уянған яҙғы тәбиғәт һымаҡ

Һәм затын ер-һыуға тиңләү килешәме ни, ағай? Килешә, Хәбибназар ҡустым, бик тә килешә! — Төл- ҡ алтын яйлатыбыраҡ, Хәбибназарҙын ерән ҡашҡа- ҡушылатты. — Олатайымдан һорашып мин күп нәмә ялгоргс замандағы башҡорттар үтә бай, аҡлы, бе-

лемле, ҡеүәтле, көслө булған. Улар бер нәмәгә лә мохтажлыҡ кисермәгән. Татар-монголдарҙың ҡара яуынын һуң, һәммәһе киреҙә ыңғайлаған. Башҡорт дәүләте ҡыйратылып, ханы үлтерелгән, етмеш дүрт ҡала-ҡаласыҡтары яндырылған, белемле кешеләре ҡырылған. Өс йөҙ йыл самаһы дәүерҙә бер туҡтауһыҙ сит ил баҫҡынсыларынан талана, туҡмала, мәсхәрәләнә торған, башҡорттар әкренләп-әкренләп ошондай ғәмһеҙ, меҫкен, мәрт йоҡоһонан уяна алмаған кеше хәленә еткерелгән. Нуғайҙар, Ҡазаи, Әстрхан һәм Себер ханлығы иҙеүенән ҡотолғандан һуң дп, элеккесә кемгәлер ҡол булып йәшәргә күнегеүебеҙҙән ҡотола алмайбыҙ.

• — Ни эшләргә һуң?

— Иван Грозныйҙың «Жалованная Грамотаһына» таянып, элекке татар ханлығынан таҙартылған барлыҡ ерҙәребеҙҙе ҡушырға һәм Башҡортостан дәүләтен ойоштороп бурьюлыбыҙ.

— Үҙ дәүләтебеҙҙе булдырырға Аҡ батшаның форсаты бармы?

— Иван Грозныйҙың «Жалованная Грамота»һы саҡта, Аллаға шөкөр, бүтән форсат кәрәкмәй. Ул Грамотаны Федор менән хәҙерге Борис Годунов батша ла бозоуға юл ҡуйманы. Шуға күрә нуғайҙарҙан, Ҡазан менән Әстрхан ханлыҡтарынан таҙартылған ер-һыуҙарыбыҙ урмандарыбыҙға ярты быуат буйы хужа булып йәшәйбеҙ. Элекке ғәрәф-ғәҙәтебеҙҙе, динебеҙҙе, татарлаша баиған телебеҙҙе лә нәҡлап ҡала алдыҡ.

— Раҫ!— Хәбибназарҙың киҫкен хәрәкәтләнеүеиән ъуҡып, уның аты ситкә тартылды. — Үҙебеҙсә һөйләшеп мөмкинлек тә ҡалмағайны. Саф башҡортса берәй һүҙ ҡындырһаң, нуғай мырҙалары мыҫҡыллап көлә торғайны. Ә Ҡазан татарҙары теле беҙҙекенә оҡшаған. Кемдең тарса, кемдең башҡортса һөйләшеүен тоҫмаллауы ла кыйын.

— Бер мең дүрт йөҙ утыҙ етенсе йылда Ҡазаи хәнығы ойоштороланы бирле, ҡазан татарҙары менәи арашып йәшәйбеҙ бит. Суҡындырылыуҙан ҡасып килсүси тарҙарҙың теле беҙҙекенә бөтөнләй оҡшаған.

— Башҡорттар йомарт булғас, килерҙәр индс. кем генә килмәһен, ер бүлеп бирәләр, уларға Лорылырға ярҙамлашалар һәм малдарын бирергә лә йәлләмәҙәр. Аҙактан башҡорттарҙың ҡәҙерен белһәләр, ярмәһуң!

— Белмәйем, башҡорттарҙың бер ҡатлылығы яҡмикән? — Төлкөсура байтаҡ ваҡытҡа уйға ҡалды. барған аты һөрөнә яҙып аҙымын үҙгәрткәс кено,

һин уннгап кеше һымаҡ, ул башын ҡалҡытып ҡараны. — Ошолыҙ хапдал биряе яуызлыҡҡа күнегеүсе айырым бәндәрҙең башҡорттарға ҡарата мәрхәмәтле булырына һис ышанмайным. Башҡорттар биргән ерҙәрҙә нығынып алһаҡлар, беҙҙе үҙ өйҙәребеҙҙән ҡыуып сығарырға маташыуҙарын пхтпмал.

Уидай яманлыҡҡа етерҙәр микән ни? — Хәбибназар аптыраны.

Гптар-монголдар һәм Нижний Новгород кенәзе та(• ифинан тотошлай ҡыйратылған Сәйен Иорт урынында ошо ҡала төҙөлеп, Ҡазан ханлығы йәшәгән йөҙ ҙә дүрт йөҙ ҡаҡыт эсендә болғарҙар юкка сыҡтымы? Сыҡты! — Төлкөсура, ҡапыл ярһып, эйәрендә борғаланды. — Хәҙер беҙ • и ярҙарҙың ҙә лә ҡалманы тиерлек. Иҫән ҡалғандары ла шәрп Оара тотошлай йотоласаҡ. Ҡазан ханлығын урыҫтар |* кыйратмаһа, Гәйнә һәм Меңле ырыуы башҡорттары ла ңичҙоп юкка сығырҙар ине, бәлки.

Ппцә юкка сығырҙар ине? Башҡорттар күп, бик тә күп бит!

Куп булһалар ҙа, башҡорттар башҡалар тарафынан (июлор һәм исемдәре оңотолор ине. Сөнки улар, сабып Ишкслле, үтә бер ҡатлы, тура һүҙле, хәйлә тигән нәмәне белмәйҙәр. Килмешәктәрҙең тәмле-татлы һүҙенә ышанып, пктык күлдәк-ыштанын сисеп бирергә лә әҙер торор!

Башҡорттарҙы һемәйеүҙән нисек ҡотолдорорға? — ҡабатланы Хәбибназар.

Ҡоро һүҙ һөйләп кенә башҡорттарҙың холҡон үҙгәртеү мөмкин түгел. Минеңсә, берҙән-бер ышаныс — ҡәбиләтәр мсиоп дуҫлыҡты нығытыу. Уларҙан айырылһаҡ, ни өсөн шәжтор беҙҙе ҡабаттан бөлдөрәсәк.

Ни шөтәк тауы аръяғындағы Төлкөсураның олатаһы Шәйхи Шакмпм бейҙең йәйләүенә еткәс, егеттәр оло юлдан ҡайтҡа Ооролдолар. Ҡалын урманлы Ағиҙел яры буйында уйһылыҡтың ҡап-уртаһынан аҡҡан тау йылғасында ялыҫ булмаған Сапҡынды [1] утарында туҡталып, атларын бер аҙ ял бирҙеләр ҙә бүленгән юлдарын артабан дауам иттеләр.

Шикәр бсй исеме менән йөрөтөлгән ауылға еткәс, ныҡлап ял ир үҙ өйҙәренә таралышты.

Төлкөсура урапыҡ ҡайтыуын күреп тышҡа сыҡҡан ҡатыны Гипа асты, ә малайҙары ҡыуанышып ҡысҡырышты:

[1] Сапҡынды ҙнн йөрөтөлгән ерҙә Белорет районының Ҡаһар-ға Гөөр пуылы кешеләре йәшәй. Шәкман бей ҡәбере лә шул ерҙә уратында.

— Атай ҡайтты!

— Атай, беҙ һине һағындыҡ!..

— Мин дә һағындым һеҙҙе, — малайҙарының яурынынан ҡыҫып берәм-берәм һөйҙө лә, эйәрле атын хеҙмәтсһс ҡарамағына ҡалдырып, Төлкөсура өйгә табан ыңғайлапы. Ишектән ингәс, туҡталып тормайынса, бер яҡ стенаның буйынаи буйына һуҙылған урындыҡта ятҡан ауырыугп яҡынлашты.

— Олатай, ни хәлдәһең?

— һикһән дүрт йәшлек ауырыу ҡарттың хәле нисск һәйбәт булһын инде, улым? — Тешһеҙ уртын күрһәтеп йылмайҙы ла, Шәғәле Шаҡман бей тоноҡланған күҙҙәре мснән Төлкөсураға текләне. — Йә, ульщ, үҙеңдең юлың уцдымы?

— Бөтә ерҙә йөрөп, ырыу башлыҡтары менән осраштым, олатай. Ҡәнзәфәр бей менән Айсыуаҡ бей һицә күп сәләмдәр тапшырырға ҡушты.

— Улар ҙа иҫәнме ни әле? — Шәғәле бейҙең йөҙө яҡтырҙы.

— Әйе, улар ҙа иҫән-һау, олатай. Тик ырыу башлыҡтары эшен уландары башҡара.

— Иншалла, Ҡәнзәфәр бей менән Айсыуаҡ бейҙең уландары ырыу эшен алып барғас, бик яҡшы. Урыҫ гәскәре сафында Ливон һуғышынан һинең атайың ҡайта алмауы үкенесле. Ул ҡайтһа, Тамъян ырыуы йөгән яңғыҙына тартырға тура килмәҫ ине.

— Ырыу башлығы эшен башҡарыуы миңә ҡыйын түгел, олатай. Мине йыйында һайлаһалар, Башҡортостандың ханы булырға ла ризалашыр инем!

Шәғәле Шаҡман бей, сирыш баҫҡан ҡаҡса ауырыу һөҙөн сирылтып, көлөмһөрәне. Ләкин, ейәненең күтәренко күңелен төшөргөһө килмәйенсә, ышаныс менән әйттс:

— Алдағыһын бер Аллаһы тәғәлә генә белә. Ватсың еткәс, бәлки, Башҡорт ханы ла булыщһың. Тик был хәта уйларға әлегә һинә иртәрәк, улым. Ҡабаланма, тәрибәле, олораҡ кешеләрҙән күп нәмәгә өйрәнәһе, фәһем алаһы бар.

— Хан итеп һайларға теләһәләр ҙә ризалашмаҫҡаммы, олатай? — Төлкөсураның тауышы бойоҡланды.

Ейәненең һорауын Шәғәле Шаҡман бей иғтибарһыҙ ҡалдырҙы.

— Элекке дүрт ханлыктың иҙеүенән ҡотолғаи башҡорт ырыуы башлыктары Башҡортостан дәүләтенә бүйһонорға ризамы?

— Ризалар, һәммәһе менән һөйләшеп сыктым!

Хпп һайланасаҡ йыйынды ҡасан уҙғарырға килешеп беҙ?

Мпңзыщ егерме бишендә, олатай.

йыйын уҙғарыласаҡ урыны ҡайҙа?

Имән ҡала эргәһендәге Исәнбәт ауылы мәсетендә.

Шәғәле Шаҡман бей, билен тотоп, аһылдай-аһылдай, ике ҡолға тушәгенән тороп ултырҙы.

ЛиГшпға ситтән килгән мосолмандарҙы ла саҡырамыны?

Үҙҙоре теләп килһәләр, беҙ ҡаршы түгел, олатай. Пмон ҡалаһына яҡын ерҙәрҙә килмещәктәр күпме инде?

Лҙаҡҡы йылдарҙа Имән ҡала тирәһендәге башҡорт ерҙәрендә урыҫ ауылдары күбәйгән, олатай. Урыҫтарҙан ситкә Ҡазан татарҙары, мишәрҙәр, типтәрҙәр, сыуаштар, әремештәр, удмурттар менән марҙыуалар ҙа күбәйә башланы Тпк килмешәктәрҙең күсеп килеүенән файҙа булыр икән Ш башҡорттарға, — тип Төлкөсура шик белдерҙе.

Нр мсиән файҙаланған өсөн Ак батша ҡазнаһына башҡорттар түләйәсәк налымдың дүрттән бер өлешөн килешәктәр тапшырыуы файҙа түгелме? — тип һораны ла, ҡабат ипдлпмәгәс, Шәғәле Шаҡман бей яманһыу көрһөнөп өҫтәне Ҡылайым, килмешәктәрҙең күбәйеүе башҡорттарға ҡаршы кплтереүе лә ихтимал. Рәсәйгә үҙ иркебеҙ менән ҡушылыуыбыҙҙың аҙағы нимә менән бөтәсәген белеүе ауыр булыр...

Оошҡорттарҙың урыҫ дәүләтенә ҡушылыуы өсөн ни мәнсеме әллә, олатай?

Шәғәле Шаҡман бей яуап ҡайтарырға ашыкманы. Байтак ипылт уйланып ултырғандан һуң да икеләнеүле тойғо фыппи ҡотола алмайынса, һаҡлык менән әйтте:

Мииецсә, урыҫ дәүләтенә үҙ иркебеҙ менән ҡушылыуыбыҙ ыңғай — кире яҡтары етерлек... Иван Грозныйға ҡаршы Оаш һалмаһаҡ, башҡорттар әле лә нуғайҙар, Ҡазан, Әстрхан һәм Себер ханлыктары иҙеүендә ыҙаланыр ине Росой доүләтенә ҡушылыуыбыҙ арҡаһында, башҡорттарҙың сойәси һәм иктйсади яҡтан бер бөтон халыҡ булып кплырға йүне бар.

Бәлшдыр Тамъян ырыуы кешеләрен Рәсәй батшалығына ҡушыуҙы һорап Иван Грозныйға барған олатаһының шіепе һаман теүәл булыуы, һәр нәмәгә аныҡ фекер йөрөтөүе Толкөсураны шатландырҙы.

Йөрөпләп та, әллә нисәмә быуаттар буйы татар-монголдарс \Ш.П1 урҙа, Аҡһаҡ Тимер, Ҡазан, Әстрхан, Себер ханлыктарының һәм нуғайҙар тарафынан өҙлөкһеҙ таланып, йәберләнеүҙән ыҙа сигеүҙән меҫкен, хәйерсе хәленә ет-

керелгән башҡорттар өсөн вассал шарты менән урыҫ бойондороғона инеү зур уңыш булғандыр. Урыҫтарға бойондороҡло йәшәһәләр ҙә, Башҡортостанды айырым бер ил итеп тергеҙергә мөмкинлек тыуа...

Урыҫ дәүләте башҡорттарҙың эшенә ҡыҫылмай, һәммәһе йыйындарҙа һайланған ырыу-ҡәбилә башлыҡтары, айырым старшиналар менән старосталар тарафынан идаралыҡ ителә. Бүтән ерҙәрҙәге халыҡтар көслөк менән суҡындырыла, урыҫлаштырыла, ә Башҡортостан ерлегенда тып-тыныс. Уларҙың ислам дине, боронғо ғөрөф-ғәҙәте менән көнкүреше лә һаҡланды.

Башҡорттар батша хөкүмәтенә яһаҡ түләргә, үҙ нәсебенә урыҫ ғәскәре сафында хеҙмәт итергә, сит ил походтарында йөрөргә, Рәсәйҙең көнсығыш-көньяҡ сиген күсмә халыҡтар сапҡынынан һаҡларға йөкләмә алғандар, о үҙҙәренә ситтән оло яу килгәндә батша хөкүмәте ярҙам лаша.

Рәсәйгә башҡорттарҙың үҙ ирке менән ҡушылыуы ырыу-ҡәбилә башлыҡтарына ла файҙалы ине. Сөнки Иппи Грозныйҙың «Жалованная Грамота»һы буйынса, вотчиппере улар ҡарамағында ҡалдырылды, ә тархан исемено лайыҡ булған башҡорт егеттәре яһаҡ түләүҙән азат ителде.

Шәғәле Шаҡман бей, һүҙ йүнәлешен үҙгәртеп, һораны:

— Башҡа ырыу-ҡәбиләләрҙәге тормош нисек?

— һәйбәт, әлегә һәйбәт йәшәйҙәр, — тине Төлкесурп Улар бер нәмәгә лә мохтажлыҡ кисермәй. Төрлө хәлдәрҙән ҡотолғандан бирле, һәр ырыу-ҡәбиләлә байлыҡ артмалдары күбәйә бара, кешеләрҙең күңелдәре көр, кәйефтәре лә шәп!

— Иншалла! — Шәғәле Шаҡман бей, шөкөрана ҡылып, һаҡал-мыйығын һыйпаны, ирендәрен сапылдата-сапылдата, тамшанды. — Башҡорттарҙың ҡабаттан әҙәмсо йәшәй башлауы мине һөйөндөрә, улым, бик тә һөйөндөрә!.. Атайың малай саҡта, Тамъян ырыуы башлығы булыуымда рамаҫтан, Ҡазан ханлығына күпләп һалым түләүҙок интектек...

— Әле урыҫ дәүләтенә түләгән һалымдан да артығырағыш алдылармы?

— Алдылар шул, улым. Ҡазан ханлығынан ҡоралды кешеләр һалымды дүрт-биш мәртәбәгә арттырып түләтте. Булғанын да, булмағанын да таптырҙылар, күләп һалым түләүҙән ас-яланғас ҡалған ябай кешеағыуланған себен шикелле ҡырылдылар.

---

1 *Вотчина* — ер биләүсенең улынан улына күсә килгәи ерҙ, ниеһы.

Хоҙср Ҡазан татарҙары үҙҙәре урыҫ изеүенән интегә һәм Оҙго ҡасып киләләр.

Эйс, улар хәҙер беҙҙең ярҙамға мохтаж, — тине Шиҡман бей, ризалашып. — Аҙаҡтан, башҡорттарҙың якшылығын онотоп, ҡабаттан үҙ ҡурайҙарына бейетергә маташмаһалар ине, улым.

Олатай, ниңә улай яман уйлайһың?

Ҡара яуҙан. һуңғы яуызлыктарҙы атай-олатайҙар һөйләүе буйынса ишетеп белмәһәм, уларҙың яман ҡылаш-пшш үҙ елкәмдә етәрлек татымаһам, улай әйтмәҫ инем һәм Тпмъян ырыуы башҡорттарын Рәсәй дәүләтенә ҡушыуы һорап Иван Грозныйға ла бармаған булыр инем, ,ним.

Голкөсура аптыраны.

һинецсә, Ҡазан ханлығында яман кешеләр күпме?

Кнреһенсә, улым, ямандары аҙ, изгелекле, ярҙам• м әҙәмдәр бик күп булды. Яман әҙәмдәр, аҙ булһа ла, ишкаларҙың башын бутаны, уларҙы яуызлыҡҡа ҡоторт• • Ходер улар, урыҫтарға ярамһаҡланып, татарҙарға ла • ноклок эшләйҙәр. Бигерәк тә тоҙ эшкәртеүсе строганов- ре үкшмыштар яман булды.

Ксрошен Строганов яллап Себергә ебәргән атаман ермактың бандиттары татарҙарҙы аяуһыҙ ҡырҙы, — тип ре ч.мшы Төлкөсура.

Ссбср ханлығы ҡыйратылғас, Урал аръяғындағы ишкорт ырыуҙары ла Рәсәй дәүләтенә ҡушылды микән?

Кушылғандар, ти.

(сшһоҙ уртын кәушәйтеп тамшана-тамшана, Шәғәле ымгш бсй оҙаҡ ваҡыт уйланып ултырҙы.

Иван Грозныйҙың «Жалованная Грамотаһы» буенса, кора яуға тиклемге башҡорт дәүләте биләгән барлык ерҙоребеҙҙе ҡабаттан берләштерергә һәм Башҡортстанды плои булдырырға нықлы ышаныс бар, Алла бойорһа, был • оло шатлыҡ. — Шаҡман бейҙең көл һелтеһе ҡаҡ уҡылған күҙҙәренә йәш эркелде, ирендәре еңелсә ҡысырапты. — Аҡ батшаға ҡарата булған өмөтөбөҙҙөң аҡланыуы ошо микән ни? Хәҙер үлһәм дә үкенмәйем...

Улай ойтмә, олатай. Фәрештәләрҙең «амин» тигән ваҡытта Тура кнлһә...

Пошәремде йәшәгәнмен, ашарымды ашағанмын, — Мәхмүт Шаҡман бей Төлкөсураны бүлдерҙе. — Башҡортстанды ҡурмышын ыңғай хәл ҡылыуҙа минең дә өлөшөм ҡатнашҡаным. Шуға сикһеҙ шатмын. Хәҙер донъя һиңә ҡала, Ҡотлуған илебеҙҙе күҙ ҡараһы кеүек һаҡлау һинең бурыс.

Пһылр Шаҡман бей, бик нык тулҡынланыуынан хәле

ҡапыл мөшкелләнеүен тойоп, түшәгенә ятты. Башҡаса ул тороп йөрөй ҙә, ултыра ла алманы. Тәүлектәр буйы ҡуҙғалмайынса, түбә таҡтаға текләнгән көйө, ятты ла ятты.

Бер көндө Шаҡман бей Төлкөсураны, килене менән ейәндәрен үҙенә саҡырҙы.

— Әжәлем яҡынлаша, бәхил булығыҙ, — тине лә күҙ ҡабаҡтарын япты һәм мәңгелеккә яҡты донъяны ташлап китте.

XXI

Әҙәм балаһы үлгәс кенә уның ҡәҙерен нығлап баһалана.

Шәфәле Шаҡман бей иҫән саҡта Төлкөсура менән упың ырыуҙаштарына һәммәһе тәбиғи, үҙ ағышына барған тормош бер ниндәй үҙгәрешһеҙ ҡалыр һымаҡ ине. Хәҙер, доиъяның әсенен-сөсенөн үҙ елкәһендә татып, ғүмере буйы Тамъян ырыуы башлығы вазифаһын башҡарған тәжриболс Шаҡман бей булмағас, олатаһының кәңәшенә биҡ тә моя таж икәнлеген бөтә йөрәге менән аңланы. Бер нәмәгә лә ҡыҫылмай, түшәктә тауыш-тын сығармай ~ятҡан сағында ла ул Төлкөсураның берҙән-бер оло таянысы, терәге булған икән!

Йәп-йәш ырыу башлығы ни генә эшләмәһен, олатаһының фекерен белгеһе, үҙен борсоған мәсьәләләр буйынсн кәңәшләшкеһе һәм серләшкеһе килде.

Бына әле лә Үҙәк Рәсәйҙән күпләп килгән урыҫтарҙың кеибайыш Себерҙә нығытмалар, ҡалғалар, урыҫ ауылдарын төҙөүе, Урал аръяғындағы башҡорттарҙың Тара ҡалаһын налырға оҙатылыуы, урыҫ крәҫтиәидәренең Себерго күселәп күсеп килеүе, Башҡортостандың Ҡариҙел тамағы аша юл үткәрелеүе. Төмән ҡалаһындағы баяр улы Ҡара-таОьШ волосына ҡараған Игибахты ауылындағы башҡорттарҙың ҡырыуы, уларҙың ҡатындары менән бала-сағаһын Себер ҙәге урыҫтарға таратып биреүен ишеткәс, Төлкөсура олатаһының кәңәшен белгеһе килде. Ул иҫән булһа, пи әйтер ике икән? Баяр улының һәм батша ғәскәренең ҡанһыҙлығына ҡарата ниндәй сара күрергә өйрәтер ине икән? Урыҫтарҙың ҡыланышына ҡаршы берәй сара күреү иссе ин эшләргә? Был турала Аҡ батшаға билдәле микән?

Ҡырҡмаһа ҡырҡ төрлө эс бошорғос һорауҙарыиа ҡ ғай яуап таба алмайынса, аптырап-алйып, Төлкөсурп һаҡалдар менән үҙенең иң яҡын ярҙамсыларын кәңәшгә йыйҙы. Ул Урал аръяғындағы күңелһеҙ ваҡиғаларҙ ацлатты ла кәңәшмәлә ҡатнашыусыларға киҫкен карар ташланы.

Йә, ошо хаҡта ни әйтерһегеҙ?

Лкһаҡалдар өндәшмәне, ә йәштәр, уйлап-нитея тормаһынса баштарына тәү килгән фекерҙе әйтергә ҡабаланды:

Урал аръяғындағы урыҫтарҙың ҡыланышында беҙ Ц нн ҡыҫылышыбыҙ бар, Төлкөсура бей?

Ксмдәрҙер өсөн ниңә баш ватырға?

Эйс, урыҫтар беҙгә ҡағылһа, тағы бер хәл, берәй молеп табырға тырышыр инек!..

Ырыуҙаштарының ғәмһеҙлегенә, ил һәм милләттәштәре ғмышына борсолмауҙарына аптырап, Төлкөсура шаҡ ҡатты.

Шул саҡ Хәбибназар урынынан һикереп торҙо.

Урал аръяғындағы урыҫтарҙың баш-баштаҡлығына I сфшы ашығыс сара күрелмәһә, улар беҙҙе лә тыныс ҡалдырмаясаҡ, — тип ул алан-йолан ҡаранды. — Йәш ырыу ғолылығына ундай кәңәш бирең, миненсә, алйотлоҡ!

Уҫсц нимә тәҡдим итәһең? — тип һораны аҡһаҡалдарҙың береһе.

Мпнме?.. Элекке Себер ханлығындағы башҡорт ырыуҙарын яҡлашырға, уларҙы рәнйетеүсе урыҫтарҙан үс ырға теләйем!

Ҡайһылай шәп, батыр икәнһең!

Коиошмәлә ҡатнашыусылар көлөштө.

Лсиуыиан ни әйтергә белмәй, ҡыҙарып-бүртенеп тор• Ш Хобибиазарҙы Төлкесура яҡлашты:

Был бер ҙә көлкө түгел! Урыҫтар ҡасан беҙгә килеп ырылырҙарын көтөргә хаҡыбыҙ юҡ. Юғиһә, беҙҙе лә ҙ ры шбыи волосы башҡорттарының яҙмышы көтә.

Урыҫтар менән мөнәсәбәтебеҙ боҙолоуынан файҙаиын, теләһә ҡайҙа ҡасып йөрөгән Күсем хан уландарыи шин күрмәбеҙме?

Күссм хандың уландарынан зыян былай ҙа күп, — Төлкөсура Урал аръяғындағы Табын, Сырынйән, Мәи ырыуы башҡорттарын Рәсәйгә ҡушылырға тот• ИЫІс яһауҙары, Күсемдеңоло улы Әли үҙен Себер ханы иген иглан итеүе, уның хөкөмөн ҡустылары Ҡанай, им мсиәп Көбәй-Морат та таныуы хаҡында һөйләне. — иръпгындағы башҡорттарға урыҫтар ғына түгел, пно Себер ханының уландары ла ҡурҡыныс тыуҙырҙы. ҡаршы һуғыш башлауҙан да файҙа сыҡмаясаҡ. Томъяи ырыуының ғына көсө етерлек түгел. Шуға Имоп ҡалаһынан ярҙам һорап, воеводаға берәйһен

Пылай булғас, май аҙағында башҡорттарҙыа дөйөм ы ы ыны уҙғарылмаймы? —тип һораны Хәбибназар.

Урпл аръяғындағы башҡорт ырыуҙарының яҙмышын

хәл ҡылмайынса, дөйөм йыйын уҙғарыу һәм Башҡортостан дәүләтен төҙөргә маташыуҙан бер ни барып сыҡмаясаҡ.

— Әләйһә, Ймән ҡала воеводаһына сапҡын булып барырға миңә рөхсәт ит, Төлкөсура бей. Юлда барышлай, дөйөм йыйын бөтән ваҡытҡа күсереләсәген дә хәбәр итермен ырыу башлыҡтарына, — тине Хәбибназар.

Төлкөсура, ризалашып, баш ҡаҡты.

— Теләгең булғас, бар!..

XXII

Өфө — Имән ҡалаһы воеводаһы Михаил Нагой, үҙ сратында, Тамъян ырыуы илсеһе булып килгән Хәбибназарҙан ишетеп белгән Урал аръяғындағы күңелһеҙ иаки ғаны Мәскәүгә еткерҙе.

Күп тә уҙманы, Урал аръяғындағы баш-баштаҡлыҡты бөтөрөүҙе һәм сәбәпһеҙ-ниһеҙ Ҡара-табын волосындағы башҡорттарҙы үлтереүҙә ғәйепләнеүсе баяр улын ҡаты язаға тарттырырға ҡушып, Аҡ батшаның Грамотаһы менән Мәскәүҙән сапҡын килде.

Төмән ҡалаһы воеводаһы Лука Щербатов, башҡорттарға яманлыҡ ҡылған баяр улын нисек тә булһа аҡларға, үлем язаһынан ҡотолдорорға тырышып, 1600 йылдың 28 августында Өфө воеводаһына хат яҙҙы һәм Ҡара-табын волосы башҡорттарына сапҡын яһалыуы хаҡында белмәмешкә һалышты.

Воевода Лука Щербатовтың күрәләтә алдашыуып ишеткәс, табын һәм сырынйән башҡорттарының асыуы ҡабарҙы. Улар Әли ханға барҙылар һәм Төмән воеводаһы ғәскәрен ҡыйратырға яҙғамлашыуын һоранылар. Ләкин Әли хан башҡорттарға биргән вәғәҙәһен үтәмәне. Башҡорттарҙың урыҫ ғәскәрен ҡыйратырға әҙерләнеүен әйтергә ҡушып, Төмән воеводаһы Щербатовҡа иң кесе ҡустыһы Көбәй-Моратты ебәрҙе лә, уның кире әйләнеп ҡайтыуын көтөп тормайынса, үҙе Ишемдән Тубыл йылғаһы үренә тарабан йүнәлде.

Әли хан ҡушыуы буйынса Темәнгә килгән Көбәй-Мурат менән воевода Щербатов йүнләп һөйләшергә ло телә мәне. Уны иң эшәке һүҙҙәр әйтеп әрләне лә, аяҡ-ҡулын бығау һалдыртып, Мәскәүгә оҙатты.

Воевода Лука Щербатовтың тупаҫлығы, урыҫ булмағандарҙы кешегә һанамауы һәм улар менән асыҡтан-асыҡ дошманлашыуы сәбәпле, Урал аръяғындағы башҡорттарҙың Рәсәй бойондороғона күсеүе ныҡ тотҡарланды. Бынан хәҙер Әли хан менән дә уның мөнәсәбәте боҙолдо.

Тубыл һәм Төмән воеводалары, Рәсәй подданствоһына Оли ханды күсерергә теләп, һөйләшеү башланылар. Үҙ маҡсаттарына ирешә алмағас, Әли хан менән эште яйлап ярҙамлашыуҙы һорап, улар Өфө воеводаһына мөрәжәт иттеләр.

Өфо воеводаһы Нагой үтә һаҡ булырға, уларҙың эшенә турапаи-тура ҡыҫылыуын белдермәҫкә тырышып, Тамъян ырыуы башлығы Төлкөсура бей менән генә бәйләнеш 4«тто. Упың аркылы Әли хандың ышанысын яулағас, ике яҡлы һөйләшеүҙәр башланды. Бер аҙҙан һуң, Төлкөсура•ЫЩ оғотөнә ризалашып, Әли хан үҙенең икенсе ҡустыһы Пшсм менән тәржемәсе вазифаһын үтәүсе яңы сукынтырылған татарҙарҙы Өфөгә ебәрҙе.

Өфо поеводаһы Михаил Нагой Әли хан илселәрен олоған каршыланы. Уларға ҡиммәтле бүләктәр тапшырып, и кон буйы ҡунаҡ итте, тағы ла осрашып һөйләшергә һәм һор саҡ бәйләнештә булырға теләк белдерҙе.

Офо воеводаһы Михаил Нагой менән төҙөлгән килешеүҙе Оли хан хупланы һәм Ишем ҡустыһын йәнә Өфөгә ҡайтты.

Пыл юлы ла Әли хан илсеһен воевода яғымлы ҡаршыланы. Уға эш хаҡы тапшырҙы ла, һөйләшеүҙе артабан дауам итеү есен, Рәсәй батшаһы Борис Федорович Годунов ҡарһенә барыуын үтенде.

Шундай тәҡдим булыр тип уйламаған Ишем аптырап ҡалды.

Москәүгә барырға тейеш икәнлегемде ағайыма хәбәр пгорго мемкинме?

Әлбиттә, мөмкин. Юғиһә, ниңә оҙаклауың сәбәбен аңламай, Әли хандың борсолоуы ихтимал, — тине воевода Шафиҡ.

Әли хапға яҙған хат менән хеҙмәтсеһен ебәргәс, яуап көткән Ишем Өфөлә ҡалды.

Әли хан ҡустыһының Мәскәүгә барыуына ҡаршы булманы.

Пшрмде стрелецтар һағында Мәскәүгә оҙаткас та, Өфө воеводаһы Михаил Нагой Тамъян ырыуы башлығы Төлкөсура бейгә ҡунаҡҡа килде һәм уның Урал аръяғы башҡорттарын Рәсәйгә ҡушыуҙа ярҙамлашыуын һораны.

Төлкосура бей, Тубыл һәм Төмән воеводаларының ялҡаҡлығына һылтанып, Михаил Нагойҙың тәҡдименән ҡыҙыҡ баш тартты.

Юҡ, Күсем хан ҡоллоғонан ҡотолған милләттәштәре тик Лука Щербатов кеүек алдаҡсы, тупаҫ, ахмаҡ воеводалар хөкемөндә ҡалдырырға теләмәйем, — тине ул.

— Төлкөсура бей, Рәсәй подданствоһын аласаҡ Урал аръяғы башҡорттарын үҙем ҡурсалаясаҡмын, — тине Өфө воеводаһы Нагой. — Үҙең уйлап ҡара, берәй ваҡыт башҡорттарға яманлыҡ ҡылғаным бармы?

— Һинән яманлыҡ күргәнебеҙ булманы, — тип ризалашты Төлкөсура бей.

— Шулай булғас, ниңә тиҫкәреләнергә? Урал аръяш башҡорттары Рәсәйгә ҡушылһа, һеҙгә барлыҡ ырыуҙарҙың дөйөм йыйынында Башҡортостан дәүләтен тергеҙергә ло мөмкинлек тыуасаҡ.

Воевода Нагой хаҡлы икәнлеген аңлаһа ла, Төлкөсура һаман икеләнде. Әллә нисәмә быуаттар буйынса төрло ханлыҡҡа буйһондоролоп бер-береһенән тарҡау йәшәргә күнеккән башҡорт ырыуҙарын берләштерергә һәм Башҡортостан дәүләтен тергеҙергә ваҡыт етте микән ни?

Төлкөсураның олатаһы Шәғәле Шаҡман бей, Ҡазаи ханлығы ҡоллоғонан ҡотолған Тамъян ырыуы башҡорттарын Рәсәй гражданлығына алыуҙы һорап, Иван Грсп ныйға барған һәм урыҫтар менән мөнәсәбәтен бер ҡасан да боҙмаған. Төлкөсураның атаһы ла Рәсәй батшалығынып хыянатсылыҡ ҡылмаған. Ул урыҫ ғәскәре сафында Ҡаҙ батшаға хеҙмәт иткән һәм Ливон һуғышы ваҡытында һөләк булған... Бына хәҙер ата-олатаһы эшен Төлкосурл дауам итергә бурыслы.

«Урал аръяғындағы башҡорттарҙы Рәсәйгә ҡушыу х.к тәрлеген минән башҡа кем башҡарыр? Уларға Өфө вос водаһы яҡшылыҡ теләй бит», тип уйлап, Төлкөсура тс ләр-теләмәҫтән генә ризалашты:

— • Ярар, Урал аръяғындағы ырыу башлыҡтары менән һөйләшеп ҡарайым. Ҡасан юлға сығырға?

— Мөһим мәсьәләне оҙаҡҡа һуҙырға ярамай, - тпи воевода Нагой суҡынмыш татар Рудак Федоров-Фәхрисп ты Себергә барасаҡ Төлкөсуранын, командаһына тәғәйенләне.

Бер төркөм һыбайлы ир-егеттәрҙе эйәртеп, Төлкөсура бей туп-тура Ҡара-табын волосы старшинаһы Үтәмеш Ҡыбаровҡа барҙы. Уның менән һөйләшеп килешкәс, ул прпс бан йүнәлде. Юл ыңғайында, Ишем һәм Өбәге йылгаларн араһындағы ерҙә ҡышларға әҙерләнгән Әли хандың ҡустылары эргәһендә туҡталып, Төлкөсура бей ял птсрю булды.

Әли хандын, ҡустылары Ҡанай менән Әзим Төлкөсурин ны үҙҙәре менән ҡыш уҙғарырға тейешле башҡорт ҡабиләһе башлығы менән таныштырҙылар.

Иркен йорт эсендә мосолмандарса аяҡ салып ултырыһ ныйланған ваҡытта Төлкөсура Сырынйән менән Мэкоиц

ырыуы башҡортарын ҡайҙан эҙләп табырға икәнлеген һорашты.

Улар бынан алыҫ түгел ерҙә, Әли хан менән уның щ ссс Ҡустыһы эргәһендә, ҡышларға әҙерләнәләр, — тине Табын ҡәбиләһе башлығы.

Башҡорттар үҙҙәре нинә айырым ҡышламай?

Урыҫтарҙың яуызлығынан ҡурҡабыҙ. Былай, Күсем ханлыҡ уландары менән бергә ҡышлаған саҡта, хәүефһе рок һом ҡышҡылығын аҙыҡ-түлек табыуы ла еңелерәк.

Росой батшалығына ҡушылырға теләгегеҙ юҡмы? — тип һпраиы Төлкөсура бей.

Юҡ.

• Ппцэ?

Ссбер татарҙарынан айырылып, Рәсәйгә ҡушылһаҡ, ныртҡыс урыҫтар башҡорттарҙы һәләк итәсәк.

Оли хан менән уның ҡустылары Рәсәй батшалығы иушылһа, барыбер янғыҙ ҡалаһығыҙ бит. Ул саҡта ни ирһегеҙ?

Белмәйем... — Табын ҡәбиләһе башлығы байтаҡ уйланып ултырҙы.— Бүтән башҡорт ырыуҙары башпмпры менән кәңәшләшергә кәрәк. Шунһыҙ бер ни әйтә алмайым.

Һуҙ һүҙгә ялғанып, төнгө ут яҡтыһында оҙаҡ әңгәмәләштеләр.

Төлкосура бей Рәсәй подданствоһын алған злекке Нуғай Ҡазаи менән Әстрхан ханлығындағы башҡорттарҙың иркенә ҡайғы-хәсрәтһеҙ, ата-олатайҙарҙан мираҫҡа ҡалған ер-һыуҙарына һәм урмандарына йәнә үҙҙәре хужа булған нлшәүҙәре тураһында мауығып һейләне.

Олатайҙарыбыҙҙың үҙ теләктәре менән Рәсәйгә ҡушылыу арҡаһында, күпселек башҡорттарға ирек яуларға һәм ерлек тыуҙы. Яманмы, яҡшымы, Иван Грозныйҙың Һорайы бсҙгә тейҙе. Ул беҙҙе сит ил баҫҡынсыларынан һаҡлармаһа, үҙебеҙҙең башҡортлоғобоҙ онотолор, телебеҙ юҡка сығыр ине.

Табын ырыуы башлығы баш ҡаҡты.

Рәҫ! Аҡ батшаның ярҙамы касафатынан беҙ ҙә Күчмәлеләр уландары менән татыулаштыҡ. Ә бына Себер поеводалар килгәндән һуң, урыҫтар башҡорттарға дошманлыҡ ҡыла. Кеше талап, байлыҡ йыйырға мәжбүрләй, улар иң яуыз йыртҡыстарҙан да яманыраҡ ҡылана.

Табынлыларҙы Рәсәйгә ҡушылырға ендәп күидерә алмаған Голкосура бүленгән юлын дауам итте.

Үтәмеш хобәр , алғанлыктан, Тубыл йылғаһынан бишәр акрым алыслыктағы ерҙә ҡышларға әҙерләнгән

Әли хандың ҡустылары Ҡанай менән Әзим Төлкөҫураны зиосолмандарса оло хөрмәт менән ҡаршыланы һәм үҙ йорттарына алып инеп һыйланы.

Уларҙың Рәсәйгә ҡушылыуы хаҡында һүҙ сыҡҡас, ҡуиаҡсыл йорт хужаларының йөҙө үҙгәрҙе.

— Яуыз урыҫтарға беҙ ышанмайбыҙ, — тине Ҡанай.

Уның һүҙен Әзим дә хупланы:

— Себергә ебәрелгән урыҫтар ҡәбәхәт, алдаҡсы, йыртҡыс! Улар менән бергә яҡшы мөнәсәбәттә йәшәү мөмкпп түгел!

— Себерҙәге урыҫтар бик күп йорттарыбыҙҙы талаиы, катындарыбыҙ менән бала-сағабыҙҙы Рәсәйҙән күсеп килгән алпауыттарға һаттылар. Тубыл ҡалаһына йомош менән барған Көбәй-Моратты, аяҡ-ҡулына быҫау һалдырып, воевода Щербатов Мәскәүгә оҙатты. Аҡ батшаға баш һалырға Темән воеводаһына барған Миңлебай абыҙ да эҙһеҙ юғалды. Өфө воеводаһы батшаға ебәргән Ишемдсң яҙмышы ла әлегә билдәһеҙ!..

— Ишем өсөн, зинһар, борсолмағыҙ, Өфө воеводаһы Нагой һәйбәт, аҡыллы кеше. Ул бындағы йыртҡыс воспо даларға һис оҡшамаған, әйткән һүҙендә тора, — тине Төлкөсура бей, ә үҙе эстән бошондо: «Ишемде Мәскәүҙои ҡайтармаһалар, иң әүәл мин ғәйепле буласаҡмын һәм Күсем хандың уландары бер һүҙемә лә ышанмаясаҡ...»

Төлкөсура менән ризалашып, Ҡанай баш ҡаҡты.

— Өфө воеводаһын белмәйбеҙ, беҙ һиңә генә ышанабыҙ.

Төлкөсура, рәхмәт әйтеп, Әли хан менән осрашып һөйләшергә теләне. Ҡунаҡсыл йорт хужаларының алсаҡ йөҙө томрайҙы.

— Уның ҡайҙа ҡышлағаны беҙгә билдәле түгел.

— Бәйләнеш тотмайһығыҙмы ни?

— Юҡ!..

Әңгәмә башҡаса яйланманы.

«Миңә ныҡлап ышанмайҙар», тип уйлап, Төлкөсура бей тышҡа сыҡты.

Хан уландары йортонан ун биш аҙым самаһы сигеп торған башҡорттар, Төлкөсураға түбәнселек менән биҙәп эйеп, сәләмләнеләр:

— Әссәләмәғәләйкүм!

— Вәғәләйкүмәссәләм, — Төлкөсура башҡорт егеттәре менән күрешеп сыҡты. — Нисек йәшәйһегеҙ?

— Иншалла, әлегә имен-аман!

— Үҙегеҙ ни йомош менән йөрөйһөгөҙ?

— Берәй ярҙам кәрәкме әллә? Кәрәкһә, әйтегеҙ, • ғауғалашты егеттәр.

Толкөсура, уйға ҡалыбыраҡ торғандан һуң, йомошон әйтте:

• Мин Әли хан менән осрашып һөйләшергә килгәйнем Упыц ҡайҙа ҡышлағанын берәйегеҙ белмәйме?

Мин беләм, — тине һонтор егет.

Мипе Әли хан эргәһенә алып барырһыңмы?

Булдырабыҙ уны! Ҡасан алып барырға?,

Хәҙер, — тине Төлкөсура.

Улар һөйләшкәнде бер яҡ ситтә тыңлап тороусы хан уландарының береһе Төлкөсураны Әли хан эргәһенә алып барырға ризалашҡан башҡорт егетен үҙенә саҡырҙы.

Кил әле, һиңә бер һүҙем бар!

Һонтор егет, иптәштәренән айырылып, хан уландары ятҡан яҡҡа ыңғайланы. Шул саҡ яҡындағы ғәскәр башлығы, Ҡапайҙың ҡушыуы буйынса, алға ташланды һәм һонтор кәүҙәле егеттең башын ҡылысы менән өҙә сапты.

натлыҡ йән!

Шымсыларға натылыусы һәр кешене үлем язаһы көтә, тип ҡыҫҡырышты Күсем хан уландары. Ләкин улар, Төлкөсураның ныбайлыларынан ҡуркып, уҡ-һаҙаҡ, һөңгө һәм ныстар менән ҡоралланған яугирҙарына һөжүм итергә рөхсәт итмәнеләр.

Һонтор башҡорт егетенең нахаҡтан үлеменә йөрәге әрнеш Төлкесура:

Бсҙ шымсы түгел, һеҙгә яҡшы ниәт менән килгәйнек Ләкиларға теләмәгәсһегеҙ, хәл юҡ, — тине лә эйәрле атлаҡлы. —Хушығыҙ! Бәлки, йәнә осрашырбыҙ. Ҡитегеҙ. Беҙ һеҙгә бер ниндәй ҙә кенә тотмайбыҙ!..

Төлкөсура ныбайлылары булып киткәндең икенсе көнө Күсем хандың уландары яҡын-тирәләге урыҫ ауылларын о сапҡын яһанылар һәм ундағы бөтә нәмәне тырмаҡлай туҙҙырҙыдар. Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышындағы урҙа тарҡалғандан һуң Яйыҡ буйына ҡасып киткән иуғайҙар ҙа хан улдары ғәскәренә ҡушылғас, көсөргөштереп, Себерҙәге урыҫ ҡалаларына һөжүм башларға килештеләр. Ләкин иң хәл иткес сәғәт яҡынлашҡанда үҙ пра үсләшкән нуғай мырҙалары араһында низар башланы Улар, урЫҫ ҡалаларына яу менән барырға теләмәнсе, үҙҙәренә буйһонған ғәскәр менән таралыштылар. Шулай ҡлған хан уландары ла ҡышҡы йорттарына ҡайтырга интсрго мәжбүр булды.

Ҡыш оамаһы ваҡыт уҙғас, ете мең кешелек ғәскәр туплан Оло иуғай урҙаһы кенәзе Урустың уландары Улиш »ц Ян Руслан Кесе Нуғай урҙаһы кенәзе Урмамет инпры госкәренә ҡаршы нуғыш башланы.

Бөтә хан иуғайҙарҙың мәғәнәһеҙ ыҙғышына ҡыҫылманы.

Ул, сырынйән һәм мәкәтин башҡорттары менән берлошсп, урыҫ воеводаларыпа ҡаршы көрәшкә әҙерләнде.

Күсем ханды ң ҡатындары менән Ишем ҡустыһы Мәо кәүҙән ҡайтып ҡилеүҙәре тураһында ишеткәс, уларға зарар бульфынан ҡуркып, Әли хан урыҫ ғәскәре тупланғаи Төмән өйәҙенә йүнәлтелгән һөжүмде бүтән ваҡытка кнсектерергә мәжбүр булды.

1607 йылдың йәйендә Себергә ҡалмыҡтар килде. Әли хан, улар менән берләшеп, Төмән өйәҙендәге урыҫтарҙыи Кинер ҡаласығын ҡыйратты. Уныҥ бер туған ҡустыһы Ҡанайҙың отряды Тубыл волосындағы урыҫ ауылдарыи туҙҙырҙы. Төмән ҡалаһынан сыҡҡан Юрьев менән Изъединов командалығындағы казактар яҡынлаша башлагос, Ҡанай отряды киреге боролдо.

Әли хандың ситтә йөрөүенән файҙаланып, воевода Изъединовтың казактары йәйләүҙәрҙәге кешеләрҙе ҡырирға тотондолар. Хан улы Әзим командалығындағы татарҙар менән башҡорттар тулыһынса тураҡланғас, казактар ирһеҙ ҡалған ҡатын-ҡыҙҙы мәсхәрәләнеләр. Шунан һуң, таланған йорттарҙы яндырҙылар ҙа, һөрән һалып илашҡан ҡатындар менән бала-сағаны аҡлан уртаһына йыйҙылар.

Аяҡтарын кирә баҫып торған воевода Изъединсш ҡатын-ҡыҙҙар яғына эйәк ҡаҡты.

— Араларында йүнлерәктәре бармы?

— Так точно, ваше высокоблагородие! — тип сотник воеводаға честь бирҙе.

— Әли хандың ҡустыһы иҫәнме?

— Так точно, — сотник мәсхәрәләнгән ҡатындары арһынында торған Әзимгә ҡамсы һабы менән төртөп күрһәтте.

— Хандың ҡайҙа йөрөүен әйттеме?

— Никак нет! Бәлки, бына улар әйтерҙәр ханды ҡайҙаи табырға икәнлеген, — тип сотник Әли хандьщ өс ҡатынын, бала-сағаһы менән һеңлеһен, Әзимдең ике ҡатыһы менән ике ҡыҙын майҙан уртаһында эре торған воеводаға ҡаршыһына сығарҙы.

Әли хандың ҡайҙа йөрөүен һорашып белә алмаган воевода Изъединов хәйләле йылмайҙы.

— Ярар, былар бер ни белмәмешкә һалышһа ла, >лы хан үҙе беҙҙең арттан эйәреп киләсәк.

Воевода Изъединовтың ҡушыуы буйынса, ҡатын-ҡыҙ еҫтондәге ҡупшы кейемдәрҙе систертеп, алтын-көмөш ҡаларҙы, беләҙектәрҙе, алмас ҡашлы йөҙөктәрҙе һом бүтә ҡа ҡиммәтле нәмәләрҙе бер ылауға өйөп һалдылпр һәм әсирәләрҙе Төмәнгә табан йәйәү ҡыуҙылар.

Воевода яңылышмаған икән. Төмәнгә алып барасы юлдың яртыһын үҙғас, Әли хан казактар отрядын ҡалдыр

ғтте һом һугыш башланды. Ҡыбырлы күл янындағы көслө ,[нли пкс тәүлеккә һуҙылды. Өсенсө көндө Төмәндән ыҡҡан казактар Изъединов отрядына ярҙамға килеп етһе ксчю Әли хандың отряды тулыһынса тураҡланып, үҙе н ирю алыпды [1].

Олм хандың отряды ҡыйратылғанға саҡлы Мәкәтин мрыуы башҡорттары, Аҡ батшаға буйһонорға ризалашып, І вдкпсура бейгә сапҡын ебәргәйнеләр. Ләкин Әли хандың к ИРП) алыпыуын, уның ғаиләһе тураҡланыуы, ҡатындары туы і воевода казактары тарафынан мыҫҡылланыуы тураһында пшеткәс, Рәсәй подданствоһын алыуҙан баш тартмалар. Верхотурье өйәҙендә йәшәүсе сырымйән башҡортары ла, урыҫ воеводаларына буйһонорға теләмәйенсә, үҙ ирен урыҫтарҙан ҡурсаларға ризалашҡан нуғай мырҙаларына яһаҡ түләргә булдылар.

Ғипуар башында Верхотурье өйәҙенең Ҡатай волосынын Огпикорттарға ҡалмыҡ тайшаһы Уруслан килде. Ул, • фыу Оашлығы Яҡуп бейҙә өс көн ҡунаҡ булғандан һуң:

Нугайҙарға түләгән дәүмәл яһаҡты минә түләгеҙ, — ине

Якуп бей, ҡунағы менән мөнәсәбәтен боҙмаҫҡа тырышып, тайшаның талабына яуап ҡайтарманы. Аҙаҡтан, ірһеҙлөнгәндән-әрһеҙләнә барған ҡалмыҡ тайшаһы Урустандан сисл генә ҡотола алмаясағын аңлағас, ырыу башнцы ҡанын ҡыҙҙы.

Ҡунаҡ булам тигәс тә, муйнаҡ булма, үҙенде әҙәпһ готорға өйрән. һиңә түләгәнсе, нуғайҙарға тапшырған ябаҡты Аҡ батшаға ебәреүем мең артыҡ, — тип тайшаиы ыуын ҡайтарҙы ла, Рәсәй гражданлығын алырға ниәтләгән ырыуҙаштары менән бергә Урал тауҙары яғына күсеп киттс.

XXIII

КптоП ырыуының Рәсәйгә ҡушылыуы тураһындағы хәбәр тиҙ таралды. Элекке Себер ханлығындағы төрлө халҡтар мспән аралашып йәшәүсе Сырынйән, Табын, Мәсеш, һсирән, һалйот, Терһән, Быҡатай кеүек Урал аръяғындағы башҡорт ырыуҙары ла Рәсәй гражданлығын ҡабул ризалаштылар. Улар менән идаралыҡ итеү эше «Ік І пшскиП дворец» тип исемләп йөрөтөлгән махсус приказ[2] Иукмотелде. Шунан һуң тотош Башҡортостан иле

[1] Сыныпго алынған Әли хан, Алексей Михайлович Рәсәй батшаһы ... шаһан нтелгонгә саҡлы, ысын хан һымаҡ ҡайғы-хәсрәтһеҙ Мәскәүҙә ... ношпе. (Г. Ф. Миллер. Указ. соч., т. 2).

[2] *Приказ* — хәҙерге министерство.

батша Указы буйынса дүрткә: Ҡазан, Нуғай, Себер һөм Уса даруғаларына бүленде. Һәр башҡорт даруғаһы, үҙ сиратында, волостарға, аймаҡтарға һәм түбәләргә бүлгеләнде.

Волостар шул төбәктә йәшәүсе башҡорттарҙың ырыу-ҡәбилә исемдәре менән йөрөтөлдө. Даруғаға — даруға старшинаһы, волостарға — волость старшиналары итеп башҡорттар араһында иң абруйлы кешеләр йыйындарҙа һайланды. Волость старшиналарына батшаға яһаҡ йыйыу, енәйәт ҡылған башҡорттарҙы ислам дине хөкөмөнә тартып тырыу бурысы йөкмәтелде.

Башҡортостан иленең күпселек волостары Өфө өйәҙенә, ә төньяҡ-көнсығышындағылары[1] . «Сибирский приказ»дың Тубыл өйәҙенә буйһондоролдо.

Ситтән күсеп килеүсе урыҫтар менән башҡа халыҡтар Өфө воеводаһы ҡарамағына тапшырылды.

Өфө воеводаһы итеп, өс йылға бер тапҡыр, Мәскәүҙәге «Казанский дворец приказы», йәғни министерствоһы тарафынан урыҫ кешеһе тәғәйенләнде.

Административ яҡтан Башҡортостанды үҙгәртеп ҡороу эше үтә ҡыҙыу барҙы. Шул осорҙа, 1557 йылғы «Жалованная Грамота»ла күрһәтелгән йөкләмәләр буйынса, башҡорттар Рәсәй иленә баҫып ингән поляк-швед ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғышырға саҡырылды.

Рәсәйҙе сит ил баҫҡынсыларынан һаҡлауҙы ата-олатаһынан мираҫҡа ҡалған изге бурысы тип һанаған Төлкосура бей, бер ниндәй икеләнеүһеҙ, ырыуҙаштарын йыйынтыҡ йыйҙы.

— Рәсәй батшалығы бәлә-ҡазаға тарыҡҡан ваҡытта ҡул ҡаушырып ултырырға хаҡыбыҙ юҡ, ағай-эне, — тигән ул ир-егеттәргә алыҫ походҡа сығырға әҙерлек башларға ҡушты.

Иыйындан аҙаҡ күп тә уҙманы, иң яҡшы аттарына атланып, яурындарына уҡ-һаҙаҡтарын аҫҡан һыбайлы башҡорт егеттәре мәсет алдында йыйылды.

Яуға китәсәк ир-егеттәрҙе ҡыйыу булырға, башҡорт исеменә тап төшөрмәҫкә өндәгән мулла ҡорьән уҡыған саҡта Төлкосура бей күмәк кешеләр араһында малайҙарын менән бергә торған ҡатынынан ҡүҙәрен алманы.

«Мин алыҫта йөрөгәндә улар нисек тормош көтөр икән? Малайҙарым уғата бәләкәйҙәр, бисәм ауырлы ҡала», тип ул күңел төшөнкелөгөнә бирелде. Ләкин уларҙы борсоған маҫҡа тырышып, хәлен белгертмәне.

[1] Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышы — хәҙерге Силәбе, Курган өлкәләре, Пермь һәм Екатеринбург өлкәләрендәге байтаҡ ерҙәр.

Бүтән егеттәрҙең дә йөҙө бойоҡ. Улар ҙа Төлкосура кисергән уй-хистәрҙе кисерә торғандарҙыр...

Лта-осоһе, ҡатындары, бала-сағаһы, көләштәре һәм туғандары менән һаубуллашҡандан һуң, яуға барасаҡ һыбайлы ир-егеттәр урындарынан ҡуҙғалды. Ләкин уларҙы оҙатыусыларҙан бер кем дә иламаны. Яуға китеүҙе олор алыҫлаша башлағас ҡына яңғыҙ ҡатындың йырлауы пшетелде.

Әрмеләргә китә, ай, башығыҙ,
Буҙ балалар, инде хуШығыҙ.
йылдарығыҙ айҙай тиҙ үҡ үтер,
Иҫән йөрөп, енеп ҡайтығыҙ...

Һыбайлы егеттәрҙең дә береһе түҙмәне, ҡысҡырып йырлап сбәрҙе:

Беҙ китәбеҙ инде, ай, үҙебеҙ,
Алыҫ ҡалыр тыуған илебеҙ.
Беҙ килә лә тип ҡарай-карай,
Тилмерер ҙә ике күҙегеҙ.

Яш'ыҙ йырсыға ҡалғандары ла дәррәү ҡушылды.

Атка ғына мендек беҙ үҙебеҙ,
Ҡалманымы әйтер һүҙегеҙ?
Ҡалһа ҡалһын әйтер һүҙҙәрегеҙ,
Сабырһыҙ ҙа булмаң үҙегеҙ...

Пижпий Новгородҡа барып еткәс, Телкөсура команлығындағы Тамъян ырыуы башҡорттары воевода Андрей Семснович Алябьевҡа буйһондоролдо.

һорлоштерелгән ғәскәрҙе ҡала ситендәге уйһылыкта булған уйынына өйрәткән сакта воевода Алябьевҡа сапҡын килде һәм Углич ҡалаһында йәшәгән Иван Грозный-ның, косс улы Дмитрийҙың үлтерелеүе хаҡында хәбәр ирҙе.

Үҙ балаһы булмаған Федор Иоанновичтан һуң, уның урынбаҫары Порис Годунов батша тәхетенә ултыртылғайны. Хәтерҙә, тәхетенән ҡолатыуҙарынан ҡурҡып, берҙән-бер батша вариҫы чиксп иҫән ҡалған Дмитрийҙы ул үлтертте микән?» — тип уйланы воевода Алябьев.

Ауна-уп көн самаһы ваҡыт уҙғас, Угличтағы батша ҡанлы Дмитрий тере, ул Иван Грозныйҙың палачтарынан ҡотолған, имеш, тигән хәбәр таралды.

Шпцдаг ҡатмарлы, нимә дөрөҫ, нимә ялған икәнлеге белешеүҙ көндәрҙең береһендә Борис Годуновтың үлеүе һәм уның урынына Угличтағы Дмитрийҙы батша тәхетенә ултыртырға һәм Рәсәйҙе Польшаға ҡушырға теләүсе поляктар Москәүҙе баҫып алыуы тураһында хәбәр таралды.

Бер аҙ ваҡыт уҙғас, поляктарҙың Мәскәүҙән ҡыуылыуы, власть баярҙар ҡулына күсеүе, поляктар батша итеп ҡуйырға маташҡан ялған Дмитрийҙы кешеләрҙең тулмап үлтереүе, мәйете дарыға буталыуы һәм пушкаларҙан атылыуы хаҡында мәғлүм булды.

Рәсәй батшаһы итеп баяр Василий Шуйский ҡуйылғас, халыҡ тынысланды. Ләкин тыныслыҡ оҙаҡҡа барманы. Иван Грозныйҙың улы Дмитрий үлмәгән, ҡасып ҡотолған, ул поляктар менән Мәскәүгә етеа килә, тигои имеш-мимеш йышайҙы.

Ҡапма-ҡаршылыҡлы яңылыҡтарҙы ишетеп, Төлкөсураның иҫ-аҡылы китте.

— Хәҙер кемгә ышанырға ла белеп булмай!

— Буталсыҡ ерҙәрҙә аңҡы-тиңке йёрөү ялҡытты. Ол лә тыуған төйәгебеҙгә ҡайтып китәйекме? — тип һорапы Хәбибназар.

— Алябьевтан рөхсәт алмай килешмәҫ, — тине Төлкөсура бей. Воевода эргәһенә барып килгәс, Хәбибназарға ғына сер итеп әйтте:

— Мәскәү эргәһенә поляктары менән ялған Дмитрий Икенсе килгән, ти. Беҙ уның ғәскәрен ҡыйратырға барырға тейешбеҙ.

— Ҡасан?

— Әлегә билдәһеҙ.

Төлкөсура сер итеп һаҡларға тырышыуына ҡарамаҫтан, иртәнме-бөгөнмө поляктарға ҡаршы һуғышасаҡтарын ишетеп, башҡорт егеттәре шаулаштылар:

— йәһәтерәк китергә ине!

— Поляктарҙы бер һуғыуҙа дөмбәҫләрбеҙ ҙә тыукш Башҡортостаныбыҙға ҡайтып китербеҙ!..

Алыштың ни икәнлеген атай-олатайҙары һейләүе йуҡ йынса ғына ишетеп белгән йәштәрҙең ҡупырыныуы Төлкөсураға оҡшаманы.

— һуғышты уйын тиһегеҙме әллә? Сәфәр сығырҙан алда аттарығыҙҙы нығлап ашатығыҙ, ҡоралдарығыҙҙы әҙерләгеҙ, үҙегеҙ ҙә хәл йыйып алығыҙ! Воевода Алябьевтың һүҙенә ҡарағанда, поляктар менән алыш бик ямаң буласаҡ.

— Поляктар күпме ни?

— Поляктар үҙҙәре генә булһа, бәлки, беҙгә ҡаршы тора алмаҫтар ине. Урыҫ баярҙары менән казактарҙың күпселеге ялған Дмитрий Икенсенең поляктары яғына ҡасып сыҡҡан, ти.

— Вәт ҡәбәхәттәр, — тине Хәбибназар, нәфрәтлопеп Икенсе көндөң таңында воевода Алябьев ғәскәро сы

ғындағы Төлкөсура яугирҙары, эйәртенешеп, Нижний Новгородтан сыҡтылар.

Цмшспсе декабрҙә Мәскәүгә яҡын Ворсме[1] ауылында ты дпшмап отрядын ҡыйратыш, улар алға ябырылды.

Москоу янында тупланған шляхтичтарға[2] Польша короле карамағындағы ғәскәр ярҙамға килеп еткәс, һыбайлы башҡорттарҙың һөжүме тотҡарланды.

Клушкпна ауылы янындағы алышта урыҫ ғәскәре потмк шиедтар тарафынан ҡыйратылды. Батша тәхетенән тлптылған Василийҙың сәсе ҡырылды һәм ул монах итеп шлап ителде.

Власты үҙ ҡулдарынан ысҡындырмаған баярҙар, дошчи меион килешеү төҙөп, поляк-швед ғәскәрҙәрен Мәсүүә йошсрен уҙғарҙылар ҙа, Польша короленең улы Владиславты Рәсәй батшалығы тәхетенә ултырырға саҡырҙылар.

Буталсыҡ осорҙа урыҫтарҙан кемдәр дошман яҡлы, кемдәр ысын патриот, Рәсәйҙең бойондороҡһоҙлоғо өсөн канын аямай көрәшергә әҙер тороуы Төлкөсураға күренә, хатта Алябьев кеүек воеводаларға ла билдәле булмаған.

Москәүҙең үҙендә лә тулы аңлайышһыҙлыҡ хөкем һөрә. 1611 йылдың 17 ғинуарында, йәкшәмбе көнө, Салтыков мшпдалығындағы поляктар барлыҡ христиандарҙың патриархы менән ҡоралһыҙ ябай халыҡты тураҡлап үлтерә башлаған өҙерләнә, имеш, тигән ҡот осҡос хәбәр таралды.

Билдәһеҙлек воевода Алябьевҡа кире тәьҫир яһаны. Ул билдәһеҙлеккә бирелеп ултырҙы ултырҙы ла, Төлкөсура менән Мпколай исемле урыҫ егетенә Мәскәүҙәге яңылыҡтарҙы Пплсргә ҡушты.

Москоу шау-шыулы. Урамдары литва роталары, һыбайлылар һәм йәйәүле һалдаттар менән шығырым тулы. Төлкөсура мсиән урыҫ егетенә бер кем дә иғтибар итмәне. Москоуҙың уртаһындағы ҡалҡыу урынға күтәрелгән поляктарҙың Оашлығы, кешеләрҙе тыңлата алмайынса, үҙ теләгенсә ҡыҫҡыра.

Цплякса анламаған Төлкөсура, аптырап, Николай меп орлошкән казак эргәһенә барҙы.

Ул пипдәй кеше?

Салтыков.

Пиңо шул тиклем аҡыра?

Ул Москәүҙәге барлыҡ урыҫтарҙы тураҡлап ташларға пщдой. Ризалашмаһалар, Польша короленә китәм,

[1] Акты исторические», т. 2, номер 113.

[2] Шляхтич — Польша дворяндары.

— Харап икән, ана бара юлы, — тине Төлкесура.

Иртәгәһенә Кремль башняларына һәм Ҡытай-ҡалага поляктар пушкалар урынлаштыра башланы.

Мәскәүҙәге яңылыҡтарҙы белгәс, воевода Алябьев аға-рынды.

— Тимәк, поляктарҙың ҡыланышы тигенгә түгел. Улар ҡоралһыҙ кешеләргә ҡаршы һуғышырға әҙерләнә, — ул ҡала кешеләренә ярҙамлашырға ашыҡты һәм уның коман-далығындағы урыҫтар менән башҡорт егеттәре ҙур тиз лектә Мәскәүгә яҡынлашты. Алябьевтың яугирҙары ки-леп туҡтаған Мәскәү слободаһына кенәз Пожарский, Бу турлин, Колтовский һәм Ляпунов командалығындағы полк тар ҙа килеп етте.

Сағыу ҡояш кәбән арҡаны оҙонлоғонда юғарыға күтә релде. Тауыш-тын ишетелмәне.

«Бәлки, юҡ өсөи ғауғалашҡанбыҙҙыр», тип уйлаии Төлкөсура. Бер ҙә юҡка түгел. Ана, поляктарға һатылгпи казактар атаманы баҙар янындағы ылаусыларҙы дошман пушкаларын буш башняларға урынлаштырыуҙы талап ито Ылаусылар, бушҡа аҙапланырға теләмәйенсә, һатыулашо лар.

Поляктар яғына сыҡҡан немец отрядтары, ҡала халҡы болаға күтәрелергә әҙерләнә тип уйлап, бер яҡ ситтәрәк торған урыҫтар төркөмөнә ташланды.

Немецтарға поляктар ҙа барып ҡушылғас, һуғыш ҡа-пыл ҡыҙҙы.

Ҡытай-ҡалала поляктар тарафынан ете йөҙҙән ашыу урыҫ менән кенәз Андрей Васильевич Голицындың үлгә-релеүе тураһында ишеткәс, Төлкесура бей:

— Тегендә кеше ҡаны ҡойола, ә беҙ бында шаҡ ҡатып торабыҙ! Һис юғында ҡалған кешеләрҙе үлемдән беҙҙәй райыҡ, — тине.

— Ҡабаланырға ярамай. Алышҡа барырға әлегә сират етмәгән, — тине воевода Алябьев.

Аҡ ҡаланан ҡасып килгән урыҫ егете ҡоралланғаи шеләрҙе урыҫ кенәздәренең поляктарға ҡаршы күтәреүе әйтте. Дошманға ҡаршы һуғышыусылар урамдарға тәлдәр, ултырғыстар, эскәмйәләр сығарып өйгәидәр шул нәмәләр артына ышыҡланып, һөжүмгә килеүсе ля ляктар менән немецтарға төбәп ут асҡандар.

Мәскәү слободаһындағы көстәрҙе берләштереп, менән командалыҡ итеүҙе кенәз Дмитрий Михайлович жарский үҙ өҫтөнә алды һәм барлыҡ туптарҙан ут бойорҙо.

Бер сәғәткә һуҙылған туптар гөрһөлдәп туҡталғас та, һыбайлы башҡорт егеттәре менән бор

лим ротпнктар, һөрән һалып алға ябырылдылар. Уларҙың кесло ҡыҫымына сыҙай алмаған поляктар менән немец-тар Ҡытай-ҡала эсенә инеп бикләнделәр. Ҡасып кото-рган олгермәгәндәре аяуһыҙ тураҡланды, күмәк аттар ҡурҡыу аҫтында тапалып үлде...

Кспоз Пожарский воеводаларҙы кәңәшмәгә йыйҙы.

Дошман ғәскәрҙәрен Кремлдән һәм Ҡытай-ҡаланан көрөп сығарырға кәрәк, — тип ул воевода Иван Матвеевич Бутурлинды Яуыз ҡапҡаһына, Иван Колтовскийҙы Замо-сковоречьеға тәғәйенләне.

Цожарский тәғәйенләгән воеводалар, көслө ут асып, Мәскәүҙе яндырырға маташыусы поляктарҙы ҡырҙылар.

Поляктарға ярҙамлашырға теләгән Михаил Салтыков «ч ргисс булып үҙ өйөн яндырҙы. Янғын икенсе өйҙәргә лә ТО һом Аҡ ҡала көслө үрткә солғанды. Ҡытай-ҡалаға ныц зарары теймәне, сөнки ел икенсе яҡка иҫте.

Утлы ялҡын ни тиклем юғарыға күтәрелһә, тирә-яҡ ныц гпклем яҡтырҙы.

Хрпстпандарға оло бәлә-ҡаза яҡынлашыуын белғертер-г телгән сиркәүҙәрҙәге күмәк еҙ ҡыңғырауҙар, төнгө ҡараңғыны боҙоп, даң-доң, даң-дон яңғырай.

Фожпгәле күренеште күҙәтеп торған Төлкөсура, урыҫ-» праһында ла берҙәмлек бүлмауына эсе бошоп, һатлыҡ ҡаһарҙарҙы әрләне.

Урыҫ баярҙары поляктар менән немецтарға ярҙам-ашмаһа, дошман ғәскәре Рәсәйҙән ҡыуылыр һәм Мәскәу « ончолай үртәлмәҫ ине!..

Воеводалар менән бәйләнеш тотоу өсөн тәғәйенләнгән ҡыҙылдар кенәз Пожарскийға яңылыҡтарҙы килтереп торҙолар.

Замосковоречье арҡылы үтергә маташыусы поляктар, Колтовскийҙың ратниктары ҡаршылығына осрап, си-ҫрә мәжбүр булған. Улар воевода Алябьев ратниктары менән Төлкөсура командалығындағы башҡорт егеттәре ерҙе лә һуғышып ала алмаған...

Ҡыҙа.

Кесло һуғыш ваҡытында кенәз Пожарский ҡаты яра-ланды.

Кенәз Пожарский Троицкий монастырына оҙатылған-нан һуң, дошман ҡыҫымы артты. Алябьевтың ратниктары менән башҡорттар сигенергә мәжбүр ителде, ә ябай ха-лыҡ иланға сыҡты.

Кышкы кен һалҡын. Өҙлөкһеҙ иҫкән киҫкен ел үҙәккә үтә. Гьшсрснерҙәй йылы урын юҡ.

Бер торкөм мәскәүлеләр пан Гонсевскийға барып, Мәрхомәтле булыуын һәм һыуыҡта интегеүселәргә

берәй ярҙам ойоштороуын һораны. Ләкин пан улар мснои осрашырға ла теләмәне. Мәскәүлеләр поляктарға тоҡро хеҙмәт итергә теләк белдереп, Владислав тәрепен үпкос кенә пан ГонсевсЪй аслыктан һәм һалҡындан ҡырылгаи кешеләргә ярҙамлашырға ризалашты.

Иртәгәһе көндө ваҡиға киҫкенләште.

Мәскәүгә һөжүм итеүсе утыҙ меңлек урыҫ ғәскәрепг> ҡаршы һуғышырға, пан Гонсевскийҙың бойороғо буйынсп, Зборовский һәм Струсь командалығындағы отрядтар ебо-релде. Уларҙың ҡыҫымына сыҙай алмаған атаман Просо вецкий, ике йөҙҙән артығыраҡ казактарын юғалтҡаидаи һуң, далаға ҡасты.

Шул саҡ йөҙ мең кешене берләштергән ополчение[1] Мәскәү эргәһендәге Симонов монастырына яҡынлашты.

Апрель башында ополчениеға ярҙамға воевода Ляиунов, Алябьевтың ратниктары менән Төлкөсуранын баш-ҡорттары ярҙамға килеп етте һәм уларға Мәскәүҙең Яуып ҡапҡаһын һаҡлау бурысы йөкмәтелде. Ярославль мсиои Кострома воеводалары — Покровский ҡапҡаһын, Трубец-кой менән Заруцкий — Воронцов яланын һаҡланы, воево-да Измайлов-Сретин менән кенәз Мосальский командо-лығындағы отрядтар Тверь ҡапҡаһы тәңгәлендә урынлаш-тылар.

Воевода Ляпунов, Алябьев менән Төлкөсураныц пр-егеттәре поляктарға ҡаршы беренселәрҙән булып һуғышҡа ташландылар. Ләкин ул алыш еңеү килтермәне, уңышһыз тамамланды.

1611 йылдыц ҡышын аҙық-түлекһеҙ Мәскәүҙә үткәргән поляктарҙың хәле мөшкөлләнде. Бер нисә тапҡыр ҡпло ҡапҡалары аша сығырға маташыуҙарынан бер ни ҙә бн-рып сыҡманы. Мәскәүҙәге поляктарға ярҙамлашырға тн-рышкан Ходкеевичтың һөжүме лә кире ҡағылды. Хәҙер поляктарҙың берҙән-бер өмөтө — Польша короле ғәскәре-нең ярҙамға килеп етеүен көтөү...

XXIV

Мәскәүҙе дошмандан азат итеү тотҡарланды, Ынжний Новгородтан көтөлгән ярҙам да килмәне.

Хәрәкәтһеҙ тик тороуҙан ялҡҡан воевода Алябьсп оо-бырһыҙлығының сигенә етте. Ул үҙенең урынына дружи-командиры итеп ярҙамсыһын тәғәйенләне лә, үҙе Нижни Новгородка китте. Воевода Алябьев Новгородтағы гапло-

[1] *Ополчение* — боронго һуғыш ваҡытында киң халыҡ масса-ҡоралландырып ойоштороған махсус ғәскәр.

ополчение ҡайтҡас, юлдан килгән ыңғайы ял итеп тә тор-маһынса, Лпжний Новгородтың воеводаһы кенәз Звениго-ш ҡекийға барҙы.

Алябьев, воевода ултырған бүлмә ишеген асып эсю ниыс чо, ҡыскырып һораны:

Ксиәз Василий Андреевич, беҙҙең Мәскәү янында ярҙам көтөүебеҙ бушҡамы ни? Нисәмә тапҡыр ярам сбәреүзе һорап, ыңғай яуап булмауҙың сәбәбен I*скаиларға?

Өстәл артынан күтәрелгән воевода Звенигородскигё Алябьевтың ҡыланышына аптыраны.

Апдрей Семенович, ни булды? Тәүҙә, һис юғында, ялек-һаулыҡ һорашһаңсы!

Кеноздең дуҫтарса мөғәлләмәлә булыуына уңайһыҙла-нып, птоқ, үтә ҡыҙыу Алябьев ҡайтымһаҡланды.

Ғафү итегеҙ, Василий Андреевич, — тип ул честь отдае һаумыһығыҙ, кенәз!

Кенәз Звенигородский бер ни булмағандай йылмайыге Алябьев мсиән күреште лә өҫтәл артындағы буш ултыр-ғыстарҙың береһенә ымланы.

Ултырығыҙ, Андрей Семенович.

Рохмәт.

Һпплыкты беренсе булып кенәз Звенигородский боззо:

Пижпий Новгородка бик ваҡытлы ҡайттығыҙ, Анд-р Н Семенович. Һеҙҙе ҡайтарыу өсөн сапҡын ебәрергә то-рошмаҫ ине.

Бында мин кемгә кәрәкмен? — Алябьев ғәжәпләнде..

Поҙго, — кенәз Звенигородский Алябьевтың Нижний» ородта ополчение ойоштороу буйынса хөкүмәт ағзаһы ң ЬлПлпныуын әйтте.

Бер аҙ тынысланырға өлгөргән Алябьев, көтөлмәгән ыңлыкты белгәс, йәнә йөрәкһенде.

Ополчепиены ойоштороу буйынса тағы кемдәр һай-

Дьяк Василий Семенов, земский староста Кузьма МшМш Сухорукий, ит һатыусы Беркин һәм мин...

Якшы, бик яҡшы, — тине воевода Алябьев, тулҡын-

Мәскәү эргәһендә Нижний Новгородтан ярҙам килеүен колгап Алябьевтың дружинаһы тураһында һүҙ сыҡ-кенәз Звенигородский:

Һеҙҙең дружиналағы һыбайлы башҡорттар нисек тип һораны?

Арыслан шикелле, — тине Алябьев.

Һишкорттарҙы тигенгә генә мактамайҙар икән! — Звенигородский шатланды. — Бер мең биш йөз илле-

етенсе — илле һигеҙенсе йылдарҙағы Ливон һәм Ҡырым һуғыштарында ҡатнашыусы башҡорттар ҙа Рәсәй ғәскәре сафында үҙҙәренен батырлыктары менән дан яулаған. Шул һуғыштарҙа ҡатнашыусы башҡорт ырыуы башлыктарына Иван Грозный миҙалдар тапшырғанлығы ла мәғлүм.

— Иван Грозныйҙан миҙал алған Шәғәле Шаҡмандың ейәне Төлкөсура бей минең дружинала һуғыша. Башҡорттар поляктарҙы күпләп ҡырҙы.

— Башҡортостандың бүтән даруға һәм волостарыпаи беҙгә ярҙамға ебәрелгән егеттәр ҙә үҙҙәрен һынатмаш. Уларҙың ҡыйыулыҡтары тураһында минә Өфө һәм Төмои өйәҙе воеводалары хәбәр итте.

— Рәсәй яҙмышы, уның киләсәге хәл ителәсәк был һуғыштарҙа поляк-шведтарға ҡаршы башҡорттарҙы файҙаланмаһаҡ, хата булыр ине.

— Дөрөҫ, — тип ризалашты кенәз. — Шул маҡсат менән Башҡортостанға сапҡындар ебәрҙем. Нижний Новгородта ойошторолаҫаҡ ополчениела хеҙмәт итергә телок белдереп, меңләгән башҡорт ҡала ситендәге уйһылыҡта йыйыла башланы.

— Шул ерҙе барып күрәйекме? — тип һораны Алябьси.

— Әйҙә, барайыҡ.

Йәһәт кенә йыйналдылар ҙа улар кешеләр менән шығырым тулы Нижний Новгородтың үҙәк майҙанына йүнәлделәр.

Үҙәк майҙанда хөкүмәт ағзалары күренгәс, бер аҙ тынлыҡ урынлашты.

Сходты асыҡ тип иғлан иткән воевода кенәз Звенигородский Алябьевҡа һүҙ бирҙе.

Алябьев, сығышын нисек башларға белмәйенсә, миил самаһы шымып торҙо.

— Рәсәй дәүләтенең бойондороҡһоҙлоғо өсөн иң соулы, үтә яуаплы осорҙа йәшәйбеҙ. Тыуған илебеҙҙе ляк-швед баҫҡынсыларынан таҙарта алмаһаҡ, оло ҡазаға тарығасаҡбыҙ һәм ҡабаттан изелеүгә дусар и сәкбеҙ, — тип башланы ла Мәскәүҙәге ҡатмарлы хәл ҡиғаны ул өтөлөп-янып һөйләргә кереште.

Алябьев шымғас та хөкүмәт ағзалары араһында ҫып торған Кузьма Минин-Сухорукий ярһып һөйлоио

— Ишеттегеҙме, кешеләр?!.. Ауыр хәлдәге Мәскоу ләтенә ихлас ярҙамлашырға теләһәк, изге эш өсөн лык мөлкәтебеҙҙе йәлләргә хаҡыбыҙ юҡ! Дошман рен ҡыйратыу өсөн бөтә әйберҙәребеҙҙе һатырға, ҡатындарыбыҙ менән бала-сағабыҙҙы ла закладҡа ға бурыслыбыҙ. Беҙгә тиҙ арала ополчение йыйырғп

уны ҡоралландырырға кәрәк. Минең ғаилә бай түгел, ярҙ Беҙҙең земствола минең кеүектәр ике мең биш йөҙ кеше. Улар ойошторолаҫаҡ ополчение файҙаһына бер мең ото йөҙ һум аҡса йыйҙы. Үҙем генә йөҙ һум аҡсамдьс тапшырҙым. Һеҙҙең дә һаранланмауығыҙҙы үтенәм!..

Кузьма Мининға ҡушылып, башҡалар ҙа Мәскәүҙе ҡиҫмәндәи азат итеү өсөн барлыҡ мөмкинлекте файҙаланырға тслок белдерҙе.

Митпнг тамамланғандан һуң, ойошторолаҫаҡ ополчениела ҡоралландырыу өсөн аҡса йыйыу башланды. Кем ҡурамлашырға теләмәй, уларҙың аҡсаһы талап тигәндән алынды.

* * *

Оцплчение ҡоралландырылғас, уның командующийы II кемде ҡуйырға белмәйенсә баш ваттылар.

Полки, воевода Алябьевты баш командующий итерһ - тип һораны Кузьма Минин.

Алябьев, йөҙ мең кешене берләштергән ополчение мещ командалыҡ итеүҙән баш тартып:

Уидай оло вазифаға кенәз Пожарскийҙан да һәләтлерәк кешсне табыу мөмкин түгел, — тине.

Иожарский беҙҙең ышанысты аҡларҙай кешеме? Һис шикһеҙ, — тине воевода Алябьев ныҡлы ышаныс менен. — Кенәз Пожарский Мәскәу эргәһендәге һуғышларҙа һыналған тәүәккәл, аҡыллы кеше.

Ул оле ҡайҙа икән?

Копоз Дмитрий Михайлович Пожарский, Мәскәү эргәһендәге һуңғы һуғышта ҡаты яраланып, Троицкий монастырына оҙатылғайны. Шунан бирле уның менән беҙ ебәйләшеш өҙөлдө.

Тик... яраһы уңалды микән? — тип һораны дьяк Семенов.

Асыҡларға кәрәк.

Үҙен күрмәйенсә, уның ни хәлдә икәнлеген нисек белергә

Юк өсөн баш ваткансы, бәлки, бүтән воеводалар командующийға яраҡлы кешене эҙләргәлер, — тц һтыусы Биркин.

Кузьма Минин, уның тәкдимен ҡырҡа кире ҡағыя,

Кенәз Пожарскийҙан башҡа бер кемде лә эҙләргә И Тик ул ҡайҙа йәшәй икән?

Үҙ Дөль өлкәһендәге бер бәләкәй генә ауылда йәшәй.

— Шулай булғас, ваҡытты бушҡа уҙғармайыҡ. Халыҡ исеменән һөйләшер өсөн уға вәкилдәр ебәрергә кәрәк!

— Пожарский менән һөйләшеп килешеү өсөн кемдәрҙе ебәрәбеҙ? — тип һораны воевода кенәз Звенигородский.

— Архимандрит Феодосий менән дворян Болтинды ебәрәйек, ә ярҙамсы итеп кемдәрҙе алырға үҙҙәре һайлаһындар, — тине Кузьма Минин-Сухорукий.

— Дөрөҫ!..

Архимандрит Феодосий менән Ждан Петрович Болищ шул уҡ көндө Суздаль өйәҙенә табан юлландылар.

Нижний Новгород ҡалаһындағы хөкүмәт ағзалары тарафынан тәғәйенләнгән махсус комиссияны кенәз Пожарский оло ихтирам менән ихлас ҡаршыланы һәм уларҙың тәҡдименә бер ниндәй икеләнеүһеҙ ризалашты.

— Халыҡтың минә ышаныс белдереүенә сикһеҙ шатмын,— тине ул.— Мин бөгөндән ополчениеға барырға әҙер мен. Әммә һеҙгә бер ҙтенесем бар. Посадскийҙар араһынан ополчение ҡаҙнаһы эшен алып барырҙай эшлеклс һәйиамыҫлы кеше табырға кәрәк.

•— Ундай кеше бар, —тине архимандрит Феодосий.

— Кем ул?

— Земский староста Кузьма Минин-Сухорукий.

— Унын тураһында мактау ишеткәнем бар, — тип шатланды кенәз Пожарский. — Мин ҡуш ҡуллап риза! Ләкин ул үҙе ризалашыр микән ҡаҙна эшен алып барырға?

— Уның менән һөйләшеп ҡарарбыҙ, — тине архпмандрит Феодосий.

Кенәз Пожарский эргәһендә булып Нижний Новгородҡа кире әйләнеп ҡайткас, комиссия ағзалары туп-тура Кузьма Минин йәшәгән фатирға барҙылар һәм уның ополчение ҡаҙнаһы менән етәкселек итеүен үтенеп һоранылар.

Кузьма Минин Пожарскийҙың теләгенән тәүҙә баш тартты. Аҙаҡтан, комиссия ағзаларыныц өгөт-нәсихәтен бирелеп, әйтте:

— Әммә һеҙгә бер шарт ҡуям.

— Ниндәй?

— Мин ҡушҡан йомошто ҡаршылыҡһыҙ үтәргә, Рәсәй азатлығы өсөн һуғышасаҡ ратниктарға аҡса йыйырға ирек биргән ҡарар сығарылһа, ополчение ҡаҙнаһы эшен алырырға мин ризамын, — тине Кузьма Минин-Сухорукпй.

Кузьма Минин талап иткән мөһим мәсьәләне хәл итеп алыу өсөн Нижний Новгород ҡалаһы кешеләре ҡабат үҙәк майҙанға йыйылды.

Бер нисә кеше сығыш яһағандан һуң, ополчешю әҙерлсуплəп аҡса йыйырға ҡарар сығарылды.

Кузьма Мининды ундай ҡарар ҡәнәғәтләндермәне. Ул

АҠСа йыйыу менән генә сикләнергә бер кемдең хаҡы [illegible] тине лә ул ҡарарға ошондай һүҙҙәрҙе өҫтәп яҙ[illegible]ы: «...ратниктарға ярҙамлашыу өсөн барлыҡ мөлкәт[illegible]ҡатындарыбыҙ менән бала-сағабыҙҙы ла һатырға ри[illegible]»

Кузьма пндерелгән ҡарарға митингыла ҡатнашыусы[illegible] омепәи егермеләп кеше ҡул ҡуйғас, Кузьма Минин [illegible] ҡазнаһы эше менән етәкселек итергә риза[illegible].

1 пмерҙе ҡыҙыу сағында һуғып ҡалырға кәрәк. Кеше бер пцыиа килеп был ҡарарҙан баш тартҡанға саҡлы, [illegible] кыҙыулатырға кәрәк, — тип ул йыйын ҡарарын Дмитрий Пожарскийға ебәрҙе.

Новгородсылар сығарған ҡарар менән танышҡас та, [illegible] Ппжарский Ннжний Новгородҡа табан юлланды. [illegible] стер саҡта Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Юрматы, Меңдәр, [illegible]) һәм башҡа ырыу кешеләрен берләштергән башҡсгрт [illegible] осратты. Мәскәүҙе дошмандан азат итергә тигән [illegible] ц мсиои уларҙың Нижний Новгородҡа килеүен белгән [illegible] Дмитрий Михайлович шатланды.

Дмитрий Пожарский үҙен яңы ойоштороласаҡ ополчение[illegible] баш командующийы тнп таныштырҙы ла, башҡорт[illegible]м нөп тағы ла осрашасағын әйтеп, артабан ьшғай[illegible].

Нижний Новгородҡа еткәс, уны оҙатып барыусы һы[illegible] Оошҡорт егеттәре ҡәлғә тышында ҡалды, ә йөҙ [illegible] башлыҡтары менән кенәз Пожарский ҡаланың [illegible] ҡапҡаһынан эскә үтте.

[illegible] Пожарский менән килгән башҡорт башлыҡтарын [illegible] нтчюда Звенигородский дуҫтарса ҡаршыланы.

[illegible] касан килдегеҙ?

Ьигоп.

[illegible] менән нисә кеше?

Ҡүрт мең һигеҙ йөҙ һыбайлы, — тине мең башы.

[illegible] ҡалыбыраҡ килеүселәр ҙә байтаҡ, — тип өҫтән [illegible].

Нижний Иовгород воеводаһы ҡыуаныс белдерҙе:

Ьылой булғас, килмешәктәрҙе мотлаҡ енәсәкбеҙ!

[illegible] лtконде ҡеүәтләп, новгородсылар «ура» ҡыскырҙы. И[illegible] шода Алябьев яңы килгән һыбайлы башҡортТарҙы [illegible] аружииаһына алырға теләк белдерҙе.

[illegible] Дмитрий Пожарский, ризалашмайынса, баш сайы

\п трей Семенович, һннең дружинаң сафында башҡ[illegible]и ор Оылай ҙа бйк күп бит! Яңы килгән башҡорттар [illegible]ң пиолчспиела ҡалһын, үҙҙәре лә шундай теләк бел-

дерҙе. Миңә ышанмаһаң, ана, унан һора, — тип ул кенәз Звенигородский яғына ымланы.

Ҡәлғә тыш.ындағы ауылдарҙа урынлашҡан ир-егеттор эргәһенә киткән башҡорт түрәләрен оҙатҡас, кенәз Дмитрий Пожарский ратниктарға айлыҡ эш хаҡын тараттыҠазналағы аҡса аҙ булыу сәбәпле, уларҙың ҡайһы бсрҙорәнә өлөш етмәне.

— Бүтән ҡалаларҙа йәшәүсе халыҡтан да аҡса мсноп ярҙамлашыуҙарын һорарға тура килер, ахырыһы. Шулһыҙ бөләсәкбеҙ, — тип кенәз Пожарский бер төркөм ярҙамсыларын махсус йомош менәи ебәрҙе.

Уның хәстәрлеге арҡаһында, ополчение ҡазнаһындағы аҡса күбәйҙе һәм яңы ратнниктарҙы йыйырға ла мөмкинлек тыуҙы.

Дмитрий Пожарскийҙың абруйы үҫеүе ҡала хөкүмпш ағзаһы, ит һатыусы Иван Биркинға оҡшаманы. Ул По • жарскийҙы маҡтаған новгородсыларға ярҙамлашыщии ҡырҡа баш тартып, Ҡазан воеводаһы Шульгин эргәһенә ҡасып китте. Биркиндың хыянатын ишетеп, Кузьма Миинин ярһыны:

— Вәт ахмаҡ, шайтан һауыты! Дмитрийҙың уңышынан көнләшеп, дошман яғына ҡасып сығарға ла өлгөргои, 'ко бәхәт!..

Мәскәү баярҙары ла тик ятманы. Улар халыҡты поль• ша короленең улы Владиславҡа тоғро булырға һәм уны Рәсәй батшаһы итеп танырға өндәп, 1612 йылдың гнпуа• рында яҙылған хатты тараттылар.

«...Прокофий Ляпуновты ворҙар тукмап үлтсрге .. Ивашка Заруцкий менән уның иптәштәре мәйетеп эттәрге ашатыу өсөн өс көн буйы ҡала майҙанында тоттолпр • һеҙҙең ҡаршылашыуығыҙ, буйһонорға теләмәүегеҙ сәбәпле, поляктар менән литовсылар беҙгә ҡаршы һаман һүгеша һәм ҡалаларыбыҙ аяуһыҙ ҡыйратыла... Кенәз Трубецкой менән Ивашка Заруцкий кеүектәр бар саҡта Мсн кә дәүләте йәшәйәсәгенә өмөт юҡ. Ундай әҙәмдәр хатги үҙ өйҙәрен дә йүнләп рәткә килтерә алманылар... Оло Сп дың бөйөк Государе Жи.гимонт король үҙенең улы Вла дислапты Владимир ҡалаһына һәм Мәскәү дәүләтено Оа ша итеп ҡуйырға ризалашып, Мәскәү дәүләтен тынысла дырыу өсөн уны Смоленскийға саҡлы оҙатып кило.. •

Баярҙарҙың өндәмәһен ҡат-ҡат укып сыҡҡас, кен Дмитрий Пожарский күңелһеҙләнде.

— Былай булғас, ваҡиға ҡатмарлаша. Дошман енеүгә күп көс һәм ҡан ҡойорға тура киләсәк. Алыш әҙерлекте тиҙләтеү өсөн, барлыҡ мөмкинлектәрҙе файҙа

ныра көрәк, — тип ул үҙенең ярҙамсыларына ашығыс йомоппир ҡушты.

Иван Плещеев командалығындағы казактар Псковҡа Пирыуы һом унда йәшәгәп ялған Дмитрий Икенсе батша • тогролоҡ белдереп ант итеүе, воевода Заруцкийҙың • ктары Ярославлгә яҡынлашыуы, ә Просовецкийҙың • кәре Ярославлгә икенсе яҡтан һөжүм башларға әҙер• еүе тураһында ишеткәс, кенәз Пожарскийҙың йөрәге • ынды.

Ярославлгә дошыандан алдараҡ барып етергә. Юғи• ш. ыщтәр харап, — тип Дмитрий Пожарский үҙенең ике • ҡаһаш ҡустыһы кенәз Дмитрий Петрович Лопата-Пожар• ский мспои дьяк Семен Самсоновты һәм бер төркөм һы• ланды башҡорт егеттәрен Ярославлгә ярҙамға ебәрҙе. • ҙар артынса ғәскәрҙең төп көсө лә юлға сыҡты.

Ополчение Решме ҡаласығына етер саҡта казактар та• рафынан ебәрелгән Кирилла Чоглоков тйгән сапҡын ҡы• ш пчс. Ул, йән-фарман сабышып килгән ыңғайы йугән • ешеп шаҡара тартып, манма һыуға мансылған ярһыу • гуктатты ла кенәз Пожарскийға мөрәжәғәт итте:

Кспәз Дмитрий Михайлович, һеҙгә воеводаларҙың • мотаһын алып кнлдем!

Цпмә хаҡында? Грамоталар кемдеке? — тип һораны Дмитрий Пожарский.

ААпне һеҙгә казактар атаманы Трубецкой менән За• ...и(1 ебәрҙе. Улар, Дмитрий Икенсенең ялған батша • ш ечеп белгәс, анттарынан кире ҡайттылар һәм һеҙҙең • и чрнмшела хеҙмәт итергә теләйҙәр, — тип воеводалар • ҡырап сапҡын ҡуйынынан сығарған пакетты Дмитрий и • гарекһиға бирҙе.

Воеводаларҙың грамотаһын кенәз уҡыманы. Тотанаҡһыҙ • • І ланларға яуап ҡайтарырға ла ашыҡманы. Кузьма Ми• ин менән аулаҡта икәүҙән-икәү кәңәшләшкәс кенә, вое• и м ыр менән мөнәсәбәтте бөтөнләйгә боҙмаҫҡа тырыншы

Беҙ рнза, казактарҙың теләге булғас, дошманға • ы • ы беҙҙең менән бергә һуғышһындар, — тине.

Ка ктар вәкиле Кирилла Чоглоков менән һөйләшеү • • ынынгас, кенәз Пожарский Решме ҡаласығында туҡ• ч и Ш рптмиктары менән бергә хәл йыйҙы.

Иртәнсе көнде ополчение Костромаға табан барырға • ы • ынған саҡта Кострома воеводаһы Иван Шереметьев • • ина короле улы Владислав батша яҡлы икәнлеге һәм • • новгородсыларҙы ҡалаға индермәйәсәге тураһында хә• ш ы ынды.

Дмитрий Пожарский, ни эшләргә белмәйенсә, аптыраны.

— *Иә,* ни кылабыз? Артабан барабызмы, әллә ошонда тукталабызмы?

— Бында тик тороуыбыззан файза сыкмаç, кемоз Дмитрйй Михайлович. Воевода Иван Шереметьевтың hатлык казактарынан Костромаңы азат итеу беззең бурыс, — тине Кузьма Минин.

— Мин риза, — тип Дмитрий Пожарский hыбайлы башкорттарҙы ополчениенан алда Костромаға ебәрҙе.

Башкорттар менән ратниктарға Кострома калаhы өсөи hуғышырға тура килмәне. Улар якынлаша башлағас та, кала кешеләре баш капканан ябырылып сыктылар hом хыянатсыл воевода Иван Шереметьёвты үззәре тукмап үлтереүзәре хакында белдереү яhанылар.

Кис, Костромала ял иткән ваҡытта, Ярославлдан **сб.1** релгән сапкын Псковтағы ялған Дмитрий Икенсегә **буй**hонған воевода Иван Пожарскийға хәбәр итте hәм уиың ярҙамлашыуын hораны.

— Башкорттарҙы Ярославль калаhынан кузгатмаçы булған икән, — тип үкенеп, кенәз Пожарский ополченисты Ярославлгә табан ыңғайлатты.

Юлда барышлай Нижний Новгородтағы казактарҙың бола кубарыуы hәм кешеләрҙе талауы тураһында **хәбәр** алынды.

Уларға каршы воевода Степан Татищев менән **бер** төркөм hыбайлы башкорттарҙы ебәрҙе лә, кенәз Пожарский юлын дауам итте.

Хыятнатсыл воевода Иван Плещеевтың Ярославлдан Псковҡа касыуын ишеткәс, Дмитрий Пожарский ратник тарын Псковҡа йүнәлтте. Ләкин казактарға каршы hугышырға тура килмәне. Иван Плещеев менән воевода князь Хованский hәм ялған Дмитрий Икенсе батша Псковыпкасып китергә өлгергәйне инде.

Псковта тукталып, ополчение ял итте.

Яҙғы ташкын йылғалар ярҙарына инеп, ер-hыу коро мәлдә үзен Рәсәй батшаһы тип йөрөткән ялған Дмитрий Икенсенең крәстиәндәр тарафынан тотолоуы hәм Пу Мәскәүгә оҙатылыуы асыкланды.

Май аҙағында Казанда ойоштороlған ополченисың м нән Ярославлгә килгән, ит hатыусы Иван Биркнн, Пожа скийҙы кыуыуҙы талап итеп, бола кубарҙы.

Иван Биркиндың әҙәпhеҙ кыланышы күпселек ра'Ш тарға кире йоғонто яhамай калманы.

Ополчение капма-каршылыклы ике лагерға бүлсң

Бер төркөм кенәз Пожарскийҙы яҡланы, икенсеhе Иван Внрюш яҡлыларға ҡушылды.

Дмнтрий Пожарский, ополчениенең тарҡалыуынан hәм hуғышсан hәләтлеген юғалтыуынан ҡурҡып, эште нисек тә булһа яйларға тигән ниәт менән Троицкий монастыриида йәшәгән Ростов митрополиты Кириллға сапкын е Ор е.

Шундай катмарлы, аңлайышһыҙ, көсөргәнешле бер конде Дмитрий Пожарскийға каршы йүнәлдерелгән казактарҙың заговоры асылды.

Москәү янында тукталған воевода Заруцкийҙың кушыуы буйынса ополчениеға килгән ике казак, Обреска ленов Степан, бер төркем ратниктарҙы үззәре яғына ылыктырып, кенәз Пожарскийҙы үлтерергә килештеләр.

Ғүмере кыл осонда ғына икәнлеген белмәгәнлектән, кенәз Дмитрий Пожарский иркен йөрөнө.

Москәүгә якын яйлы урынға алып барып урынлашырылырға тейешле пушкаларҙың торошон ентекле ткшсрсп сыккас, ул аулак бүлмә ишеге алдында тукталырак торҙо.

Кенәз, ялпы араһынан үтеүе кыйынмы? — тип hорошы үзен Роман тип таныткан казак.

Эйе, артабан барырлык түгел, — тине Дмитрий Пожарскнй.

Мип hеҙгә ярҙамлашам, кенәз, — тип Роман Дмитрий Пожарскийға күмәк кешеләр араһынан юл ярып 'барырга рнзалык белдерҙе.

Улпр бер-береһенә тотоношоп сак урындарынан кузгатып сакта, ялпы араһында тороусы казак кенәз Пожарскийға бысак менән кизәнде. Ләкин бысак уға теймәне, Дмптрпй Пожарскийға юл ярыи барыусы Романды ситтә яраланы.

Шпу-шыу купты.

Пшск алдындағы ратниктар кенәз Пожарскийға ярдамға ташланды. Улар, енәйәтсе казак кулындағы осло оружпены тартып алып, уның үзен аулак бүлмәгә төрткәй торткеләй алып инделәр.

І иоПотсс казактан hорау алғас кына заговорҙа катнашыусыларҙың төп маҡсаты асыкланды.

«Мине казактарҙан үлтертергә маташыусы воевода Трубецкийға ышанысым бөттө, унан үтә hак булырға кәрәк, — тип уйланы Дмитрий Пожарский.

Үрҙәр араһынан кем ысын дуҫ, кем дошман икәнлеп hүилоп белмәгәнлектән, кенәз Дмитрий Кузьма Минин мсион кәңәшләште:

Хыятпатсылар күбәйгәндә-күбәйә бара. Улар Рәсәй

илен поляк-шведтарҙан азат итеүгә ҡамасауламаһын өсөн, беҙгә ни эшләргә һәм кемдәргә таянырға?..

— Баярҙар менән воеводалар хыянатсылыҡ ҡылған ваҡытта беҙҙең берҙән-бер ныклы ышаныс-таянысыбыҙ башҡорттар, — тине Кузьма Минин. — Башҡорттар беҙгә хыянатсылыҡ ҡылмаясаҡ, сөнки улар ҙҙәрен сит ил баҫҡынсылар изеүенән ҡотолдорған Рәсәй батшалығы алдында бурыслы һанайҙар.

— Дөрөҫ фекер! — Кенәз Дмитрий Пожарский шатланды. — Әммә башҡорттарҙың көсөн нисегерәк файҙаланырға икән?

— Уның өсөн баш ватаһы түгел, кенәз, — тине Кузьма Минин. — Мең башлыҡтарын саҡыртып һөйләш то, бер мең кешене хыянатсыл воевода Трубецкойға, икепсо меңде — Заруцкийға, өсөнсөһөн Ходкеевичҡа ҡаршы һугышырға ебәрәйек, дүртенсе төркөмдәге башҡорттар резервта ҡалһын.

— Хыянатсыл воеводаларға бәйләнешле ваҡиғаларҙы башҡорттарға аңлатабыҙмы?

— Башҡорттар Рәсәй иленең дошмандарын белсрго хаҡлы, — тине Кузьма Минйн.

— Башҡорттар үҙ белдегенә һуғышһындармы, әллә уларҙы үҙебеҙ яҡлы воеводаларҙың дружиналары сафында ҡалдырабыҙмы?

— Әүәлгесә, дружиналар сафында ҡалһындар.

Кенәз Дмитрий Пожарский, башҡорттарҙың мең башлыҡтарын йыйып, уларға ниндәй яуаплы бурыс йөкмо телеүен анлатты. Трубецкойға ҡаршы ебәреләсәк Бөрйән ырыуы башлығы Ғәзизйәнгә ярҙамлашыу өсөн воевода Михаил Дмитриевичты,-Гәйнә ырыуы башлығы Мөхәммот ҡол командалығындағы башҡорттарға — воевода Федор Левашозты, Ҡыпсаҡ ырыуы башлығы Ҡараяҡупҡа - кенәз Лопата-Пожарскийҙы беркетте лә, Юрматы ырыуы башлығы Ғәлинурға буйһонған башҡорттарҙы үҙенец резервында ҡалдырасағын әйтте.

— Беҙгә воевода беркетелмәйме? — тип һораны Юрмиты ырыуы башлығы Ғәлинур.

— Уныһы әлегә хәл ителмәгән, аҙактан күҙ күрер.

— Воеводалар дружинаһына беркетелгән башҡорппр туранан-тура һуғышҡа индереләме?

— Көстө иң һуңғы көнгәсә наҡларға тырышырға кәрәк. Шуға күрә әлегә воевода Дмитриев менән Ғәзизйән командалығындағы бёренсе төркөмгә һәм икенсе төркөмгә һатлық казактар атаманы Трубецкой менән Заруцкийҙан Мәскәүҙең Петровский ҡапҡаһын һаҡлау бурысы йөкмәтелә. Дмитрий Петрович Лопата-Пожарский менән Ка-

разҡуптың башҡорттарына Тверь ҡапҡаһын һаҡлау, воевода Ходкеевичтың бандиттарынан дврряндарҙың балаларыһының ғүмерен һаҡлау бурысы йөкмәтелә...

Копәз Пожарский уҙғарған кәңәшмә бөткәндән һуң, шпчюда Лопата-Пожарский дружинаһы сафында хеҙмәт итәсәк һыбайлы башҡорт егеттәре ҙҙәре өсөн билдәлән(ои ерго йәһәтерәк барырға ашҡынды.

Москәүгә барып етеүгә өс-дүрт саҡрым самаһы ҡалғас, воевода Заруцкийҙың казактары уларға ҡаршы сыҡты һәм көтөлмәгәндә һуғыш башланды.

Башҡорт егеттәре батырҙарса алышты.

Уларҙың көслө ҡыҫымына сыҙай алмаған һатлық казактар, бпк күп яралылар менән үлеләрҙе һуғыш яланын кплдырып, тәртипһеҙ рәүештә сигенергә мәжбүр булдылар.

XXV

Кепәз Дмитрий Пожарский Спасс монастырына барҙы. Шеларҙән изге мөғжизәле эш башҡарыусыларҙан һанлрш Фсдор Ростиславич Черный, уның уландары Давид юили Константин ҡәбере янында ғибәҙәт ҡылғандан һуң, ... пполчениены торған ергә барҙы һәм Ярославль ҡалаһынын ҡуҙғалырға бойорҙо.

Ете-һигеҙ саҡрым самаһы араны уҙғас, кенәз Пожарский Сюпо туҡталды.

Ростовта мине көтөгөҙ, — тип, кенәз Иван Андреевич Хованской менән Кузьма Мининға ғәскәре яҙмышын вашлыса тапшырҙы ла, бер төркөм һыбайлы башҡорт егетерен эйәртеп, ул Суздалгә китте. Ҡала ситендәге зыяратта срлоигән ата-әсәһенең ҡәбере менән хушлашҡас, ополчипг артынан елдерҙе.

Ростовтағы ғәскәре менән осрашҡандың иртәгәһе көнөн Нсиоз Пожарский воевода Образцов командалығында м игрядты Белозерский ҡалаһын шведтарҙан һаҡларға ...рҙе.

ЛПЛЛРЫС эштәре тамамланғас, ғәҙәтенсә, Кузьма Минин мспои кәңәшләште лә, .митрополит Кириллды үҙ ҡарамағына ебәреүҙе һорап, Ҡазан митрополиты Ефремға ... Пожарский хат яҙырға ултырҙы.

«Осшершить игумена Исаию на крутицы митрополит н отпустить его под Москву к нам в полку поскорее».

К«чш Дмитрий Пожарский Мәскәү эргәһендәге хыянатсыл поеводаларҙың дружиналарына ебәрелгән шымдар мсиән дә бәйләнеште өҙмәне.

Воевода Левашев менән Мөхәммәткол бей командалығындағы һуғышсыларҙың эҙәрләүенән ҡасып ҡотолған атаман Заруцкий бер аҙ ваҡыт Коломнала йәшәне. Башҡорт яугирҙары-яҡынлашыуын белгәс, ғаиләһен хәүефһеҙ урынға оҙатты ла, ҡаланы пәм Рязан ерендәге ауылдарҙы туҙҙыра-туҙҙыра, ул Михайловкаға йүнәлде.

Заруцкийҙың казактары Михайловкала оҙаҡ торманы, артабан ыңғайланы.

Заруцкийҙың дружинаһынан айырылып ҡалған кепәз Трубецкойҙың ҡушыуы буйынса кенәз Дмитрий Пожарскийға килгән атаман Внуков ополчениеның тиҙ арала Мәскәүгә килеп етеүен һораны.

Кенәз Пожарский, ни әйтергә белмәйенсә, аптыраны.

— Бындай мөһим мәсьәләне яңғыҙым хәл итә алмайым... Беҙгә кәңәшләшергә ваҡыт биреген.

— Яҡшы, кәңәшләшегеҙ. Мин һеҙҙең яуапты көтәм, • тине атаман Внуков, ризалашып.

Кузьма Минин менән икәүҙән-икәү аулаҡта ҡалғае, кенәз Пожарский һораны:

— Йә, ни эшләйбеҙ?

— Билдәле инде, Дмитрий Михайлович. Кенәз Трубецкой атаман Внуковты беҙгә хәйлә менән ебәреүе кен көүек асыҡ бит!

— Бында ниндәй хәйлә булыуы мөмкин?

•— Трубецкой беҙҙең планды асыҡларға ниәтләнә. Внуковтыц тәмле-татлы һүҙҙәренә ышанып, уға серҙе снсерго һис ярамай!

Атаман Внуков менән ҡабаттан осрашҡас, Трубецкой ҙың хәйләһен белмәмешкә һалышып, кенәз Дмитрий Пожарский бөтөнләй юҡ-бар нәмәләр хаҡында һөйләшсн ултырҙы.

— Ярар, кенәз Трубецкой һорағас, ҡаршылашып булмай. һеҙ ҡайта тороғоҙ, ә беҙ һеҙҙең арттан Мәскәүы барырбыҙ, — тип атаман Внуковты ҡәҙерләп оҙатты ли, Дмитрий Пожарский ратниктарына юлға сығырға әҙерләнергә ҡушты.

Әммә Пожарский командалығындағы ғәскәр атамап Внуков артынан эйәрмәне. Ярты юлға етеү менән бөтөнләй икенсе яҡка боролоп китте. Переяславль аша Троицкиға килде һәм ун дүртенсе августа Троицк монастыры менән Клементьев слободаһы араһындағы уйһылыкты туҡталды.

— Башҡорттар ҡамауындағы поляктар менән гетмоц Ходкеевичтың ғәскәренә ҡарағанда, үҙебеҙҙең казактар яуызлығынан ҡурҡам, — тине Кузьма Минин.

Казактар менән яҡшылап һөйләшһәк, бәлки, дуҫлашырға мөмкннлек булыр, — тине кенәз Пожарский.

Казактар ышанысһыҙ. Улар менән дуҫлашырға маташыуҙан файҙа сыҡмаясаҡ, Дмитрий Михайлович.

Ниңә улай тиһегеҙ?

Сөнки мин казактарҙы етерлек һынаным, Дмитрий Мпхайлович! Улар менән дуҫлашырға маташыу — хата! Ополчениела берҙәмлек юклығы ла нык ҡамасаулай. Һеүҙер туп-тура Мәскәүгә барырға теләй. Икенселәре, воевода Ляпуновты һәләк иткән кешеләрҙең яуызлығынан ҡурҡып, Мәскәүгә барыуҙан ҡырҡа баш тарта.

Әләйһә, казактар менән осрашып һөйләшергә ҡабул итмәйыҡ, — тине Пожарский.

Москәү эргәһендәге казактар гетман Ходкеевичты көтөү хаҡында ишеткәс, Дмитрий Пожарский кенәз Трунинды сакыртты һәм Мәскәүҙең Чертоль ҡалаһын һаҡларға үҙмргa ҡушты.

Цосиода кенәз Трунин отряды артынса, Пожарский меш Мшшн ғәскәре лә шул яҡка табан ыңғайлаиы, әүҙәрҙы моиахтар оҙатып барҙы.

Мәскәү юлды уҙғас, Мәскәү яғынан иҫкән талғын ел ирмы һаҫыҡ еҫте килтереп таратты.

Был еҫ яманлыҡ билдәһе, — тине кемдер.

Әйе, Мәскәүҙә эштәр шәптән һиҙелмәй, — тил ризалашты мкспсеһе.

Ратниктар күңел төшөнкөлөгөнә бирелделәр. Бәғзе берҙәр, иҡынлашып килгән бәлә-ҡазанан нисек ҡотолорға һөйләшмәһенсә, архимандрит ҡулындағы тәрене ҡоторонопһуғышыуын үбергә тотондолар.

Шул саҡ ел ағымы үҙгәрҙе, һаҫыҡ еҫ тә бөттө. Бошонған ратниктарҙың күңеле ҡабаттан күтәрелде һәм бер бер-береһе менән ҡыуаныс-шатлыҡтарын уртаҡлашҡан.

Христос беҙҙе ишетте!

Помереть за дом пречистой богородицы, православную хрпстпяпскую веру, — тип ҡыскырыша-кысҡырыша, ант ителдылар.

Көн кпскә наркты. Ел ағымы ла бер аҙ кәмене.

Москәүгә биш сакрым самаһы ара ҡалғас, Дмитрий Пожарский бер төркөм һыбайлыларҙы Арбат ҡалаһы тирәһенә ерҙәрҙе тикшереү өсөн ебәрҙе.

Үҙҙәрҙең ҡасан әйләнеп килеүен көтөп, ратниктар Ямлгаһы яры буйында туҡталды.

Разведкаға китеүселәр кйре әйләнеп килгәс, Трубецкой ҡушыуы буйынса атаман Внуков йәнә ополчениеһенә китте.

— Кенәз һеҙҙе үҙенә саҡыра, — тип ул Дмитрий Пожарскийға пакет тапшырҙы.

— Уның эргәһенә әле генә бара алмайым, эшем тығыҙ, — тип кенәз' Пожарский үҙенең ополчениеһындағы ратниктарҙы Арбат ҡапҡаһы тәңгәлендә урынлаштырҙы, дошманды Мәскәүҙән ҡыҫырыҡлап сығарырға тейешле отрядтар ҙа билдәләне.

Дмитрий Пожарскийға үсләшеп, воевода ТрубецкоП үҙенең казактарын ҡала стеналарының буйына-буйыиа теҙҙе.

Төн уртаһында Мәскәүҙән ҡасып сыҡҡан дворян улы кенәз Дмитрий Пожарский эргәһенә килде.

— Кенәз, поляктарҙан ҡурҡмағыҙ, — тине ул. — Мәскәүҙә поляктар күп ҡалманы. Үҙҙәренә тейешле эш хаҡы түләнмәгәс, уларҙың ете мендән ашыу һыбайлылары үткән аҙнала Польшаға ҡайтып китте.

— Мәскәүҙә поляктар һаман бармы? — Дмитрий Пожарский йөрәкһенде.

— Байтаҡ... — Дворян улы айырта ғына әйтергә ҡыйынһынды. — Сама менән ҡарағанда, әллә ни күп түгел. Польшаға ҡайтып киткәндәрҙең ярты һынан әҙерәгелер... Поляктарға ярҙамлашырға ниәтләнеп, Смоленский восио даһы Никита Струсь командалығындағы отряд та кнсо Мәскәүгә килде.

«Мәскәүҙә поляктар аҙ ҡалғанлыктан, гетман Ходкс евичтың ғәскәре беҙгә ҡаршы һөжүм башларға ҡурҡа икән», тигән һығымтаға килеп, Дмитрий Пожарский Мәс кәүҙән ҡасып килгән дворян егетен аҡса менән бүләклоио

—. Моһим мәғлүмәттәрең өсөн һидә рәхмәт!..

Егерме беренсе августа гетман Ходкеевичтың ғәскәре Поклон тауына яҡынлашты.

Гетман ғәскәренең юлын быуырға ниәтләнеп, Дмитрпй Пожарский үҙенең ополчениеһын Мәскәү йылғаһыныц • һул, ә Трубецкой ебәргән казактарҙы йылғаның ун яи ярына урынлаштырҙы.

Бер аҙ ваҡыт үҙғас, воевода кенәз Трубецкойҙыц һорауы буйынса, бер төркөм һыбайлы башҡорттарҙы Дмитрий Пожарский казактарға ярҙамға ебәрҙе.

Иртәгәһе көндөң ҡараңғы таңында, 1612 йылдың егерме икенсе августында Новодевичье монастыры тәңгәлендә Мәскәү йылғаһы аша сығып, гетман Ходкеевичтың ғәскәре Дмитрий Пожарскийҙың ратниктарын атакаланы,

Ратниктар артҡа сигенмәне, ныҡ торҙо. Алыш ҡыҙғын һайын, үлеш-ҡыйралыш та артты. Ер өҫтө үлеләр һәм яралылар менән шығырым тулды. Кискә табан урыҫтарҙың хәле мөшкөлләнгәндән-мөшкөлләнә барҙы. Енеүҙе һо

һатларға теләп, поляктарҙың ҡыҫымы көсәйҙе. Улар бер ынтылыуҙа хәлһеҙләнгән ратниктарҙы сырҡырата тапап-ҙеп артабан ябрылырҙар һымаҡ тойолдо Дмитрий Пожарскийға.

Үлеләр менән' яралылар шығырым тулы майҙанда һы-ООЛлыларға дошманға ҡаршы һуғышыуы ҡыйын икәнен пилап, уларға аттарынан төшөргә ҡушты кенәз. Ләкин поляктарҙың ҡыҫымы шунда ла кәмемәне, киреһенсә, хәүеф иртабап кесәйҙе. Үтә көсөргәнешле, хәл иткес минутта һәйкәүле ратниктарҙың нисек ҡырылыуын икенсе яҡан тыныс кыиа күҙәткән Трубецкойҙың казактары урындарынан ҡуҙғалманылар һәм һаҡрат һүҙҙәр менән дворяндарҙы орләпеләр.

Етлекмәгәндәр, кәбәк баштар!

Ратниктарҙы йүнләп һуғышырға ла өйрәтмәгәндәр!..

Грубецкойға буйһондоролған башҡорттар, казактарҙың тик тороуына, ратниктарға яҡламлашмауҙарына ризаһыҙлыҡ белдереп, ғауғалаша башланылар.

• Теге яҡтағылар ҡырылып бөтә бит!

- Былайтып тороуҙан ни файҙа?

Икенсе яҡағы ратниктарға яҡламлашайыҡ!

Казактар теләмәй бит!

Уларға ҡарамайыҡ, үҙебеҙ ҡуҙғалайыҡ!..

Мец башы, ир-егеттәрҙең талабына буйһоноп, атын һөрлаиы.

Ойҙә, минең арттан ҡалмағыҙ, — тип ҡысҡырҙы ла Гиеуға табан йән-фарман сапты.

Уиыц артынан бер аҙым да ҡалмаған һыбайлы ир-егеттәр, үҙҙәренә ҡамасауларға маташыусы казактарҙы НЫрып тырағай туҙҙырып ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, Мәс-Гоу Пылғаһы ярынан һикерҙеләр.

Цкспсе якҡа аттарын йөҙҙөртөп сыҡҡас та, туҡталып шрМпПыпса, улар ратниктарҙы аяуһыҙ үлтереүсе поляк-гарға пжарланып ябырылдылар.

Башҡорттарҙың ярҙамы һуғыш яҙмышын хәл ҡылды. Гетман Ходкеевич ғәскәре, Мәскәүҙәге поляктар эргәһенә \Гоплмайынса, Поклон тауына кире сигенергә мәжбүр пулды.

Шул саҡ воевода Алябьевтан сапҡын килде.

Алябьев командалығындағы дружина менән һыбайлы башҡорттар Кремлдең икенсе яғындағы поляктар төркөмөн гулыһынса ҡыйратыуы һәм уларҙың байрағын алыи орлгәс, Дмитрий Пожарский ҡыуанысынан ҡысҡырып ебәрҙе:

Ой, молодцы!..

Кспозго ҡушылып, башҡалар ҙа шаулашты.

Кис, алты йөз алтмыш поляк оҙатып барған дошмандың дүрт йөз ылауы Мәскәүгә үтеп ингән сакта, ике яктан да көслө атыш башланды. Ылауҙарҙы һаклаусылар тулыһынса ҡыйратылғандан һуң, поляктарҙың азык-түлеге воевода Алябьевтың дружинаһына һәм һыбайлы башҡорт егеттәренә эләкте.

Ҡытай-ҡалалағы поляктар аңғармаҫтан һөжүм башланы һәм егерме өсөнсө августа ҡамауҙы йырып сыҡты. Улар, Мәскәү йылғаһы аша сыҡҡан ыңғайы урыҫ төрмәһен һуғышып алып, байраҡтары ҡуйылған сиркәү эргәһендә урынлаштылар.

Гетман Ходкеевичтың ғәскәре лә, Поклон тауынан Доп монастыры эргәһенә яҡынлашҡас, Мәскәүгә үтеү өсөн Замоскворечьены файҙаланырға ниәтләнде.'

Гетманды нисек тә булһа Мәскәүгә уҙғармаҫҡа тырышҡан кенәз Дмитрий Пожарский, воевода Трубецкой менән берлектә, Замосковоречье яғына йүнәлде.

Егерме дүртенсе августың таңында һуғыш башлаиды. Гетман Ходкеевичтың көсөргәнешле ҡыҫымына сыҙаЛ алмайынса, кенәз Пожарский командалығындағы полк менән һыбайлы башҡорт яугирҙары сигенергә мәжбүр ителде, ә Трубецкойҙың казактары йылға аръяғындағы со борға табан ҡасты.

Клемент сиркәүе ҡыйығына ҡуйылған поляктарҙың байраҡы күренгәс, Трубецкой казактарының асыуы *ка* барҙы. Улар алға ташландылар һәм төрмә янындағы дошман ғәскәре төркөмөн йылға ярына ҡыҫырыҡланылар Яҡындағы һыбайлы дворяндар ярҙамлашмаҡанлыҡтан, кирегә сигенергә мәжбүр булдылар һәм иң аҡтык һүҙҙәр менән дворяндарҙы ҡәһәрләнеләр:

— Улар бай!

— Бер нәмәгә лә мохтажлыҡ кисермәгәс, дворяидор беҙгә ярҙамлашманы!

— Беҙ дошманға ҡаршы япа-яңғыҙ һуғыштыҡ!

— Беҙ ас-яланғас!

•— Пожарскийҙың дворяндарына беҙ ҙә яҙамлашмайыҡ!

— Дөрөҫ, улар дошманға ҡаршы үҙҙәре генә һуғышһындар, беҙ ҡатнашмайыҡ!..

Ғауғалашҡан казактар поляктарға ҡаршы һуғышыуҙы баш тартһа һөжүм тотҡарланасағын аңлап, Дмитрий Пожарский воевода Лопата-Пожарскийҙы сакыртты.

— Дмитрий, миңә келар Аврамий Тамшынды табып килтер! Ҡоторонған казактарҙы тынысландырып, уларҙы поляктарға ҡаршы һуғышырға күндерә алмаһаҡ, обеҙдең эштәр харап!

Аврамийҙы ҡайҙан табырға икән?

Белмәйем, уны ете ҡат ер аҫтынан булһа ла эҙләп табырға тырыш, — тине кенәз Пожарский.

Воевода Лопата-Пожарский келар Аврамийҙы ылауыишр эргәһендә эҙләп тапты. Ул ғибәҙәт ҡылыуҙан туҡтағас та, кенәз Дмитрий Пожарскийҙың йомошон тапшырҙы.

Казактар поляктарға ҡаршы һуғышыуҙан баш тартһа ышплап та, ополчениеның хәле мөшкөлләнәсәк, — тип и ҙар Аирамий Тамшын казактар яғына китте.

Казактар келар менән ризалашмайыраҡ:

Поляктарға ҡаршы артабан һуғышырға теләмәйбеҙ! Дворяндар үҙҙәре генә һуғышһын!

Улар — бай, беҙ — ас-яланғас!.. — тинеләр.

Келар Аврамий, кешеләрҙе талап йыйған табышты ергыға тотоноп, ас-яланғас, ялан аяҡ, ялан баш, йырһыҙ йортоҡ ышган-күлдәктә генә ҡалған казак ялпылаимың лолен аңлаһа ла, уларҙы дошманға ҡаршы һуғырға күндерергә тырышты.

Келарҙың өгөт-нәсихәтенә бирелеп, казактар тыныслылар һәм поляктарға ҡаршы ташландылар. Улар, ғәнә сыҡҡан ыңғайы, Клементьев төрмәһен һуғышылдылар.

Казактар ҡыҫырыҡлаған гетман Ходкеевичтың ғәскәре Москәүгә уткәрмәҫкә ҡушып, Дмитрий Пожарский ҡаларҙы юл ситендәге соҡор-саҡырлы урындарға һәм ыҡлы үләндәре араһына урынлаштырҙы.

Шер ваҡытында кенәз Дмитрий Пожарский эргәһенә ҡазма Мииин яҡынлашты.

Ксчюз Дмитрий Михайлович, миңә кешеләр кәрәк.

Ниңә?

Гетман Ходкеевичтың полктарын бер аҙ һелкетеп ҡарытеләйем!

Уңыш теләйем, әммә һаҡ бул, — кенәз Пожарский ҡазма Мшшнға кәрәкле кешеләрҙе һайлап алырға рөхсәт итте.

Кузьма Минин, ротмистр Хмелевскийҙың һәм Гәйнә ауыл Оашлығы Мөхәммәтҡолдоң һыбайлылары менән Ивановпша сыҡҡас та, дошман роталарына аңғармаҫтан тапланды.

Кырым ҡураһында ашап-эсеп, йәш ҡатындар менән күңел асып поляктар араһында ғауға ҡупты. Улар, һерән һалып қысҡырыша-қысҡырыша, гетман станына ҡасып барышлай, бер-береһен тапаны, иҙҙе.

Юлдың буйынан-буйына ҡуйылған Кузьма Мининдың һаҡсылары ла һыбайлыларға ярҙамлаша башлағас, по-

ляктар аяуһыҙ ҡыйратылды, биш йөҙ кешеһен юғалтҡан гетман Ходкеевичтың ғәскәре Воробьев тауҙарына табаи сигенергә мәжбүр ителде.

Дошманды артабан эҙәрләргә теләгән һыбайлы башҡорттарға Кузьма Минин тыныс ҡына әйтте:

— Кәрәкмәй, бер көн эсендә ике еңеү булмай!..

Иртәгеһенә Можайский юлы буйлап гетман Ходкеевичтың ғәскәре Мәскәүгә яҡынлашты. Ләкин улар ҡалағц үткәрелмәне. Ополчение ратниктары, казактар менән һыбайлы башҡорт егеттәре ҡыҫымына сыҙай алмайынса, һөжүмде туҡтатып, гетмандың ғәскәре кнрегә боролдо.

Кремлдәге һәм Ҡытай-ҡалалағы поляктар эргәһенә ло аҙыҡ-түлек тейәүле ылауҙар уҙғарылманы.

•— Мәскәүҙәге дошман ғәскәрен ҡыйратырға һәм Рәсәйҙе поляк-шведтарҙан азат итергә иң унайлы шарттар тыуҙы, —тип шатланды кенәз Дмитрий Пожарский.

Әммә кенәздең ышанысы аҡланманы.

Иң хәл иткес көсөргәнешле минутта Дмнтрий Пожарскийҙың ратниктары менән Трубецкойҙың казактары арнһында ыҙғыш тоҡанды.

Воевода Трубецкой, баяр исеменә лайыҡ оло дәрәжоли кеше булараҡ, кенәз Дмитрий Пожарский менән Кузьма Мининды үҙенә саҡыртты.

— йә, ни эшләйбеҙ, Трубецкойҙың әмеренә буйһонабыҙмы, әллә баш тартабыҙмы? — тин һораны Дмитрий Пожарский.

Кузьма Минин икеләнде.

— Белмәйем, кенәз. Ҡаңәшмә уҙғарыу һылтауы менән беҙҙе үлтертергә саҡырмай микән Трубецкой?

— Улайһа, бармайыҡмы?

— Бармайыҡ, — тине Минин.

Дмитрий Пожарский менән Трубецкойҙың үҙ-ара һыйышмауынан файҙаланып, черкестарҙың Вологданы ҡайтыуы, ә гетман Ходкеевичтың ғәскәре Кремлдәге һәм Ҡытай-ҡалалағы поляктарға аҙыҡ-түлек алып барырға әҙерләнеүе тураһында хәбәр алынды.

Уларҙы ҡалаға индермәҫкә тырышҡан кенәз Пожарскийҙың ҡушыуы буйынса, воеводалар Замоскворецкий ярымутрауының бер ярынан икенсе ярына тиклем ерго тирән соҡорҙар ҡаҙҙырттылар.

1612 йылдың егерме икенсе октябрендә казактар һөжүм башланы һәм Ҡытай-ҡаланы һуғышып алдылар

Кремлгә инеп бикләнгән поляктар, аҙыҡ-түлектарһаҡларға тырышып, барлыҡ баяр ҡатындарын ҡалиип сығарып ебәрҙеләр.

Баяр ҡатындарын кенәз Пожарский үҙе ҡаршылы

Уларҙы талауҙы кеңәз тыйыуын ишеткәс, казактар йәнә Цпжпрекпйҙы үлтерергә ҡырсындылар.

Баяр ҡатындары Мәскәү ҡалаһынан сығарылғандан Ь\ц дп Кремлдә ҡалған поляктар бер ай буйы иркен йәшәне. Аҙыҡ-түлектәре бөткәс, аслыҡҡа сыҙай алмайынса, баярҙар Пожарскнйға вәкил ебәрергә мәжбүр булдылар.

Камауҙағы поляктар менән бергә Кремлдә йәшәүсе баярҙар исеменән килгән вәкилдәрҙең ялбарыуына иғтибар итмәйенсә, кенәз Пожарский уларҙы асыу менән белдерҙе:

Хыяиатсыл баярҙарҙы ни өсөн йәлләргә тейеш мин? Ниңә дошмандан тапатырға ярҙамлашҡандары өсөнмө?

Поляктарға ярҙамлашыуыбыҙ өсөн хәҙер үҙебеҙ ҙә ғенәбеҙ, — тине баярҙар вәкиле бошонко тауыш менән.— Ни ҙе, зинһар, ғәфү итегеҙ, кенәз!

Чмптрий Пожарскнй ҡырыҫ йөҙө бер аҙ яғымланды.

Заярҙарҙың һорауы нисән ғибәрәт?

Беҙҙе казактарҙан талатмаһағыҙ, туҡмап үлтертмәһегеҙ пие!

Ҡамауҙан сыҡһағыҙ, халыҡҡа хыянатсылыҡ ҡылған иһығыҙға нисек ышанырға? —тип һораны Пожарский ныл ғына.

Лнтыбыҙға хыянат ҡылһаҡ, йәлләмәғеҙ, барыбыҙҙы ла үлем язаһына тарттырығыҙ, — тип Кремлдә ултырыуҙы баярҙар ҡул ҡуйған ҡағыҙҙы вәкил кенәзгә бирҙе.

Кун>ма Минин менән шыбырлашып ҡына кәңәшләште Дмптрий Пожарский Кремлдәге баярҙарҙы ҡала тынсыға сығарыу ваҡытын билдәләне.

Кромлдән сыҡҡан баярҙар Таш күпергә яҡынлаша башлнғас, казактар уларҙы таларға ашҡынды. Дмитрий НчЦфСкнйҙың ҡушыуы буйынса, баярҙарға ябырылған ҡазактарҙың юлына һыбайлы башҡорттар ҡаршы сыҡты.

Башҡорттар менән һуғышырға теләмәйенсә, уларҙы ергой орлой, казактар кирегә боролғас, кенәз Пожарский ергә пһуланы.

Ллаға шөкөр!..

Икенсе көндө Кремлдәге поляктар ҙа кенәз Пожарский моиоп килешеү төҙөргә һөйләшеү башланы.

Клмпуҙағы поляктарҙың һорауы буйынса төҙөлгән килешеүгә ҡул ҡуйылғас, кенәз Пожарский буйһондоролған поляктарҙың Будзило командалағындағы полкка бер көн дә ҡағылманы. Воевода Трубецкой ҡарамағына тапшырылған Струсь командалағындағы икенсе полк яугирҙары кгмактар тарафынан йырғыстарса туҡмалды, ҡайһы бер көндө хптта үлтерелде.

Әсиргә алынған гетыан Струсь менән баяр Андронов-
тан һорауҙы воевода Трубецкой үҙе алды. Батшанын иҫ-
ке бүркен, ҡазнаһын, алтын-көмөшөн, алтын менән би-
ҙәлгән һауыт-һабаһын поляктарҙың ҡайҙа йәшереүен бор
нисек тә әйттерә алмағас, воевода Трубецкой гетмак
Струсь менән баярҙы язалап үлтертте.

Кенәз Пожарский Трубецкойҙың ҡыланышына ҡыҫыл
маны. Сиркәүгә инеп ғибәҙәт ҡылғандан һуң, ДмитрнЛ
Пожарский менән Кузьма Минин дошмаидан тулыһынсы
таҙартылған Кремлгә инделәр.

Бөтә ерҙә бысраҡ, сүп-сар өйөмө. Өйҙәрҙең стеналары
емерек. Батша һарайындағы тәхет ҡыйратылған, сиркоү-
ҙәге байлыҡтарҙан бер.ни ҡалмаған...

Шундай күңелһеҙ, эс бошорғос күренеш хөкөм һөрөүс
• ыя ҡарамаҫтан Дмитрий Пожарский менән Кузьма Мшшн
Кремлдең поляктарҙаи таҙартылыуына сикһеҙ шат иис
ләр.

— Рәсәй именлеге наҡланһа, һәммәһе төҙәтеләсәк һом
байлыҡ та йыйыласаҡ, — тине кенәз Пожарский.

Дмитрий Пожарский менән Кузьма Минин артыиоп
Кремлгә ябырылып ингән ратниктар һәм казактар, үҙ-ара
буталышып, бер-береһен оло еңеү менән ҡотланылар.

Сиркәүҙәге еҙ ҡыңғырауҙар даң-доң геүләргә тотондо...

Урыҫтарҙың азатлыҡ яулауына башҡорттар ҙа ихлао
ҡыуанды.

Поляк-шведтарға ҡаршы һуғыш башланғандан бирле
ныбайлы башҡорт егеттәре тәүге тапҡыр бөтәһе берә
йыйылғас, көндөҙгө намаҙҙы уҡынылар.

Намаҙҙан һуң бәғзе берәүҙәр аттары менән аҙаплаи-
ды. Икенселәре урамдағы сүп-сарҙы яндырыш, аш бешер-
ҙе йәки сәй ҡайнатты.

Вак-төйәк эштәремәи бушағас, һәр ырыу кешелэр
айырым-айырым тупланып, бер-береһе менән яңылыҡтар-
ҙы уртаҡлашты. Кемдәрҙең ҡайҙа һәләк булыуын, тапшии-
тары яҙмышына бәйләнешле һуғыш вакытындагы Х.м-
ваҡиғаларҙы һөйләнеләр, тыуған төйәктәрен, ҡатыидпрЬ
менән бала-сағаларын иҫкә алдылар.

Ҡайтыу көнө яҡынлашыуына ҡыуанып бөтә алмпгмП
Тамъян ырыуы башлығы — волость старшинаһы Төлкөсу-
ра бей ҡурайсылар менән йырсыларға эйәк ҡаҡты.

— Эй, егеттәр, тел бисләләнеп ултырғансы, «Бешәтәк»
те йырлағыҙ әле!

Аяҡ салып ултырған ҡурайсы егет еҙ ҡурайын теипч
ре араһына тейҙереү менән «Бешәтәк» көйө талғын гә
ағылды һәм, шул көйгө ҡушылып, Төлкөсура бей йырлй
ебәрҙе.

Бешәтәкәй тигән, ай, ҡарурман,
Күләгәһе китмәй ҙә төш етмәй,
Күп ерҙәрҙә йөрөнөм, күпте күрҙем —
Тыуған-үскән ергә һис етмәй.

Атка ғына менһәң, мен шундайын —
Киң күкрәкле, ҡалҡыу башлыһын;
йәрҙе генә лә һөйһәң, һөй шундайын •—
Киң күңелле, ҡыйғас та ҡашлыһын.

Юл тар булһа, ҡушлап та сабырбыҙ,
Баш һау булһа, дуҫтарҙы табырбыҙ...

Төлкөсура бей шымғас та, Хәбибназар үҙе сығарған йырҙы йырланы:

йырла ла ғына тиһәгеҙ, мнн йырлайым —
йырҙы һатып алмайым аҡсаға;
Һеҙҙең генә кеүек дуҫ-нштәрҙе
Сәсеп үҫтереп булмай баҡсала.

Ерәнсәкәй менән Көрәнсәйҙең
Тау итәгендә төйәккәйе;
Утта ла ғына янмаҫ, һыуға батмаҫ
Аҫыл егеттәрҙең һөйәккәйе.

Арыҫлан да кеүек, ай, алдырмаҫ,
Ҡасыр ер(е)кәйҙәре таш булһа;
Һыр бирмәҫ тә егет, аһ, хур булмаҫ,
Ғәзиз башкайҙары ла һау булһа.

Түңәрәккәй күлдә, ай, күк суртан,
Күлкәйҙәре ҡороп, үлмәһен;
Күп нужалар күрҙе беҙҙең баштар,
Берәй рәхәт тә күрмәй үлмәһен...

Ырыуҙаштары менән уйнап-көлөп күңел асҡан сағында |плкосура менән мең башлыҡтарын кенәз Дмитрий По-ɹ прский үҙенә ҡунаҡҡа саҡырҙы.

Ппшҡорт бейҙәре тиҙ арала ҡырынып, үҙҙәре менән бергә йөрөткән өр-яңы кейемдәрен кейҙеләр ҙә кенәз По-ɹ прскпй менән Кузьма Минин йәшәгән Арбаттағы оло бүлмәгә инделәр.

Дошманды еңеүгә арналған мәжлестә ҡатнашыусң нчсподаларҙы, отряд командирҙары менән башҡорт бейҙә-|ч II кснәз Дмитрий оло байрам менән ҡотланы.

Дуҫтарым, бөгөнгө көндән башлап Мәскәү дәүләте, бөтә Росәй иле сит ил баҫҡынсыларынан таланыуҙан, йә-ншрлэнеүҙән ҡотолдо һәм азатлыҡ яуланы, — тип тост кү-ɹ ргән сағында кенәз Дмитрий Пожарскийҙы воевода Тру-|ннҡкоГ| үҙенә саҡыртты.

Якии кешеләре менән бергә ултырып күңел асырға тотонгән Дмитрий Пожарскийҙың кәйефе боҙолдо. «Тру-

Трубецкой, баяр булараҡ, үҙен'еңеүсе хоҡуғын яулаған берҙән-бер етәксе итеп күрһәтергә маташа, ахырыһы. Әйҙә, бик теләгәс, ҡупырынһын. Дошманды еңеүҙә кем ниндәй елөш индереүен тарих күрһәтәсәк».

Кремлдәге Борис Годунов батшаның һарайында ҡунаҡ йыйған Трубецкой Пожарскийҙы дуҫтарса ҡаршыланы.

— Ҡәҙерле Дмитрий Михайлович, зинһар, түргә үҙ, — тине ул «һин»гә күсеп.

— Бүтән ҡунаҡтар ҡайҙа? — тип һораны кенәз Пожарский оло, иркен бүлмә уртаһындағы һауыт-һабаның бер нисә кешегә генә тәғәйенләнеүенә ғәжәпләнеп.

— Бүтәндәрҙе саҡырманым, Дмитрий Михайлович. Ошо тантаналы көндө һинең менән бергә икәүҙән-икәү генә байрам итергә теләйем!

— Еңеү һәммәһенә оло ҡыуаныс, Дмитрий Тимофеевич, воеводалар менән бергә-бергә байрам иткәндә күңеллерәк булыр ине, — тип кенәз Пожарский үкенес белдерҙе.

Трубецкой, уның менән ризалашмайынса, ҡул һелтәис.

— Юҡ өсөн, зинһар, ҡайғырма, Дмитрий Михайлович! Мин һинең менән икәүҙән-икәү генә байрам итергә һәм ҡайһы бер мәсьәләләр буйынса аулаҡта кәңәшләшергә теләйем!

Уларға аулаҡта ултырып байрам итергә тура килмәно. Бер-береһен еңеү менән ҡотлап беренсе тостарын эскән саҡта, урамда тауыш ҡупты.

— Урамда ниңә аҡырышалар? — тип һораны Трубецкой ишек алдындағы һаҡсынан.

һаҡсы ни әйтергә белмәй аптырап торғанда коридор буйлап йүгерә-атлай килгән офицер хәле бөтөп әйттс:

— Ваше превосходительство, казактар жалованье түләүҙе талап итә! Жалованье түләнмәһә, бөтә түрәләрҙо ҡырабыҙ, тиҙәр.

— Баш-баштаҡлыҡты туҡтатырға!

— Дворяндар казактарҙы көс-хәлгә тыйнаҡландырҙы, Ваше превосходительство! Шул саҡта бола сыға яҙҙы Кремлдәге башкорттар дворяндарға ярҙамлашмаһа, ҡурҡыныс әле лә бөтмәгән булыр ине...

— Казактарҙы болаға ҡотортоусыларҙы миңә алып кплергә, — тине Трубецкой.

•— Тыңлайым, Ваше превосходительство! — Офнцер шәп-шәп атлап кирегә табан ыңғайланы.

Өс-дүрт минут та уҙманы, офицер ишек алдында йгны күренде.

— Казактарҙы болаға ҡотортоусы тотолдомо? — тип һораны Трубецкой.

-- Иикак нет, Ваше превосходительство! — Офицер, шпорлы итек үксәләрен бер-береһенә зыңкылдата һуғып, чсесть бнрҙе. — Бында ниндәйҙер баяр балаларын тотоп кмлтерҙеләр. Уларҙың һөйләүенә ҡарағанда, Польша короле оло ғәскәр менән был якҡа килә икән!

Трубецкой менән Пожарскийға еңеүҙе байрам итеү кайгыһы бөтте.

-- Мәсьәләне асыҡлау өсөн разведка ебәрергә кәрәк,— • тинс Дмитрий Пожарский.

- Дөрөҫ, Дмитрий Михайлович!..

Трубецкойҙың ҡушыуы буйынса киткән разведчиктар кнЭС әйләнеп килгәс, баяр балаларының һүҙе дөрөҫләнде.

Москәүҙәге поляк-шведтарҙың уңышһыҙлыҡҡа осрауы сәбәбен Варшавала королгә япһарғандар икән. Сөнки король Сигизмунд Мәскәүҙәге уңайлы шарттарҙы файҙаланмаган, Кремлдәге поляктарға тейешле ярҙам ойоштормаган, һәнәһе...

Поляктарҙың ығы-зығы ҡубарыуынан ҡурҡкан Сигизмунд, бөтә ғәйепте үҙ өҫтөнә алып, Варшаванан походҡа сыҡкан. Вильноға еткәс, артта ҡалған ғәскәрен көткән, әммә һуғышсыларға түләргә ҡаҙна аҡсаһы булмағанлыктан, уның ғәскәре Варшаванан сыҡмаған.

Король Сигизмунд, немецтарҙы яллап ойошторған НнР полк менән бүленгән юлын дауам иткән.

Юлда Смоленск һыбайлылары немец полктарына ҡушмлгаи. Королдең жалованье түләрҙәй аҡсаһы юҡ икәнлеген белгәс, улар айырылып ҡалған.

Король Сигизмунд, үҙенә ярҙамға килгән гетман Ходкевичтың ғәскәре менән берлектә урыҫтарҙың Погорелое Продище ҡалаһын ҡамауға ала. Ҡалалағы кенәз воевода Юрий Шаховский королдең ултиматумын кире ҡаҡҡан һәм ошондай яуап менән сикләнгән: «Башта Мәскәүгә, бар Москәүҙе һуғышып алһаң, беҙ һиңә буйһонасаҡбыҙ...»

Мәскәүгә барам, ә һин минең арттан эйәр, — тип Продль артабан юлланған...

Опгизмундтың Мәскәүгә якынлашыуын ишетеп, Трубецкой менән Дмитрий Пожарский ҡайғыға ҡалды. Сөнки поляктарҙан Мәскәү таҙартылыу менән ратниктар өйҙәрегә таралышып бөткәйне, ә казактарға ышаныс юҡ.

Мәскәүҙә бикләнеп ултырыуҙан башҡа әмәл ҡалмаһа, — тине Трубецкой.

Дмитрий Пожарский:

Аҙыҡ-түлекһеҙ Мәскәүҙә нисек бикләнеп ултырмаҡ Продк? Ундай фекер зарарлы, — тине.

Башҡаса ни эшләргә? — Ҡото алынған Трубецкой ипырапы.

— Башҡорттарҙы файҙаланырға кәрәк!

— Улар ҡайтып китмәнеме ни?

— Юҡ, ҡайтып китергә әҙерләнәләр генә, — тип Дмитрий Пожарский башҡорт түрәләрен үҙенә саҡырып әңгәмәләште.

Башҡорт отрядтарын воевода Жолкеевскийҙың дружинаһына ҡуштылар ҙа, Волоколамскиҙы ҡамауҙа тоткап Польша короле полктарына ҡаршы һуғышырға оҙаттылар.

Йән-фарман сабышып килгән һыбайлы башҡорттар менән казактар төркөмө яҡынлашыуын ишетеп, король Сигизмунд Волоколамск ҡалаһынан ашығыс сигенә башланы.

Башҡорттар, королдең полктарынаң ҡалышмайынса, уларҙы өҙлөкһөҙ эҙәрләне.

Польша короленә ялланған полктарҙың ҡыйратылыуы, пҫән ҡалған немецтарҙың күбеһе туңып үлеүе һәм аслыҡтан ҡырылыуы тураһында хәбәр алғас, кенәз ДмитриП Пожарский Трубецкойға барҙы.

— Дмитрий Тимофеевич, Польша короле көс-хәлгә ҡасып ҡотолған. Ваҡытлыса урынлашҡан тыныслыҡты фаһ ҙаланмаһаҡ, аҙаҡтан йәнә үкенәсәкбеҙ һәм...

— Нимә тәҡдим итәһең? — тип Пожарскийҙы Трубецкой бүлдерҙе.

— Башҡорттар тыуған иленә ҡайтып киткәнгә саҡлы беҙгә батша һайларға кәрәк, Дмитрий Тимофеевич!

— Ниңә ашыҡтыраһың, Дмитрий Михайлович?

•— Казактарға ышаныс юҡ. Улар бола күтәрһә, батша һайларға мөмкинселек булмаясаҡ.

Пожарскийҙың хаҡлы икәнен аңлап, Трубецкой уйт ҡалыбыраҡ торҙо.

— Бындай яуаплы, үтә мөһим эште нисек ойошторп быҙ?

— Ҡалаларға грамоталар менән сапҡындар ебәрсп. иң әүәл батша һайлаясаҡ кешеләрҙе тоҫмаллау кәрок, Дмитрий Тимофеевич.

— Аңлашыла, Дмитрий Михайлович... Ә батша итеп кемде һайларға?

— Батша итеп һайланасаҡ кешене аҙаҡтан табырбыҙ, — тине Дмитрий Пожарский. — Башҡорттар ҡайтып китмәҫ элек беҙгә ойоштороу эшен тиҙләтергә кәрәк... Батша һайлауҙы һуҙһаҡ, инәһеҙ ҡалған умарта ҡорто шикелле, кешеләрҙе берләштереҙәй көс тарҡаласаҡ һәм ҡп баттан бәлә-ҡазаға тарығасаҡбыҙ, Дмитрий Тимофеевич

—• Аңлашыла, Дмитрий Михайлович, аңлашыла, — тип Трубецкой теләр-теләмәҫ ризалашты.

Трубецкой менән һөйләшеп килешкәс тә, Дмитрий Пожарский иң яҡын ярҙамсылары менән дуҫ-иштәрен йыйып коцошләште һәм ҡалаларға сапҡындар ебәрҙе.

Ҡалаларҙағы йыйындарҙа һайлáнып, батша ҡуйыр кешслор Мәскәүгә килгәс, кемде батша итеп һайларға белмәйенсә, аптырашып, оҙаҡ баш ваттылар. Сөнки сит илдәрҙән батша итеп саҡырыҙай йүнле әҙәм табылманы. Польша урыҫтарҙың ҡан дошманына әйләнде, Литва күп мортобо Мәскәүҙе таланы, швед короле хәйлә менән НижцпП Повгородты баҫып алды...

Дмнтрий Пожарский батшаны урыҫтар араһынан һайларға тигән тәҡдим индергәс, үҙ-ара бәхәс, ҡыҫҡырышлаш ҡупты. Йыйында ҡатнашыусы һәр баяр үҙе батша булырға, йәки үҙенең иң яҡын кешеһен Рәсәй батшаһы итеп ҡуйырға теләне. Шунлыҡтан мәғәнәһеҙ тарткылаш өс аҙна буйы барҙы.

Оҙр көндө соборға [1] Галичтан сапҡын килде. Сапҡын ҡултергән ҡағыҙға күҙ йөрөтөп сыҡты ла Дмитрий Пожарский йыйында ҡатнашыусыларға мөрәжәғәт итте:

Беҙгә, элекке батшаға иң яҡын кешене — Михаил •Псдорович Романовты Рәсәй батшаһы итеүҙе һорап, Галичгаи сапҡын ебәргәндәр.

Умың хаҡында һинең фекерең нисек?

Дмнтрий Пожарский, фекер туплап, оҙаҡ өндәшмәй торҙо.

Мннецсә, Михаил Федорович Романовтан да яйлырак ксшене табыуы мөмкин түгел.

Ооборҙа ултырыусылар, ризаһыҙлыҡ белдереп, ҡысмрышты:

Упдай әҙәмде белмәйбеҙ һәм белергә лә теләмәйбеҙ!

Күрмәгән-белмәгән кеше ниңә беҙгә?

Ундай грамотаны бында кем килтергән?

Иң алғы рәттә ултьфған сапҡын, Дмитрий Пожарский • ҡаш үҙенә һүҙ биреген көтмәйенсә, урынынан һикереп торҙо.

Ул грамотаны мин килтерҙем! Элекке батшаларҙың ҡәүме Михаил Романовтан да йүнлерәк кешене таба алмаясаҡһығыҙ!

Галич халҡы исеменән килгән егеттең фекерен Дон пикгары атаманы ла хупланы:

Михаил Романовты батша итеп һайлайыҡ!

Ул кешене һин беләһеңме? — тип һораны Трубецкой

Беләм! Уның хаҡында гел яҡшыны ғына һөйләйҙ

---

[1] *Собор* — боронғо урыҫтарҙың йыйылыш урыны.

— Ниндәй кеше ул Романов?

— Михаил Федорович Романов нәк батша булырҙай кеше, — тине Дон казактары атаманы.

Уның тәкдименә йыйылышта ҡатнашыусы башҡа атамандар ҙа ҡушылды:

— Михаил Романовты батша итеп һайлайыҡ!

— Романовтан да яҡшыраҡ кешене таба алмабыҙ!..

Баярҙар, атамандарҙың фекере менән иҫәпләшмәйенсо, батша һайлау мәсьәләһен башҡа вакытҡа кисектереп торорға булдылар.

— Халыҡ менән кәңәшләшергә кәрәк. Халыҡ ни әйтһо, шул булыр, — тип Трубецкой, баярҙар исеменән, йыйынды бүлдереп торорға тигән тәкдим индерҙе.

Йыйында ҡатнашыусылар таралышты.

Күпселектең Михаил Романовты батша тәхетендә күрергә теләүе асыҡланғас, соборҙа вәкил булып һайланған Рязань архиепископы Феодосий, Троицкий келарм Аврамий Галицын, Новоспасский архимандриты Иосиф менән баяр Морозов кешеләр йыйылған Ҡыҙыл майҙанға барҙылар.

— Христиандар, һеҙ кемдең Рәсәй тәхетендә ултырыуын теләр ине геҙ? — тип һораны Рязань архиепископы Феодосий.

Ҡыҙыл майҙан шығырым тулы халыҡ дәррәү яуап ҡайтарҙы:

— Беҙ Михаил Федорович Романовтың батша булыуын теләйбеҙ!

— Беҙ тик уға ғына ышанабыҙ!..

Ҡалаларҙа йәшәүселәр менән Мәскәү халҡының фекере берҙәмлеге мәсьәләне тиҙ хәл ҡылырға ярҙамлашты, 1613 йылдың егерме беренсе февралендә Михаил Федорович Романов Рәсәй батшаһы итеп һайланды.

XXVI

Батша булып һайланғандың икенсе аҙнаһында Михаил Романов тыуған төйәктәренә ҡайтырға әҙерләнгән бшмҡорт ғәскәре башлыҡтарын һарайына йыйҙы.

— Поляк-шведтарҙан Мәскәүҙе азат итеүҙә ҡатнашыусы башҡорттарҙың батырлығын бер ҡасан да онотмпшсаҡмын һәм урыҫтар менән башҡорттарҙың дуҫлығын арттабан нығытасаҡбыҙ, — тиҙ? ул башҡорттарға рәхмәт белдерҙе.

Батша һүҙенә яуап итеп, башҡорттар исеменән Тамъян ырыуы башлығы Төлкөсура бей сығыш яһаны.

— Государь, урыҫтарҙын иң оло йылғаһы Изел, ә Ағиҙел. Ағиҙелдең Изелгә ҡушылыуы ла бер кемгә сор түгел. Изелгә барып ҡушылған Ағиҙел кеүек, башКорттар ҙа Рәсәй дәүләтенә үҙ теләге менән ҡушылды...

Төлкөсураның сығышын бүлдереп, кәңәшмәлә ҡатнашыусы баярҙар һөйләнде:

— Шәп сағыштырыу!

— Эйе, Ағиҙел Изелгә ҡушыла!

— Башҡорттар ҙа, Изелгә ҡушылған Ағиҙел кеүек, үҙҙәре Рәсәйгә ҡушылырға теләк белдерҙе!

— Урыҫ менән башҡорт дуҫлығы тәбиғи бит!..

Тауыш баҫылыуын көтөргә теләмәйенсә, Төлкөсура бей бүленгән сығышын дауам итте:

— Дөп-дөрөҫ!.. Рәсәй менән Башҡортостан дуҫлығы, һиыплап та, тәбиғи. Урыҫ дәүләтенә бер кем дә көслөп ҡушмаған башҡорттарҙы. Минең олатайым Шәғәле Шакшы бей менән ошонда ултырыусы ырыу башлыктарының олаталары, Башҡортостанды Рәсәйгә ҡушыуҙы һорап, Циии Грозныйға үҙҙәре барған. Аллаға шөкөр, Рәсәй патшалығына ҡушылып, отолманыҡ. Урыҫтар ярҙамында көн изатлыҡ яуланыҡ һәм Рәсәй илен уның дошмандарынан һаҡлауҙы ла башҡорттар үҙҙәренең изге бурысы тип һанай. — һәм Төлкөсура урыҫтарҙы азатлыҡ яулауы менән ихлас ҡотланы.

Коцәшмәлә ҡатнашыусылар йәнә ҡысҡырышты:

Ағиҙел Волгаға ҡушыла!

Башҡорттар менән дуҫлыҡ, дуҫлыҡ, дуҫлыҡ!..

Рәсәй дәүләте ҡазнаһынан бер нәмә лә талап итмәй, ә киҫтә, аҙыҡ-түлеге һәм ҡоралы менән урыҫ ғәскәре сафында хеҙмәт итеүсе башҡорттар, ысынлап та, бер ниндәй компокот тыуҙырмай бит! Казактар, киреһенсә, кеше талап алыусы байлыктары менән жалованиеларын эсеп бөтәләр һәм ҡыҙы-зыҡы ҡубаралар.

Башҡорттарға бүләктәр таратып сыҡҡас, йәп-йәш батша ҡарамлы йылмайҙы.

Миндә йомошоғоҙ юкмы?

Өлегә һеҙҙә йомошобоҙ юҡ,— тине Төлкөсура бей.— Тик бер гепә үтенесебеҙ бар, Государь. Өфө воеводаһы итеп Фодор Андреевичты ебәрһәгеҙ ине.

Михаил Романов бүлмәлә ултырыусыларға күҙ йүгертеп сыҡты.

Воеиода Алябьев ҡайҙа?

Мин бында, Государь, — тип иң арткы рәттә ултырган ҡара һаҡал-мыйыҡлы йәш егет һикереп торҙо.

Өфөгә воевода булып барырға ризаһыңмы?

Так точно, Государь! Өфө воеводаһы итеп ебәрһәгеҙ, ышанысығыҙҙы аклаясаҡмын. Сөнки башҡорттар ме-

Һәм мин яҡшы танышмын һәм беҙҙең дуҫлыҡ артабип нығыясаҡ.

йәш батша, воевода Алябьев менән теләктәшлек бел· дереп, йылмайҙы.

— Килештек! Нижний Новгородҡа ҡайтып эштәрегеҙҙе бөтөрөгөҙ ҙә, Өфөгә күсеп барығыҙ.

— Тыңлайым, Государь, — тип Алябьев честь бирҙе.

Михаил Романов менән осрашҡандың икенсе көнөида башҡорт яугирҙары тыуған төйәгенә табан юлланды.

Улар Башҡортостанда йәһәтерәк ҡайтып етергә ашҡынды.

Төлкөсураның өйөнән сығып китеүенә биш йыл самаһы уҙып та киткән. Был ҙә бер ғүмер бит. Ғаиләләге барлыҡ ҡыйынлыҡтар ҡатыны елкәһендә. Ул, бахырҡай, Төлкесураның ҡасан ҡайтыуын көтә торғас, зар-интизар булғандыр инде. Ярай әле, исмаһам, ул иҫән-һау ҡайтып бпра. Ғәзиз башҡайҙары сит ерҙәрҙә ятып ҡалған ырыуҙаштары, дуҫ-иштәре, элек бөтөнләй таныш булмаған ир-егеттәр йәл. Улар Урал тауҙарын, өҙөлөп һөйгән кәләштәрен, ҡатыҥдары менән бала-сағаларын бер ҡасан да күро алмаясаҡ!..

Төлкөсураның уйҙарын бүлдереп, кемдер «Ғилмиязә»ны йырлап ебәрҙе.

Һаҡмар һыуы аға ҡибла табан,
Урал тауы буйлап, көн битләп.
Илкәйемә лә, шул, ҡайтыр инем,
Аяҡтарым талһа, имгәклән.

Йән тетрәткес йырҙың икенсе өлөшөнә Төлкөсура менән бүтәндәр ҙә ҡушылды:

Алыҫ ерҙән балҡып, ай, күренгән
Урал микән, әллә көн микән?
Сит илдәрҙә уҙған ғүмеремдең
Бер көнкәйе әллә йыл микән?

Ауыл осондағы өй эргәһендә йөрөгән тулкөнө күрҙө, Төлкөсура бик ғәжәпләнде.

— Кешеләрҙән нисек ҡурҡмай икән, — тип уғып ке· решкә һалғайны, Хәбибназар уның терһәгенә ҡағылды.

— Ҡуй, атма!

— Иәлләйһеңме?

— Уны атып алыуҙан ни файҙа? Яҙғы тире барыбер эшкинмәй, ҡойола бит!

Төлкө һыбайлы егеттәрҙең яҡынлашыуынан ҡурҡманиҙ Осло ҡолактарын ҡарпайтып, кешеләргә ҡарап торҙо торҙо ла, епшек ҡарҙы көлтә ҡойроғо менәнепһеперен, әрәмәлек яғына йүнәлде.

Тамаҡ тамуҡҡа төшөрә, ти. Урманда аҙыҡ таба алмағас, төлкө лә ауылға эйәләшкән!..

Москәүҙән сыҡҡаны бирле, бер ерҙә лә нығлап ял итмәнеләр. Унда-бында ҡунаклап аттарын ашлттылар ҙа, йылғалар боҙо ҡуҙғалмаҫ элек өйҙәренә ҡайтып етергә Л.Оиландылар.

* * *

Алдан хәбәр итмәгәнлектән, тамъян кешеләренең яуҙан ҡайтыуы көтөлмәгән ҡыуаныс булды.

Төлкөсураның малайҙары ла, сыр-сыу килеп ҡысҡырышҡа-ҡысҡырыша, әсәләре эргәһендә үрПәләнделәр.

Атай яуҙан ҡайтҡан!

Атай, күстәнәс алып ҡайттыңмы?..

Төлкөсура уландарын таныманы. Биш йыл эсендә улар ҡуйға бнҡ нык үҫкәйне, төҫкә-башҡа ла үҙгәргәндәр. Иң оло улы Ҡәнзәфәр ысын егеткә оҡшаған. Уның танауы өҫтүгенә мыйығы беленә башлаған. Ике уртансы улы, Баһаһ меән Шәкирйән, ағаларынан буйға байтаҡҡа ҡалмаһыраҡтар. Төлкөсура походта йөрөгәндә тыуған иң кеүсе улы Садир сабый төҫөн һаман юғалтмаған. Ул әсәһенең Ьыцар беләгенә ҡуш ҡуллап йәбешкән дә, атаһы үрһенә барырға теләмәйенсә, торған урынында тыпырлаһа.

Осәй, мин ҡурҡам! Әйҙә, әсәй, китәйек!

Ул бит һинең атайың. Атайывдан ҡурҡырға ярайһың, — тип әсә Садирҙы әүрәтте.

Оло малайҙарының ҡуйынынан айырылып, Төлкөсура ике кәсе улын үҙенә саҡырҙы.

Килсәле, бәләкәсем, кил!

Сиоый, өндәшмәйенсә, ятһыраған йәнлек балаһы шикелле калтырана-ҡалтырана, әсәһенең янбашына йөҙө менән ыҡайланды.

Улайтма, улым, яуҙан иҫән-һау ҡайткан атайыңдан Л.иперенеү ярамай, — Сәхипъямал ҡат-ҡат әйткәс кенә, Садир атапы торған яҡҡа ыңғайланы.

Гялкосура малайҙарының хәлен һорашырға, танһығы килгәнсе уларҙы һөйөргә лә өлгөрмәне, уны күрергә тип килгән куршеләре йыйыла ла башланы.

Төлкосура алып ҡайткан йыуаса менән хуш еҫле сәй менән цо. күршеләре оторо иркенләне.

Цртонәи бирле танау-мороном ҡысыуы ошо күстәнәс ишарга булған икән!

— Эйе, ошолайтып ултырыуы үҙе бер ғүмер бит!..

Сыуалдан төшкән ут яҡтыһында ултырып төн уртаһына саҡлы сәй эсеүҙән тыйыла алмаған кешеләр Төлкосураның яуҙаштары поляктарға ҡаршы нисек һуғышыуҙарын, яңы һайланған батшаның яман-якшымы икәнлегеи һорашып белергә тырыштылар, үҙҙәренең тормоштарыи да ентекләп һөйләнеләр.

Төн уртаһы уҙыуын белгертеп тәүге әтәстәр ҡысҡырыша башлағанда ғына ҡунаҡтар берәм-һәрәм таралышты, һүҙгә әүәҫ ололарҙың ҡасан ҡайтып китеүен көтөп ала алмаған малайҙар күптәнән йоҡоға сумғайны.

Төлкөсура уятырға булғайны, ҡатыны тыйҙы.

— Кәрәкмәй, йоҡоларын бүлдермә..

— Беҙ ҙә йоҡларға ятабыҙмы инде?

— Әҙерәк һөйләшеп ултырайыҡ, — тип Сәхипъямил былай ҙа ҡыҙыу сыуалға утын өҫтәп яҡты.

— Минһеҙ ыҙаланыңмы?

— Малайҙарым эшкә ингәндәр бит инде. Улар ярҙамлаша башлағас, артыҡ ыҙаламаным.

— Аллаға шөкөр, имен-аман йәшәгәс. Артабан да малайҙарымдың бәхетенән яҙҙырмаһын Аллаһы тәғәлә. Ак батша башҡорттарҙы бик тә ихтирам итә. Өфөгә воеиОЛп итеп минен дуҫымды ебәрергә ризалашты. Алябьев килһә, Себерҙәге баш-баштаҡ ҡыланыштарға ла сик ҡуйыласаҡ. Башҡорттар үҙҙәренең ер-һыуҙарына, урмандарына хужи булып, әүәлгесә иркен йәшәйәсәк.

— Өфөгә ебәреләсәк урыҫ һине якшы беләме?

— Ул минең иң якын дуҫым икәнлеген әйттем бит!

Атаһы менән әсәһе шыбырҙашҡанды ишетеп, Ҡәнзәфәр урынынан торҙо.

— Атай, яңы батшаны һин ысын күрҙеңме?

— Күрҙем, улым, күрҙем.

— Ак батша ҡартмы?

— йәп-йәш, уға ни бары ун алты ғына.

— Ун алты йәшлек кешене батша итеп ҡуйырға ярпСмы ни? —Ҡәнзәфәр аптыраны.

— Элгәрге батша нәҫеленән булғас, ярай.

— Олатайың үлгәндән һуң, йәп-йәш көйөнә атайыи ырыу башлығы булып ҡалды бит, — тип йөпләне Сәхипъямал.

— йоҡларға ваҡыт түгелме инде? — тип һораны Төлкөсура.

— Ваҡыт, күптән ваҡыт, — тип Сәхипъямал урыпдһ тың буйынан буйына балаҫ йәйергә тотондо.

XXVII

Төлкөсураның өмөтө аҡланманы.

Пнжний Новгородҡа ҡайтып барышлай, үпкәһенә һалкын тейеп воевода Алябьев үлеү сәбәпле, уның урынына Пфо иоеводаһы итеп Вельяминов тигән кеше ебәрелде. Ул, Пфого кнлгәс, Башҡортостандың дүрт даруға сиктәрен һәм упда идаралыҡ ҡылыу эштәрен ентекле өйрәнде. Починк итедтарға ҡаршы батырҙарса һуғышҡан өсөн бат-Шиинп махсус грамота менән тарҳан исеме алып ҡайтыу- Ы башҡорттар д'аруға һәм волость старшиналары итеп \ р/шслде. Уларҙың ярҙамсылары итеп «лучшие люди» лоЛепләнде. Мөһим мәсьәләләр тикшереләсәк дөйөм ииЙыиды Башҡортостандың үҙәге һаналған Чесноковка ииигаһы буйында, ә Нуғай даруғаһы башҡорттары йыйыиии Әзей мәсете эргәһендәге ерҙә уҙғарырға ҡушылды.

ПыПында теләге булған һәр башҡорт ҡатнашырға хаҡы Шулай булыуға ҡарамаҫтан, йыйынға, ғәҙәттәгесә, • таршналар, уларҙың ярҙамсылары, йөҙ башлыҡтары, ерархандар, муллалар һәм башҡа «лучшие люди» — затлы ешелер генә ҡатнашты һәм бөтә мөһим мәсьәләләрҙе , н.фепсә хәл ҡылдылар улар.

hор Оыйын көрәшселәрҙең көс һынашыуы, ҡурайсылар • ып йырсылар ярышы, сәсәндәрҙең әйтеше менән тамам-миырга тейеш икәнлеген асыҡлағас, Өфө воеводаһы Псцьямннов дүрт даруға һәм волость старшиналарын кә- •нимәгә йыйҙы һәм уларға Михаил Романовтың сәләмен ишырҙы.

Государь Михаил Федорович, сит ил баҫҡынсыла- , ыын Росәйҙе азат итеүҙә күрһәткән батырлыҡтарығыҙҙы • ы бйһалап, һеҙгә ярҙамлашыу өсөн мине Өфө воеводаһы ц сборҙе, — тип ул башҡорттарҙың нимәгә мохтажлык и среусп һорашты.

Башҡорттар яңы воеводанан бер нәмәне лә йәшермә- I)р, һоммәһен түкмәй-сәсмәй һөйләнеләр. Элекке воево- I одунов заманында үҙ ерҙәренән ҡыуылыуға, ерҙәрен- • тпрлө нығытмалар төҙөлөүгә зарландылар, Себерҙәге ноғаларҙың яман ҡыланыштарына ла сик ҡуйыуҙы елелов.

Иекке воеводаның бер ни белмәмешкә һалышыуынан ирланып, Мәскәүҙән килгән Иван Черников тигән әҙәм оҙ чета [1] башҡорт ерен үҙләштерҙе һәм уның исе- урыҫ ауылы [2] барлыҡҡа килде, — тине Мөхәммәт- I бей.

[1] *Четь* - ер үлсәме. Ул четверть тигән һүҙҙән алынған. Бер чета ят прыш үлсәменә тиң.

[2] Чернпковка ҡалаһы. Аҙактан ул Өфөгә ҡушылды.

Нуғай даруғаһы старшинаһы Мөхәммәтколға Нуғай даруғаһы старшинаһы Ҡараяҡуп та ҡушылды:

— Иван Черниковтан бүтәндәр ҙә һис ҡалышмай. Ун- ун биш йыл ваҡыт эсендә генә Имәы ҡала тирәһендәго башҡорт ерҙәрендә Первушино, Гардеево, Асанчюк, Пушкарев, Порошин, Ураков, Якунин, Богородский, Шугуровка тигән урыҫ ауылдары [1], ә мордваларҙың Максимовка менән Ново-Савин исемле утарҙары барлыҡҡа килде. Элгәре шул ерҙәрҙә иген сәсеп үҫтергән Меңле һәм Булаш ырыуы башҡорттары тау-ташлы урмандарға ҡыҫырыклапды. Ситтән күсеп килеүселәрҙең ҡыланышына берәй сара күрелмәһә, иген сәсеп йәшәргә күнеккән башҡорттар бөлөсәк...

Даруға старшиналары һөйләгәндә бүлдермәй тыңлаған воевода Вельяминов, сабырлығын юғалтып, һораиы.

— Өфө ҡалаһын артабан ҙурайтыуҙы туҡтатырғамы, һеҙҙеңсә?

— Киреһенсә, ситтән дошман яуы килгәндә башҡорттарға йәшеренер урын етерлек булһын өсөн, Имән ҡаланы өлкәнәйтергә, ә Бөрө тирәһендә яңы нығытма төҙөргә кәрәк, — тине Мөхәммәткол бей.

— Ситтән килеүселәр булмаһа, ул ҡаланы кем ҙурайта?

— Башҡорттар үҙҙәре ҙурайтасаҡ һәм яңы нығытма төҙөйәсәк.

— Ниңә яңы нығытма төҙөргә? Ситтән яу килеүе төләме әллә? — тип һораны воевода Вельяминов.

— Ситтән яу бер ҡасан да баҫылғаны юҡ, — тиие Нуғай даруғаһы старшинаһы Ҡараяҡуп бей. — Суртан улы лә, уның теше үлмәй тигәндәй, күптән үлгән Күсем ханың уландары менән ейәндәре һаман ҡоторона. Улар ҡалмыҡ тайшалары [2] менән берләшеп, йәйләүҙәрҙе талпаҙар, ҡышлауҙарҙы туҙҙыралар, йылҡы көтөүҙәрен һөйуып алып китәләр, ҡатын-ҡыҙҙар менән бала-сағабыны ҡоллоҡҡа наталар.

— Ҡалмыҡ тайшаларының ғәскәре ҙурмы?

— Башҡортостан иле сигендә генә ҡалмыҡтарҙың биһән мең кешелек ғәскәре һәм ике йөҙ меңдән артыҡ ситтән һуғышсылары барлығы мәғлүм [3]...

— Ҡалмыҡтарҙың төп көсө ҡайҙа?

— Ҡалмыҡтар йәшәгән ерҙәр байтаҡ, — тип Тамъяволосы старшинаһы Төлкөсура бей ҙә һүҙгә ҡушылды

[1] Был ауылдар ҙа Өфөгә ҡушылғас, элгәре исемдәрен юғалт
[2] *Тайша* — монгол һәм ҡалмыҡ феодалдарының титулы ул мактаулы иеем нәҫел буйынса күсә килә.
[3] Очерки истории Калмыцкой АССР, 88-се бит.

Төбәүҙә ҡалмыҡтар Ишем һәм Тубыл йылғалары буйына цилеп тулғайнылар. Аҙаҡтан, Себерҙәге Күсемдең уландпры һәм ейәндәре менән дуҫлашҡас, Яйыҡ һәм Ур йылғалары буйында йәшәүсе башҡорттарға ҡурҡыныс тыуҙылар.

Ҡалмыҡтарҙы хәҙер ул ерҙәр ҙә ҡәнәғәтләндермәй. Өфөгә якын урыпдарҙағы башҡорт ерҙәрендә күсенеп йөрпрго теләп улар миңә бер нисә мәртәбә килеп китте, — тине Мөхәммәткол бей.

— Ҡалмыҡтарҙың тәҡдименә ризалаштығыҙмы? — тип һорапы воевода.

— Нисек ризалашайыҡ, ти? — Мөхәммәткол бей аптыраны. — Ҡалмыҡтарҙы башҡорт еренә якын да ебәрмәйәсегсмде әйттем. Берәйһе яманлыҡ ҡылһа, беҙгә һеҙҙең дә ирҙамлашыуығыҙҙы һорайбыҙ.

Башҡорт старшиналары менән теләктәшлек белдереп, гиюиода Вельяминов Өфөләге хәрби частарҙы тулыландырыу есөн һәр волостан илле-алтмыш һыбайлы башҡорт иотсп ебәреүҙе һораны.

— Ебәрербеҙ, мотлаҡ ебәрербеҙ, — тине Төлкөсура бей.

Башҡорт старшиналары өйҙәренә ҡайтып киткәс, воецидп Вельяминов байтаҡ ваҡыт уйланып ултырҙы. Шунан Башҡортостан картаһын өҫтәлгә йәйҙе. Ҡазан, Нуғай, Уса һәм Себер даруғаларына сиктәш волостарға ебәлән йәнә хәрәкәтһеҙ ҡалды.

«Башҡорттарҙы талауҙан туҡтатыу өсөн, ҡалмыҡтар менән һөйләшеп килешеү төҙөргә кәрәк», тип уйлап ул үҙенсп ярҙамсыларын тайшаларға ебәрҙе.

Воевода Вельяминов үҙ маҡсатына бик тиҙ өлгәште. Килмыҡтар менән тығыҙ бәйләнеш булдырылғас, Ҡалчмк тайшалары Далай, Чокур, Урлюк һәм башҡалар исеменән Өфөгә вәкилдәр килде һәм улар Өфөгә якын урындырдагы башҡорт ерҙәрендә кусенеп йөрөргә рөхсәт һорапы.

Ҡала баҙарында иркенләп натыу итегеҙ. Әммә башмрт ерҙәрендә күсенеп йөрөү мәсьәләһен башаҡорттарҙың үҙҙәре менән һөйләшеп хәл ҡылығыҙ, — тине воевода Вельяминов.

1623 йылда урыҫ дәүләтенә баш һалғандан һуң да, Себерҙәге Күсем хандың уландары һәм ейәндәре менән тағы рл.нккоп ҡалмыҡ тайшалары башҡорт йәйләүҙәрен. яңынырып, кешләрҙе талауҙан туҡтаманылар. Ҡалмыҡтарш Ошерәк тә Себер даруғаһындағы Ҡушан, Бала-Ҡабай Сплжауыт, Ҡара-Табын һәм Әйле волосы башҡортларының мык интекте.

Башҡорттарҙың яҙмышы менән Аҡ батша һәр саҡ ҡыҙыҡһынды. Ул ҡалмыҡ тайшалары менән Күсем хандыҡ уландары һәм ейәндәре сапҡынынан Себер даруғаһы башҡорттарын һаҡларға ҡушып, Өфө воеводаһына махсус грамота ебәрҙе.

Батша грамотаһын алғас ҡына, 1635 йылдың егерменсе июнендә, воевода Вельяминов стрелецтар командиры Каловскийҙы саҡыртты. Уға Михаил Федорович Романовтың грамотаһын укып ишеттерҙе лә:

— Күренеүенсә, Государь беҙгә асыулы. Себер даруғаһындағы башҡорттарҙың именлеге өсөн беҙ яуаплы, — тип бойорҙо. — Федор Иванович, Өфөләге һыбайлы башҡорттар һәм стрелецтарың менән Урал аръяғындағы йәйләүҙәрҙе ҡалмыҡтарҙан һаҡларға кит!

— Унда барғас, эште ниҙән башларға? — тип һораиы Каловский.

— Иң тәүҙә Ҡушан, Бала-Ҡатай, Салжауыт, Кара-Табын менән Әйле волосы башҡорттарының йәйләүҙәреи Уралдың көнбайышындағы хәүефһеҙ урындарға күсерсү сараһын күр. Шунан аҙаҡ ҡалмыҡ тайшалары, элекке Себер ханы Күсемдец ейәне Аблай менән уның ҡустылары йәшәгән урындарҙы асыҡла һәм миңә ашығыс хәбор ит!

— Уларға ҡаршы һуғышмаҫҡамы?

— Уларға ҡаршы әлегә һуғыш башларға ярамай. Берәй ергә йәшенеп, дошмандың һәр хәрә.кәтен күҙәтергә, — тине лә, бер аҙ уйға ҡалыбыраҡ, воевода Вельяминов Каловскийҙы ҡаты иҫкәртте:

— Үҙеңә кәрәк-яраҡ әйберҙәрҙе башҡорттарҙан һатып алырға һәм стрелецтарың да бушлай бер нәмә лә алмаһын![1]

— Аңлашыла, Михаил Дмитриевич! — тип стрелецтар башлығы Қоловский честь бирҙе. — һәммәһе Рәсәй батшаһы Михаил Федорович Романов грамотаһы ҡушыуы буйынса башҡарыласаҡ!

Өфө воеводаһының һаҡ булырға ҡушыуы тигенгә буламаған икән.

Каловский командалығындағы отрядтың Урал аръяғына ебәрелеүе тураһында ишеткәс, элекке хан ейәндәре Аблай менән Тевкел воевода Вельяминовҡа ҡуласты. Улар, үҙҙәре генә Өфө ҡалғаһен ҡыйрата алмаясағын аңлап, ҡалмыҡ тайшалары менән берләштеләр һәм Өфөгә һөжүм башланылар.

[1] Уфимские губернские ведомости, 1876, 28 август, номер 35; Пица А. Предание о нападении на Уфу сибирских цареевичей Аблаи и Тевкеля.

Ҡамауға алынған Өфө—Имән ҡалаға оло ҡуркыныс тыуҙы.

Воевода Вельяминов башняға күтәрелде. Ҡала стенаһы буйыида дошман ғәскәре тупланыуын күргәс, ул төшөнколоккә бирелде. Даруға старшиналарынан ярҙам һорап ебәрелгән сапҡындарҙан ниңә хәбәр юҡ? Юлда барышлпй, дошман ҡулына эләктеләр микән әллә улар?

Каловский отряды менән дә бәйләнеш өҙөлдө. Дошмлидың һәр хәрәкәтенән күҙ яҙҙырмай күҙәтергә ҡушыуы Оушка ғына булдымы икән? Дошмандан айырылып, Қалоискпйҙың отряды берәй ерҙә тороп ҡалғандыр, ахырыһы.

Даруға старшиналары ярҙамлашмаһа, Өфө гарнизоПЫпдағы бик аҙ һанлы ғәскәр дошмандың берләшкән көсөнә ҡаршы тора алмаясаҡ. Өфө ҡыйратылһа, яңы төзолгән Минзәлә менән Бөрө нығытмалары ла тырымгмрпҡай туҙҙырыласаҡ.

Лблай ҡала ҡапҡаларын асырға ҡушты. Уның ультнматумына бер сәғәттән һуң воевода Вельяминов ыңғай яуап ҡайтармаһа, дошман ғәскәре ҡаланы штурмлаясаҡ...

— Ни булһа ла дошманға тереләй бирелмәйәсәкмен,— тип воевода ҡалалағы ратниктарҙы дәһшәтле алышҡа әзерлоне.

Кәчәлыр алыҫта, бик алыҫта, кемдәрҙеңдер һөрән һалып ҡысҡырышыуы воеводаның ҡолағына салынғандай тоҫолдо. Юҡ, тауыштар яҡыная, көсәйә барғандай. Ана, Аҡҙәл яры буйлап йән-фарман сабышып килгән һыбайлы гмшкорттар күренде. Төлкөсура бей менән уның оло улы Шәлдан елдерә...

Воевода Вельяминов, шөкөрана ҡылыш, өс тапҡыр сыпты.

Пашҡорттар яҡынлаша башлағас, ҡәлғә тышындағы ҡалмыҡтар менән татарҙар ҙа урындарынан ҡуҙғалды. Улар, бер-береһен дәртләндереп һыбайлы башҡорттарға ташлар яуҙыра башланы. Алғы рәттәге бер нисә башҡорт егелде, ҡаты яраланып, эйәренән ҡоланы. Уларҙан арттағылар, туҡталып тормайынса, уҡтарҙан ата-ата, ҡәлғә тышындағы дошман ғәскәренә ажарланып ташланды,

Иоснода командалығындағы ратниктар ҙа, башҡорттарға ярҙамлашырға ашҡынып, ҡаланан сыҡты.

Лчыш ҡыҙҙы. Ике яҡтан да үләләр һәм яралылар күбәйҙе. Локин көс тиң түгел ине. Аҙ һанлы башҡорттар менән ратниктар Сөлтәкәй—Сутолока ярҙарына ҡысырыҡшды һом уларға дошман ҡамауына эләгеү ҡуркынысы янды.

Иң көсөргәнешле, хәл иткес минутта Ҡариҙел буйып дағы урманда [1] йәшеренгән Каловский командалығындағы отряд, дошмандың тылына сығып, аңғармаҫтан һөжүм башланы. Сөлтәкәйгә ҡысырыкланған башҡорттар мсиоц ратниктар ҙа активлашты.

Үлеш-ҡыйралыш йәнә көсәйҙе. Хәбибназар менән Төлкөсураның оло улы үлемесле яраланды...

Хәле мөшкөлләнгән дошман ғәскәре, Ҡариҙел аша икенсе ярға сығырға ниәтләнеп, урманға табаң сигепдс. Ләкин маҡсатына ирешә алманы. Дошман ғәскәре тулы һынса тар-мар ителеп, әсиргә алынған Аблай мөнән Тевкил Мәскәүгә оҙатылды [2].

XXVIII

Өфөгә һежүм итеүсе дошман ғәскәре ҡыйратылғандап һуң, Башҡортостанда тыныслыҡ урынлашты. һәр даруга старшинаһы, үҙен баш, үҙен түш итеп тойоп, Башҡортостан дәүләтен ойошторояға, хатта дөйөм йыйын йыйыуға асыҡтан-асыҡ ҡаршылыҡ күрһәтеүҙәренә ҡарамаҫтан, башҡорттар иркенләп йәшәй башланылар. Уларҙың байлыҡтары артты, мал-тыуарҙары ишәйҙе, күңелдәре көр бул ғас, әҙәбиәткә һәм сәнғәткә лә иғтибар көсәйҙе. Бай башҡорттар үҙ иҫәбенә мәсет-мәҙрәсәләр һалдырыуҙы, һолот ле балаларҙы Багдадҡа, Ҡаһирәгә һәм башҡа мосолмаи илдәренә ебәреп укытыуҙы изгеләрҙән изге бурыстары тип һананылар. Ауылдарҙағы бала-саға мәҙрәсәләрҙә бушҡа укытылды. Мөғәллимдәр эш хаҡы алманы. Хуҗалыҡ менән шөғөлләнергә мөмкинлеге булмаған мөғәлләпм дәр өсөн генә шәкерттәрҙең ата-әсәһенән он йәкн ярма йыйып бирелде.

Ҡатын-ҡыҙ өйҙә белем алды. Башҡорт ҡатындары ирҙәре менән тигеҙ хоҡуҡлы һаналды. Ҡатын-ҡыҙҙы тук мау, нахаҡтан рәнйетеү ҡырҡа тыйылды.

1644 йылдың йәйендә Өфөгә ун ике сакрым алыҫлыҡтағы Чесноковка йылғаһы яры буйында уҙғарылған дүрт даруға башҡорттарының дөйөм йыйынында ла, Башҡортостан дәүләтен ойошторояуҙы кисектереп тороп, нң оуол мәҙрәсәләр менән мәсеттәр һалыу, ғилемле кешеләрҙе күбәйтеү һәм башҡорттарҙың милли аңын уятыу мәсьолонв ентекләп тикшерелде.

---

[1] Ҡариҙел йылғаһы буйындағы һуғыш барған урман азактан «Аблай урманы» тип йөрөтөлгән.

[2] *Рычков П. И.* Топография Оренбургской губернин, 60—61-се биттәр; Ница А. Предание о нападении на Уфу сибирских царесипчей Аблая и Тевкеля, 155—159-сы биттәр.

Дөйөм йыйында булып ҡайткае, Тамъян волосы старшинаһы Төлкөсура бей, үҙ сиратында, муллаларҙы, йөҙ һөм илле башлыҡтарын кәңәшмәгә йыйып, үҙенең тәҡәрҙәрен менән уртаҡлашты.

— Ағай-эне, Имән ҡала эргәһендәге йылға буйында уҙғарылған йыйында ҡатнашыусыларҙың һөйләүенә ҡарағында, Аллаһы тәғәләнең биргәненә шөкөр, бөтә башҡорт ауылдарында ла бала-сағаларға белем биреү яҡшы пПоторолған. Был бик тә ҡыуаныслы хәл. Беҙҙә генә түгел, бүтән волостарҙа ла уҡый-яҙа белмәгән кешеләр юҡ, ти. Мәсет-мәҙрәсәләр һаны ла аҙаҡҡы йылдарҙа Йылдам артҡан. Алты йөҙ башҡорт өсөн Башҡортостанда өсөр мәсет тура килһә, үҙәк Рәсәйҙәге бер мең туғыҙ йөҙ плле урыҫ өсөн ни бары бер сиркәү генә һалынған [1]...

— Бүтән волостарҙағы башҡорттар менән сағыштырғанда, беҙҙең волоста ғилемле кешеләр һаны күберәкме, I ғлм аҙыраҡмы? — тип һораны кәңәшмәлә ҡатнашыусы (I.10 башлыҡтарының берене.

Яуап ҡайтарырға ҡыйынһынып, Төлкөсура волостың баш муллаһы торған яҡҡа әйләнеп ҡараны.

Хоҙрәт, ошо хаҡта һин яуап ҡайтараһыңмы әллә?

Тамъян волосының баш муллаһы, башындағы сәлләһен тоҙәтеп кейгәс, тамшана-тамшана, әйтте:

Иншалла, ғилемле кешеләребеҙ беҙҙә лә күбәйҙе. Ауылдарҙағы мәсеттәргә элгәре муллаларҙы ситтән сақырға горгайныҡ, хәҙер үҙебеҙҙеке етерлек. Бохарала һәм Ьһһпролә белем алған ун ике шәкертебеҙ, йәғни мәҫәлән, оптовый мулла булып үҙебеҙгә ҡайтты. Имән ҡалаһындағы бөек Казандағы мәҙрәсәләрҙә укып йөрөүсе шәкерттәребеҙ ҙә байтаҡ.

Хоҙрәт, үҙенде алмаштырырҙай кеше бармы һуң?

Волостың баш муллаһы бындай мәғәнәһеҙ һорауға • ,ш ҡайтарырға ҡыйынһынды. Ап-ак түңәрәк һаҡалын ышпырғылап, башын аҫҡа һалындырҙы.

Мипең урынға баш мулла булырҙай кеше табылыр, I щ бойорһа, — тине лә, ул йәнә шымды.

Упьш исемен нинә әйтмәйһең?

Ул кеше волость старшинаһы Төлкөсура бейҙең иң • •ғ улы — Садир мулла...

Төлкөсура бей, ризалашмайынса, һелтәнде.

---

[1] Был моғлүмәттәр 1922 йылда Стәрлетамаҡта баҫылып сыҡҡан «Труды научного общества» исемле китапта һәм императорҙың Ка- • ипперситеты эргәһендә сығарылған «Известия общества археоло- ии, истории и этнографии» тигән ғилми хеҙмәттәрҙә курһәтелгән.

— Юк, юк, хәзрәт, Садирға волостың баш муллаһы булырға бик иртә! Тәүҙә ябай мулла булырға ололарҙан өйрәнһен...

— Мин, ысынлап та, олоғайҙым, — тине волостың баш муллаһы. — Шул арҡала алыҫтағы мәсеттәргә йөрөй алмайым...

Ҡаһирәлә белем алып ҡайткан Садирҙы баш мулла итеп ҡуйыуҙы әҙәпһеҙлек һанап, Төлкөсура һүҙ йүнәлешен үҙгәртте.

— Мине ситтән күсеп килеүселәрҙең һаны йылдан-йылға күбәйеүе һәм уларҙың башҡорт ерҙәрен үҙләштерергә маташыуы оҡшамай.

— Воеводаға әйтеп, ситтән күсеп килеүҙе тыйҙыртырға кәрәк, — тине баш мулла.

— Вельяминов урынына килгән яңы воеводаның беҙгә ҡарата мөнәсәбәте үҙгәрҙе шул, — тип Төлкөсура үкенеп белдерҙе. — ЯҠы воевода, ҡалмыҡтарҙың әле лә тыныҡ бирмәүенә һылтанып, үҙенә ситтән килгән кешеләрҙе күпләп йыя. Аҙаҡҡы бер нисә йыл эсендә генә өс мең бер йөҙ һикһән дүрт урыҫ Имән ҡалаға Мәскәүҙән килгән [1]. Уларҙың барыһына ла яңы воевода иген уңдырышлы иң шәп башҡорт ерҙәрен бүлеп биргән. Суҡышмыш Рудак мырҙаға, Ҡара мырҙаға, христиан диненә күсеүсе өсөн дворяны исеменә лайыҡ булған Андрей Федорозич Ураковҡа [2] Аҡйҙел буйындағы ерҙәрҙе бүләк иткән. Зпвила Федоров һәм Иван Иванович Кадомцев фамилияһын алып, христиан диненә күсеүсе татарҙарға Имән ҡала эргәһендәге йөҙ иллешәр четь башҡорт ерҙәрен бүлеп биргән. Бөрө, Минзәлә ҡаласыҡтары, Сулман, Ыҡ, Ҡариҙел йылғалары буйындағы башҡорт ерҙәре лә двояны исемен алған керәшендәр менән поптарға таратылған.

Төлкөсура бейҙең һүҙен бүлдереп, кәңәшмәлә ҡатнашыусылар ҡысҡырышты:

— Яңы воеводаның баш-баштаҡ ҡыланышына Имән ҡала эргәһендә йәшәүсе башҡорттар ғәйепле!

— Ниңә ауыҙ асып торалар икәп улар?

— Ҡилмешәктәрҙе үҙ ерҙәренән ҡыуып ебәрһендәр!

— Тыңламаһалар, яуға күтәрелһендәр!

— Дөрөҫ, беҙ уларға ярҙамлашырбыҙ!

— Элек хандар ыҙалатты, хәҙер килмешәктәр ҡыҫыр маташа беҙҙе!

— Урыҫтарҙан таланыр өсөн ҡушылғанмы ни башҡорттар Рәсәй дәүләтенә?

[1] *Витевский В. Н.* И. И. Неплюев и Оренбургскнй край в п, ием его составе до 1758, г. Казань, 1897, 374-се бит.

[2] *Ураков А. Ф.* — кенәз Ураковтарҙың тоҡомо башы.

— Иван Грозныйҙың ата-олатайҙарыбыҙға бүләк итеп биргән «Жалованная Грамота»һында күрһәтелгәндәрҙең берсе лә боҙорға хаҡы юк воеводаларҙың!

— Раҫ!..

Кешеләр ҡысҡырышыуҙан тыйылғас, Төлкесура ырыуҙаларын тыныҫ ҡына иҫкәртте:

— Ата-олатайҙарҙан ҡалған ер-һыуыбыҙҙы килмешәктәрҙән һаҡлау — изге бурыс. Әммә бер ниндәй әҙерлекһеҙ болаға күтәрелеү хәүефле. Ундай эш бүтән даруға һәм иолость кешеләре менән кәңәшләшеп башҡарылырға тейеш!

— Бер мең биш йөҙ һикһән дүртенсе йылғы боланы бөтә старшиналар күп булмаған бит. Аҙаҡтан барыһы ла ҡушылған, — тине йөҙ башы.

Төлкөсура бей баш сайҡаны.

— Ай-һай, үтә сабырһыҙһың, ҡустым. Ул заманды хәҙерге менән нисек сағыштырмаҡ кәрәк?! Кешеләрҙе ҡорбанға күтәреү уйын тиһеңме? Был турала Чесноковка Иҫке дағы йыйында ла һүҙ булғайны. Күпселек халыҡ ҡаршы булырға, ҡабаланмаҫҡа, Имән ҡала воеводаһы менән һөйләшеп килешергә тигән ҡарарға килделәр.

Ъюлар һүҙенә ҡыҫылмай, көн яҡтыһы төшмәгән мәжлестә яңа-яңғыҙы торған Садир мулла күп нәмәне аңлатмышы. Атаһының үтә наҡ ҡыланышын ҡартайыуы бәләһенә һанаһа ла һананы ул. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар таралышҡанда бәткәс тә, тыңғы бирмәгән уйҙарынан ҡотола алманы.

Атай, бер мең биш йөҙ һикһән дүртенсе йылғы башҡорттар болаһында олатайымдың атаһы ҡатнашҡанмы ни һораны ул.

— Ҡатнашмаған.

Нимә?

Шаҡман бей, олатайындың атаһы, минең олатайым, Иван Грозныйҙың «Жалованная Грамота»һын.ың көсөнә инышапды. Шуға күрә бөтә нәмәне һөйләшеп килешеү йолмыида хәл ҡылырға тырышты.

Үҙ маҡсатына елгәшә алды микән?

Өлгәшкән... Уның туранан-тура Аҡ батша менән килешеү тотоуы арҡаһында, урыҫ воеводаларының башҡорттарҙы суҡындырырға маташыуынан бер ни барып сыҡмаған.

Ер есен хәҙер бола башланһа, ни эшләр инең?

Төлкөсура тура яуап ҡайтарырға теләмәне.

Миннең кеүек ҡартка ни эш ҡылмаҡ кәрәк?

Бәла ҡупһа, моғайын, ҡул ҡаушырып ултырмаҫ инең бит, атай?,

— Мин әле лә ҡул ҡаушырып ултырмайым, улым. Башҡорттарҙың ерен әрәм-шәрәм итеүсе воевода урынына ғәҙел воеводаны ебәреүҙе һорап, батшаға хат яҙырға уйлайым.

• — Михаил Романов һине әле лә иҫләй микән?

— Иҫләмәһә, иҫенә төшөрөп, хатҡа яҙам.

— Һинең хатыңды батшаға мин алып барайыммы? — Садир йөрәкһенде.

• — Ундай оло йомош менән йөрөргә һиңә иртәрәк, улым, — тине Төлкөсура бей. — Ағайың менән бүтәндәр барыр.

— Ағайым менән мин дә барам!

— Теләге булғас, барһын, — Байыш ҡустыһын яҡлашты.

1645 йылдың яҙында,, Төлкөсураның уландары менән бер төркөм һыбайлы башҡорт егеттәре Мәскәүгә барырға әҙерләнгән саҡта, Рәсәй батшаһы Михаил Федорович Романовтың үлеүе һәм уның урынына оло улы Алексей Михайлович батша булып һайланыуы тураһында хәбәр алынды.

— Мине белгән батша булмағас, Мәскәүгә барыуығыҙҙың файҙаһы тейер микән? — Ҡайғыға күмелгән Төлкөсура, ни эшләргә белмәйенсә өҙгөләнеп йөрөнө-йөрөнә лә: — Ярар, «тейһә — тейеңгә, теймәһә — ботаҡҡа» тигәндәй, бер тәүәккәлләнгәс, Мәскәүгә барып ҡайтығыҙ. Яңы батшаның үҙен күрергә тырышығыҙ. Уға һәммәһен түкмәй-сәсмәй һөйләгеҙ. Нижний Новгород воеводаһы Алябьев менән бергә минең Мәскәүҙе азат итеүҙә ҡатнашлығымды, бүтән башҡорттарҙың Пожарский ғәскәрендә булыуын да әйтергә онотмағыҙ. Воевода Алябьевтың улы Федор Андреевич тә башҡорттарҙы яҡын күреүен әйтегеҙ. Апарған бүләкте батшаға тапшырғас, Алябьев Федор Андреевичты Имән ҡалаға воевода итеп ебәреүен һорағыҙ!

Төлкөсураның уландары, ризалашып, баш ҡаҡтылар

— Әмерең үтәлер, атай!..

Төлкөсураның уландары менән бер төркөм һыбайлы ир-егеттәр Аҡ батшаға оло йомош менән китеүен ишетеп, барлыҡ башҡорт халҡы Мәскәүҙән изге хәбәр көттө. Тик күпселек ерҙәренән мәхрүм ителгән Менле ырыуы башҡорттары ғына яңы батшаның мәрхәмәтлелегенә ышанманы. Улар, Башҡортостан илселәренең ҡасан әйләнеп ҡайтыуын көтмәйенсә, килмешәктәргә ҡаршы болшый күтәрелде.

Башҡорт ерҙәрен килмешәктәргә таратып биреүҙе ҡырҡа тыйған Алексей Михайлович Романовтың указын алып

ҡайтҡан Төлкөсураның уландары менән бола етәкселәре осрашҡас ҡына, 1645 йылғы бола ялҡыны һүрелде.

Башҡорттар Мәскәүгә барып ҡайтыуға күп тә уҙмаһы, Төлкөсураның яуҙаштары улы Федор Андреевич Алябьев Башҡортостанға воевода булып килде. Ул, ғаиләһен офо — Имән ҡалалағы фатирға урынлаштырғас та, дүрт дпруға һәм волость старшиналарын кәңәшмәгә йыйҙы,

Коцәшмә башланырҙан алда:

— Тамъян волосы старшинаһы Төлкөсура бей бындамы? — тип һораны воевода Алябьев.

— Атайым килә алманы, ауырый. Уның урынына мин киллдем, — тип йәш мулла урынынан күтәрелде.

Москәүгә барышлай Нижний Новгородҡа һуғылып киткәп Садирҙы танып, Алябьев яғымлы йылмайҙы.

— Кәңәшмә тамамланғас, иркенләп һөйләшербеҙ, — тип Садирҙың ҡулын дуҫтарса ҡыҫты ла кәңәшмәне асыҡ тип иҫлан итте.

Коцәшмәлә һүҙ башҡорттарҙың ере хаҡында барҙы. Ц.фуга һәм волость старшиналары һөйләгәнде бүлдермәй тыңланы ул. Аҙаҡтан, уларҙы тыныҫландырырға тырышып, башҡорт ерҙәре ситтән килеүселәргә бирелмәйәсәген әйтте һәм был турала махсус Уложение менән законлаш-Шрыласағын дөрөҫләне.

Яиы воевода, беренсе осрашыуҙа уҡ башҡорт старшиппларыпың ихтирамын һәм ышанысын яуларға ниәтләнеп, \юксой Михайлович Романов тарафынан үҙенә бирелгән грамотаны ҡыҫҡырып уҡыны:

·Башҡорттар элгәрге замандағы государҙар һәм беҙ-ен лтайыбыҙ батша булған ваҡыттағы хозур иҫтәлекле, бөрлыҡ Рәсәйҙең бөйөк дәүләте — батшаһы һәм бөйөк ге ноле Михаил Федорович хакимлыҡ иткән йылдарҙа по-Iктарға ҡаршы, ә Мәскәүҙе дошмандар тапаған саҡта, Мәскәүҙе һәм Мәскәүгә тиклемге ваҡытта ла, Новгород •риһеидәге Броницала Дмитрий Тимофеевич Трубецкой бидр мепән кенәзгә һәм беҙгә тоғро хеҙмәт иткәндәр, ә ҡыған һуң Дмитрий Михайлович Пожарский ғәскәрендә хеҙмәт пткәндәр улар [1]...»

[1] П С 3, том 1, номер 1.

ИКЕНСЕ БҮЛЕК

I

Башҡорттарҙың беренсе үҙ аллы восстаниеһы 1645 йылда баҫылғандан һуң, Рәсәй хекүмәте Иван Грозный заманындағы «Жалованная Грамота»ла күрһәтелгәндәрҙе боҙоуҙы ҡырҡа тыйҙы һәм аҫаба башҡорттарҙың үҙ ерҙәренә хужа икәнлеген ҡабатлап дөрөҫләргә мәжбүр булды.

Ләкин Аҡ батшаның яңы Уложениеһы воеводалар тарафынан тулыһынса үтәлмәне, бәғзе саҡта уны тупаҫ рәүештә боҙоуға юл ҡуйылды. Шунлыҡтан Башҡортостанщ киттән күсеп килеүсе «припущенниктар» — килмешәктәр һаны күбәйҙе, ә башҡорттарҙан һалым йыйыусыларҙыщ үҙ белдеклегенә ҡыланышы йәнә көсәйҙе [1].

Урыҫтарҙың яуызлығы арткан һайын, башҡорттарҙыщ милли тойғоһо үҫте һәм Башҡортостан дәүләте булды рылмайынса тулы азатлыҡ есөн керәш тотҡарланасағы асыкланды.

Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш волостарындағы бер төркөм ырыу-ҡәбилә батырҙары, һалым йыйыусы урыҫтарҙың вәхшиҙәрсә ҡыланышына сыҙай алмайыиси, болаға әҙерлек башланылар. Улар үҙ-ара йыйылып ко кәшләштеләр ҙә яңыраҡ Тамъян волосы старшинаһы бу

[1] Урыҫ булмаған бөтә припущенниктарҙы рәсми ҡағыҙҙарҙа «типтәрҙәр» һәм «бобылдәр» (бобыли) тип йөрөткәндәр. Берәүҙәр «типтәр» һүҙен «тибелгән», «тибеп сығарған», икенселәр ул исемде «дөфтәр» һүҙенән алынған тип аңлата. Сөнки типтәрҙәр — башҡорт ерҙәренә яҙма килешеү нигеҙендә урынлашҡан припущенниктар. Бобылдәр — бындай рөхсәтте телдән һөйләшеп килешеү буйынса ғына алғандар.

Припущенниктар ер менән файҙаланған өсөн башҡорттарға оброк түләгән йәки уларға яһаҡ түләүҙә һәм хөкүмәткә ылау өсөн ярҙамлашҡандар.

лып һайланған Садир мулланы бола башлығы итергә телэк белдерҙеләр.

Садир мулла ырыу-ҡәбилә батырҙарыньщ тәкдиме моиоп ризалашманы.

- - Үҙ иркебеҙ менән ҡушылған Рәсәй батшалығына күҫэк күтәреү, минеңсә, ақылһыҙлық. Әгәр ҙә мәгәр урыҫтарға ҡаршы болала ҡатнашһам, атай-олатайҙарымдьщ ысыятына хыянатсылық ҡылған булыр инем һәм үҙемде V ,ем нхтирам итеүҙән тыйылыр инем.

Ырыу-ҡәбилә батырҙары, ризаһыҙлық белдереп, шаулашты:

Урыҫтар таш менән атканға башҡорттар аш менән |, тларга тейешме ни?

— һалым йыйыусыларҙың яуызлығына 'нисек сыҙарға?

-- Олатайындың олатаһы Шәғәле Шаҡман бей Иван Грозныйға барып баш һалған өсөн генә урыҫтарҙың ҡәнихотлеген ғәфү итергәме?

— Дуҫлыкты нығытыр булғас, Иван Грозный биргән «Жалованная Грамота»ла күрһәтелгән йөкләмәләрҙе күI >лото боҙорға ни хаҡы бар урыҫтарҙьщ?

- Ата-олатайҙаран мираҫҡа ҡалған ер-һыуҙарыбыҙ•I, урмандарыбыҙ байлығын әрәм-шәрәм итеп, урыҫтармн Поберләнер, көс еткеһеҙ яһаҡ түләп интегер өсөн ҡу»ИЛРапмы ни башҡорттар Рәсәй дәүләтенә?

- Хандарҙың йәбер-золомонан ҡотолоп, урыҫтарҙан •• ләр өсөн ҡушылманык беҙ Рәсәй дәүләтенә! ,•

Иә азатлык, йә үлем!..

Үтә өтөк, сабырһыҙ, тәүәккәл батырҙарҙың ярһыуы бер йаҫылғас, Садир мулла көләмһөрәне.

Миңә лә үҙ фекеремде әйтергә мөмкиндер бит?

Әлбиттә, мөмкин, — тине Арыҫланбәк батыр.

Мин дә урыҫтарҙың ҡоло булып йәшәргә теләүIе м, агай-эне. Әммә...

Урыҫтарға ҡол булып йәшәргә теләмәгәс, бола башлығы булыуҙан ниңә баш тартаһың? — тип бүлдерҙе һары Мәргән батыр.

һалым йыйыусы урыҫтарҙың йәбер-золоыонан ҡасып чпгаса киттә йөрөгән һары Мәргәндең хәлен аңлаған шруға асыуланманы һәм тыныс ҡына әйтте:

Ошондай шарттарҙа болаға күтәрелеү һәм тиктоа ҡан ҡойоу башҡорттарҙың файҙаһына түгел. Миа...

һпненсә, нимә? — тип һары Мәргән Садирҙы йәнә ,Iюрҙе.

Отәсләнмә, кешене тыңлай беләһеңме, әллә юкмы,— Лрыҫланбәк батыр сыра кеүек тоҡанырға әҙер тор-

ған һары Мәргән дуҫын иҫкәртте лә Садир бейгә мөрәжәғәт итте: — Яу ҡубарыу уйын түгел икәнлеген беҙ ҙә яҡшы аңлайбыҙ, хәҙрәт. Һалым йыйыусы урыҫтарҙан йәберләнеп йәшәргә лә мөмкинлек ҡалманы. Бола башлығы булырға ризалашһаң, ғәзиз еребеҙҙе килмешәктәрҙән таҙартырға һәм Башҡортостан дәүләтен ойоштороуҙы тиҙләтергә лә мөмкинлек тыуасаҡ. Һинең зат-ырыуың күпселек башҡорттарға мәғлүм. Бола башлығы булырға ризалаш. Беҙ болаға күтәрелһәк, бүтән волость кешеләре лә ҡушыласаҡ.

— Минең вәләкәтем бәләкәй, тәжрибәм дә аҙ. Саҡ ҡына ла түҙергә теләмәгәс, ниңә Себер даруғаһы старшинаһын йәки баш ахунды бола башлығы итеп ҡуймаҫҡа? — тип һораны Садир мулла.

— Себер даруғаһы старшинаһы менән баш ахун урыҫтарға яраҡлашҡан һәм бола менән етәкселек итергә һоләтле лә түгелдәр!

— Оло дәрәжәле кешенең яманатын сығарыу килешмәҫ.

— Уларҙың Верхотур воеводаһының тоғро йомошсоһона әүерелеүе бер кемгә лә сер түгел, хәҙрәт, — тиио Арыҫланбәк.

Уның һүҙен Ищмөхәммәт, Ҡонҡас, Дәүней Дәүләтбаев, Килей Теникеев, Баязан Туҡтамышев кеүек ир-егеттәр ҙо дөрөҫләне һәм Садирҙы бола башлығы булырға өгөтлонеләр.

Икеләнеүле тойғолар кисергән Тамъян волосы старшинаһы Садир ниндәй ҡарарға килергә белмәне.

Көндөҙгө намаҙға барып ҡайтып, ҡунаҡтары меноп бергә тамаҡ туйҙырғанда ғына үҙ фекерен әйтте:

— Ағай-эне, зинһар, ғәйепкә алмағыҙ, мин башҡорттарҙың болаға күтәрелеүен теләмәйем!

— Ниңә?

— Карателдәрҙән ҡурҡаһыңмы?

— Мин бер кемдән дә ҡурҡмайым, — тине Садир мулла. — һунарсылар баҫтырған ҡуян хәлендә булырға лә теләмәйем. Етмәһә, баш осонда төйләгәндәр — үҙебеҙҙең һатлыҡ бейҙәр өйрәлә... Бер ниндәй әҙерлекһеҙ кешеләрҙең ут эсенә индереп, күрәләтә ҡырҙыртыу — енәйәтселсҡп тиң. Ҡатын-ҡыҙ, бала-саға, ҡарт-ҡоро яҙмышы тураһында ла ныҡлы уйларға бурыслыбыҙ. Башҡорттарҙың болаһы ҡыйратылһа, улар ҡалайтыр?..

Дәүней батыр һорауға һорау менән яуап ҡайтарҙы:

— Урыҫтарҙың яуызлығына ҡаршы керәшмәй тик ятыуы, һинеңсә, енәйәтселек түгелме, хәҙрәт? Башҡорттарҙың киләсәген беҙ хәстәрләмәһәк, кем хәстәрләр?

— Мин ҡул ҡаушырып тик ултырырға уйламайым. — Содир мулла ҡунаҡтарының әҙәпһеҙлегенә үпкәләне. — Ошогаса Башҡортостандағы һәр нәмәне Аҡ батша менән һпЛлошеп килешеү ярҙамында ыңғай хәл ҡылдыҡ. Шул мөмкиилекте әле лә ниңә файҙаланмаҫҡа? «Жалованная Грамота» менән үҙе сығарған Уложениела күрһәтелгәндәр үтолмәүен белһә, батша Алексей Михайлович Романов блшҡорттарға яуызлыҡтар эшләгән урыҫтарҙың башынан һыПпар тиһегеҙме?

— Ысынлап та, был хаҡта нисек башыбыҙға килмәгән? Һалым йыйыусы урыҫтарҙың баш-баштаҡлығын белһә, батша берәй сараһын күрер, моғайын, — тине Арыҫлцпбок батыр.

Ҡыуаныс белдереп, бүтәндәр ҙә шаулашты:

— Бына был — аҡыл!

— Аҡ батшаға хат яҙайыҡ!..

Садир мулла ситке бүлмәгә сыҡты. Әсәһе менән икәүләп икәү ултырған ун-ун ике йәштәр самаһындағы Сәйет Ғыиа ҡағыҙ-ҡәләм тоторҙо ла:

- Улым, ағайҙар менән бергәләп, Рәсәйҙең бөйөк дәүләте — батшаһы һәм бөйөк кенәзе Алексей Михайлович Романовҡа хат яҙабыҙ. Ағайҙар әйткәнде һин ҡағыҙға Ғи бпрырһың, — тине.

Гпмъян волосы старшинаһы улы Сәйет ололар әйткәнде ҡағыҙға түкмәй-сәсмәй яҙҙы:

«Олуғ бадишаһ!

Һиисц мәрхәмәтлегенә инанып, Башҡортостан иленең төбәк даруғаһы исеменән мөрәжәғәт итәбеҙ...

Ҡышҡы һалҡын көндәр етеү менән Верхотурья воеводаһы башҡорттарҙан яһаҡ йыйырға ғәскәрҙәр ебәрә. Ҡар урмандарында ҡар бик тәрән булғанлыҡтан, сана ат һалынмай. Һыбай йөрөргә лә мөмкин түгел. Шуға ла Һалым йыйыусы һалдаттарҙы нарталарға егелгән башҡорттар бер ауылдан икенсе ауылға һөйрәп йөрөтәлер. Верхотурьяға ҡайтырға теләмәгән ғәскәрҙәр ҡыш буйы башҡорттарҙың өйөндә йәшәйҙәр һәм уларҙың аҙыҡ-төлөгө менән тукланалар. Яһаҡҡа түләнергә тейешле йәнлектәр гмреләре • өсөн башҡорттарҙы һунарға ебәрәләр ҙә, ҡараһа ейҙә юҡлығынан файҙаланып, уларҙың ҡатындарын мосхәрәләйҙәр, бала-сағаһын тукмайҙар, ейҙәрҙә һаҡшрпн аҡсалары менән йәнлек тиреләрен талайҙар. • Ичкги кенәгә буйынса йыймайҙар, үҙ файҙаларына артып птеп алалар. Башҡорттарҙан йыйылған артық яһаҡ подалар менән уларҙың ғәскәрҙәре файҙаһына тотоно- Ғ Өүләкһеҙ талана торғас, Верхотурьяға яҡын ауылдарҙа Һашәүсе башҡорттар йәнә ярлылана башланы...

Тәрән көрт баҫкан ерҙәрҙә һыбай йөрөргә мөмкинлек булмаған өсөн дә һалым йыйыусылар һәр өйҙән берәр тәнкә аҡса йыялар... Яһаҡ кенәгәһенә ул аҡсалар яҙылмай. Воеводалар яһаҡты ла өслә-дүртләтә артыҡ алалар. Берәйһендә һаҡланған йәнлек тиреһе барлығын белһәләр — һәммәһен ҡырып-сырып үҙ файҙаларына йыялар...

Элгәре заманда һәр йыл һайын йән башына бишәр һыуһар тиреһе иҫәбенән түләнә ине. Хәҙерге Верхотурья воеводалары йән башына ун бишәр һыуһар тиреһе ала...

Башҡорттар таланыуҙан бөлә, күптәре иҫәпһеҙ-һанһыҙ бирәсәкле булды. Бәғзеләре ҡатындарын, бала-сағаһын урыҫтарға аманатҡа биреп, үҙҙәре теләһә ҡайҙа ҡасып йәшәй. Ситтә ҡасып йөрөгән башҡорттар өсөн яһаҡты барыбер өйҙәрендә йәшәгән башҡорттарҙан түләтәләр. Тауташлы урмандар араһында йәшәүсе башҡорттарҙың игеи сәсеп үҫтереүҙәй ерҙәре юҡ. Уларҙың күбеһе йәй көнө Һарына, ҡыш көнө балыҡ менән генә тамаҡ **аҫрайҙар...»** [1]

Хатты икенсе тапҡыр күсертеп яҙдырткас, Садир бсй ҡунаҡтарына һораулы ҡараш ташланы.

— Был хатты Мәскәүгә кем апара?

Егеттәр тауыш-тын сығарманы.

— Батшаға хат яҙыуыбыҙ бушҡамы?

— Аҡ батша менән һөйләшерҙәй, Мәскәү юлын яҡшы белгән кешене ебәрһәк, һәйбәт булыр ине, — тине һари Мәргән.

Бола ҡубарырға әҙер тороусы егеттәрҙең Мәскәүгә барырға ҡурҡыуын аңлап, Садир бей баш ҡаҡты.

— Аңлайым, бик тә аңлайым һеҙҙе... Мәскәүгә барыуҙы ла миңә яңһарырға маташыуығыҙ аңлашыла... Яҙ етеп, аяҡ аҫты ер-һыуҙан ҡороғас, батша эргәһенә барырмыш, алла бойорһа. Шунһыҙ сәфәр йөрөүе хәүефле...

— Ҡасан ер-һыу ҡороуын көтөр әмәл ҡалманы! — Баязан Туҡтамышев йөрәкһенде.

— Көтөр әмәлең ҡалмағас, үҙең бар Мәскәүгә, — тиив Дәүней Дәүләтбаев.

— Ниңә бармаҫҡа ти? Батшаға яҙылған хатты Мәскәүгә үҙем апарам!..

Баязан Туҡтамышев һүҙенән дәртләнеп, башҡалар ҙа батшаны күреп ҡайтырға теләне.

Батша менән уның ялсыларына бүләк итеп тапшырырсаҡ йәнлек тиреләрен йыйҙылар ҙа, һыбайлы ир-егеттәр Мәскәүгә табан юлланды...

[1] Материалы по истории Башкирской АССР, ямер 1, 69-сы бит.

II

Аҡ батшаға яҙған хат менән Мәскәүгә китеүсе ир-егеттор тыуған иленә әйләнеп ҡайтманы. Улар эҙһеҙ юғалды.

Байтаҡ ваҡыт уҙғас ҡына башҡорт егеттәренең боласил казактар тарафынан таланып, йыртҡыстарса тукмалым үлтерелеүҙәре тураһында асыҡланды.

Башҡортостанда һәммәһе әүәлгесә үҙгәрешһеҙ ҡалды. Иван Грозныйҙың «Жалованная Грамота»ны һәм хәҙерге Рәсәй батшаһы Алексей Михайлович Романовтың 1649 йылғы Уложениеһы менән иҫәпләшмәйенсә, урыҫтарҙың башҡорттарҙы талауы артабан көсәйҙе.

Себер даруғаһы башҡорттары ғына түгел, бүтән даруға-өлкәләрҙә йәшәүселәр ҙә, яһаҡ йыйыусы урыҫтарҙың шәфҡәтһеҙ ҡыланышына сыҙай алмайынса, үҙ ерҙәрен ғлилап, ҡалмыҡтар менән ҡыр-ҡаҙаҡтар яғына ҡаса башюиылар.

Тамъян волосы старшинаһы Садирҙың Алябьев урыныа кплгән яңы Өфө һәм Верхотурья воеводаларына барып штыуының да, Мәскәүгә ялыу артынса ялыу яҙыуының •і файҙаһы теймәне.

Ьашҡорттарға үсләшкәндәй, воеводалар Исет, Әҫле ім Миәс йылғалары буйында өр-яңы урыҫ ҡалалары ...рр тәлә .

Улар артынса Арамильская, Верхне-Миасская, Багаицкая, Камышевскак, Новопесчаная, Чюмлянская тип •• млопгән төрмәләре менән слободалары[1] ла барлыҡҡа •и,п е.

Ике-өс йыл ваҡыт эсендә Минзәлә менән Бөгөлмә тирһенсдәге башҡорт ерҙәрендә лә ҡала-ҡаласыҡтар һалынды, о көнбайышта Сулман һыҙаты төҙөлә башланы.

Изел—Яйыҡ һәм һамар йылғалары буйындағы башкорт ерҙәрен ҡалмыҡтарға бирергә вәғәҙә бирсп, яңы Өфө воеводаһы уларҙы башҡорттарға ҡаршы ҡотортто һәм Ншиҡорттарға ҡаршы һуғышыусы ҡалмыҡ тайшаларына искор менән ярҙамлашты.

Ошоғаса дуҫ-нш күреп йөрөгән урыҫтар менән дошман-ШШҡалдан һуң, үҙ дәүләтен төҙөргә тырышҡан башҡорттарҙың уй-хыялдары селпәрәмә онталды. Урыҫтарҙан өҙлөкһеҙ талана торғас, халыҡ йәнә хәйерсе хәленә еткерелде.

Урыҫтарҙың башҡорттарға яуызлыҡ ҡылыуы сәбәбев ҙ аднр бей аңламаны. Батша хөкүмәтенең рөхсәтенән башҡа бпшкорттарҙы таларға, һалым күләмен ун тапҡырға

[1] *Слобода* — крепостной булмаған крәҫтиәндәр йәшәй торғая урын.

арттырырға, нахаҡтан рәнйетергә, туҡмарға, ҡатын-ҡыҙҙарҙы мыҫҡылларға баҙнатсылығы етер инеме икән урыҫтарҙың? Башҡортостандағы хәлде Аҡ батша, бәлки, белмәйҙер? Юҡ, беләлер. Батшаның рөхсәте булмаһа, Сулман һыҙығышдағы нығытмаларға воевода Зеленов командалығындағы стрелецтар менән стольник Языковтың казактары ебәрелмәҫ ине.

Урал аръяғында ла үҙәк Рәсәйҙән ебәрелгән урыҫ ғәскәре өс-дүрт тапҡырға артты. Батша хөкүмәтенә ялланған сит ил офицерҙары ла күбәйгәндән-күбәйә. Полковник Полуэктов командалығындағы ике полк[1], Тубыл менән Исет ҡалалары араһындағы ерҙәрҙә урынлашып, башҡорттарҙы суҡындырырға һәм ҡолға әйләндерергә тырыша, тигән хәбәр ҙә ысындыр, ахырыһы...

Садир мулла, нисек кенә баш ватмаһын, башҡорттарҙы һәләкәттән ҡотолдороҙай әмәлде тапманы. Ни эшләргә белмәй, балтаһы һыуға төшкән кеше шикелле, рухи төшөнкөлөк менән ултырған сағында, уның эргәһенә һарц Мәргән килде.

Ул Садир менән ҡуш ҡуллап күреште лә Себер даруғаһындағы күпселек башҡорттарҙың йәйләүен Яйыҡ менән Ағиҙел башланған ерҙәргә күсерергә, ҡатын-ҡыҙҙарҙы, бала-сағаны, ҡарт-ҡороно мал-тыуарҙары менән хәүефһеҙ урынға йәшерергә ниәтләнеүен һөйләне.

— Үҙ йәйләүҙәренән күсмәй ҡалырға маташыусылар ҙа бармы? — тип һораны Садир бей.

— Ундайҙар юҡ. Әммә биш ғаиләнән бер ир ауылдарҙы һаҡлау өсөн ҡалдырыласаҡ.

— Йәйләүҙәгеләр яңы урынға күсерелә башланымы?

— Әлегә юҡ, хәҙрәт. Кешеләр хәүефһеҙ ергә күсерелеп бөтөү менән урыҫ ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғышҡа әҙерләнә башлайбыҙ. Һин, хәҙрәт, беҙгә ярҙамлашырһыңмы?

— Әлбиттә, ҡул ҡаушырып ултырмаясаҡмын, — тпис Садир бей.

һары Мәргән шатланды:

— Ярай, һинең фекереңде генә белергә килгәйнем, - тип, ул урынынан торҙо.

— Сәй эсеп китһәңсе.

— Юҡ, һыҙылып-мыҙылып ултырырға ваҡытым *юҡ,* бик ҡабаланам. Йәнә бер нисә волосҡа барырға тейешмен, — Садир менән хушлашты ла һары Мәргән атышл атланды...

[1] Был полктар үҙҙәре менән ике мең бот дары, дүрт мец бот ҡурғаш, мең бот фитель, 14 пушка, мең мушкет (боронго мылтыҡ) һәм башҡа һуғыш ҡоралдары алып килгән булған. (Акт Арх. экспедиции, т. IV).

Бөтә нәмә һары Мәргән уйлағанса барып сыҡманы. Волость старшиналары менән осрашҡандан һуң, ул үҙенең тыуған ауылына ҡайтты. Кешеләрҙе икенсе ергә күсереү тәртибе хаҡында аҡһаҡалдар менән кәвдшләште ло ейөиә табан ыңғайланы. Шул саҡ йән-фарман сабып килгән һыбайлы күренде ауыл осонда. Ул яҡынайған һайиң, ура-м уртаһында өйөлөшөп тороусы кешеләрҙең дә Гюрсолоуы артты.

— Ни булды икән?

— Аллаһы тәғәләнән. булып, изге хәбәр ишетергә яҙһын!..

Йән-фарман сабып килгән егет, кешеләр өйөлөшеп тор-Ілп сргә килеп етер-етмәҫтән, манма һыуға төшкән атының башын шаҡара тартып туҡтатты, ла, хәле бөтөп, бышылданы:

— Беҙҙең эштәр харап!..

— Ни булды? Йүнләп төшөндөр, — тине һары Мәргән.

— Беҙҙә... Мәштим ауылында... — һыбайлы егет, ҡорона сығарылған балыҡ шикелле, йыш-йыш һуланы, — я... Іяман!..

— Нимә яман?

— Унда үлеш-ҡыйралыш!.. Урыҫтар яман ҡоторона!..

Һыбайлы егеттең һөйләүенән бер ни йүнләп аңламаһ ла, һары Мәргән атына атланды.

— Егеттәр, минең арттан ҡалмағыҙ, — тип итегенең үкһо менән атының бөйөрөнә типте һәм Мәштим ауылына ғабан елдерҙе.

III

Яҙғы йортҡа күсергә әҙерлек барған көндәрҙең бер һендә урыҫ баяры Максимов ауылға килергә тейеш ғған хәбәрҙе ишетеп, Мәштим ауылы башҡорттары аптырашты. Сөнки кем генә килмәһен, улар башҡорттарҙың ·ста ойберен ҡырып-сырып үҙҙәре менән алып китергә пҙрыштылар.

Ауылдаштарының кәйефе староста Яубаҫар Исламов-ло кире тәьҫир итте. Ул, тотҡан вазифаһы ҡушыуы ·ынса, икмәк-тоҙ менән баярҙы ҡаршыларға әҙерләнде.

Баяр тейешле ваҡытҡа килеп етмәне, оҙаҡланы.

Урпм шығырым- тулы ҡалыҡ, күңел төшөнкөлөгөнә бирмәҫкә тырышып, бер-береһен мәрәкәләне, белгән-ишетгән яңылыҡтар менән уртаҡлаштылар.

Псроүҙәр, баяр башҡорттарҙың батшаға яҙған хатын ишкерергә килә, имеш, тинеләр. Икенселәр, ундай хәбәр-

ҙең дөрөҫлөгөнә ышанмайынса, Нуғай даруғаһы башҡорттарының яуға күтәрелеүе, урыҫ алпауыттарының ҡыуылыуы, сиркәүҙәре яндырылыуы тураһында икеләтә-өсләтә арттырып һөйләнеләр.

— Нуғай даруғаһы **башҡорттары** азатлыҡ өсөн **көрәшкәндә**, беҙ бында урыҫ баярын ауыҙ асып көтәбеҙ.

— Раҫ, — тине икенсе кеше Дәүләтбай әйткәнде ҡеүәтләп. — Бүтән даруға башҡорттары ҡилмешәктәрҙе аргыҡ шаштырмайҙыр, ә беҙ үҙ күләгәбеҙҙән ҡурҡып **йәшәйбеҙ**! Шунлыҡтан **беҙҙе** бар тип тә белмәй яуыз урыҫтар. Көпә-көндөҙ талайҙар, бисәләребеҙҙе мәсхәрәләйҙәр, **үҙҙәре** теләгән ерҙәрҙә ҡаласыҡтар **төҙөртәләр, сиркәүҙәр** һалдырталар.

Уларға башҡалар ҙа ҡушылды:

— Ә беҙгә мәсет-мәҙрәсә һалдырыуҙы тыйҙылар, **балаларҙы** үҙебеҙсә уҡытырға ла ҡушмайҙар.

— Үҙебеҙ ҡурҡаҡ, ҡуян йөрәк булғас, кемгә үпкәләргә?

— һин, Исхаҡ ҡусты, тик ятма, бик батыр икәнһең, килмешәктәргә ҡаршы көрәш!

— Яңғыҙым ни эшләргә тейеш?

— һин башлаһаң, һинең артыңса бүтәндәр ҙә күтәрөлөсәк.

— Шәп булһаң, Дәүләтбай, һин башла!..

Йәштәр һөйләшкәнде һиҙҙермәй генә тыңлап тор! ай Йәһүҙә мулла асыуланды:

•— Телегеҙҙе тыйығыҙ, кешеләрҙе аламалыҡҡа ҡотортмағыҙ!

Урыҫ баяры киләсәк юлдан күҙҙәрен алмаған **Яубаҫар** староста ауылдаштары һөйләшкәнгә иғтибар итмәне.

Көн кискә һарҡканда ғына күҙ күреме алыҫлыктаРЫ ерҙә бер төркөм һыбайлы казактар оҙатып килгән баяр кырандасының ауыл осона яҡынлашыуы күренде.

Максимов яңғыҙы түгел, эргәһендә алтын погошШ капитан Замараткин ултыра.

Аттар ҡушарлап егеүле бейек рессорлы кыранлпа урам тулы башҡорттар ҡаршыһында туҡталғас, баяр **боренсе** булып иҫәнләште:

— **Һаумыһығыҙ,** башҡорттар!

— һаубыҙ, Аллаға шөкөр!

— Үҙең ни хәлдә, баяр? — тип староста менән муллв ауылдаштары исеменән яуап ҡайтарҙылар.

Халыктың шып-шым тороуына асыуы ҡабарып, **офицер** Заираткин ҡыҙарына-бүртенеп аҡырҙы:

— Башҡалар телен йотҡанмы? Улар **ниңә** һаулыҡ һорашмай?! Мин **һеҙҙе**, басурмандар...

- Корокмәй, **капитан** әфәнде, **кәрәкмәй,** — тип **Замаптоткпнди** яурынынан һөйҙө **лә,** түп-түңәрәк ҡара һаҡалын **һыпырғылай-һыпырғылай,** Максимов күҙ ҡарашын старостсшп **күсерҙе.** — Ауыл старостаһы һин бит әле?

— Мин, — тине Яубаҫар еңелсә ҡалтыранған тауыш Мрпоп.

Максимов кырандастан төштө.

— Йәйләүгә күсергә әҙерәнәһегеҙме?

- йәйләүгә иртәнән һуңға күсәбеҙ, — тине староста.

- Яҙғы йәйләүегеҙ ҡайҙа?

- Ҡышлауҙан әллә ни алыҫ түгел, өс-дүрт саҡрым **ерҙәге** Сөмөк йылғаһы буйында.

— Йәйге һәм көҙгө йорттарығыҙ ҡайҙа?

-- Дилбәр тауы аръяғында.

- Яҙғы йортоғоҙҙо икенсе урынға күсерһәгеҙ, нисек **буласыр?** — тип һораны Максимов.

Һин әйтергә белмәйенсә, Яубаҫар староста аптыраны.

— Шаяртаһығыҙмы, баяр әфәнде?

— Шаяртмайым.

— Нисек инде, баяр әфәнде, өйрәнгән ерҙе **ташлап,** бүтән урынға күсергә? — Староста башын һалындырҙы.—. Беҙҙең атай-олатайҙар ҙа яҙғы көндәрҙе Сөмөк йылғаһы оуПыида уҙғарған. Ул йоланы беҙгә ниңә боҙорға?

- Иген сәсеп үҫтерерҙәй ерҙәрҙе малдарҙан тапатып тик ятҡырыу йәл түгелме?

— Аллаһы тәғәлә биргән ерҙә мал аҫрауы хәләл, — ПГС староста.

Лубаҫарҙың бер ҡатлылығынан Максимов мыҫкыллы **көлдө.**

—Ипндәй кешеләр һеҙ, башҡорттар! Иген умырылып **үҫерҙәй** ерҙе малдарҙан тапатып тик ятҡырырға ярамаған ын аңларға теләмәйһегеҙ! Яҙғы йәйләүегеҙҙе бүтән ерҙә **күсерергә** ризалашһағыҙ, мин һеҙгә **ихмәк,** сәй-шәкәр **бирәсәкмен.**

- **Беҙҙең** яҙғы йорт урыны тик ятырға тейешме?

- Унда мин иген сәсергә теләйем.

— Беҙҙең **көтөүлек** урынындамы? — Староста ҡурҡынысһаҡ ағарынды.

— Мал көтөрҙәй ер бөткәнме ни һеҙгә? — Яубаҫарҙың •пчкореләнеүенә асыуы ҡабарып, Максимов ҡысымды **көсәйтте:** — Яҙғы йортоғоҙҙо икенсе урынға күсерһәгеҙ, һеҙҙең менән яҡшы мөнәсәбәттә йәшәйәсәкбеҙ. Ризалашмағыҙ, үҙегеҙгә үпкәләгеҙ!

— Нисек инде улай, **баяр** әфәнде? Беҙ... Беҙ бит...

Иларҙай хәлгә еткән старостаны Дәүләтбай **бүлдерҙе:**

— Атай-олатайҙарыбыҙ төйәк иткән яҙғы йортто бүтәп ергә күсерергә теләмәйбеҙ!

Ауыҙҙарына һыу уртлаған һымаҡ шып-шым ғына торған кешеләр ҙә, Дәүләтбайҙың һүҙен ҡүәтләп, шаулаштылар:

— Беҙҙең йәйләү урынынан башҡа ер бөткәнме баярға?

— Яҙғы йортто Сөмөк йылғаһы буйынан күсермәйбеҙ!

— Иген сәсерҙәй урынды бүтән ерҙән эҙлә, барин!..

Бер-береһен ҡысырыҡлап, кешеләр алға ынтылды. Казактар менән Максимовты уратып алған балдаҡ әкренләп-әкренләп тарайған һайын, кырандас эргәһендә торған капитан Замараткиндың төҫө лә нығыраҡ үҙгәреп барҙы.

Башҡорттарҙан ҡурҡыуын белгертмәҫкә тырышып, Максимов көслөк менән йылмайҙы.

— Юҡҡа ғауғалашаһығыҙ! Ихтирам итмәһәм, һеҙҙең менән дуҫтарса осрашмаҫ инем, һәммәһен властар ҡушыуы буйынса хәл ҡылыр инем!..

— Властар нимә ҡуша? — тип һораны Дәүләтбай.

— Яҙғы йәйләүегеҙ тирәһендәге ерҙәрҙе минә бирҙеләр.

Кешеләр, нәфрәтләнеп, ҡысҡырышты:

— Беҙҙең ерҙәрҙе һиңә бирергә урыҫ властарының хаҡы юҡ!

— Ер мәсьәләһе башҡорттарҙың йыйынында ҡаралырға тейеш!

— Иван Грозный заманында сығарылған законды боҙорға бер кемдең хаҡы юҡ!..

Асыуы ҡабарыуҙан капитан Замараткин ярыла яҙып аҡырҙы:

— Мол-ча-а-ать!.. Әҙәмсә әйткәнде аңламаһағыҙ, ҡобәхәттәр, мин һеҙҙе...

— Саша, кәрәкмәй, тыныслан. — Максимов офицерҙың ҡул һелкте. — Мин яҡшылыҡ менән һөйләшеп килешермә ышанам.

Офицер шымғас, башҡорттар ҙа ғауғалашыуҙан тыйылды.

— Мин һеҙҙең яҙғы йәйләүегеҙ тирәһендәге ерҙәрҙе һатып алырға ла ризамын, — тип Максимов. ауыл старостаһына эйәк ҡаҡты. — Йә, ошо хаҡта ни әйтерһегеҙ?

Хәйләле йылмайған баярҙың күҙҙәренә туп-тура ҡарарға Яубаҫарҙың баҙна,ҫылығы етмәне.

— Мин белмәйем... Ауыл халҡы теләһә...

— Юҡ, ер һатырға риза түгелбеҙ, — тип ҡысҡырҙы Исхаҡ.

Уныңһүҙен ҡүәтләп, кешеләр йәнә ыҡ ҡупты:

— Атай-олатайҙарҙан ҡалған ерҙе һатып бер кем дә ялҡымаған!

— Беҙ үҙ иркебеҙгә йәшәргә теләйбеҙ!

— Беҙҙең ерҙәребеҙҙә ҡала-ҡаласыҡтар төҙеүегеҙ ҙә гткон!

— Урыҫтарҙан күпме ыҙаланырға мөмкин!

— Урыҫтар, үҙ Рәсәйегеҙгә ҡайтып китегеҙ!..

Ппкиғаның киҫкенләшеүенә эсе бошоп, Максимов бын-10 кплеүенә үкенде. Ауылдаштары менән баярға яраҡлпшырға тырышҡан староста ла үҙен ике ут араһында тоҫҡан һымаҡ тойҙо.

Бола башланһа, ҡан ҡойоласағын аңлап, Яубаҫар бо-йорҙо:

— Ағай-эне, тынысланығыҙ! Ақылығыҙҙы юғалтмағыҙГ Ғауғалашыуҙың аҙағы нимә менән бөтөрөн иҫегеҙҙән сығармағыҙ! Өйҙәрегеҙгә таралышыр ваҡыт етте!..

Староста әйткәнде тыңларға теләмәйенсә, Дәүләтбай ҡысҡырҙы:

— Ағай, һин беҙҙең ауыҙҙы томаларға маташма! Урыҫтарҙың яуызлығына йәнә күпме сыҙарға мемкин? Максимон баярҙың сик белмәгән ҡомһоҙ нәфсеһе арта барыһына ҡасан да булһа сик ҡуйылырға тейештер бит! Бйрлы-юҡлы мөлкәтебеҙҙе талауы етмәгән, баярҙың оло ҡыҙы Прохор нисәмә башҡорт ҡыҙҙарының ҡыҙлығын алды, бисәләребеҙҙе мәсхәрәләне!..

Доүләтбайҙың һунғы һүҙе быҫкып янған утҡа һарыны шыйыҡсаһы һипкәнгә тиң булды. Бер аҙ тынысланған кешеләр йәнә ҡуҙғырҙы:

— Баярҙың улы Прохор ейөр айғырындай ҡылана!

— Уның яуызлығынан ҡотолорҙай әмәл ҡалманы!

— Оло улын яуызлыҡ ҡылыуҙан ниңә тыймай баяр?

Улы ярҙамында башҡорттарҙың нәҫелен урыҫлаштырға маташа микән әллә баяр?!.

Кешеләрҙең ҡысҡырышыуынан Максимов бер ни ҙә аңламаны. Старостанан һәммәһен һорашып белгәс кенә, ул йәһәтерәк яйларға тырышты:

— Туктағыҙ әле, башҡорттар, тынысланығыҙ!.. Беребеҙгә ҡысҡырышмай аңлашайыҡ!.. Оло улымдың әҙәпһеҙ ҡылanышын беренсе тапҡыр ишетәм!..

Шау-шыу баҫылманы.

Ғауғалашҡан башҡорттарҙы тынысландыра алмайынса, Максимов бер урында тыпырсынды.

Кешеләр!.. Мине тыңлағыҙ!.. Бөтә нәмә һеҙҙең менән коиәшләшеп башҡарыласаҡ!..

Ваяр алдында ярамһаҡланып, мулла ла яҙҙер ҡыс-

ҡырҙы. Ләкин уның һүҙен бер кем ишетмәне, ығы-зығы араһында күмелде.

Ҡысҡырышҡан тауыштар көсәйә барҙы.

Кешеләр араһынан ҡысылып уртаға уҙған кеше баяр ҡаршыһына барып баҫты.

— Оло улыңдың мәсхәрәләүенән ҡурҡып ҡасҡан минең ун биш йәшлек ҡыҙым, ярҙан һикергән ыңғайы, ике аяғың һындырҙы, — тип ҡыҙын дауалау есөн баярҙан **аҡса** талап итте.

— Был хаҡта аҙактан, аулаҡта **һөйләшербеҙ**, — тнио Максимов.

Кешеләр, ризалашмайынса, зәғифләнгән **ҡыҙҙың ата-***һәм* яҡлашты:

— Ҡалған эшкә ҡар яуа, барин!

— Ҡыҙҙы дауаларға тейешле аҡсаны беҙҙең алда түлә!..

Ярһыу кешеләрҙен талабына буйһоноп, кеҫәһенән **сы**ғарған аҡсаны Максимов зәғиф **ҡыҙҙың** атаһына һондо.

— Мә, ошоға ҡәнәғәтлән!

— Аҙ, бик аҙ бирәһең! Ике аяғы ла һынған **ҡыҙҙы** дауалау өсөн был аҡса етмәйәсәк, — тине Исхаҡ.

Капитан Замараткин баярға ҡаршы кешеләрҙе **ҡоторт**ҡан Исхаҡтың еңенән тартты.

— Кеше эшенә ҡыҫылма!

Исхаҡ, офицерға буйһонорға теләмәйенсә, **тартҡылаш**ты.

— Теймә миңә, миңә ҡағылырға ни хаҡың бар?!

Исхаҡ менән офицерҙың ҙә-ара төрткөләшеүе барлын 'башҡорттарҙы ҡуҙғыртты. Офицерҙы яҡлашырға әҙер **то**роусы казактар ҙа етеҙ хәрәкәтләнә башлағас, старостп алға'сыҡты.

— Ағай-эне, тыныслanығыҙ! Иоҙроҡ ярҙамында мәсыи ләне хәл ҡылырға маташыу — аҡылһыҙлыҡ, — тип **ауыл**даштарын иҫкәртте лә ул барлыҡ асыуын Исхаҡҡа **то**шөрҙө. — Йәш башың менән ололар эшенә ҡыҫылғансы, бар, өйөңә ҡайтып кит!

Старостаға ҡаршылыҡ күрһәтергә Исхаҡтың ҡыйыулығы етмәне.

— Үҙем өсөн хәстәрлек күрәмме ни мин? Ярар, **ауыл**даштарыма ярҙамлашыуымды тыйғас, мин китәм, — **тип** ул кешеләр араһына инеп юғалды.

Урамда көсөргәнешле тынлыҡ урынлашты.

Шау-шыу баҫылыуына **файҙаланып,** Максимов **кыроп**дасына менеп ултырҙы.

— Киттек!

Күсер дилбегәне ҡыймылдатты. Кырандасҡа **егеул**

атгар, баштарын сайҡап, хорһолдай-хорһолдай, киреҙ елдерҙеләр.

Кырандас тәгәрмәстәре менән казактарҙың ат тояҡтары аҫтынан урғылған туҙан өйөмө араһында тороп ҡалған башҡорттар тауыш-тын сығарманы.

Башҡорттар менән һөйләшеп килешә алмаған Максимовтың да ҡәйефе шәптән түгел ине. Ауыл осона етер **еңҡта,** ул артына әйләнеп ҡараны.

— Өйҙәренә һаман таралышмағандар!

— Берәй яманлыҡ ҡылырға уйлайҙарҙыр, — тине **ка**питан.

— Юҡ, Саша, яңылышаһың, — тине Максимов. — Миһ.) яманлыҡ ҡылырға башҡорттарҙың батырсылығы етмәҫәк! Бөтә нәмә уларса түгел, ә мин теләгәнсә башҡарыласаҡ!

— Башҡорттарҙың бегенгө ҡаршылыҡ күрһәтеүен нимо менән аңлатырға, Иван Федорович? — тип һораны ка**питан** Замараткин.

— Көтөүҙе бер алама һыйыр бысрата, ти. Кешеләрҙең шау-шыу ҡубарыуына бер Исхаҡ ғәйепле. Уны төрмәгә **ябырга** тырһам, Мәштим ауылында тыныслыҡ урынлашасаҡ.

Мәштим ауылына барыуығыҙҙың кәрәге бар инеме **әйтәһе**го, Иван Федорович?

Офицер менән ризалашып, Максимов үкенес белдерҙе:

Унда барыуым яңылыш булды. Ер мәсьәләһен старостa менән хәл ҡылырға ине йәки, бер кемдән дә рөхсәт **алып** тормайынса, үҙ белдегемә эшләргә кәрәк ине.

- һис юғында воеводанан рөхсәт алырға ине һеҙгә, **Иван** Федорович!

- Был тирәлә берҙән-бер баяр булараҡ, мин—баш, **тип** -түш, — тине Максимов ҡупырайып.

- Әгәр ҙә мәгәр башҡорттар ҡаршылыҡ күрһәтһә, Пппп Федорович, ни эшләрһегеҙ?

Максимов һорауға һорау менән яуап ҡайтарҙы:

-- Мине оҙатып йөрөүсе һинең казактарың нимә **өсөн?**

- Аңлашыла, Иван Федорович, уныһы аңлашыла, — **тине** капитан Замараткин, ризалашып.

IV

Баярҙың талаптарын кире ҡағыуҙы екеү тйп **һанап,** Маштим ауылы кешеләре тантана киҫерҙе.

Максимов баяр менән осрашҡандың иртәгене **көнө таңында** кемдер староста **өйөнөң** тәҙрәһенән шаҡыны.

— Түрә, тор әле, тор!..

Тоҙра быялалары зыңҡыған тауышҡа ҡуркып уянғав

староста Яубаҫар, йоко аралаш бер ни ацламайынса, тү-
яиәгенән торҙо.

— Нимә?.. Янғын-маҙар сыктымы әллә?,

— Ишегенде- ас әле, зинһар! Ашығыс йомошом бар!

— Таң тишегенән ниндәй йомош булыуы мөмкин?

— Тышка сыккас әйтермен...

Староста, катыны менән бала-сағаһын уятмаҫка тырышып, һаклык менән тышка сыкты. Ишек алдында торған дегет кайнатыусы картты күргәс, уның асыуы бер аҙ басылды.

— йомошоңдо көндөҙ килеп әйтергә булмай инеме, бабай?

— Булмай ине шул... Максимовтың һабансылары, кисә кистән башлап, беҙҙең ерҙәрҙе актарырға тотондолар

— Кайһы тирәләге ерҙәрҙе? — Старостаның коро алынды.

— Яҙғы йорт тирәһендәге кетөулектәрҙе һөрәләр! Тоии буйы алмашлап эшләгәс, арымайҙар.

— Әле лә һөрәләрме?

— Һөрәләр.

— Нисә һабансылары бар?

— Байтак.

— Ниңә һанаманың?

— Күмәк казактар һаклағас, һабансылар эргәһенә якын барырға курктым...

Староста ни эшләргә белмәне.

— Ай, бәлә, бәлә!.. Кайҙан килеп сыкты был казя, — тип бер урында тапанып торҙо ла, ул мәсет каршыһындағы өйҙә йәшәгән мулла эргәһенә китте.

— Эй, хәҙрәт, уян әле, уян!..

Яурынына сәкмәнен һалып, Йәһүҙә мулла староста әртәһенә сыкты.

— Ни булды?

Дегет кыуыусы карттан ишетеп белгәндәрен староиа әйткәс, мулла ағарынды.

— И тәңрем, үҙең ярлыка!..

— Ваҡытты бушка уҙғармайык, хәҙрәт. Иртәнгс һаҙаға йыйылған кешеләр менән баяр ялсылары эргәһенә барып, ер һөреүҙе туктатайык!

— Халык мәсеткә йыйылғансы, әйҙә, иртәнге сәйҙе эсәйек.

Старостә асыуланды.

— Сәй эсеү кайғыһымы ни? Кешеләрҙе йәһәтерәк йыйҙыртайык та иртәнге намаҙға саклы кузғалайык.

— Иртәнге намаҙҙан һуң барһак ярамаҫмы?

— Иртәнге намаҙҙы юлда барышлай уҡырбыҙ, хоҙ>ит

• - Ярар, ярар, котолғоһоҙ бәлә килеп тыуғас, Аллаһы ыг.)ло беҙҙе үҙе ярлыҡар, — тине мулла.

Поһуҙә мулла, өйөнә кайткас, оҙак аҙапланды. Урындыкка йәйеүле балаҫ өҫтөндә иртәнге намаҙҙы укып, ялсы катын кайнаткан сәйҙе эскәндән һуң ғына, ул тышка сыкты.

Мулла урамда күренгәс тә, балта, һәнәк, оҙон һаплы тимер керәк, салғы һәм күҫәк-сукмар менән коралланған И) егсттәр яҙғы йәйләүгә табан ыңғайланылар.

Юлда барышлай тауыш-тын сығарманылар.

Сөмөк йылғаһы тәңгәлендәге һоҙәк тау һыртына күтәрелгәс кенә ир-егеттәр, аптырашып, бер-береһенә карашты.

• һуңлағанбыҙ!

- Йәйләү тирәһендәге ерҙәрҙең ярты-йортоһы ғына һпролмәй калған.

— Йорттарыбыҙ диңгеҙҙәге утрау шикелле!

•- Кәртә-куралар емерелгән!

-- һабансылар кайҙа икән?

• Улар, ана, бейәләр һауа торған ерҙәрҙе һөрә!..

Ныбайлы ир-егеттәрҙе эйәртеп, староста алға елдерҙе. (пмок яры буйындағы сиҙәмде актарыусы егермегә якын |||0ппсы менән уларҙы һаклаусы һалдаттарҙы күргәс, ' •щроста атын яйлатты.

• Ағай-эне, һабансыларҙы кораллы һалдаттар һаклай. Уларға каршы һуғышабыҙмы, әллә киргә боролабыҙмы?

• һалдаттарҙан куркып касыр өсөн килдекме ни онда? — тип һораны Дәүләтбай. — Атай-олатайҙарҙан (ғаған изге еребеҙ именлеге өсөн урыҫтарға каршы һуғышып үләсәкмен!

- Мин дә, актык каным калғансы... — тине Исхак.

Бүтәндәр ҙә улар менән теләктәшлек белдереп, шаулашты.

Баяр кешеләрен кыуырға!

Кәтергә теләмәй каршылашһалар, уларҙы дөмбәҫ-ләп..

Бер-береһен сәмләндереп, егеттәр алға елдерҙе.

Башкорттар якынлаша башлағас, унтер-офицер ниҙер сысҡырҙы һәм мылтык тауыштары гөрһөлдәне.

Пои-фарман сабышып барыусы егеттәр, кораллы һалдаттарға якынлашыуҙан куркып, аттарын яйлатты.

Кире боролабыҙмы әллә? — тип һораны Исхак.

Урыҫтарҙың мылтығынан курккас, бында килмәҫкә кирәк иие, — тине лә, атының кабырғаһын каты үксәне (ып ышкып, Дәүләтбай алға ташланды.

Якшы атка менеп, кулына алган
Ук-һаҙаккай тигән коралын,
Аямаган йәнен, түккән канын,
Һис бирмәгән башкорт Уралын...

Тештәрен шығырҙата кысып, баҙлап янған күҙҙоро менән алан-йолан каранды ла, бер ни өндәшмәйенсә, Исхак Дәүләтбай артынан сапты, ә калғандар уның артынан эйәрҙе.

Залп яңғыраны.

Һыбайлы башкорттар араһынан үлемесле яраланып, кемдер эйәренән коланы. Бер кешенең үлеме башкорттарҙы куркытманы, киреһенсә, асыуҙарын кабартты.

Казактар якындағы тышаулы аттарына атланырға өлгөрмәне. Улар башкорттарға каршы йәйәү һуғышырға мәжбүр булды.

Алыш озакка һуҙылманы. Коралһыҙландырылған казактар төркөмө менән унтер-офицерҙы староста хөкөмопо тапшырҙылар.

Шул сак кемдер һөрән һалып кыскырҙы:

— Баярҙың оло улын тотоғоҙ!

— Кайҙа ул?

— Сөмек йылғаһы буйына йүгерҙе!..

Баярҙың оло улы Прохор ҙа касып котола алыаны

Күлдары артка кайрылып бәйләнгән Прохор, үҙен ебәреүҙе талап итеп, кыскырҙы:

— Бындай кыланышығыҙ өсөн берегеҙҙе лә калдырмай кырҙырасакмын! Йҙән калырға теләһәгеҙ, барыбыҙ ла ебәрегеҙ!

— Беҙҙең ерҙәрҙе рөхсәтһеҙ һөрҙөрөүе етмәгән, ҙа алырға кырсына, яуыз, — тине Дәүләтбай.

Уның һүҙен хуплап, башкалар ҙа кыскырышты:

— Барса ғәйеп баярҙың оло улында!

— Кыҙҙарҙы боҙмаһын өсөн, Прохорҙы бестерәйек!

— Ра-а-аҫ!..

Үҙен ниндәй яҙмыш көтөүен аңлап, Прохор капыл боло йерәне.

— Мине ундай язаға тарттырырға хакығыҙ юк!

— Ә һинең башкорттарҙы таларға, еребеҙҙе рөхсәтһөрөргә, һылыу кыҙҙарыбыҙ менән катындарыбыҙҙы мәхәрәләргә хакың бармы, яуыз? —тип, староста баяр улын бестерергә рөхсәтен бирҙе.

Прохор ялынып-ялбарҙы:

— Улай язалағансы, мине туҡмап үлтерегеҙ!

— һине үлтермәйбеҙ, йәшә. Башкорт кыҙҙарын боҙмаҫтай хәлгә генә еткерәбеҙ, — тип айғырҙарҙы бестерә

ОуЛынса кулы оҫтарған Ишморат кулындағы үткер быҫакты күргәс, Прохор кыскырып иларға тотондо.

— Зннһар, ебәрегеҙ!.. Бынан кире башкорт кыҙҙарына якын да бармам!..

— Бестерелһең, әлбиттә, кыҙҙарға якын бармаҫһың,— тип Ишморат һөрән һалып аҡырған баяр улын ергә йығып һалырға кушты.

Лрохор, илай-илай, тартқылашты, туланы, тибәләнде.

— Егеттәр, күҙгалмаҫлык итеп тотоғоҙ!

Салбары систерелгән Прохор, язанан котола алмаясағын аңлап, һаман һөрән налды:

— Коткарығыҙ-ыҙ!.. Зинһар, коткарығыҙ!.. ,

Упың ялынып-ялбарып кыскырыуына бер кем дә иғтибар нтмәне. Кулдары артка шакарып бәйләнгән казактар менән һабансылар ҙа шым ғына торҙолар.)

— Аяктарын киреп, ныҡ тотоғоҙ яуызды!

Аңғырҙар бестереүсе салған һалынған баяр улы эргәһендә тубыкланды.

— Тик кенә ят, Прохор, тулама! Тыныс ятһаң, һиҙмәй ҙә калырһың. Юғиһә, яңылышып, бүтән ереңде лә киҫеп ҡуйырмын, — тип әүрәтте ул баяр улын.

Прохор, һаман нимәгәлер өмөтләнеп, ғәфү үтенде:

— Ярлыкағыҙ, зинһар!.. Имен калдырһағыҙ, бер нәмә ҙә йолләмәм!..

— һинең аҙғынлығывды бүтәнсә туктатып булмаясак,— тип бестереүсе бысағын кыймылдаткас, баяр улының күҙҙәре аҡайҙы.

- А-а-а!..

Йән әрнеткес тауыш менән кыскырған Прохорҙы бестереүсе үҙ эшен белеп, айғыр бестергәндәге шикелле, тышҡа башкарҙы.

-- Хәҙер бөтә, аҙ ғына сыҙа. Ошонан һуң үҙенә лә, башкорт кыҙҙарына ла борсолоуһыҙ йәшәргә мөмкин булыр инде, — тип ул ах та ух ыңғырашкан баяр малайының ҡфһынан аккан канды тоҙ һибеп туҡтатты ла, сепрәккә нфоүле ит киҫәген кулы сиселгән крәҫтиәндәрҙең береһенә һондо. — Мә, ошоно Максимов Иван Федорович бәрәңге апарып тапшыр. Ул беҙҙе ғәйепкә алмаһын, сенки бүтәнсә тыныс йәшәрҙәй әмәлебеҙ калманы.

һабансылар, теләктәшлек белдереп, шаулаштылар:

— Беҙ һеҙҙе аңлайбыҙ, бик тә аңлайбыҙ!

— йәш баяр беҙҙең кыҙҙарыбыҙҙы ла имен калдырмаҫ!

— Хәҙер тыйнакланыр инде!..

Прохорҙы йәк арбаһына һуҙып һалдылар ҙа кушар-

лап егеүле аттарҙы сейәле тау аръяғындағы ҡаласыҡҡа табан ыңғайлаттылар.

һабансылар күҙҙән юғалғас, Дәүләтбай казактар яғына эйәк ҡаҡты.

— Быларҙы ни эшләтәбеҙ?

— Баяр ҡушыуына буйһонған һалдаттарҙың ғәйебе юҡ, китһендәр, — тине староста.

V

Яҙмыштан уҙмыш юҡ, ти.

Унтер-офицер командалығындағы һалдаттарҙы ҡайтарып ебәреп, һөжүм ваҡытында үлгән башҡорт егете мәйетен яҙғы йорт йәйләүе эргәһендәге зыяратта ерләгои саҡта алда нимә булырын бер кем дә башына килтермәне.

Уларҙың мәйет менән оҙаҡ аҙапланыуы менән файҙаланған унтер-офицер командалығындағы һалдаттар, ирҙәре өйҙә юҡ саҡта Мәштим ауылындағы ҡатын-ҡыҙҙарҙы мәсхәрәләп, уларҙың бөтә нәмәләрен үҙҙәре мсноп алып киткәндәр.

Ләкин ҡоралһыҙландырылған яуыз һалдаттар алыҫҡа китергә өлгөрмәгәндәр. Ярты юлда ҡыуып еткән башҡорт егеттәре уларҙың береһен дә ҡалдырмай тукмап үлтерҙеләр ҙә, үҙҙәренең әйберҙәрен кире алып ҡайттылар.

Бынан һуң ваҡиға киҫкенләште.

Максимов йәшәгән ҡаласыҡтан иртәнме-бөгөнмө Мәштим ауылына оло ғәскәр килергә тейеш, имеш, тигән хөбәр таралды.

Ул хәбәрҙең ысынмы, әллә бушмы икәнлеген бер кем дә йүнләп белмәне. Әммә Прохорҙың бестерелеүен һөм бер төркөм һалдаттарҙың тукмалып үлтерелеүен Максимов баяр иғтибарһыҙ ҡалдырмаясағын башҡорттар якшы аңланы. Шуға күрә улар каратслдәргә ҡаршы көрәшергә әҙерләнде.

Капитаи Замараткин командалығындағы уҡсылар бөтальоны ҡаласыҡтан сығыуы тураһында хәбәр алыпгпСһ уҡ-һаҙаҡтар, һалдаттарҙан ҡалған мылтыҡтар, һөңгөләр, һәнәктәр һәм балталар менән ҡоралланған ирҙәр ауыл осондағы яланда йыйылды. Көсөргәнешле тынлык ваҡытында уларҙы шомло ҡуркыныс иҙҙе, тәкәттәрен ҡоротто.

- Шымып тороуҙан ялҡып, кешеләр үҙ-ара быш та бышыр һөйләшә башланылар.

— Замараткиндың һалдаттары, бәлки, кире боролмаҫ дарҙыр?

— Ҡаласыҡтан сыҡҡан һалдаттар кирегә боролмаясаҡтар!

Дәүләтбай, һалдат мылтығы менән һелтәнеп, ҡупырииды:

— Яҡын килеп ҡараһындар, уларҙың да күрмәгәнен нурһәтәсәкбеҙ!

Уиыщ менән ризалашып, Исхаҡ та мактанмай булдыра йлманы:

— Килеп кенә ҡараһындар, беҙ уларҙы ла дөмбәҫлоПосоҡбеҙ!..

Баяр улын бестереүсе Ишморат, кешеләр һөйләшеүенә ҡыҫылмай, күҫәк шикелле итеп тоткан мылтыҡ прикллды Мепон аяғы астындағы ерҙе төйә-төйә, каратслдәр килә-сак якҡа өҙлөкһеҙ ҡаранды.

Оле бер, әле икенсе урында килмешәктәргә ҡарата ҡуҙырылған ләғнәт һүҙҙәре ишетелде.

Үҙе өйҙә юҡ саҡта һалдаттар тарафынан ҡыҙы көсләтелгәнен бер кемгә лә белгертмәҫкә тырышкан Йәһүҙә ҡатыны менән Яубаҫар старостаның да күңеле тыныс түгел.

Күҙ күреме алыҫлыктағы ерҙә һалдаттар колоннаһы күренгәнгәс, бер нисә кеше ҡыскырып өндәште:

- Ана, киләләр!

— Тулкын, тулкын булып киләләр!

- һалдаттар бик күп!..

Ауыл осондағы яланда тынлык урынлашты.

Ололар түгел, хатта бала-саға ла, ҡот оскрс фажиғә гкыилашыуын һиҙеп, шып-шым ғына торҙо.

һалдаттар колоннаһы ҡарышлауык шикелле ҡыймылдай.

Һыбайлы офицерҙың ҡамсы һабы менән һелтәнеп ниҙер ҡысҡырыуына буйһонған колонна тукталды. Арттағылар туҡтап еткәс, ул йәнә ҡуҙғалды.

Һалдаттарҙың мылтык көбәктәренә беркетелеүле штыктарының ҡояш нурҙарына сағылып ялтырауы Дәүләт-Пи ауыр төштө хәтерләтте. йоҡононан уянып китер ҙә, ҡорсолдорғос бөтә нәмә эҙһеҙ юғалыр һымаҡ тойолдо уға. Ләкин был күренеш өң ине шул. Тигеҙ рәткә теҙелгән колонна һәм улар артындағы орудиелар ҙа ысынбарлык ине.

Кппеләр өйөлөшөп торған ергә саҡлы йөҙ илле аршын иыһы ара ҡалғас, капитан Замараткиндың бойороғо ишетелде.

Ике ротаның береһе юлдан һулға, икенсеһе уңға ҡарайырылды.

Атын уйнаҡлатып, Замараткин роталарҙан алға сыҡ-

ты. Ауыл осондағы башҡорттарҙың иғтибарын үҙенә йәлеп итергә тырышып, ҡамсы һабы менән болғай-болғай, ул ҡыҫҡырып өндәште:

— Ә-әй, башҡорттар, башлыҡтарығыҙҙы тотоп бирһәгеҙ, һеҙгә ел-ямғыр теймәйәсәк!

Башлыҡһыҙ ҡалған боланың аҙағы нисек тамамланасағын аңлап, башҡорттар яуап ҡайтарманы.

— Кешеләрҙе болаға ҡотортоусыларҙы тотоп бирмәһәгеҙ, барығыҙҙы ла ҡырам, — тип ҡыҫҡырҙы офицер

Ел иҫкәнгә сайҡалған үлән баштары шикелле, бер-Сореһенә һырығышып тороусы кешеләр етеҙ хәрәкәтләпп башланы. Бәлә-ҡаза яҡынлашыуынан ҡурҡып ҡыҫҡырышҡан ҡатын-ҡыҙ менән бала-саға тауышы ер-әсәнең орап алғаны һымаҡ ишетелде.

Халыҡ төркөмөнән айырылған бер йәш ҡатын, сабый йын күкрәгенә ҡыҫып, һыбайлы офицерға табан ыңғайланы. Ул, офицерға ун-ун биш аҙым самаһы ҡалғас, ҡыскырып өндәште:

— Һинең бер һалдатыңдан тыуған сабый менән берг Iүлергә теләйем. Йә, үлтер, яуыз!

Һыбайлы офицер эйәрендә борғоланды.

— Аҡылһыҙ бисә, кит юлдан!

— Аҡылһыҙланыуыма һинең һалдаттарың ғәйепле! Пи, атығыҙ, үлтерегеҙ, ҡәбәхәт ҡан эскестәр!

Сабыйын ҡосаҡлаған йәш ҡатынды күҙәткән юлдаш ике яғындағы роталар хәрәкәтһеҙ ҡалды.

Бындай күренеш һалдаттарға кире йоғонто яһауыи аңлап, капитан Замараткин ҡыҫҡырҙы:

— Нинә аңшайҙығыҙ? Атығыҙ! Пли!

Уҡсы роталар хәрәкәтһеҙ ҡалды.

һалдаттарҙың ҡаршыһында тороусы башҡорттар, шаулашып ҡыҫҡырыша-ҡыҫҡырыша, роталарға яҡыплшШ башланылар.

Офицер, башҡорттарҙы һалдаттар менән аралаштырыҡыҫҡа тырышып, һауаға нагандан атты.

— Туҡтағыҙ!

Башҡорттар туҡтаманы. Офицерҙың аты, ғауғалашып кешеләрҙән өркөп, стена кеүек торған һалдаттар яғынарты менән сигенде.

Баш бирмәгән атының ҡорһағына тибәләнә-тибәлә капитан Замараткин өҙлекһеҙ ҡыҫҡырҙы:

— Атығыҙ!..

Роталар ҡуҙғалманы.

— Боласылар ҡулына эләкһәгеҙ, һеҙҙе лә туҡмап үтерәсәктәр!..

Офицерҙың һуңғы һүҙенән һалдаттарға аң инеп

төшмәне. Күҙ тәңгәленә күтәргән мылтыҡтарын улар башҡорттарға тебәнеләр.

Башҡорттар туҡталды. Ирҙәрҙе кире боролорға өндәп, ҡатын-ҡыҙ сыр-сыу ҡыҫҡырышты.

— Пли! — тип ажғырҙы офицер.

Упың ҡушыуына яуап итеп, мылтыҡтарҙан аткан таушытар яңғыраны.

Башҡорттар тирә-яҡҡа һирпелде.

— Һалдаттар һауаға атты, — тип ҡыҫҡыра-ҡыҫҡыра, Һәр ҡасып барыусы башҡорттарҙы туҡтатырға тырышты. Ләкин ул ҡоттары алынған халыҡты туҡтата алмапп Ҡасып барыусылар артынан йүгереп барҙы-барҙы ла, ҡулдан пуляһы тейгән күкрәген тотоп, ергә тәкмәсте.

Отароста менән мулла ла үлемесле яраланды.

Шунда ғына һалдаттарҙың һауаға атмауын аңлап, Дәүләтбай ир-егеттәрҙе нисек тә булһа туҡтатырға һәм мылтыҡтар менән уҡтарҙан яуап уты асырға ҡушты.

Дәүләтбайҙы бер кем дә тыңламаны. Үлемдән ҡоторға тырышыусы кешеләр ҡоралдарын ташлап ҡасты.

Куйы төтөн ағымы таралырға өлгөрмәй, залп артынса залп яңғырай.

Туылдаштарын каратслдәргә ҡаршы һуғыштыра алоағын аңлағас, Дәүләтбай ҙа урам буйлап йүгерҙе.

Үлеләр менән яралыларҙы тапап-изеп, арттан каратель-ҡҙәрләне.

Капитан Замараткиндың командаһы ишетелгән һайын, ҡулаған башҡорттарҙың ғүмерен өҙөлдө.

Ҡасып барыусылар артынан йүгереп барышлай, Дәүләтбай гел бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатланы:

— Егеттәр, ҡасмағыҙ!..

Ҡасып барыусы төркөмдәр һирәгәйгәндән-һирәгәйә ине. Улар урамдың икенсе осона етер саҡта, йәнә залп яңғыраны.

Дәүләтбайҙың һыңар бот балтыры сем итеп ҡалды

Упың ыштан балағы ҡып-ҡыҙыл ҡанға мансылды.

Битте!.. Былай булғас, бөтәһе лә ҡырылып бөтәсәк», уПланы ул.

Ике яҡтан ҡултыҡлаған егеттәр ярҙамында ауыл ситендағы өйҙөң баҙына төшөп йәшеренгәс, Дәүләтбай ҡыуғәле күренеште күрше ауыл кешеләренә барып әйтергә һәм уларҙың ярҙамға килеүен һораны.

Упың ҡушыуына буйһонған егеттәрҙең береһе Дәүләтбай ергәһендә ҡалды, икенсеһе күрше ауыл кешеләренә тиҙерәк барып әйтергә ҡабаланды.

Бер аҙ ваҡыт уҙғас, баҙға төтөн тулды.

Дәүләтбай эргәһендә ултырған егет, баҙҙан сығып, тәҙрәнән ҡараны.

— Һалдаттар ауылға үрт төрткән. Был өйҙөң урам яҡ стенаһын да янғ"ын солғаған. Төтөнгә сәсәп үлгәнсе, урманға табан барайыҡ, — тип егет Дәүләтбайға баҙҙан сығырға ярҙамлашты. Ләкин улар ҡасып ҡотола алманылар, һалдаттарҙың штыгынан үлделәр.

VI

Дәүләтбай ярҙам һорап ебәргән егет һуңланы. Ул Һары Мәргән етәкселегендәге башҡорттарҙы алып килеүгә һалдаттар юҡ ине, Мәштим ауылынанда кел-күмер гепо ҡалғайны.

Теләһә ҡайҙа йәшеренеп үлемдән ҡотолған бер нисә ҡарт-ҡороно күргәс, һары Мәргәндең күҙҙәрендә бөрсек-бөрсөк тамсылар ялтланы.

— Яуыздар!.. Карателдәрҙән үс алмайынса, тукталасаҡ түгелмен. Ҡанға — ҡан, үлемгә — үлем! — тип һары Мәргән атына атланды.

Ул, нисек кенә ярһыуша ҡарамаҫтан, аҙ һанлы төркөм менән баяр ҡаласығыша һөжүм башларға ҡабаланманы. Ауылдан ауылға, йәйләүҙән йәйләүгә йөрөп етерлек көс туплағас ҡына, 1662 йылдың июль уртаһында, походҡа сыкты.

Көн йәйгесә аяҙ, эҫе торҙо. Ер өҫтөн матурлагаи сәскәләрҙең бер төрлөһөнөң орлоктары ҡойолорға өлгөргән, икенселәре, киреһенсә, яңы сәскә аткан.

Воеводаларҙың йәбер-золомонан ҡасып, һуңғы Пугачёвтарҙы ситтә уҙғарырға мәжбүр булған һары Мәргән әлеге тыуған төйәгенең һәр нулышы ҡәҙерле, һөйкөмлө, гүзәл. Тип-тигеҙ болондар, уйһылыктар, ҡылған үләнле далалар менән аралашҡан ҡая ташлы киртләс-киртләс Урал тауҙары менән һоҡланмаған кеше бар микән донъя.ыр. Башҡорттарҙың нисәмә быуаттар буйына килмешәкмәндәр ыҙаланыуының төп сәбәбе — улар йәшәгән ер байлығында. Татар-монголдарҙың ҡара яуынан һуң кемдәр генә тапамаған һәм таламаған был ерҙәрҙең байлыҡтарын. Башҡорттарға ҡайғы артынса ҡайғы, бәлә артынсп бәлә килтерер өсөн яратты микән Аллаһы тәғәлә был ерҙәрҙе. Шулай булмаһа, уның ер-һыу байлыҡтарына һоголоу килмешәктәр килер инеме был яҡка? Башҡортостандың урмандарындағы, ер-һыуындағы байлыкты таларға килеүсе килмешәктәргә ҡаршы һуғыштарҙа башҡорттарҙың ҡырылыуының иҫәбе-һаны юҡ...

һары Мәргән, тыуған иленә ҡарата булған ҡайғы-һағтмыи баҫа алмайынса, яуҙаштарын эйәртеп барышлай, «Урал» көйөн һуҙҙы.

Күгәрепкәй яткан Урал тауы —
Ата-олатайҙарҙың да төйәге.
Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булғаы
Шунда ята батырҙар һөйәге.

Йән тетрәткес йыр шауҡымына бирелеп, һары Мәргән Башҡортостандың ауыр яҙмышы, уның алыҫ үткәндәре һом киләсәге хаҡында уйланды. Килмешәктәрҙән ҡасан. ДО булһа ҡотолоп, үҙ дәүләтен тергеҙергә һәм әҙәмсә йәшоргә яҙған микән башҡорттарға? Сит ил баҫҡынсыларының йәбер-золомонан тағы күпме ыҙа сигергә мөмкин? Татар-монголдарҙың ҡара яуынан һуңғы башҡорттарҙың Яохсте кирегә ыңғайлауы, бер туктауһыҙ килмешәктәрҙәа ителеп йәшәү сәбәбен нимә менән аңлатырға? Туктамыш ханидың өс йөҙ меңлек ғәскәрен эҙәрләп, ике йөҙ меңлек ғәскәр менән Башҡортостандың урта өлөшөнән ике тапМ.ф уҙған Аҡһаҡ Тимерҙең яуызлығы ғына башҡорттарға импдой бәлә-ҡаза килтергән бит! Шунан бирле мал-тыуарлыҙ ҡалҙға аслыктан ҡырылған башҡорттар мандый алМлиы. Нуғайҙарҙы, Ҡазан, Әстрхан менән Себер хандарын Иван Грозный ҡыйраткандан һуң бер аҙ иркенләп ошлай башлаған башҡорттарға берләшергә һәм үҙ дәүпогеп тергеҙергә мөмкинлек тыуғайны. Хәҙер һәммәһе киреге әйләнде, урта Рәсәйҙән күсеп килгән урыҫтар элекке ҡондарҙан да яманыраҡ башҡорттарҙы талайҙар һәм ҙарҙы үҙ ерҙәренән ҡыуалар...

Урыҫтар менән башҡорттарҙың үҙ-ара мөнәсәбәте бозоуы һары Мәргәнгә тынғы бирмәне, борсолдорғос уй уны өҙлөкһеҙ иҙҙе, ғазапландырҙы. Был боланың аҙағы нисек тамамланыр? Тамъян волосы старшинаһы Садир ҡ\ллапың кәңәшен тотоп, бола ҡубарыуҙы туктатырғамы инме? Башҡорттар үҙ ирке өсөн көрәшеүҙән туктаһа, килмешәктәр уларҙы артабан интектерәсәк һәм мосолман ишенән яҙҙыртасаҡ бит! Юҡ, Мәштим ауыл фажиғәһенең кабатланыуына юл ҡуйырға ярамай! Йырткыс бүреләрҙе оҙгеләнгеһе килмәһә, башҡорттар арыҫлан булырға тырышырға тейешле! Йә үлем, йә азатлыҡ өсөн көрәш!..

Эсе бошоуын баҫа алмайышса, һары Мәргән йәнә Урал»ды һуҙҙы:

Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алған
Уҡ-һаҙаҡҡай тигән ҡоралын,
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын.

Оҙон үләнде тапап иң алдан барған һары Мәргәндең аты Сейәле һыртына күтәрелгәс, тирә-яктағы тәбиғәт күренеше ус төбөндә яткан һымаҡ булып күренде.

— Ана, сауҡалар аръяғынан күмәк һарыҡтар көтөүе килә, — тине кемдер.

Ысынлап та, киң үҙәндә иңләп килеүсе һарыҡтар көтөүенең иҫәбе-һаны юҡ.

— Сейәле итәгендә һыйыр көтөүе лә бар!..

Уң ҡулын маңлайы тәңгәленә ҡуйып мал көтөүҙәреп күҙәткән һары Мәргән аптыраны.

— Былар кем малы икән?

— Берәй байҙыҡылыр.

— Юҡ, ул тиклем малды аҫрағаң башҡорт байының ошоғаса һаҡланыуы мөмкин түгел, — тине һары Мәргән. Сейәле тау ҡаршыһындағы урмандан сыҡҡан һыбайлы һалдаттарҙы күргәс, ул һиҫкәнде. — Һалдаттар!.. Кешеләрҙән талап йыйған малды һалдаттар ҡыуып килтерә!

— Һалдаттарҙан алда әфисәр Замараткин да шунда!

— Былай булғас, аңлашыла. Башҡорттарҙан талап йыйған малды. Көңгөр ҡалаһына апаралар, — тип һары Мәргән Сейәле тау итәгенә яҡынлашҡан карателдәргә ҡаршы елдерҙе.

Ябырылып килгән һыбайлы башҡорттарҙы күргәс, капитан Замараткин мал көтөүҙәренә таралышҡан һалдаттарға ниҙер ҡысҡырҙы. Ләкин тарҡауланған көстө тирә-яҡа берләштерергә уның мемкинлеге булманы. Ҡаршылыҡ күрһәтергә лә өлгөрмәгән һалдаттар төркөмөнөң бер өлөшө тураҡлап үлтерелде, иҫән ҡалғандары әсиргә бирелде. Улар араһында тик капитан Замараткин ғына күренмәне. Ул бер ниндәй эҙһеҙ юғалды.

Мал көтөүен ысынлап та Көңгөр ҡалаһына ҡыуып алып барыуҙарын асыҡлағас, һары Мәргәндең һыбайлылары баяр Максимов йәшәгән ҡаласыҡҡа һөжүм башҡаршылыҡҡа өлгөргән лаҙы.

Башҡорттар ҡаласыҡта бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡ осраманы. Сөнки ҡайҙалыр ҡасып ҡотолорға өлгөргән Максимов менән уның ялсыларынан яфа сигеүсе урыҫ крәҫтиәндәре боласыл башҡорттарҙы алҡышлап ҡаршылаҙы ҡында белгәс, улар шатлыҡтарынан ҡысҡырышты:

— Братцы, баяр ерендә хәҙер беҙ хужа!

— Уларҙың байлығын үҙ-ара бүлешеп алайыҡ!

— Эйе, беҙҙең хеҙмәт менән йыйылған байлыҡты ниңә әрәм итергә?..

Урамдағы урыҫ крәҫтиәндәре, бер-береһен дәртләндереп ҡысҡырышса-ҡысҡырышса, баярҙың барлыҡ байлығын

өҮҙәреиә алып ҡайта башланы. Алып ҡайта алмаған әйберҙәрҙе ажарланып ваттылар, ҡыйраттылар.

Һуңға ҡалып килеүселәр ҙә баярҙың кәртә-ҡураһына кплсп тулғас, шау-шыу, ығы-зығы артты. Улар, кеҙәттә һаҡлаиган игенде өйҙәренә ташып бөткәс, баярҙың аҙбарыпдагы сусҡалары менән ҡош-ҡортто бүлешә алмай ызғыштылар.

Баяр хужалығында йүнле нәмә ҡалмағас, бер төркөм крәҫтиәидәр поп өйөн, икенселәре сиркәүҙе таларға, әлегәндары баярға яҡын кешеләрҙең байлыҡтарын үҙ-ара бүлешеп алырға ашҡындылар...

Харам мал мосолмандарға килешмәй тип, муллалар иығыҡанлыҡтан, башҡорттар баяр менән уның ярҙамсыларының байлыҡтарын бүлешеүсе урыҫ крәҫтиәндәренеа ҡикһю ҡыҫылманы.

Көи кискә ауышҡанда, ҡаласыҡ ситендә һуғым һуйып, башҡорттар беренсе еңеүҙе тантаналы байрам итергә әҙерләнде.

Можлестә ҡатнашырға теләк белдереүсе урыҫ крәҫтиәндәренә — һарыҡ ите, ә башҡорттарға йышҡы ите бирелде.

Кыҙыу итеп яғылған ут яҡтыһында төркөм-төркөм буҙлып урынлашҡас, һый башланды. Урыҫ крәҫтиәндәре менән башҡорттар бергә буталып, уйнап-көлөп күңел астылар.

Баярҙың баҙы аҫтында һаҡланған араҡыны эсеп ҡыҙысоланған крәҫтиәндәр урыҫ йырҙарын һуҙҙы, ә ҡурай моңона ҡушылған башҡорттар «Йәйләүек» йырын йырлатылар.

...Атҡа ғына менһәң, ай, ат яҡшы,
Ергә генә төшһәң, ер яҡшы,
Илкәйенә ингән яуға ҡаршы
Ат ҡушарлап сапҡан ир яҡшы.

Ҡарағай ҙа үҫер, ай, йәм өсөн,
Бал ҡорттары осор бал өсөн.
Яман ирҙәр үлер, ай, мал өсөн,
Яҡшы ирҙәр үлер дан өсөн...

Мәжлестең иң ҡыҙған мәлендә ҡаласыҡтан килгән үҫер, аҡылдан шашҡандай күҙҙәрен аҡшайтып, ҡалтыраҡалтырана, бышылданы:

Баярҙың ейәнә үрт һалдылар!..

- Кемдәр?

Иҫеректәр!..

һоҡал-мыйыҡ баҫҡан урыҫ егеттәренең береһе, янғын һүндерергә йүгерәһе урынға, ҡыуаныс белдерҙе:

— Яҡшы!.. Баяр ейө яныуында беҙҙең ни ҡыҫылышыбыҙ бар?!

— Коля, нимҙ һөйләйһең һин? Баяр өйөнөң ялҡынлы уты беҙҙең өйҙәргә лә ҡабыныуы ихтимал, — тип икенсе егет ашыҡ-бошоҡ суҡынды ла ҡаласыҡ яғына йүгерҙе.

Мәжлестә ҡатнашыусы күпселек урыҫ егеттәре урындарынан ҡуҙғалманы. Улар, һаман тыныслана алмаған үҫмергә бер сынаяҡ араҡы эсерҙеләр ҙә ҡаласыҡтағы крәҫтиәндәрҙең нисек күңел асыуҙарын һораша башланылар.

— Баярҙың йорт-ҡураларын кем яндырҙы?

— Белмәйем, — тине үҫмер, араҡы эсеүҙән башы томаланыуын һиҙеп. — Мин күргәндә, -баярҙың кәртә артындағы иҫке кәбәне генә яна ине. Аҙаҡтан уның ялҡыпы аҙбарға һәм өйҙөң стеналарына күсте. Күмәкләп тотоп-ҡанда, бәлки, баяр йорто һүндерелер ине.

һаҡалтай урыҫ егете һаһылдап көлдө.

— Өйөн һүндергән, янғындан һаҡлап алып ҡалгаи есөң. Иван Федорович бүләк бирер йәки рәхмәт әйтер инеме? Тот тоғовдо киңерәк!

— Дөрөҫ!

— Ҡомһоҙ баярға шул кәрәк!

— Бөтә бәләне аҙаҡтан барыбер беҙгә яһарасаҡ!

— Яһаһын!.. Унан ҡуркмайбыҙ!..

Ҡаласыҡтағы янғын ейҙәрҙән юғарыға күтәрелде. Уның яҡтыһында баш осо тәңгәлендәге йондоҙҙар топоҡланғандай тойолдо.

Ҡаласыҡтағы көслө янғын иртәнге яҡты беленгәи тенә бер аҙ һүрелде...

Тауҙар теҙмәһе аръяғынан күтәрелгән ҡояш иң буйы самаһы үрелгәс һары Мәргән кирелә-һуҙыла урынынан торҙо.

— Егеттәр, беҙгә лә ҡуҙғалырға ваҡыт. Баяр менән Замараткин яуыздарҙы тапмайынса, беҙгә тынғы булмаҫаҡ.

Еңел табышҡа емөтләнеп, төндө башҡорттар менән бергә уҙғарған урыҫтар ҙа Көңгөр ҡалаһына яуға рырға теләк белдерҙеләр.

VII

Баш күтәреүселәр Көңгөр ҡалаһына яҡынлашыуы ишетеү менән Максимов Иван Федорович Өфөгә ҡасып барҙы. Ләкин унда ла баярға хәүефһеҙлек бөтмәне.

һары Мәргән болаһына Урал аръяғындағы (барлыҡ башҡорттарҙың ҡушылыуы, Көнгөр ҡалаһындағы үрҙәскәренең ҡыйралыуы, Нейва һәм Исет йылғаларының

түбәпге ағымындағы ҡәлғәләрҙең туҙҙырылыуы, монастырҙарҙың яндырылыуы һәм күпселек урыҫ ауылдарының камауҙа тотолоуы тураһында хәбәр алғас, баяр Максимов Өфө ьоеводаһы Волконскийҙың эш бүлмәһенә инде.-

— Кенәз Александр Даниилыч, Себер даруғаһы башҡорттары оторо ҡоторона бит! Уларҙың болаһын ашығыс Спҫтырыу сараһы күрелмәһә, Урал аръяғындағы урыҫ имепиеларынан бер ни ҙә ҡалмаясаҡ!

— Себер даруғаһындағы башҡорттар болаһын ҡыйратырҙай көс Өфөлә лә юҡ, хөрмәтле Иван Федорович, — тиие поевода Волконский.

— Былай булғас, ҡалайтырға? — Баяр Максимов иларҙай хәлгә етте.

— Белмәйем, Иван Федорович. Беҙ үҙебеҙ ярҙамға мохтажбыҙ. Урал аръяғында бола башланғаны бирле, Өфө тирәһендәге ауылдарҙа йәшәүсе башҡорттар ҙа яһаҡ түлоуҙән һәм яһаҡ йыйыусыларға ылау биреүҙән ҡырҡа бпш тарттылар. Башҡорт Демейко [1] Ҡазан даруғаһындағы урыҫ ауылдарын туҙҙырған, уларҙың малын ҡыуып алып китеп, ярлыларға таратҡан... Никита Кудрявцевтың хаты ла мине шатландырмай. Бына ул ниҙәр яҙа, — тип өҫтол тартмаһынан сығарған хатты ҡыҫҡырып укырға тотондо:

«Сиятельнийший кенәз, хөрмәтлеләрҙән дә хермәтлерок Александр Даниилович, һеҙгә хәбәр итәм... Ҡазандан ОС ҙиөҙ саҡрым алыҫлыкта йәшәгән башҡорттар араһында булырға тура килгәйне миңә. Улар мине Өфө яғына уҙгармаңылар. Дүрт йөҙ кешене эйәртеп йөрөүсе ике башҡорт — Уразай Нагаев менән Камай Шишмәмәтов һәм улар хөсөтөн тотҡан мишәр Имай ҙа үтә эре ҡылана. Мпп, башҡорттарҙы тыныслапдырырға тырышып, Госуларь һеҙгә ихтирамлыҡ күрһәтә, үткән йылғы яһаҡтарыІ ыҙҙы ғына түләтергә риза, тинем. Ҡасҡын татарҙарҙы, сыуаштарҙы, сирмештәр менән марҙыуаларҙы Башҡортостан еренән ҡыуып ебәреүҙәрен һораным. Ләкин башҡорттар мине йүнләп тыңларға теләмәне, Башҡортостанға ҡасып йәшәүсе кешеләрҙе лә белмәмешкә һалышты... Мин иыҡыша башлағас, башҡорт Уразай: «Һинең менән һпПләшеүҙән мәғәнә юҡ! Башҡорттарҙан күберәк аҡса йыйып байығыу өсөн, һин батшаның рөхсәтенән тыш йөрөйһөң», — тип урыҫса ҡысҡырҙы... Аҙаҡтан, башҡорттарҙың ҡушыуы буйынса, минең янға Солмәмет исемле миюр килде... Ул воевода Александр Аничковты бик мпктай. Воевода Лев Аристовты ла Өфө яғына уҙғармая-

[1] *(Дөмәй)* — архив материалдарында үҙгәртелеп яҙылыуы ихтимал.

саҡтарын әйтте. Башҡорттар мине 60 саҡрым самаһы ерҙән оҙатып йөрөнөләр, ләкин уҙемә айырым ылау бирергә теләмәнеләр. Аҙаҡтан Лев Аристов урынына Александр Аничковты ебәрҙеләр. Лев, Ҡазанға әйләнеп ҡайтҡас, башҡорттар уны Өфөгә яҡын ебәрмәуен әйтте... Юғарылағы ҡала һәм өйәҙ кешеләре Өфө өйәҙенә күпләп ҡаса. Башҡорттар уларҙы ҡабул итмәйҙәр, беҙҙе лә тыңларға теләмәйҙәр. Юлдар буйына заставалар ҡуйылды. Фельдмаршал әфәнде исеменән Өфөгә Василий Арсеньев ебә-релде. Ул урыҫ ауылдарын туҙҙырыусы боласылар башлығы башҡорт Демейко һәм уның ҡуштандары менән ос-рашҡан... Әгәр ҙә фельдмаршал мәсьәләне беҙҙең менәм ҡаңәшләшмәйенсә, яңғыҙы хәл ҡылһа, беҙҙән яҡшылыҡ көтмәһен...» [1]

— Былай булғас, ни эшләргә? — баяр Максимов күңел төшөнкөлөгөнә бирелде.

Уның хәлен аңларға теләмәйенсә, воевода Волкопский һаман үҙ ҡайғыһын һөйләне.

— Воевода Шереметьевтың кенәз Головинға яҙған хатынан куренеуенсә лә эштәр шәптән түгел, — тип ул икепсе хатты уҡыны:

«Минең саҡырыуым буйынса, Свей походында минен менән бергә хеҙмәт иткән башҡорт Усей Бигинеев Ҡазанға килде.... Яуға кутәрелергә әҙерләнгән Өфө өйәҙендәге һәм башҡа даруғаларҙағы башҡорттарҙы батша хөкүмәтенә буйһонорға, тыңлаусан булырға һәм һалымды ваҡытында түләргә өгөтләүен әйтте...» [2]

Максимов түҙмәне, хат уҡыған воеводаны бүлдерҙе:

— Яҡшылыҡты аңламаған башҡорттарҙы сөсөкәләргә ярамай уларға ҡаршы көс ҡулланырға кәрәк!

— Башҡорттарға ҡаршы көс ҡулланыуҙан файҙа сыҡмаясаҡ, — тине кенәз Волконский.

Себер даруғаһында бола сығыуға үҙе ғәйепле икәнлеген иҫенә төшөрөп, баяр Максимов йәнә бойоҡланды һом бер үк һорауҙы ҡабатланы:

— Былай булғас, кенәз, ни эшләргә?

— Белмәйем, Иван Федорович, белмәйем, — тине воевода.

Максимов Иван Федорович, ауырыу кеше шикелле йоҙон сирылтып ултырҙы-ултырҙы ла, тауыш-тын сығармайынса, ишеккә табан йүнәлде.

Баяр сығып киткәндән һуң ярты сәғәт самаһы ваҡыт

[1] Московск. архив Министерства иностранных дел, дела Персидские, 1705 и 1706 годов.

[2] Шунда ук.

у,1гас, Верхотурья воеводаһы ебәргән сапҡын килде. Ул, Волкопскийҙың һорауы буйынса, Урал аръяғындағы хәлиптмгаңыҫ ҡатмарлана барыуын түкмәй-сәсмәй һөйләне...

Һары Мәргән етәкселегендә башланған болаға сирмештәр, сыуаштар, татарҙар менән типтәрҙәр Һәм башҡа халыҡтар ҙа ҡушылғас, бөтә Себер даруғаһындағы урыҫтмр Башҡортостандан ҡыуылды. Исет йылғаһы буйындағы уриҫ ғәскәре тулыһынса ҡыйратылып, ундағы ҡәлғә-ныштмалар юҡ ителгәндән һуң, баш күтәреүселәр Пышма, Тубыл, Төмән һәм Верхотур өйәҙенә ябырылдылар. Юлда улар һәммәһен ҡыйратты, урыҫ ауылдары ер менән ти-Iеҙләнде.

Урал аръяғындағы боланың шаукымы Башҡортостандыҡ Уса, Нуғай һәм Ҡазан даруғаларында йәшәүселәргә ло тиҙ таралды.

1663 йылдың көҙөндә Минзәлә тирәһендәге ерҙәрҙә ҙ рыҫтарға ҡаршы һуғыш башланды, һәм башҡорттар Нфөгә лә бер нисә тапҡыр һөжүм итте.

Башҡортостандағы барлыҡ халыҡты ҡуҙғаткан восстяииены көс менән ҡыйрата алмаясағын яҡшы аңлап, батша хөкүмәте айырым башҡорт старшиналарын, тархандарҙы үҙенә яҡынайтырға, боласылар сафын тарҡатырға ниәтләнеп, Әстрхан татарҙары ярҙамында һөйләшсүҙәр башларға мәжбүр булды.

Яу башлыҡтарының күпселек талаптары менән ризалашҡан Өфө—Имән ҡала воеводаһы кенәз Волконский ла иоғаҙәне йәлләмәне.

Ул, Садир бей, Ишмөхәммәт, Ҡонҡас кеүек бер төркөм Оипторт старшиналары менән дин әһелдәрен, мәктап-юхалап, үҙ яғына ылыҡтырғас, уларҙы эйәртеп, Ҡазан һарпПы приказы Долгорукийға барҙы.

— Кенәз Юрий Александрович, иң шәп башҡорттарҙы ‖сҙго алып килдем, — тип мәктанды воевода Волконский. — Минең менән килеүсе башҡорттар Государға тоғрп хеҙмәт итергә риза. Улар боласылар әсиргә алған \рыҫ һалдаттарын иреккә сығарырға, восстаииены туктатыргл, ҡалмыҡтар менән нуғай мырҙаларының ярҙамынан Ппш тартырға һүҙ бирҙе.

Юрий Долгорукий шатланды.

- һин алып килгән башҡорт старшиналары ҡайҙа?

- Коридорҙа көтәләр.

- Уларҙы көттөрмә, бында саҡырып килтер, — тип итолопде Ҡазан һарайы приказы Долгорукий.

• Тыңлайым!

Урыҫтар менән башҡорттарҙы дуҫлаштырырға ризалашҡан старшиналар меңән дуҫтарса мөғәләмәлә булыр-

га тырышып, кенәз Долгорукий бөтә мөмкинлектәрҙе файҙаланды.

— Башҡорттарҙың Рәсәйҙән айырылмаҫ йәшәүен күҙ алдына ла килтерә алмайым. Иван Грозныйҙың «Жаловаиная Грамота»һында күрһәтелгәндәр урыҫтар тарафынан башҡаса боҙолмаһа, яуыз воеводалар Башҡортостандан алынып, улар урынына яҡшылары ебәрелһә, беҙ батшаға тоғро хеҙмәт итергә ризабыҙ. — Ҡоръән үбеп, Садир бей яҡташтары исеменән ант итте.

Ҡорал ҡулланмайынса Башҡортостандағы боланыҫ башҡорт старшиналары ярҙамында баҫтырылыуына шатланып, кенәз Юрий Александрович Долгорукий башҡорттарҙың барлыҡ талаптарын тайпылышһыҙ үтәргә һүҙ бирҙе.

Килешеүгә ҡул ҡуйылғас, Юрий Долгорукий Тамъяи ырыуы башлығы Садир бей менән бер төркөм башҡорт старшиналарының Мәскәүгә барып батша менән осрашыуҙарын үтенде.

Аҡ батша ла Башҡортостан илселәрен яғымлы ҡаршыланы.

«Изгенән дә изге, ҡояш яҡтыһынан да сағыу, һөйкөмлө Аҡ батша»ның ике телдә яҙылған «Жалованная Грамота»һын алып ҡайтыу менән затлы башҡорттар — «лучшие башкиры» — даруғаларҙан даруғаларға, волостарҙан волостарға, йәйләүҙәрҙән йәйләүҙәргә йөрөп, восстаниеиы туҡтатыу сараһын күрҙеләр.

Өфө воеводаһы кенәз Волконский ҙа тик ятманы. Яуҙа ҡатнашыусылар ғәфү ителәсәген, бола сығыуыиа сәбәпсел булған урындағы урыҫ алпауыттары менән һалым йыйыусылар ҡаты язаға тартыласағын әйтеп, үҙенец иң яҡын ярҙамсыларын даруға башлыҡтарына ярҙамга оҙатты.

«Киләсәктә башҡорттарҙы бер кем дә ыҙалатмаясаҡ, баш-баштаҡ ҡыланыусы һалым йыйыусылар ҡаты язалаиасаҡ», — тип яҙҙы Өфө воеводаһы башҡорттарға ебәргоп үҙенең мөрәжәғәтендә.

Һөҙөмтәлә иң беренсе булып Ҡазан менән Нуғай даруғалары башҡорттары көрәште туҡтатты. Арыҫланбәк, Баҡзан Туҡтамышев, Нурғыл Аҡбашев етәкселегеидәго Урал аръяғы башҡорттары ла урыҫтар менән килешсү төҙөргә ризалашты.

Әммә восстание бөтә ерҙә лә тиҙ баҫылманы. 1664 йылдың йәйендә, Нейва буйындағы төрмәләргә һөжүм итеп, башҡорттар тоткондарҙы иреккә сығарҙылар, шул тирәләге монастырҙар менән урыҫ ауылдарын туҙҙырҙылар.

Өфө ейәҙендәге даусыл башҡорттар ҙа айбарлы ине, 1664 йылдың һалҡын көҙө еткәс кенә Гәүир Аҡбулатов командалығындағы башҡорттар, һалдаттарға ҡаршы көрөште туҡтатып, ҡалмыҡтар яғына ҡасып сыҡтылар.

Ҡалмыҡтар ярҙамында башҡорттарҙың көс туплауыпап һәм яҙ етеү менән уларҙың ҡабаттан болаға күтәрелеренән ҡурҡып, воевода Волконский восстание башлыктарын берәм-берәм тотоу сараһын күрҙе. Шул мақсат менән ул дьяк Гороховты ла ҡалмыҡтарға ебәрҙе. Ҡлмыҡ тайшаһы Дайшинға батша хөкүмәте исеменән бүлоктәр тапшырғас, дьяк Өфө өйәҙенән ҡасып киткән Гәүир Аҡбулатов командалығындағы башҡорттарҙың ҡайҙа ҡышлауын һорашты. Дайшин тайша бер ни белмәмешкә һылышты. Аҙактан, дьяк килтергән араҡыны эсеп иҫергәс, умыц теле сиселде.

— Башҡорттар минең улым Мончак тайшаның ҡулы лҫтында йәшәй.

— Улың ҡарамағындағы башҡорттарҙы Өфө воеводаһыиа тотоп тапшырһаң, батша хөкүмәте һине бүләкләйәсәк, — тине дьяк.

Дайшин тайша, тешһеҙ уртын кәүшәйтеп, ирендәрен оапылдатты.

— Юу-ук, Өфө башҡорттарын батшаға тотоп бирә алмайым!

— Ниңә?

— Минең улым Мончак тайша ҡаҫҡын башҡорттарҙы бик тә ихтирам итә, хөрмәтләй. Уларҙың һәр ҡайһыһына иксшәр ат, дөйә, һыйыр, кәзә-һарыҡ бирҙе.

— Был турала батша хөкүмәте ишетһә, щәп түгел, — тип дьяк үкенес белдерҙе.

Дайшин тайша, оҙаҡ ваҡыт уйланып ултырғандан һуң, лПтте:

— Мин, белмәнем... Мин ҡартмын. Мончак улым үҙ ихтыярына йәшәй. Уның эшенә ҡыҫылырға хаҡым юҡ.

— Башҡорттарҙың зыяны аҙ тейҙеме ни? Улар ҡыш сығһа, ҡалмыҡтарҙы ла үҙ ерҙәренән ҡыуасаҡтар, — тип дьяк башҡорттарҙы яманларға кереште.

Упың өгөт-нәсихәтенә бирелеп, Дайшин аптыраны:

— Хәҙер миңә ни эшләргә?

- Бәлә-ҡазанан ҡотолғоҙоҙ килһә, ҡаҫҡын башҡорттарҙы Әстрханға оҙатығыҙ йәки Өфө воеводаһына тотоп Оирсгеҙ.

Ҡарт Дайшин йәнә уйға ҡалды.

— Ҡаҫҡын башҡорттар улымдың ҡулы аҫтында булию, мин бер ни ҙә эшләй алмайым. Ни ҡылһа ла, улым

ихтыярында, — тип, ул дьяк Гороховты Мончак тайша йәшәгән ҡалмыҡтар улусына оҙатты.

Үҙенең ҡарт атаһы ебәргән дьякка ҡалмыҡтарҙың тайшаһы Мончак яманлыҡ ҡылманы. Дьяктың ниндәй йомош менән килёүен белгәс кенә йәш тайшаның алсаҡ йөҙө таный алмаҫлыҡ булып үҙгәрҙе.

— Ҡаҫҡын башҡорттарҙы Әстрханға оҙатырға йәки Өфө воеводаһына тотоп бирергә минең ризалығым юҡ,— тип ул ҡырҡа баш тартты.

йәш тайшаның ышанысын яуларға тырышып, дьяк Горохов был юлы ла башҡорттарҙы хурланы:

•— Башҡорттар ҡалмыҡтарҙың да иң яуыз, иң ҡәһәрле дошманы! Яйыҡ менән Иҙел аръяғындағы ерҙәргә ҡалмыҡтарҙың күсенеп йөрөүен тыйыуҙары яҡшылыҡмыни? Ҡалмыҡтарҙы Ҡараҡомға һәм Ырғыҙ аръяғына ҡыуып ебәрергә маташыуҙары ла бер кемгә лә сер түгел!..

— Хоҙай биргән ер-һыуға башҡорттар ғына хужа булырға тейешме ни? — тип һораны йәш тайша.

— Дөрөҫ, бик тә дөрөҫ! Хоҙай биргән һоҡландырғыс тәбиғәтле ерҙәргә бер башҡорттарҙың ғына хужа булырға хаҡы юҡ! Башҡорттарҙың бола башлыҡтарын батша хөкүмәтенә тотоп бирмәйенсә, ҡалмыҡтар Яйыҡ—Иҙел буйҙарындағы ерҙәрҙә иркен күсеп йөрөй алмаясаҡ!..

— Миңә ни эшләргә?

— Яуыз башҡорттарҙы иркәләтмә, Өфе воеводаһы ҡарамағына оҙат!

Мончак икеләнде.

— Белмәйем... Бәлки, һин хаҡлылыр? Ҡаҫҡын башҡорттарҙың эсенә инеп ҡарамағас, ниндәй яуыз уй менән йөрөүҙәрен әйтә алмайым...

— Ҡаҫҡын башҡорттар менән осрашып һөйләшергә мөмкинме миңә?

— Юҡ, — тип йәш тайша баш сайҡаны.

Хәйләкәр, юха дьяктан ҡотолоу мөмкин түгел ине йәш тайшаға.

— Ярар, осрашығыҙ. Башҡорттар менән нимә һөйләшеүегеҙ хаҡында мин тыңлап ултырам, — тине ул.

Ҡаҫҡын башҡорттарҙың башлыҡтары менән дә үҙси тыйиаҡ һәм яғымлы тотто дьяк Горохов.

— Өфө өйәҙенән ниңә ҡасып киттегеҙ? — тип һораиы ул.

— Болала ҡатнашҡан өсөн үлем язаһына тарттыры лыуҙан ҡурҡтыҡ, — тип яуап ҡайтарҙы Гәүир Аҡбулатов.

— Язанан ҡурҡҡас, ниңә бола ҡубарҙығыҙ?

— Урыҫтарҙың йәбер-золомона һәм көс еткеһеҙ ha лымға сығар әмәлебеҙ ҡалмағанға күтәрелдек яуға.

-- Мип һеҙҙе аңлайым, — тине дьяк, ризалашып.— Һплым йыйыусылар менән айырым баярҙарҙың баш-баштаҡ ҡыланышы булғыланы. Хәҙер йәбер-золомға ҡаршы көрошәсәкбеҙ. Яуҙа ҡатнашыусы башҡорттар ҙа ғәфү мтелде. Ҡабаттан бола ҡубармаҫҡа ризалашып, Государь исемспә ғариза яҙһағыҙ, һеҙҙе лә ярлыҡаясаҡтар. Бер ксмдәп ҡурҡмайынса үҙ өйҙәрегеҙгә ҡайтығыҙ.

— һин кем ҡушыуы буйынса килдең?

— Мине бында воевода кенәз Волконский ебәрҙе. Ул һеҙҙең менән аңлашырға һәм дуҫлашырға теләй.

— Беҙҙе тоҙаҡҡа эләктерергә маташҡан Волконскийдың хәйләһен беләбеҙ, — тине Аҡбулатов.

Уның менән ризалашып, башҡалар ҙа һүҙгә ҡушылды:

— Волконскнй хәйләкәр!

— Воеводаларҙан беҙ күп һемәйҙек.

— Бүре менән һарыҡ дуҫлаша алмаған кеүек, башиорттар ҙа алдаҡсы урыҫтар менән яҡшы мөнәсәбәттә булн алмаясаҡ!..

Башҡорттарҙы тыуған иленә ҡайтарырға күндерә алмаясағын аңлап, дьяк Горохов һүҙ йүнәлешен үҙгәртте:

— һеҙ әле ҡалмыҡтар араһында ҡасып йәшәйһегеҙ. Улар менән дә ҡасан дуҫ булғанығыҙ бар? Башҡорттар — ҡалмыҡтарҙың ҡаҙ дошманы! Уларҙы һеҙ үҙ ерҙәрегеҙҙә күсенеп йөрөүҙән мәхрүм иттегеҙ бит!

— Беҙҙе ҡалмыҡтар менән юрамал дошманлаштырырға теләйһеңме? — тип һораны Гәүир Аҡбулатов.

-- Юҡ, мин нимә булғанын ғына һөйләйем, — тине дьяк. — Үсләшкән ҡалмыҡтар ҙа һеҙҙе аяманы. Улар һеҙҙең йойләүҙәрегеҙҙе туҙырҙылар, малдарығыҙ менән ҡатыи-кыҙҙарығыҙҙы һәм бала-сағаларығыҙҙы ла алып ҡастылар. Шуны белә тороп, ҡалмыҡтарға һеҙҙең яманлыҡ ишлмаясағығыҙға кем ышана?

— һин беҙҙе ҡалмыҡтар менән ыҙғыштырырға килгңме?

Дьяк, Аҡбулатовтың һорауына яуап ҡайтармайынса, Ыпмап үҙ хәбәрен һөйләне:

- Яҙ етеү менән һеҙ ҡалмыҡтарға ла яманлыҡ эшләһәсәкһегеҙ!

- Ялған!

- Бер ҙә ялған түгел. Ҡалмыҡтар ҙа һеҙҙе буштан-бушҡа ашатып ятҡырмауын иҫегеҙҙән сығармағыҙ!

- Беҙ әрәмтамаҡ түгел, — тип асыуланды Гәүир Аҡбулатов. — Беҙ һунарсылыҡ һәм тимерселек менән шөғөлләнәбеҙ. Йәй сыҡҡас, ҡалмыҡтарҙың ғәскәре сафында хеҙмәт итәсәкбеҙ. Беҙ ярҙамлашмаһаҡ, тирә-яҡтағы һуҡ-

маҡтарҙы, кисеүҙәрҙе аша сығырҙай урындарҙы ҡалмыҡтар белмәйҙәр.

— Тимәк, һеҙҙең менән осрашыуышдан файҙа сыҡмаһы, — тип, дьяк мәғәнәһеҙ һөйләшеүҙе дауам итергә теләмәне.

Ул ике аҙна ваҡытты йәш тайша менән бергә уҙғарҙы, уның ихтирамын яуларға һәм дуҫлашырға ла өлгөрҙө.

Бер көндө икәүҙән-икәү генә ашап-эсеп ултырғанда, бөтөнләй көтмәгәндә, дьяк Горохов Мончак тайшаға Ҡырым ханлығына ҡаршы яу менән барырға тигән тәҡдим яһаны.

йәш тайша аптыраны.

— Ҡалмыҡтарға бер ниндәй зыяны теймәгән Ҡырьш ханына ҡаршы ниңә һуғышырға миңә?

— Ҡырым ханы мосолмандарҙы яуызлыҡҡа ҡоторта. Улар боласыл башҡорттар менән дә тығыҙ бәйләнештә,— тип дьяк әйткәс, йәш тайша уйға ҡалды.

— Ҡырым ханлығына ҡаршы һуғыш башларға минс ҡабаландырма. Иң әүәл ҡаҫҡын башҡорттар мәсьәләһеи хәл ҡылырға кәрәк. Яңыраҡ бүтән ерҙә йәшәүсе башҡорттар ҡалмыҡтарҙың ике мең баш йылҡы көтөүен алып киткән, ти. Ошондай шарттарҙа Ҡырым ханлығына ҡаршы һуғышты кисектереп торорға тура киләсәк.

— Ҡаҫҡын башҡорттар менән аҙапланма. Уларҙы батша хөкүмәте хөкөмөнә тапшыр, — тине дьяк.

Мончак тайша асыуланды:

— Миндәге башҡорттарҙы батша хөкүмәтенә бирегем де һорамаң, Ҡырым ханлығына ҡаршы һуғышсыларымды ебәрмәйем!

Йәш тайша ыенән мөнәсәбәте боҙолоуынан ҡурҡып, дьяк ҡайтымһаҡланды:

— Юҡ, башҡорттарҙы батша хөкөмөнә тапшырыуынды һорамайым, һәммәһе үҙ ихтыярында. һин үтә аҡыллы, зирәк кеше...

Хәйләкәр дьяктың тәмле-татлы һүҙҙәренә арбалып, йәш тайша йылмайҙы.

— Мин һиңә асыу тотмайым. Станындағы кешеләреңә миңә араҡы килтерергә ҡуш. Аңлашылмаған мәсьәләләрҙе дөрөҫ хәл ҡылыу, әйтелгән яман һүҙҙәрҙе йәһәтерок онотоу, уларҙы бүтән бер ҡасан да ҡабатламаҫ өсөн, иҫергәнсе араҡы эсергә теләйем!

Дьяк килтерткән араҡыны эскәндән һуң, йәш тайша уиың менән ныҡлап дуҫлашты, һәм улар бер ҡасан да асыуланышманылар.

Рәсәйгә тоғро булырға, Ҡырым ханлығына ҡаршы һуғыш башларға ризалашып, килешеүгә ҡул ҡуйғас, йәш тайта шатланды.

— Бынан кире ҡалмыҡтар менән урыҫтар мәңгелеккә дуҫ, — тип ул дьякты ҡосаҡланы.

Ҡалмыҡтар менән дуҫлашыуына дьяк Горохов та ҡыуапды. Үҙ маҡсатына өлгәшеү хөрмәтенә ул мәжлес уҙғарҙы. Мончак менән уның туған-тыумасаларына батша хөкүмәте исеменән ҡиммәтле бүләктәр тараттьі.

Рәсәй батшалығына тоғролоҡ белдереп, Мончак Ҡара дпцгеҙ далаларында йәшәүсе төрөк-татар һәм монгол ҡәбилоләренә ҡаршы һуғыш башланы. Бер үк ваҡытта башҡорттарҙың хәрәкәте тураһында ла йәш тайша батша хөкүмәтенә түкмәй-сәсмәй еткереп торҙо.

1664 йылдың ун беренсе ноябрендә батша хөкүмәтенә нҙгап хатында йәш тайша Өфө башҡорттарының ете тапкир Ҡырым ханына барыуы, урыҫтар менән аралашып Лошэу сәбәпле башҡорттарҙың ислам диненәи артта ҡалыуы хаҡында зарланыуҙары һәм урыҫтарға ҡаршы көрәшеү өсөн ярҙам һорауҙарын яҙҙы.

Йәш тайшаның икенсе хатында Әстрхан башҡорттарыцыц Ҡырым һәм Аҙау пашаһы менән килешеү төҙөүе, килешеүҙең башлығы итеп Сурҡай исемле башҡорт һайлаиыуы телгә алынды.

Ваҡиға киҫкенләште.

Мосолмандарҙың Әстрхан менән Терек, Ҡара яр менән Царицын араһындағы ерҙәрҙә яңы ҡалалар төҙөргә, щы ханлыҡҡа хан итеп Ҡырым ханы үҙенең улын ҡуйырға ниәтләнеүен дә Мәскәүгә йәш тайша хәбәр итте.

Батша хөкүмәте, үҙ сиратында, мосолмандарға ҡаршы һугишырға әҙерлек башланы. Ләкин уны маҡсатҡа ашырырға өлгөрмәне, Степан Разин командалығындағы Дон казактарының болаһы ҡамасауланы.

VIII

Ксиәз Юрий Долгорукий ғәскәре сафында хеҙмәт итеүг ике аталаш ҡустыһының үлем язаһына тарттырылыуын ишотсп, Дон казактарының атаманы Степан Разиндың ГЫуы ҡабарҙы.

- Ҡустым өсөн үс алмайынса, тынысланасаҡ түгелмен, — тип ул һарытауҙағы сауҙагәрҙәрҙе таланы, уларҙың күбеһен тураҡлап үлтерҙе лә Иҙел буйлап юғарыға ғабып йөҙҙө.

Ооласыл ҡазаҡтарға ҡаршы ебәрелгән ике йөҙҙән ашыу һыбиПлы һәм йәйәүле һалдаттар яҡынлашты.

Степан Разиндың казактары үҙҙәре аңғармаҫтан һө-

жүм башланы. Иәйәүле һәм һыбайлы һалдаттарҙы тураҡлап, яҡын тирәләге ҡаласыҡтарҙы тырым-тырағай туҙырғандан һуң, Степан Разиндың казактары Әстрханға яҡынлашҡан ҙур карауанға табан йөҙҙөләр.

Караванды оҙатып килеүсе һаҡсыларҙың ғәмһеҙлегенәи файҙаланып, казактар ҡаҙна икмәге тейәлгән кәмәләрҙе һыуға батырҙылар, ундағы воеводалар тураҡлап үлтерелде, ә азат ителгән ике йөҙгә яҡын тоткон Степан Разиндың отрядына ҡушылды, һәм улар иң яуыз башкиҫәрҙәргә әүерелделәр.

Кешеләрҙе талап йыйған байлыҡ күбәйгән һайын, ҡырҡ йәшлек Степан Разиндың да абруйы үҫте, ғәскор һаны артты һәм, уларҙы бер кем дә еңә алмаясаҡ, тигон хәбәрҙәр таралды.

Степан Разин казактары яҡынлаша башлағас, Царицынды һаҡлаусы воеводалар барлыҡ пушкаларҙан ут асырға ҡуштылар. Ләкин пушкаларҙағы тоҡандырғыс дарыларҙы кемдер таҙартыу сәбәпле, ут асырға мөмкинлск булманы. Ҡоттары алынған воеводалар, ҡаршылыҡ күрһәтмәйенсә, караптарҙағы казактарға аҙыҡ-түлек, кейем-һалым һәм тимер-томор бирергә ризалашты.

Степан Разин, Ҡара яр эргәһенән йөҙөп барышлам, кешеләрҙе казактарынан талатты, уларҙың өйҙәрен яндыртты, воевода Беклемишевты язалап үлтертте.

Бер төркөм ярҙамсыларын эйәртеп, Яйыҡ тамағындағы ярға сыҡҡас, Разин ғибәҙәт ҡылырға ниәтләнде. Ул яр буйындағы сиркәүгә ингәс тә, унын артынса ябылған ишек тыштан йоҙаҡланды.

— Юҡҡа аҙапланаһығыҙ. Бында хәҙер мин хужа Аҙактан һеҙгә үкенергә тура килмәһен. — Шулай иҫкәртеп, Степан Разин сиркәү ишектәрен оатарға ҡушты.

Ишектәре ватылған сиркәүҙән сыҡҡас, Степан Разинға стрелецтар ҡаршылыҡ күрһәтмәнеләр, мәгәр атаманың отрядына ҡушылырға ла теләмәнеләр.

Степан Разиндың асыуы ҡабарҙы.

— Воеводалар менән стрелецтарҙы тураҡлап үлтерсергә! — тип ҡысҡырҙы ул.

Атамандың бойороғон үтәргә әҙер тороусы казактар стрелецтарҙы тураҡларға тотондолар. Кеше ҡаны йылға булып аҡты, тирә-яҡ мәйеттәр менән шығырым тулды.

Сиркәү эргәһендә ҡазылған тәрән соҡорға воевода менән стрелецтарҙың йөҙ ҙә етмеш ике мәйетен күмдерғас, Степан Разин белдереү яһаны:

— Иҫән ҡалған стрелецтарға ирек бирәм!..

Иректәге стрелецтарҙың күбеһе йылға буйлап китеүсе белгәс, атаман ҡабаттан йыртҡысланды:

— Минән ҡасып китеүселәрҙе үлем көтә!

Ҡасып барыусыларҙы ҡыуып еткәс, уларҙың береһен до ҡалдырмай тураҡларға йәки һыуға батырып үлтерерго ҡушты Степан Разин. Боласыл казактарға ҡушылырға ант иткән стрелецтар ғына тере ҡалдырылды.

Степан Разин матур йәйҙе Яйыҡ ҡаласығында уҙғарҙы. Кешеләрҙән талап йыйылған байлыҡтарҙы туҙдырып, ул көнөн-төнөн ашаиы, эсте.

— Миңә һылыу ҡыҙ килтерегеҙ! Мин һөйәркәһеҙ йәшой алмайым!

Бер көндө казактар ҡаласыҡтағы кенәздең һылыу ҡыҙын алып килгәс, айҡала-сайҡала, Степан Разин өҫтәл ртынан күтәрелде.

— О-о, һылыу ҡыҙ! Ба-ба-барыня, исемең нисек?

Кенәз ҡыҙы, ҡурҡышынан ҡалтырана-ҡалтырана, артҡа сигенде.

— Ебәрегеҙ мине, зинһар, ебәрегеҙ!

— Әҙерәк уйнарбыҙ ҙа, ебәрербеҙ, — тип казактарҙы Оүлмәнән ҡыуып сығарҙы ла Степан Разин кенәз ҡыҙын ғүмр карауагка күтәреп һалды...

Атамандан үрнәк алып, казактар ҙа тәүлектәр буйы күцсл астылар...

Бер саҡ, эсеүҙән көс-хәлгә туҡталғас, кенәз ҡыҙын оПонә ҡайтарыш ебәрҙе лә Степан күңел төшөнкөлөгөнә Опрелде.

— Мин ҡайғыһыҙ-моңһоҙ ситтә йөрөйөм, ә ғаиләм ни ХОЛДӘ икән? Бала-сағамды күрмәгәнгә байтаҡ ваҡыт үҙҙы ОІІГ!

- Атаман, һиңә ебергә ярамай, — тип, уның эргәһендого казак бер стакан араҡы ҡойоп бирҙе. — Мә, эс! Эс-‖.)И, ҡайғы онотола ул, бала-саға ла иҫкә төшмәй!

Степан Разин, казак һонған араҡыны эсергә теләмәһенсә, баш сайҡаны.

— Юҡ, Левонтий, бүтән булдыра алмайым. Араҡынан бүйтом ялҡтым!

- Араҡынан кеше ялҡамы ни, атаман?

- Ваҡыты еткәс, ялҡа икән шул!

Левонтий, атамандың хәлен нисек итеп еңеләйтерҙәй һүлен таба алмайынса, аптырап, яурындарын ҡыймылдатты.

- Бәлки, берәй ерҙә елләнеп ҡайтырға кәрәктер һицо?

— Ҡайҙа барырға?

- Барыр ер бөткәнме ни, батько? Мәҫәлән, балыҡ мцорга, сайгактарға һунарға барырға, яҡын-тирәләге ке-

шеләр менән осрашып, уларҙан донъя яңылыҡтарын һорашырға мөмкин!

Башын күкрәгенә һалындырып ҡайғылы ултырған Степан Разин йәнләнде.

— Кәңәшең шәп, бик шәп, Левонтий! Берәй ергә барып әйләнеү, ысынлап та, зыян итмәҫ, — тип, ул бер төркөм һыбайлы ҡазаҡтары менән ҡылған үләнле далаға табам елдерҙе.

Бик күп ерҙәрҙе гиҙеп йөрөүенә ҡарамаҫтан, Степан Разин хатта ҡуян да атып ала алманы. Бер нисә тапҡыр сайгактар төркөмө осраны. Ләкин улар, кешеләр яҡыплаша башлағас та, ҡасып киттеләр.

Икенсе, өсөнсө көндө лә һунарға йөрөүҙәре уңышһыҙ тамамланды.

— Былай йөрөүҙән файҙа юҡ, кире боролайыҡ, — тине атаман.

Юлда барышлай, Севостьян исемле алпауыт йәшәгән ауылда туҡталып, бер аҙ ял итергә булдылар.

Ауыл уртаһындағы ике ҡатлы күркәм ағас йорт эргәһендә хеҙмәтсегә тиңләшкәс, Степан Разин атын туҡтатты.

— Севостьян өйҙәме?

— Ул өйҙә юҡ, — тине ялсы.

— Ҡайҙа?

— Ҡалаға китте.

— Уның ғаиләһе бындамы?

— Юҡ, улар ҙа ҡалаға китте.

— Севостьяндың ҡалала ла өйө бармы әллә?

— Бар. Ниңә булмаһын ти?

Степан Разин ғәжәпләнде.

— Ҡалала ла, бында ла өй ниңә кәрәк булды икән Севостьяиға?

— Бай булғас, ярлы йәшәргә тейешме ни? — Хеҙмәһен көлдө. — Минең хужанын хатта Мәскәүҙә лә үҙ именисһи бар!

Баярҙың байлығына аптырап ҡазаҡтар шаулаштылар:

— Шул байлыктың сиреге генә эләкһәсе!

— О-оҳ, гәҙәллек юҡ был донъяла!..

Ҡазаҡтарҙың ғауғалашыуына иғтибар итмәйенсә, Степан Разин һамап төбәште:

— Хужаларҙан бер кем дә ҡалманымы бында?

— Хужаның оло улы ҡалды.

— Нинә күренмәй?

— Ул әлегә өйҙә юҡ, управляющий менән игеи баҫыуына китте. йәш хужа кәрәкһә, әҙерәк көтөгөҙ. Уларҙы гиҙҙән ҡайтырға тейеш, — тине хеҙмәтсе.

— Өйҙә кемдәр бар?

— Баярҙың килене генә...

— Баярҙың киленен булһа ла күреп һөйләшергә теләйем, — тип Степан Разин эйәрҙән төштө. Йүгән теҙгенен **ҡазаҡтарҙың** береһенә тоторҙо ла, ҡапҡа тәңгәлендә өйөшөп тороусы крәҫтиәндәргә иғтибар итмәйенсә, кәртә эсенә үҙҙы.

Өйҙән беренсе ҡатында кеше осрамағас, бормалы-борлалы баҫҡыс буйлап атаман **икенсе** ҡатҡа **менде.** Унда ла бер кем куренмәне.

Тирә-яҡҡа ҡаранып торҙо-торҙо ла, Степан оҙон, киң ҡатлы коридор буйлап артабан атланы. Ишеге ярты ласыҡ иң төпкө бүлмәлә кемдеңдер ҡыштыр-мыштыр аҙапланыуы ишетелде.

«Өй йыйыштырыусыһын булһа ла күреп һөйләшәйем», **тип** атаман төпкө бүлмәгә инде. Көҙгө алдында бизәнгән **йоп-йәш** ҡатынды күргәс, ул шатланды.

— Иҫәнме, һылыуҡай!

Йәш ҡатын тертләне. Ул, күҙҙәре баҙлап янған урта **буйлы,** йыуантаҡ, киң яурынлы, һаҡалтай атаманға боролоп ҡараны ла, минут самаһы шаҡ ҡатып торғандан **һуң, үҙен-үҙе** онотоп ҡысҡырҙы:

— Ни өсен рөхсәтһеҙ керҙегеҙ!

— Ҡурҡма, һылыуҡай, ҡурҡма. Мин һине ашамам, — тип Степан Разин төпкө бүлмә ишеген япты.

— Китегеҙ!.. Хәҙер үк сығып китегеҙ!.. — Ҡото алынған йәш ҡатын артҡа сигенде. — Китмәһәгеҙ, кешеләрҙе **саҡырам!**

— Саҡыр, һылыуҡай, саҡыр!

Ни эшләргә белмәйенсә, йәш ҡатын дер ҡалтыранды.

— Нимә кәрәк һеҙгә?

— Миңә һин кәрәк, һылыуҡай! — Табышына ташларға әҙер торған йыртҡыс кеүек күҙҙәрен ялтлатып, атаман ымһанланды. — Ҡурҡма, һәүетемсә генә килешһәк, үҙең ризалашһаң...

— Кит!.. Хәҙер үк күҙемдән юғал!.. — йәш ҡатын, ишектән сығып ҡаса алмаясағын аңлап, диван артындағы мөйөшкә ныҡты. Саҡ ҡына иғтибарһыҙланһа, күҙҙәрен майландырып өҙлөкһеҙ йылмайған һаҡалтай кеше уны быуып ташлар йәки билендәге ҡайышҡа аҫылыныулы **Юйҙәре** менән сәнсеп үлтерер һымаҡ тойолдо. — Ә-әй, кешсләр, ярҙамға-а-а!..

Ярҙамға бер кем дә килмәне.

Сабырһыҙлығын юғалткан атамандың ҡан тамырҙары **шты,** йөҙө, ҡолаҡтары, хатта күҙ аҡһымына саҡлы ҡы**ирынды.** Ул ҡобараһы осоп дер ҡалтыранған йәш ҡатын-

дың ымһындырғыс аҡ йөҙөнән, күлдәк изүе аша күренгән ҡабарынҡы түше менән күлдәк аҫтындағы нескә тоненән башҡа нәмәгә иғтибар итмәне.

Степандың баҙлап янған күҙҙәре, тетрәткес тойғо менән ялҡынланған йөрәге нимә теләүен йәш ҡатын да аңлай ине. Ләкин ул бер ҡасан да күрмәгән, белмәгәи, ҡот оскос ҡиәфәттәге һаҡалтай кеше менән бер түшәкто ятырға теләмәй!..

Атаман, бармаҡтарын тарбайтып, гер шикелле тос, ҡан тамырҙары ташҡан ҡулдарын алға һондо.

— Кил, ир ҡуйынында ятмаған ҡатындай ҡыланма!

Иәш ҡатын, үҙен-үҙе онотоп, асыҡ тәҙрәгә ташланды. Ләкин аҫҡа һикерергә өлгөрмәне, атаман уның күлдәк итәгенән эләктерҙе.

— Йүләр!

йәш ҡатын тартҡылашты.

— Ебәр!.. Ебәр, тим!.. Теләмәйем!.. Кит!..

Степан Разин йәш ҡатындың нескә биленән ҡосаҡланы.

— Сәбәләнмә, тыныслан...

йәш ҡатын, туҙған сәстәрен ялпылдатып, баш сайҡаны.

— Теләмәйем!.. Кәрәкмә-әй!.. Ярҙамға-а!..

Йәш ҡатынды диванға күтәреп һалды ла, Степан Разин уның изүе асыҡ түшен, муйынын, имсәктәрен шашынып-ҡотороноп үбергә тотондо...

Ҡуҙғалмай диванда ятҡан йәш ҡатынды яңғыҙын ҡалдырып урамға сыҡҡан атаманды казактар уратып алды.

— Барыня менән һөйләштеңме?

— Ул беҙҙе ҡунаҡ итергә теләйме?

— Нисек, ул шәпме?..

Хәйләле йылмайып, атаман ҡул һелтәне.

— Шәплеге шул уҡ! Бай бисәләренең дә беҙҙекелөр ҙән айырым нәмәһе юҡ! Теләһәгеҙ, барығыҙ, һеҙ ҙә са малап ҡарағыҙ...

Казактар, шау-шыу ҡубарып, өйгә йүгерҙеләр.

Уҙенән ҡалған табышты йәһәтерәк эләктерергә тырышып ишек алдында өйөлөшкән казактарҙың ҡыланышын күҙәткән Степан Разин уларҙы ас бүреләргә оҡшатты.

Ҡобаралары осоп тышҡа сыҡҡан казактарҙы кургос. атаман аптыраны.

— Ни булды?

— Барыня күмәк кешегә сыҙаманы, үлде...

Атамандың йөҙө ҡарайҙы.

— Уныһы сиктән тыш!

— Баяр өйөндәге байлыҡты шул көйөнсә ҡалдырыргамы?

— Байлыҡты нинә әрәм итергә, — тине атаман.

Шуны ғына көткән казактар, ҡыуаныстарынан шаушыу ҡубарып ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, төрлө яҡҡа йүгерештеләр.

Баяр өйөндәге барлыҡ байлыҡты ҡырып-сырып йыйшрткас, Степан Разин урамда торған крәҫтиәнәр эргәһсиә барҙы.

— Минең ғәскәрҙә кем хеҙмәт итергә теләй?

Бик тиҙ арала байығыу хаҡында хыялланған ике йәш ергет кенә казактар менән китергә ризалашты, ә ҡалғандары, тауыш-тын сығармайынса, тик кенә торҙолар.

IX

Көҙгө һалҡын көндәр яҡынлаша башлағас, Степан Ралш йөктәрҙе караптарға тейәргә ҡушты.

— Ҡышҡылығын бында ҡалыуҙан файҙа юҡ. Аҙыҡ-түлек мәсьәләһен хәстәрләргә кәрәк, — тине ул.

Караптарҙа йөҙөп барышлай, казактар диңгеҙ яры бупыпдағы мосолмандарҙы таланылар, Изел тамағындағы татарҙарҙы ҡырып, уларҙың ҡатындары менән бала-сағаһын сит илгә һатырға оҙаттылар.

Донға ҡайтып казактарҙың әҙәмсә йәшәүен талап итып батшаның грамотаһын алғас, Стегган Разин уйға ҡалыбырап ултырҙы.

— Ысынлап та, аҙып-туҙып ситтә күпме йөрөргә мөмкин? Ғаиләмдән айырылмай йәшәргә ваҡыттыр бит! Мин Государҙың ҡушыуына буйһонам, — тип ноябрь урталарында ул Донға табан ьщғайланы.

Юлда барышлай, Степан Разин воевода кенәз Иван Семенович Порозоровский ғәскәренең ҡорал һалыуын таләп итте.

Атамандың талабын кире ҡағып, воевода Порозоровский атаманды үзенә саҡырҙы.

— Порозоровскийҙың улай ҡыланырға хаҡы юҡ! Мин Государҙан башҡаға буйһонмайым. Ни ҡылһам да, үҙ ихтыярымда. — Асыуланып, воевода ебәргән кешене диңгеҙгә ташлатты ла, Донға барып етмәйенсә, Степан Разин Гиргә табан боролдо.

Кешеләрҙе талап аҙыҡ-түлек һәм кейем-һалым етерлек лылгас, Степан Разин ҡышты Яйыҡта үҙғарырға булды.

Уның казактары бер нәмәгә лә мохтажлыҡ кисермәне. Күршеләге ҡалмыҡтар менән һатыу итеп, улар ҡайғыһөрөтһеҙ йәшәне. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бер урын-

да хәрәкәтһеҙ тороу казактарҙы ялҡытты. Улар Царицынға барырға һәм ундағы атаман менән старшиналарҙы үлтерергә теләк белдерҙеләр.

Степан Разин Дон казактарының үҙенә килеп ҡушылыуын көттө. Әммә уның өмөтө аҡланманы. Дон казактары урынына Астрхан воеводаһы Хилков командалығындағы ратниктар килде, һәм уларға ҡаршы һуғыш башланды. Тураҡланғандан ҡалған ратниктарҙың яртыһы Степандың отрядына ҡушылды.

1668 йылдың йәйендә Степан Разиндың казактары, караптарға **тейәлешеп, диңгеҙгә сыҡты.** Сережка Кривой командалығындағы Дон казактары килеп ҡушылғас, Дербенттан Баҡыға тиклемге ерҙәрҙәге сауҙагәрҙәр таланды.

Решетаға барғас, Степан Разин шахҡа хеҙмәт итергә һәм уның ерендә йәшәргә рөхсәт һораны.

Был мәсьәләне хәя ҡылыу оҙаҡҡа һуҙылды.

Казактар менән бергә аралашып йәшәргә теләмәгәи урындағы мосолмандар, аңғармаҫтан һөжүм итеп, дүрт йөҙҙән ашыу казакты үлтерҙе, ә атаман Разин кәмәлә ҡасып ҡотолдо.

Үс алырға ниәтләнеп, Степан Фарабатҡа килде һом һатыу менән шөғөлләнәсәге тураһында әйтте.

Бишенсе көндө, алдан һөйләшеп килешеү буйыиса, баҙарҙың иң ҡыҙған мәлендә Степан Разин бейек **коП**маға күтәрелде. Бер нисә минут самаһы тирә-яҡҡа ҡараныпторҙо ла ул башындағы йөнтәҫ бүркен төҙәтеп ксйҙс,

Шуны ғына көткән казактар баҙарҙағы ҡоралһыҙ кс шеләргә ташландылар. Уларҙың күбеһен тураҡлап үлтерҙеләр ҙә, баҙарҙағы байлыҡтар менән әсиргә алыныусыларҙы караптарға тейәп, артабан йөҙҙөләр.

Ҡышты утрауҙа уҙғарырға тукталғас, Иран хөкүмото менән әсиргә алынған кешеләрҙе алмаштырыу хаҡында атаман килешеү төҙөнө.

1669 йылдың яҙында Степан Разин диңгеҙҙең көксы ғышында йәшәүсе төркмәндәрҙе ҡырҙы ла, уларҙың бай лығын казактарына таратып биргәс, ғәҙәттәгесә, эскег.1 һалышты.

Ирандың хәрби караптары килеп тукталыуыш дп. дошман ғәскәренең ярға сығыуын да һиҙмәне бисә-сәсе менән күҙел асыусы казактар.

Отрядының яртыһынан күбеһе ирансылар тарафьикш ҡырылғас ҡына аңына килеп, Степан Разин алышҡа ташланды. Күп һанлы дошман ғәскәренә ҡаршы тора алмаҫсағын аңлағас, яр буйындағы караптарға тейәлергә ҡушты.

Казактарҙың бер өлөшө иран һалдаттарына **ҡаршы**

һуғышыуынан файҙаланып, дошман караптарына тейәлгән төп көсө менән атаман аҫыҡ диңгеҙ уртаһына табан йөҙҙө.

Хәүефһеҙ урынға еткәс, Степан Разин бер аҙ тыныслапды.

— Ҡайҙа Сережка Кривой?

— Ул үлемесле яраланды, — тине борт янында торган казак.

— Янылышмайһыңмы?

— Уның мәйете яр буйында ҡалғанын үҙем күрҙем.

Степан Разин, теше һыҙлауҙан интеккән кеше һымаҡ мөҙән сирылтып, ыңғырашты.

— Ә-әх, яуыздар!.. Ниндәй шәп кешене харагг иткәндәр!.. Сережа Кривой өсөн Мененды хандан үс ҡайтарасаҡмын!..

Атамандың күңелен табырға тырышып, Левонтий алтып һауытҡа коньяк ҡойҙо.

— Мә, эс! Ошоно эсһәң, ҡайғың баҫылырГ

Алтын һауыт тулы коньякты бер тынала һемерҙе лә, оуешләнгән һаҡал-мыйығын һыпырғылап, атаман Левонтийға текләнде.

— Бындай эсемлекте ҡайҙан таптың?

— Оҡшамаймы? — Казактың йөҙөндә ҡурҡыу һиҙелде.

— Оҡшай, шәп эсемлек, — тип тамшандыг атаман.

— Ундай эсемлек беҙ ултырып барған дошман кара-Оында бөтәһе түгел, батько, — тип шатланды Левонтий.— Иран ханының улы менән ҡыҙын да күрҙек.

— Улар ҡайҙа? — Разиндың күҙҙәре баҙлап янды..

— Хан каютаһында бикләнеп ултыралар.

— Уларҙың хан каютаһында икәнлеген ҡайҙан белә-һеи?

— Тәржемәсе арҡылы есаул һөйләште.

— Нимә хаҡында?

— Белмәйем.

— Ә-әх, асыҡауыҙҙар!..

Карапта ниндәй байлыҡтар барлығын һуңлап белгән осөн казактарҙы әрләй-әрләй, Степан Разин хан балалары Иошеренгән каюта эргәһенә барҙы. Ишекте емертеп каюта я'снә ингәс, ҡаршылыҡ күрһәтергә маташҡан Иран ханы улының башын өҙә сапты ла мәйетен диңгеҙгә ташларға Иушты.

Лғаһы үлемен ауыр кисергән хан ҡыҙы, яҡты төшмәгән ҡараңғы мөйөштә тыпырсына-тыпырсына, ҡурҡышынып һөрән һалып иланы.

Казактар хан ҡыҙы кейемендәге алтын-көмөштө, аҫыл ташлы беләҙектәрҙе, алҡалары менән йөҙөктәрен һалдырып ала башлағайнылар, Степан Разин ажғырҙы:

— Хан ҡыҙын талауҙы туҡтатырға! Уның бөтә әйбсрен кире бирергә!

Талап алынған әйберҙәрҙе хужаһына ҡалдырып, караптағы бүтән байлыҡтарҙы эләктерергә тырышҡам казактар каютанан сығып йүгерҙеләр.

Аулаҡта ҡалғас, йоҙағы ватыҡ каюта ишеген эскс яҡтан ултырғыс менән терәтте лә, шәмде һүндереп, хәлһеҙләнгән ҡыҙҙы Степан кушеткаға һалды...

Бер аҙ ваҡыт уҙғас, каюта ишеге янында ғауғалашҡаи тауыштар ишетелде.

— Ниңә тауышланаһығыҙ? — тип һораны атаман.

— Сиратта торабыҙ, — тине каюта тышында тороусыларҙың береһе.

— Ниңә?

— Хан ҡыҙы менән беҙ ҙә күнел асырға теләйбеҙ, атаман.

— Хан ҡыҙын һеҙҙең менән бүлешә алмайым, — типс Степан Разин һәм казактарҙың таралышыуын һораны.

Тоткон хәлендә йәшәгән Иран ханы ҡыҙы Әйшә Степанға эйәләшә алманы.

Хан ҡыҙының күңелен табырға, үҙенә ҡарата Әйшәнең ялҡынлы мөхәббәт тойғоһон уятырға тырышҡан Степпидың иң ҡиммәтле бүләктәр биреүенең дә файҙаһы **тей** мәне. Хан ҡыҙы, ятһыраған йәнлек кеүек, каюта мөйөшөнә барып боҫто ла, оҙон көндәр буйы иланы ла иланы.

Байтаҡ ваҡыт уҙғас ҡына ҡотолғоһоҙ тотконлоҡ яҙ**мышына** күнегеп, Әйшә Степандың ҡыланышына артыҡ иғтибар итмәҫкә тырышты. Әммә иҫерек атаман менән **бср** түшәккә ятырға һис өйрәнә алманы. Степан яҡынлашҡ башлаһа, йәнен ус төбөнә ҡыҫып тоторҙай хәлгә етсп, Әйшә ҡурҡышынаи һәм сирҡанышыиан һәр саҡ ҡалтыранды.

Ислам дине шауҡымында тыйнаҡ, үтә иркә үҫкән **хан** ҡыҙының әҙәплелеге, тотанаҡлылығы йыртҡыстарса ҡылмырға ғәҙәтләнгән Степанға оҡшаманы.

«Хан ҡыҙы — ҡырағай, минең мөхәббәтемде хушһынмай», — тип үртәлде атаман.

Көҙгә табан казактарҙың хәле мөшкөлләнде. Касиий диңгеҙе тирәһендәге ерҙәрҙәге ауыл-ҡаласыҡтарҙы талар ҙай нәмәләр ҡалманы. Казактарҙың ашарға икмәге, эсергә һыуы ла бөттө. Тоҙло һыуҙы эсеүселәр ауырый. Аҙаҡ ҡы көндәрҙә генә биш йөҙҙән артыҡ казак тоҙло диңгеҙ һыуы эсеүҙән үлде. Иран ханының ғәскәре һөжум **баш** лаһа, Степан Разиндың ун меңлек отряды ҡыйратылыуы ихтимал. Бәләнән нисек ҡотолорға? Дошманлашҡап ми ил мәмләкәттәре аша нисек тә булһа үтеп, Донға **каЯ**

гырға мөмкинлек юҡ. Батша хөкүмәте менән килешеү **гөҙөп,** ғәфу итеүҙәрен һорарға микән әллә?

Степанға батша хөкүмәтенә мөрәжәғәт **итергә** тура **килмәне.** Кенәз Семен Иванович Львов командалығындағы дурт меңлек стрелецтар командаһы яҡынлаша башлаас, ул асыҡ дицгеҙгә ҡасып өлгөрҙө.

Икенсе көндө кенәз Львов ебәргәк грамотаны уҡыас, Степан Разин белдереү яһаны:

— Тәртипте боҙмаҫҡа теләк белдереп ант итһәк, батша, бөйөк Государь Алексей Михайлович Романов **беҙҙе ипҡарға** һәм үҙ ғаиләбеҙгә ҡайтарырға рөхсәт бирә. Нә, әйтегеҙ, ни эшләйбеҙ?

Казактар ҡыуаныс белдерҙе:

— Иҫән-һау ҡалдыpha, **беҙҙе** язалатмаһа, Бөйөк Го**сударға** тоғро хеҙмәт итергә ризабыҙ!

— Бөйөк Государҙың мәрхәмәтлегенән файҙаланып **калайыҡ!**

— Әйҙә, атаман, ҡайтыу юлына ынғайлайыҡ!..

Степан Разин, ҡулындағы грамотаны баш осо тәңгәсидә елпендереп, ҡыҫҡырҙы:

- Казактар, ҡабаланмағыҙ! Хәләл байлыҡтарыбыҙҙы алып ҡайтырға рөхсәт итеүен һорап, беҙ **тәүҙә** нәз Львов **менән** килешеү төҙөргә тейешбеҙ. Беҙҙең тап утәлһә генә, Иҙел һәм Яйыҡ буйындағы ҡаласыҡмөҙан алған пушкаларҙы кире ҡайтарып бирергә, әсиргә алынғусыларҙы иреккә сығарырға, һуғыш ҡоралдарын Царицынға оҙатырға ризалашайыҡ!

— Дөрөҫ, атаман!

- һәммәһен үҙең теләгәнсә хәл ҡыл, — тип ғауғалашып, казактар.

Батша грамотаһын баш осо тәңгәлендә **елпендерә-ел**Исидерә, Степан Разин йәнә һораны:

— Кенәз Львов менән осрашып һөйләшеү өсөн кем**ЬІрҙе** ебәрәбеҙ?

— Митька Одноухийзы!

- Сашка Шальнойзы, — тип яуапланы казактар.

Казактарҙың вәкилдәре менән килешеү твҙөгәс, Әстрханға табан ынғайлаған кенәз Львов караптары артынш Степан Разиндьщ караптары эйәрҙе.

Остpханға еткәс, үҙенең иң яҡын ярҙамсыларьш эйәрте, Степан Разин ҡалалағы Приказной йортка барҙы.

Ул, әсиргә алынған персияндарҙы-ираклыларҙы Әстрҡ.чпдағы ратниктар ҡарамағына тапшырып, байрактар мебунчукты ишек алдында ҡалдырҙы ла, воевода ул**Шрған** киң, иркен бүлмәгә ингәс, баш эйҙе.

— Здравия желаем, ваше сиятельство!

Степан менән уның ярҙамсыларын воевода яғымлы ҡаршыланы.

Бөтә нәмә хәл' ителеп, килешеүгә ҡул ҡуйылғас, атаман Донға ҡайтып китергә рөхсәт һораны.

— Һеҙҙең Донға ҡайтыу мәсьәләһен батша менән һөйләшеп хәл ҡылырға кәрәк, — тине воевода.

— Ниңә? — тип һораны Разин.

— Тәртибе шулай.

— Государь менән кем һөйләшергә тейеш?

— Иң ышаныслы, абруйлы кешеләрҙе казактар арағынан һайлап Мәскәүгә ебәр. Улар һинең исемдән батша менән һөйләшергә тейеш.

— Одноухой менән Шальнойҙы ебәрергә мөмкинме?

— Мөмкин, — тине воевода.

Степан Разин 'тәғәйенләгән вәкилдәр менән ,һыбайлы жазактар төркөмө Мәскәүгә оҙатылды.

Ләкин Одноухий менән Шальной атамандың ышанысын был юлы аҡламанылар. Улар, Мәскәүҙән батша грамотаһы менән кире ҡайтып барышлай, үҙҙәренең һаҡсыларын үлтерҙеләр ҙә далаға ҡасып киттеләр.

Теләһә ҡайҙа йөрөүҙән ялҡҡас, ҡасҡындарҙан ойоштороlған отряд менән Степан Разиндың байлығын таларға ниәтләнделәр.

Одноухий менән Шальнойҙың маҡсаты бойомға ашманы.

Уларҙың яуызлығы хаҡында шымсылары ярҙамында белгәнлектән, Степан Разин хыянатсыларға аңғармаҫтан һөжүм итте. Әсиргә алынған Одноухий менән Шальнойҙы тураҡлап үлтерҙе лә, казактарҙы ҡоралһыҙландырырғп тырышыусы воеводаларға ҡаршы һуғышырға әҙерләпде

Алыш башланһа, күпселек ратниктар Разин яғына сығыуынан ҡуркып, кенәз Львов һөжүмде туҡтатты һәм казактар менән һөйләшеү башларға мәжбүр булды.

Далалағы хәрби ҡасҡындарҙан һаҡланыу ,ныltауы менән Степан Разин егерме пушканы үҙендә ҡалдырыргй. егерме икеһен властарға тапшырырға ризалашты. Воеводалар казактарҙың кешеләрҙе талап йыйған байлығыип ҡағылыуҙы ла тыйҙы. (Сөнки улар, тарихсы Соловьевтың раҫлауынса, күп нәмәне белмәне һәм туғыҙынсы-унынсы быуаттарҙағы аң менән йәшәй ине).

Килешеүгә ҡул ҡуйылғас, Степан Разин кешеләрҙе талап йыйған байлығын Әстрханға алып килде.

Караптарҙағы ебәктәрҙән ишелгән канаттарҙы һәм сбың парустарҙы күреп, яр буйында тороусы ҡала кешлоро хайран ҡалды.

Степан Разиндың , өҫтөндәге алтын-көмөш, ҡиммотлв

аҫыл таштар менән биҙәлгән сағыу, ҡупшы кейеме ярлыларҙы ғына түгел, ҡалалағы барлыҡ байҙарҙы ла һоҡландырҙы. Атамандың ғүмере ал да гөл, бер ниндәй ҡыйынлыҡтарһыҙ, ҡайғы-хәсрәтһеҙ байлыҡҡа сумып уҙған һымаҡ тойолдо уларға.

Бер төркөм казактарҙы эйәртеп ҡалаға табан ыңғайлаған атамандың төҫө ғорур, буй-һыны һоҡландырғыс. Степан Разин, үҙенең артынан ҡалмай эркелеп килеүсе ксшеләргә әйләнеп ҡарамайынса, кеҫәһенән сығарған көмөш аҡсаларҙы услап-услап һибә лә артабан атлай. Ул хорәкәтләнгән һайын, яурыны аша арҡыс-торкос таҡҡан 'коралдары бер-береһенә тейеп сыңлай.

Енел табыш менән батырлыҡ данынан башҡа, тантаналы байрам күренеше үҙе бер оло мөғжизә түгелме ll и әҙәм затына?!

Көслө рухлы казактарҙың ҡыланышы стрелецтарға ла бпк ныҡ тәьҫир итте. Стрелецтар яртылаш казак бит. Ҡорал күтәреп йөрөүҙән, хәрби тәртипкә ҡаршылыҡһыҙ буйһоиоуҙан башҡаны белмәйҙәр улар. Казактар үҙ иркепә йәшәй, кешеләрҙе талап байлыҡ йыя, танһығын ҡандырғансы байрам итә, ә стрелецтар һәммәһенән мәхрүм. Ундай ғәҙелһеҙлеккә нисек сыҙарға?

Ҡараңғы төшкәс, бер төркөм стрелецтар Степан Разин ергәһенә килде һәм уның казактары менән бергә хеҙмәт итергә рөхсәт һоранылар. Икенсе көндө Рәсәй дәүләте байрағын аяҡтары аҫтына һалып тапаған Әстрхандағы бүтән стрелецтар ҙа казактарға ҡушылды.

Ғәскәрһеҙ ҡалған воеводалар, үҙ ғүмере һәм ғаиләләре яҙмышы өсөн ҡурҡып, тауыш-тын сығармай йәшәнеләр.

Ебәк ыштан-күлдәк, бәрхәт кафтан, ынйы бертөктәре мснән биҙәлгән бүректәр кейгән казактар үҙҙәрен Әстрханда ысын хужаларса тотто. Улар кешеләрҙе талап йый-1 ал байлыҡты йәлләмәнеләр, һәр нәмәне араҡыға алмашчырырға тырышты.

Ҡайҙа барма, бер үк һүҙҙәрҙе ишетергә мөмкин.

— һатырға нимәң бар?

— Йәнең теләгәнен табам!

— Бер ҡаҙаҡ ебәккә күпме һорайһың?

— Ун һигеҙ аҡса [1].

— Ҡиммәт. Бер ҡаҙаҡ ебәкте ун ике аҡсаға бирһәң, ылам.

— Әйҙә, бик теләгәс, ал, кинән! Буштан килгән нәмә йәл түгел миңә!..

[1] *Аҡса* — ул заманда тин мәғәнәһендә ҡулланылған.

Төрлө ерҙә тороусы казактар бизмәндә ултырып нима **булһа** ла һаталар ҙа йәнә кешеләрҙе сақыралар:

— Әйҙә, килегеҙ!

— Араҡыға алтын-көмөш алмашам!

— Миндә муйынсаҡ та, беләҙек-алҡалар ҙа бар!..

Айҡала-сайҡала **килгән** Степан Разин **күренгәс, кешеләр** менән шығырым тулы оло **майҙан** шым ҡалды.

Кешеләр йыуантаҡ кәүҙәле, батыр, казактар өсөн ысын батша — батюшка һаналған Степан **Разин** менән һоҡландылар. Ул ғәҙел, яғымлы, барыһы **менән** дә яҡшы мөнәсәбәттә. Ана, бер-береһеи ҡыҫырыҡлап, ҡала кешеләре лә уның ҡаршыһында теҙләнде.

— Государь-батюшка, һин — беҙҙең яҡлаусыбыҙ, **ирек** һәм азатлыҡ килтереүсебеҙ!

Үҙеи ысын батшаға тиңләп хөрмәтләүҙәре өсөн Степан **Разин** сикһеҙ шат. Ауыҙын йырып йылмайыуҙан тыйыла **алмайынса,** ул ярлы-ябағаға услап-услап көмөш **аҡса һипте.**

— Ҡинәнегеҙ, куңел асығыҙ, минең һаулыҡҡа араҡы алып эсегеҙ!

Степан **Разин** әле шат, алсаҡ. Холҡона килмәгәндә уның уҫал, шәфҡәтһеҙ, тупаҫ икәнлеге лә сер түгел. Кәйефе кутәренке ваҡытта атаман иң яуыз кешеләрҙе ярлыҡаны, ә холоҡһоҙланғанда иң яҡын ярҙамсыһыи **нахаҡтай** язалап ултереуҙән дә **һис** тартынманы.

Белемһеҙ, аңы сикле, уй-тойғоларға һәләтһеҙ казактар атамандың тупаҫ ҡул көсөн генә таныны. Улар өсөн әҙәплелек төшөнсәһе, өгөт-нәсихәт ят һәм аңлайышһыҙ. Шуп| күрә лә улар үҙҙәренең араһынан сыҡҡан ҡыйыу, көслө, тыйнаҡһыҙ, дыуамал, властар **менән** иҫәпләшергә теләмәүсе Степан Разинға тартылдылар һәм уның ҡушыуы **бәйынса** утҡа-һыуға инергә лә әҙер торҙолар.

Ябай казактарҙың уйлауы буйынса, Степан Разин кеүек атамандар ғына еңел табышҡа өлгәшергә һәм батюшка-батша исемен йөрөтөргә хаҡлы.

Сикләнмәгән власҡа өҙлөкһөҙ үрелеүенә ҡарамаҫтан, Разин казактарынан әллә ни айырылманы, ҡыуаныс-кайғыларын да улар менән уртаҡ булеште.

Әстрханға килгәндән бирле туҡтауһыҙ араҡы эҫкән атаман, бер аҙ айныҫас, ғәҙәттәгесә, төшөнкөлөккә **би**релде.

Эсе бошоуын бер нисек тә баҫа алмайынса, ул ярҙамсылары менән ултырып баш төҙәтте. Шунда ла куңел бушлығынан ҡотола алмағас, каюталағы хан ҡыҙы **эргә**һенә керҙе.

— Әйшә, һин иҫ киткес матурһың. Христиан диис |өхсәт бирһә, һине мин икенсе бисәлеккә алыр **инем,** — **тип һоҡланып** ултырҙы-ултырҙы ла һөйәркәһен Иҙелгә алып **барҙы.**

Төҙәнеп-биҙәнеп, иң ҡупшы кейемдәрен кейгән Әйшә менән бер кәмәгә ярыш ултырғас, Степан Разин ишкәкселоренә бойорҙо:

— Ҡуҙғалдыҡ!

Тулҡынға сайҡалған **кәмә** Иҙел уртаһына сыҡты.

Йылғаның саф һауаһы, талғын ел ағымы менән ләззәтләнгән хан ҡыҙына ҡарап ултыра торғас, атамандың **бойоҡ** йөҙө лә яғымлыланды.

— Әйшә, һиңә кәмәлә йөҙөү килешә. йылмайған сағында һин тағы ла һылыуыраҡ күренәһең!

Ишкәкселәр ҙә һуҙ ҡыҫтырҙылар:

— Дөрөҫ, батюшка!

— һин ысын хазина тапҡанһың!

— **Хан** ҡыҙының кейемендәге биҙәүестәр генә **ниндәй оло** байлыҡ!

— Донъялағы барлыҡ батшаларҙан да бәхетлерәкһең **һин,** батюшка!..

Ишкәксе **казактарҙан** маҡталыуынамы, әллә оло хазиплға тиҫ һылыу һөйәркәһе янында ултырыуынамы, Степан Разин ауыҙын йырып йылмайҙы.

— һеҙ дөрөҫ әйтәһегеҙ. Әллә **нисәмә** кеше ғүмеренә **етерлек** байлыҡты кейеменә таҡҡан хан ҡыҙына хужа булыуым **менән** мин утә бәхетлемен. Бындай оло хазинаны **миңә** Волга-матушка бүләк итте. Мин Волга-матушка ар**ҡаһында** данға ла лайыҡ булды.м. Әммә Волга-матушкаиы **уҙем** ошоғаса бүләкләгәнем юҡ! — тип үкенес белдерҙе лә, бер аҙ уйға ҡалыбыраҡ, ҡапыл эргәһендәге хан **ҡыҙын** күтәреп алып Волгаға ташланы. — Минән һиңә **бүләк,** Волга-матушка!

Тулҡындар араһында борхаланған Әйшәгә ҡарап, **ишкокселәрҙең** ҡото алынды.

— Хан ҡыҙы бата бит!

— Ниндәй хазина әрәм була!

— һис юғында, уның кейемдәге алтын-көмөштө һалдырып алайыҡ, — тип ҡыҫҡырыша-ҡыҫҡырыша, улар кәмәнән һикерҙеләр.

Хан ҡыҙы Әйшә менән бергә ишкәксе казактар ҙа **тулкынлы** бөйөк йылға төбөнә киттеләр...

X

Хан ҡыҙын Иҙел-Волгаға «бүләк» иткәндән һун, Степан Разин юҡһыныу тойғоһон кисерҙе.

Ул, йөрәген һыҙландырған эс бошоуын бер **нисек** тә баҫа алмағас, 1669 йылдың дүртенсе сентябрендә Әстрхан ҡалаһын ташлап китте.

Атаман менән уның казактарын Царицынға (һары һыу?) саҡлы воевода Левонтий Плохов оҙатып барҙы, ә унан ары сотник командалығындағы стрелецтар алмаштырырға тейеш ине воевода отрядын.

Караптарҙа йөҙөп барышлай, Ҡара Яр менән Царицында тукталмаҫҡа ҡушылды һәм казактарға араҡы һатып алыу ҡырҡа тыйылды.

Әммә казактар воеводалар ҡушҡанға буйһонманылар. Караптарҙы туҡтатып, урындағы кешеләрҙән араҡы һатып алып эстеләр ҙә тәртип урынлаштырырға маташыусы воевода **менән** стрелецтарҙы иҫтәренән яҙҙырғансы тукмаиылар.

Царицынға еткәс, Степан Разин караптарҙы туктатырға бойорҙо.

Казактарҙы ҡалаға индермәҫкә тырышҡан воеводаларҙы үлтертте лә, ярҙамсыларын эйортеп, атаман ярға сыҡты.

— Таныһығыҙ ҡанғансы ашағыҙ-эсегеҙ, күнел асығыҙ!..

Иҫерек казактар үҙ-ара һуғышты, ҡала кешеләрен таланы, ҡатын-ҡыҙҙы мыҫҡылланы.

Степан Разин да казактарынан кәм ҡыланманы. Ул, кенәз Андрей Унковскийҙы сәнсеп үлтерергә ҡырсыпып, воевода ҡураһына инде.

Оло йорттоң түр башындағы ишекте аса алмағас. **ул** ярһыны.

— Емерергә!..

Казактар бурәнә килтерҙе.

— Раз, два!.. Р-раз, два, — тип бурәнәнең тупаҡ **осо** менән бер нисә тапҡыр төртөү менән эске яҡтан бикле ишек селпәрәмә онталды.

— • Алға!

Казактарын эйәртеп, Степан Разин емерек ишек аша эскә ташланды. Ләкин ҡайҙалыр йәшеренергә өлгөргән воеводаны эҙләп таба алманы. Кенәз Андрей Унковский сиркәүҙә лә, алтарҙа ла булмағас, төрмәнең йоҙағын **ва1** тыртып, тоткондарҙы ирекке сығарырға ҡушты.

Ҡотола алмаясағыи аңлап, воевода Унковский **Прн** казной йортҡа ҡасты. Унда ла тыныслыҡ булманы — иҫерек казактары менән старшина килеп инде.

— Эх һин, һимергән сускa, нисәмә казактын ҡаныи эстең! — тип, ул воеводаның һаҡалын йолҡколай **баШ**ланы.

Казак старшиыаһы артынса Прнказной йортҡа Степан **Разин** да **килде.** Ул, ҡазак **старшинаһын** ситкә шылдырҙы **ла, иҙән уртаһында ҡанһырап ятҡан воеводаның битенә** ҡыҙыл итегенең табаныи терәне.

— Тараҡандай иҙеп **үлтерәйемме,** әллә **ғүмереңә** алмашҡа ҡаҙна байлығын бирәһеңме?

— һәммәһен алығыҙ, **тик** иҫән ҡалдырығыҙ, — тине воевода Унковский, дер ҡалтыранып.

— Ярар, йәшә, **һиңә** ғумер бүләк **итәм!** Әммә казаҡ-Ҡ'ҙы рәнйетеуенде **ишетһәм,** үлтерәсәкмен,— тине Разин.

Ярандары менән воевода өйөндә төшкө тамаҡ туйҙырған сағында, атаманды эҙләп **килгән** казак уның ҡаршыһында теҙләнде.

— Батюшка! Мәскәүҙән батша грамотаһы менән ебәрелгәм сотник шәхси **стругала**[1] Әстрханға **китеп** бара.

— Был яҡшылыҡҡа түгел. **Грамота** менән ебәрелгән **сотмикты** үлтерергә, стругалағы байлыҡты таларға, батша грамотаһын һыуға батырырға, — тнне Степан Разин.

Төрмәнән иреккә сығарылған тоткондарҙы властарға **биреүҙе** һораған воевода Левоытий Плохов менән дә ри**залашмайынса, атаман ҡырт киҫте:**

— Тоткондарҙы властарға биреү **ғәҙәтем юҡ минең!**

Шул маҡсат **менән** Әстрхандан килгән кенәз воевода **Порозовский** офицерының да тәкдимен кире ҡағып, Степан Разпн ҡырсынды:

— Ундай йомошто йомошларға Иван **Семенович** Порозовскийҙың **нисек** баҙнатсылығы етә? Воеводаға әйт, мин **унан** ҡурҡмайым! Дуҫтарымды һатыу ғәҙәтемдә юҡ. Шорозовскийҙан олораҡ дәрәжәле баярҙар ҙа минең өсөн сүп! Мин тыумыштан ирекле, воевода уйлағанса, холоп түгел. Ҡурҡаҡ, ҡуян йөрәк, алйот Порозовскийҙан **мин рслөрәк!** Уны осратһам, имен **ҡалдырмаясаҡмын!** Уның \ ен дә, ҡәбәхәт **ярҙамсыларын** да **тураҡлап** үлтерәсәкмен!..

Атамандың **һүҙҙәре** властарға асыктан-асык дошманлыҡ белдереү булып яңғыраны.

Степаи Разин, ысынлаи та, **Порозовскийҙан** күпкә өҫтөн **ине.**

Лтаман батша хөкүмәтенә, **һәм уларҙың** ялсыларына ҡаршы һуғышырға теләк **белдергәс,** казактарҙың **ҡыуаныҒы** баштарынан ашты.

— **Беҙҙең** яҡлы кешеләр күп, дошмандарыбыҙҙы мотлаҡ сңәсәкбеҙ!

---

[1] *Струги* — караптың бер төрө.

— Батша тәхетенә атаманды ултыртасаҡбыҙ! — тиҙ ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, улар йәһәтерәк походҡа сығырға ашҡынды.

Походҡа сығасаҡ кешеләр йыйылғас, Васька Усь уларға юл күрһәтеп барырға ризалашты.

Степан Разин был мәсьәләне оҙаҡҡа һуҙманы. Казактар төҙөгән ер ҡаласыҡҡа Черкастағы ҡатыны менән бергә туған ҡустыһы Фролды алып килгәс тә, һөжүмгә әҙерлек эштәрен башҡарҙы.

Дон ике лагерға бүленде.

Оло войсковой старшинаһы атаман Корнило Яковлев хакимлыҡ ҡылған хөкүмәт Черкаста йәшәне, ә Степан Разин командалығындағы ғәскәр яңы ҡаласыҡта урыплашты.

Степан табышты ғәҙел бүлде, үҙендә хеҙмәт итергә теләүселәрҙең береһен дә кире ҡайтарып ебәрмәне.

Ғәскәр һаны ике мең ете йөҙ берәмеккә еткәс, атамаи есаулдарҙы йыйып кәңәшләште. Уларҙың кәңәше буйынса, походҡа сығырҙан алда казактарға ҡатындары, балаһағалары һәм туған-тыумасалары эргәһенә барып килерго рөхсәт итте.

Казактар өйҙәрендә булып килгәс, Черкастағы батшп ғәскәренә ҡушылырға ризалашып, Степан Разин үҙенең ярҙамсылар.ын Корнило Яковлевҡа ебәрҙе.

Степандың тәҡдименән һуң, ни эшләргә белмәйепсо, воевода Яковлев икеләнде. Берәй хәйлә түгелме был? Казактар килеп ҡушылһа, ғәскәрҙәге тәртип ҡаҡшамаҫмы? Разиндың бандиттарын үҙенә ҡушырғамы, әллә уларш ҡаршы һуғышырғамы?

Был мәсьәләне үҙе генә хәл итә алмаясағын аңлпи, воевода Яковлев Мәскәүгә ебәргән сапҡындың батша уки зы менән килеүен көтөргә булды.

1670 йылдың яҙында, йәкшәмбе көнө, Герасим Евдокимов тигән кеше Донға килде.

Ул алып килгән батша грамотаһы менәп ярҙамсылар.ын таныштырғас, воевода Корнило Яковлев батша илсеһен Мәскәүгә кире оҙатырға ҡушты.

Иртәгеһе көндөң таңында, Герасим Евдокимовты Мәскәүгә оҙатырға йыйналғанда, Черкаскә Степан Разин килде.

Ул, воевода Яковлев менән күреште лә:

— Былар ҡайҙа китергә ҡабалана? — тип һораии

— Батша илсеһе килгәйне... Ул кире ҡайтып китә, — тине воевода.

Степан Разин асыуланды.

— Батша илсеһе килеүе тураһында ниңә мицо хабар

итмәнең! — тип һораны ла, ул ҡыҙарына-бүртенеп ҡысҡырҙы: — Батша илсеһе Герасимды миңә сақырып килтерергә!

— Мин кемгә кәрәк? — тип һораны Герасим, сотник менән һөйләшеүенән буленеп.

Герасимдың һорауына иғтибар итмәйенсә, Степан Разин ҡысҡырҙы:

— Бында һине Государь ебәрҙеме, әллә баярҙармы?

— Государь, — тине Мәскәү илсеһе.

Разин ышанманы.

— Алдашаһың, кәнтәй! Ялған грамотаға һылтанып, лазутчик вазифаһын башҡарыуың миңә мәғлүм! — тип, ул Герасимды Донға ташларға ҡушты.

— Ниңә улай ҡоторонаһың? — Воевода ыеҫкен Герасимды яҡларға булғайны, атаман ҡылысын ҡынынан һурып сығарҙы.

— Яҡты донъяла йәшәу ялҡыттымы, воевода?!

Яковлев һүҙ көрәштермәгәс, Степан Разин тыныслапды.

— Ярар, йәшә! Был юлы ярлыҡайым! Миңә ҡамасауларға теләһәң, дүрт яғың ҡибыла, бар, теләгән ереңә кит!

— Ғәскәремде ҡалдырып, бер ҡайҙа ла китмәйем.

— Китмәһәң, үлемең ошонда! — Степан йәнә ҡылысыиа тотондо.

Воеводаның тупаҫ көскә ҡаршылашырға баҙнатсылығы стмәне. Ул күҙҙән юғалғас та, Черкастағы батша хөкүмәто ғәскәрен Степан Разин үҙенә буйһондорҙо.

Дондағы барлыҡ ғәскәр боласыл казактарға ҡушылиуы уңайы менән тантаналы байрам иғлан ителде.

Казактар менән стрелецтар ашаны, эсте, күңел асты.

Ҡыҙмасаланып алғас, Степан Разин батша яҡлы священниктарҙы, поптарҙы, сиркәү менәи тығыҙ бәйләнештәге кешеләрҙе һәм ышанысһыҙ һаналған казактарҙы язалап ултертте йәки Дондан ҡыуҙы.

Күңелен елкендергән ҡырағай көстән нисек итеп ҡотолоу әмәлен таба алмайынса, атаман иң йырткыстарҙан да яманыраҡ ҡоторондо.

Йәне һөймәгән кешеләрҙән Донды таҙартҡас ҡына бер аҙ тыйнаҡланып, Степан Разин йәнә эскелеккә сумды.

— Ҡәҙерлеләрем минең, иректә йәшәүҙең ҡәҙерен белегеҙ! Уйнап-көлөп, күңел асып ҡалығыҙ!

Атаман менән теләктәшлек белдереп, иҫерек казаҡтар ашаны, эсте, ҡатын-ҡыҙҙар менән күңел асты һәм һем уҙарҙан буҙланы.

Ах вы, гусельки мои, гусли звонкие,
Вы сыграйте-ка мне песню новую!
Как во полюшке, во полянушке
Там жила да была молодая вдова.

Ох, вдова жила — горе мыкала,
А как замуж пошла — слез прибавила;
Прошла вдова ровно тридцать лет,
Ровно тридцать лет, еще три года...

— Туктағыҙ!.. Туктағыҙ тим, эттән тыуғандар!..

Билдәле йырҙы үҙ белдектәренә үҙгәртеп йырлаусылар, аптырашып, бер-береһенә ҡараны.

— Нимә булды?

Степан Разин, айҡала-сайҡала, урынынан күтәрелдс.

— Утыҙ йәшлек буйҙаҡ ҡатын яҙмышы өсөн казак ҡайғырырға тейешме? — тип һораны ла асыу менән әйтте: — Юҡ, улай килешмәй! Йүнле бисә йәки һөйәркә менән йәшәп ҡарағаныҙ ҙа юҡ һеҙҙең!.. Әйҙәгеҙ, мин һеҙгө ең шәп ҡыҙҙарҙы бисә итеп бирәм! Теләйһегеҙме?

— Теләйбеҙ, атаман! — тип ҡысҡырышты казактар.

Степан Разин, воевода өйө ҡаршыһындағы тәлгәш ҡайын эргәһенә ҡалалағы ҡатын-ҡыҙҙы йыйҙыртып, казактарын берәм-берәм өйләндерҙе һәм никахты үҙе укыпш

Кәләш алыусыларға бағышлап сығарылған «Богашри вокруг ранитова куста венчаются» тнгән йыр ыңғайлнп тәлгәш ҡайын эргәһендә күмәкләп бейергә ҡушты Стспаи Разин.

— Шәберәк, шәберәк ҡыймылдағыҙ!.. Тағы ла шәберәк, — тип ҡысҡырҙы атаман.

Бер аҙҙан һуң, дәртләнеп китеп, ул үҙе лә бейерә төштө. Шашынып-ҡотороноп һикеренеүҙән туҡталғас, тирләгән маңлайын ең осо менән һыпырҙы ла оло кружм тулы араҡыны ауыҙына ҡойҙо.

— Өйләнеүселәр хөрмәтенә эсегеҙ, күңел асығыҙ!.

Бер аҙнаға һуҙылған эскелектән һуң, казактар гагоры* ға табан йөҙҙө.

Наншин ҡаласығындағы Васька Устың ике менлск отряды ҡушылғас, Степан Разиндың ғәскәре Царицын ҡалаһына диңгеҙ яғынан һәм ҡоронан һөжүм башланы

Казактар яҡынлашыуын күреп, ҡалалағы батша гвардкәре туптарҙан һәм мылтыҡтарҙан ут асты.

Атаман, ҡаланан ҡасып килгән кешеләрҙән ҡайҙа, нимә дәй нығытмалар, ҡорал, аҙыҡ-түлек запасы, ҡаҙна саһы күпме икәнлеген һорашып белгәс, Васька Ускп ҡалаһы ҡамарға ҡушып, утыҙ сакрым алыслыктағы борщ ҡорт йәйләүҙәренә табан йүнәлде. йәйләүҙәге барлыпс мең аттың башына етеп, тол ҡалған башҡорт ҡатындары

иән уларҙың мал-тыуарын казактарына бүлеп биргәс, атаман ҡала ҡапҡаларын асыуҙы талап итте.

Талап воевода Тургенев тарафынан кире ҡағылды.

Асыуы ҡабарып, Степан ҡапҡа йоҙаҡтарын һуғып төшөрөргә ҡушты. Ҡала ҡапҡалары асылыу менән, казактар, шау-шыу ҡубарып, эскә ябырылдылар.

Башня өсөн хәл иткес алышта атаман Разин воеводапы һөңгө менән сәнсеп үлтерҙе лә уның мәйетен һыуға ташлатты.

— Ун мендән ашыу ғәскәремде хәҙер бер кем дә еңә алмаясаҡ. Волга буйындағы барлыҡ ҡалаларҙы ҡыйратып, Мәскәүгә ҡаршы барырға тейешбеҙ, — тип ул походҡа әҙерләнергә ҡушты.

Шул саҡ стрелецтар юғары яҡтан, ә Әстрхандан сыҡҡан кенәз Порозовский ратниктарының Ҡыҙыл Ярға. яҡынлашыуы тураһында хәбәр алынды.

— Порозовский мине еңә алмаҫын аңламайҙыр, ахмаҡ!

Степан Разин Мәскәү стрелецтарына ҡаршы — туғайлап, ә ратниктарға ҡаршы тау яғынан атака ойоштороҙо.

Стрелецтар бирешмәне. Улар, казактарҙың һөжүмен кире ҡағып, ҡалаға яҡынлаша башланы.

Васька Усь пушкаларҙан ут асырға бойороҙо. Стрелецтарҙың бер нисә карабы онталды, яугирҙары һыуға батты.

Иҫән ҡалған стрелецтарҙы ишкәкселәр урынына тәғәйенләгәс, Степан:

— Яҡшы ишегеҙ. Ялҡауланһағыҙ — үлем! Сөнки һеҙ ешәйәтсе баярҙар яклы. Ә беҙ — хаҡ юлда... — тип янаны.

Мәскәүҙән ебәрелгән стрелецтарҙың тулыһынса ҡыйрптылыуын белгәс, Әстрхандан ебәрелгән ратниктар ҡаршылыҡ күрһәтмәне. Улар аяҡ-ҡулдары бәйләнгән воеводаларҙы Степан Разинға тапшырҙылар.

— Еңеү менән!

— йәшәһен казактар батшаһы!

— Атаманға дан!

— Дан, дан!.. — тип тамаҡ ярҙы казактар.

Дан икән, дан. Быға ирәбеләнеп, Степан Разин ратниктарға өндәште:

— һеҙ, казактар шикелле, ирекле, — һәм уларға воеводаларҙы тураҡлап үлтерергә рөхсәт итте.

Ҡалған ҡалдырылған берҙән-бер воевода Львовтан атаманы һорау алған ваҡытта, Васька Усь яҡынлашты.

— Батюшка, һиңә Әстрхандан делегация килде.

— Йиндәй йомош менән? — тип ҡыҙыкһынды Степан.

— Әстрхан асҡысын бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ беҙгә тапшырырға теләйҙәр.

Степан Разин ҡарашы менән делегацияларҙы һынсыл баһаланы.

— Был ысын хәбәрме?

Әстрхан ҡалаһы вәкилдәре, суҡына-суҡына, баш эйҙе.

— Эйе, батюшка!

— Әстрханда һинең йәһәтерәк **килеуенде** көтәләр!

— Воевода Порозовский мине уҙе көтәме? — Степан көлөмһөрәне.

— Юҡ, уны **немецтар** ғына **яҡламаҡсы...**

Степан Разин шул көндө ук Әстрханға табан ыңғамланы.

Юлда уҡ воевода Порозовскийҙың ҡаланы нығытыуы, вал һәм тәрән соҡорҙар **менән** уратылған ҡәлғә стеналары өҫтөнә барлыҡ пушкаларын ҡуйҙыртыуын белҙәс, **немецтарҙың һуғышҡа** ҡыҫылмауҙарын һөра, тип, Степан попты алдан ебәрҙе.

Әммә атаман ебәргән кешеләр үҙ маҡсатына **ирсша алманы.** Воеводаның ҡушыуы буйынса ҡулға алынғаи **иоп** төрмәгә ябылды, ә уны оҙатып барыусыларҙың **баштары** еҙә сабылды.

Воевода Порозовский ҡалалағы казактарҙы батшаға тоғро булырға, енәйәтселәрҙе аяуһыҙ ҡырырға өндәне.

— Батырҙарға батшанан бүләк юллаясаҡмын, **үлелар** теге донъяла мәңге ожмахта буласаҡ, — тип әүрәттс ул.

Эңер яҡынлашҡанда борғосолар борғо уйнаны, **бара** бандар доңғор-даңғыр гөүләне. Воевода Порозовский, **һы** байлыларын ҡабаландырып ниҙер ҡысҡыра-ҡысҡыра. **КЭЛ** ғә ҡапҡаһына табан елдерҙе.

Бер аҙҙан һуң шомло тынлыҡ урынлашты.

Ҡаланы һаҡлаусыларҙан бер кем дә йоҡламаны.

Таң яҡтыһы беленгәндә, борғолар менән барабаиднр йәнә гөүләргә тотондо, туптарҙан аткан тауыштар ҙа НИ ғыраны.

Ҡәлғә тышындағы казактарҙың стеналарға үрмәләүен **күреп,** Порозовскийҙың ҡото алынды.

— Атығыҙ, тураҡлағыҙ, сәнсеп ултерегеҙ бандпттарҙы. Уларҙың өҫтәренә ҡайнаған ыҫмала шыйыҡсаһып һибегеҙ!..

Воевода ҡушҡанды бер кем дә тыңламаны. Рапмнстар үҙҙәренең дворяндарын, йөҙ башлыҡтары менән тупсыларҙы дөмбәҫләргә керештеләр.

Бер яҡ ситтәге немецтар төркөмө генә, ҡалалағы хәлде белмәйенсә, казактар өҫтөнә туптар яуҙырҙы.

Немецтар эргәһенә йүгереп барған инглиз офицеры,

бпте **буйлап** һарҡкан ҡанды ҡулъяулығы менән ҡаплап, **кысҡырҙы:**

— **Нимә эшләйһегеҙ һеҙ? Ҡаланы** һаҡлаусылар хыянатсылыҡ ҡылды! Стрелецтарҙың **һәммәһе** бандиттарға **ярҙамлаща...**

— **Битең** ни эшләне?

— Стрелецтар һөнгө **менән** сәнсте... Өҫтөмдә **тимер йем** булмаһа, үлтererҙәр ҙә **ине...** ке-

— Беҙгә **ни** эшләргә? — Тупсылар аптыраны.

— **Ҡасығыҙ,** берәй ергә йәшенегеҙ, — тиңе ло яралы аяҡтарыиа баҫып тора **алмайынса, инглнз** офицеры **йығылды.** ергә

Үҙ ғүмере өсөн ҡурҡкан **немецтар** шунда **уҡ** юҡ һөнгө менән ҡорһағы яраланған воевода **Порозовский**ы собор **сиркәүе** янына алып килделәр. буллар

Кенәздең яраһын бәйләткәс, сиркәүҙәге воевода эргәһенә бандиттарҙы уҙғармаҫҡа **ҡушып,** митрополит ишектәрҙе эске яҡтан бикләтте.

Ләкин сиркәүҙе һаҡлаусы ратниктар менән Степан Разиндың казактары иҫәпләшмәне. Уларҙы тырым-тыракай **туҙҙырҙылар ҙа,** сиркәү ишектәрен ватып, эскә ябырылды**лар.** Сиркәүҙе һаҡлаусыларҙы **үлтереп,** воеводаны, йөҙ **баш**тарын, дьяҡтарҙы, дворяндар менән уларҙың сағаһын бер **булмәгә** бикләп, байлыҡтарҙы йыйырға **бүлә**һәм **онтарға** тотондолар.

Төш мәлендә **сиркәүгә** атаман Разин килде.

Ул аҫты-өҫкә әйләндерелгән бүлмәләрҙә йөрөп сыҡты ҡеләмгә һалынған воеводаны тышҡа алып сығырға ҡушты.

— Ҡәбәхәт воеводаны **ниңә** кутәреп **килтерәһегеҙ?** — һораны Степан Разин.

— Кенәз яраланған, йөрөй алмай.

— Йөрөй алмаһа, **имгәкләп** килһен! Минең итегем та**ваның** ялап, воеводалыктан баш тартһа ғына, уны иҫән ь.мдырсаҡмын!

Казактар ергә һалған Порозовский урынынан ҡуҙғалмағас, Степан Разин ярһыны.

— **Ни...** эшләп ятаһың, хайуан? — тип уны ҡан кеүек ҡып-ҡыҙыл итеге табаны **менән** тапаны- тапаны ла, шунда ла үсен ҡандыра алмағас, ҡылысы менән ваҡ-ваҡ киҫәктәргә тураҡланы.

Атамандың ҡушыуы буйынса, ҡалған кешеләрҙе лә тураҡларға тотондолар. Ҡан йылға булып аҡты. Сиркәү инындағы тәрән соҡор мәйет менән тулғас:

— Нисә кеше язаланды? — тип белеште атаман.

Дүрт йөҙ ҙә ҡырк бер, — тип яуап ҡайтарҙы Усь.

— Яҡшы, беҙгә ҡаршылыҡ күрһәтеүселәр артабан да аяуһыҙ тураҡланасаҡ!.. Хәҙер Приказ палатаһындағы, байҙар ҡураһындағы һәм үлеләрҙән ҡалған байлыҡты бер урынға йыйып, һәр казакка ғәҙел бүлергә!

Васька Усь Степандың бойороғон үтәргә ашыҡты.

Сиратҡа теҙелгән казактарға таланған байлыҡты бүлеп **биргән** саҡта, башняла урынлашҡан немецтар пушкаларҙан ут асты.

Туптар төшөп ярыла башлағанда хәүефһеҙ урынға ҡасырға өлгөргән казактар, көс туплап, бер нисә тапҡыр башнялағы немецтарҙы атакаланылар. Әммә уларҙың һөжүме һәр саҡ кире ҡағылды.

Башнялағы немецтар батырҙарса алышты. Ҡурғаштары бөткәс, пулялар урыпына көмөш аҡсаларҙы файҙаландылар.

Дарылары ҡалмағас ҡына, немецтар атыуҙан туҡталды һәм башнянан берәм-берәм һикерҙе. Ләкин ҡасып ҡотола алманылар. Казактар уларҙың береһен дә ҡалдырмай тураҡланы.

Әстрхан **ирекле** казактар ҡалаһы тип иглан **ителде.**

Степан Разин Әстрханда йәшәүсе халыҡты меңгә, йөҙгә, унға бүлде һәм уларҙың башлыҡтарын тәғәйенләне.

Казактар ғәскәрендә лә бер аҙ үҙгәрештәр индерелде. Ҡазактарҙың йыйыны уҙғарылып, Степан Разиидың ярҙамсылары, есаулдар, йөҙ һәм **мең** башлыҡтары һайланды.

Ойоштороу эштәре тамамланғас, ҡала ситендәге иркен яланда ҡала кешеләре менән казактар йыйылды. Улар, Рәсәй батшаһы менән Степан Разинға тоғро хеҙмәт итергә, енәйәтселек ҡылыусы баярҙар яҡлы кешеләрҙен бере һен дә ҡалдырмай ҡырырға теләк белдереп, ант итте-ләр. Атаманға буйһонорға теләмәгән священниктарҙың бере һе шунда уҡ һыуға батырылды, ҡалғандарының аяҡ-ҡулдары быуындарынан киҫеп үлтерелде.

Атаманды һанға һуҡмаған иң аҙаҡҡы священник язаланғандан һуң, мәжлес башланды.

Ҡала кешеләре, элекке һәм яңы казактар менән бергә буталып, ашаны-эсте, күнел асты.

Бик ныҡ иҫерергә елгөргән Степан Разин бер урып ултырып сыҙаманы. Ҡала урамы буйлап йөрөүҙән арығас митрополит ҡураһына инеп, мосолмандарса аяҡ **салып** ултырҙы.

— Мин донъялағы барлыҡ хандар менән батшаларҙан да бөйөгөрәк! Барса хандар һәм батшалар миңә **баш** эйәсәк, — тип күкрәк һуғып маҡтана-маҡтана, казактар тотоп килтергән кешеләрҙе тураҡлап үлтертте, ая быуындарын **киҫертеп** язалатты. Ҡыҙыл итегенең таба-

пыи яларға, ыштанһыҙ осаһын үбергә ризалашҡан айырыш кешеләр генә улем язаһынан ҡотҡарылды.

Бала-саға ла ололарҙан үрнәк алды.

Улар, кеше яҙмышын еп-еңел хәл ҡылыусы бандиттар башлығы Степан Разинға оҡшарға тырышып, ғәйепле һаналған малайҙарҙы таяҡ менән туҡманылар йәки аяҡтарынан йөҙ түбән аҫып ҡуйҙылар. Үнәсенән аҫылынған бер нисә үҫмер үлгәс кенә, ҡалғандары һыпыртмаҡтарҙан ҡотҡарылды [1].

Малай-шалайҙың нисек итеп күңел асыуын күргән Разин:

— Мо-лодцы! Малайҙарҙан шәп, ысын казак сыға-саҡ, — тип маҡтай-маҡтай, «аҡыллы һәм үтә фәһемле» уйын ойоштороусы малайҙарға ҡиммәтле бүләктәр тапшырҙы һәм уларға араҡы эсерҙе.

Малайҙар менән аҙапланыуҙан ялҡҡас, ҡаланы буйһондорғанда тураҡланып үлтерелгән дворяндарҙың, сауҙагәрҙәрҙең, воеводаларҙың ҡатындары менән ҡыҙҙарын казактарға кейәүгә бирҙе һәм священниктарға никах уҡырға ҡушты.

Митрополит хөжрәһендә [2] йәшәгән кенәз воевода Порозовский мәрхүмдең ҡатыны менән ике улын саҡырып килтерткәс, олоһоноң танауына төрттө.

— Әй, һинә нисә йәш?

— Ун алты, — тине үҫмер.

— Исемең нисек?

— Кенәз Григорий.

— Кенәзлегеңә төкөрәм мин! — Степан һаһылдап көлдө. — Минең өсөн һин холоп, ҡол, ябай Гришка! Әй, һин, **Гришка,** ҡаҙна аҡсаһын табырға ярҙамлашырһыңмы?

— Ҡаҙна аҡсаһы юҡ.

— Ҡайҙа булған?

— Жалованьеға таратып бирҙеләр.

— Саҡ ҡына ла ҡалманымы?

— Ҡалманы.

— Атайыңдың байлығы ҡайҙа?

— Казактар таланы.

Үҫмерҙең яуабы атаманды ҡәнәғәтләндермәне. Тәүҙә ноеводаның оло малайы, Степандың ҡушыуы буйынса, ҡала стенаһына йөҙ түбән аҫып ҡуйылды. Шунда ла ата-ҙы байлығы ҡайҙа йәшерелеүен әйтмәгән үҫмер, ҡабыр-аһынан тимер ырғаҡҡа эләктерелеп, урамдағы ағас ботағына аҫырға хөкөм ителде.

---

[1] *Соловьев С. М.* История России с древ. времен. Том XI, гл. 5.

[2] *Хөжрә* — келья (Монастырҙағы бәләкәй бүлмә).

Григорийҙан һигеҙ йәшкә кесе воеводаның икенсе улыв да язалап үлтертеп, япа-яңғыҙы ҡалған Порозовскийҙың тол ҡатынын Степан үҙенең иң якын ярҙамсыһы Васька Усҡа бүләк итте.

XI

Степан Разиндың бандиттары Рәсәй дәүләте **именлегенә** оло ҡуркыныс тыуҙырҙы.

Ошондай үтә ҡатмарлы, хәүефле һәм ауыр шарттарҙа батша хөкүмәте, ашығыс ярҙам итеүҙәрен һорап, Башҡортостанға сапҡын ебәрҙе.

Аҡ батша мөрәжәғәте иғлан ителгәс тә, воеводаларҙың яуызлығын онотоп, Рәсәй илен ҡурсалауҙы үҙ бурысы тип һанаған башҡорттар походҡа китергә әҙерләнә башланы.

Тамъян волосы старшинаһы Садир мулла ла Рәсәй иле яҙмышына ғәмһеҙ ҡалмаиы. Ул, Чесноковка эргәһендә уҙғарылған йыйындан ҡайтҡас, егерме йәшлек улы Сәйеткә йыйында ишеткән-белгәндәрен һөйләне.

— Улым, Рәсәй именлеген һаҡлау буйынса, һиңә лә сират етте, — тип батша хөкүмәтенең манифесын күрһәтте.

һәр саҡ тынлаусан, әҙәпле, атаһына ҡаршылашыу түгел, үҙенән саҡ ҡына оло йәштәгеләргә лә ҡырын күҙ менән ҡарарға ла баҙнатсылығы етмәгән Сәйет башын һалындырҙы.

— Атай, зинһар асыуланма, яуыз Рәсәй батшалығыҙ өсөн ырыуҙаштарымдың ҡанын ҡойҙорғом килмәй.

Садир аптыраны.

— Көфөр һүҙен һөйләйһең бит, улым. Иван Грозный биргән Грамотала яҙылғанса, беҙҙең бурыс...

— Беләм, атай, һәммәһен беләм, — тип бүлдерҙе Сәйет. — Олатайымдың васыятын да, һинең Мәскәүҙе нисек һаҡлауывды ла онотманым, атай.

— Шулай булғас, ниңә тиҫкәреләнәһең, улым?

— Үҙ вәғәҙәһен боҙоп, башҡорттарҙы күрәләтә талаған урыҫтарға хеҙмәт итеү — хыянат, атай.

— Мулла башың менән көфөр һүҙен һөйләйһең **биг.** Бындағы воеводаларҙың алама ҡыланышын батша белмәгән. Белгәс тә, тейешле сараһын күрҙе...

— һәммәһе башҡорттарҙы тынысландырыу өсөн **генә** башҡарыла, атай. Башҡорттарҙы рәнйетеүсе Рәсәй батшалығына мин хеҙмәт итергә теләмәйем! Аҡ батша — яуыз. Башҡорттар болаға күтәрелгәндә йәки Рәсәйгә берәй ҡурҡыныс килеп тыуғанда ғына якшатлы булып ҡылана. Аҙаҡтан, биргән вәғәҙәһен онотоп, башҡорттарҙы воеводаларынан талата, ер-һыуыбыҙҙы һәм урмандарыбыҙҙы тартып алырға маташа.

— Батша ғәҙел булмаһа, воеводаларҙың алама ҡыланышына сик ҡуйылыр инеме?

— Был тыныслыҡ ваҡытлыса, атай. Дондағы ҡазаҡтар болаһы ҡыйратылыу менән башҡорттарҙы йәнә ҡыҫасаҡтар.

Батшаның ғәҙеллегенә нисек итеп улын ышандырырға белмәй, Садир оҙаҡ ваҡыт өндәшмәй ултырҙы.

— Алдағыһын бер Аллаһы тәғәлә генә белә, улым. Беткә үсегеп тун яҡҡан бәндә шикелле ҡыланма. Ваҡыты еткәс, күҙ күрер, Алла бойорһа. Ата-олатайҙар васыятын тотоп, аҡ **батшаны** ярҙамһыҙ ҡалдырмайыҡ.

Аталы әйтҡәндәр менән теләр-теләмәҫтән ризалашып, Сәйет баш ҡақты.

— һүҙең рас, атай. Тормош гел бер көйөнсә тормай. Мисек кенә булмаһын, батша өсөн ҡан ҡойоуҙан файҙа юҡ.

— Яуыз ҡазаҡтар батша ғәскәрен ҡыйратһа, башҡорттарға файҙа булырмы? • — тип һораны Садир.

— Рәсәйгә берәй сит ил ғәскәре баҫып инһә, аңлайым, ярҙамлашыу кәрәктер... Кафырҙар ҡафырҙарға, урыҫтар урыҫтарға ҡаршы һуғышыуына беҙҙең ни ҡыҫылышыбыҙ бар?

— Ярай, әләйһә, үҙ ихтыярында, — тине Садир.

Шунан һуң, Дон ҡазаҡтарына ҡаршы һуғышҡа барыу-бармау хаҡында һүҙ сыҡманы.

Тамъян ырыуы кешеләре урыҫтарҙың үҙ-ара ызғышыуына ҡыҫылмай, уртаса мөнәсәбәттә икәнлеген ишетеп, бүтән даруғаларҙағы башҡорттар ҙа походҡа сығыу мәсьәләһен киҫектерҙе.

...Степан Разиндың ҡазаҡтары Әстрханға якын барлыҡ башҡорт ауылдарын туҙҙырыуы, һарытауҙы һуғышып алып, башҡорттар йәшәгән һамарға яҡынлашыуы тураһында хәбәр алынғас ҡына Башҡортостанда йәнә ығы-зығы ҡупты.

— Бәләгә тарыҡҡан башҡорттарҙы ярҙамһыҙ ҡалдырыу килешмәҫ, — тип, Сәйет тә походҡа сығырға әҙерләнде.

Тамъян волосында әүәлге тыныс тормош бөттө.

Ир-егеттәр ҡылыс-һөңгөләрен үткерләне, уҡ-һаҙаҡтар менән аҙапланды. Ҡатын-ҡыҙ, бала-сағалары менән сыр-сыу килеп, йылҡы ите ҡаҡланы, ылаштарҙа ҡорот киптерҙе, ҡымыҙға һаба әҙерләне, төрлө аҙыҡты тоҡтарға тултырҙы...

Шаҡман ауылынан бер яҡ ситтәге туғайлыкта йыйыл-

ған Тамъян ырыуы егеттәре, үҙҙәрен оҙатырға килеүсе туған-тыумасалары менән һаубуллашҡас, эйәрле аттарына атланып, тигеҙ сафҡа теҙелделәр.

Сәйет алға сыҡты.

Ул үҙе менән яуға барасаҡ ырыуҙаштарына тәртипте һәм Ҡазанға барасаҡ маршрутты аңлатҡан саҡта, Садир шып-шым ғына торҙо.

«Улым сәсән, отҡор, һәр нәмәне белеп һөйләй», тип уйлап, ул Сәйеттең буй-һыны, көнгә янған киң яңаҡлы йөҙө, шлем аҫтынан күренгән сәм-ҡара күҙҙәре менән һоҡланды.

Ҡабырсаҡлы тимер күлдәк өҫтөнән кейгән аҡ сәкмәне, яурынындағы уҡ-һаҙағы, билбауына тағылы пистолы, хәнйәр-ҡылысы һәм көмөш шпорлы итеге лә Сәйеткә бик килешә. Ул тыумыштан һуғышсы булырға өйрәтелгәнме ни!

Сәйет атланған киң күкрәкле ерән ҡашҡа аты һыртындағы эйәре, алтын-көмөш менән биҙәлгән йүгәне, айылы һәм ҡойошҡаны ла ябай һуғышсыларҙыҡынан нык айырылып тора. Эйәренең алғы ҡашағаһына ҡоростан эшләнеүле түп-түңәрәк көмрө ҡалҡан эленеүле.

Тик шуныһы ҡыҙғаныс, Сәйет — Садирҙың берҙән-бер улы. Ҡалғандары, ике-өс йәшкә етер-етмәҫтән, үлә торҙо. Сәйете менән һуғышта бер-бер хәл булһа, Аллаһы тәғәлә һаҡлаһын, Садир ни эшләр? Яңғыҙ улын ғәскәр башлығы итеп ебәрмәй ҙә хәле юҡ...

Атаһының ни уйлауын һиҙгәндәй, Сәйет артына боралоп ҡараны.

— Иҫән-һау йәшәгеҙ, — тип ул ырыуҙаштарына, туған-тыумасаларына, аҡһаҡалдарға, ата-әсәһе менән йәп-йәш кенә кәләшенә баш эйҙе.

Ир-егеттәрҙе яуға оҙатыусы барса халыҡ берҙәм яуапланы:

— Имен-аман йөрөп ҡайтығыҙ!

— Әсәһе һыуығыҙ, ашайһы ризығығыҙ ситкә сәселмәһен, тыуған төйәгегеҙгә тартып килтерһен!

— Хызыр-Ильяс юлдаш булһын һеҙгә!..

Нисек кенә бойоҡ, күңелһеҙ, бошонҡо булмаһындар, ир-егеттәрҙе оҙатыусылар тып-тыныс күренергә тырышты. Хатта Сәйеттең кәләше лә, айырылышыу ҙтә ҡыйын булыуына ҡарамаҫтан, сыҙаны, бер генә тамсы күҙ йәшеи дә ағыҙманы.

Моңһоу ҡурай көйөнә ҡушылып, кемдер йыр башлапы:

Ҡыҙыл ғына менән Яйыҡ һыуы
Салт аяҙ көн булмай тукмай ҙа.
Беҙ китә тип үк иламағыҙ,
Илаһағыҙ, юлым уңмаҫ ҙа...

һыбайлы ир-егеттәр бер-бер артлы урындарынан ҡуҙғалды.

Яуға китеүселәр алыҫлаша башлағас ҡына кешеләр үҙ-ара бышылдаша башланы.

Ырыуҙаштарын эйәртеп иң алдан барған Сәйет һуңғы тапҡыр артына әйләнеп ҡараны ла һаман да таралышмай бер урында баҫып торған яҡташтарын йәлләне.

Ирҙәренән, кейәүҙәренән, улдарынан айырылып **ҡал**ған ҡатын-ҡыҙға, атай-әсәйҙәргә һәм ҡарт-ҡороларға янғыҙ йәшәүе бик ҡыйын булыр **инде.** Башҡорттар бәхетһеҙ халыҡ. Ҡара яуҙан һуң улар мандый алманы. Дүрт йөҙ илле йыл буйына өҙлөкһөҙ бәлә-ҡаза килтергән сит **ил** баҫҡынсыларынан берәй заман ҡотолор көн булыр **микән?** Килмешәктәрҙең йәбер-золомона артабан нисек **сыҙарға?** Урыҫтарҙың да йыртҡыстарса ҡыланасағын алдан белгән булһа, Сәйеттең олатаһының атаһы Шәғәле Шаҡман бей, Рәсәйгә ҡушылырға теләк белдереп, үҙ ирке мснән Иван Грозныйға барыр **инеме** ни?

Ҡасандыр күп һанлы, ҡеүәтле, бай, юғары мәҙәниәткә эйә булған башҡорттарҙың яҙмышы кирегә ыңғайлауы с,)бәбе ниҙән ғибәрәт? Аллаһы тәғәләнең ҡаты ҡәһәре һуғылмаһа, башҡорттар ошо тиклем ыҙаланыуға дусар ителер инеме? Аллаһы тәғәлә бөйөк, берҙән-бер. Аллаһы **тәғәлә** әҙәм затының зиһене, уй-хисе аша тығыҙ бәйләнештә, уның яҙмышына, көнкүрешенә ҡарата ла туранан-**тура** мөнәсәбәттә. Шуға күрә һәр кеше Бөйөк Аллаһы юғалә алдында яуаплы. Аллаһы тәғәлә ҡөҙрәттәре өсөн донъялағы барлыҡ йән эйәһе типә-тиң.

Миллиондарса кешеләр ғүмере менән иҫәпләшмәгән Сыңғыҙ хан, Аҡһаҡ Тимер, татар хандары менән аҡ батша яуызлыҡтары ла, Аллаһы тәғәлә ҡушыуы буйынса, бер-береһенә тығыҙ бәйләнештә. Төрлө дин бер тамыр-**ҙан,** пәйғәмбәрҙәр күп. Әммә Мөхәммәт ғәлиәссәләм Ал**лаһы** тәғәләнең иң яратҡан берҙән-бер пәйғәмбәре. Ме**хәммәт** пәйғәмбәрҙең васыяттарын тайпылышһыҙ үтәү, уиы бойомға ашырыу мосолмандарҙың изгеләрҙән дә изге бурысы.

Күпселек башҡорттар ислам дине **ҡушҡанса** йәшәмәне. Шуға күрә ыҙаланыуҙарға дусар ителде микән улар? Сте**пан** Разиндың бандиттарының яуызлығына ҡаршы һуғышырға китеп барыуҙары ла, бәлки, шуның касафатынан**дыр?** Әстрхан, һарытау (Саратов) һәм Иҙел буйы башҡорттарын яуыз казактар ҡырмаһа, алыҫ сәфәргә сығырҙар инеме?..

XII

Башҡортостандың дүрт даруғаһынан килеүсе һыбайлы отрядтар Ҡазан яныңдағы уйһылыҡта тукталды.

Төрлө ырыу-волость егеттәре тиҙ арала танышып, үҙара дуҫлашҡас, ишеткән-белгән яңылыҡтар менән уртаҡлаштылар, ҡурай моңона ҡушылып йырланылар, тамаҡ әйттеләр, уйнап-көлөп күңел астылар.

Аҙна аҙағында һыбайлы башҡорт егеттәре төйәк иткән ергә кенәз Борятинский килде.

Ул, батшаның ҡайнар сәләмен тапшырып, башҡорт отрядтарыиың үҙенә буйһондоролоуын әйтте. Улар менән бәйләнеш тотоу өсөн үҙенең ярҙамсыһы итеп кенәз Садиров Сәйетте тәғәйенләне.

— Ошондай ауыр, ҡотолғоһоҙ шарттарҙа башҡорттарҙың, Бөйөк Государҙың ышанысын аҡлап, Рәсәйгә ярҙамға килеүе оло ҡыуаныс, — тип кенәз Борятинский Степаи Разнп бандиттарының яуызлығы тураһында түкмәй-сәсмәй һөйләне. — Дон казактары болаһы ҡыйратылмайынса, Әстрхан, һарытау менән һамар тирәһендәге ауылдарҙа бер генә башҡорт та имен ҡалмаясаҡ. Беҙҙең һәм һеҙҙең бурыс — уларҙы тулы һәләкәттән ҡотҡарыу...

Башҡорттарҙың иң ауыртҡан еренә ҡағылыуын һиҙеп, кенәз һүҙҙе йәлләмәне.

Иртәгәһе көндө, Ҡазандағы батша ғәскәре менән берләшкән башҡорттар, буленгән юлды дауам иттеләр.

Улар ҙур тиҙлектә барҙы.

Юлда тоткарлыҡ булмаһын өсөн, илле-йөҙ саҡрым алға ебәрелгән аттар улар килеп еткәнгә тиклем ашатылды, эсерелде һәм походҡа әҙерләнде.

Ял бирелгән аттарға атландылар ҙа, саҡ ҡына ла туҡталып тормайынса, ир-егеттәр йәнә алға елдерҙе.

Өс мең кешелек башҡорт отрядтарына ваҡытлыса башлыҡ итеп тәғәйенләнгән Садиров Сәйет мулла кенәз Борятинскийҙың һәр бойороғон тайпылышһыҙ үтәне. Сәйст үҙе лә ял **итмәне,** башҡаларға ла тынғы бирмәне. Был минутта ул үлемгә ҡаршы ашығып барыуын да, ғәзиз башы ҡайҙа ятып ҡалырын да уйламаны. Сөнки Бөйөк Аллаһы тәғәлә алдында уның изгеләрҙән дә изге бурысы — милләттәштәре менән мосолмандарҙы бандиттар ҡол- **лоғонан** йәһәтерәк ҡотҡарыу.

һарытау менән һамар ҡалаларын бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ буйһондороп, Симбирскиға табан ынғайлаған казактарҙың юлына йән-фарман сабышып барыусы башҡорттар ҡаршы сыҡты.

Арттағы Борятинский командалығындағы ғәскәрҙең тө-

йешле ваҡытҡа ярҙамға килеп етмәүе сәбәпле, казактар менән һуғышыусы башҡорттарға бик ҡыйыиға тура килде.

Алыш башланыуға дүрт сәғәт самаһы ваҡыт **үҙҙы,** ә Борятинский ғәскәрс һаман юҡ та юҡ.

Ҡазактарҙың һөжүме инде баҫылдымы тигәндә, һуғыш ҡабаттан ҡыҙҙы. Туптар төшөп ярылған һайын, башҡорттар иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡырылды.

Сәйет башҡорттарға йылға буйына сигенергә бойорҙо. Ләкин йылға буйына яҡынлашҡан башҡорттарға ҡаршы яҡтағы казактар йәҙрәләр һәм пулялар менән ҡойондора башланы.

Күп юғалтыуҙарға дусар ителгән башҡорттар хәүефһеҙ урынға барып еткәс кенә, урыҫ ғәскәре килеп стте.

Яңынан көслө алыш башланды.

Үлеш-ҡыйралыш эңер мәлендә генә баҫылды.

Икенсе көндө һуғыш ҡабатланманы. Ғәскәрҙәр үҙ пошцияһында ҡалды.

Кисәге һуғыш ваҡытындағы ҡот осҡос күренеште һәм моғәнәһеҙ юғалтыуҙарҙы күҙ алдына килтереп, Сәйет тыиыслана алманы. Кенәз Борятинскийҙың үҙ һүҙендә тор- **мауы,** көслө алыш барған ергә һуңлап **килеүе** сәбәбен иисек аңларға? Башҡорттарҙы бандиттарҙан ҡырҙырыуға нүнәлтелгән хәйлә тугелме был?..

Күнелһеҙ уйҙарының осона сыға алмайынса, аптырап-алъяп ултырған сағында Сәйетте кенәз Борятинский сакыртты.

Ул, беренсе һуғышта башҡорттарҙың күпләп ҡырылыуына үкенес белдереп, урыҫ крәҫтиәндәренең, сыуаштарҙың, сирмештәр менән марҙыуалар ҙа казактарға ҡушылыуын әйтте.

— Симбирскиҙа ла ғауға башланған. Ундағы граж- **дандар,** казактарҙыя тиҙ арала килеп етеүен һорап, Сте- **пан** Разинға сапҡын ебәргәндәр, баярҙар менән воевода Милославский яҡлы стрелецтарҙың күбеһен үлтергәндәр. **Шуға** күрә кисәге һуғышта башҡорттарҙың күпләп ҡырылыуы сәбәбен асыҡларға тырышып бәхәсләшеүҙән файҙа күрмәйем. Уны аҙаҡтан асыкларбыҙ. Хәҙер беҙгә бандиттарҙан элгәрерәк Симбирскиға барып етергә кәрәк, — **гип** кенәз Борятинский башҡорттар барасаҡ ҡыҫҡа юлды картала билдәләне.

Башҡорттар был юлы ла Рәсәй ғәскәренә хыянатсылыҡ ҡылманы. Симбирскиға барып етеп, тулы тәртип \ рынлаштырғас ҡына, урыҫ ғәскәре ҡалаға яҡынлашты.

Кенәз Борятинский ҡалалағы тормош менән йүнләп мпышырға ла өлгөрмәне, Степан Разиндың казактары һижүм башланы.

Бандиттарҙың яҡыныраҡ килеүен көтөп, кенәз Борятинский командаһыҙ ут асмаҫҡа бойорҙо.

Батша ғәскәре яҡшы ҡоралланған, хәрби тәртипте һаҡларға, командирҙарҙың бойороғон ҡаршылыҡһыҙ үтәргә лә өйрәтелгән.

Һан яғынан ике-өс тапҡырға күберәк һөжүм итеүселәр, киреһенсә, бер ниндәй тәртипкә буйһонмай, ябырылып килә.

Ҡалаға өс йөҙ аршын самаһы ара ҡалғас, Дон казактары ҡәлғәнең һул, урыҫ крәҫтиәндәре, сирмештәр, сыуаштар менән марҙыуалар уның уң яғынан ҙур тиҙлектә алға ташландылар.

Кенәз **Борятинский** барлыҡ туптарҙан һәм мылтыҡтарҙан ут асырға ҡушты. Башҡорттарҙың уҡтары ла, бал ҡорто күсе шикелле, күпләп осто...

Разинсылар һөжүме тотҡарланманы.

Казактар, иптәштәренең иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡырылыуы менән иҫәпләшмәйенсә, һаман алға ынтылды. Бәҙзе берәүҙәр, оҙон баҫҡыстар ҡуйып, ҡәлғә стеналарынан юғары үрмәләнеләр. Ләкин улар һәммәһе ҡырылды һәм казактарҙың атаканы кире ҡағылды.

Икенсе һәм өсөнсө атакалары ла уңышһыҙ тамамланды.

Улар, **ҡалаиы** яндырырға ниәтләнеп, стеналарҙың буйынан-буйына **һалам,** ҡоро ағас ботаҡтары ташып өйөүселәр һәм турҙар [1] яһанылар. Әммә казактарға ҡаланы яндырырға мөмкинлек булманы, туптарҙан аткан көслө ут менән башҡорттарҙың уғы ҡамасауланы.

Таң яҡтыһы беленгәс, казактар ҡаланан ситкә китте. Яҡындағы уйһылыҡта бер аҙ ял итергә лә, көс туплап, янынан һөжүм башларға ниәтләнде Степан Разин.

Уҡсы полктар ярҙамға килеп етмәйенсә Симбирскиш бандиттарҙан һаҡлау мөмкин түгел икәнлеген аңлап, кенәз **Борятинский** ҡаланан сигенергә мәжбүр булды һәм беренсе октябрҙә батшаға хат яҙҙы:

«Государь... **минең** ғәскәремдә хеҙмәт итеүселәр ышанысһыҙ, күптәр өйҙәренә таралышып бөттө. Барлыҡ таяныс-ышанысым башҡорттарҙа... Кенәз Петр Семенопмч Урусовтың ярҙамға **килеп** етеүен көтәм. Уның полктары **килеп** етеү менән ҡабаттан Симбирскиға барырға **ниәтлм** нәм».

Казактар Борятинский ғәскәре менән башҡорттарга тынғы бирмәне, улар сигенеп барыусыларҙы бер туҡтауһыҙ эҙәрләне.

[1] *Тур* — нығытманың бер төрө.

Дон казактарын дәртләндереп, Степан Разин алышиң ҡыҙыу урынында ҡайнаны, ҡаршылыҡ күрһәтергә маташыусы стрелецтарҙы үҙе лә күпләп ҡырҙы.

Икенсе төркөмдәге урыҫ крәҫтиәндәре менән башҡа вәкилдәр араһында үҙ-ара ыҙғыш башланыуын ишетеп, атаман ары сапты. Тәртипте ҡаҡшатыусыларҙы тураҡлап, һәр төркөмгә башлыҡ итеп казактарҙы тәғәйенләне лә:

— Хәҙер барығыҙ, Борятинский ғәскәрен ҡырығыҙ. Насар һуғышһағыҙ, минән яҡшылыҡ көтмәгеҙ,— тип ҡыскырҙы.

Төрлө милләт халыҡтарын берләштергән ялпы батша ғәскәренең һул яҡ флангыһын атакаларға тотондо, ә Степан Разин дон казактары эргәһенә кире елдерҙе.

— Алға, һөжүмде саҡ ҡына ла яйлатмаҫҡа, — тип ҡыскыра-ҡыскыра, ул батша ғәскәре менән башҡорттарҙы артабан ҡыҫырыкланы.

Бөтә ер улеләр һәм яралылар ыенан шығырым тулды. Свияга йылғаһына яҡын урында атаман ике тапҡыр яраланды. Әммә һуғыш майҙанын ҡалдырып китмәне.

Казактарҙың тылына сығып, башҡорттар яралы атаманды әсиргә алдылар. Уны ергә йығып аяҡ-ҡулын бәйләгән саҡта башҡорттар төркөмө казактар ҡамауына эләкте һәм юҡ ителде, ә яралы Степан Разин Симбирск лғына оҙатылды. Казактар ҙа, һуғыш майҙанын ҡалдырып, ҡалаға сигенә башланы.

Свияга аша икенсе ярға сығып, кенәз Борятинский глскәре менән һыбайлы башҡорттар Симбирскиға табан ыңғайланы. Казактар, уларға көслө ут асып, ҡаланы яндырырға әҙерләнде.

Ҡараңғы төшөүгә атыш ике яҡтан да баҫылды.

Кесөргәнешле тынлыҡ ике тәүлеккә һуҙылды.

Өсөнсө көндөң кисендә кенәз Борятинский полковник Чубарев менән Садиров Сәйетте саҡырты.

— Кенәз Урусов менән Долгорукийҙың полктары һаман юҡ. Уларҙың килеү-килмәүе лә билдәле түгел, — тип үҙенең Төн планы менән таныштырғандан һуң, ул бойорҙо: — ортаһы етеүгә һеҙҙең ҡарамаҡтағы отрядтарға, каҡтарға һиҙдермәй генә, Свияга ярына сығырға һәм таыш ҡубарырға! Шау-шыу, ығы-зығы һәм күмәк тауыш беҙҙең файҙаға икәнен онотмағыҙ!

— Һөрән һалып ҡысҡырышыуҙан ни файҙа, ваше мосходительство? — Сәйет, кенәздең хәйләһен аңламайынса, аптыраны.

— Бандиттарҙы алдатыу, улар араһында паника тыуырыу өсөн кәрәк.

— Беҙгә ярҙамға икенсе полктар килгән, тип уйлаһындар өсөнмө?

— Эйе...

Кенәз Борятинскийҙың хәйләһе тулыһынса аҡланды. Төн уртаһында икенсе ярға сыҡҡан стрелецтар менән башҡорттар һөрән һалып ҡысҡырыша башлағас та, паникаға бирелгән казактар Степан Разинды йоҡоһонан уяттылар.

— Атаман, йәһәтерәк тор!

— Нн булды? — тип һораны Степан йоҡо аралаш бер ни аңламайынса.

— Башта ғәскәренә ярҙамға өр-яңы полктар килгән!

— Улар йылға аръяғында күп, бик күп!..

Атаман тышҡа сыҡты. Свияганың икенсе ярында ҡыҫҡырышҡан күмәк тауышты ишеткәс, атамандың йөрәген беренсе мәртәбә ҡурҡыу алды.

— Таң яҡтыһы беленгәнгә саҡлы казактарҙы карапторға тейәргә һәм ҡаланы ҡалдырып китергә!

— Бүтәндәрҙе ни эшләтәбеҙ? — тип һораны Васька Усь.

— Улар бында ҡала.

— Ниңә?

— Шуны ла аңламайһыңмы? — Атаман ҡаты **һүгенде**. Кистән эскән араҡынан һаман айный алмайынса, башы сәңкеп һыҙлауына йөҙөн сирылтып ыңғыраша-ыңғыраша, ул бер шешә араҡыны булҡылдата-булҡылдата ауыҙым.ч ҡойҙо. Шунан һуң ғына бер аҙ тынысланып, сереп ас ты: — Утыҙ менләгән кешене үҙебеҙ менән алып китеүс ҡыйын буласаҡ. Дон казактарының бынан китеүен башҡалар белмәҫкә тейеш. Юғиһә, улар менән бергә казактар за харап буласаҡ!..

— Үҙебеҙҙең яҡлы кешеләргә һиҙҙермәй нисек **китерга** бынан?

— Юҡ өсөн ҡаңғырма, — тип Степан Разин Әстрхан, Царицын, һарытау, һамар казактары атамандары мепш урыҫ крәҫтиәндәре, марҙыуа, сыуаш, сирмеш отрядтары башлыҡтарын йыйҙы. — Мин, дон казактары менән **бергә** кенәз Борятинскийға ярҙамға ебәрелгән полктарҙың **тылы** нан һөжүм башлайым, ә һеҙ ҡаланы нык һаҡлағыҙ!

— Борсолма, атаман!

— Беҙ нык торорбоҙ, — тип яуап ҡайтарҙы ялпы башлыҡтары менән атамандар.

Симбирск ҡалаһын һаҡларға тейешле атамандар мепҫ>и есаулдар ярҙамында Дон казактарын караптарға **урын** лаштырғас, Степан Разин хәүефле һаналған урындап йа һәтерәк китергә ҡабаланды.

Дон казактарышың алдаҡ менән ҡасып китеуе хаҡында белгәс, ҡаланы һаҡларға ҡалған казактар араһында шау-шыу ҡупты. Улар, паникаға бирелеп, йылғаға табан йүгерҙеләр. Ләкин яр буйындағы караптарға ултырырға өлгөрмәнеләр, Борятипский ғәскәренең көсле ут ағымыиа эләгеп, улар ҡырылды, ә әсиргә алынған алты йөҙ казак төрлө язаға хөкөм ителде.

XIII

1671 йылдың ун дүртенсе апрелендә казактар тарафынан властарға тотоп бирелгән Степан Разин менән уның бер туған ҡустыһы Фрол Мәскәүҙә ботарлап үлтерелеүгә хөкөм ителде.

Дон казактары болаһы баҫтырылғандан һуң, тыуған •|вйәктәренә ҡайтҡан башҡорттарға биргән вәғәҙәһен онотоп, батша хөкүмәте бетә көсөн элекке **политиканы** уҙгарыуға йүнәлтте. Башҡортостандағы урыҫтарҙың иң юғары сиркәү башлығы итеп Мәскәүҙән патриарх Иоапим ебәрелде, ә Өфөләге айырым епархияға епископ тәғәйенләнде. Улар, суҡындырылған Ҡазан татарҙарын файҙаланып, Иҙел-Урал мосолмандарын көслөк менән христиан диненә күсерә башланылар.

Атаһы үлгәндән һуң Тамъян волосы старшинаһы булып ҡалған Сәйет өсөн башҡорттарҙы суҡындырыуҙы ппошторған священниктарҙың эше үлемгә типә-тиң ине.

«Башҡорттарҙы бер ваҡытта ла көслөк менән бүтән **дингә** күсермәҫкә» тнгән 1557 йылғы «Жалованная Грамота»ға таянып, Сәйет Садиров «Казанский Дворец» Приказыһы һәм кенәз Борятинский исеменә хат яҙып ебәрҙе. **Ләкин** ьщғай яуап ала алманы. Батшаға мөрәжәғәт итеүенән дә файҙа сыҡманы.

Христианлаштырыу ярҙамыида батша хөкүмәте башҡорттарҙың башҡортлоғон бөтөрөргә маташыуын аңлап, Сәйет мулла Ҡырым ханлығының **ихтимал** яуға күтәре-.|.1сәк башҡорттарға ярҙамлашыуын һорап сапҡын ебәрҙе. Ҡырым ханы уҙенең берәй улын Башҡортостанға хан **иттергә** тигән шарт ҡуйҙы.

Ҡырым ханының теләген кире ҡаҡмайынса, бындай **иөһим,** үтә яуаплы мәсьәләне Сәйет Башҡортостан дәүләте тергеҙелгәндән һуң башҡорттарҙың дөйөм йыйынында хәл ҡылырға ризалашты.

Сәйет мулла ҡалмыҡтарҙың тайшаһы Аюк, Әстрхан мосолмандары һәм Аҙау батшаһы менән дә килешеү төзөнө.

Әҙерлек эштәре тамамланғас, 1681 йылда Башҡорт-

остандың дүрт даруға-өлкә һәм волость старшиналары ҡатнашлығында үҙғарылған дөйөм йыйында Сәйет Садиров восстание етәксеһе итеп бер тауыштан һайланды.

Старшиналар йыйындан таралышыу менән яуҙа **ҡатнашасаҡ** кешеләрҙе ҡоралландырыу, уларҙы һуғыш уйылына өйрәтеү һәм ныҡлы тәртип булдырыу өсөн барлыҡ мөмкинлектәр файҙаланылды. Степан Разиндың бандиттарына ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнашыусылар араһынан мсц, йөҙ, илле һәм ун башлыҡтары тәғәйенләнде. Улар ҡушҡанды үтәмәҫкә маташыусылар йәки ҡурҡаҡтар үлем язаһына хөкөм ителәсәктәре тураһында белдереү яһалды.

Мылтыҡ табыуы еңел булмағанлыҡтан, болала **ҡатнашасаҡ** кешеләрҙең күбеһе уҡ-һаҙаҡ, ҡылыстар, һөңгеләр һәм сауҡа тамырынан эшләнгән сукмарҙар менән ҡоралландырылды.

Ошондай яуаплы, мөһим шарттарҙа даруғалар, волость старшиналары менән ырыу башлыҡтары араһында берҙәмлек булмауы восстаниеға күтәрелеүҙе тотҡарланы. Нуғай даруғаһының Бөрйән волосы старшинаһы Алдарбай Исәкәев йөҙ башлыҡтарын тураиан-тура Сәйет **мулла**ға буйһондорорға теләне. Ҡазан даруғаһы старшинаһы Кәримулла Вәкилов, меңбашлыҡтары менән үҙенең абруйы төшөүҙән ҡурҡып, бындай тәкдимгә ҡаршы **сыҡты** Батша ғәскәрендәге һымаҡ баш командующий — сардәр һайлаиһа, уның уйынса, старшиналар менән ырыу **башлыҡтарының** хоҡуғы сикләнәсәк, һәммәһе бойондороҡһоҙлоғон юғалтасаҡ.

— Мин кемдевдер **ҡул** аҫтында йәшәргә теләмәйем, — тип Ҡазан даруғаһы старшинаһы ҡырт киҫте.

Волость старшинаһы Сәйеткә буйһоноуҙы ғәрлек һанап. Нуғай, Себер һәм Уса даруғалары старшиналары ла Кәримулла әйткәнде хупланылар:

— Раҫ!

— Даруға старшиналары үҙ ерҙәрендә ойошторолпш ғәскәргә баш һәм түш булырға хаҡлы!..

Меңбашлыҡтары менән даруға старшиналарын **бай** һуғыш тәжрибәһе туплаған Садиров Сәйеткә буйһон ҡорорға теләгән Алдарбай ныҡыша башлағас, шау-шыу ҡупты.

— Беҙҙең иректе ҡыҫырға бер кемдең хаҡы юҡ!

— Даруға старшинаһын волость старшинаһына буйһондорорға маташыу әҙәпһеҙлек!..

Восстание башланмаҫ элгәре юҡҡа сығыуынан һәм көстөң тарҡалыуынан ҡурҡып, Сәйет мулла даруға **старшиналары** менән айырым ырыу башлыҡтарын тыныслан дырырға тырышты.

— Ағай-эне, юҡ өсөн тауыш ҡубармайыҡ. Кемдең ниндәй вазифаға лайыҡ икәнлеге — ваҡ мәсьәлә. Мин һеҙҙе буйһондорорға теләмәйем. Иң мөһиме хәҙер шул: башҡорттарҙы сукындырыуҙан һәм Рәсәй батшалығы **иҙеүенән** ҡотолдороу!..

Даруға старшиналары менән айырым ырыу башлыҡтары әкренләп-әкренләп тынысланды.

Сәйет Садиров Башҡортостан картаһын тубығына йәйеп һалғас, ундағы айырым билдәләргә төртөп күрһәтте.

— Башҡорттарҙың төп көсө бына ошо уйһылыҡтарҙа урынлашҡан, — тип даруға һәм волость старшиналарына буйһонған төркөмдәрҙе һанап сыҡты ла, восстание барышын һәр кем ваҡытында белеп торһон өсөн, кәңәшмәлә ҡатнашыусыларҙың үҙе менән бәйләнештә **ҙүмәүҙәрен** һораны ул.

XIV

Башҡорттарҙың восстаниеға әҙерлек барышы иң тәүҙә Верхотурье воеводаһы Араповҡа мәғлүм булды. Көңгөр өйәҙе башҡорттарының менге аттарҙы ашатыуы, уҡ-һаҙаҡтарҙы күпләп юныуы, ҡылыс-һөңгөләрҙе үткерләүе, тимер кейемдәр эшләүе һәм күпләп мылтыҡтар һатып алыуы тураһында ишетеү менән ул батша хөкүмәтенә хат яҙҙы:

«...Төрөктәр һәм ҡырымлылар менән бәйләнеш тотоп, башҡорттар ҡыҙыу ҡораллана... Ҡырым тайшаһы Аюк та, Ҡырым ханы менән солох төҙөп, үҙенең улустарынан йыйған меңбашлыҡтарын Ҡырымға ебәргән... Аюк Өфө башҡорттары менән дуҫлашҡан, улар менән берлектә һамар һәм башҡа ҡалаларҙы ҡыйратырға әҙерләнә...» [1]

1681 йылдың йәйендә ҡалмыҡтар Пенза эргәһендәге посадтарҙы яндырыуы, Иҙел аша сыҡҡан бер төркөм башҡорттарҙың Нуғай даруғаһына яҡынлашыуы һәм икенсе төркөмдәге һыбайлы башҡорттарҙың Тубыл йылғаһы буйында тупланыу хаҡында ла воеводалар тарафынан Мәскәүгә хәбәр ителде.

Көньяҡ Себерҙәге ҡырҡаҙаҡтар ҙа тик ятманы. Улар, Томск өйәҙендәге ун алты урыҫ ауылын яндырып, казактар менән ратниктар отрядын тар-мар итте.

Башҡортостандағы ваҡиғаларҙың киҫкенләшкәндән-киҫкенләшә барыуын белгәс, батша хөкүмәте Краснояр воеводаһы Загряжскийҙы төрмәгә ултыртырға ҡушты, ә Өфө воеводаһы итеп кенәз Борятинскийҙы тәғәйенләне.

[1] *Соловьев С. М.* т. XIII, гл. II, С. Петербург, издание... «Общественная Польза», 862-се **бит.**

Өфегә килеү менән кенәз Борятинский Сәйет мулланы үҙенә яҡынайтырға һәм уның ярҙамында башҡорттарҙы тынысландырырға теләне. Ул, маҡсатына ирешә алмағас, Сәйет мулла шикелле бола башлыҡтарын үлтереү өсөн «лучшие люди»ларҙы — иң шәп башҡорттарҙы файҙаланырға тырышты.

Яңы Өфө воеводаһы вазифаһын башҡарған кенәз Борятинскийҙың мәкерле уйын белмәгән Сәйет һаҡланыу сараһын күрмәне.

Ул, Уса даруғаһында булып ҡайтҡас, ҡатыны мснән бала-сағаһын Бешәтәк тауы урманындағы хәүефһеҙ урынға йәшерҙе лә, Шаҡман ауылына һуғылмайынса, туп-тура Ҡазан даруғаһына табан ыңғайланы.

Юлда барышлай, төндө **Әүжән** [1] йылғаһы буйында уҙғарырға тукталып, уҙе менән бергә йөрөүселәргә аттарҙы туғайлыҡта тышауларға ҡушты.

Баҡырсала сәй ҡайнатып эскәс Сәйет ут янында оҙаҡ ултырманы, сәкмәненә төрөнеп, Алдарбай зргәһенә арҡаһы менән терәлеп ятты. Ул, борсоулы уйҙарға **күмелеп,** йоҡлай алмай иштекте.

Төнгө тынлыҡты боҙоп, һаҡ ҡошо ҡысҡыра. Туғайлыҡтағы аттарҙың бышҡырышыуы һәм яр аҫтындағы Әүжән йылғаһының сылтырап ағыуы ла ап-асыҡ ишетелә.

Бешәтәк тауҙары аръяғынан ҡабаланмай ғына күтәрелгән түп-түңәрәк тулы ай нурҙары ергә һибелгәс, күк йөҙөндәге иҫәпһеҙ-һанһыҙ йондоҙҙар яҡтыһы тоноҡланып ҡалғандай күренде.

Офоҡ сите яҡтырып, таң беленде. Шунда ғына Сәйеттең күҙҙәре йомолдо. Ләкин уға оҙаҡ йоҡларға тура **килмәне.** Ниндәйҙер тауышҡа һиҫкәнеп уянды ла урынынан һикереп торҙо.

— Егеттәр, тороғоҙ!..

Егеттәр, йоҡо аралаш бер ни аңламайынса, ҡоралдарына йәбештеләр.

Кешеләрҙең ығы-зығы ҡубарып йүгерешеүен күҙәткоп Сәйет үҙе лә йүнләп бер ни аңламаны. Дошман яғынап ҡасып сыҡҡан башҡорт Ҡазан даруғаһы старшинаһы Кәримулла ғәскәре Тамъян ырыуы кешеләрен **үлтерергә** килеүен белгәс кенә, ул аңына килде.

— Беҙҙе ҡамайҙар! — тип ҡысҡырҙы ла, хеҙмәтсеһе тотоп килтергән эйәрле атына атланған ыңғайы, Сәйет үҙен үлтерергә килгән «иң шәп» башҡорттарға ҡаршы ташланды.

---

[1] *Әүжән йылғаһы* — Белорет районының Исмәкай ауылы эргәһендә.

Кенәз Борятинскийға ялланған Кәримулла командадығындағы «иң шәп» башҡорттар уктар яуҙырырға тотондолар. Мылтыҡтарҙан ут аҫкан ратниктарҙың да ҡыҫымы көсәйҙе.

Әммә Кәримулла, яраланған Сәйетте ҡурсалаған Алдарбай һәм уның егеттәре менән көс һынашыу мәғәнәһеҙ икәнен аңлап, һуғыш майҙанын ташлап ҡасты. Унан ҡалышҡаҫҡа тырышып, һатлыҡ башҡорттар менән ратниктар ҙа кирегә табан сабышты.

Алдарбайҙар уларҙы эҙәрләмәне.

Ҡояш баш осо тәагәленә күтәрелгәс, баҡырсаларҙа сәй ҡайнатып, иртәнге тамаҡты туйҙырырға ултырҙылар.

Шул саҡ, ауыр һулап, Сәйет үкенес белдерҙе:

— Егеттәрҙең үлеме ҡыҙғаныс!

— Азатлыҡ өсөн көрәш ҡорбанһыҙ булмай, — тине Алдарбай.

— Эш унда ғына түгел. Башҡорттоң башҡортҡа ҡаршы сығыуы, Кәримулла кеүек һатлыҡ йәндәрҙең хыянатсылығы, азатлыҡ, ер-һыуыбыҙ, урмандарыбыҙ именлеге, ислам дине сафлығы өсөн яуға күтәрелеүселәрҙең берҙәмлеген ҡаҡшатырға маташыуына эсем боша минең!

— Берҙәмлек булмау арҡаһында, башҡорттар быуаттар буйы килмешәктәрҙән талана, ҡырыла, бөлә һәм үҙ дәүләтен тергеҙә алмай интегә лә инде, — тине Алдарбай Исәкәев.

— Дүрт даруғалағы ырыу-ҡәбиләләрҙе берләштереп, Башҡортостан дәүләтен төҙөмәйенсә, беҙ бер ҡасан да мандый алмаясаҡбыҙ. Башҡорттар әкренләп татарҙар йәки урыҫтар тарафынан йотоласаҡ һәм мәңгегә юҡҡа сығасаҡ.

— Бәләнән ҡотолоу өсөн беҙгә ни эшләргә? — тип һораны Алдарбай.

— Иң әүәл мосолман илдәре һәм ҡалмыҡтар **менән** бәйләнеште нығытырға бурыслыбыҙ. Уларҙың ярҙамынан Сашҡа, башҡорттарҙы суҡындырыуҙан һәм урыҫтар ҡоллоғонан ҡотола алмабыҙ.

— Үҙебеҙ бөтә Башҡортостан буйынса бола күтәреүҙе һом ситтән ярҙам һорауҙы һуҙабыҙ, — тине Алдарбай. — Шунһыҙ ситтән ярҙам һорарға ла, башҡорттарҙың көсөн бсрләштерергә лә мөмкинлек булмаясаҡ һәм воеводалар башҡорттарҙы айырым-айырым ҡыйратасаҡтар, хыянатоыларҙы ла файҙаланасаҡтар.

— Һүҙең раҫ. — Ризалашып, восстаниены киң йәйелдерергә теләгән Сәйет Садиров өлкәләргә сапҡындар ебәрҙе.

XV

1681 йылдың йәйендә Себер һәм Нуғай даруғаларындағы төркөмдәрҙе берләштергәс, Сәйет мулла Башҡортостандың көнбайышына табан йүнәлде.

Ҡазан даруғаһы старшинаһы Кәримулланы ҡулға алып, уның урынына етәкселекте үҙ ҡулына алған Туләкәй батыр төркөмө килеп ҡушылғас, баш күтәреүселәр Заин, Минзәлә, һамар, Шешмә ҡалаларын һуғышып алды.

1682 йылдың июль айында башҡорттар восстаниеһы бөтә Башҡортостанды солғап алды. Көңгөр ҡалаһы эргәһендә, Сулман (Кама) аръяғында ла алыш ҡыҙҙы. Чусовая, Исет һәм башҡа йылғалар буйындағы урыҫ ҡәлғәләре ҡыйратылғандан һуң, башҡорт ерендәге сиркәүҙәр, монастырҙар менән урыҫ ауылдары туҙҙырылды.

Башҡортостандағы восстание яҡуттар менән тунгустарҙы ла рухландырҙы. Улар, батша хөкүмәтенә яһаҡ туләүҙән баш тартып, үҙҙәренең ерендәге завод хужаларына һәм сауҙагәрҙәргә ҡаршы күтәрелделәр.

— Башҡортостанды карателдәрҙән таҙартһаҡ, яҡуттар менән тунгустарға ла азатлыҡ яуларға ярҙамлашыр инек, — тип Сәйет мулла утыҙ мең кешене берләштергои ғәскәр менән Кенәз Борятинскийға ҡаршы ыңғайланы.

Баш күтәреүселәр менән Кенәз Борятинский командалығындағы урыҫтар Ыҡ йылғаһына бер үк ваҡытта килсп еттеләр һәм ике ғәскәр ике яҡ ярҙа тукталдылар.

Иылға аша һөйләшеүҙәр башланды.

Өфө воеводаһы Кенәз Борятинский, батша хөкүмәте исеменән күп вәғәҙәләр бирсп, яуҙа ҡатнашыусы башҡорттарҙың өйҙәренә таралышыуын үтенде.

Восстание башлығы Сәйет, кенәздең һүҙенә ышанмайынса, 1557 йылда Иван Грозный тарафынаң бирелпж «Жалованная Грамота»ны һәр саҡ тупаҫ рәүештә боҙғаи батша хөкүмәтен хыянатсылыкта ғәйепләне һәм ҡәлҡ▷ яуызға әүерелгән урыҫ ғәскәренең Башҡортостандан китеүен талап итте.

— Батша хөкүмәте ҡоллоғонан ҡотолмайынса, Башҡортостан дәүләтен тергеҙергә, ер-һыу именлеген һаҡларға һәм ысын азатлыҡ яуларға беҙгә мөмкин булмаясаҡ,— тине Сәйет.

Сәйет батырҙы өгөтләп-өгөтләп тә күндерә алмагас, кенәз Борятинский үкенес белдерҙе:

— һинең менән уртаҡ тел таба алмауым ҡыҙғаныс' Сәйет, мин һине Степан Разин бандиттарына ҡаршы һуғышҡанда күп һынаным, дуҫлыҡка бер ҡасан да хыянч г итмәнең. Хәҙер һиңә ни булды? һинең шикелле зирәк, белемле, ҡыйыу, аҡыллы кеше лә мине аңларга теләмәгәс, ни эшләргә?

— Бындай һорауҙы батша хөкүмәтенә биреген, кенәз! Башҡорттарҙың болаға күтәрелеүенә тик батша хөкүмәте *һәм* Башҡортостандағы урыҫ воеводалары менән свящспниктар ғәйепле. Уларҙы ғәзиз еребеҙҙән ҡыумайынса, көрәште туҡтатасаҡ түгелбеҙ, — тип яуап ҡайтарҙы восстаиие етәксehe Сәйет Садиров.

һөйләшеү тамамланғас, көсөргәнешле тынлыҡ урынлашты.

Эңер төштә. Күҙ алды ҡараңғыға ҡамаша башланы. Иылғаның ике яҡ ярында урынлашҡан башҡорттар һәм урыҫтар, ут яғып, киске тамаҡ туйҙырырға ултырҙылар.

Бер ниндәй шик һиҙелмәй. Әммә ике яҡ та һаҡ, һиҙгер. Ял иткән саҡта ла һуғышсылар торҡалары менән тимер кейемдәрен сисмәне.

Икенсе һәм өсөнсө көн дә тыныс үтте. Дүртенсе көндөң таңында ғына тәүлектәр буйы эсеүҙән айныл алмаған стрелецтар, түземлектең аҡтыҡ сигенә етеп, һүгенә башланылар. Шунан, бөтә ерҙе иңләп, яр буйына яҡынлаштылар. Уларҙың ығы-зығы ҡубарып ҡысҡырышыуҙарына һауа бал ҡорто күсе осҡандағы һымаҡ геүләне. Йылға аша йөҙөүсе һыбайлылар, аттарының аяҡтары бирге яҡтың ҡырсышына тейгәс тә, ҙур тиҙлектә алға ташландылар. Улар артынса сыҡҡан стрелецтар бирге ярға күтәрелер-күтәрелмәҫтән һуғыш ҡапыл ҡыҙҙы.

Алыш барышын күҙәткән Алдарбай аҡ тирәктән төшөп атына атланды ла ҡалҡыу урындағы йәшел байраҡ эргәһендә ярандары менән торған Сәйеткә табан елдерҙе.

— Хәҙрәт, һыбайлы дошман һалдаттары беҙҙе арттан уратып алды. Ҡамауға эләгеү ҡурҡынысы тыуған башҡорт егеттәренә ярҙамға барырға рөхсәтеңде бир!

— Бар, тик һаҡ бул, — тип восстание етәксehe Алдарбайға ҡул һелкте.

— Миңә лә ҡуҙғалырға ваҡыттыр инде, • — тине Ҡазан даруғаһы ғәскәре башлығы Түләкәй батыр.

— Ашыҡма, ағай. Әҙ генә сабыр ит! — Сәйет алыш барышын көсөргәнешлек менән күҙәтте. —Хәҙер һиңә лә сират етте, ағай. Кенәз ғәскәренең уң ҡанатынан һөжүм башла!

Түләкәй батыр командалығындағы Ҡазан даруғаһы башҡорттары батша ғәскәренең флангыһынан ҡыҫырыклай...

Унар меңләгән аттар тояғы аҫтындағы ер геүләй, ҡылыстарҙың ҡылыстарға, һөңгөләрҙең һөңгөләргә бәрелеп

саҡылдауы өҙлөкһөҙ ишетело. Яралы аттарҙың кешнәүе, кешеләрҙең ярҙам һорап ҡысҡырышыуы, үлеш-ҡыйралыш күренеше ҡот осҡос төш һымаҡ булып тойолдо Сәйеткә.

Түләкәй батыр һуғыштың иң ҡыҙыу барған ерендә алыша. Һыбайлы дошман һалдаттары менән аттарҙыҡ тирәсе, ауыр торҡаһы менән тимер кейеме уны тонсоҡторҙо, етеҙ хәрәкәтләнергә ҡамасауланы. Түләкәй бер стрелецтың башын өҙә сапты ла икенсеһенә киҙәнде. Күмәк аттар менән ярһыу кешеләр араһынан нәҙек мыйыҡлы, һирәк һаҡаллы йәп-йәш стрелец Түләкәйҙең иғтибарын үҙенә йәлеп итте.

Бүтән стрелецтар менән сағыштырғанда йәш егет ҡыйыуыраҡ, сос һәм етеҙ.

«Йәп-йәш көйө үлһә, урыҫ малайы йәл», тип уйланы Түләкәй һәм нәҙек мыйыҡлы егеткә табан атын ыңғайлатты. Шул саҡ уның ҡаршыһына сыҡҡан бәһлеүән көүҙәле стрелец, ҡолас йәйеп, ҡылысы менән һелтәнде. Түләкәй ситкә тайшанып өлгөрҙө, ә көүҙәгә елле стрелецтың ҡылысынан кемдеңдер һөйәге мыртылдауы ишетелде.

Түләкәй алға ташланды һәм бәһлеүән стрелецты һөнгө менән сәнсеп үлтерҙе.

Ҡамауға эләгеүҙән ҡуркып, стрелецтар тәртипһеҙ рәүештә сигенә башланылар. Ыҡ йылғаһы аша кире сығырға маташыусыларҙың бер өлөшө һыуға батты, икеселәре ук тейеүҙән ҡаты яраланды, үлде.

Стрелецтарҙың сигенеүе ҡасыуға, эҙәрләүселәр **тарафынан** туҡмалыуға һәм тураҡланыуға әүерелде.

Атһыҙ ҡалған стрелецтар икенсе ярға сыҡҡас та, туҡталып тормайынса, тимер кейемдәре менән ҡоралдарып ташлап, йәйәү ҡасты.

Дошман ғәскәрен эҙәрләүсе башҡорттар менән бергә йылғаның икенсе ярына сыҡҡан саҡта Сәйет яраланды. Әммә һуғыш майҙанын ташлап китмәне. Ул, кенәз Борятинский ғәскәрен тулыһынса ҡыйратырға ашҡынып, башҡорттарҙы өҙлөкһөҙ ҡабаландырҙы.

• — Егеттәр, дошман ғәскәренә туҡталып көс тупларға мөмкинлек бирмәгеҙ!..

Батша ғәскәренең иң шәп полктары ҡаса.

Ҡасып барыусыларҙы эҙәрләү менән мауығып, Алдарбайҙың һыбайлылары төп көстән нисек айырылыуын һиҙмәне. Аҡиҙел ярҙарына етер саҡта дошмандың көслө утыҡиа эләгеп, ул ҡаты яраланды, ә башлыҡһыҙ ҡалған егеттәрҙең күбеһе шунда һәләк булды.

Башҡорт ғәскәренең төп көсө килеп етеүгә Өфө—Имән ҡалаға инеп бикләнергә өлгөргән кенәз Борятинский һуғышсылары туптар яуҙыра башланы.

Боласыларҙың уңышлы һөжүме тотҡарланды.

Ҡәлғәне пушкаһыҙ ҡыйратыуы мөмкин түгел икәнлегеи аңлап, Сәйет батыр төркөм башлыҡтарын кәңәшмәгә йыйҙы.

— Ҡалаға һөжүмде дауам итәбеҙме, әллә кенәз Борятинскийҙың ғәскәре ҡасан баш һалыуын ошонда көтәбеҙме?

— Имән ҡаланы ҡамауҙа тотоуҙы Нуғай даруғаһы башҡорттарына тапшырып, үҙебеҙ Ҡазандан сыҡҡан урыҫ ғәскәреиә ҡаршы барайыҡ, — тине Түләкәй батыр.

• — Имән ҡаланы ҡамауҙа тоторға Нуғай даруғаһы егеттәренең көсө етерме? — тип һораны Сәйет мулла.

— Хәҙрәт, ун мең кешелек Нуғай даруғаһы ғәскәренә ышанмайһыңмы әллә? — тип үпкәләне боласылар төркөмө башлығы Бәҙретдин батыр. — Шикләнмә, хәҙрәт! Минең арыҫландарым ышаныслы, улар үҙҙәрен һынатманы һәм һынатмаясаҡ!

Кәңәшмә тамамланғандан һуң, ҡултыҡ таяғы менән көс-хәлгә йөрөгән Алдарбай Сәйеткә яҡынлашты.

— Хәҙрәт, миңә лә үҙ төркөмөмдә ҡалырға ризалыҡ бир.

— Юҡ, ҡустым, Бөрйән волосына ҡайтып, дауалаиырға һәм шул тирәләге башҡорттарҙы карателдәрҙән һаҡларға тейешһең, — тине Сәйет.

Алдарбай Иҫәкәев ҡалмыҡ тайшаһы Аюк етәкселегенлоге дүрт меңлек ғәскәр башҡорттарға ярҙамға килеуеи бслгәс кенә, тыныслаиып, тыуған төйәгенә ҡайтып китте.

Нуғай даруғаһы башҡорттарын Өфө—Имән ҡаланы камауҙа тоторға ҡалдырып, төрлө гарнизондарҙағы карателдәр отрядын ҡыйрата-ҡыйрата, Сәйет командалығындағы башҡорттар Ҡазандан ебәрелгән батша ғәскәренә ҡаршы ябырылды. Ул ғәскәр тар-мар ителгәс, артабан ыңгайланылар.

XVI

Башҡортостандағы восстаниены ҡорал ярҙамында баҫҡыра алмағас, батша хөкүмәте һөйләшеү башларға мәжбүр булды. Ләкин бола башлығы Сәйет Садиров, килешеү өҫтөргә ризалашмайынса, барлыҡ гарнизондарҙағы урыҫ ғәскәрҙәренең башҡорт еренән китеүҙәрен талап итте.

Ошондай көсөргәнешле, ер-һыу именлеге һәм азатлыҡ нсөн көрәштең иң ҡыҙыу мәлендә Мәскәүҙән сапҡын килде.

— Миңә бола башлығы кәрәк, — тине ул.

Ағас күләгәһендә ултырып ағас сеүәтәләге ҡымыҙҙы

зскән Сәйет урынынан торҙо. Ул, үҙен бола башлығы икәнен танытып, сапҡынға һораулы ҡараш ташланы.

— Тыңлайым, .һеҙ миңә ниндәй йомош менән?

Сапҡын, яуап ҡайтармайынса, кеҫәһенән сығарған пакетты һондо.

1682 йылдың һигеҙенсе июлендә Рәсәйҙең яңы батшалары Иван менәи Петр Алексеевич Романовтар ҡул ҡуйған Указға Сәйет күҙ йөрөтөп сыҡты.

— Яңы Рәсәй батшалары Башҡортостандағы боланы туҡтатыуҙы үтенеп һорай. Болала ҡатнашыусыларҙы ғәфү итергә һәм башҡорттарҙы көсләп суҡындырмаҫҡа һүҙ биргән, — тип белдереү яһаны ла Указды уҡып ишеттерҙе:

«...Беҙҙең, бөйөк батшаларҙың, башҡорттарҙы көсләп суҡындырырға тигән указы булманы һәм әле лә юҡ. Ул **хаҡта** һеҙ саҡ ҡына ла шикләнмәгеҙ...» [1]

Башҡорттарҙы көсләп суҡындырыуҙан батша хөкүмәтенең асыҡтан-асыҡ баш тартыуына ҡыуанышып, бола башлыҡтары ғауғалашты.

— Иншалла!

— Хаҡ тәғәлә еңде!

— Өйҙәребеҙгә имен-аман таралышып, бала-сағаларыбыҙ менән бергә йәшәргә насип булған икән, хоҙайҙан булып!..

Сәйет Садиров, башындағы сәлләһен теҙәтеп кейгәс, яуҙаштарына киҫкен ҡараш ташланы.

— Аҡ батшаның сираттағы хәйләһенә мин һис ТЭ ышанмайым! Ата-олатайҙарыбыҙҙы юхалап-алдап, башҡорттарҙың муйынына ҡоллоҡ һөшыртмағы кейҙереүе **ет**мәгәнме ни? Хәйлә ярҙамында беҙҙе лә тынысландырырға, берҙәмлекте ҡаҡшатырға һәм еңеүебеҙ яҡынлашыуын юҡҡа сығарырға маташалар. Мин, заманында Аҡ батшлгл барған Шаҡман бей ейәненең улы, бындай вәғәҙәгә ышанмайым. һәммәһе алдаҡ! Башҡорттарҙы суҡындырырға тигән яҙыуҙы үҙ күҙҙәрем менән күрҙем һәм, ғәзиз илебеҙ кафырҙарҙан таҙартылмайынса, көрәште туҡтатасаҡ [1] үгелмен!

Сәйет менән теләктәшлек белдереп, Ҡазан даруға1м4 боласылар башлығы Түләкәй батыр баш ҡаҡты.

— Раҫ!

Башҡа төркөм етәкселәре икеләнде, ә Уса даругпһи старшинаһы Ҡолмөхәммәт урыҫтарға ҡаршы көрәште туҡтатырға теләне.

Бәхәс ҡупты.

[1] Центральный гос. архив древних актов, ф. 248, кн. 132, л. 38 об.

Уртаҡ фекергә килә алмағас, был мәсьәләне йыйында тикшерергә ризалаштылар.

Иыйында ҡатнашырға теләмәгән Ҡолмөхәммәт бей менән **уның** яҡлы кешеләр шул уҡ төндө яу ҡырынан ҡасыл китте һәм эҙһеҙ юғалды.

Аҙна самаһы ваҡыт уҙғас ҡына хыянатсылар төркөмө Өфенө ҡамауҙа тоткан Нуғай даруғаһы боласылары башлығы Бәҙретдинде үҙ яғына ылыҡтырыуы, кенәз Борятинский ҡатнашлығында башҡорттарға яҙылған ғарызнамәгә ҡул ҡуйыуҙары һәм батша хөкүмәтенә үҙҙәренең илселәрен ебәреүҙәре асыҡланды.

Баш **күтәреүселәр** сафына тарҡалыу ҡуркынысы тыуҙы.

— Хыянатсыларға Башҡортостан яҙмышы сүп шайы ла **түгел.** Тыуған илебеҙ азатлығы өсөн көрәште туҡтатһаҡ, киләһе быуын кешеләре беҙҙе ғәфү итмәйәсәк, — тип Сәйет батша ғәскәренә ҡаршы көрәште туҡтатманы.

Восстаниеның ҡабат көсәйеүенән ҡуркып, Рәсәй батшаһы тәхетенә ултырған Петр I 1682 йылдың октябрендә башҡорт ерҙәренә урыҫтарҙың күсеүен ҡырҡа тыйҙы **һәм** башҡорттарға үҙ иркенә йәшәргә мөмкинлек бирергә вәғәҙә итте.

Ваҡытты көс туплау өсөн файҙаланған батша хөкүмәте был юлы ла үҙ һүҙендә торманы. Болала ҡатнашыусы башҡорттарҙың күбеһе өйҙәренә таралышыу менән Үҙәк Рәсәйҙән Башҡортостанға ебәрелгән батша ғәскәрҙәре бер-бер артлы ағыла башланы.

1683 йылдың майында ҡалдыҡ-боҫтоҡ көс менән Сәйет карателдәргә ҡаршы йүнәлде.

Рәсәйҙән яңы ебәрелгән батша ғәскәренә ҡаршы беренсе һуғыш уңышлы тамамланды. Шунан һуң Ҡазан һәм Нуғай даруғаларында ла восстание ҡабаттан ҡыҙҙы. Ләкин «тархан» исемен алған күпселек башҡорт старшипалары менән элекке бола башлыҡтары восстаниенан ситләште.

Батша хөкүмәте ебәргән бүләкте алғас, ҡалмыҡтарҙың тайшаһы Аюк та боласыл башҡорттарға хыянат ҡылды. Ул башҡорт ауылдарын **туҙҙырҙы,** таланы, ирҙәрҙе ҡырҙы, ҡатын-ҡыҙҙарҙы һәм бала сағаларҙы, мал-тыуарҙары менән бергә Джунгар [1] иленә оҙатты.

Шул көндән башлап, Сәйет ҡул аҫтындағы башҡорттарға батша ғәскәрҙәренә һәм көнбайыш Башҡортостанды ҡоротоусы джунгар-ҡалмыҡтарға ҡаршы һуғышырға тура килде.

Ҡабаттан восстаниеға күтәрелгән башҡорттар, Сул-

[1] *Джунгарҙар* — ҡалмыҡтарҙың элгәрге исеме.

ман-Кама аръяғындағы ҡәлғәләрҙе, «Солевариый городок»ты [1] ҡыйратып, Минзәлә менән Өфөнө—Имән ҡалаиы янынан ҡамауға алдылар.

Восстание әкренләп-әкренләп Урал аръяғына күсте.

Баш **күтәреүселәр** Ҡатай [2] менән Колчедан [3] ҡалаларын һуғышып алғас, Минзәлә йүнәлешендәге алыш көсәйҙе. Әммә батша ғәскәре менән ҡалмыҡтарға ҡаршы һуғышыу арҡаһында, көс тарҡалды.

Болала ҡатнашыусы башҡорттарҙың хәле мөшкөлләнеүен аңлап, Сәйет мулла Ҡырым ханына, ярҙам һорап, Түләкәй батырҙы ебәргә теләне.

Ҡазан даруғаһы боласылары башлығы Түләкәй батыр, ризалашмайынса, Ҡырым ханына Сәйеттең үҙен ебәргәне килде.

— Хәҙрәт Ҡырым ханына барһа, һәммәһе тотҡарлыҡһыҙ хәл ителәсәк. Әстрхан, Царицын, һарытау һәм башҡа ерҙәрҙәге башҡорттар ҙа беҙгә ярҙамлашасаҡ, — тине ул.

— Сәйет мулланың Башҡортостандаи китеүен белһәләр, боласылар таралышмаҫмы?

— Таралышмаҫ!..

Бола башлыҡтары үҙ-ара бәхәсләшеүҙән туҡталғас, Сәйет Сөрөмбәт мулланы Ҡырым ханлығына оҙатты. Әстрхан воеводаһы ҡулына эләккән Сөрөмбәт менән уның һаҡсылары язаланып үлтерелеү сәбәпле, Ҡырым ханлығынан ярҙам булманы һәм көҙгә табан Башҡортостандағы болалар ҙа һулпәнәйҙе.

1683 йылдың ноябрь аҙағында болалар бөтөнләйгә баҫылғас, каратeлдәр аяуһыҙ ҡоторондо. Улар башҡорттарҙы ҡырҙы, мал-тыуарҙарын таланы, ауылдарҙы яндырып, ҡатын-ҡыҙ менән бала-сағаны урыҫ алпауыттарына ҡоллоҡҡа таратты.

Уралдың тау-ташлы урмандарында ҡыш уҙғарған башҡорттар ғына бәлә-ҡазанаи ҡасып ҡотолдо.

Ҡазан даруғаһының боласылар етәксеһе Түләкәй батырҙың каратeлдәр тарафынан язаланып үлтерелеүе хаҡында ишеткәс, Сәйет күңел төшөнкөлөгөнә бирелде.

Ул ҡышҡы һалҡын көндәрҙең береһендә Ҡырым ханлығына табан юлланды. Оло ҡыйынлыҡтар менән Константинополгә еткәс, үҙен башҡорт солтаны-ханы тип тамыштырып, мосолмандарҙың башҡорттарға ярҙамлашыуын һораны.

[1] *«Солеварный городок»* — хәҙерге Ғафури районындағы Табын поселогы.

[2] *Ҡатай* — хәҙерге Ҡурған өлкәһендә.

[3] *Колчедан* — хәҙерге Екатеринбург.

Мосолмаи дине әһелдәре ярҙамында тиҙ арала биш мең кешелек ғәскәр ойошторолдо. Уға Ҡырым ханы ебәргән отрядтар ҙа килеп ҡушылғас, Сәйет Кубангә барҙы. Кубапдә ысын хан исеменә лайыҡ булған Сәйет командалығындағы ғәскәрҙәр Терек янындағы слободкалар менән төрмәләрҙе ҡыйратты, ә воевода Роман Вельяминов үлемдән саҡ ҡасып ҡотолдо.

Әстрхан воеводаһы Федор Матвеевич Апраксип Терек ҡалаһын һуғышып алған боласыларға ҡаршы бер мең ике йөҙ етмеш алты стрелецты караптарҙа, меңгә яҡын һыбайлы татарҙар менән өс меңдән ашыу ҡалмыҡтарҙы дала аша оҙатты [1].

Терек ҡалаһынан сығып, Сәйет Башҡортостанға табан ыңғайланы.

Егерме алтынсы февралдә уның ғәскәрен каратeлдәр ҡыуып етте һәм алыш башланды.

Ике тәүлек буйы барған һуғышта ике яҡ та еңеү яулай алманы. Өсөнсө көндөң төнөндә дошман ғәскәренә өҫтәлмә көс килеп ҡушылды.

Иртәгәһе көндө дошман ғәскәре урынлашҡан ерҙә борғосоларҙың борғо уйнауы, барабансыларҙың барабандар доңгорлатыуы һәм күмәк кешеләрҙең ҡысҡырышыуы ишетелде.

— Иҫерек һалдаттарҙың үҙ-ара ҡотороноуы — беҙҙең файҙаға, — тип Сәйет иртәнге намаҙҙы уҡыны.

Ҡаршы яҡтағы тауыш һамап баҫылманы, киреһенсә, көсәйгәндән-көсәйә барҙы. Уларҙың нимәгә шаулауын асыҡларға тырышып, Сәйет үҙенең шымсыларыш ебәрҙе.

Шымсыларҙың китеүенә биш-алты минут та уҙманы, бер-бер артлы туптар төшөп ярыла башланы һәм мылтыҡтарҙан атҡан тауыштар ҙа йышайҙы.

— Хыянат! Кемдер беҙҙе һатҡан, — тип ҡысҡыра-ҡысҡыра, Сәйет дошман атаҡаһын кире ҡағырға әҙерләнде.

Ҡоттары алынған мосолмандар, ни эшләргә белмәйенсә, аптырашты.

— Кафырҙар ҡайһы яҡтан килә?

— Тегенән!

— Ҡайҙан, ҡайҙан?

— Ана бит!

— Ай Аллам, үҙең ярлыҡа!..

Иртәнге ҡараңғыла ҡайҙа нимә булғанын Сәйет үҙе лә йүнләп аңламаны. Ҡумыҡтар йылғаға табан сигенә башлағас, Сәйет уларҙың юлын бүлдерҙе.

[1] Кабинет II, книга номер 7, донесение 20/III.

— Мосолмандар, алға!.. Ислам дине сафлығы өсөн йәнегеҙҙе аямай кафырҙарға ҡаршы һуғышығыҙ!..

Ҡумыҡтарҙы батша ғәскәренә ҡаршы һуғышырға күндергәс, Сәйет Терек ҡәлғәһенә табан сигенеүсе төрөктәр яғына елдерҙе. Төрөктәр, күсмә халыҡтар төркөмөнә ҡушылып, артабан ҡасты.

Мосолмандарҙың бер аҙ өлөшө генә, Сәйеттең әмеренә буйһоноп, батша ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғышты. Ләкин **көс** тиң түгел ине. Стрелецтарҙың һәм ҡалмыҡтар менән татарҙарҙың ҡыҫымы көсәйҙе.

Терек ҡәлғәһенә ҡасҡан төп көскә ҡушылырға ниәтләнеп, Сәйет артҡа сигенергә ҡушты.

Ҡәлғәгә етер саҡта мосолмандарҙы эҙәрләп килеүселәрҙең береһе Сәйеттен биленә һөңгө менән сәнсте.

— Ай алла, алла, — тип ҡысҡырышҡан тауыштар ишетелде.

Ҡаты яраланыуына ҡарамаҫтан, барлыҡ кесөн туплап, Сәйет ҙүснә ҡылыс менән һелтәнгән есаулдың башын өҙә сапты. Ҡамауҙы йырып ҡәлғәгә барышлай ул икенсе тапҡыр яраланғас, күҙ алды сыбарланды, башы әйләнде. Иығылмаҫҡа тырышып эйәре ҡашына һьщар ҡулы менән йәбешкән сағында, уның торҡаһына ниндәйҙер ауыр нәмә **менән** тондорҙолар. Шунан тағы, тағы...

XVII

Нисек кенә туҡмалыуына ҡарамаҫтан, Сәйет иҫән ҡалды.

Терек төрмәһендәге лазаретта бер аҙ дауалағандап һуң, уны Мәскәүгә алып килделәр.

Оҙон билле арбалағы ситлеккә бикләнгән Сәйет Садировты ҡала урамдары буйлап йөрөттөләр.

Ялан аяҡ, ялан баш, күлдәк-ыштаны ылҡаланған башҡорттарҙың бола башлығын күҙәткән урамдағы кешелор ниҙер аҡырып ҡысҡырышты, сиркәүҙәрҙәге еҙ ҡыңғырауҙар ҙа өҙлөкһеҙ геүләне.

Мәскәү халҡының ығы-зығы ҡубарып ҡысҡырышыуыпл иғтибар итмәйенсә, Сәйет доға артынса доға уҡыны, Бөйөк Аллаһы тәғәләнең башҡорттарға азатлыҡ яуларгл көс-ҡеүәт биреүен ялшып-ялбарып һораны.

Сәйетте Кремлдәге Земский Приказға алып барҙылар.

Икенсе көндө башҡорттарҙың болаһы башлығы ултырғаи камераға ерән наҡаллы дьяк инде.

Дьяк ҙүсн үтә яғымлы, кешелекле тотто.

Ул, Сәйеттең яралары нисек уңалыуын, кәйефен һорашҡандан һуң, Рәсәй императоры Петр I ҡушыуы буйынса тотҡондан һорау алырға тейеш икәнлеген әйтеп, яғышлы тауыш менән иҫкәртте:

— Болаларҙа ҡатнашмаҫҡа һҙ биреп, Ҡорьән үпһәң, бөйөк батша һеҙҙе ярлыҡаясаҡ һәм иреккә сығарырға ҡушасаҡ.

— Иван Грозный башҡорттарға бүләк иткән «Жалованная Грамота»ла яҙылғандар батша тарафынан утәлмәһә, миңә яҡты донъяла йәшәүҙең мәғәнәһе юҡ, — тине Сәйет.

— Башҡорттарҙы көсләп суҡындырыуҙы тыйған Петр батшаның указы етмәгәнме?

— Ата-олатайҙарҙан ҡалған ер-һыуыбыҙға, урмандарыбыҙға ла хужа булып, үҙ иркебеҙгә йәшәргә теләйбеҙ.

— Үҙ иркегеҙгә йәшәүегеҙгә ҡаршы түгел император. Үҙ маҡсатығыҙға ирешеү өсөн иң әүәл Рәсәй батшалығына ҡаршы йүнәлдерелгән башҡорттарҙың болаһын туҡтатырға ярҙамлашығыҙ.

Төлкөләй юхаланған дьяҡтың ниңә шулай ныҡышыуы сәбәбен асыҡларға теләп, Сәйет һораны:

— Зинданда бикле ултырған көйөмә, Башҡортостандағы боланы мин нисек туҡтатырға тейеш?

— Болаларҙы туҡтатырға ҡушып, башҡорттарға һәм **сит** ил мосолмандарына өндәмә яҙығыҙ. Шунһыҙ ҡан ҡойолошо бөтмәйәсәк. Боласыл башҡорттарҙы йәлләгеҙ. Уларҙы ҡыйратыу өсөн Өфөнән кенәз Борятинскнйҙың ғәскәре, Ҡазандан полковник Рыдарҙың уксы полкы менән Сидор Аристовтыц һыбайлы отряды сыҡты, — тип «Соле-варный городок» янында тупланған баш күтәреүселәр тарафынан Борятинскийҙың ғәскәре ҡыйратылыуын, Рыдар менән Аристовтың отрядтары ла ауыр хәлдә мкәнлеген дьяк әйтмәй ҡалдырҙы [1].

«Башҡортостандағы боланы баҫтырыуҙа файҙаланыу всөн мине ошоғаса үлтертмәгәндәр икән», тип уйлап Сәйет өндәмә яҙыуҙан ҡырҡа баш тартты.

Дьяҡтың алсаҡ йөҙө таный алмаҫлыҡ булып үҙгәрҙе.

— Яҡшылыҡты аҡларға теләмәһәгеҙ, **үҙегеҙгә упкәлә**геҙ, — тип ул палаҵтарҙы саҡыртты.

Палаҵтар тәүҙә Сәйеттең ҡашы **менән** наҡал-мыйығын яндырҙылар.

Тоткон, туған халҡыиа хыянатсылыҡ ҡылырға теләмәйенсә, тештәрен шығырлата ҡыҫып, тауыш-тын сығарманы. Туҡмалыуға, ҡулдарын шаҡарыуға ла сыҙаны. Язалау тәгәрмәсенә ураулы сүс арҡан ҡыҫҡан баш һөйәге

[1] Кабинет II, выпнска о башкирской войне.

шытырлап, күз алмалары һытылғас ҡына үҙен-үҙе онотоп ҡысҡырҙы:

— Алла, алла-ам!..

Сәйет иҫтән яҙғас, язалау тәғәрмәсен әйләндереү туҡтатылды. Тотҡондо һалҡын һыу менән ҡойондорҙолар.

Сәйет аңына килгәс, уның бит тирәһен һыҙырҙылар. Тотҡондоң ихтыярын шунда ла һындыра алмағас, дьяк мәғәнәһеҙ язаны туҡтатырға мәжбүр булды. Сәйетте *көм* яҡтыһы үтмәгән ер аҫтындағы дөм-ҡараңғы ҡыҫыҡ бүлмәгә күсерткәс, дьяк Рәсәй императоры Петр I эргәһенә китте.

һәммәһен түкмәй-сәсмәй һөйләгән дьякты пыр туҙҙырып әрләне-әрләне лә, бер аҙ тынысланғас, Петр I ҡайтымһаҡланды.

— Башҡортостандағы боласылар тарафынан хан итеп иғлан ителеүен Сәйегмулла беләме?

— Белмәй, — тине дьяк, ҡурҡышынан дер ҡалтыранып.

—- Тотҡонға нимә кәрәк?

— Иван Грозный заманындағы «Жалованная Грамота»ла күрһәтелгәндәрҙең һәммәһе үтәлеүен һәм башҡорттарға тулы азатлыҡ бирелеүен талап итә.

— Ниңә ризалашманың?

— Тотҡон беҙҙең вәғәҙәгә ышанмай. Боласыл башҡорттар менән сит ил мосолмандарына өндәмә яҙыуҙан да ҡырҡа баш тартты, Ваше величество.

— Ҡараңғы, һалҡын баҙҙа оҙағыраҡ ултырһа, бәлки, аҡылланыр?

— Белмәйем, Ваше величество, — тип дьяк шиҡ белдерҙе. — Сәйеттең тиҫкәрелеге сиктән ашҡан. Уны теге донъяға оҙатыуҙан башҡа әмәл ҡалманы.

Дьяктың тәҡдиме Рәсәй императорына оҡшаманы.

— Башҡорттарҙың бола башлығы миңә тере көйө кәрәк. Аҙаҡтан, Башҡортостанда тыныслыҡ урынлашҡас, күҙ күрер.

Дьяк бүлмәнән сыҡҡас, Петрға Ҡазан вице-губернаторы вазифаһын башҡарған Кудрявцевтың хатын тапшырҙылар.

«Башҡорт бурҙары[1] ҡоторона. Ҡазан өйәҙе татарҙары, Кама ҡаласыҡтары тирәһендәге һәм Кама йылғаһы буйындағы күпселек башҡа халыҡтар ҙа боласыл башҡорттарға ҡушылдылар. Елабуғаны һәм Заминскийҙы ҡамауҙа тоталар. Ҡазандан 200 саҡрым алыҫлыктағы ауылдарҙы туҙҙырҙылар һәм беҙҙең кешеләрҙе һәләк иттеләр.

[1] Батша хөкүмәте шул заманда ғы барлыҡ боласыларҙы, шул иҫәптән урыҫтарҙы ла, «бур» исеме менән йөрөткән.

Ҡазан һәм Өфө өйәҙҙәрендә йәшәүсе сыуаштарҙы, татарҙарҙы һәм башҡа халыҡтарҙы ла башҡорттар яуға ҡуйырелергә һәм... Ҡазанды һуғышып алырға өндәйҙәр...»

Хатты ҡат-ҡат уҡып сыҡҡандан һуң, Рәсәй императоры Петр I уйға ҡалды. Башҡорттар болаһын ҡыйратыу өсөн ниндәй сара табырға? Башҡортостандағы болалар туҡталмаһа, Ҡара диңгеҙ — Балтик буйындағы ерҙәрҙе буйһондорорға һәм Рәсәйгә сауҙа итеү өсөн диңгеҙ юлын асыуға тотҡарлыҡ яһамаҫмы? Башҡорттарға өндәмә яҙыуҙан ҡырҡа баш тартҡан Сәйет мулланы нисек файҙаланырға? Болаларҙы баҫтырыуҙа ярҙамлашырға теләмәһә, уны язалап үлтертергәме әллә?..

Тынғы бирмәгән бәйләнсек һорауҙарына яуап таба алмағас, Рәсәй императоры тайный комиссия етәксеһен саҡыртты.

— Кремль төрмәһендәге Сәйет мулла язалап үлтерелһә, Башҡортостандағы болалар баҫылырмы?

— Киреһенсә, Сәйет мулланың үлеме башҡорттарҙың болаһы көсәйеүенә сәбәп буласаҡ, Ваше величество, — тине тайный комиссия башлығы.

Тырпайған көлтә мыйыҡ осон һыпырғылап, сәнскеле күҙ ҡарашын император комиссия етәксеһенә йүнәлдерҙе.

— Аңлат!

— Әүлиә, бөйөк хан дәрәжәһендәге Сәйет мулланың абруйы башҡорттар араһында ғына түгел, күпселек мосолман илдәренә лә киң билдәле, Ваше величество. Әлеге шарттарҙа, минеңсә, уны язалап үлтертеү үтә зарарлы...

— Боласылар башлығын иреккә сығарырғамы? — Рәсәй императоры мыҫҡыл ҡатыш көлдө.

— Юҡ, юҡ, Ваше величество!— Тайный комиссия етәксеһе үҙ фекерен йәһәтерәк аңлатырға тырышты. — Киреһенсә, баҙҙағы тотҡондо һаҡлауҙы көсәйтергә һәм беҙгә уның абруйын ҡаҡшатыу сараһын күрергә кәрәк.

— Нисек итеп?

— Сәйет мулланың Рәсәй менән теләктәш икәнлеге һәм уның башҡорттарға хыянатсылыҡ ҡылыуы тураһында ялған хәбәрҙәр таратыуҙы ойоштороpорға кәрәк, Ваше величество!

Рәсәй императоры йәнләнде.

— Ундай хәбәрҙәргә башҡорттар ышанырмы?

— Бер ҡатлы башҡорттарҙы ышандырыуы беҙгә бер ни түгел, Ваше величество!

— һин хаҡлы! — Петр I шатланды. — Был планың уңышлы барып сыҡһа, ысынлап та, Сәйет муллаға башҡорттарҙың ышанысы бетәсәк һәм башҡорттарҙың бер-

ҙәмлеге лә ҡаҡшаясаҡ, — тип, ул тайный **комиссия** башлығын маҡтаны һәм был тәҡдимде тормошҡа ашырыуҙы уның үҙенә йөкмәтте.

Хәйлә, Сәйет мулла хаҡында ялған хәбәрҙәр таратыу **һәм** көс ҡулланыу ярҙамында батша хөкүмәте үҙ маҡсатына яйлап-әкрешгәп өлгәште.

1684 йылдың яҙында бөтә Башҡортостанды солғап алған бола ҡабаттан һүрелде, тарҡалды. Ҡамауҙа тотолған Өфөнө—Имән ҡаланы штурмлау ҙа уңышһыҙ тамамланды...

XVIII

Дьяҡ менән осрашҡандан һуң тыуған иле, халҡы яҙмышы хаҡында бер ни белмәйенсә, Сәйет мулла зинданда япа-яңғыҙы интекте.

Уның донъяла барлығын батша хөкүмәте онотто, ахырыһы, һорау алыуҙан да туҡталдылар. Ҡәбер шикелле ҡараңғы, халҡын баҙ аҫтында ыҙа сигеүҙән дә ҡыйыныраҡ нәмә бар **микән?** Урыҫтарға Рәсәй ҡәҙерле **булған** кеүек, башҡорттарға ла тыуған иле азатлығы, ер-һыуы менән урмандары изге икәнлеген нисек аңларға **теләмәй икән** батша хөкүмәте? Башҡортостанды башҡорттар үҙҙәре һаҡламаһа, уны кем ҡурсаларға тейеш? Рәсәй дәүләте алдындағы үҙ бурысын башҡорттар һәр саҡ намыҫ менән үтәне, үтәй һәм үтәйәсәк, ә урыҫтар, Иван Грозныйҙың «Жалованная Грамота»һын аяҡ аҫтына һалып тапап, башҡорттарҙы талай, интектерә...

Сыңғыҙ хан менән уның вариҫтары заманында иң юғары цивилизациялы чжурчжәндәр, танғуттар менән болғарҙар юҡҡа сыҡҡан һымаҡ, башҡорттар ҙа донъя йөҙөнән эҙһеҙ юғалыр микән бер саҡ?..

Бөйөк Аллаһы тәғәләнән ярҙам көтөп, Сәйет **мулла** доға артынса доға уҡыны.

— И, тәңрем, башҡорттарҙы бәлә-ҡазанан ҡотҡар! Башҡорттарҙың берҙән-бер ышаныс-таянысы һин генә...

Ер аҫтында ултырыуына бер йыл самаһы ваҡыт үҙғас, Сәйет мулланы тәүге тапҡыр тышҡа альш сыҡтылар. Сағыу көн яҡтыһы уның күҙен сағылдырҙы, саф һауа иҫсертте, аңын томалап, башын әйләндерҙе.

Ер аҫтында ултырып, Сәйет яҙғы көндәр етеүен **дә белмәгән.** Ҡар ирей, аяҡ аҫты лысҡылдап ята. Яҡындағы ҡайыш ботаҡтарындағы бөрөләр тирткән. Ҡош-ҡорт сыр-сыу килә. Урал тәбиғәте лә бик ныҡ үҙгәргәндер инде...

«Тыуған илендә ирекле йәшәүҙән дә ҡәҙерле нәмә юҡ

донъяла! Бер йотом саф һауа һулауы һәм ҡояшлы көндө күреүе генә лә оло бәхет», — тип уйланы Сәйет.

Ҡараңғы баҙ аҫтындағы зинданға ҡабаттан **бикләнгәс,** тоткон үҙен тонсоғоп барған һымаҡ һиҙҙе. Бер ҡасан да ел-әтелмәгән ҡыҫыҡ бүлмә, таш стеналар, һалҡын таш иҙән менән түшәм уны элеккегә ҡарағанда ла нығыраҡ ҡыҫҡандай булды.

Сәйет ваҡытты нисек уҙғарырға белмәне. Ситлектәге йәнлек шикелле бер урында тапанып тороуҙан ялҡҡас, стенаға беркетелгән тимер карауатҡа барып бер ятты, бер тороп ултырҙы.

Икенсе, өсөнсө, дүртенсе көндө лә Сәйетте саф һауаға сығарып йөрөттөләр, ашау-эсеү ҙә яҡшыртылды.

Бер саҡ камераға йәнә дьяҡ инде. Башҡортостандағы болалар баҫтырылыуын әйтеп, ул Сәйеткә христиан диненә күсергә тигән тәҡдим яһаны.

•— Суҡынһаң ғына үлем язаһынан ҡотоласаҡһың, — тине дьяҡ.

Сәйет, ризалашмайынса, был юлы ла ҡырҡа баш тартты:

— Үлһәм үләсәкмен, әммә ислам диненә һәм туған халҡыма бер ҡасан да хыянатсылыҡ ҡылмаясаҡмын!

Икенсе аҙна уртаһында Сәйет мулла язалап үлтерелеүгә хөкөм ителде.

Яза билдәләнгән көндө белгәнлектән, Сәйет һунғы төндө йоҡламай уҙғарҙы. Иртәнге тавдан тороп, һаҡсыларҙың рөхсәте буйынса, тәһәрәт алды, өҫтө-башын алмаштырыш кейҙе, таҙартынды-йыуынды ла намаҙ уҡыны.

Ҡалған ваҡыт үтә борсоулы, үтә яй уҙҙы.

Аҡтык минутҡа саҡлы Сәйет мулла нимәгәлер өмөтләнде. Кемдер камераға килеп инер ҙә үлемдән ярлыҡау хаҡында батшаның указын әйтер һымаҡ тойолдо.

Камера ишеге алдындағы һаҡсыларҙың бер урында тапанығыуы, кемдеңдер ҡысҡырып өндәшеүе һәм ҡайҙалыр яҡында ғына барабандарҙың дөңгөрләүе ишетелде.

Камера ишеге шығырлап асылды.

Аяҡ-ҡулына быҫау һалдылар ҙа Сәйетте тышҡа алыпе сыҡтылар һәм уны Ҡыҙыл майҙанға алып барҙылар.

Күмәк һаҡсылар ҡамауындағы Сәйет мулла күренгәс, халыҡ менән шығырым тулы оло майҙан шым булыпе ҡалды.

Эшафотҡа палач күтәрелде.

Палач ярҙамсылары Сәйет батырҙы оҙон баҫҡыс буйлап юғарыға алып менделәр.

«Бөйөк Аллаһы тәғәлә, үлемдән ҡурҡыуымды белгертмәҫ, дошмандарымдың үсен ҡандырмаҫ өсөн, миңә көс-

ҡеүәт өҫтә», — тип бер туҡтауһыҙ доғалар уҡыған Сәйет үҙен ғорур тоторға тырышты.

Иәшел кафтан менән йәшел камзол кейгән мыҡты ҡәүҙәле, йыуантаҡ аудитор плаха [1] янына барып баҫты. Ул, өс ҡырлы баш кейемен сисеп, ялтлас маңлайындағы бөрсөк-бөрсөк тир тамсыларын ҡулъяулығы менән һыпырҙы ла, тамағын ҡырып тамшана-тамшана, түш кеҫәһендәге ҡағыҙҙы сығарҙы.

Ҡарауылда тороусы һалдаттар ҙа, мылтыҡтарын яурыны тәңгәленә күтәреп, баҫҡан урындарында шаҡ ҡаттылар.

Баш полиция вәкиле — аудитор еңелсә тулҡынланды. Ул ҡалтыранған тоноҡ тауыш менән, ҡабаланмайынса ғына, ике ҡуллап тотҡан хөкөм ҡарарын уҡырға тотондо:

— «Бур һәм хыянатсыл башҡорт муллаһы Садиров Сәйет, бөйөк государь-батша менән иҫәпләшмәйенсә, башҡорттар менән мосолман илдәрендә йәшәүсе кешеләрҙе болаға **күтәреп,** Рәсәй империяһына яуызлыҡ ҡылды...»

Ғәҙелһеҙ хөкөм ҡарарын башҡаса тыңламайынса, Сәйет мулла ҡорьәндән сүрәләр уҡыу менән мәшғүл булды. Бәғзе ваҡытта Ҡыҙыл майҙандағы күренеш өнөндә түгел, төшөндә һымаҡ күренде уға...

Әҙәм балаһы ғүмеренең аҡтыҡ минутына саҡлы ғәҙеллек еңәсәгенә өмөтләнә, ти. Сәйет мулла ла нахаҡтан үлем язаһына тартыласағына һаман ышанманы.

Приговоры ҡысҡырып уҡыған аудитор шымғас, ппп-дәй ҡарар сығарылыуын белмәй, Сәйет аптыраны.

Кемдеңдер көслө ҡулы яурынынан умырып тотоп, Сәйетте ҡайҙалыр өҫтөрәне. Шунда ғына үлем язаһына хөкөм ителеүен аңлап, башындағы сәлләһен сисеп кәзәксйс кеҫәһенә тыҡты ла ул үҙ ирке менән муйынын плахаға арҡыры һалды.

«Тыуған төйәгем, халҡым, бала-сағаларым, бәхил булығыҙ. һеҙгә азатлыҡ яулай алмай **үлгәнем** өсөн **ғәйепкв** алмағыҙ», — **тигән** ят уй, йөрәген ҡыйпып үтеп, уныц ганен зымбырлатты, ә ҡолағы төбөндә «Урал» йыры шпстелгәндәй тойолдо:

..Үҙ **илкәйе** өсөн ҡорбан булған
Ир-егеттең **ғумере** йәл булмаҫ...

Барабандар доңғорлауы баҫылғас, йәнә тынлыҡ урыплашты.

Палач оҙаҡ аҙаплана. Ҡалған ваҡыттың һәр **минуты,** һәр секунды үтә яй уҙған һымаҡ булды плахала ятҡан Сәйет муллаға. Бөйөк, берҙән-бер Аллаһы тәғәлә, ысын мосолман кешеһенә ниңә бирҙең бындай ғәҙелһеҙ язаны? Ислам дине сафлығы, ер-һыу именлеге һәм азатлыҡ өсөн көрәшеү изгеләрҙән дә изге һаналмаймы ни?..

Ҡояшҡа сағылып ялтлаған йәйеңке балта юғарыға күтәрелде, һәм ул аҫҡа төшкән ыңғайы плахалағы Сәйеттең башы тәненән айырылды.

Ҡанға мансылған Сәйеттең башын палач юғарыға күтәргәс, майҙан тулы халыҡ аһылданы, кемдәрҙер ҡыскырып иланы. Кремль сиркәүҙәрендәге еҙ ҡыңғырауҙар ҙа шом һалып гөүләне...

* * *

Сәйет етәкселегендәге восстание баҫтырылғандан һуң, башҡорттарҙы талау, йәберләү, ислам диненән көлөү ҡабаттан көсәйҙе, һәм ул Алдарбай менән Күсем исеменә бәйләнешле яңы боланы тиҙләтте [1].

Малеевка—Өфө—Аҡлан,
1991—1992 йылдар

[1] *Плаха* — элекке заманда улем язаһына хөкөм ителгән кешсисң башын киҫеү урыны.

[1] Алдарбай менән Күсем етәкселегендәге восстанне барышы һәм **уның** һуңғы Башҡортостандағы ваҡиғалар «Башҡорт ханы» романында һүрәтләнгән.

ЙӨКМӘТКЕЊЕ

Инеш һүҙ урынына 5
Ҡара яу (р о м а н) 7
Беренсе бүлек 7
Икенсе бүлек 175
Аҡизел Иҙелгә ҡоя (р о м а н) 345
Беренсе бүлек 345
Икенсе бүлек 518

Литературно-художественное издание

ХАММАТОВ Яныбай Хамматович

ТЕМНОЕ НАШЕСТВИЕ

Исторический роман-хроника

(на башкирском языке)

Мөхәррирҙәре *Фируз Иҫәнбаев* менән *Сабир Шәрипов.*
Рәссамы *Мансур Зәйнуллин.*
Биҙәлеш мөхәррире *Азат Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Надия Пятаева.*
Корректорҙары *Әлифә Хажиева, Мәрзиә Яҡупова*

ИБ № 5174

Ыңғырға бирелде 27.10.94. Баҫырға ҡул ҡуйылды 12.07.95. Ҡағыҙ форматы 84×108¹/₃₂. Тип. ҡағыҙы № 2. Әҙәби гарнитура. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 31,92 + 0,21 форз. Шартлы буяу отт. 32,29. Нәшер-баҫма таб. 35,63 + 0,378 форз. Тиражы 5500 дана. Заказ № 826. Хаҡы ирекле.
Башкортостан «Китап» нәшриәте. 450001. Өфө, Левченко урамы, 4а.
Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

7

2000=